*Атайҙар һүҙе – аҡылдың үҙе.*

*Йөҙ күрке – һаҡал, һүҙ күрке – мәҡәл.*

*Ҡамсат күрһәң, һатып ал,*
*Мәҡәл һүҙҙе отоп ал.*

*Ҡарттар һүҙен ҡар баҫмаҫ.*

*Мәҡәл – һүҙ аҫҡысы,*
*Әйтем – күңел аҫҡысы.*

*Мәҡәл әйткән – юл өйрәткән,*
*Әйтем әйткән – күңел йыуатҡан.*

*Һүҙ башы – мәҡәлдә.*

*Әйтем – һүҙҙең биҙәге,*
*Мәҡәл – һүҙҙең еләге.*

*Яҡшыла яман юҡ,*
*Мәҡәлдә ялған юҡ.*

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## PROVERBS AND SAYINGS

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ПОСЛОВИЦЫ И ПОГОВОРКИ

# BAŞKURT HALK FOLKLORU

## ATASÖZLERI VE DEYIMLER

КИТАП

УФА - 2006

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## X
## ТОМ

## МӘҠӘЛДӘР ҺӘМ ӘЙТЕМДӘР

**Беренсе китап**



КИТАП

ӨФӨ - 2006

УДК 398 (470.57)
ББК 82.3 (2 Рос=Баш)
Б 28

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов (баш мөхәррир), Рауил Бикбаев, Салауат Галин, Фәнүзә Нәзершина, Розалия Солтангәрәева, Зиннур Ураксин, Ринат Йосопов, Зөфәр Тимербулатов, Ғайса Хөсәйенов*

Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы – **Фәнүзә Нәзершина**
Яуаплы мөхәррир – *Зиннур Ураксин*

**Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов (главный редактор), Равиль Бикбаев, Салават Галин, Фануза Надршина, Розалия Султангареева, Зиннур Ураксин, Ринат Юсупов, Зуфар Тимербулатов, Гайса Хусаинов*

Составление, вступительная статья, комментарии – **Фанузы Надршиной**

Ответственный редактор – *Зиннур Ураксин*

**При перепечатке ссылка на том обязательна.**

Б 28 Башҡорт халыҡ ижады. 10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. – Өфө: Китап, 2006. – 544 бит.

ISBN 5-295-03719-3 (Т.10)
ISBN 5-295-01393-6

Был томға башҡорт халҡының быуаттар һуҙымында тупланған тормош тәжрибәһен сағылдырған меңәрләгән мәҡәл һәм әйтемдәр, байтаҡ ҡына юрауҙар, һынамыштар индерелде.

Инеш мәҡәләлә жанрҙарҙың тәбиғәте, мәҡәл һәм әйтемдәрҙең ысынбарлыҡҡа булған мөнәсәбәте хаҡында мәғлүмәттәр бирелде. Китаптың аҙағында аңлатмалар, һүҙлек һәм сығанаҡтар күрһәткесе килтерелә.

УДК 398 (470.57)
ТП – 116/06
ББК 82.3 (2 Рос=Баш)

ISBN 5-295-03719-3 (Т.10)
ISBN 5-295-01393-6
© Ф. А. Нәзершина, төҙөүсеһе, 2006



# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ МӘҠӘЛДӘРЕ ҺӘМ ӘЙТЕМДӘРЕ ТУРАҺЫНДА

Тәрән мәғәнәле, тапҡыр һәм бик йыйнаҡ итеп төҙөлгән мәҡәл һәм әйтемдәр халҡыбыҙҙың изге һүҙе, ҡиммәтле аманаты булып, быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Бүтән жанрҙар үҫешендәге кеүек, мәҡәл һәм әйтемдәрҙең үҫешендә лә башҡорт халҡының донъяға ҡарашы, төрлө шарттарҙа эҙмә-эҙлекле камиллаша барған художество-лы фекер һәм аң үҫеше сағыла. Шуға ла халыҡтың тарихын, мәҙәниә-тен өйрәнеүҙә был жанрҙың ҡиммәте ифрат ҙур.

Башҡорт теленә, шулай уҡ күпселек башҡа төрки телдәренә, ғәрәп теленән ингән «мәҡәл» һүҙе урынлы, йәки кәрәк ерҙә әйтелгән һүҙ тигән мәғәнәне аңлата. «Мәҡәл» һүҙе башҡорт теленә килеп кергәнгә тиклем, – тип яҙҙы проф. Ж. Ғ. Кейекбаев, – боронғо башҡорт телендә уның мәғәнәһен биргән төрлө һүҙҙәр (терминдар) ҡулланылған: мәҫәлән, *бабайҙар һүҙе, боронғолар һүҙе, тапҡыр һүҙҙәр* һәм, ахыр сиктә *әйтемдәр*»[1]. Хәҙерге көндә лә халыҡ араһында мәҡәл термины менән бер рәттән «ололар һүҙе», «боронғолар әйткән һүҙ», «ата-бабаларҙан ҡалған һүҙ», «атайҙар һүҙе» тип һөйләү йыш осрай. «Атайҙар һүҙе – аҡылдың үҙе» тигән мәҡәл дә бар.

Мәҡәлгә ата-баба мираҫы итеп ҡарау башҡа халыҡтарҙа ла киң таралған. Мәҫәлән, төрөк, уйғыр, әзербайжан халыҡтарында мәҡәл – «аталар сөзү»[2], сыуашта – «ваттисем калани»[3] (ҡарттар һүҙе), мариҙар-ҙа – «тошто ен мут»[4] (ҡарттар һүҙе), яҡут халҡында – «өс хоһооно»[5] (ата-бабалар һүҙе) тип йөрөтөлә.

Халыҡ ижадының башҡа жанрҙарынан айырмалы рәүештә, мәҡәлдәр теге йәки был фекерҙе көсәйтеү, раҫлау йә булмаһа кире ҡағыу өсөн һөйләмәр ағышына индерелә. Уларҙы ҡулланыу фекергә ҡеүәт, телгә йәм өҫтәй. Шуға ла мәҡәлде ололап, уның тормоштағы әһәмиәтен билдәләп, боронғолар «Йөҙ күрке – һаҡал, һүҙ күрке – мәҡәл», «Мәҡәлле һүҙ – аҡыллы һүҙ», тип әйтеп ҡалдырған. Мәҡәл тик һөйләү ағышында ғына үҙенең бөтөн тәрәнлеген асып, яҡтылығын сәсеп ебәрә.

Ҡулланыштары, йәшәү формалары яғынан мәҡәлдәргә әйтемдәр бик яҡын тора. Дөйөмләштерелгән фекергә ҡоролған, күпселектә өгөт-нәсихәт итеүсе мәҡәлдәрҙән айырмалы рәүештә, әйтемдәр теге йәки был конкрет күренеште образлы һәм ситләтеп атап биреү менән генә сикләнәләр[6].

Сағыштырығыҙ:

«Өйөң тар булһа ла, күңелең киң булһын» – был мәҡәл. Ул дөйөмләштерелгән бер фекер әйтә, күңел киңлегенә, ҡунаҡсыллыҡҡа өндәй, йәғни өгөт-нәсихәт итә, өйрәтә. Ә бына «Өй ҡыҫыҡ булһа ла, күңел киң» тигәне – әйтем, сөнки бында дөйөм төшөнсә, өгөт-нәсихәт юҡ, ул ниндәйҙер бер айырым кешенең айырым ҡунаҡсыллығын ғына күрһәтеп тора. «Бурҙыҡын ҡараҡ урлаған», «Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе», «Ни ит түгел, ни һөт түгел» – был миҫалдарҙа ла дөйөмләштерелгән фекер юҡ, ә конкрет бер осраҡҡа ҡарата образлы фекерләү, мөнәсәбәт белдереү генә бар.

Башҡорт халыҡ ижадында *әйтем* исеме менән йөрөгән тағы бер жанр билдәле. Уның хаҡындағы тәүге тоҫмаллауҙы беҙ Ғ. Амантай, Х. Ғәбитов хеҙмәттәрендә үк күрә алабыҙ[7]. Әммә жанр тәбиғәтен асығыраҡ күҙ алдына баҫтырыуҙа проф. Кирәй Мәргәндең тикшеренеүҙәре айырыуса һөҙөмтәле булды. Авторҙың раҫлауынса, әйтемдең был формаһы мәҡәлдәргә ҡарағанда ҡатмарлыраҡ, күләмлерәк жанр. Ул мәғәнәләре үҙ-ара яҡын булған мәҡәлдәрҙе берләштереү нигеҙендә ойоша һәм дидактик функция башҡара; формаһы яғынан ҡобайырҙы бик ныҡ хәтерләтә, ләкин функцияһы менән ул ҡобайыр түгел. Ҡобайыр, билдәле булыуынса, илде маҡтау, батырҙарҙы данлауға арналған эпик жанр, ә әйтем тормош тәжрибәһен нығытыу, өгөт-нәсихәт итеү, әхлаҡ нормаларын өйрәтеүгә йүнәлдергән лирик, дидактик жанр[8]. Функцияһы яғынан ул тулыһынса мәҡәлгә тап килә, ләкин мәҡәлдән үҙенең төҙөлөшө һәм йәшәү рәүеше (башҡарылыуы) менән айырыла. Аныҡлыҡ өсөн миҫалға мөрәжәғәт итәйек:

Атың йөрөшлө булһа – тояҡҡа көс,
Ҡатының тауышлы булһа – ҡолаҡҡа көс,
Төнөң аяҙ булһа – айға көс,
Көнөң болотло булһа – көнгә көс,
Иленә йот булһа – малыңа көс,
Иленә үләт килһә – йәнеңә көс[9].

Кирәй Мәргәндең уҙған быуаттың 70-се йылдарындағы тикшеренеүҙәренә ҡарағанда, әйтемдең был төрөн төрки телендә һөйләшеүсе башҡа туғандаш халыҡтар (ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, алтай) шикелле, элек башҡорттар «толғау» тип йөрөткәндәр[10]. Беҙҙеңсә, ҡобайыр стилендә төҙөлгән күп кенә мәҡәлдәр теҙмәһенән торған строфаларҙы «толғау» тип атау хәҙер ҙә урынлы (маҡсатҡа ярашлы) булыр ине, сөнки бер үк фольклор ғилемендә бер үк термин менән ике жанрҙы билдәләү – уңайһыҙ.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында ниндәйҙер дәрәжәлә мәҡәл һәм әйтемгә яҡын торған теләк һәм ырым һүҙҙәр, төрлө һынамыш, ҡарауҙар, шаян яуап һ. б. шуның кеүек ҡалыплашҡан һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр бар. Төҙөлөштәре һәм ҡайһы бер функциялары яғынан

мәҡәлдәргә һынамыш һәм юрауҙар айырыуса яҡын тора. Уларҙың йөкмәткеләренә кешеләрҙең тормош тәжрибәләренән алынған фекерҙәр һалынған. Һөйләм төрҙәре, ритм, рифма кеүек шиғри алымдар ҙа мәҡәлдәрҙәгесә: «Ай кәртәләнһә, буран булыр», «Иртә аяҙытһа – кис аяҙытмаҫ, кис аяҙытһа – һис аяҙытмаҫ», «Иҙел аша сыҡҡан бесәй имгә ярай», «Ҡаза килер булһа, ҡоймаға ҡаҙ менә», «Аяғы йөнлө кеше бай булыр» һ. б. Ошо тәбиғи яҡынлыҡ иҫкә алынып, элегерәк тә[11], хәҙер ҙә (тулыландырылған килеш) һынамыш һәм юрауҙар «Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр» томында айырым бүлек итеп урынлаштырылды. Мәҡәлдәрҙән һуң килтерелгән әйтемдәр өс «йондоҙ» билдәһе менән айырылды.

Паремик[12] жанрҙар араһында мәҡәл үҙәк урында тора, шуға ла артабанғы күҙәтеүҙәр ошо жанр тәңгәлендә алып барыласаҡ.

* * *

Теге йәки был жанрҙы өйрәнеү беренсе нәүбәттә уның генезисын күҙаллауҙы талап итә. Тарихи-этнографик әҙәбиәткә мөрәжәғәт итеү, яҙма ҡомартҡыларҙы, иң мөһиме мәҡәлдәрҙең үҙҙәрен ентекләп тикшереү жанрҙың бөрөләнеү осорон тәүтормош йәмғиәте шарттарына ҡайтарып ҡалдырыу мөмкинселеген тыуҙыра.

Дөрөҫ, бында ҡаралған мәсьәләгә күпмелер мөнәсәбәте булған төрки яҙма ҡомартҡыларының һаны артыҡ күп түгел, етмәһә улар – яңы эраға ҡараған ҡомартҡылар: Орхон-Йәнәсәй яҙмалары (VI–VIII б.), Мәхмүд Кашғариҙың 1068 йылда тамамланған «Дивану луғәт ит-түрк» («Төрки телдәренең һүҙлеге»), Йософ Баласағунлының «Ҡутадғу билиг» («Ҡотлолоҡ белеге», йәғни «Бәхетле булыу ғилеме») поэмаһы (1069–1070). Төрки халыҡтарының уртаҡ хазинаһы булған был яҙмаларҙа бөгөнгө көндә лә башҡорт һәм башҡа ҡәрҙәш халыҡтарҙың (татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк һ.б.) телендә йөрөгән мәҡәл һәм әйтемдәр байтаҡ. Бына, мәҫәлән, М. Ҡашғари һүҙлегенән бер нисә үрнәк: «Бөринин ортаҡ, ҡузғунун йығач башында» (башҡ. «Бүренеке – уртаҡ, ҡоҙғондоҡо – ағас башында»), «Бар – бакыр, йоҡ – алтун» («Бар – баҡыр, юҡ – алтын»), «Ҡуруғ йығач эйилмәс» («Ҡоро ағас эйелмәҫ»), «Киши аласы ичтин, йылҡы аласы таштын»[13] («Кеше алаһы – эстән, йылҡы алаһы – тыштан»).

Күренеүенсә, XI быуатта ҡағыҙға теркәлгән мәҡәлдәр менән хәҙерге мәҡәлдәр араһында айырма юҡ. Шиғри төҙөлөшлө, ҡалыплашҡан һүҙҙәрҙең тотороҡлоҡ көсөн иҫкә алғанда, Мәхмүд Ҡашғари һүҙлегендәге мәҡәлдәрҙең ҡағыҙға теркәлгәнгә тиклем халыҡ телендә бик күп быуаттар буйы йәшәгәнлеге хаҡында фекер йөрөтөргә була.

Иғтибарға лайыҡ йәнә бер күренеш: «Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай», «Ҡул ҡулды йыуа», «Бәлә яңғыҙ йөрөмәй», «Ятҡан таш мүкләнә», «Ҡойоға төкөрмә: һыуын эсерһең» кеүек әле лә беҙҙең телебеҙҙә һәм башҡа халыҡтарҙың ижадында урын алған мәҡәлдәр яңы эраға тиклем йәшәгән грек, латин авторҙарының (Геродот, Платон, Аристотель, Эсхил, Цицерон...) яҙмаларында осрай[14].

Мәҡәл һәм әйтемдәрҙең тарихы, тәбиғи, төрлө заман, төрлө быуын галимдарын, һүҙ сәнғәте оҫталарын ҡыҙыҡһындырған һәм ҡыҙыҡһындыра. Совет осороноң күренекле әҙибе А. М. Горький, мәҫәлән, һүҙ

сәнғәтенең яралыуы хаҡында уйланып, былай тип яҙҙы: «Һүҙ сәнғәте боронғо замандарҙа хеҙмәт процесында тыуған. Был сәнғәттең барлыҡҡа килеүенә кешеләрҙең хәтерҙә еңел һәм ныҡ һаҡланып ҡалырлыҡ шиғри юлдар, «мәҡәл», «әйтемдәр», өндәүҙәр кеүек тел сараларында хеҙмәттә тупланған тәжрибәне нығытырға ынтылыуы сәбәп булған»[15]. М. Горькийҙын башҡа күп кенә тикшеренеүселәр (М. И Шахнович, В. И. Чичеров һ. б.) тарафынан ҡеүәтләнгән был фекерендә мәҡәл жанрының донъяға килеүендә боронғо йәмғиәттә ниндәй ихтыяж булған тигән һорауға етди һәм шаҡтай асыҡ яуап алына. Ябай ғына итеп әйткәндә, мәҡәлдең вазифаһы кешеләрҙең тормош тәжрибәһен аҙ һүҙле, әммә тәрән мәғәнәле афоризмдар менән нығытыу, уны һүҙ, ҡағиҙә, әхлаҡ нормаһы рәүешендә ҡалыпҡа һалыу. Яҙма мәҙәниәт булмаған дәүерҙә, йәмғиәттә бындай ихтыяждың тыуыуы тәбиғи күренеш. Хеҙмәт процесында кешеләр араһында мөнәсәбәттәрҙең билдәле бер нормалары булыуы һәм уларҙың нисектер ҡағиҙәләшеп, яҙылмаған ҡанундар формаһын алып китеүе шулай уҡ тормош ихтыяжынан килә торған хәл. Өгөт-нәсихәт итеү, кешеләрҙе, бигерәк тә йәш быуынды, замандың әхлаҡ нормаларына өйрәтеү – мәҡәлдәрҙең артабанғы төп ижтимағи функцияһы.

Әлбиттә, теге йәки был жанрҙың барлыҡҡа килеүе, формалашыуы – ҡатмарлы процесс, уны ниндәйҙер бер осорға, бер генә сығанаҡҡа ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ булмаҫ ине. Мәҡәлдең халыҡ ижадының бер тармағы булып китеүе, ихтимал, тәүтормош община ҡоролошоноң һуңғараҡ баҫҡыстарында, кешеләрҙең абстракт фекерләү һәләте шаҡтай юғары кимәлгә күтәрелгән дәүеренә тура киләлер.

Мәҡәлдәрҙең донъяға килеүе һәм йәшәп китеүе фольклорға хас булған дөйөм законсылыҡ яҫылығында бара: мәҡәл – ул коллектив ижад емеше, әммә был ижадтың нигеҙендә индивидуаль башланғыс ята. Тотош бер коллективтың күмәкләшеп ултырып ҡобайыр йәки әкиәт, йыр йә бәйет сығарыуы мөмкин булмаған кеүек, мәҡәлде лә бергәләшеп тыуҙырып булмай. Ниндәйҙер бер типик ситуацияға оҡшаш күренеш һәм хәл-ваҡиғаға ҡарата һүҙгә оҫта бер кеше тарафынан аңғармаҫтан тапҡыр итеп дөйөмләштерелгән бер фекер – мәҡәл әйтелә. Йыйнаҡ һәм үткер булғаны өсөн был тапҡыр һүҙ икенсе әңгәмәсенең, тыңлаусының күңеленә һеңеп ҡала һәм шул рәүешле артабан йәшәүгә юл ала. Мәҡәлдең ошо сифатын күренекле ғалим, йәмәғәт эшмәкәре Бертран Рассел бик дөрөҫ тотоп алған һәм уның үткер күҙәтеүен һәр халыҡтың мәҡәленә ҡарата әйтергә мөмкин. Мәҡәлде ул «күптәрҙең аҡыллылығы, берәүҙең тапҡырлығы»[16] тип билдәләй.

Шуны ла әйтергә кәрәк, мәҡәлдәрҙең тыуыуы – өҙлөкһөҙ процесс. Хәҙерге көндә лә киң ҡулланылып, телебеҙгә йәм, фекеребеҙгә ҡеүәт биреүсе йөҙәрләгән, меңәрләгән мәҡәлдәребеҙ – төрлө быуын, төрлө осор кешеләренең поэтик ижад емеше ул. Тәрән һәм киң мәғәнә, юғары образлылыҡ, дидактик йөкмәтке уларҙың оҙон ғүмерле булыуына сәбәпсе булған.

Башҡорт халҡының мәҡәлдәрен байҡап сыҡҡанда, уларҙың бер нисә төрлө сығанаҡтан барлыҡҡа килгәне күҙгә ташлана.

Мәҡәлдәрҙең күпселеге халыҡтың тәбиғәтте һәм ижтимағи тормошто күҙәтеүе, тәжрибә нигеҙендә тыуған. Көнкүреш тәжрибәһе,

кешеләр араһындағы әхлаҡ нормалары, ҡайһы бер тарихи ваҡиғалар, тәбиғәттәге төрлө күренештәр, йәғни халыҡтың бай, күп яҡлы һәм ҡатмарлы тормошо, тәрән йөкмәткеле, образлы мәҡәлдәр рәүешендә формалашҡан. «Ағас һуң япраҡ ярһа, йыл ауыр килер», «Утыҙ тештән сыҡҡан һүҙ утыҙ ырыуға етер», «Алтау ала булһа – ауыҙҙағы китер, дүртәү теүәл булһа – түбәләге китер» һ. б. ошондай йөҙәрләгән, меңәрләгән мәҡәлдәр тик хәл-ваҡиғаларҙы оҙаҡ йылдар күҙәтеү, уларҙы өйрәнеү һәм белеү һөҙөмтәһендә генә барлыҡҡа килә алған.

Һирәкләп телмәрҙә әҙәби (яҙма) сығанаҡтарҙан килеп ингән мәҡәлдәр осрай.

Төрлө милләт кешеләренең үҙ-ара бәйләнеше, аралашыуы һөҙөмтәһендә бер халыҡтың мәҡәл байлығы икенсе халыҡҡа күсеп китеү осраҡтары ла билдәле.

Башҡорт халҡының паремик ижадында ситтән ингән мәҡәлдәр ниндәйҙер күләмдә булырға тейеш, ләкин уларҙың һәр ҡайһыһын хәҙер асыҡ ҡына күрһәтеү мөмкин түгел, сөнки ул мәҡәлдәр башҡорт теленең грамматик һәм фонетик принциптарына буйһоноп, асылда башҡорт мәҡәле булып киткәндәр. Тик ҡайһы бер мәҡәлдәрҙең генә ниндәй телдән килеп ингәнлеген билдәләргә мөмкин. Мәҫәлән, «Тин һумды һаҡлай» (башҡорттоң үҙ мәҡәле – «Аҡса тиндән йыйыла»); «Бер ҡалаҡ дегет бер мискә балды боҙор», «Етәү берәүҙе көтмәй», «Боҡрауҙан элек ҡар күренһә, ҡыш иртә килер», «Микула етмәй йәй булмай, Микула етмәй ҡыш булмай» кеүек мәҡәл һәм юрауҙарҙың урыҫ теленән килеп ингәнлеген күреүе ауыр түгел.

Күҙәтеүҙәр шуны күрһәтә: башҡорт халҡының күп кенә мәҡәлдәре башҡа халыҡтарҙың мәҡәлдәре менән мәғәнәүи һәм формаһы яғынан тап килә. Айырыуса ҡәрҙәш төрки халыҡтарының паремик ижады менән оҡшашлыҡ, яҡынлыҡ ҙур. Татар һәм башҡорт халҡы мәҡәлдәренең дөйөмлөгөн билдәләп, проф. Ж. Ғ. Кейекбаев хаҡлы рәүештә: «...башҡорт һәм татар телдәрендәге мәҡәлдәрҙең күпселеге ике телдең уртаҡ фразеологик фонды һанала»[17], – тип яҙҙы.

Башҡорт һәм ҡаҙаҡ мәҡәлләре араһындағы уртаҡлыҡтың күплеге шулай уҡ тәбиғи. Сөнки, беренсенән, ҡаҙаҡтар менән башҡорттар быуаттар буйы бик яҡын күрше булып, үҙ-ара аралашып йәшәйҙәр; икенсенән, үҙенең лексик составы яғынан башҡорт теле, ҡаҙаҡ теле һымаҡ, көнсығыш төрки телдәренә тартым.

Ҡыҫҡаһы, төрки халыҡтарының мәҡәлдәре араһындағы яҡынлыҡты, нигеҙҙә, тарихи-генетик уртаҡлыҡ менән аңлатырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ҡәрҙәш милләттәрҙең ижад оҡшашлығында типологик шарттар һәм алынмасылыҡ (заимствование) кеүек факторҙың роле лә юҡ түгел.

Башҡорт мәҡәлдәре менән бер иш мәғәнәле әҫәрҙәрҙе йыш ҡына тел системалары бөтөнләй башҡа, ҡәрҙәш булмаған халыҡтарҙың афористик ижадында ла осратырға мөмкин[18]. Былдай күренеште нигеҙҙә ике сәбәп менән аңлатып була: беренсеһе – тарихи-типологик шарттарҙың, шул иҫәптән төрлө ситуацияларға бәйле төшөнсәләрҙең (алыҫ – яҡын, яҡты – ҡараңғы, матур – йәмһеҙ, аҡ – ҡара, батыр – ҡурҡаҡ...). оҡшашлығы һөҙөмтәһендә төрлө киңлектәрҙә бер үк типтағы мәҡәлдәр тыуыу; икенсеһе – алынмасылыҡ, йәғни халыҡтарҙың үҙ-ара бәйләнештәре,

аралашыуы арҡаһында ҡайһы бер мәҡәлдәрҙең бер халыҡтан икенсе халыҡҡа күсеү осраҡтары. Билдәле булыуынса, мәҙәни бәйләнештәр, сауҙа аша аралашыу күрше булмаған халыҡтар араһында ла булырға мөмкин. Мәҫәлән, башҡорт халҡы элек-электән Урта Азия (Бохара, Хиуа, Ургенч) менән сауҙа бәйләнештәре алып барған. Урта Азиянан Уралға һәм Уралдан Урта Азияға каруандар йөрөп торған. Ә Урта Азия халыҡтары үҙ сиратында Иран, Ҡытай, Тибет менән мәҙәни һәм сауҙа мөнәсәбәттәрендә булғандар. Һуңғараҡ, атап әйткәндә, Башҡортостан XVI быуатта урыҫ дәүләтенә ҡушылғас, башҡорттар урыҫ халҡы менән ныҡлап аралаша башлайҙар. Тәүгерәк осорҙа был аралашыу башҡорт атлыларының урыҫ армияһы составында хеҙмәт итеүе, бергә яу сабыуы формаһында йәшәй. Урыҫ армияһы сафында Рәсәй азатлығын һаҡлап яу сапҡан башҡорт атлыларының эҙҙәре Һары диңгеҙ ярҙарынан алып, Балтик һәм Сена ярҙарына тиклем һибелгән. Һуңғараҡ быңдай аралашыу көндәлек тормоштағы ғәҙәти бер хәлгә әйләнә. Ошо аралашыу процесында территориаль яҡтан бик алыҫ йәшәгән халыҡтың телендәге һүҙҙәр, мәҡәл һәм афоризмдарҙың да икенсе халыҡ теленә килеп инеү мөмкинселеге тыуа. Тик бында шуны иҫтә тоторға кәрәк. Ситтән, бигерәк тә ҡәрҙәш булмаған телдәр аша, ингән мәҡәлдәр теге йәки был халыҡтың ижадында артыҡ киң урын ала алмаған булырға тейеш, сөнки тәржемә, хатта уның иң яҡшы тигәне лә, мәҡәлдең бөтә нескәлектәрен, гүзәллеген бирел бөтөрә алмай. Ҡытыршылыҡ ғөмүмән, жанрҙың тәбиғәтенә ят нәмә, ул халыҡ тарафынан инҡар ителә.

Дөйөм алғанда мәҡәлдәрҙең барлыҡҡа килеүе, паремик репертуарҙың байыҒыуы халыҡтың тарихи-ижтимағи, тормош-көнкүреш тәжрибәһенә бәйләнгән.

* * *

Һәр төрлө тормош күренештәренә, хәл ваҡиғаларға баһа биреү һәм уларҙы дөйөмләштереү рәүешендә донъяға килгән мәҡәл жанры тормоштоң бөтөн тармаҡтарына ла үтеп инә. Шуға күрә лә мәҡәлдәрҙе халыҡ тормошоноң энциклопедияһы, халыҡтың практик философияһы тип йөрөтәләр.

Мәҡәлдәрҙә ысынбарлыҡтың сағылышы хаҡында фекер йөрөткәндә, шуны иҫтә тоторға кәрәк: халыҡ ижады жанрҙарына хас булғанса, паремик ижад төрҙәрендә лә тарихты туранан-тура, документаль һүрәтләү юҡ. Хронология, йәғни теге йәки был мәҡәлдең ҡайһы дәүергә ҡарағанлығын билдәләү, бында айырыуса ҡыйын һәм шартлы мәсьәлә. Сөнки мәҡәлдәр быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға күсә баралар һәм яңы социаль-экономик шарттарға ярашлы рәүештә үҙгәрә киләләр. Шулай ҙа тарихи-этнографик сағыштырыуҙар нигеҙендә ҡайһы бер мәҡәлдәрҙең ҡасаныраҡ барлыҡҡа килгәндәрен яҡынса булһа ла билдәләргә мөмкин. Ентекләп тикшергәндә, паремик ижадта тарихи-ижтимағи үҫештең бик боронғо дәүерҙәренә ҡараған, халыҡ аңының исламға тиклем осорон сағылдырған байтаҡ ҡына мәҡәл һәм юрауҙарҙың булғанлығы билдәләнә.

Бөтә тирә-йүнде йәнләндереп күҙ алдына килтереү (анимизм), төрлө үҫемлек, йәнлек-хайуандарҙы, ҡош-ҡорттарҙы изгеләштереү, уларҙы ырыу башлаусылар итеп күҙаллау (тотемизм) – быларҙың барыһы

ла мәжүсилектең, йәғни ислам дине ингәнсегә тиклем булған ҡараштарҙың нигеҙен тәшкил итә.

Башҡорттарҙың боронғо ышаныуҙары хаҡындағы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр беҙгә X быуатҡа ҡараған Ибн-Фаҙлан яҙмалары (912) буйынса билдәле. Сәйәхәтсе бер төркөм башҡорттарҙың йыланға, икенселәренең балыҡҡа, өсөнсөләренең торналарға табыныуын үҙ күҙҙәре менән күргәнлеге хаҡында яҙа. Ибн-Фаҙландың һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡорттар тәбиғәтте һәм уның айырым күренештәрен йәнләндереп кенә ҡалмағандар, бәлки һәр күренештең үҙ хужаһы, үҙ Раббыһы бар тип уйлағандар[19]. Әлбиттә, быларҙың бөтәһен дә боронғо мәжүси ҡараштарҙың бер сағылышы итеп аңларға кәрәк.

Кеше аңындағы анимистик һәм тотемистик ҡараштар айырыуса башҡорт мифологияһында, әкиәттәрҙә, им-том менән бәйле ижад төрҙәрендә яҡшы сағылған. Быны шулай уҡ мәҡәл формаһында ҡалыплашҡан ҡайһы бер ырым һәм юрауҙар үрнәгендә лә осратып була. Мәҫәлән, «Йылан аяғын (мөгөҙөн) күргән бәхетле булыр» тигән юрау – *шундайҙарҙың* береһе. Башҡорт халыҡ ижадында «иҫ-аҡыл менән эш итә торған» йылан образына (ун ике башлы йылан, йөҙйәшәр һәм меңйәшәр аждаһа, юха һ. б.) бәйле бик күп ышаныу, ырымдар барлығын иҫкә төшөрһәк, был юрауҙың тарихи нигеҙе етерлек дәрәжәлә аныҡлана булһа кәрәк. Бигерәк тә барлыҡ йыландарҙың батшаһы булып иҫәпләнгән аҡ йылан хаҡындағы һәр төрлө юрау, легендалар ҙур иғтибарға лайыҡ.

Этнографик әҙәбиәт һәм фольклор материалдары буйынса беҙгә элек башҡорттар араһында балыҡ культының шаҡтай ныҡ таралған булыуы билдәле. Башҡорт мифологияһы өлкәһендә тикшеренеүҙәр алып барған М. Минһажетдинов «Изгелек ит тә һыуға ташла – халиҡ (хоҙай) белер, халиҡ (хоҙай) белмәһә, балыҡ белер» тигән мәҡәлде, мәҫәлән, боронғо ҡараштарҙың үҙенсәлекле бер сағылышы итеп таный[20].

Кешеләргә изгелек итеүсе, афәт, бәлә әшкәртеүсе ҡош образдары ла мәҡәл һәм юрауҙарҙа йыш ҡына осрай. Кәкүк, аҡҡош, торна, бөркөт, күҙғон кеүек ысынбарлыҡтағы ҡәҙимге ҡоштар бик үк ҡәҙимге булмаған һыҙаттарға эйә булған йән эйәләре сүрәтендә сығыш яһайҙар. Бындай йөкмәткеле мәҡәлдәрҙе өйрәнеү кешеләр аңындағы ҡараштарҙың ерлеген, артабанғы үҙгәрештәрен төҫмөрләргә мөмкинселек бирә. Мәҫәлән, «Икс кәкүк күрше ҡысҡырһа, ҡаза килер» тигән ырымдың тамыры, беҙҙеңсә, бик боронға, мәжүсилек дәүеренә барып тоташа. «Кәкүк ауылға осоп килһә, аслыҡ булыр» тигән ышаныуҙарҙы хатта әле лә ҡарттар ауыҙынан йыш ишетергә мөмкин. Йорт тирәһендәге ағасҡа, ҡаралтыға кәкүк ултырып ҡысҡыра икән, был инде кешегә, айырыуса йорттоң хужаһына, ҙур хәүеф килтерә. Ҡайғы, бәлә-ҡазанан һаҡланыу йөҙөнән кәкүк ултырған ағасҡа, ҡапҡанаға һөт, йә булмаһа ҡатыҡ ҡойоу ғәҙәте бар. Был, һис шикһеҙ, бик боронғо йола булырға тейеш, уның нигеҙендә кәкүктең мөғжизәле көсөнә ышаныу, уға ҡорбан килтереү кеүек ҡараш-хөрәфәттәр сағылған.

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында билдәле булған кәкүккә арналған ритуаль бейеүҙәр ҙә[21] шул хаҡта һөйләй.

Торнаның халыҡ аңында кешегә ярҙам итеүсе изге көс рәүешендә йөрөүе Ибн-Фаҙлан яҙмаларынан уҡ билдәле. Ошо ыңғай ҡараш халыҡ күңелендә лә бик тапҡыр сағылыш тапҡан: «Торна китһә, торош юҡ».

Ир-егетлек, батырлыҡ символы булған бөркөттө изгеләштереп, уға табыныш ҡарау шулай уҡ бик борондан килә. «Бөркөт тырнағын йоротһәң, зәхмәт ҡағылмаҫ» тигән ырым ана шул ҡараштың ябай ғына бер сағылышы.

Ҡоштарға бәйле ҡайһы бер мәҡәл-һынамыштарҙың тарихи ерлеге бик үк асыҡ түгел. «Ауыл арҡылы аҡҡош уҙып китһә, аслыҡ булыр» тигән юрау, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Мифологик легендалар, ышаныуҙар буйынса, аҡҡош – изге ҡош, уны үлтерергә ярамай; юрматы ҡәбиләһе башҡорттары аҡҡошто хатта үҙҙәренең ырыуын башлап ебәреүсе изге йән эйәһе итеп иҫәпләй[22]. Телгә алынған юрау мәҡәлендә иһә, аҡҡош – кешеләр күңеленә шом һалыусы образ булараҡ күҙаллана.

Ысынлап та, шомло ҡарашмы был? Шулай булһа, унын яралыуына һуңғараҡ, архаика онотола барған дәүерҙәрҙең шауҡымы ҡағылған булырға тейеш. Бәлки, боронғолар аҡҡоштоң кеше торлағы янынан уҙыуын изге ҡоштоң, афәтте алдан иҫкәртеп, ырыуҙаштарын ҡурғауы һымаҡ ҡабул иткәндәрҙер? («Сыңрау торна» легендаһында шундай мотив асыҡ һыҙатлана бит).

Боронғо монгол, төрки халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, йыл хисабын, мал-хайуан, ҡош-ҡорт исемдәре менән атап йөрөтөр булғандар. Беҙҙең эраның VII–VIII быуаттарына ҡараған Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында уҡ инде йылдарҙың хайуан циклы календары менән аталыуын күрергә мөмкин[23].

Ҡағиҙә булараҡ, цикл эсендәге һәр йылдың үҙенә генә хас билгеһе булған: йылдар бик яҡшы, яҡшы, уртаса һәм насар тип баһаланған. Был ҡараштың асыҡ сағылышын түбәндәге миҫалдарҙан күрергә мөмкин:

Барыҫ йылы – байлыҡ,
Һыйыр йылы – туҡлыҡ,
Ҡуй йылы – ҡытлыҡ,
Ҡуян йылы – йотлоҡ,
Эт йылында мал үрсер һ. б.

Күрәһең, һәр йылға беркетелгән сифат, билдә теге йәки был йәнлек-хайуанға кешеләрҙең мөнәсәбәте, уларҙың был тереклектәргә ни дәрәжәлә табынған булыуҙары менән аңлатыла.

Юрау мәҡәлдәрендә изгеләштерелгән йәнлек-хайуан, ҡош-ҡорт образдары аша боронғо тотемистик ҡараштар сағылған тигән фекер топонимика, антропонимика, этнонимия материалдары менән дә нығытыла. Башҡорттарҙың ырыу, түбә (аймаҡ, тоҡом, нәҫел) һәм ара исемдәре эсендә күп төрлө ҡош-ҡорт, йәнлек һәм кейек, мал исемдәрен әле лә осратырға мөмкин[24].

Мәжүси ҡараштар ерлегендә тыуған мөғжизәле йәнлек-хайуан, ҡош-ҡорт образдарынан тыш, башҡорт халыҡ ижадында йәнләндерелгән тау-таш, күл-йылға, ағас, үлән образдары ла осрай. «Урал батыр» эпосындағы Йәншишмә образы, әкиәттәрҙәге «үлс һыуы», «тере һыуы» кеүек төшөнсәләр боронғо анимистик ҡараштарҙың алыҫтағы бер яңғыраны ул. Дөрөҫ, бындай ҡараштарҙы сағылдырған әҫәрҙәр паремик ижадта бик аҙ һаҡланған. Шулай ҙа ошондай ерлектә яралған мәҡәлдәрҙең айырым өлгөләрен халыҡ телендә һирәклән булһа ла осратырға мөмкин.

«Ерҙәге ташты ҡуҙғатһаң, ел сығыр» тигән һынау мәҡәле, мәҫәлән, шундайҙарҙың береһе. Ә инде «Ҡайын ултыртҡан ҡайғылы булыр» тигән ырымға таяныҧ, боронғо башҡорттар ҡайын ағасына шомланып ҡараған тигән һығымтаға килергә мөмкин. Ошо шомланыу арҡаһында ҡайынды йорт тирәһенә түгел, ә тик зыяраттарҙа ғына ултыртыр булғандар.

Ер өҫтөндәге күп кенә нәмәләр, тереклектәр боронғо кеше тарафынан мөғжизәле бер көс, изге йәки яман заттар рәүешендә ҡабул ителгән бер заманда, ғәләм, күк есемдәренең ни дәрәжәлә изгеләштерелгән булыуын да күҙ алдына килтереү ауыр түгел. «Етегән йондоҙҙо ете ҡабат һанаһаң, сауап була» – әлегәсә ошо юрауҙы бер тында әйтеп, ете ҡабат һанап сығыу йолаһын йондоҙҙарға табыныуҙан ҡалған бер күренеш итеп ҡабул итергә мөмкин. Ғөмүмән, ғаләмдәге күҙгә бәрелеп торған хәрәкәт, үҙгәреш элек, күрәһең, кешеләр күңеленә хәүеф, шом һалған: «Йондоҙ атылғанды күрһәң, кешегә өндәшмә», «Ҡойроҡло йондоҙ – афәткә» тигән мәҡәлдәр быға дәлил.

Шулай итеп, башҡорт халҡының паремик ижадында ата-бабаларыбыҙҙың боронғо ижтимағи аң кимәлен сағылдырған мәҡәл, юрауҙар байтаҡ ҡына осрай. Уларҙың күбеһе аң кимәленең түбән осоронда, кешеләрҙең тәбиғәт алдында көсһөҙ булған дәүерендә донъяға килгән. Кешеләрҙең теге йәки был материаль күренешкә, материаль әйберҙәргә дөрөҫ һәм объектив баһа биреүе оҙаҡ һәм ҡаршылыҡлы юл үтә. Объектив хәҡиҡәтте аңлау, стихиялы материалистик ҡараштарҙың формалашыуы төрлө аҙашыуҙар аша килгән, тип уйларға кәрәк. Үрҙә килтерелгән юрау мәҡәлдәре – ана шул аҙашыу һәм яңылышыуҙарҙың образлы бер сағылышы ул.

Башҡорт халҡының ижтимағи, тормош-көнкүреш уклады тураһындағы мәҡәлдәр тарихи үҫештең төрлө стадияһын кәүҙәләндерәләр. Патриархаль ырыу тормошо, ырыуҙар берҙәмлеге кеүек мөһим күренештәр «Яңғыҙҙың яны юғалһа ла табылмаҫ, ырыулының уғы юғалһа ла табылыр», «Ырыулының уғы юғалмаҫ» рәүешендәге мәҡәлдәрҙә художестволы кәүҙәләнеш тапҡан. Ырыу-ҡәбиләләр булып йәшәгән осорҙа берҙәм, туған-ырыуың менән ойошоп, тупланып йәшәү айырыуса мөһим булған. Ырыулы булып, берҙәм йәшәү идеяһын сағылдырған мәҡәлдәрҙең күпселеге борон замандарҙа уҡ тормош ихтыяжынан килеп тыуған һәм яҙылмаған закондар рәүешендә формалашҡан.

Айырым мәҡәлдәрҙә башҡорттарҙың ырыу ҡоролошо дәүерендәге йола һәм традициялары сағылып ҡала. Паремик ижадта боронғо ҡан үсе алыу йолаһы, мәҫәлән, «Ҡарымтаға – ҡарымта, барымтаға – барымта», «Үс атаһын үлтерер» рәүешендә һаҡланып ҡалған.

Ырыу-ҡәбилә тормошоноң (мөнәсәбәттәренең) тарҡалыу осоронда ҡарымта үҙенең тәүге көсөн ныҡ ҡына юғалта башлай – уның урынын икенсе, экономик үс алыу йолаһы – барымта ала[25]. «Барымтаға – барымта», «Барымтанан ҡурҡҡан мал йыймаҫ», – тигән мәҡәлдәр бына шул боронғо ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәрендәге киҫкен осорҙоң бер шаһиҙауы ул.

Бер төркөм мәҡәлдәрҙең феодализм дәүерендә синфи йәмғиәт шарттарында тыуғанлығы асыҡ билдәләнә. Ижтимағи тормоштағы төрлө ҡатлам кешеләренең «иерархик баҫҡысын» һүрәтләү яғынан түбәндәге мәҡәл иғтибарҙы йәлеп итә:

Ҡол һағышын бей белмәҫ,
Бай һағышын хан белмәҫ,
Ярлы көнөн бай белмәҫ,
Яуҙың серен яу белмәҫ.

Хеҙмәтсәндәрҙе иҙеүсе хандар, бейҙәр тураһында, халыҡтың уларға булған мөнәсәбәтен сағылдырыусы мәҡәлдәр байтаҡ: «Барма бейгә – үҙе килер өйгә; барма ханға – үҙе килер малға»; «Хан юлында ҡан ята»; «Хан күп булһа – яу күп булыр, бей күп булһа – дау күп булыр»; «Батыр уртаҡ, бей уртаҡ – береһе илгә дан сәсә, береһе илгә ҡан сәсә» һ. б.

Тарихи-этнографик әҙәбиәттән күренеүенсә, ырыу-ара бәрелештәр, яу сабыуҙар башҡорт йәмғиәтендә быуаттар буйына дауам иткән, һәм уларҙың социаль йөкмәткеһе төрлө дәүерҙә төрлөсә булған. Әгәр ырыу-ара яу сабыуҙар, һуғыш һәм талауҙар феодаль мөнәсәбәттәрҙең яңы ғына урынлаша башлаған осоронда «халыҡ тормошоноң нормаль функцияларын» (Ф. Энгельс) тәшкил итһәләр, XIII–XVI быуаттарҙа инде был сапҡындар монгол һәм ноғай илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә файҙаланылған, ә XVII–XVIII быуаттарҙа, Башҡортостан урыҫ дәүләте составына ингәс, башҡорт феодалдары сапҡын һәм талауҙарҙы урыҫ хөкүмәте һәм күрше халыҡтарға (ҡаҙаҡ, ҡалмыҡтарға) ҡаршы йүнәлдергән. Күпмелер күләмдә үҙҙәренә лә олош тейгәнлектән, сапҡындарҙан ябай халыҡ вәкилдәре лә баш тартмаған[26].

Яуға барған – өлөш алған,
Яуҙан ҡалған – башын һалған;
Бау[27] булыр,
Бау булған ерҙә дау булыр,
Дау булған ерҙә табыш булыр,
Табыш сыҡҡан ерҙә өлөш сығыр, –

тигән мәҡәлдәр ана шул ваҡиғаларҙың сағылышы булып тора. Был мәҡәлдәрҙең йөкмәткеһен фәҡәт тарих күҙлегенән ҡарағанда ғына аңларға мөмкин.

Ҡайһы бер мәҡәлдәр ошо даулы-шаулы йылдарҙа айырым башҡорт ырыуҙарының әүҙемлек кимәленә ишара: «Ҡатайҙы дауға яратты, бөрйәнде яуға яратты», «Яума булһа, Нөгөш ташыр, ғауға ҡупһа, сәңкем ҡасыр».

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәренең бер өлөшө феодаль йәмғиәттең һуңғыраҡҡы осорона хас булған ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе сағылдыра. Синфи бүленештең үҫә һәм көсәйә барыуы, антагонистик йәмғиәттең төп законы – бәрәүҙәр тарафынан икенселәрҙең иҙелеүе кеүек күренештәр мәҡәлдәрҙә ғәжәйеп бер асыҡлыҡ менән әйтеп бирелгән: «Бай байға бара, ярлы ярлыға бара», «Байҙарға көн дә байрам, көн дә туй, ярлыға көндә хәсрәт, көндә уй», «Бай малын һөйләр, ярлы зарын һөйләр», «Байҙың малы – ярлының ҡаны», «Байҙың татлы ашы – фәҡирҙең ҡанлы йәше», «Байҙың ярлынан башҡа хәле юҡ».

Халыҡ мәҡәлдәрендә юғары ҡатлам вәкилдәре: байҙар, түрәләр – үҙҙәренең бөтә кире яҡтары менән күрһәтелә. «Дуңғыҙҙан бер ҡыл, байҙан бер һөйәк артмаҫ», «Бай бар ерҙә «малым бар» тимә, ғазраил

бар ерҙә «йәнем бар» тимә»; «Байҙарҙың ҡоймаһы бейек була, эстәре көйөк була»; «Бай байлығын итә: ай һайын ҡатын ала, ауыл һайын йорт һала» – хеҙмәт халҡы байҙарҙың һаранлығынан, ҡара эслектәре, аҙғынлыҡтарынан бына шулай көлгән һәм үҙенең нәфрәт тойғоһон белдергән.

Байҙың ғаиләһенә ҡағылған мәҡәлдәрҙә лә эске ирония һиҙелеп тора: «Ауыҙы-мороно ҡыйыш булһа ла, бай балаһы һөйләһен», «Бай балаһының ауыҙы ҡыйыш булһа ла, һүҙе төҙ», «Ауыҙы ҡыйыҡ булһа ла, байҙың ҡыҙы ир һайлар» һ. б.

Халыҡтың төрлө түрәләргә булған кире мөнәсәбәте, киҫкен шелтәләү тойғолары шулай уҡ мәҡәлдәр аша тапҡыр һәм образлы итеп әйтеп бирелгән: «Этте иркәләтһәң – иренең ялар, түрәне иркәләтһәң – илең талар», «Эт артында ҡой(о)роҡ, түрә артында бойороҡ», «Төлкө ҡой-(о)роғо менән, түрә бойороғо менән».

Дин әһелдәренә ҡарата сығарылған мәҡәлдәрҙең йөкмәткеһендә лә нигеҙҙә социаль хәл, тигеҙһеҙлек күҙлегенән ҡарап фекер йөрөтөү өҫтөнлөк итә: «Йыландың тәпәйен күрмәҫһең, мулланың әпәйен күрмәҫһең», «Бай ауырыһа мулла өшкөрөп йыуатыр, ярлы ауырыһа, әхирәт менән ҡурҡытыр», «Байлыҡ – дингә терәк, дин – байлыҡҡа терәк», «Ҡараҡ урлап, мулла юллап, түрә алдап йәшәй», «Халыҡ наҙан булһа, муллаға төшөм».

Бер төркөм мәҡәлдәрҙә байҙар, түрәләр тарафынан иҙелгән башҡорт халҡының ифрат ауыр шарттарҙа көн итеүе һүрәтләнә. «Ярлының, ауыҙын асһа, үпкәһе күренер» тигән мәҡәл, мәҫәлән, тетрәткес бер образлылыҡ менән үткән тормоштоң ауыр картинаһын күҙ алдына баҫтыра. «Ярлы кеше зарлы булыр». «Ярлының ябыуы – болот» һ. б. шуның кеүек күп кенә мәҡәлдәргә лә аңлатма биреп тороуҙың кәрәге юҡ. Ләкин шуныһы, ниссек кенә тормошо ауыр булмаһын, халыҡ үҙ көс-ҡеүәтенә таянып, киләсәккә өмөт менән йәшәгән, үҙенең яҡты киләсәгенә ышанған. «Халыҡ теләһә хан дөйәһен һуйҙырыр», «Халыҡ көсө таш яра» кеүек мәҡәлдәр – бының асыҡ миҫалы.

Әммә шуны ла әйтергә кәрәк. Мәҡәл жанрының үҙенсәлеге – тормоштоң бөтә тармаҡтарына үтеп керсү, йәшәйештә, көнкүрештә була торған хәлдәрҙең һәр төрлөһөнә тәжрибә нигеҙендә баһа биреү: төрлө осраҡтарҙа урынына, ваҡытына, форсатына ҡарап, бер үк күренешкә төрлө, хатта ҡапма-ҡаршы, фекерләүҙәр булыу мөмкинлеген раҫлау. Шуға ла ауыҙ-тел ижадында бай ҡатлам кешеләрен, социаль тигеҙһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте киҫкен тәнҡитләгән мәҡәлдәр менән бер рәттән был күренештәргә түҙемлелек тойғоһон сағылдырғандары ла юҡ түгел: «Байға яраған бай булған», «Байҙан аҡмаһа ла тама», «Барҙың барлығы тейә, юҡтың тарлығы тейә», «Түрәгә тел тигеҙмә – теләң киҫелер».

Ҡайһы бер мәҡәлдәрҙә иҙеүсе ҡатлам вәкилдәренең ҡараш һәм мәнфәғәттәре сағылғаны һиҙелә: «Хәйерсе байыһа, юлға һыймаҫ», «Хәйерсенең тамағы туйғас, бей булған», «Ҡол ҡоторһа, ҡойо быс-ратыр» кеүек мәҡәлдәр ярлынан көлөү, уны кәмһетеү ниәтендә сығарылған. Ләкин паремик репертуарҙа бындай әҫәрҙәрҙең һаны сағыштырғыһыҙ аҙ – мәҡәлдәрҙең бик ҙур күпселеге хеҙмәтсән халыҡ ҡарашын, халыҡтың уй-тойғоларын сағылдыра.

* * *

Тыуыу дәүерҙәре яҡынса билдәләнә торған мәҡәлдәрҙе бер системаға һалғас, байтаҡ ҡына тойолһа ла, дөйөм алғанда, ҡалған йөҙәрләгән-меңәрләгән мәҡәл һәм әйтемдәр фонында уларҙың һаны сағыштырмаса күп түгел. Ғәжәйеп тәрән мәғәнәле, юғары образлы, кинәйәле булыуҙары арҡаһында бер дәүер тыуҙырған мәҡәлде икенсе осор кешеләре лә үҙ «милке» итеп ҡабул итә һәм ата-бабаларының изге васыяты рәүешендә киләһе быуындарға тапшыра килә. Социаль-ижтимағи мәсьәләләр менән бер рәттән мәҡәлдәрҙә көндәлек тормош, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт, этик нормалар айырыуса киң сағыла. Хатта бер ижтимағи формация икенсе ижтимағи формация менән алмашынғас та, халыҡтың быуаттар буйына формалашҡан тормош уклады, традициялар, ғөрөф-ғәҙәттәр рәүешендә оҙаҡ ваҡыттар буйына һаҡлана ала. Шуға ла көнкүреш, аралашыу мөнәсәбәттәренә, этик нормаларға ҡараған мәҡәлдәр бигерәк тә тотороҡло, һәм уларҙың хронологияһын билдәләү күпселек осраҡта бөтөнләй мөмкин түгел. Ошо сәбәпле мәҡәлдәрҙә халыҡ тормошо, халыҡ аңының сағылыу мәсьәләһен идея-тематик төркөмдәр эсендә өйрәнеүҙе был осраҡта берҙән-бер ҡулайлы ысул тип танырға тура килә (тарихи-хронологик классификация революцияға тиклемге һәм совет осоро мәҡәлдәре планында ғына күҙ алдына баҫа)[28].

Йөкмәткеләре буйынса, йәғни идея-тематик яҡтан, башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен түбәндәге ҙур төркөмдәргә бүлеп ҡарарға мөмкин булыр ине: I. Кешеләрҙең хеҙмәт эшмәкәрлеген сағылдырған мәҡәлдәр. II. Халыҡтың ижтимағи тормошо хаҡындағы мәҡәлдәр. III. Көнкүреш, йолалар, ғаилә, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре тураһындағы мәҡәлдәр. IV. Кеше, уның шәхси сифаттары, әхлаҡ-әҙәп нормалары һәм кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр. V. Донъя, ғүмер, яҙмыш тураһында уйланыуҙарҙы сағылдырған мәҡәлдәр.

Билдәле булыуынса, хеҙмәт – кешенең үҙен кеше иткән факторҙарҙың береһе. Халыҡ тормошонда уның әһәмиәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур. Шуға ла ауыҙ-тел ижадында, айырым алғанда мәҡәлдәрҙә, хеҙмәт темаһы ифрат киң урын алып тора. Күпселек мәҡәлдәрҙең асылын йөшәүҙең нигеҙе лә, кешенең кешелеге лә хеҙмәт менән билдәләнә тигән идея тәшкил итә. Халыҡта «тормош» тигән һүҙҙең мәғәнәһе эш тураһындағы төшөнсәнән айырылмай. «Бүренең көсө – тешендә, кешенең көсө – эшендә», «Көсөң барҙа эшеңде ҡара, көсөң бөткәс, эшең һине ҡарар», «Ағас – емеше менән, кеше – эше менән», тигән мәҡәлдәр ана шул турала һөйләй. Халыҡ ҡарашында хеҙмәт иткән кеше генә хөрмәткә, данға, ил һөйөүенә лайыҡ: «Хеҙмәт төбө – хөрмәт», «Хөрмәт һөйһәң, хеҙмәт һөй», «Эш һөйгәнде ил һөйгән» һ. б.

Мәҡәлдәр хеҙмәтте хеҙмәт булараҡ ҡына данлап ҡалмай. Уларҙың күпселеге эш тәжрибәһен, төрлө хеҙмәт процестарын образлы рәүештә нығытыусы ҡағиҙә ролен үтәй. Теге йәки был эште ваҡытында башлау һәм үтәп сығыу, уйлап, ҡабаланмай, сифатлы итеп эшләй белеү кеүек эштең уңышын тәьмин итә торған сараларҙы билдәләүсе мәҡәлдәр күп: «Иртәгә ҡалған эшең – һынып төшкән тешең», «Ҡалған эшкә ҡар яуа», «Башлаған эш – бөткән эш», «Биш эште эшләгәнсе, бер эште

еренә еткереп эшлә», «Ҡабаланған – ҡабырғаһын һындырған», «Алдын-артын уйлап эш ит».

Кешеләрҙәге тырышлыҡ, түҙемлелек кеүек һәйбәт сифаттар эште ваҡытында һәм уңышлы тамамлауға ярҙам итһә, ялҡаулыҡ, вайымһыҙлыҡ шикелле кире һыҙаттар быға ҡамасаулай. Шуға күрә мәҡәл һәм әйтемдәрҙә ялҡау, вайымһыҙ, булдыҡһыҙ, бушҡа шапырыныусы кешеләр ҡаты тәнҡитләнә: «Ашағанда йән фарман, эшкә тиһәң, мин бармам», «Эше төймәләй, шау-шыуы дөйәләй», «Ялҡау ултырып йоҡлай, ятып эшләй».

Күп кенә мәҡәлдәр ялҡау, эшлекһеҙ кешегә уңған, егәрле кешене өлгө итеп һүрәтләүгә ҡоролған: «Эшлеклене иген баҫыр, эшлекһеҙҙе йоҡо баҫыр», «Ялҡау кеше – ярты кеше, уңған кеше – ун кеше». Ялҡаулыҡ мәҡәлдәрҙә ғөмүмән хурлыҡҡа иҫәпләнә: «Тырышлыҡ – ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ – хурлыҡ», «Ялҡауға ҡәбер хәрәм». Был мәҡәлдәр халҡыбыҙҙың элек-электән хеҙмәт һөйөүсән, уңған, тырыш булыуын раҫлаусы дәлил булып тора. Дөйөм алғанда, хеҙмәткә дан булып яңғыраған, халыҡтың быуаттар буйына туплана килгән хеҙмәт тәжрибәһен үҙҙәрендә туплаған йөҙәрләгән мәҡәлдәр араһында, һирәкләп булһа ла, зәғиф идеялы, вайымһыҙлыҡ хисе менән һуғарылған мәҡәл үрнәктәре лә осрап ҡуя. «Эшләп, кем байыған?», «Эшләп ас булмаҫһың, бай ҙа булмаҫһың» тигән мәҡәлдәр, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Ләкин, төптән уйлап ҡараһаң, синфи йәмғиәт шарттарында тыуған бындай мәҡәлдәр ҙә халыҡтың хеҙмәткә кире мөнәсәбәтен сағылдырмай. «Берәүҙәр эшләп, икенселәр тешләп» йәшәгән заманда ундай мәҡәлдең тыуыуы – үҙе тәбиғи нәмә.

Бер үк ваҡытта хеҙмәт процесы мәҡәлдәрҙә ниндәйҙер дөйөм, аморф хәлендә түгел, ә халыҡтың кәсебенә, тормош-көнкүрешенә бәйле бирелә.

Һунарсылыҡ, малсылыҡ, игенселек эштәренә ҡараған мәҡәлдәр, мәҫәлән, мәғәнәүи, логик яҡтан һис шикһеҙ кешенең хеҙмәт эшмәкәрлеген сағылдырған әҫәрҙәр төркөмөнә инә. Борон-борондан мал аҫраусылыҡ менән көн иткән башҡорт халҡының паремик ижадында хеҙмәттең был тармағын сағылдырған мәҡәлдәрҙең күп булыуы тәбиғи. «Малһыҙ – донъя һанһыҙ», «Мал аҙығы – йән аҙығы, мал асыуы – йән асыуы» тигән мәҡәлдәр аша халыҡ тормошонда малсылыҡ хеҙмәтенең роле ни тиклем ҙур булғанлығы күҙ алдына баҫа.

Мәҡәлдәр буйынса башҡорт халҡының элек ниндәй мал аҫрағаны, ҡайһы малға ниндәй мөнәсәбәттә булғанлығы ла бик асыҡ сағыла: «Йылҡы – малдың батшаһы», «Аты-туны бар кешелә Алпамыша көсө бар», «Аты бар – арыҫлан», «Аты барҙың ҡанаты бар, һыйыры барҙың һыйы бар», «Һыйлы көнөң – һыйыр», «Кәзәне маҡта, һыйырҙы һау», «Кәзә мал түгел», «Арыҡ булһа ла һарыҡ аҫра».

Ер йөҙөндәге бик күп халыҡтарҙың хеҙмәт эшмәкәрлеге, билдәле булыуынса, һунарсылыҡ кәсебенән башлана. Шуға күрә хеҙмәткә бәйле мәҡәлдәрҙе тарихи күҙлектән тикшереүҙе һунарсылыҡ тураһындағы мәҡәлдәрҙән башлау дөрөҫ булыр ине. Башҡорт халыҡ ижады фондында лә улар күп кенә. Ләкин шуны әйтергә кәрәк, тарихи үҫеш менән был мәҡәлдәр иң боронғо һаналһалар ҙа, бөгөнгө көнгәсә һаҡланып ҡалған торошонда улар, күрәһең, сағыштырмаса һуңғы за-

ман емеше. Был мәҡәлдәрҙә һунарсылыҡ кәсебенең үҙе сағылыуҙан бигерәк, халыҡтың уға булған ҡарашы, һығымта яһауы өҫтөнлөк алған. «Ауға сыҡҡанда эт ашатмайҙар», «Буран булһа, һунар юҡ, ямғыр булһа, туҙан юҡ», «Ауға барһаң, зирәк бул, иптәшенә терәк бул» кеүек мәҡәлдәр тап бына шул турала һөйләй.

Балыҡсылыҡ менән беҙҙең ата-бабаларыбыҙ, күрәһең, артыҡ мауыҡмаған. Мәҡәлдәрҙән күренеүенсә, хеҙмәттең был тармағына халыҡтың мөнәсәбәте бик үк ыңғай түгел: «Балыҡ аулаған байымаҫ», «Балыҡты тотҡан уңмаҫ, ашаған туймаҫ», «Балыҡ тотҡан туҡ булыр – аяҡ-быуыны юҡ булыр», «Балыҡсының ҡулы аҡ, малсының йөҙө аҡ».

Игенселек хеҙмәтенә ҡағылған күп кенә мәҡәлдәр сағыштырмаса һуңғыраҡ осор тормош-көнкүрешенә бәйле тыуған мираҫ. Уларҙың тәжрибәүи әһәмиәте әле лә юғалмаған: «Көҙгө ашлыҡты көлгә сәс, яҙғы ашлыҡты боҙға сәс», «Еренә ҡарап иген ик», «Ашлаған ер аш бирер».

*Халыҡтың социаль-иждтимағи тормошон сағылдырған мәҡәлдәр* шулай уҡ ҙур бер тематик төркөм тәшкил итә. Бында йәмғиәттә синыфтар, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәт-бәйләнештәре, хеҙмәт халҡының социаль хәле, уй-тойғолары хаҡында ифрат тәрән йөкмәткеле демократик йүнәлештәге мәҡәлдәр инә, ләкин ундай әҫәрҙәрҙе алда хронологик планда тикшергәнлектән, был урында мәсьәләгә ҡабатлап туҡталып тормайбыҙ.

*Көнкүреш, йолалар, ғаилә мөнәсәбәттәренә ҡараған мәҡәлдәрҙә* башҡорт халҡының көнкүреше, ата-әсә, бала-саға, өйләнеү, килен, кейәү булыу, ҡәрҙәшлек, нәҫел-ырыу һ. б. тормошта тотҡан урыны, уларға ҡараштары сағыла. Бында халыҡтың борондан килгән ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын бик аныҡ төҫмөрләргә мөмкин. Ҡалын биреп ҡыҙ алыу, ҡәйнә йортонда килен хәле, ҡәйнеш менән еңгәләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һүрәтләгән мәҡәлдәр тарихи-этнографик әһәмиәтле мөһим сығанаҡ булырлыҡ. «Килен кеше ким кеше, алабай менән тиң кеше», «Килендең һалмаһы китек» кеүек мәҡәлдәргә аңлатма биреп тороуҙың кәрәге юҡ. «Ҡыҙ кемгә бармаҫ ине, егет кемде алмаҫ ине, ҡалын малы булмаһа?» тигән мәҡәлдән сығып, ҡыҙ өсөн түләнгән хаҡ – ҡалындың күләмен самалау ауыр түгел.

Социаль нигеҙе шулай уҡ ҡалынға бәйләнгән левират (ағай үлһә, еңгәне ҡәйнешенә бирсү) йолаһының да мәҡәлдәрҙә асыҡ күҙәләнеше бар: «Еңгә ҡатын – ейәндеке», «Еңгә ҡатын алған бәхетле булыр». Ә инде «Ерек утын яҡма, еңгә ҡатын алма: ерек утындың йылыуы юҡ, еңгә ҡатындың ҡыҙыуы юҡ», «Еңгә ҡатын – ямау, ҡалған малы – талау» кеүек мәҡәлдәр һуңғараҡ, боронғо традицияларҙың йомшаған дәүерендә, сығарылғандар тип уйларға кәрәк.

Ғөмүмән, ғаиләлә ир менән ҡатын мөнәсәбәтенә килгәндә, мәҡәлдәрҙән күренеүенсә, ир – ҡатындың тәңреһе: «Ир хаҡы – тәңре хаҡы», «Ирем – ҡара ерем», «Ауыр йөктө ат тарта», «Ат тартмаһа, арба бармай» тигән мәҡәлдәргә донъяның ауырлығы – ирҙәр елкәһендә тигән фекер һалынған.

Билдәле булыуынса, борон, ауыр күсмә тормош шарттарында малсылыҡ менән көн күргән башҡорт йәмғиәтендә, ҡатын-ҡыҙҙың да хужалыҡта тотҡан роле ҙур булған. Бейә бәйләү, ҡымыҙ яһау, тире

иләү, балаҫ, киндер һуғыу, тора-бара урак урыу, көлтә бәйләү – кыҫкаһы, йорт-хужалык эштәренең барыһы ла улар кулынан үткән. «Якшы катын – донъя тоткаһы», «Донъяның төҙөклөгө лә, боҙоклоғо ла катындарҙан» тигән мәкәлдәрҙә катын-кыҙҙарҙың ғаиләлә, хужалык эштәрендә тоткан роленә ҙур баһа бирелгән.

Донъя көтөргә йүне булмаған ялкау катындарҙан көлгән мәкәлдәр халык араһында ифрат та күп. Улар ғаиләләге күп кенә бәхетһеҙлектәрҙең сәбәбе яман катындан тигән фекер үткәрә: «Яман катын – йәнгә үлем», «Һәр башка – бер үлем, яман катын алғанға – ике үлем».

Ғаиләлә ата-әсә һәм балалар мөнәсәбәте, бала үҫтереү һәм тәрбиәләүгә караған мәкәлдәр халыктың быуаттар буйына һуҙылған тормош тәжрибәһе нигеҙендә тыуған. Мәкәлдәрҙән ата-әсәнең балаларға үҙ ырыуҙарын дауам иттереүсе итеп карағанлыктары күренә: «Яман булһа ла нәҫелең калһын, үҙ урыныңда утың янһын», «Үҙеңдән һуң балаң калһын», «Әҙәмдең смеше – бала».

Нәҫел ебен туранан-тура дауам иттереүсе буларак, ғаиләлә ир баланың тыуыуы айырыуса ҙур шатлык килтергән. «Ул тыуҙы – илгә тыу тыуҙы», тиелә халык мәкәлендә. Хужалыкта ярҙамсы булыу яғынан да ир бала ышаныслырак, сөнки, мәкәлдәр буйынса, «Кыҙ бала – күрше тауығы», «Улы барҙың – кулы бар, улы юктың – кулы юк». Ләкин, алда әйтелгәненсә, мәкәлдәр һис касан да теге йәки был яҡҡа ауышмайҙар, хәл-күренештең бер генә яғын айырып алып карамай. Төрлө хәлгә, төрлө осрактарға карата уларҙа һығымта, баһа һәм мөнәсәбәт бар. Бер яктан, «Кыҙ бала – күрше тауығы» икән, икенсе яктан, «Кыҙ бала – өй биҙәге», «Кыҙлы йорт – нурлы йорт», «Кыҙы барҙың наҙы бар».

Мәкәлдәрҙә халыктың тәрбиәүи (педагогик) караштары ифрат киң сағылған. «Таба белһәң, бағa ла бел», «Тыуҙырған инә түгел, үҫтергән инә», «Ояһында ни – осканында шул», «Баланың ғәйебе – атаинәнеке» тигән мәкәлдәр бала тәрбиәләүҙә ата-әсәнең ни тиклем яуаплы булыуы хакында иҫкәртә. Бала үҫтереү, бала тәрбиәләүҙең ауырлығын халык «Баланы табыуынан бағыуы кыйын» тигән мәкәл аша белдергән. Ләкин тәрбиә эше нисек кенә ауыр һәм яфалы булмаһын, ата-әсә өсөн бала барыбер – шатлык, кыуаныс һәм ләззәт сығанағы: «Бала күрмәгән – балдан ауыҙ итмәгән», «Күлдең йәме кама менән, өйҙөң йәме бала менән».

Ата-әсәнең балаға оло терәк, таяныс булыуы «Инәң үлһә – йылғаң короно, атаң үлһә – таянған тауың ауҙы» тигән мәкәл рәүешендә төҫкөйөп бер тапкырлык менән әйтеп бирелгән. Шул ук вакытта балаларҙың ата-әсә һөйөүен һәр сак тейешенсә баһалап еткерә белмәүҙәренә карата ла үкенес белдереп куйырға онотмай мәкәл: «Ана күңеле – балала, бала күңеле – далала».

Ғаилә төҙөклөгө йәшәү өсөн ни тиклем мөһим һәм кәрәкле булһа, туған-ырыулы, нәҫел-нәсәпле булып ғүмер итеү ҙә халыкка берҙәй кәрәкле һәм мөһим, сөнки тормоштоң иң ауыр, иң аяныслы мәлдәрендә ярҙамға ят түгел, үҙеңдеке килә: «Ашап-эскәндә дуҫ якшы, канлы көндә карындаш якшы», «Илашыуға үҙ якшы, һыйлашыуға сит якшы», «Башыңа бәлә төшкәндә, туғаныңды таныр һың», «Йәйләүгә туғай

яҡшы, кәңәшкә ағай яҡшы», «Үҙеңдеке үлтермәҫ, ят ярлыҡамаҫ», «Ағаһы барҙың ырыҫы бар, энеһе барҙың тынысы бар».

Әлбиттә, донъя булғас, төрлө хәлдәр, төрлө ваҡыт була, ҡайһы саҡ ағай-эне даулашып, талашып та китер, тик «Ике туған һуғышһа, өсөнсөгә һин ҡыҫылма: ағай-эне талашыр, атҡа менһә – ярашыр».

Өй-йорт тотоу, күрше-күлән менән йәшәү, аш-һыу әҙерләү, байрам, ҡунаҡ-һый – ғөмүмән көнкүреш темаһы мәҡәлдәрҙә бик киң урын тота. Бында ла халыҡтың ғөрөф-ғәҙәте, тормош үҙенсәлеге, уның рухи йөҙө ифрат ҙур тулылыҡ менән асыла. «Ҡунаҡ – атаңдан оло», «Күрше хаҡы – тәңре хаҡы», – ти мәҡәл.

Мәҡәлдәр элек-электән кешеләрҙә иң яҡшы әхлаҡи сифаттар тәрбиәләү функцияһын үтәп килгән. Әлбиттә, әхлаҡ-әҙәп нормаларын кешеләрҙең йәмғиәттә үҙ-үҙҙәрен тота һәм йәшәй белеү ҡағиҙәләрен теге йәки был күләмдә сағылдырмаған бер генә жанр ҙа юҡ. Шулай ҙа йәмғиәттең әхлаҡи-этик ҡанундары халыҡ ижадының башҡа жанрҙарына ҡарағанда ла, мәҡәлдәрҙә айырыуса ныҡ кәүҙәләнеш тапҡан, сөнки быға жанрҙың фәлсәфәүи-дидактик тәбиғәте үҙе ярашлы. Әйткәнебеҙсә, мәҡәл жанры үҙе тормоштағы айырым ҡағиҙә һәм нормаларҙы билдәле бер ҡалыпҡа һалыу, тәжрибә нығытыу ихтыяжынан тыуған. Мәҡәлдәрҙәге мораль ҡатмарлы теоретик фекерләүҙәр, этик трактттар рәүешендә түгел, әлбиттә. Ләкин уларҙағы фекер үткерлеге, тапҡырлыҡ, ябайлыҡ һәм күп яҡлылыҡ (мәҡәл кеше ҡылығының ҡайһы ғына яғына ҡағылмай!) жанрҙы практик әһәмиәте буйынса иң юғары кимәлдә яҙылған трактттарға торорлоҡ дәрәжәгә күтәрә.

Мәҡәлдәрҙән күренеүенсә, әхлаҡи сифаттарҙың юғарыһы итеп, халыҡ граждандылыҡ, Тыуған илде һөйөү тойғоһон иҫәпләй. «Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил яҡшы», тигәндәр боронғолар. Яҙмыш ҡайҙа ғына алып барып ташламаһын, ниндәй генә ауыр көндәр килмәһен, кешене ғәзиз ере, тыуған тупрағы тарта, шуға ла ул «Сит илдә солтан булғансы, үҙ илендә олтан булыу»ҙы өҫтөнөрәк күрә. Халыҡтың иленә хыянат иткән, илен һатҡан кешеләргә ҡарата нәфрәт тойғоһо «Илен һатып ашаған – ике генә көн йәшәгән», «Иле юҡтың – көнө юҡ» тигән мәҡәлдәрҙә сағылыш тапҡан.

Илһөйәрлек, Ватан темаһына Тыуған илде һаҡлау, яу ҡайтарыу, батырлыҡ, егетлек, ҡыйыулыҡ тураһындағы мәҡәлдәрҙең туранан-тура мөнәсәбәте бар. «Ир-егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә», «Батыр – илдең ҡаҙығы», «Батыр егет – ил күрке» кеүек мәҡәлдәрҙә халыҡтың ил алдындағы изге бурысҡа намыҫ, юғары талаптар күҙлегенән ҡарағанлығын күрмәү мөмкин түгел.

Дуҫлыҡ, берҙәмлек кеүек оло тойғолар хеҙмәтсән халыҡҡа элек-электән хас булған. «Ырыулының уғы юғалмаҫ», «Бергәнеке – берәгәйле» тибындағы мәҡәлдәр тап бына ошо ҙур тойғоларҙың образлы сағылышы булып тыуған.

Намыҫ, дан тураһындағы мәҡәлдәр ҙә бик тәрән йөкмәткеле. «Күлдә ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай», «Хурланып йәшәүҙән, дан менән үлеү артыҡ» һ. б.

Әхлаҡи сифаттарҙың юғарыһы итеп, мәҡәлдәрҙә туралыҡ, тоғролоҡ һанала. Үҙ һүҙендә тора белеү, вәғәҙә, ант, аманатҡа хыянат итмәү – ҡанун хөкөмөндә: «Вәғәҙә – иман», «Кешенең һүҙе үлгәнсе, үҙе

үлһсн», «Әйткән һүҙ – аткан уҡ». Урынһыҙ, мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләгән кешегә ҡарата: «Ағас ауыҙ, балта тел», «Кеше туй һөйләгәндә, ул йыназа һөйләгән», – тиҙәр.

Мәҡәлдәрҙә ғәйбәт, ялған һөйләү, аҫтыртынлыҡ кеүек сифаттар иң насар ҡылыҡ булараҡ һүрәтләнә: «Ғәйбәттең аяғы оҙон», «Тымыҡ күлдә ҡорт мыжғый», «Ялғансының ҡойроғо ҡырҡ ҡолас».

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә кешеләрҙәге ыңғай һәм кире сифаттарҙы дөйөмләштереү рәүешендә, «яҡшы» һәм «яман» төшөнсәләре йыш ҡулланыла: «Яҡшы менән юлдаш булһаң – етерһең моратҡа, яман менән юлдаш булһаң – ҡалырһың оятҡа», «Яҡшы кешенең яҡшылығы тейер тар ерҙә, яман кешенең яманлығы тейер һәр ерҙә». Күп осраҡта «яҡшы» һәм «яман» төшөнсәләре мәҡәлдәрҙә фәлсәфәүи һәм абстракт фекерләү дәрәжәһенә күтәрелә. «Яҡшыһыҙ яман булмаҫ, яманһыҙ яҡшы булмаҫ», «Бер яҡшының бер яманы була» кеүек мәҡәлдәр үрҙә әйтелгәндәргә миҫал була алыр ине. Шуны билдәләмәү мөмкин түгел: ни ҡылһаң да, яҡшылыҡ эшләһәң дә, яманлыҡ эшләһәң дә – донъялыҡта бөтәһе лә үҙеңә ҡайта, тигән идея байтаҡ ҡына мәҡәлдәрҙең нигеҙендә ята. «Яҡшылыҡ ҡылһаң да үҙеңә, яманлыҡ ҡылһаң да үҙеңә», «Кешегә баҙ ҡаҙма: үҙең төшөрһөң», «Йүкә өҙһәң – ҡайыш түләрһең» кеүек мәҡәлдәр бына шундайҙар.

Йәнле репертуарҙа халыҡтың донъяны, тәбиғәтте танып белеү, уның асылына төшөнөү, төрлө бәйләнеш һәм ҡаршылыҡтар; сәбәп, форсат, ваҡыт, йәшәү-ғүмер, үлем, яҙмыш тураһындағы уйланыуҙарын, йәғни халыҡтың стихиялы материалистик ҡараштарын сағылдырған мәҡәлдәр ҙә күп кенә: «Үткән ғүмер – аҡҡан һыу», «Иҫкеһеҙ яңы булмаҫ, яңыһыҙ иҫке булмаҫ», «Уңы барҙың һулы бар», «Ваҡыт үҙенекен итә», «Ат аунаған ерҙә төк ҡала», «Үлемһеҙ донъя юҡ, үткеһеҙ йылға юҡ» һ. б.

Халыҡ телендә йөрөгән боронғо ырым-юрауҙар шулай уҡ тәбиғәт, донъяны танып белергә, уның серҙәренә төшөнөргә теләү һөҙөмтәһендә тыуған. Йылдың нисегерәк килеүе, көндәрҙең аяҙмы, болотло-ямғырлы булыуымы – быларҙы белеү кешенең көндәлек тормошо өсөн әһәмиәтһеҙ нимә булмаған. Шуға ла кеше борон тәбиғәтте күҙәтә, өйрәнә килгән, аҡрынлап уның серҙәренә төшөнә барып, үҙе өсөн кәрәкле һөҙөмтәләр сығарған. Ошо күп йыллыҡ күҙәтеүҙәрҙең һығымтаһы булып, һынау мәҡәлдәре, ырым-юрауҙар барлыҡҡа килгән. Был ырым-юрауҙарҙың йөкмәткеләре, нигеҙҙә, түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:

1. Тәбиғәт есемдәре, күренештәргә ҡарап, көндөң нисек килеүен билдәләү («Ҡояш ҡолаҡланып сыҡһа, ямғыр булыр», «Ай баҫып тыуһа, көн аяҙ булыр», «Етегән йондоҙ ҡараһыу булып күренһә, ямғыр булыр»...).

2. Ҡош-ҡорт, хайуан-йәнлектәрҙең ҡылыҡтарына, үҫемлектәргә ҡарап, көндөң нисек булаһын әйтеү («Балыҡ һыу өҫтөндә уйнаһа, ямғыр була», «Тәлмәрйен ҡысҡырһа, көн йылыта», «Ашлыҡ урғанда һалам шартлап һынһа, ямғыр яуыр»).

3. Кешенең тән ағзалары һиҙеүе буйынса сығарылған һынауҙар («Ҡолаҡ ҡысытһа, буран булыр», «Арҡа һыҙлаһа – ямғырға»).

4. Өйҙәге әйбер-нәмәләргә ҡарап, һауаның ниндәй буласағын билдәләү («Гәҙрә тирләһә, ямғыр булыр», «Ҡыш көнө тоҙ дымланһа, ҡар яуа»).

5. Мал-тыуар үрсеүен, иген, емеш-еләктең уңыу-уңмауын күҙәтеү нигеҙендә тыуған юрауҙар («Ҡыш һыуыҡ булһа, иген уңыр», «Томан күп төшһә, емеш күп булыр» һ. б.).

Әлбиттә, был юрауҙарҙың бөтәһе лә берҙәй дәрәжәлә ысынбарлыҡҡа тура килмәҫкә мөмкин. Улар араһында фәнни күҙлектән аңларға мөмкин булғандары ла, боронғо аң сикләнгәнлеге нигеҙендә тыуғандары ла бар. Шуның өсөн ырым-юрауҙарға ҡоролған һынау мәҡәлдәренә тәнҡит күҙлегенән ҡараған билдәле мөнәсәбәт булырға тейеш.

Мәҡәлдәрҙе идея-тематик төркөмдәр эсендә байҡап сығыу жанрҙың ҙур ғилми әһәмиәткә эйә булғанлығын күрһәтә. Мәҡәлдәр халыҡтың тормош-көнкүрешен, уның аң үсешен өйрәнеүҙә мөһим тарихи-этнографик сығанаҡ булып торалар. Төптән уйлағанда, уларҙың танып-белеү әһәмиәте милли сиктәргә генә һыйып бөтмәй, сөнки һәр халыҡтың ижады, ул нисек кенә үҙенсәлекле булмаһын, дөйөм кешелек мәҙәниәтенә хас булған һыҙаттарҙы йөрөтә – тимәк, дөйөм кешелек күләмендәге ҡиммәткә эйә.

* * *

Бай, тәрән йөкмәткеле, дидактик мәғәнәне хәтергә һеңерлек итеп образлы һәм ҡыҫҡа рәүештә әйтеп биреү – мәҡәлдәрҙең төп маҡсаты. Ошо маҡсаттан сығып, уларҙың төҙөлөшө, художество үҙенсәлектәре билдәләнә. Башҡа бик күп халыҡтарҙың мәҡәлдәре шикелле, башҡорт мәҡәлдәренең дә төҙөлөштәре ябай. Улар, ҡағиҙә буларак, ике киҫәктән тора. Синтаксик яҡтан ҡарағанда, ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙең состав өлөшө булған был киҫәктәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте күп осраҡта эйә менән хәбәр мөнәсәбәте: «Үткән ғүмер – аҡҡан һыу». «Ялҡауҙың ашы бешмәҫ, бешһә лә төшмәҫ», «Уҡығандың теле икәү». «Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ». Ошондай ике киҫәкле форманың ҡатлатлаңышынан йыш ҡына оҡшатыу, йә ҡаршы ҡуйыу характерындағы йәнәшәлектәр (параллелизмдар) барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, «Яман арба юл боҙор, яман кеше ил боҙор» тигән мәҡәл мәғәнәүи, йәки семантик параллелизм принцибына ҡоролған. Әйтергә теләгән төп фекер мәҡәлдең икенсе өлөшөндә булып, беренсеһе поэтик оҡшатыу рәүешендә әҫәрҙең идеяһын, мәғәнәһен образлаштыра, тәрәнәйтә. Икенсе бер төрҙәрендә мәҡәлдең мәғәнәүи баҫымы бер киҫәкте икенсеһенә ҡаршы ҡуйыу һөҙөмтәһендә көсәйә төшә: «Яҡшы һүҙ – йән аҙығы, яман һүҙ – баш ҡаҙығы», «Тырышлыҡ – ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ – хурлыҡ». Ҡайһы ваҡыт мәҡәлдәрҙә бер-береһенән шаҡтай алыҫ мәғәнәле киҫәктәр ҙә йәнәш килә ала. «Ҡомо юҡ һыу булмаҫ, яғаһы юҡ тун булмаҫ, законы юҡ ил булмаҫ», «Алтын таш ҡаш булмаҫ, алабута аш булмаҫ, дошман яуҙа иш булмаҫ» һ. б.

Ғәҙәттән тыш ҡыҫҡалыҡҡа, йыйнаҡлыҡҡа ынтылғанлыҡтан, мәҡәлдәрҙә йыш ҡына төрлө һөйләм киҫәктәре һәм килеш ялғауҙары төшөп ҡалыусан: «Күргән (әйбер) күҙҙә ҡалыр, әйткән (һүҙ) күңелдә ҡалыр», «Матур (кеше) матурға (матур кешегә) ҡарай», «Кеше һүҙе кеше(-не) үлтерә», «Аҡ эт(-тең) бәләһе ҡар эткә» (төшә, тейә).

Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләре менән уларҙың интонацион-синтаксик, ритмик төҙөлөштәре һәм художестволы алымдары араһында ныҡлы бәйләнеш бар. Жанрҙың кешегә өгөт-нәсихәт, кәңәш бирергә йүнәлдерелгән функцияһы уның стиль үҙенсәлектәренә ҙур йоғонто яһаған: ҡайһы бер мәҡәлдәр ҡаршылағы кешегә туранан-тура өндәшеп әйтелгән кеүек ишетелә. «Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит», «Иҙел күрмәй итек сисмә». Мәҡәлдәр өсөн күпселектә эйәһеҙ һөйләм, билдәһеҙ эйәле һәм дөйөм эйәле һөйләм формалары хас, сөнки дөйөмләштерелгән ҡанун булараҡ, улар һәр кемгә ҡарата ла ҡулланыла алалар.

Башҡорт мәҡәлдәренең поэтикаһын тикшереүҙә *образлылыҡ* мәсьәләһе мөһим әһәмиәткә эйә. Тормоштағы хәл-ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе образлы һүрәтләү мәҡәлдәрҙә күп төрлө художестволы алымдар ҡулланыу аша хәл ителә.

*Кинәйәлелек* – мәҡәлдәрҙең нигеҙ ташы. Тура мәғәнәһендә ҡулланылған мәҡәлдәр халыҡ телендә бик аҙ, уларҙың күпселеге тик күсмә мәғәнәлә генә йөрөй. Әгәр «Силәгенә күрә ҡапҡасы» тигән һүҙ силәк менән ҡапҡас тураһында барһа, һөйләмдең әллә ни әһәмиәте лә, мәғәнәһе лә булмаҫ ине. Ә бына «Бисәһенә күрә ире» йәки «Иренә күрә бисәһе» тигән фекер аңлатыуҙа ул ғәжәп тапҡыр һәм образлы яңғырай, аңламаҫтан ғына ташлаған бер реплика һөйләүсенең конкрет осраҡта конкрет кешеләргә булған кире мөнәсәбәтен тулы итеп асып бирә.

Мәҡәлдәрҙең юғары образлылығы, кинәйәлелеге күп төрлө троптар, һүҙҙәр һәм фразаларҙы күсерелгән мәғәнәлә ҡулланыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә.

Троптарҙың иң ябай һәм боронғо төрө – *эпитет*. Был художество алымы тыңлаусы йәки уҡыусының иғтибарын әйбер, күренештәрҙең төп үҙенсәлегенә йүнәлтеү менән бергә, фекерҙе йәнләндереп, телмәрҙең эмоциональлеген дә арттыра. Эпитеттар ҡулланыу башҡорт халыҡ ижадының һәр жанрына, шул иҫәптән мәҡәлдәргә лә хас күренеш. Тик шуныһы характерлы, мәҡәлдәрҙә, башҡа күп кенә жанрҙарҙа ҡулланылыусы «бөҙрә ҡайын», «ҡара ҡаш», «зифа буй» тибындағы ҡатып ҡалған эпитеттар осрамай тиерлек, бында күберәген аңлатма һәм метафораға яҡын торған күсмә мәғәнәле эпитеттар файҙаланыла: «Ҡаты һүҙҙән тал һына, йомшаҡ һүҙҙән таш ирей», «Ҡолаҡтан кергән һалҡын һүҙ йөрәккә етһә, боҙ була», «Аҡ аҡса ҡара көн өсөн».

Мәҡәлдәрҙәге образ оҫта *сағыштырыу, оҡшатыуҙар* ҡулланыу, тормоштағы хәл-ваҡиға, күренештәрҙең үткер бирелеүе аша йәнләнә. Әйбер, хәл һәм күренештәрҙе башҡа нәмәләр менән сағыштырыу йәки оҡшатыу әйтергә теләгән фекерҙе йәнләндерә, уға мәғәнә нескәлеге өҫтәй. Шуға ла мәҡәлдәрҙә сағыштырыу киң таралған художестволы һүрәтләү сараларының береһе тиергә мөмкин. «Күршенең тауығы ҡаҙҙай, килене ҡыҙҙай», «Ашағанда ат кеүек, эшләгәндә ят кеүек». Йәнәшәлеккә ҡоролған күпселек мәҡәлдәрҙең нигеҙен асылда сағыштырыу, оҡшатыуҙар тәшкил итә: «Етмештәге лә сабый, биштәге лә сабый», «Күлде ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай».

Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен көсәйтеүҙә кире сағыштырыу, ҡаршы яҡтан оҡшатыу, йәки *антитезаның* роле ифрат ҙур: «Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер», «Әҙәм тиһәң – йүне юҡ, эт тиһәң – йөнө юҡ», «Астан ҡаҙан аҫтырма, туҡтан туҡмас баҫтырма».

Поэтик сара булараҡ, *метафора* оҡшатыу, сағыштырыуҙарҙың артабан камиллашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. «Балаһыҙ баш – ярылған таш», «Үҙ илем – алтын бишек» кеүек мәҡәлдәр асылда йәшерен оҡшатыуға ҡоролғандар, һәм уларҙы «Балаһыҙ баш ярылған таш кеүек», «Үҙ илем алтын бишек шикелле» рәүешендә уҡырға булыр ине. Ләкин йыйнаҡлыҡ, юғары художестволылыҡ талабынан сығып, мәҡәлдә «кеүек», «шикелле» рәүешендәге һүҙҙәр төшөрөп ҡалдырыла – һөҙөмтәлә оҡшатыу метафораға күсә.

Ситләтелгән төшөнсәләр, тәбиғәт күренештәрендә кешеләрҙә була торған сифаттарҙы күреү, йәғни *йәнләндереү* алымы мәҡәлдәрҙә шаҡтай йыш осрай: «Ҡыш күҙе ҡараңғы», «Урман – ҡолаҡ, ялан – күҙ», «Етем илаһа, ер-һыу илар», «Ҡара урмандың ҡарыны киң». Һүрәтләү сараһы булараҡ, йәнләндереү алымы ла бик борондан килгән күренеш, уның нигеҙе кешенең анимистик ҡараштарына барып тоташа.

Араларында яҡынлыҡ, бәйләнеш булған ике әйберҙә береһенең исемен әйтеп, икенсеһен аңлау – *метонимия* мәҡәлдәрҙә бик йыш ҡулланыла. «Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә» (көс, ғәйрәт урынына беләк, йөрәк алынған), «Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың (һабан – сәсеү, ырҙын – урып йыйыу ваҡыты), «Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә» (табыш артынан йөрөү менән аяҡ араһында яҡынлыҡ, «аяҡ» – был урында «кеше» мәғәнәһен бирә).

Метонимияның бер төрө булараҡ, мәҡәлдәрҙә *синекдоха* (бергә күсереп алыу, йәки берлек менән күплек араһындағы бәйләнеш) ҙур урын ала. Метонимия ҡулланылған осраҡта берлекте аңлата торған һүҙ аша уның менән бер заттан, бер рәүеш булған күп әйбер һәм төшөнсәләр күҙ алдына баҫтырыла. Мәҫәлән, «Мулла ҡатаһыҙ булмаҫ, бәндә хатаһыҙ булмаҫ», «Ялҡауға көн дә байрам, көн дә туй», «Ауырыу хәлен һау белмәҫ», «Яҡшы атаның балаһы – яҡшы тундың яғаһы» тигән мәҡәлдәрҙән бер генә бәндә, бер генә ялҡау, бер генә ауырыу, бер генә ата балаһы хаҡында әйтелмәгәнлеге яҡшы аңлашыла.

Тыңлаусының хисенә нығыраҡ тәьҫир итеү өсөн шаремик ижадта әйбер, күренеш, төшөнсәләрҙең сифаттарын артыҡ ҡабартыу – *гипербола* ҡулланыу осраҡтары байтаҡ. «Алдаҡсының теле – мең ҡолас», «Бүҙәнәнең ун ике бот майы бар», «Мулланың ҡорһағы – ҡырҡ ҡолас» рәүешендәге мәҡәлдәрҙә гипербола алымынан файҙаланыу ғәжәйеп үҙенсәлекле сатирик образдар тыуҙырыуға ярҙам иткән. Ғөмүмән, сатирик образдар тыуҙырыуҙа гипербола – иң киң ҡулланыла торған художество сараһы, тиергә кәрәк.

Халыҡтың тапҡырлығы, шаянлығы, уның ҡыйыҡ атып – тура тейҙереү, аҫтан көлә белеү (*ирония*) һәләтлегендә лә бик асыҡ сағылған. Кеше йәки берәй нәмә хаҡында тыштан ҡарағанда ыңғай фекер әйтеп, асылда тәнҡит белдереү мәҡәлдәрҙә шаҡтай йыш осрай торған күренеш: «Ҡайғы юҡта ҡайғы булды ҡойномдоң ҡара ҡайғыһы», «Ятыу-тороу байҙарса – өҫтә кейем йоҡараҡ» һ. б.

*Аллегория* ярҙамында мәҡәлдә ситләтелгән фекер, төшөнсә һүрәт, образ менән алыштырыла: «Ат аяғын дағалағанда, баҡа ботон ҡыҫтырыр».

*Мәғәнәләш* һүҙҙәр, йәғни *синонимдар* ҡулланыу мәҡәл айышының төрлө яҡтан асылыуына һәм аныҡланыуына ярҙам итә: «Юҡты бушҡа бушатма», «Кәк(е)рего – бөкөрө».

*Омонимдар* (ауаздаш, ләкин мәғәнәләре төрлө һүҙҙәр) ҡулланыу шулай уҡ мәҡәл һәм әйтемдәргә билдәле стилистик буяу һәм аһәңлек өҫтәй: «Күҙгә боҙға күҙгә ҡалынлығындай булһа ла ышан, яҙғы боҙға яҫтыҡ ҡалынлығындай булһа ла ышанма».

Һирәкләп мәҡәл менән әйтемдәрҙә *яңғыҙлыҡ исемдәр* осрай. Улар ғәҙәттә кешеләр менән булған ниндәйҙер бер ваҡиға, ғибрәтле хәлгә бәйле рәүештә тыуа. Тора-бара хәл-ваҡиғаның үҙе онотола, ә тапҡыр һүҙе халыҡ телендә йәшәүен дауам итә. Мәҫәлән, «Этҡолдоң башы оло, Моратшаның йәше оло», «Сәйем булһа, Сәйфи ағай ҙа, Сәйфи ағай, сәйем булмаһа, көкере лә бөкөрө» (бер ғәрип ҡырлайсы әйткән һүҙ), «Ишәй ише менән, Ишмөхәмәт бисәһе менән».

Афористик репертуарҙағы бер төркөм мәҡәл һәм әйтемдәрҙе *көтөлмәгәнлек эффектына* ҡоролған әҫәрҙәр рәтенә индерергә булыр ине. «Былтыр үлгән ябалаҡ быйыл башын күтәргән», «Арыҫлан, айға менәмен тип, аяғын һындырған» тигән әйтемдәр, мәҫәлән, шундайҙарҙан.

Мәҡәлдәрҙәге һүрәтләү саралары хаҡында һөйләгәндә, йыйып ҡына шуны әйтергә мөмкин. Жанрҙың тәбиғәтенә ярашлы рәүештә төрлө художество алымдары, поэтик тел биҙәктәр мәҡәлдәрҙә бик ҙур оҫталыҡ һәм бик кәрәк урындарҙа ғына ҡулланылалар. Шуға ла мәҡәлдәрҙә бер генә артыҡ һүҙ ҙә, килешмәгән бер генә деталь дә осрамай. Юҡҡа ғына уларҙы «халыҡ ижадының аҫыл ынйылары», «саҡматаштан сыҡҡан алтын осҡондар» тип йөрөтмәйҙәр.

Мәҡәл – ярым шиғри әҫәр. Тыштан ҡарауға шиғырға оҡшамаған бер генә юллыҡ мәҡәлдәрҙә лә шиғри һөйләм өсөн хас булған бик күп сифаттарҙы табырға мөмкин. Мәҫәлән, «Бөлгән илгә бөкрө билле бей килә» тигән мәҡәлде генә тикшереп ҡараһаҡ та, бында быуын-ара асыҡлыҡтарға (дүртенсе ижектән һуң цезура, туғыҙынсы ижектән һуң ҙур булмаған тыныш) һәм ғәжәйеп бай өндәр гармонияһына (б-б-б-б, л-л-л-л, и-и-и, ө-ө-ө-ө, ә-ә-ә) ҡоролған ун ике ижекле үлсәм күренер.

Мәҡәлдәрҙә ритм айырыуса ҙур роль уйнай. Ритм бер осраҡта строфаларҙағы юлдарҙы билдәле тәртиптә быуындарға бүлгеләү һәм шул быуын араларында тыныш яһау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, икенсе осраҡта быуын-ара асыҡлыҡтары (тыныш) менән бергә баҫымһыҙ асыҡ ижектәрҙең тәртипле рәүештә ҡабатланып килеүе нәтижәһендә төҙөлә:

Инһәң – // ил,
Сыҡһаң – // яу;

Йортһоҙ – // йылан,
Ерһеҙ – // шайтан.

Күпселек мәҡәлдәрҙең ритмикаһы быуын-ара асыҡлыҡтар менән асыҡ ижектәрҙең билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килеүҙәре һөҙөмтәһендә ойоша:

Үҙән күрке // тал булыр,
Егет күрке // мал булыр;

Иргә бирһәң // ашыңды,
Ил ҡәҙерләр // башыңды;

Этҡә бирһәң // ашыңды,
Эттәр талар // башыңды.

Асыҡ ижектәрҙе «–», ябыҡтарын «U», цезураны «//», ритмик асыҡ ижекте «+» билдәләре менән белдерһәк, килтергән мәҡәлдәрҙең схемалары былай булыр:

–UU+//U+U
–UU+ U+U

U+UU//+U–
U+UU//+U–
U+UU//+U–
UU–U//+U–

Күренеүенсә, быуын-ара асыҡлыҡтары менән асыҡ ижектәрҙең ойошоуы һәм уларҙың билдәле бер тәртиптә ҡабатланыуы нигеҙендә бик тә камил ритм барлыҡҡа килгән. Шуны ла әйтергә кәрәк: төп ритмик сара булып, быуын-ара асыҡлығы ҡала, ә ҡабатланыусы асыҡ ижектәр мәҡәл ритмикаһына ҡеүәт биреүсе ярҙамсы фактор ролен үтәй.

Мәҡәлдәрҙең художестволылығын билдәләүҙә ижектәр һаны, уларҙың ритмик быуындар араһындағы бүленеше һәм сиратлашыуы шулай уҡ бик ҙур әһәмиәткә эйә.

Афористик репертуарҙа ике ижекле мәҡәлдән алып (мәҫәлән, ир – сир), ун биш-ун алты, хатта ун туғыҙ ижеккә ҡоролған мәҡәлдәрҙе осратырға мөмкин. Айырыуса 7-7, 8-8, 5-5, 8-7, 7-8 үлсәмдәре киң ҡулланыла.

Цезура, ритмик быуындар, әлбиттә – мәҡәл ритмикаһының төп компоненттары, ләкин былар янына әле тағы бик әһәмиәтле шиғри саралар – рифма һәм өндәр гармонияһы килеп ҡушыла. Ниһайәт, шул ритмик сараларҙың берләшеүе арҡаһында мәҡәл үҙенең ҡабатланмаҫ камиллығын ала ла инде.

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә ритмик быуындарҙың музыкаль яңғырашы, рифмалар аһәңлелегенең иң гүзәл үрнәктәре тупланған. Һүҙ сәнғәтенең тапҡыр фекерле, ҡыҫҡа формалы был төрө рифмаларға ифрат та бай. Юл башы рифмаһы ла, эске һәм юл аҙағы рифмалары ла мәҡәлдәрҙә бик киң ҡулланыла:

Һөйҙөргән дә тел,
Көйҙөргән дә тел,
Көлдөргән дә тел;

Ашы юҡ – ураҙа тотҡан,
Эше юҡ – намаҙ уҡыған;

Азамат ирҙең билдәһе –
Аҙ һөйләр ҙә, күп тыңлар.
Арғымаҡ аттың билдәһе –
Аҙ уртлар ҙа, күп юшар.

Мәҡәл һәм әйтемдәрҙә төҙөклөккә, камиллыҡҡа ынтылыу шул тиклем көслө, уларҙа йыш ҡына рифманың бер генә төрөн осратыу ҙа

ҡыйын. Юл башы рифмаһы һәм эске рифма, эске рифма һәм юл аҙағы рифмаһы, юл башы һәм юл аҙағы рифмалары – бындай ҡушылмалар мәҡәлдәр өсөн ғәҙәти бер күренеш, тиергә мөмкин.

Башҡа төрки халыҡтарының мәҡәлдәрендәге кеүек үк, башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә лә редифлы рифмалар ҡулланыу хас. Йәғни мәҡәл строфаларының һәр юлы һуңында бер үк һүҙ ҡабатлана, ә уның алдында килгән һүҙҙәр рифмалаша. Был күренеш алдағы миҫалдарҙа ла асыҡ сағылды, тулылыҡ өсөн йәнә бер нисә миҫал алайыҡ:

Ҡурай тартһаң, көй булыр,
Бүрәнә тартһаң, өй булыр;

Алйотҡа өгөт бирһәң, алдай, тиер,
Аҡыллыға өгөт бирһәң, балдай тиер.

Күренеүенсә, рифма мәҡәлгә музыкаллек, аһәңлелек бирә. Бынан тыш, уның мәғәнәүи әһәмиәте, композицион роле лә бик ҙур. Рифма ярҙамында мәҡәл юлдары зиһенгә еңел һеңерҙәй өлөштәргә бүленә, ритмик быуындарҙың көсө арта. Күпселек осраҡта мәҡәлдең төп мәғәнәүи баҫымы ла ана шул рифмалашҡан һүҙҙәргә төшә.

Рифма төрлөлөгө менән бергә ауаҙлаш өндәр яңғырашы мәҡәлдәргә аһәңлелектең, камиллыҡтың иң юғары дәрәжәһен биргән. Аллитерация (бер төрлө тартынҡы өндәрҙең ҡабатланыуы), ассонанстар (бер иш һуҙынҡы өндәрҙең ауаҙдашлығы) – шулай уҡ мәҡәл поэтикаһының үҙенсәлекле күренештәре. Ҡарағыҙ:

Ҡомһоҙ ҡоторһа, ҡойоға ҡармаҡ һалыр (ҡ-ҡ-ҡ-ҡ);
Алтмыш аҙым алға атла, алты тапҡыр артыңа ҡара (а-а-а-а-а-а-а);
Күршеһенә йәбер иткән – көнкүрешен кәметкән (к-к-к-к-к);
Тик тормаған – туҡ торған (т-т-т-т).

Мәҡәлдәрҙәге строфа төрҙәренә килһәк, жанрҙың тәбиғәтенә ярашлы рәүештә (ҡыҫҡалыҡҡа һәм йәнәшәлеккә ҡоролоу тенденцияһы), иң әүҙем строфа булып йәнәш рифма тәртибендә төҙөлгән ике юллыҡ строфа хәрәкәт итә.

Аҫыл һөйәк ҙур булмаҫ,
Ҡайҙа барһа ла хур булмаҫ;

Асыу килһә, аҡыл китер,
Аҡыл булһа, асыу бөтөр.

Был строфаларҙың схемаһы «аа». «АВ» схемаһында ҡоролған ике юллыҡ мәҡәлдәр ҙә осрай, ләкин улар сағыштырмаса һирәк. Өс юллы строфаларҙа рифмалашыу тәртибе нигеҙҙә «ааа», «ав», «аав» принцибына ҡорола:

| | |
|---|---|
| Атың яман булһа – һатып ҡотолорһоң, | а |
| Юлдашың яман булһа – ҡасып ҡотолорһоң, | а |
| Ҡатының яман булһа – нисек ҡотолорһоң? | а |

Бай байлығын итә: а
Ай һайын ҡатын ала, в
Ауыл һайын йорт һала. в

Ҡыҙ кемгә бармаҫ ине, а
Егет кемде алмаҫ ине, а
Ҡалым малы булмаһа?! в

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре араһында дүрт юллы строфалар ҙа шаҡтай киң таралған. Ҡойоп ҡуйған кеүек төҙөк үлсәмле, тапҡыр һәм тос мәғәнәле былдай мәҡәлдәрҙең күбеһе үҙҙәренең сығышы менән атаҡлы һүҙ оҫталары – ҡобайырсы сәсәндәргә бурыслы.

Киске шаңдаҡ ҡыҙарһа, а
Киленем ул тапҡандай, в
Иртәнге шаңдаҡ ҡыҙарһа, а
Илем яуға сапҡандай; в

Илс типкән – ир булмаҫ, а
Ташлап киткән – ер булмаҫ, а
Көтөү көткән – мал булмаҫ, а
Күңел типкән – йәр булмаҫ; а

Яман ат, яман ҡатын – а
Ирҙе шулар ҡартайтыр, в
Яман бала, яман ҡорал – с
Ирҙе шулар ҡартайтыр; в

Әүәлгенең шатлығы – а
Ахырғының михнәте, в
Әүәлгенең михнәте – в
Ахырғының шатлығы. а

Дүрт юллыҡ строфаларҙа беренсе һәм өсөнсө, икенсе һәм дүртенсе юлдарҙың рифмалашыуы айырыуса актив. Әйтергә кәрәк, йәнәш рифманың был төрө, ғөмүмән, беҙҙең поэзиябыҙҙа ҙур урын алып тора.

Шулай итеп, алда килтерелгән күп һанлы миҫалдар, уларҙы төрлө күҙлектән тикшереү мәҡәлдәрҙең поэтик тәбиғәтле жанр булыуын раҫлай. Строфа, ижектәр һаны, ритм, рифма, ауаздаш өндәр яңғырашы, образлылыҡ – былар бөтәһе лә шиғри әҫәр өсөн хас булған һыҙаттар, һәм уларҙың барыһы ла мәҡәлдәрҙә иң юғары камиллыҡта формалашҡан. Тапҡыр мәғәнәле, ҡыҫҡа, шиғри формалы булғандары өсөн дә мәҡәлдәр халыҡ ижадының башҡа поэтик жанрҙарына ғәжәйеп бер иркенлек менән үтеп инәләр. Бына, мәҫәлән, башҡорт халҡының боронғо «Йәйләүек» тигән йыры. Әйтерһең, ул (ҙур булмаған стилистик үҙгәрештәр менән) махсус рәүештә мәҡәлдәрҙән генә туҡылған.

Ай, тау ғына яҡшы, тау яҡшы,
Тау яғалап үткән юл яҡшы.

Алтын менән көмөш сыҡҡан ерҙән
Тыуған ғына үҫкән ил яҡшы.

Атҡа ғына менһәң, ай, ат яҡшы,
Ергә генә төшһәң, ер яҡшы.
Илкәйенә ингән яуға ҡаршы
Ат ҡушаҡлап сапҡан ир яҡшы.

Ҡарағай ҙа үҫер, ай, йәм өсөн,
Бал ҡорттары осор бал өсөн.
Яман ирҙәр үлер, ай, мал өсөн,
Яҡшы ирҙәр үлер дан өсөн...

Ғөмүмән, әйтелгәндәрҙең бөтәһен дә иҫкә алғанда, В. Г. Белинскийҙың «Поэзия мәҡәлдән башлана» тигән фекере инҡар итеп булмай торған хәҡиҡәт дәрәжәһенә күтәрелә. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре лә, башҡа бик күп халыҡтарҙың мәҡәлдәре шикелле, бик боронғо замандарҙа барлыҡҡа килгән. Уларҙың шиғри формаһы, образдары тиҫтәләгән быуын кешеләренең быуаттар буйына һуҙылған ижад эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә тыуған, үҫкән һәм камиллыҡ алған. Һүҙ сәнғәтенең аҫыл үрнәктәре булған мәҡәл һәм әйтемдәр – быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға күсеп, халҡыбыҙҙың үткән тормошо, ижад ҡеүәһе тураһында хәбәр алып килеүсе йәнле шаһиттар ул.

Кешеләрҙе мәғәнәле итеп йәшәргә, тормоштағы матурлыҡты һәм йәмһеҙлекте белергә, яҡшылыҡты яманлыҡтан, ғәҙеллекте ғәҙелһеҙлектән айыра белергә өйрәтеү, ата-бабаларыбыҙҙың быуаттар һуҙымында тупланған тормош тәжрибәһе менән таныштырыу – бөйөк эш, һәм халыҡ ижадының гәүһәрҙәре булған мәҡәл һәм әйтемдәр был эште ғәмәлгә атҡарыу юлында баһалап бөтөргөһөҙ көс һала.

---

[1] Киекбаев Ж. Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы (уҡыу ҡулланмаһы). – Өфө, 1966. 227-се б.

[2] Açikamali – jrnekli. Deyimler ve atasuzleri sozlugu / Hazirlayan Vakyr Kavas. – Istambul, 1991; Kurtulus Цztopçu. Uygur atasuzleri ve deyimleri. – Istambul, 1992; Крылатая мудрость. Азербайджанские пословицы и поговорки / Сост. Абдул-Касым Гусейнзаде. – Баку, 1965.

[3] Чувашские пословицы, поговорки и загадки / Сост. Н. Р. Романов. – Чебоксары, 1960.

[4] Пословицы и поговорки марийского народа / Сост. С. Ибатов. Йошкар-Ола, 1953.

[5] Емельянов Н. Я. Якутские пословицы и поговорки. – Якутск, 1962.

[6] Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге / Төҙ. Ким Әхмәтйәнов. – Өфө, 1965. 241-се б.

[7] Ғабдулла Амантай. Һайланма әҫәрҙәр. – Өфө, 1960. 144-се б.; Ғәбитов Х. Халыҡ поэзияһы тураһында // Башҡорт аймағы, 1925, №1.

[8] Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре / Төҙ. Кирәй Мәргән. – Өфө, 1960, 17-се б.

[9] Шунда уҡ. 256-сы б.

[10] Кирәй Мәргән. Халыҡ күңелендәге ынйылар // Мәңгелек шишмә. – Өфө, 1978. 150–156-сы б.

[11] Башҡорт халыҡ ижады: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы – Фәнүзә Нәҙершина. – Өфө, 1980. 419–434-се б.

[12] Paroimia (грек һүҙе) – ҡыҫҡа, тапҡыр итеп әйтелгән айырым фекерҙәр.

[13] Кашғари М. Девону луғотит турк. Т. I. – Тошкент, 1960, Т. 2. Т. 3, 1963. Төрлө биттәрҙән үзбәк теленән хәҙерге башҡорт теле транскрипцияһына күсереп бирелде.

[14] Тимошенко И. Е. Литературные первоисточники и прототипы трехсот русских пословиц и поговорок. – Киев, 1897. С. 7–8, 17, 34–35, 42.

[15] Горький М. Собр. соч. в 30 т. Т. 27. С. 442.

[16] Паремиологический сборник. Пословица. Загадка (Структура, смысл, текст) / Сост., ред. и предисл. Г. Л. Пермякова. – М.: Наука, 1978. С. 33.

[17] Үрҙә телгә алынған хеҙмәт, 237-се б.

[18] Миҫалдарҙы махсус йыйынтыҡтарҙан ҡарағыҙ: Башҡортса-русса мәҡәлдәр һүҙлеге / Төҙ. Илһам Ғарипов; яуаплы ред. һәм инеш һүҙ авторы Фәнүзә Нәҙершина. – Өфө,1994; Башҡортса-инглизсә-русса мәғәнәләш мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге / Автор-төҙ. Фәнүзә Нәҙершина, Элла Зөбәйерова (Созинова). Өфө. 2003.

[19] Ковалевский А. П. Книга Ахмеда-Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921–922 г. – Харьков, 1956. С. 131.

[20] Мингажетдинов М. Мотив чудесного рождения героя в башкирских богатырских сказках // Эпические жанры устного народного творчества. – Уфа, 1969. С. 66.

[21] Был турала ҡарағыҙ: Нәҙершина Ф. Халыҡ хәтере. –Өфө, 1986. 99–100-се б.

[22] Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы – Фәнүзә Нәҙершина. – Өфө, 1997. 115-се б.

[23] Батманов И. А. Язык енисейских памятников древнетюркской письменности. – Фрунзе, 1959. С. 64.

[24] Кузеев Р. Г. Очерки исторической этнографии башкир. Ч. 1. – Уфа, 1957. С. 48–54.

[25] Очерки по истории Башкирской АССР. Т. I, ч. I. – Уфа, 1956. С. 26–27.

[26] Кузеев Р. Г. Очерки... С. 59–60.

[27] Бау – бында нәҫел мәғәнәһендә.

[28] Дөйөм алғанда, материалды төркөмләү мәсьәләһендә фәндә төрлө ҡараштар бар. Уҙған быуаттың икенсе яртыһында, мәҫәлән, паремик жанрҙарға ҡараған текстарҙы уларҙың структур-семиотик асылынан сығып төркөмләү ысулы ҡайһы бер Рәсәй ғалимдары (Г. Л. Пермяков, Ю. И. Левин) һәм сит ил тикшеренеүселәре (Н. Барли, А. Дандис, А. Крикманн...) тарафынан ярайһы уҡ киң яҡтыртылды. Г. Л. Пермяков тәҡдим иткән классификацияға ярашлы барлыҡ халыҡтарҙың мәҡәл һәм әйтемдәре 150 тематик төркөмдә (улар эсендә күп һанлы тематик төркөмсәләр) урынлаштырыла ала. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре (тәржемәһеҙ бирәм): *Активный – Пассивный, Акция – Реакция, Безопасность – Опасность, Близкий – Дальний, Богатый – Бедный, Боязнь (дела) – Дело, Верно – Неверно, Верх – Низ* һ.б., һ.б. Пермяков Г. Л. Пословицы и поговорки народов Востока. М.: Наука, 1979. С. 625–635. Математика һәм лингвистика фәндәре алымдарына таянып эшләнгән бындай төркөмләүҙең фольклор жанрҙары ерлегенә күсерелеүен ҡайһы бер ғалимдарҙың (В. П. Аникин, Г. Д. Сидоркина) хаҡлы раҫлауынса, бик үк уңышлы күренеш тип атап булмай, әлбиттә. Бигерәк тә киң ҡатлам уҡыусыларына тәғәйенләнгән йыйынтыҡтар өсөн ул унайлы түгел.



# МӘҠӘЛДӘР ҺӘМ ӘЙТЕМДӘР

## I. ХЕҘМӘТ

### 1. Хеҙмәт, һөнәр, уңғанлыҡ, ялҡаулыҡ

* Ағас емеше менән, кеше эше менән.

* Ағасты япраҡ биҙәй,
Кешене хеҙмәт биҙәй.

* Аҙ һөйлә, күп эшлә.

* Аҙығыңды алыҫ ҡуй, ҡаҙығыңды ҡулбуй(ы).

* Айға үрелгән – нурға күмелгән.

* Айран бешеп, май төшмәй,
Сүбәк сәйнәп, май сыҡмай.

*Вариант:* Һыу бешеү менән май сыҡмай.
Һағыҙ сәйнәп, май сыҡмай.

* Айыу йоҡоһон йоҡлама,
Айыу йоҡоһо айҙа ла бөтмәй.

* Аҡрын барған аттан уҙған,
Йүгереп барған тайҙан ҡалған.

* Аҡрын барһаң, алыҫ китерһең.

* Аҡсаң бөткәнгә ҡайғырма, эшең бөткәнгә ҡайғыр.

* Аҡыллы ир шул булыр:

Ҡулындағын алдырмаҫ;
Кеше һайын туҡталып,
Юҡ һүҙ тыңлап ҡаңғырмаҫ;
Барынан да бере шул:
Бөгөнгө эшен таңға ҡалдырмаҫ.

* Алғыр кеше алымынан,
Йылғыр кеше аҙымынан билдәле.

* Алда булһа ҙур теләк,
Эштән ял таба йөрәк.

* Алдан аяғын кейенгән – алға сыҡҡан.

* Алдын аяғына ҡарап юрғанын һуҙыр,
Ялҡау юрғанына ҡарап аяғын һуҙыр.

* Алдынғылыҡ – тәхеткә,
Иремтәлек – ләхеткә.

* Алдың-артың уйлап эш ит.

* Алдын бер уйла, артын биш уйла.

* Алдыңа килгән ашты йота бел.

* Алйоттоң эше булмаҫ,
Ялҡауҙың ашы булмаҫ.

* Алтмыш аҙым алға атла,
Алты тапҡыр артыңа ҡара.

* Алтын бөртөкләп йыйыла.

* Алтын ҡәҙерен көмөшсө белер.

* Алтын утта һыналыр,
Әҙәм эштә һыналыр.

* Алтынды ҡоя белмәгән иретер,
Тирене иләй белмәгән серетер.

* Арбам һынды тип, күстән* ҡалма,
Башым ауырта тип, эштән ҡалма.

* Арбаны ат тартыр, күләгәне эт тартыр.

* Арғымаҡтың билгеһе – ҡаҙылыҡ йыймаҫ, ял йыйыр.

* Арҡауын атһаң, буйын алырһың.

* Артҡа ҡалһаң, тапалырһың.

* Арыҫлан ҡойроғон тоттормаҫ,
Унған ирҙәр һис кемдән оттормаҫ.

* Ат тешенән билгеле,
Егет эшенән билгеле.

* Аттың үҙе ниндәй, йөгө шундай.

* Ата алмаған атынан күрер,
Ҡайта килеп, ҡатынынан күрер.

* Ата алмаған мылтығынан күрер.

* Ата алмаған йәйәһенән күрер.

*Вариант:* Ата алмаған йәйә һайлар.

* Ата алмағандың уғы алты ҡолас китер.

* Атаң ҡуйған атың менән аталырһың,
Хеҙмәтеңә ҡарай маҡталырһың.

* Атаһыҙ тороп була – балтаһыҙ тороп булмай,
Инәһеҙ тороп була – энәһеҙ тороп булмай.

* Ауан* кеше ауыҙы менән ҡош тотор.

* Ауыҙыңа кергәндә сәйнәргә иренмә.

* Ауыр йөктө ат тарта,
Ауыр эште ир тарта.

* Ауыр күтәргән – билен һындырған.

* Ауыр таш – тау аҫтында,
Ауыр эш – бауыр аҫтында.

* Ауыр эшкә беләк бар,
Ҡыйыу эшкә йөрәк бар.

* Ауыр эште күмәк ҡул еңгән.

* Ауырыу бер үлер,
Иренсәк көн дә үлер.

* Ауырыуға дауа бар, дәртһеҙгә дауа юҡ.

* Ахырызаман булғанда йүнһеҙ кеше йүнлегә эш өйрәтер.

* Ашаған белмәй, тураған белә.

* Ашаған аш табыр, эшләгән эш табыр.

* Ашағанда аҙ яҡшы, эшләгәндә күп яҡшы.

*Вариант:* Ашағанда икәү яҡшы,
Эшләгәндә өсәү яҡшы.

* Ашағанда ҡолағың һелкенһен,
Эшләгәндә йөрәгең елкенһен.

* Ашағанда телһеҙ бул,
  Эшләгәндә өнһөҙ бул.

* Ашамай тамаҡ туймай,
  Эшләмәй ризыҡ булмай.

* Аштан ҡалһаң да, эштән ҡалма.

* Ашы юҡ ураҙа тотҡан,
  Эше юҡ ас ултырған.

* Ашын яратһаң, эшен дә ярат.

* Ашына күрә табағы, эшенә күрә тамағы.

* Ашыҡҡан арба аҡрын тәгәрәй.

* Ашыҡҡан арыр, аҡрын барыр.

* Ашыҡҡан эштә хәйер юҡ.

* Ашыҡҡан һыу диңгеҙгә етмәҫ.

* Ашыҡһаң да, ҡабаланма.

* Аяғың тәп итмәй, ауыҙың сәп итмәй.

* Бейә эштә йөрөп тирләһә,
  Ҡолон бушҡа йөрөп тирләй.

* Бала көлкөгә туймаҫ,
  Ялҡау йоҡоға туймаҫ.

* Балаһыҙҙың малы хәрәм,
  Эшлекһеҙҙең йәне хәрәм.

* Балта оҫтаһы балтаһынан билгеле.

* Балта сапҡансы, түмәр ял итә.

* Балта һабы беләктән башлана, үткерлеге – йөрәктән.

* Балтаң булмаһа, урманға барма.

* Балтасының өйө терәүле.

* Балыҡ тотһаң, башынан тот.

* Балыҡты йөҙөргә, үгеҙҙе һөҙөргә өйрәтмәйҙәр.

* Бармағына ышанған – ҡашыҡһыҙ ҡалған.

* Бармағыңа аң килһә, һөнәреңә дан килер.

* Бармаҡ йөрөт – аң эйҙер,
  Бәке йөрөт – ҡан кейҙер.

* Бармаҡ тоя белмәһә, ҡул ҡоя белмәй.

* Батыр көсө менән, егет эше менән.
* Батырға ла ял кәрәк.
* Баш барҙа бүрексе бөтмәҫ,
Аяҡ барҙа итексе бөтмәҫ.
* Башлаған эш – бөткән эш.

*Вариант:* Башланған эш эшләнә.
* Башлаған эшеңде тамамла.
* Башланған эштең бөткәне яҡшы.
* Башлаусыһы булһа, ҡеүәтләүсеһе табылыр.
* Башлы кеше ташты аш итер.
* Башта уйла, унан эшлә.
* Башы нисек – ахыры шулай[1].
* Башың йәш икән – күп эш алма.
* Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың.
* Белгән белгәнен эшләр,
Белмәгән беләген тешләр.
* Белгән – юлда, белмәгән – түрҙә.
* Белмәгән белер, белгәндән көлөр.
* Белмәгән эшкә ҡатышма.
* Белмәгән эштән шайтан көлгән.
* Белмәгәндең беләге тыныс, белгәндең ике ҡулына ла көс.
* Белмәгәндең беләге тыныс,
Белгәндең йөрәге тыныс.
* Бер имгәнһәң, бер кинәнерһең.
* Бер кирегә китһә, гел кирегә китер.
* Бер көн артта ҡалһаң, биш көн йүгерерһең.
* Бер ҡул менән төйөн бәйләнмәй.
* Бер тырышлыҡ унлата ҡайта.
* Бер эшен ташлаған, икенсеһен ташлаған –
Береһен дә ослап сыға алмаған.
* Бер эшкә бәйләнгәс, билеңде бушатма.
* Бер эшлә, берәгәйле эшлә.

*Вариант:* Биште эшләгәнсе, берҙе еренә еткереп эшлә.

* Бер юлы ике кәмәнең ҡойроғон тотоп булмай.
* Бикәр* эш битһеҙ булыр.
* Бил бөкмәйенсә белен бешмәй.
* Билдәһеҙ эштә тәүәккәллек ҡотҡара.
* Биш мәртәбә уйла, бер мәртәбә эшлә.
* Боҙға быҙаулама.
* Боландың мөгөҙө,
  Сәсәндең һүҙе,
  Филдең теше,
  Оҫтаның эше ҡиммәт.
* Бөгөнгө эшеңде иртәгәгә ҡалдырма.
* Буй эшләмәй, ҡул эшләй,
  Эштә ҡулың күп булһын.
* Буйына ҡарама, ҡулына ҡара.
* Булған кешенең күрәге лә утын киҫер.
* Булдыҡлы булмағанды булдырыр.
* Булдыҡлы эшкә тотонһа,
  Ташыңды ла аш итер,
  Булдыҡһыҙ эшкә тотонһа,
  Ашыңды ла таш итер.
* Булдыҡһыҙ балтанан күрер.
* Булдыҡһыҙҙан һөнәр сыҡмаҫ.
* Булдыҡһыҙҙың ҡоралы насар.
* Булмаҫтай алтмышҡа етһә лә булмаҫ.
* Булмаҫтайға һүҙ әрәм.
* Булмаҫтайҙан булмаҫ:
  Ул да тыумаҫ, ҡыҙ ҙа тыумаҫ,
  Тыуһа ла – тормаҫ.
* Булмаҫ эште телгә алма.
* Булыр-булмаҫ кеше ат үлтерер.
* Булыр ир алты йәшендә башмын, тир,
  Булмаҫ ир алтмыш йәшендә йәшмен, тир.
* «Булыр» тигән – булдырған.
* Булырҙайҙың – йөҙөнән,
  Булмаҫтайҙың – һүҙенән (билгеле).

* Булырҙайҙың – ҡулынан,
  Булмаҫтайҙың – уйынан (билгеле).
* Бушҡа йөрөгәнсе, бушҡа эшлә.
* Бушты бушҡа бушатма.
* Бүрене аяғы туйҙыра.
* Бүренең көсө тешендә,
  Кешенең көсө эшендә.
* Вайымһыҙҙың эше алымһыҙ.
* Ваҡ эште лә эре итеп башҡар.
* Ваҡытлы эш ваҡытында яҡшы.
* Ваҡытһыҙ эшләнгән эш эшләнмәгәнгә иҫәп.
* Ғәйрәт иткән тау ярыр.
* Дан хеҙмәттә яулана.
* Дандың төбө – хөрмәт, хөрмәт төбө – хеҙмәт.
* Донъя бөтөр, эш бөтмәҫ.
* Донъя эшен әхирәткә ҡалдырма.
* Донъяла кеше эшләй алмаған эш юҡ.
* Донъяла ни татлы – йән һөйгән хеҙмәт татлы.
* Донъяның эше бөтмәҫ.
* Дәрт биргәнгә дарман бирер.
* Дәрт – дарья, дарман – донъя.
* Дәрт иткән эшләр.
* Дәртең булмаһа, дарманың булмай.
* Дәртле дарманын табыр.
* Дәртһеҙ егет йоҡосан булыр.
* Дәртһеҙ кешенән эш сыҡмаҫ.

  *Вариант:* Дәртһеҙҙән дәрт сыҡмаҫ.
* Дәртһеҙгә дан юҡ.
* Дәртһеҙгә дауа юҡ.
* Ҙур эште әкренләп эшлә.
* Егет булһаң, йоҡлап ятма.
* Егет кеше яуҙа көс менән алдырһа,
  Яланда эш менән алдыра.

* Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.
* Егеттең төҫөн әйтмә, эшен әйт.
* Егәрле уңыр, ялҡау туңыр.
* Егәрленең ҡулы ете.

*Вариант:* Егәрленең ҡулы уртаҡ.
* Елкәң иҫән булһа, ҡамыт табыла.
* Еләк берәмләп йыйыла.
* Еңел эш ҡөҙрәт менән эшләнер.
* Етеҙ үҙен бөтөрөр,
  Әкрен эшен бөтөрөр.
* Етешкән – ете елән кейгән.
* Етмеш ергә ҡул һуҙма.
* Иген келәттә, кеше хеҙмәттә күренә.
* Изге ниәт менән башланған эштең ахыры хәйерле булыр.
* Изге эштең иртәгеһе яҡшы.
* Изге эштә ашығыу хәйерле.
* Ижтиһад иткән моратына еткән.
* Ике ҡуяндың ҡойроғон тотоп булмай.
* Ике кәмә ҡойроғона йәбешһәң, береһен дә тота алмаҫһың.
* Ике уйла, бер эшлә.
* Илһамлы хеҙмәт – илгә ҡеүәт.
* Иләк менән һыу ташымайҙар.
* Иләмәй көн булмаҫ,
  Тиреһеҙ тун булмаҫ.
* Иң элек уйла, унан эшлә.
* Ир аҫылы эштә беленә.
* Ир ғәйрәте тауҙы ҡом итә.
* Ир ҡоралы – ҡамсылыр, ҡулда барҙа ҡәҙере юҡ.
* Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр.
* Ир һөнәре эш булыр.

*Вариант:* Ирҙең һүҙе эш булыр.
* Иренгән ике үлгән.
* Иренгән ике эшләр, артынан бармағын тешләр.

* Иренгән эш һөймәҫ.
* Иренгәндең иренен эт ялаған.
* Иренмәгән иртәгәге эшен бөгөн бөтөргән.
* Иренмәгәндең ирене ашлы, иркәнең күҙе йәшле.
* Иренмәгәндең эше сифатлы.
* Иренмәһәң, оҫта булырһың.
* Иренсәк донъянан ҡоро ҡалыр.
* Иренсәк иркә булыр.
* Иренсәккә эш ярамаҫ.
* Иренсәкте илсе итһәң, илеңә яу килтерер.
* Иренсәктең ирене кибер.
* Иренсәктең табышы юҡ.
* Иренсәктең эше ике.
* Иренсәктә дәрт булмаҫ.
* Иренһәң – ауырырһың,
  Тырышһаң – һауығырһың.
* Иренһәң – иренеңә теймәҫ.
* Оялһаң, һүҙең кем әйтер?
* Иртә барһаң – ит бешә,
  Һуңға ҡалһаң – бит бешә.
* Иртә торған ас ҡалмаҫ.
* Иртә торған бай булған,
  Һуңлап торған хур булған.
* Иртә торған егеттең ырыҫы артыҡ,
  Иртә торған ҡатындың өлөшө артыҡ.
* Иртә торған ир уңыр.
* Иртә торған үкенмәҫ.
* Иртә торғандың ғүмере оҙон.
* Иртә торғандың ырыҫы артыр.
* Иртә тормаған иртәнге ризыҡтан ҡалған.
* Иртә торһаң – уңырһың,
  Кискә ҡалһаң – туңырһың.
* Иртәгә ҡалған эшең – һынып төшкән тешең.
* «Иртәгә» тигән иренгән, бөгөндән ҡалған бөлгән.

* «Иртәгә» тигән уй менән бөгөн тамаҡ туймай.

* Иртәгәге эшеңде бөгөн уйлап ҡуй.

* Иртәгеһен ишәк ҡайғыртҡан.

* Иртәнге эш ырымлы була.

* Иҫәп кәрәк, уй кәрәк,
Уйлап эшләгән – һирәк.

* Иҫәрҙе яҡлама, ялҡауҙы маҡтама.

* Иҫәрҙең ише булмаҫ,
Ялҡауҙың эше булмаҫ.

*Вариант:* Иҫәрҙең иҫе булмаҫ,
Ялҡауҙың эше булмаҫ.

* Итексенең беҙе юҡ.

* Итексенең итеге булмаҫ,
Балтасының ишеге булмаҫ.

* Итексенең итеге тишек,
Балтасының балтаһы китек.

* Ишектән кереп, төнлөктән сыҡма.

* Ишәк тиреһе ябынһаң да, арыҫлан эшен эшлә.

* Йоҙағын эшләгән аҫҡысын да эшләр.

* Йоҡлаған йоҡо тапҡан,
Йоҡламаған йылҡы тапҡан.

* Йоҡлаған көлкө алыр,
Йоҡламаған төлкө алыр.

* Йоҡлаған ҡалыр, уяу донъяны алыр.

* Йоҡлағанға йоҡмаған.

* Йоҡлағанға өлөш юҡ.

* Йоҡлағандың өҫтөнә ҡар яуыр.

* Йоҡо тамаҡ туйҙырмай.

* Йоҡо ялҡауҙы ярата.

* Йоҡосан егеткә дәрт булмаҫ.

* Йоҡосоға аш юҡ.

* Йоҡоһо оҙондоң бәхете ҡыҫҡа.

* Йомоҡ күҙеңә көн төшөрмә.

* Йөк ауырын нар* күтәрер.

* Йөрәк тынмай беләк тынмай.
* Йөрәгендә барҙың беләгендә бар.
* Йүгергәндән бурҙайҙың табаны туҙмай.
* Йүгерек атҡа ял теймәй.
* Йүгереп тота алмаған атлап тота алмай.
* Йүгәнһеҙ тороп булһа, һөнәрһеҙ тороп булмай.
* Йүне барҙың көнө бар.
* Йүнһеҙ итеген майлар, итеге итәген майлар.
* Йүнһеҙ итексе беҙен ғәйепләр.
* Йүнһеҙ килеп, йүнлегә эш өйрәтер.
* Йүнһеҙ менән ағас ҡырҡма – өҫтөңә ауҙарыр.
* Йүнһеҙ менән көнөң уртаҡ булмаһын.
* Йүнһеҙ әҙәм булғансы, юҡҡа сыҡҡан булһаңсы!
* Йүнһеҙҙе эшкә ҡуш, артынан үҙең төш.
* Йыбанмаған оҫта булған,
  Оялмаған күрәҙә булған.
* Йылдам атҡа ҡамсы кәрәкмәй.
* Йә эшең үлһен, йә үҙең үл.
* Йәй эшләмәһәң, ҡыш ашарға тапмаҫһың.
* Мәйең рәтле булһа, сәйең шәрбәтле булыр.
* Йәмһеҙҙең көҙгөһө насар,
  Булдыҡһыҙҙың ҡоралы насар.
* Йән биргәнгә йүн биргән.
* Йән ҡыйналмай эш бөтмәҫ.
* Йәне барҙың йүне бар.
* Йәнен аямаған яу алыр,
  Малын аямаған дау алыр.
* Йәнт* итмәгән – тапмаған.
* Йәһәтләһәң – ит бешә,
  Һуңға ҡалһаң – бит бешә.
* Йәштәр килһә эш башлай,
  Ҡарттар килһә һүҙ башлай.
* Кейеҙ ҡалыны беләккә төшә.
* Кем өлгөр – шул алғыр.

* Кем эшләмәй, шул ашамай.
* Кемдең эш көнө күп, шуның ҡулы мул.
* Кеше икмәгенә ауыҙыңды асма, үҙең тап.
* Кеше нәҫеле менән оло булмаҫ, һөнәре менән оло булыр.
* Кеше эше менән маҡтанма.
* Кеше эше – ярты эш, үҙ эшең – бөтөн эш.
* Кеше эштә һыналыр.

*Вариант:* Кешене эштә һына.

* Кешегә ҡул бәхете бирмәһен, баш бәхете бирһен.
* Кешене кейеменә ҡарап баһалама, эшенә ҡарап баһала.
* Кешене белгең килһә, бер һүҙенә ҡара, бер эшенә ҡара.
* Кешенең ниндәйлеге төҫтә түгел, эштә.
* Кешенең төҫ матурлығы матур түгел, эш матурлығы матур.
* Кешенең эше ғүмергә бөтмәҫ.

*Вариант:* Кеше үлгәндә лә: «Өс көнлөк эшем ҡалды», тип әйтер, ти.

* Китәр ҡыҙҙың киткәне яҡшы,
  Бөтәр эштең бөткәне яҡшы.
* Көндөҙ йоҡлаған ир уңмаҫ.
* Көн күрмәҫ көндөҙ йоҡлар, кис торор.
* Көрәге булһа, сүбе табылыр.

*Вариант:* Көрәк бөтмәһә – тиҙәк бөтмәҫ.

* Көс һабантуйҙа беленер,
  Эш өмәлә беленер.
* Көслө – көсөн, һөнәрле эшен күрһәтер.
* Көсө етмәгән ҙур күтәрер.
* Көсөң барҙа эшлә, тешең барҙа тешлә[2].
* Көсөң барҙа эшеңде ҡара,
  Көсөң киткәс, эшең һине ҡарар.
* Көсөң етмәгәнгә көсәнмә.
* Көсөң менән маҡтанма, эшең менән маҡтан.
* Көсөңә күрә көсән.
* Көсһөҙ көрәк һындырыр.

* Көткәнгә көн үтмәй,
Эшләгәнгә көн етмәй.

* Күҙ – ҡурҡаҡ, ҡул – батыр.

* Күкрәк кереп эшләһәң, килер ереӊ киӊ булыр.

* Күмәк ҡулға эш түҙмәй.

* Күмәк эш – ирмәк эш.

* Күнеккән ҡулда һөнәр бар.

* Күнсе күнде күндерер.

* Күӊел биреп эшләгән эш өлгө булыр,
Күӊел бирмәй эшләгән эш көлкө булыр.

* Күӊел етһә, ҡеүәт етә.

* Күӊел – ҡурҡаҡ, ҡул – батыр:
Эшләһәң, эш ҡарышмай.

* Күӊелсәк күӊеле менән көн күрә,
Иренсәк нимәһе менән көн күрә?

* Күп бәрәкәт күп хәрәкәт менән.

* Күп йоҡлаған атын алдырыр.

* Күп өргән эт тешләмәҫ,
Күп ҡысҡырған эшләмәҫ.

* Күп һөйләгән – аҙ эшләгән.

* Күп һуҡҡан сүкеш тиҙ тоҙорая.

* Күпкә китһә, сүпкә китә.

* Күптеӊ эше күӊелле.

* Күрексенеӊ туны юҡ.

* Күренгәндеӊ алыҫы юҡ,
Күтәргәндеӊ ауыры юҡ.

* Күтәрә белмәгән күп күтәрер.

* Көрәк бәләкәй булһа ла тирәкте йыға.

* Ҡабалан эшкә аҡыл эйәрмәй.

* Ҡабаланған ҡабырғаһын һындырған.

* Ҡабат эшләнгән эш һабаҡ булыр.

* Ҡаҙынған ҡарға ҡар аҫтынан ҡалъя тапҡан,
Ҡаҙынмаған – ҡар өҫтөндә ҡатып ятҡан.

* Ҡайҙа барһаң – бер ҡояш,
Эш эшләүҙә тиң һайлаш.

* Ҡалбырҙың* эше ялбыр.

* Ҡалған эш – төштән кире.

* Ҡалған эшкә ҡар яуа.

*Вариант:* Бер ҡалған эш ҡырҡ йылға ҡалыр.

* Ҡамыш һыуҙан туймаҫ,
Тырыш эштән туймаҫ.

* Ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайната бел.

* Ҡар өҫтөндә ҡарға тиҙәге лә табылмай (эшеңде ваҡытында эшлә).

* Ҡарағайға ҡарап тал үҫер,
Хеҙмәтеңә ҡарап дан үҫер.

* Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә.

* Ҡарама йәшенә, ҡара эшенә.

* Ҡарама кешенең һүҙенә, ҡара эшенә.

* Ҡарама тешенә, ҡара эшенә.

* Ҡарының менән ҡар яр,
Мороноң менән моҙ* яр.

* Ҡатын уңғаны иргә яраған,
Ир уңғаны илгә яраған.

* Ҡол кеүек эшләһәң, хан кеүек йәшәрһең.

* Ҡомдан арҡан ишеп, күлде күлгә аҫып булмай.

* Ҡомһоҙ ҡоторһа, ҡоҙоҡҡа ҡармаҡ һалыр,
Ялҡау ҡоторһа, байрамда эшкә барыр.

* Ҡорал әмәлһеҙ булмай,
Әмәл ғәмәлһеҙ булмай.

* Ҡорал юҡта ҡороҡ та ҡорал.

* Ҡораллының ҡулы уйнай.

* Ҡоралһыҙ оҫта булмаҫ,
Теҙгенһеҙ нуҡта булмаҫ.

* Ҡоралы үтмәҫтең эше бөтмәҫ, тапҡаны тамағына етмәҫ.

* Ҡоро ҡулға ҡорал яу.

* Ҡоштоң матурлығы – төҫөнә ҡарап,
Кешенең матурлығы – эшенә ҡарап.

* Ҡулалмашта ҡул талмаҫ, эшләгәндән ҡул ҡалмаҫ.
* Ҡулайымламай* ҡул яҙылмай.
* Ҡулалды ат төптән тартыр,
  Ҡулалды әйбер ҡулбуй(ы) ятыр.
* Ҡул ҡайҙа – ауыҙ шунда[3].
* Ҡул ҡарышмаһа, эш ҡарышмай.
* Ҡул һелтәй, балта саба.
* Ҡул эшләһә, ауыҙ тик тормаҫ.

  *Варианттары:* Ҡул эшләһә, ауыҙ ҙа тешләй.
  Ҡулың уйнаһа, ауыҙың уйнар.
* Ҡулда ҡорал – ярты эш, эшләһәң – бөтөн эш.
* Ҡуллана белмәһәң, ҡоралға үпкәләмә.
* Ҡулы белгән бал ашар.
* Ҡулың етмәгәнгә үрелмә.
* Ҡулы ҡыймылдағандың ауыҙы ҡыймылдар.
* Ҡулың күтәрә алмаған суҡмарҙы биленә таҡма.
* Ҡулың оҫта булһын,
  Һүҙең ҡыҫҡа булһын.
* Ҡулыңда эшең булһа, эсең бошорға ваҡытың булмаҫ.
* Ҡулыңдан килмәгән эшкә тотонма.
* Ҡулыңдан килмәһә, телеңдән килһен.
* Ҡулыңдан элек башың уйлаһын.
* Ҡулыңдан эш китһә,
  Ауыҙыңдан аш китә.
* Ҡурай тартһаң – көй була,
  Бүрәнә тартһаң – өй була.
* Ҡурҡҡан эш хәйерле була.
* Ҡыймылдаған ҡыл ярыр.
* Ҡыйын эшкә – ҡыйыу юҡ.
* Ҡыйынлығын күрмәй, ҡоймаҡ та ашап булмай.
* Ҡыйынлыҡты еңгән рәхәт күргән,
  Еңәлмәгән гүргә кергән.
* Ҡырмыҫҡанан ғибәрәт ал:
  Йәйҙән ҡышты ҡаршылай.
* Ҡыҫыр ҡатындан бала таптырма[4].

* Май сүлмәге тышынан билгеле,
Булыр кеше эшенән билгеле.

* Майлы ҡулың менән тотма, һөйәкле ҡулың менән тот[5].

* Маңлайы тирләмәгәндең ҡаҙаны ҡайнамай.

* Матурлыҡ туйҙа кәрәк,
Уңғанлыҡ көн дә кәрәк.

* Мейес башында ятып, ҡалас бешмәҫ.

* Мыштыр кеше иртә лә – мыштыр, кис тә – мыштыр.

* Мәйетте күп йыуһаң, тороп ултыра[6].

* Наҙан кеше һуҡырҙан яман,
Ялҡау кеше – барынан да яман.

* Ниәт ғәмәлдән артыҡ.

* Ниәт – ярты ғәмәл.

* Нәҫ* баҫҡанды бет баҫа.

* Оло тулҡын күренгәс тә, ишкәкте ҡулыңдан ташлама.

* Оло эштең ояты юҡ.

* Оҫта – донъя тотҡаһы.

* Оҫта ҡоралынан билгеле.

* Оҫта үлһә, ҡулы ҡалыр.

* Оҫтаның ҡулы башҡа.

* Оҫтаның сүкеше – мең алтын.

* Оҫтаһына күрә ҡоралы.

* Өйрәнгән эш ерҙә ятып ҡалмаҫ.

* Өйрәнеү – бер һөнәр.

* Өйрәнмәйенсә хеҙмәт юҡ,
Хеҙмәт итмәй – хөрмәт юҡ.

* Өйрәтә белһәң, ишәк тә һөнәргә өйрәнә.

* Өлгөргән эш өлгөлө.

* Өҫтөңә ҡояш сығарма[7].

* «Өф» иткәнсе артта ҡалһаң, «уф» иткәнсе ҡыуырһың.

* Планһыҙ эш – тоҙһоҙ аш.

* Планһыҙ эш ырамһыҙ.

* Сабып барған юлда ҡалыр.

* Сабыр эшен бөтөрөр,
Ҡауҙыр* үҙен бөтөрөр.
* Сапҡан аттың башына һуҡма.
* Сапҡан уҙыр, ятҡан ҡалыр.
* Себеште көҙ һанайҙар.
* Сулаҡ суҡмар күтәрер.
* Сүлмәксе ярыҡ сүлмәктән һыу эсә.
* Сүп баҫҡан ер боҙолор,
Йоҡо баҫҡан ир боҙолор.
* Сәйнәп биргәнде йота бел.
* Сәйнәп ҡаптырғанды көтмә.
* Сәмле эш йәмле.
* Сәсән барҙа телең тый,
Оҫта барҙа ҡулың тый.
* Сәсәндең теле уртаҡ,
Сибәрҙең йөҙө уртаҡ,
Оҫтаның ҡулы уртаҡ.
* Табаҡ күрке аш менән,
Ирҙең күрке эш менән.

*Вариант:* ...Ирҙең күрке ҡаш менән.
* Талпынған тауға менер.
* Талымлыға аш килешмәҫ,
Ялҡауға эш килешмәҫ.
* Тапҡандан йүнләгән артыҡ.
* Тауҙай талабың менән бергә күбәләй эшең күренһен.
* Тауҙың күрке таш менән,
Табаҡ күрке аш менән.
* Тауыҡ менән ят, әтәс менән тор[8].
* Тегеүсенең төймәһе булмаҫ.
* Тегеүсенең туны юҡ.
* Тел менән тирмән тарттырып, онло булып булмай.
* Телең менән һөйләгәнсе, ҡулың менән эшләп күрһәт.
* Тел һөйләй, ҡул эшләй.
* Телеңдән килгән ҡулыңдан килһен.
* Телең һөйләһен, ҡулың эшләһен.

* Телеңде бәйләп ҡуй ҙа, ҡулыңды эшкә ҡуш.

* Телеңә таянма, көсөңә таян,
Көсөңә таянма, эшеңә таян.

* Теләк булһа, беләк ҡарышмай.

* Тере ялҡауҙан мәйет артыҡ.

* Тернәкле* әҙәм түрәне ҡол итер.

* Тернәксел кеше ат тиҙәген дә алтын итер.

* Тешең барҙа ашап ҡал,
Көсөң барҙа эшләп ҡал.

* Тешләүенә ҡарама, эшләүенә ҡара.

* Тик йөрөгәндән Тәңре биҙер.

* Тик торған тиктән үлгән.

* Тик торған – отторған,
Тик тормаған – туҡ торған.

* Тиктормаҫ йә теленән табыр, йә ҡулынан табыр.

* Тиктормаҫта бәлә бар.

* Тик ултырған тиле булған.

* Тик ятҡан ятып ҡалыр,
Тик ятмаған атып ҡалыр.

* Тик ятҡандың ҡабырғаһына көс.

* Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.

* Тимерсе бысаҡҡа йәлсемәҫ.

* Тиң – тиңе менән,
Йүнле эш – йүне менән.

* Тирең кипмәһә, байлығың китмәҫ.

* Тирләп эшләһәң, тәмләп ашарһың.

* Тишек йортҡа тамсы тамыр,
Иренгән атҡа ҡамсы яуыр.

* Тота белгән – арба менән ҡуян тотҡан.

* Төнгө эштән көндөҙгө эш көлгән.

*Вариант:* Киске эш таңға көлкө.

* Төндө көнгә ауҙарма.

* Төҫ менән түгел, эш менән.

* Туйғансы аша, тирләгәнсе эшлә.

* Туккән көсөң буш булмаç,
Эшләгән күңел хуш булмаç.

* Тыйнаҡтың ҡулы эшләр,
Тыйнаҡһыҙҙың теле эшләр.

* Тынмаған тауыҡтың тамағы туймай.

* Тырыш таш тишер.

* Тырыш тәкә һуйғанда, байғош йүкә һуйған.

* Тырыш эшкә һырышыр,
Ялҡау ашҡа һырышыр.

* Тырышҡан кеше ас ҡалмаç.

* Тырышҡан – моратына ирешкән.

* Тырышҡан моратына етер,
Тырышмағандың абруйы китер.

* Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр.

* Тырышҡан табыр, эшләгән ҡабыр.

* Тырышҡан тамсы ташты тишкән.

* Тырышҡан эшләр, тырышмаған нишләр?

* Тырышҡан ярпайған, иренгән янтайған.

* Тырышҡанға дәүләт бар.

* Тырышҡандың даны сыға,
Иренгәндең йәне сыға.

* Тырышлыҡ – ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ – хурлыҡ.

* Тырыштан тир кипмәç,
Ялҡауҙан сир китмәç.

* Тырыштың юлы таштан ауыр.

* Тырышыу бушҡа китмәç.

* Тәңре эше – фарман менән,
Бәндәнеке – дарман менән.

* Тәртә араһына бер кергәс, «тарта алмайым» тип торма.

* Тәүге ҡоймаҡ ҡомлораҡ.

* Тәүге эш – әүеш тә мәүеш.

* Тәүәккәл булмаған – ғүмер буйы уңмаған.

* Тәүәккәлләгән таш йотҡан.

* Тәүәккәл таш ярыр,
Булдыҡһыҙ баш ярыр.

* Тәүәккәлләлә – бил бәйлә*.

* Уйламайынса башлама,
Башланыңмы – ташлама.

* Уйламайынса ҡылған эштән аяғүрә күргән төш яҡшы.

* Уйламайынса эшләмә.

* Уйламай эшләгән, ауырымай үлгән.

* Уйлы уйлап торғансы, тәүәккәл эшен бөтөрөр.

* Улай итмәй былай булмай[9].

* Ултырған урыныңдан утын киҫмә.

*Вариант:* Ултырған урыныңдан ут күҙәмә.

* Уңған арыуҙы белмәҫ,
Бөгөнгө эшен иртәгәгә ҡалдырмаҫ.

* Уңған бер үлер, ялҡау мең үлер.

* Уңған кеше баҫҡан ерендә ут сығара.

* Уңған кеше ҡылды ҡырҡҡа ярыр.

* Уңған кеше өсөн көндә ураҡ өҫтө.

* Уңған кеше шул булыр – уянғас та аяҡта.

* Уңған кеше эш ырата,
Уңмағаны төш юрата.

* Уңған ҡулда бәрәкәт.

* Уңған ҡулда ут уйнай.

*Вариант:* Уңған кеше ут бейетә.

* Уңған тырышып эшләр,
Ялҡау бармағын тешләр[10].

* Уңған юлда туҙан тотмаҫ, ялҡау ҡулына эш тапмаҫ.

* Уңғандың аты уңға киткән.

* Уңғандың эше ырар.

* Уңғандың яланын ҡар баҫыр,
Уңмағандың аранын ҡар баҫыр.

* Уңмағанды ҡыума.

* Уңмағандың уғы ҡыйыҡ китер.

*Вариант:* Уңмаҫтың уғын ел борор.

* Ут янмай төтөн булмаç,
Ярты эш бөтөн булмаç.
* Утынды ярыусынан яҡтыр,
Атты егеүсенән ектер.
* Үҙ көсөн белмәгән бәләгә ҡалыр.
* Үҙ ризығыңды үҙең тап.
* Үҙ эшеңде үҙең бел.
* Үҙе эш белмәгән кешене өйрәтергә оçта булыр.
* Үҙең матур булмаһаң да, эшең матур булһын.
* Үҙеңдән олоға кәңәш итмәйенсә эш башлама.
* Үткен ҡылыс ҡынға көс,
Үтмәç бысаҡ йәнгә көс.
* Үтә башһыҙ булһаң, башһыҙ ҡалырһың,
Үтә булдыҡһыҙ булһаң, ашһыҙ ҡалырһың.
* Форманң менән маҡтанма,
Норманң менән маҡтан.
* Хаҡына күрә – эше,
Тырмаһына күрә – теше.
* Хеҙмәт төбө – хазина.
* Хеҙмәт – тормош йәүһәре.
* Хеҙмәт эйәһе – хөрмәт эйәһе.
* Хеҙмәте ҡаты – емеше татлы.
* Хеҙмәте юҡтың хөрмәте юҡ.
* Хеҙмәтенә күрә хөрмәте.

*Вариант:* Хеҙмәт төбө – хөрмәт.
* Хеҙмәтең ҡаты булһа,
Йотҡаның татлы булыр.
* Хеҙмәттең тире әсе, емеше татлы.
* Хеҙмәтһеҙ тапҡан мал иçәпһеҙ китә.
* Хикмәтле эш – михнәтле эш.
* Хөрмәт һөйһәң, хеҙмәт һөй.
* Хәлеңдән килмәгәнгә көсәнмә.
* Хәрәкәттә – бәрәкәт.
* Хәрәкәт юҡта бәрәкәт юҡ.
* Хәстәрлерең башы таçтарлы.

* Һапһыҙ балта – ҡаҙан ҡырғысы.

*Вариант:* Һапһыҙ балта сабырға ярамаҫ.

* Һигеҙ көн ғүмергә туғыҙ көн тырышлыҡ кәрәк.
* Һин ялҡауға эш өйрәтһәң,
Ул һиңә аҡыл өйрәтер.
* Һөйләргә ашыҡма, эшләргә ашыҡ.
* Һөнәр алды – аҡыл.
* Һөнәр ашарға һорамай.
* Һөнәр – ирҙең ҡанаты.
* Һөнәр тамағына һорамай, ҡулға йәбешеп тормай.
* Һөнәр – һөнәрле ҡулында ғына һөнәр,
Һөнәрһеҙ ҡулында – түмәр.
* Һөнәр эйәһе бай булмаһа ла, мохтажлы булмай.
* Һөнәрҙең артығы юҡ.
* Һөнәре бар ғәрип тә үлмәй.
* Һөнәре барҙың ҡәҙере бар.
* Һөнәре бар күккә осор, һөнәре юҡ ерҙә лә йөрөй алмаҫ.
* Һөнәре бар ҡом өҫтөндә кәмә йөрөтөр.
* Һөнәре бар мал таба.
* Һөнәре бар һыуҙа йөҙә.
* Һөнәрле булыу гәүһәрле булыуҙан мең артыҡ.
* Һөнәрле ир үргә оса,
Һөнәрһеҙ ир гүргә оса.
* Һөнәрле кеше – ҡоралы кеше.
* Һөнәрле ҡул ас булмаҫ.
* Һөнәрле ҡулда бәрәкәт бар.
* Һөнәрле үлмәҫ,
Һөнәрһеҙ көн күрмәҫ.
* Һөнәрлегә үлем юҡ.
* Һөнәрлenең ҡулы алтын.
* Һөнәрлененң ҡулы алтын,
Аҡыллының аҡылы алтын.
* Һөнәрһеҙ ир – аяҡлы сир.
* Һөнәрһеҙ ир – ҡанатһыҙ ҡош.

* Һөнәрһеҙ тырышты күрә алмаҫ,
Эшләп оҙаҡ түҙә алмаҫ.

* Һөнәрһеҙ һүнер.

* Һөнәрһеҙгә донъя тар.

* Һөнәрһеҙҙе иш итмә.

* Һөнәрһеҙҙән йыраҡ ҡас.

* Һуҡмаҫ һуйыл күтәргән.

*Вариант:* Һуға алмаған ҙур күтәрер,

* Һүҙ күп ерҙә аш аҙ булыр.

* Һүҙ кәрәкмәй, эш кәрәк.

* Һүҙ менән түгел, эш менән күрһәт.

* Һүҙ һөймәгән тирмән ҡорған.

* Һүҙең менән эшең бер булһын.

* Һыйыр һөтө менән, кеше эше менән.

* Һыналмайҙар төҫ менән, һыналалар эш менән.

* Һыуға барһаң, иртә бар:
Һуңға ҡалһаң болғаныр.

* Һыуға инмәй йөҙөргә өйрәнеп булмай.

* Һыуыҡ менән көрәшкән ҡолаҡһыҙ ҡалған,
Бармағына ышанған ҡалаҡһыҙ ҡалған.

* Һәнәге ҡыйбат түгел, йәпләгәс ҡыйбатлана.

* Һәүәҫкәр һөнәр арттырыр.

* Һәләтлене һәнәк тотоуынан күреп була.

* Һәләтһеҙ һәнәк һындырыр,
Көсһөҙ көрәк һындырыр.

* Һәр бер эш п(ы)лан менән,
Ат һуҡалай ыҙан менән.

* Һәр бер эштең ваҡыты бар.

* Һәр бер эштең яйы бар, бутҡаның да майы бар.

* Шәп аҡкан йылға тиҙ ҡорор.

* Шәп аша ла, шәп эшлә.

* Ылдым-йылдым иткән ике туйыр,
Иң-һынын тартҡан тик торор.

* Ысынлап илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сығыр.

* Эҙләгән ҡорт бал табыр,
Эшләгән кеше мал табыр.
* Энә менән ҡойо ҡаҙып булмай.
* Энә сәнсә, еп йыя.
* Энә текмәй, ҡул тегә.
* Энә эшенә өмә кәрәкмәй.
* Эш айыу түгел, урманға ҡасмаҫ.
* Эш араһында шеш булма.
* Эш араһында эш бөтә.
* Эш батыры – ил батыры.
* Эш башында маҡтанма.
* Эш белмәгән эш өҫтөндә үлгән.
* Эш белмәйенсә, аҡыл белмәҫһең.
* Эш beləктә түгел, йөрәктә.
* Эш бөтмәй йән тынмай.
* Эш иплене ярата.
* Эш кемдеке – беләк шунығы.
* Эш кешене кеше итер.
* Эш ҡаты булһа ла, тырышҡас, йомшай.
* Эш ҡиммәт түгел,
Эште белеү ҡиммәт.
* Эш майлы бутҡа түгел.
* Эш менән үткән ғүмер – алтын ғүмер.
* Эш оҫтаһынан ҡурҡа.
* Эш тормоштоң йәме.
* Эш туҡмағы – аш.
* Эш уңғанды ярата.
* Эш үҙе өйрәтә.
* Эш һөйгән үкенмәҫ.
* Эш һөйгән һөйөнгән.
* Эш һөйгәнде ил һөйгән.

* Эш һөйгәндең дәрәжәһе артыр,
Эшһеҙлек боҙоҡлоҡҡа тартыр.

* Эш һөймәгән көн итмәç (күрмәç).

* Эш һөймәçте ил һөймәç.

* Эш эшкә өйрәтә.

* Эш эшләгән интекмәç,
Эшләмәгән көн итмәç.

* Эш, эшләнгәс – ирмәк,
Бөтмәй ҡалһа – имгәк.

* Эш эште тартыр.

* Эш яратҡан – уңған,
Яратмаған – туңған.

* Эше аҙҙың ашы ла аҙ.

* Эше бар кешелә мең кешенең эше бар,
Эше юҡ кешелә кемдең ни эше бар?

* Эше бар тик тормаç,
Эшләмәгән көн күрмәç.

* Эше барҙың ашы бар,
Эше юҡтың ашы юҡ.

* Эше барҙың көсө бар.

* Эше ҡаты – икмәге татлы.

* Эше юҡтың ашы юҡ,
Туны юҡтың көнө юҡ.

* Эше юҡтың ҡәҙере юҡ,
Ҡәҙере юҡтың ҡәбере юҡ.

* Эшенә күрә ашы.

* Эшенә күрә ялы.

* Эшең бер булһын, берәгәйле булһын.

* Эшең булһа йөҙ, туҡлыҡлы килер көҙ.

* Эшең кире китһә, эше алға барғанға кәңәш ит.

* Эшең ҡалһа иртәгә,
Сиҡан сығыр елкәңә.

* Эшең ҡаты булһа, тешеңә йомшаҡ булыр.

* Эшең теүәл булмаһа, кешегә күрһәтмә.

* Эшең рәтле булһа, сәйең шәрбәтле була.

* Эшеңде башлар алдынан аҙағын уйла.
* Эшеңде кешегә тапшырма.
* Эшеңде эш иткәс кенә маҡтан.
* Эшеңдә талма,
Кешенән артта ҡалма.
* Эшкә ауырҙың теле оҙон.
* Эшкә теләк булһа, беләк сыҙар.
* Эшкә ялҡау (бала) һабаҡҡа аңҡау булыр.
* Эшле кеше – көслө кеше.
* Эшле килер – эш арттырыр,
Эшһеҙ килер – һүҙ арттырыр.
* Эшле эш өҫтөндә,
Әрәмтамаҡ әҙәм өҫтөндә.
* Эшле эштән бушағансы, ялҡау түргә уҙған.
* Эшле янына эшһеҙ көсләнгән.
* Эшлегә көн етмәй,
Эшһеҙгә көн үтмәй.
* Эшленең ҡулы тынмаҫ,
Телсәндең теле тынмаҫ.
* Эшлекле миҫалға ҡарар,
Эшлекһеҙ мыҫҡалға ҡарар.
* Эшлекле норма өсөн йөрөр,
Эшлекһеҙ форма өсөн йөрөр.
* Эшлеклене иген баҫыр,
Эшлекһеҙҙе йоҡо баҫыр.
* Эшлекленең ҡулы уйнай.
* Эшлекленең эше бөтөр,
Эшлекһеҙҙең көнө үтер.
* Эшлекһеҙ аҡыл һатыр.
* Эшлекһеҙгә аш хәрәм.
* Эшлекһеҙгә эш бирһәң, ғариза килтерер.
* Эшлә тырышып-тырмашып,
Ятма йоҡлап, тырнашып.
* Эшләгән алыр, йоҡлаған ҡалыр.
* Эшләгән ашаған, эшләмәгән ҡаҡшаған.

* Эшләгән ашар, эшләмәгәндең хәле насар.
* Эшләгән башҡа таяҡ теймәй.
* Эшләгән бер яңылыша,
Эшләмәгән гел яңылыша.
* Эшләгән ике туйыр.
* Эшләгән иресер, теш төбөнә килешер.
* Эшләгән кеше туҡ булыр,
Эшләмәгән юҡ булыр.
* Эшләгән кеше үлмәҫ,
Эшләмәгән көн күрмәҫ.
* Эшләгән моратына етер,
Эшләмәгәндең ғүмере бушҡа үтер.
* Эшләгән тапҡан, ауыҙына ҡапҡан.
* Эшләгән – тешләгән,
Эшләмәгән – нишләгән?
* Эшләгән туңмаҫ, эшләмәгән уңмаҫ.
* Эшләгән – туҡ булған,
Эшләмәгән – юҡ булған.
* Эшләгән – уҙыр, эшләмәгән туҙыр.
* Эшләгән үлмәҫ, эшләмәгән көн күрмәҫ.
* Эшләгән эш – иргә ҡот.
* Эшләгән эшләй, эшләмәгән терһәген тешләй.
* Эшләгәнгә эш түҙмәҫ.
* Эшләгәндең ҡулынан билгеле.
* Эшләгәндә йөрәгең елкенһен,
Ашағанда ҡолағың һелкенһен!
* Эшләгәндән кеше үлмәй.
* Эшләй белгән ашай ҙа белер.
* Эшләмәгән кешенән күкәй һалған тауыҡ яҡшы.
* Эшләмәгән көн итмәҫ.
* Эшләмәгән эштән шайтан көлгән.
* Эшләмәй ашаһаң, сирләмәй үлерһең.
* Эшләмәй тамаҡ туймай.
* Эшләмәйенсә ашап булмай,
Ашамаһаң, йәшәп булмай.

* Эшләмәйенсә байып булмай.

* Эшләмәйенсә уңыш бүлмә.

* Эшләмәһәң план менән, ашарһың грамм менән.

* Эшләмәһәң эш көнө,
Ни ашарһың ҡыш көнө?

* Эшләнгән эш – иргә ҡот,
Яҡшы эшләнһә – илгә ҡот.

* Эшләп үлмәҫһең, ауырып үлерһең.

* Эшләргә иренгән – ашарға тилмергән.

* Эшләргә иренгән – көлөр ерҙә көрһөнгән.

* Эшләүе ауыр булһа, ашауы еңел.

* Эшләһәң, эш көс бирә.

* Эшләһәң, эш ҡарышмай.

*Вариант:* Эшләһәң, эш ҡарыу итмәй.

* Эшсе эшенән билгеле.

* Эшсән бәхетте эшендә күрер,
Ялҡау бәхетте төшөндә күрер.

* Эшсән бәхетте эштән эҙләр,
Ялҡау бәхетте ситтән эҙләр.

* Эшсән кеше эшһеҙ тормаҫ,
Иренгән кеше көн күрмәҫ.

* Эшсән ханаһы* туп-тулы,
Ялҡау ханаһы буп-буш.

* Эште башла: башлаусыһы булһа, ҡушылыусыһы табылыр.

* Эште башлаған кешене маҡтама,
Эшләп бөтөргән кешене маҡта.

* Эште башлап ташлағансы, башламауың яҡшы.

* Эште башлама, башлаһаң – ташлама.

* Эште башлап ебәреү генә ҡыйын.

* Эште үҙең белеп эшлә, кеше ҡушҡанды көтмә.

* Эште эшләгән кеше өҫтөнә өйәләр.

* Эште эшләйһең икән, еренә еткереп эшлә.

* Эштең башы – ҡорал.

* Эштең башы михнәтле булһа, төбө хикмәтле була.
* Эштең башы – ниәт.
* Эштең башы – эштең яртыһы.
* Эштең башында маҡтанма, аҙағында маҡтан.
* Эштең иң яҡшыһы – үҙең булдыра алған эш.
* Эштең ояты юҡ.
* Эштең өҫтөнән осоп булмай.
* Эштең тәме аҙағында.
* Эштең әүәленән алда ахырын уйла.
* Эштең яйы булмаһа,
  Ҡоймаҡтың майы булмай.
* Эштә биленде бушатма.
* Эштә һүҙгә мауыҡма.
* Эштән көлмә – көлкө булырһың.
* Эштән ҡалғандың кеше икмәгенә күнә ҡалған.
* Эшһеҙ ғүмер – утһыҙ күмер.
* Эшһеҙ кеше – башһыҙ ҡаҙау.
* Эшһеҙ кеше – көсһөҙ кеше.
* Эшһеҙгә аш юҡ.
* Эшһеҙҙең ашы тәмһеҙ, үҙе ғәмһеҙ.
* Эшһеҙлек эс бошорор.
* Эшһеҙлек – ярлылыҡтың аҫҡысы.
* Әҙәмдең яҡшыһы эштә беленер.
* Әйткәндән телең ҡалмаҫ,
  Эшләгәндән ҡулың ҡалмаҫ.
* Әйтмәһен кеше, әйтеп торһон эше.
* Әкрен барған ҡалыр,
  Йүгереп барған алыр.
* Әкрен барһаң, етерһең,
  Шәп барһаң, бөтөрһөң.
* Әкрен эшен бөтөрөр,
  Ҡыҙыу тешен бөтөрөр.
* Әсе тир менән тәмле аш табыла.

* Юрғаның тире кипмәҫ.
* Юртаҡ аттың тояғы ике.
* Яйлы эш – майлы эш.
* Яҡшы ат тәртә араһында үлә.
* Яҡшы атҡа ял юҡ.
* Яҡшы кеше эш яратыр, яман кеше эш ҡыйратыр.
* Яҡшы эш үҙ-үҙен маҡтай.
* Яҡшы юртаҡ – күпкә уртаҡ[11].
* Ял – ат түгел, ялы юҡ,
  Ял итмәһәң – яйы юҡ.
* Ял – ҡәберҙә[12].
* Ялҡау аҙ эшләй, аҙ эшләһә лә күп тешләй.
* Ялҡау аҡрын барһа ла, ярлылыҡтың артынан тиҙ етер.
* Ялҡау аҡылға шәп була.
* Ялҡау атты ял баҫыр.
* Ялҡау ашҡа килер, уңған эшкә килер.
* Ялҡау булма – ялҡаулыҡ баҫыр.
* Ялҡау кеше йөрөшөнән билгеле.
* Ялҡау кеше иҫәпкә бар, һанға юҡ.
* Ялҡау кеше аш янында ат кеүек, эш янында ят кеүек.
* Ялҡау кеше – яланғас.
* Ялҡау кеше – ярты кеше, уңған кеше – ун кеше.
* Ялҡау, өйөнә еткәс, йүгерер.
* Ялҡау өмә әйтер, тамаҡһау өмәгә йөрөр.
* Ялҡау торһа, йән тынмаҫ.
* Ялҡау ятып эшләй, ултырып йоҡлай.
* Ялҡау урынын йыймаҫ.
* Ялҡау үгеҙ ит бирә, ялҡау кеше ни бирә?
* Ялҡау үлмәҫ, рәхәт көн күрмәҫ.
* Ялҡау ялдан туймаҫ, уңған эштән туймаҫ.
* Ялҡау ялҡауға эйәрер.
* Ялҡау ята белмәҫ, ятһа, тора белмәҫ.

*Вариант:* Ялҡау кисен ята(а)лмай,
Иртән тора(а)лмай.

* Ялҡау ятҡан ерҙән кеше өйрәтер.
* Ялҡау ятып бойора.
* Ялҡау ятып ашар.
* Ялҡау ятыр ерҙең яйлыһын һайлар.
* Ялҡау ятыр, йоҡо тирмәне тартыр.
* Ялҡауға йомош ҡушһаң, ул һиңә аҡыл өйрәтер.
* Ялҡауға көн дә байрам,
Кеше май ашағанда, ул эсә айран.
* Ялҡауға көндә байрам, көндә туй.
* Ялҡауға көндә ял.
* Ялҡауға ҡояш та ваҡытында сыҡмай.
* Ялҡауға ҡәбер хәрәм.
* Ялҡауға үгеҙ үлһә – ит, арба ватылһа – утын.
* Ялҡауға эш ҡушһаң, атаң бирмәгән өгөттө бирер.
* Ялҡауға эш ҡушһаң, башы ауырта.
* Ялҡауға эш табылмаҫ.
* Ялҡауға эш ярамаҫ.
* Ялҡауға – ял, егәрлегә – бал.
* Ялҡауға ярты көн эш, ярты көн ял.
* Ялҡауҙан эш ояла.
* Ялҡауҙы ҡандала баҫыр.
* Ялҡауҙы ашҡа саҡырһаң саҡыр, эшкә саҡырма.
* Ялҡауҙы яланда күрмәҫһең.
* Ялҡауҙың аты ла аҙымһыҙ булыр.
* Ялҡауҙың башы ҡау, үҙенә яу.
* Ялҡауҙың – бешкән дә төшкән.
* Ялҡауҙың дуҫы – йоҡо.
* Ялҡауҙың йылы утыҙ йылда бер килә.
* Ялҡауҙың көн дә башы ауырта.
* Ялҡауҙың эше тарҡау.
* Ялҡауҙың ялы – аҙнаһына биш көн.

* Ялҡауланһаң – ауырырһың,
Тырышһаң – һауығырһың.

* Ялҡаулығыңды юҡ итһәң, тамағыңды туҡ итерһең.

* Ялҡаулыҡ башҡа бәлә килтерер.

* Ялҡаулыҡ – зәхмәт, дарыуы – хәрәкәт.

* Ялҡаулыҡ яҡтыға илтмәç.

* Ялҡаулыҡтың дарыуы – эш.

* Ямандың эше ярты юлда ҡалыр.

* Яңғыҙҙың эше бөтмәç.

* «Ярар», тигән эш ярты була.

* Ярҙа ултырып йөҙөргә өйрәнмәйҙәр.

* Яраткан эш ялыҡтырмай.

* Ярлылыҡ ғәйеп түгел, ялҡаулыҡ ғәйеп.

* Ярлылыҡҡа дарыу юҡ, ялҡаулыҡ менән ҡушылһа.

* Ярты көнгә ярыш юҡ.

* Ярты эш йөҙгә оят.

* Ярыҡ ҡайҙа – ел шунда,
Ялҡау ҡайҙа – тел шунда.

* Ята-ята таш та сатнай.

* Яткан аяҡ ял табыр,
Йөрөгән аяҡ мал табыр.

* Ятып, икмәк табылмай.

* Ятып ҡалғансы, атып ҡал.

* Ятһаң, ята бирәһең, торһаң, бара бирәһең.

* * *

* Ағай – оло, мин – ҙур, атҡа бесән кем һалыр?

* Айҙы күккә сығара.

* Айыуҙы ла бейергә өйрәтәләр.

* Алма, беш, ауыҙыма төш.

* Амин, амин – аман төбө,
Әбейҙәргә – ҡаба төбө,
Ирҙәргә – һуҡа башы,
Ҡатындарға – кеçәү башы[13].

* Арба менән ҡуян ҡыуған.

* Арҡыры ятҡан ағасты буй һалмаç.

* «Ауырып торам» тимә, «иренеп торам» тиң.

* Ата алмаған «уғым кәкре булды», – тигән.

* Ат кеүек эшләй, эт кеүек тешләй.

* Ат эшләгәнгә эт әлһерәгән.

* Аш тигәндә – йән фарман, эш тигәндә – юҡ дарман.

* Аш янында ат кеүек, эш янында эт 'кеүек.

*Вариант:* Аш янында бүре кеүек, эш янында шүре кеүек.

* Ашамаған ашым түгел, эшләмәгән эшем түгел.

* Ашау татлы – эшләү ҡаты.

* Аяғөçтө йоҡлаған.

* Балта-көрәк – бары ла кәрәк.

* Балта һабын тотам тигәнсе, балтаһын һыуға төшөргән.

* Баçҡан ерҙән ут сығара.

* Баш бармаҡ: «Бөгәм дә бөгәм»,
Күрһәткес: «Сүгәм дә сүгәм»,
Урта бармаҡ: «Сигәм дә сигәм»,
Исемһеҙе: «Тегәм дә тегәм»,
Бәпес бармаҡ: «Арағыҙҙа тик бер үҙем интегәм», – тип әйтер, ти[14].

* Белгәнгә – яңылыш, белмәгәнгә – нағыш.

* Бер атып, ике тейҙерә.

* Бер аяғын күтәргәнсе, икенсеһен эт ашаған.

* Бер көндөң ни арыһы, ни биреһе[15].

* Бер тәртәгә егелгәс, тартмай хәлең юҡ.

* Бер эшсегә ун башсы.

* Бисмилла тигәнсе, ҡор үлеп бара[16].

* Бишек бауы билеңдә,
Имсәк һөтө иреңеңдә[17].

* Былтырғыны ҡар баçҡан[18].

* Бәндәнең үлгәндән һуң да өс көнлөк эше ҡалыр, ти.

* Дәрт бар – дарман юҡ.

* Елгә еленләгән, көнгә ҡолонлаған[19].

*Вариант:* Елгә еленләгән,
Боҙға быҙаулаған.

* Еңгәм сәнсә, мин тартам,
Мин дә нағыш һырыйым!

* Ике ҡулыңа бер эш – ал да кереш.

*Вариант:* Ике ҡулға бер эш.

* Ике күлдәкте бер иткән, бер күлдәкте юҡ иткән.

* Иләктәген – күнәккә, күнәктәген – иләккә.

* Иртәгә лә көн бөтмәҫ.

* Иртәгә мунсаға барам тип, бөгөн битен йыумаған.

* Иҫәпкә бар, һанға юҡ.

* Йоҡо бесәйгә генә моң.

* Йондоҙ һанап, аттан ҡалған.

* Йүнһеҙҙең үҙе ни ҙә, һүҙе ни!

* Йәнең тынһа, ҡулың тынмай,
Ҡулың тынһа, йәнең тынмай.

* Кем ни теләй, шуны эшләй.

* Кеше көшөлөн осора, үҙенекен ел алмай.

* Көн бар, төн бар – ашығып, ни эш бар?

* Көн итмәҫ кәфенен һатып ашаған.

* Көн уҙһын, сабата туҙһын.

* Кәмәсе килгәндә ҡайыҡсы ҡаса.

* Ҡағыҙ яҙыла, эш һуҙыла.

* Ҡағын-һөртөн дә, тағы эшкә тотон.

* Ҡаҙансының ирке бар, ҡайҙан ҡолаҡ сығарһа.

* Ҡалала эш һөймәҫ, ауылда кәбән өймәҫ.

* Ҡапҡам төбөнә туй еткән,
Ҡаба орсоғом ҡайҙа икән?

*Вариант:* Ҡапҡа ауыҙына ҡоҙа килһә –
Ҡабам менән орсоғом.

* Ҡара урмандан үтеп, ҡамсы һаплыҡ ағас таба алмаған.

* Ҡарыны менән ҡар яра.

* Ҡулы берҙе эшләй, теле икенсене һөйләй.

* Ҡулы эшләй, теле йыуа.

* Ҡуян алмаҫ, ҡулынан килмәҫ.

*Вариант:* Ҡырылмаһа ҡырҡ эше.

* Мейес яҡҡан, үҙеятҡан.

* Мейес башынан юл һалған.

* Минең бойороғом менән,
Суртандың ҡойроғо менән[20].

* Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе.

* Нормаһына формаһы.

* Сифаты юҡ та, һаны бар, норма тигән даны бар.

* Тегеүсе боҙа, үтек төҙәтә.

* Тейҙерә алмағандың уғы кәкре.

* Телгә килһә – осонған,
Эшкә килһә – ҡысынған.

* Теле оҫта, ҡулы ҡыҫҡа[21].

* Тик торған да юҡ,
Эш ҡырған да юҡ.

* Тик торғансы, тун сабыуыңды ыуа тор[22].

* Тик ятырға үлгәс тә өлгөрөрһөң.

* Тимерселә бысаҡ – бер ҡосаҡ.

* Тинтәк башым һау ҡалһа, тик ятҡаным ҡулайлы[23].

* Тишек ҡапсыҡты ямай[24].

* Төлкө ҡыуҙым – тотторманы,
Ҡуян ҡыуҙым – еткермәне.

* Туй үткәс, дөмбөрөнә.

*Вариант:* Туй үткәс, думбыра ҡаҡмайҙар.

* Туң тимер оҫтаһы.

* Уйнауын уйна, эшеңде лә уйла.

* Урманға утын ташыған.

* Үгеҙ – үгеҙгә, үгеҙ – мөгөҙгә.

* Үҙ өйөндә ыштан киҫмәгән,
Кеше өйөндә сәкмән бескән.

*Вариант:* Үҙ өйөндә һалма һалмаған, кешегә барып туҡмас киҫә.

* Үҙе ятып йоҡлаған, һике башы ҡортлаған.

* Үрмәксенән күрмәксе.

* Һин дә мулла, мин дә мулла –
Атҡа бесән кем һала?

*Вариант:* Һин дә ҡунаҡ, мин дә ҡунаҡ –
Атҡа бесән кем һала?

* Һин дә түрә, мин дә түрә –
Талдан ситән кем үрә?

* Һин дә түрә, мин дә түрә –
Мәшәкәтен кем күрә?

* Һинән хәрәкәт, минән бәрәкәт.

* Һәр ҡулымда йөҙ бармаҡ, йөҙө лә беҙ бармаҡ[25].

* Энә осо хәтле ут, тубал ҙурлығы төтөн.

* Эт ҡышҡа керһә: «Йәй көнө һөйәктән һарай һалыр инем», – тип әйтә, ти.

* Эше лә юҡ, ашы ла юҡ.

* Эш тә ҡырмай, тик тә тормай.

* Эше ирекхән.

* Эшең бөттө, ҡоҙағый.

* Эшкә булһа – «алла, башым»,
Ашҡа булһа – «ҡайҙа ҡашығым?»

* Эшкә булһа – «уф, табаным!»
Ашҡа булһа – «килтер табағым!»

* Эш бәхете бирмәһен,
Баш бәхете бирһен.

* Эшкә саҡырһаң – бармам,
Ашҡа саҡырһаң – ҡалмам.

* Эшләй ҙә тешләй.

* Эшләмәгән эшем юҡ, «рәхмәт» тигән кеше юҡ.

* Эшләһәң, эсең тишмәҫ.

* Әбей белен бешерә,
Бабай ҡабыҡ төшөрә.

* Әҙергә бәҙер Гөлбәҙер.

* Ялҡау кәркешен урағансы, ҡараңғы төн таң атҡан.

* Ялҡау өйҙә, бүрке сөйҙә.

* Ялҡау әйткән: «Бөгөн ял итәйем дә, иртәгә ныҡлап эшләрмен»,
Тырыш әйткән: «Бөгөн тырышып эшләйем дә, иртәгә ял итермен».

* Ялҡауға ишекте яп, тигәс,
Ел сыҡҡас, ябыр әле, ти икән.

* Янғын сыҡҡас, ҡойо ҡаҙа башлаған.

* Яуға барған – йәйәһен онотҡан.

## 2. Һунарсылыҡ, малсылыҡ, игенселек һ.б. хеҙмәт төрҙәре

* Аҙыҡлы ат арымаç, аҙыҡһыҙ ат бармаç.

* Аҙыҡлы ат арымаç, дағалы ат таймаç.

* Айғыр ҡалдырһаң, йүнлеһен ҡалдыр,
Ҡусҡар ҡалдырһаң, йөнлөһөн ҡалдыр.

* Айһыҙ атың маҡтама.

* Айыу алыр егетте атынан таныры мын,
Бүре алыр егетте бүркенән танырмын.

* Айыуға барһаң, ағаң менән бар.

* Аҡса туҙа, мал уҙа.

* Аҡсалының эше күп,
Баҡсалының ашы күп.

* Аҡһаҡ булһа ла үҙ атың булһын.

* Алама атҡа менгәнсе, йүгер кеше күргәнсе.

* Аламаны атҡа һанама.

* Алтмыш ҡолон ат булмаç.

* Алты көн утын киçмәһәң,
Алты ай туҡылдарһың.

* Алтын эйәр атҡа тейер,
Эйәһе белмәç, ат белер.

* Андыҙлы ерҙә ат үлмәç,
Атлы ерҙә ир үлмәç.

* Арба менән ҡуян тотмайҙар.

* Арғымаҡ менгән арымаç.

* Арҡан ишһәң бау булыр,
Арбаң-санаң һау булыр.

* Арпа сәскән бойҙай урмаҫ.

* Арыған ат соҡор һанай,
Асыҡҡан ат ҡулыңды ялай,
Яратҡан ат күҙеңә ҡарай.

* Арыҡ ат юлға, ас эт һунарға ярамай.

* Арыҡ атҡа ҡамсы ла йөк.

* Арыҡ атҡа менгәнсе, аяғыңа мен.

* Арыҡ аттың арты киң.

* Арыҡ булһа ла һарыҡ аҫыра.

* Арыҡ мал яҙға сыҡһа уйнаҡлар.

* Арыҡ һыйыр ҡойоға төшһә,
Тулай-тулай төпкә батыр,
Һимеҙ һыйыр һаҙға батһа,
Һикереп сығып, ергә баҫыр.

* Арыш сәсһәң, икмәк ашарһың.

* Арыштың хисабы һуҡҡас беленер.

* Арышы булһа, батманы табылыр.

* Ас бүре тотолмаҫ,
Туҡ бүре ҡотолмаҫ.

* Ат айында һыналыр.

* Ат алғансы, тай ҙа – мал.

* Ат алмаҫ борон йүгән эҙләмә.

* Ат арығын маҡтама, арғымаҡтан тай уҙыр.

* Ат аяған ат менер,
Тун аяған тун кейер.

* Ат аяғынан һимерер.

* Ат баҫмайым тигән еренә өс баҫа.

* Ат башы тотҡан арымаҫ.

* Ат булмағанда, ишәк тә ярай.

*Вариант:* Ат тапҡансы ишәк мен.

* Ат йәлләгән ергә ҡарар,
Ҡош йәлләгән күккә ҡарар.

* Ат ҡартайһа – һуғымлыҡ.

* Ат – менгәндеке, тун – кейгәндеке.

* Ат санала беленер.
* Ат сапҡансы, эйәр тап.
* Ат тапһаң, эйәр табыла.
* Ат тартмай, һоло тарта.
* Ат тире сергелә*.
* Ат тирләһен, сирләмәһен.
* Ат тояғы сабата түгел,
Тишелһә, ямап булмай.
* Ат тояғын ҡыҙғанған ылауҙан ҡотолмаç.
* Ат холҡона таянма.
* Ат хурлаған тай менер,
Тай хурлаған таяҡ менер.
* Ат юрғалар, эйәһе дан алыр.
* Ат яҡшыһы аранда.
* Ат яфаһын һабан белә.
* Ат яҡшыһы алға сығыр,
Алға сыҡҡан данға сығыр.
* Атҡа септә килешмәй.
* Атҡа – һоло, машинаға – май.
* Атҡа ышанма: ат, кем менһә, шуныҡы.
* Атланһаң үҙ атыңа атлан, кеше аты тиҙ арыр.
* Атлы ир – дәртле ир.
* Атлы тәртә төҙәтер, атһыҙ кәртә төҙәтер.
* Атлының аяғы ла арымай, туны ла туҙмай.
* Атты ат һаҡлай.
* Атты сыбыртҡы менән ҡыума, һоло менән ҡыу.
* Аттың атағы* ҙур.
* Аттың даны егет ҡулында.
* Аттың күрке ял булыр.
* Аттың саяһы – юрға.
* Аттың хаҡы оло,
Айғырҙың даны оло.
* Аттың юрғаһын, бейәнең уңышын ал.

* Атһыҙ ир – ҡанатһыҙ ҡош.
* Атһыҙ кеше – ҡулһыҙ кеше.
* Атһыҙ кеше – затһыҙ кеше.
* Аты бар – арыҫлан.
* Аты бар атланмаç, эйәре бар атланыр.
* Аты бар – батыр, аты юҡ – ятыр.
* Аты барҙың дуҫы бар.
* Аты барҙың ҡанаты бар.

*Вариант:* Атым – ҡанатым.
* Аты булһа, ҡамыты табыла.
* Аты барҙың ҡанаты бар,
  Һыйыры барҙың һыйы бар.
* Аты-туны бар кешелә Алпамышаның көсө бар.
* Атым яҡшы тип, сыбыртҡыңды ҡуйма.
* Атың арыһа, абруйың китер.
* Атың арыһа, үҙеңә үпкәлә.
* Атың барҙа арыш сәс.
* Атың булһа, арымаһын.
* Атың булһа, ил таный.
* Атың юғалһа ла, йүгәнең ташлама.
* Атың юғалһа, йүгәнең юлға ташла.
* Ау аула, ауылда тор.
* Ауан ауға барһа, ауҙа ғауға сыға.
* Аусы – ауҙа, юлсы – юлда.
* Аусыны аяғы туйҙыра.
* Аусы ҡоҙғон ауламаç, өйрәк аулар.
* Ашаған аттың теше аҡ.
* Ашаған мал үлмәй.
* Ашатмаған малда өмөт юҡ.
* Ашауына ҡарап мал үҫер,
  Ярына ҡарап тал үҫер.
* Ашланған ер аш бирер.
* Ашлыҡты бураға һалмайынса «уңыш алдым», тимә.

* Ашлыктың йоҙағы – һалам.

* Ашыҡ уйнаған – аҙыр,
Туп уйнаған туҙыр,
Ҡуй көтөп, ҡарын майы ашаған – барынан да уҙыр.

* Ауға барһаң, зирәк бул,
Юлдашыңа терәк бул.

* Ауға сыҡҡанда эт ашатмайҙар.

* Байлыҡ күрке мал менән.

* Байтал бейә булғансы, башыңа сал инә.

* Байтал менһәң – ҡолон юҡ,
Һауым мал екһәң – ҡымыҙ юҡ.

* Баҡра сәскән бойҙай урмаҫ.

* Балы булһа, себене булыр, өҫтөн ябып тотмаһаң;
Малы булһа, ҡазаһы булыр, һаҡлай белеп тормаһаң.

* Бал ҡортоноң балы бар,
Балға хәтле наҙы бар.

* Балсы ҡулынан бал тамыр,
Һауынсы ҡулынан һөт тамыр.

* Балыҡ аулаған байымаҫ.

* Балыҡ ашағың килһә, һыуҙан ҡурҡма.

* Балыҡ тота алмаған һыуҙы яманлаған.

* Балыҡ тотҡан туҡ булыр,
Аяҡ-быуыны юҡ булыр.

* Балыҡҡа ем кәрәк,
Ҡоҙғонға үләкһә кәрәк.

* Балыҡсының ҡулы аҡ,
Малсының йөҙө аҡ.

* Балыҡты тотҡан уңмаҫ, ашаған туймаҫ.

* Балыҡты тотоуынан «тотам» тигәне ҡыҙыҡ.

* Баҫыуҙа эҙең булмаһа,
Ырҙында йөҙөң булмаҫ.

* Бейә күп булһа, ҡолон күп.

* Бейә менһәң – ҡолон юҡ.

* Бейә һаумаҡ – ут йотмаҡ,
Ҡымыҙ бешмәк – йән сыҡмаҡ.

* Бейәһенең быуаҙлығын эйәһе белә.

  *Вариант:* Бейәһенең серен эйәһе белер.

* Белгәнгә – ер, белмәгәнгә – гүр.

* Бер көнлөк һунар ите – ҡырҡ көнлөк табан ите.

* Бер тин һумды һаҡлай,
  Бер көн йылды һаҡлай.

* Бер һыйыр аҫра, берәгәйле аҫра.

* Берeһен үлтермәй, берeһен тергеҙеп булмай.

* Бесән юҡта һалам да курмы.

* Биле билтәк бишле айғыр алтыһында ат булыр.

* Бирһәң – алырһың,
  Сәсһәң – урырһың.

* Бойҙай сәсһәң, башағын йый,
  Шалҡан сәсһәң, тамырын йый.

* Буран булһа, һунар юҡ,
  Ямғыр булһа, туҙан юҡ.

* Бүре тотор бурҙай эт бөйөрөнән беленер,
  Бүре һуғыр ир-егет беләгенән беленер.

* Беҙ ҡәҙерен белгән ҡулда ҡайсы уйнамаҫ,
  Аш ҡәҙерен белгән ҡулда ҡамсы уйнамаҫ.

* Бәләкәй атты маҡта, оло атты ек.

* Вайымһыҙ йөрөһәң йәй көнө,
  Алымһыҙ булырһың көҙ көнө.

* Ғәйрәт – атлыла.

* Далаға ебәргән атыңа ышанма.

* Егә белгән айғыр егер.

* Егә белһәң, шайтан да ат була,
  Үҫтерә белһәң, шалҡан да аш була.

* Еккән атың елдәй булһын.

* Екмәһәң дә ат яҡшы.

* Ер күкрәге киң булыр,
  Ҡәҙерләһәң – уңыш мул булыр.

* Ер туймай, ир туймай.

* Ергә тамған тир – гәүһәр.

* Ергә төшкән гөл булыр,
  Утҡа төшкән көл булыр.

* Ергә эйелһәң, байлыҡ килә.

* Ергә ят ҡул тейһә – яралай,
Хужа ҡулы – ярығын ямай.

* Ерҙе бер ҡат туйҙырһаң,
Ул һине ун ҡат туйҙырыр.

* Ерҙә ашлыҡ башағын ҡалдырғансы, ашар ҡашығынды ҡалдыр.

* Ерҙән алғанды, ерҙә ҡалдырма.

* Еренә ҡарап иген ик.

* Иген ер һыуына үҫмәй, тир һыуына үҫә.

* Иген ҡамылынан билгеле.

* Иген төбө – ҡыуаныс.

* Иген үҫмәҫ тип, ерҙән төңөлмә.

* Игенде арба өйгә индерә, сана баҙарға илтә.

* Игендең яйын иккән белер,
Арбаның яйын еккән белер.

* Игенсе ямғыр теләй, юлсы аяҙ теләй.

* Игенсе яуында тыныр.

* Игенсенең ярты ғүмере яланда уҙыр.

* Игә белгән иген ашар,
Игә белмәгән ниен ашар?

* Ике бейә – ил ашы,
Өс бейә – болаҡ башы,
Бер бейә – юҡтың ҡашы.

* Икһәң иген – эсерһең тиген*.

* Инәһеҙ ҡорт бал йыймаҫ,
Бал йыйһа ла мул йыймаҫ[26].

* Инәһеҙ ҡорт көсһөҙ булыр.

* Ир ҡанаты ат була, менһә, күңеле шат була.

* Ир намыҫы – ат бәҫе.

* Ирҙең юлдашы ла ат, моңдашы ла ат.

* Иртә сәсһәң – уңырһың,
Һуңға ҡалһаң – туңырһың.

* Ишек алдында һыйырың булһа,
Өҫтәл өҫтөндә һыйың булыр.

* Ишәк барға һаналһа ла, малға һаналмай.

* Ишәк ите ит булмаç.

* Ишәктең ите хәрәм, көсө хәләл.

* Йөгөң күп булһа, келәтең тулы булыр.

* Йөҙ күтәреп кешенән теләнгәнсе,
Башыңды эй ҙә ерҙән һора.

* Йөҙлөк атың булһа, меңлек сыбыртҡың булһын.

* Йөрөй белмәгән кеше аттың арҡаһын тишер,
Саба белмәгән кеше ҡолағын киçер.

* Йүгерек атҡа менгән Тәңреһен онотор.

* Йүнһеҙ һунарсы арба менән ҡуян тотҡан.

* Йығылһаң, ергә таян.

* Йылҡы – малдың батшаһы.

* Йылҡы – данлыҡ, ҡуй – байлыҡ.

* Йылҡы ҡолондан үçер.

* Йыуаш ат йүнләүгә яҡшы.

* Йылы аҙбар – ярты байлыҡ.

* Йәй ҡышты туйҙыра.

* Йәй эшләһәң, ҡыш ашарһың.

* Йәйгә көҙҙән әҙерлән.

* Йәйгә сыҡһаң, ҡышты уйла,
Ҡышҡа керһәң, йәйҙе уйла.

* Йәйҙең бер көнө ҡыштың бер айынан ҡиммәт.

*Вариант:* Йәйҙең бер көнө ҡыштың бер аҙнаһына тора.

* Йәйе барҙың ҡышы бар.

* Йәйен сәсһәң ҡамылды,
Ҡыш ашарһың амулды*.

*Вариант:* Яҙ урмаһаң ҡамылды,
Ҡыш ашарһың амулды.

* Йән рәхәте тән менән,
Тән рәхәте мал менән.

* Йән тынысы – ямғыр[27].

* Йәш үләндә арыҡ мал да уйнаҡлай[28].

* Кеше ерҙе күтәрә, ер кешене күтәрә.

* Кешәнле атың – бар атың,
  Кешәнһеҙ атың – юҡ атың.

* Киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең.

* Киҫемле мал үҫемле[29].

* Күҙ бай булма, яҙ бай бул.

* Көҙ көнөндә бары бай:
  Тарттырған да ашаған,
  Яҙ көнөндә нишләгән? –
  Хәйерсене теләнсе ҡыҫтаған.

* Көҙгө ашлыҡты көлгә сәс,
  Яҙғы ашлыҡты боҙға сәс.

* Көн ҡайғыһы таңдан, йыл ҡайғыһы яҙҙан.

* Көслө умарта геүләүенән билгеле.

* Күктән эҙләгәнде ерҙән биргән.

* Кәбәк һибеп, ыласын тотмайҙар.

* Кәзә – мал түгел.

* Кәзә – ярлының һыйыры.

* Кәзәне маҡта, һыйырҙы һау.

* Кәртәгә кермәгән тәртәгә кермәй.

* Ҡабаландың аты өҙлөгә,
  Ялҡауҙың аты һөрлөгә.

* Ҡабыҡ ҡағып кәзә көтмәйҙәр.

* Ҡаҙ ҡанаты – ҡауырһын, ир ҡанаты – ат.

* Ҡайтам, тиһәң – сләк табыла.

* Ҡара ерҙә ҡармандап ҡал:
  Ҡар яуғас, ҡайҙа барырһың?

* Ҡара тояҡ ҡарында ятмаҫ.

* Ҡара тупраҡ иген уңдыра.

* Ҡарағайға ҡарап тал үрсей,
  Ҡараусыға ҡарап мал үрсей.

* Ҡарағайға ҡарап тал үҫер,
  Колхозсыға ҡарап мал үҫер.

* Ҡарамағандың ҡатыны ташлар,
  Баҡмағандың малы ташлар.

* Ҡарсығаң ҡулында саҡта аулап ҡал.

* Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит, ҡайтыуыңа аш булыр.
* Ҡаты ерҙә ҡаҡ торор,
  Игенле ерҙә мал торор.
* Ҡатынан ҡаты – ат тояғы.
* Ҡолон аҫраһаң, ат менерһең.
* Ҡом татыр*,
  Ҡом татырҙа мал ятыр.
* Ҡоро ағастың емеше юҡ.
* Ҡоро ер булһа ла иген сәс.
* Ҡорт саҡмайынса бал булмай.
* Ҡорт таныһаң, тотоп ал:
  Күсе һайын бер бот бал.
* Ҡорттоң сағыуы ла файҙаға.
* Ҡотһоҙға ҡот ҡунмаҫ,
  Умартаһында ҡорт тормаҫ.
* Ҡош ҡош менән аулана.
* Ҡошон юғалтҡан күккә ҡарар,
  Ҡуйын юғалтҡан ергә ҡарар.
* Ҡуй байлығы – туй байлығы.
* Ҡуй ырыҫы – ҡура эсендә.
* Ҡуйсыһы күптең ҡуйы хәрәм үлер.
* Ҡуян тотҡоң килһә, бурҙай ал.
* Ҡыбырлаған – ҡыр артылыр.
* Ҡыр яғында һарыҡ һимерер,
  Урман яғында һыйыр һимерер.
* Ҡырғы* менән ҡолан аулама.
* Ҡырҙа ҡалған – ҡар аҫтында.
* Ҡырҙа тиреҫ мул булһа,
  Бураң буш булмаҫ.
* Ҡырҙағы ашлыҡ байлыҡ түгел,
  Буралағы ашлыҡ – байлыҡ.
* Ҡырҡ ҡаҙ бер тыу бейәне алмаштыра[30].
* Ҡыш ҡайғыһын яҙ ҡайғырт.
* Ҡыш аҙығын йәй йыйна.
* Май яҙмаҡ – йән сыҡмаҡ.

* Майҙан һуң курмы уртаҡ.

* Мал аҙығы – йән аҙығы,
  Мал асыуы – йән асыуы.

* Мал арығын һимертһәң,
  Ауыҙың-мороноң май булыр.

* Мал аҫраған – май сәйнәгән.

* Мал башы – тауыҡ.

* Мал көрлөгө көтөүсенән.

* Мал көткән ашҡа туйыр.

* Мал күп булһа, ҡәҙере юҡ.

* Мал ҡазаһы баш ҡазаһы түгел,
  Мал табыла, баш табылмай.

* Мал ҡазаһы эткә яҡшы.

* Мал табылыр, иҫәп кәрәк.

* Мал эйәһенә оҡшай.

* Маллы донъя – яйлы донъя.

* Малһыҙ донъя – һанһыҙ.

* Малы барҙың наҙы бар.

* Малы барҙың һыйы бар,
  Малы юҡтың һыйы юҡ.

* Малы юҡтың йәне юҡ.

* Малы юҡтың ҡайғыһы юҡ.

* Малың булһа, көтөүсе табылыр.

* Маңлайҙан аҡкан әсе тир,
  Ергә тамһа, ем булыр.

* Насар һөрөлгән ерҙе сүп баҫыр.

* Орлоғона күрә уңышы.

* Өй артында ҡорто барҙың өй эсендә ҡото бар.

* Өмә эше ырамлы.

* Сентябрҙә һин дә бер, мин дә бер – мартта арыта[31].

  *Вариант:* Сентябрҙә һин дә бер, мин дә бер,
  Ҡыш көнөндә кем йырлар?

* Сөймәгә бирһәң, ҡарсыға бир – ҡанъяғанды* буш итмәҫ.

* Сусҡанан йөн дә юҡ, йүн дә юҡ.

* Сыраҡсыны* суртан күрмәҫ.

* Сысҡандан ҡурҡҡан иген икмәгән.

* Сәскән йыйыр, сәсмәгән илар.

* Сәсмәгән урмаҫ.

* Сәсмәнең иһә яҙ көнө,
Ни йыйырһың көҙ көнө?

* Табылмаған мал таш аҫтында.

* Таҙа орлоҡ таҙа иген үҫтерер,
Насар орлоҡ ҡырға сүп-сар тултырыр.

* Тай атҡа еткерер,
Ат моратҡа еткерер.

* Тамғалы мал юғалмай.

* Тамыр тартҡан тарыҡмаҫ[32].

* Таналының тамағы туҡ.

* Тояҡ тайға еткерер,
Тай байталға еткерер,
Байтал атҡа еткерер,
Ат моратҡа еткерер.

* Тай – атҡа, ат моратҡа еткерә.

* Тарпан* атҡа – бер арҡан.

* Тир таммайса, ер бирмәй.

* Тир түкмәйенсә, труддень* булмаҫ.

* Бил бөкмәйенсә, бураң тулмаҫ.

* Тиреҫ сығарһаң ереңә,
Ташып бөтөрә алмаҫһың өйөңә.

* Тиреҫте ҡалын түшәһәң, бураң буш булмаҫ.

* Тирәгең булһа, терәгең булыр.

* Төҫ бирмәгән малды аҫырама.

* Туҡлыҡ итеп, тары урмаҫһың.

* Туры ат еккән – тура киткән.

* Турпыша төбөн еҫкәмәй ат туймай.

* Ултырып сыҡһаң, атың яҡшы булһын.

* Уңған игенде урыуы рәхәт.

* Ура(а)лмаған урағынан күрер.

* Ураҡ урмаҡ – уйнамаҡ,
Бесән сапмаҡ – йән сыҡмаҡ.

* Ураҡсының елкәһенә ҡарама, көлтәһенә ҡара.

* «Ур» тигәнгә булмаҫ, урғанға булыр.

* Урман үҫтергән аслыҡ күрмәҫ.

* Урманға балтаһыҙ,
Ураҡҡа ураҡһыҙ бармайҙар.

* Урманлы юл – бер ҡат тун.

* Урманым – бер ҡат юрғаным.

* Үгеҙ ат булмаҫ, һыйыр дөйә булмаҫ,
Күпме ҡымыҙ бирһә лә, кәзә бейә булмаҫ,
Улары ла булып торһа, заман яман булмаҫ.

* Үгеҙенә күрә сыбыртҡыһы.

* Үгеҙҙе маҡта, атты ек.

* Үҙ атыңды һынар өсөн кеше атына ултыр.

* Үҙе һалынҡының* аты абынҡы.

* Үҙең ергә эйелмәһәң, ер һиңә һуҙылмаҫ.

* Үҙәкле малда үлем бар.

* Фермаң маллы булһа, эшең яйлы булыр.

* Фермаңда мал һимеҙ булһа, эшең тигеҙ булыр.

* Хәйерһеҙ булған малдан хәйерле ҡаза яҡшы.

* Һабан ни һөргәнде ҡайыш белә.

* Һабанда һайрашмаһаң,
Ырҙында ыңғырашырһың.

*Вариант:* Һабанда тирләмәһәң,
Ырҙында сирләрһең.

* Һабанды өйрәнгән һөрһөн.

* Һанаулы мал юғалмаҫ.

* Һауып эсһәң – мең көнлөк,
Һуйып элһәң – бер көнлөк.

* Һаумайынса һөт булмаҫ,
Яҙмайынса май булмаҫ.

* Һигеҙ һарыҡ һуйғансы һимеҙ һарыҡ һуй.

* Һигеҙ һыйыр аҫрағансы, һимеҙ һыйыр аҫ(ы)ра.

* Һимеҙ аттың арҡаһы йомшаҡ.

* Һимеҙҙең аяғы һигеҙ[33].

* Һоло күрмәһә, көр ат та арый.

* Һөт бирмәгән һыйырҙы иткә һуялар.

* Һөт яратҡан һыйырын янынан ҡалдырмай.

* Һуҡа тотоп ҡулың ҡабармаһа,
  Мейес яғып әпәкәйең ҡабармаç.

* Һунарсы һуңламаç.

* Һунарсыға эҙ кәрәк,
  Эҙ табырға күҙ кәрәк.

* Һунарсының көнлөгө бер тин.

* Һыйлы көнөң – һыйыр.

* Һыйыр ашауҙан туймаç.

* Һыйыр еленендә һөт әсемәç.

* Һыйырҙың йәше мөгөҙ һырынан билгеле.

* Һыйырҙың тубығына һыу тейһә, һөтө кәмей[34].

* Һыйырҙың һөтө елендә,
  Елендән алда телендә.

* Һыйырлы һыйға тарҡылмаç*.

* Һыйыры бар асҡа үлмәç.

* Һыуға таянма, ергә таян.

* Шауҡал* ат көслө була,
  Шауҡал һыйыр һөтлө була.

* Шәп мал аяҡланып тыуа.

* Ырҙынында булмаһа, келәтендә лә булмаç.

* Ышанған тауҙа кейек бар.

* Эҙләгән бал ағасы тапҡан.

* Эйәһенә күрә бейәһе.

* Энә эшенә өмә кәрәкмәй.

* Эт алған төлкөлә һын булмаç.

* Этеңә ышанма, атыңа ышан.

* Этһеҙ ҡуян тотолмай.

* Эшләй белеп эшләгәнгә иген эше – кинәнес,
  Ялҡаулашып йоҡлағанға иген эше көйөнөс.

* Әҙәм арығын аҫ(ы)раһаң, ауыҙың-мороноң ҡан булыр,
  Мал арығын аҫ(ы)раһаң, ауыҙың-мороноң май булыр.

* Әрем ашаған кәзәнең ите ни ҙә, һөтө ни.

* Әтәлгене тый, ҡарсығаны һуй.

* Юлаусыға – юл, һунарсыға – йәнлек.

* Ябыҡ тайҙы хурлама, яҙҙы үтһә, ат булыр.

* Ябыулы атта ял ҡалыр,
  Ял ҡалмаһа, йән ҡалыр.

* Яҙ сәсеүен ҡыштан ал.

* Яҙ уңмаған көҙ уңмаҫ.

* Яҙ үлмәһә, көҙ үлмәҫ[35].

* Яҙ эшләһәң, ҡыш тешләрһең (ашарһың).

* Яҙған мал үҙ аяғы менән кире ҡайта.

* Яҙға сыҡҡан атты яуҙан да йәлләмә,
  Көҙгә кергән атты кейәүеңә лә бирмә.

*Вариант:* Яҙғы атты ялсыңдан да аяма,
Көҙгө атты кейәүеңдән дә ҡыҙған.

* Яҙғы айғыр ятҡан ерҙән кешенләй.

* Яҙғы сәсеү – бер генә ваҡыт.

* Яҙғы көн йыл аҫ(ы)рай.

*Вариант:* Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра.

* Яҙҙың йәме сәскә менән,
  Көҙҙөң йәме көлтә менән.

* Яҙын иген икмәгән әтәмбәйгә* моң булыр.

* Яҡшы ат ирҙең данын сығарыр.

* Яҡшы аттың башы ҡашҡа.

* Ялан йәме көлтә менән.

* Ялҡауҙың еренә бойҙай сәсһәң, билсән үҫә.

* Яман ат эйәһен ҡартайтыр.

* Яман айғыр өйөрсәк.

* Яман орлоҡ сәсеп, яҡшы иген көтмә.

* Яңғыҙ ағас сана булмай,
  Яңғыҙ бейәнән һаба тулмай.

* Ярышмаған эш ауыр була.

* * *

* Ағас атҡа атландыра.

*Вариант:* Төп башына ултырта.

* Атым юҡ аранда, ҡайғым юҡ буранда.

* Ат яҡшы ла, ел ҡаршы.

* Аяғы менән ашамаç[36].

* Аяҙ-аяҙ көндәрҙә еләк йыйыр аппағым,
Болот-болот көндәрҙә ураҡ урыр аппағым.

* Бер атыуҙа – ике ҡуян.

* Бесән яҡҡан, үҙе ятҡан.

* Етене сәселмәгән, киндере һуғылмаған.

* Ире өмә әйткән, ҡатыны баланға киткән.

* Йүгерек атҡа баһа юҡ.

* Көн үтһен дә төн үтһен, ҡалғанына ҡар яуһын[37].

* Кәзә һауғандан һыйыр һауған һөт һорап килгән.

* Ҡуян алмаç, артынан ҡалмаç.

*Вариант:* Ҡуян алмаç, аяғы талмаç.

* Өçтән-мөçтән игенсе,
Ҡышҡа керһә – теләнсе.

* Таяҡ барҙа ҡуян осрамай,
Ҡуян осрағанда таяҡ булмай.

* Тағы ла күберәк үçһен,
Бер башы бишкә етһен![38]

* Урыр инем ураҡты, баçыуығыҙҙың көйө юҡ[39].

* Үгеҙ һау ҙа – һөт бир.

* Һыйыр булмағас, кәзәгә лә «инәкәйем», тиерһең.

* Һыйыр майы – һары май,
Һыйыр көткән арымай;
Кәзә майы – туң май,
Кәзә көткән уңмай.

* Яңғыҙ һыйырым аранда,
Ни ҡайғым бар буранда?

## II. ИЖТИМАҒИ ТОРМОШ

### 1 Ер-һыу, йорт-ил, халыҡ, ил башлыҡтары, түрәләр

* Аға булыр егеттең итәк-еңе киң килер.

* Ағас нәҫеле ерҙә, ир нәҫеле илдә.

* Ағас та ергә төпләнә.

* Аҙашһаң, ил менән аҙаш.

* Айғыр малға ни етә, йөрөй белгән кешегә,
Тыуған илгә ни етә, ҡәҙерен белгән кешегә?

* Айғыр өйөрөн ташламаҫ.

* Ай яҡтыртҡанда йондоҙ күренмәй.

* Айға ҡарап аҡырма, илгә бәлә саҡырма.

* Айырылған ил аҙыр, ҡушылған ил уҙыр.

* Аҡ туныңды яманлап, атлас ҡайҙан табырһың,
Түрәләрҙе яманлап, ғәҙел ҡайҙан табырһың?

* Аҡҡош күлдә булыр, аҡсарлаҡ һыуҙа булыр.

* Аҡырған башлыҡ түгел, аҡылы бар башлыҡ.

* Алйот түрә булһа, сабатаһын түргә элә.

* Алтын-көмөш сыҡҡан ерендә ҡәҙерле.

* Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ.

* Астан үлһәң дә, ата-әсәңде, тыуған илеңде ташлама.

* Аҫыл кеше алтын тип үлмәҫ, халҡым тип үлер.

* Аҫылһаң – бейеккә,
Йығылһаң – майҙанға.

* Ата-бабам бәккан ер –
Кендек ҡаным аҡкан ер.

* Атаңдан айырылһаң айырыл, илеңдән айырылма.

* Атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул.

* Атаһын юғалтҡан – бөлгән,
Илен юғалтҡан – үлгән.

* Ат аҡтығы илгә бүре килтерә.

* Ат аяғына ат баҫмай.

* Ат туйған ерендә, ир тыуған илендә.

* Ат әйләнеп, ҡаҙығын табыр,
Һыу әйләнеп, юлағын табыр,
Ир әйләнеп, илен табыр.

* Ат әйләнеп, төйәген табыр.

* Аттың дилбегәһе кемдә, барыр юлы шунда.

* Аттың ҡоно* тауҙа һынала,
Егеттең ҡоно яуҙа һынала.

* Аулаҡ күлгә тәлмәрйен хужа.

* Ауылда булмаған далала булыр.

* Ауылы башҡаның һыуы башҡа.

* Ауылы берҙең ҡәүеме бер.

* Ахыры заман булһа, тыума* батша булыр.

* Ашаған еренә эт тә ҡайта.

* Ашыуһыҙ булһа тауҙан биҙ,
Үткеһеҙ булһа, һыуҙан биҙ.

* Аяҡ атламаһа, баш йөрөмәй[40].

* Бай менән дуҫлашма, түрә менән талашма.

* Баймаҡ* – йырға-моңға бай яҡ.

* Баймаҡта күңел байымаҡ.

* Балаҡтағы бет башҡа сыҡһа, ҡотора.

* Бала ҡәҙерен әсә белер,
Ил ҡәҙерен ир белер.

* Балыҡ башынан серер.

* Балыҡсы күлен маҡтай,
Көнләксә көнөн маҡтай.

* Бармаған ерҙә баҡыр бар,
Күрмәгән ерҙә көмөш бар,
Алмаған ерҙә алтын бар,
Барһаң, тимер табылмаҫ.

* Батша залим булһа – йорт туҙыр,
Батша ғалим булһа – йорт уҙыр.

* Батша талап ала, хәйерсе теләнеп ала.

* Батша әмере өс көн йөрөр.

*Вариант:* Батша законы өс көнлөк.

* Батшаң һуҡыр булһа, бер күҙеңде ҡыҫып үт.

* Батшанан һалдат артмаҫ.

* Батшаның күҙе ҡанға туймай.

* Батыр кәрәк яу килгәндә,
Түрә кәрәк дау килгәндә.

* Башҡорт байыһа, бисә ала,
Урыҫ байыһа, йорт һала.

* Башлыҡ аҡылға бай,
Халыҡ күңелгә бай.

* Башлыҡ булһаң – башлы бул,
Йыйырылмаҫ ҡашлы бул.

* Башлыҡҡа ла баш бар,
Тағанай* башында таш бар.

* Башлыҡты башлыҡ ҡуя.

* Башһыҙ илдә бәрәкәт булмаҫ.

* Башһыҙ өйҙә эт хужа.

* Башым китмәһен тип, тик ултырған башлыҡтан илгә изгелек көтмә.

* Бей икәү булһа, дау дүртәү булыр.

* Бейек тауҙың үре күп.

* Бер ат арҡаһында мең ат һыу эскән.

* Бер башҡа ике ҡул хеҙмәт итә.

* Бер йортта ике бикәнең тауығы һыймаҫ.

* Бер кеше тәхеткә менһә, ҡырҡ кеше атҡа менә.

* Бер күктә ике ҡояш булмай.
* Бер ҡолас – ер түгел.
* Бер өңгә ике айыу һыймаҫ.
* Бер тәкә ҡайҙан китһә, бар көтөү шунан китә.
* Бер түрәгә дау килһә – түрәләр һөйөнөр,
  Күп түрәгә дау килһә – түрәләр берегер.
* Берҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.
* Берҙә түгел, илдә көс.
* Берҙәм илдә бәрәкәт бар,
  Ғауғалы илдә һәләкәт бар.
* Берәүҙең бәхетенән берәү төшә тәхетенән.
* Бесәй юҡта сысҡан баш.

  *Вариант:* Бесәй юҡ ерҙә сысҡан түрә була.
* Биле ныҡтың иле ныҡ,
  Иле ныҡтың биле ныҡ.
* Биштең башы булғансы, алтының аяғы бул.
* Бөлгән илгә бөкрө билле бей килер.
* Болот берекһә – күк күкрәр,
  Халыҡ берекһә – ер тетрәр.
* Бөлгән илдән бүлтерәк алма.
* Бөркөт ҡартайһа, сысҡан аулар.
* Булыр илдең балаһы бер-беренһенә «батыр» ти(е)р,
  Булмаҫ илдең балаһы бер-беренһенә «бахыр» ти(е)р.

  *Вариант:* Үҫер илдең балаһы бер-береһенә «батыр» ти(е)р,
  Үҫмәҫ илдең балаһы бер-береһенә «кафыр» ти(е)р.
* Буран булһа, һунар юҡ,
  Ямғыр булһа, туҙан юҡ,
  Түрә килһә, майҙан юҡ.
* Бүҙәнәнең өйө юҡ,
  Ҡайҙа барһа – бытбылдыҡ.
* Бысаҡ осонан һыныр.
* Бәйле һарыҡ ерендә утлар.
* Бәләкәй һыуҙа оло балыҡ үҫмәй.
* Ватан өсөн йән фиҙа.
* Ғибрәт алғың килһә, ситкә сыҡ.

* Дала эсе – киң ер, оло-кесе тиң ер.
* Даланың бейе булғансы, ҡаланың эте бул.
* Данлы егет ил өсөн үлер.
* Дим* буйы – ең буйы,
Өршәк* буйы – терһәк буйы.
* Диңгеҙ баштан болғаныр.
* Донъяһына күрә түрәһе.
* Дуҫынан айырылған ете йыл илар,
Иленән айырылған илле йыл илар.
* Ҙур ағастың күләгәһе лә киң.
* Залим түрә күп һөйләр, ғәҙел түрә аҙ һөйләр.
* Еккән атың тай булһа ла,
Торған ерең бай булһын.
* Ер баҫтырығы – тау,
Тау баҫтырығы – таш,
Ил баҫтырығы – баш.
* Ер кемдеке булһа – ел шунығы,
Бей кемдеке булһа – ил шунығы.

*Вариант:* Ер кемдеке булһа – ел шунығы,
Түрә кемдеке булһа – ил шунығы.

* Ер тартмаһа, һыу тарта.
* Ер тауһыҙ булмай, халыҡ ханһыҙ булмай.
* Ер түбәһеҙ булмаҫ, ил түрәһеҙ булмаҫ.
* Ерҙең даны ирҙән.
* Ерҙән айырылған елгә оса.
* Ере байҙың иле бай.
* Ере барҙы ер тартыр,
Ер тартмаһа, тел тартыр.
* Ере барҙың еме бар,
Еме барҙың име бар.
* Ере күп булған ил көлөр,
Бейе күп булған ил бөлөр.
* Ереккәнде ер ярата.
* Ерен һөйгән – көн күргән.
* Еренә күрә екәне.

* Еренә ҡарай йыланы, тауына ҡарай боланы.

* Ерле – ерендә,
  Екән – күлендә.

* Ерле ерен маҡтай,
  Балыҡсы күлен маҡтай.

* Ерле кеше еренә тартыр.

* Ерһеҙ кеше – илһеҙ кеше.

* Етмеш йондоҙ тыуһа ла, яҡтылығы айҙай юҡ.

* Иҙел башынан болғана, тамағынан тына.

* Иҙел һыуы бал булһа ла, илгә етмәй.

* Иҙел* – Яйыҡтың* ағаһы,
  Ағиҙел* – илдең яғаһы.

* Ике айғырҙы бер һарайға япмайҙар.

* Ике тинтәк берекһә лә ил булмаç.

* Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймаç.

* Ике дәрүиш бер балаçҡа һыйыр,
  Ике батша ер йөҙөнә һыймаç.

  *Вариант:* Ике йыртҡыс бер яланға һыйыр,
  Ике батша донъяға һыймаç.

* Икмәк – илдән, һыу – күлдән.

* Илар бала атаһының һаҡалы менән уйнар,
  Илар түрә иле менән уйнар.

* Ил аулаҡ булһа, дуңғыҙ түбәгә менә.

* Ил аралаған һынсы булыр,
  Ер аралаған уҡсы булыр.

* Ил асыуы – яман асыу.

* Ил бай булһа, ярлылығың һиҙелмәç.

  *Вариант:* Ил бай булһа, беҙ туҡ.

* Ил бар ерҙә сәпсек үлмәй.

* Ил барҙа ир хур булмаç,
  Ир барҙа ил хур булмаç.

* Ил биргәндә дуçың булһын,
  Ер биргәндә ҡушың булһын.

* Ил яуһыҙ булмаç, ир дауһыҙ булмаç.

* Ил илдән ҡалһа, иргә намыç.

* Ил ил менән, тирмән ел менән көслө.

* Ил икмәге ирекле,
Эшләп алһаң, кимекле.

* Ил ирекһеҙ булһа, ир күрекһеҙ булыр.

* Ил ирекле булһа, түрә күрекле була.

* Ил йолаһыҙ булмаҫ.

* Ил йолаһына хан да буйһона.

* Ил көйөнгәндә көйөн,
Ил һөйөнгәндә һөйөн.

* Ил көсәйһә, бей хан була.

* Ил күрмәк – бер бурыс,
Ир һынамаҡ – бер бурыс.

* Ил күсә тип, утыңды һүндермә!

* Ил ҡайғыһы – ир ҡайғыһы,
Ир ҡайғыһы – ил ҡайғыһы.

* Ил ҡулы тау күсерер.

* Ил ҡупһа – Иҙел ҡубыр,
Ауыл ҡупһа – дауыл ҡубыр.

* Ил ҡәҙерен белмәгән – башын юғалтҡан,
Ер ҡәҙерен белмәгән – ашын юғалтҡан.

* Ил менән ил, халыҡ менән халыҡ бергә.

* Ил менән ҡара көн дә байрам булыр.

* Ил намыҫы ир муйынында.

* Ил намыҫы хур итмәҫ.

* Ил өмөтөн ир аҡлай.

* Ил өҫтө – алтын бишек.

* Ил өҫтөндә илле алтын.

* Ил терәге – ир, ир терәге – бисә.

* Ил терәге яусыл ир менән йүнсел ҡатын.

* Ил түр башы – түрәнеке.

* Ил хөкөмһөҙ булмаҫ.

* Ил эсендә иҫәр ҙә үлмәҫ.

* Ил эше – оло эш.

* Ил эшенең иртәгеһе маҡтаулы.

* Ил яҙмышы ир ҡулында.
* Ил яҙмышы – ир яҙмышы.
* Илгә бирһәң ашыңды, ил ҡәҙерләр башыңды;
  Эткә бирһәң ашыңды, эттәр талар башыңды.
* Илгә ҡаза теләгән ҡаҙалып үлер.
* Илгә ҡушылһаң – ир булырһың,
  Илдән айырылһаң – хур булырһың.
* Илгә сыҡһаң, илле төрлөнө күрерһең.
* Илгә таянған Иҙел кисер.
* Ил тупланһа – туп була,
  Ил ойошһа – уҡ була.
* Илгә һыймаған баш – Иҙелгә батҡан таш.
* Илде тинтәк боҙор.
* Илдең биле ныҡ булһа, ирҙең күңеле туҡ булыр.
* Илдең итәге киң, донъяның ҡанаты киң.
* Илдең көнө ер менән.
* Илдең көнө – ир менән,
  Ирҙең көнө – ил менән.
* Илдең күҙе илле.
* Илдең хаҡын ир даулар,
  Ир дауламаһа, кем даулар?
* Илдең эше ир муйынында,
  Ирҙең эше ил ҡуйынында.
* Илдә баш булмаһа, эт башҡа менә.
* Илдә булһа, иренгә тейә.
* Илдә булһа, үлмәҫһең, илһеҙ көнөң күрмәҫһең.
* Илдә егет һанаулы.
* Илдә ир үлмәҫ.
* Иле байҙың бейе бай.
* Иле барҙың – көнө бар.
* Иле барҙың ҡабымы бар.
* Иле барҙың – теле бар.
* Иле берҙәмдең – көнө берҙәм.
* Иле иркендең көнө иркен.

* Иле ныҡтың – биле ныҡ.

* Иле юҡтың – түшәге юҡ,
Икмәге юҡтың – көйшәме юҡ.

* Илем-көнөм булмаһа, айым-көнөм тыумаһын!

* «Илем» тимәҫ ир булмаҫ, «өйөрөм» тимәҫ ат булмаҫ.

* Илен ҡурсыған – ил ағаһы.

* Илен ҡурсыған ил ағаһы булыр,
Илен борсоған ил буҫағаһы булыр.

* Илен танымаған илгә бей булмаҫ.

* Илен һатып ашаған – ике генә көн йәшәгән.

* Илен һөйгән ир булыр.

* Илен һөйгән – кисеүһеҙ Иҙел кискән.

* Иленә ҡайтҡандың ояты юҡ.

* Иленән биҙгән ир уңмаҫ,
Күленән биҙгән ҡаҙ уңмаҫ.

* Илле илен маҡтар,
Йүкәле күлен маҡтар.

* Илле иле менән булғанда, Иләмән* үҙе менән була.

* Илле йылдан ил яңырыр,
Йөҙ йылдан ҡаҙан яңырыр.

* Илләштереү илсенән, юлыҡтырыу яусынан.

* Илсегә үлем юҡ.

*Иҫкергән формаһы:* Илсегә зәуал (үлем) юҡ.

* Илсегә үлем юҡ,
Шағирға хөкөм юҡ.

* Илсегә ялҡауҙы ебәрһәң, илгә яу килтерер.

* Илселек – димселек.

* Илһеҙ ир – телһеҙ ҡол.

* Иләҫ илдән китер.

* Имән ҡаты ергә төпләнер.

* Иңле кеше иленән китмәҫ.

* Ир аҡылы – бер алтын,
Ил аҡылы – мең алтын.

* Ир башына килһә килһен, ил башына килмәһен.

* Ир-егет – ил көҙгөһө.

* Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.
* Ир-егеттең яҡшыһы ил менән.
* Ир ике һөйләһә – үҙенә бәлә,
  Хан ике һөйләһә – иленә бәлә.
* Ир илендә ҡәҙерле.
* Ир ҡайғыһы илдә.
* Ир ҡуҙғалһа, ил ҡуҙғалыр.
* Ир ҡәҙере ил менән.
* Ир терәге – ер.
* Ир үлһә лә, йола үлмәҫ.
* Ир үлһә, ил көйөнөр, дошман һөйөнөр.
* Ир яҙмышы илгә бәйле.
* Ир яҡшыһы илгә ярай.
* Ирҙең даны иленән, халҡы менән еренән.
* Ирҙән ашмаҡ бар, илдән ашмаҡ юҡ.
* Ирҙән китһәң дә, илдән китмә.
* Ирҙәр айырылһа, ил таралыр.
* Иренсәк йорт ил булмаҫ,
  Ил булһа ла гел булмаҫ.
* Ирән* ерҙә ир үлмәҫ.
* Ирәндегем* – бишегем,
  Оло оңғол* ишегем.
* Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап булһын,
  Ырыуыңа тап килмәһә, ораныңа тап булһын.
* Иҫәпһеҙ колхоз – ишекһеҙ йорт.
* Ит татлыһы – ҡарын,
  Ир аҫылы – барын*.
* Йорттан айырылған илде яу баҫыр.
* Йортһоҙ – йылан, ерһеҙ – шайтан.
* Йүгән кемдә – ат шунда.
* Йылан йыландың ҡой(о)роғон уҙмаҫ,
  Түрә түрәнең бойороғон боҙмаҫ.
* Йылҡыла үт юҡ,
  Ҡоро үләндә һут юҡ,
  Түрәлә ҡот юҡ.

* Каруан күсер – ут ҡалыр,
Халыҡ күсер – йорт ҡалыр.

* Кем ерендә йәшәһәң, шуның һыуын эсерһең.

* Кемдең ерен ерләһәң, шуның йырын йырларһың.

* Киң кейем туҙмаҫ, кәңәшле ил аҙмаҫ.

* Кисеү кискәндә ат алмаштырмайҙар.

*Вариант:* Йылға уртаһында ат алмаштырмайҙар.

* Киткәндән китек сүлмәк ҡалыр.

* Колхоз башлығын ашлығына ҡарап һынайҙар.

* Колхозың алда булһа, ауыҙың балда булыр.

* Көлә килгән түрәнән ҡас.

* Көс кемдеке – әмер шуныҡы.

* Көслө ырыу хан ҡуйыр,
Үсле ырыу ҡан ҡойор.

* Көтөү аҙашмай, көтөүсе аҙаштыра.

* Көтөү боролғанда, аҡһаҡ һарыҡ алға сыға.

* Көтөү ташлаған малды бүре алыр,
Ил ташлаған ирҙе гүр алыр.

* Көтөүсе күп булһа, һарыҡты бүре алыр.

* Көтөүсе ниндәй – көтөүе шундай.

* Көтөүсеһе юҡ мал уңмаҫ,
Башлығы юҡ ил уңмаҫ.

* Көтөүсеһеҙ көтөү йөрөмәй.

* Көтөүсеһеҙ ҡуй – бүре аҙығы.

* Көтөүҙән ҡалған быҙауҙы бүре алыр.

* Күҙ – ҡарауҙан, ер һыуҙан туймай.

* Күктә Сулпан булыуҙан, һыуҙа суртан булыу артыҡ.

* Күл балығы менән данлы,
Ил халығы менән данлы.

* Күләгәһе юҡ тауҙан биҙ[41].

* Күсеп киткән иҫке йортонан ҡотолған.

* Ҡаҙна малы – ил малы.

* Ҡаҙыҡлы ат ерендә утлар.

* Ҡайһы ырыу көслө – ханды шул ҡуя,

Ҡайһы ырыу үсле – ҡанды шул ҡоя.

* Ҡала – бер барһаң, ҡала,
Йыш барһаң, башыңды алып ҡала.

* Ҡалала ҡалас бешерә белмәгән, ауылда иген игергә өйрәтер.

* Ҡалалы ер – ҡаласлы ер.

* Ҡаланы маҡта, ауылда тор.

* Ҡаланың ҡапҡаһы ҡырҡ.

* Ҡаланың тауығы булғансы, ауылдың әтәсе бул.

* Ҡалын ырыуҙың ҡарағы күп була.

* Ҡар башын ҡар ашар,
Хан башын хан ашар.

* Ҡара ерҙе яманлама, ҡайтып, шунда барырһың,
Ил-йортоңдо яманлама, ҡарғышына ҡалырһың.

* Ҡарға ҡунһа, көтөүе менән.

* Ҡарғаны баш итһәң, ҡарғыштан башың сыҡмаҫ.

* Ҡатын аҙһа – ир башына,
Түрә аҙһа – ил башына.

* Ҡойроҡ тулап баш булмаҫ.

* Ҡолон – ҡырҙа, ҡондоҙ – һыуҙа.

* Ҡолон тояғына – ҡом терәк,
Ҡош аяғына – ел терәк,
Ҡара кешегә – мал терәк,
Хан кешегә – ил терәк.

* Ҡомо юҡ һыу булмаҫ,
Бейе юҡ ил булмаҫ.

* Ҡомо юҡ һыу булмаҫ,
Яғаһы юҡ тун булмаҫ,
Законы юҡ йорт булмаҫ.

* Ҡорт күсһә, иле менән.

* Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа, күсе шунда һырыр.

* Ҡотанда* ҡуй ҡырылһа,
Ҡутыр кәзә баш булыр.

* Ҡош ояһыҙ булмай.

* Ҡояш тапһыҙ, ил дауһыҙ булмаҫ.

* Ҡыр – ҡырҡ күҙ, ил – илле күҙ.

* Ҡысҡырырға әтәсең булмаһа, ҡуналҡала тауыҡ йырлай.

* Мал ашаған еренə, ир тыуған иленə ҡайтыр.
* Мал торған ерен, ир тыуған илен онотмаҫ.
* Малсының инсеhе булыр, батшаларҙың илсеhе булыр.
* Мең башты бер баш юҡ иткəн.
* Мең яманға баш булғансы, бер яҡшыға ҡуш бул.
* Мир елкəhе ҡалын.
* Муллаға тел тейҙерhəң – телең киҫелер,
  Түрəгə тел тейҙерhəң – ҡулың киҫелер.
* Насар арба юл боҙор,
  Насар түрə ил боҙор.
* Нигеҙ ташы нигеҙҙə урынлы.
* Оло ҡаҙанда ҡайнаған сей ҡалмай.
* Оло мырҙала иман юҡ.
* Осоророға ел көслө,
  Көрəшергə ил көслө.
* Оялы көсөк көслө була.
* Ояңа ҡарап ҡанат ҡаҡ.
* Ояhында ни булhа, осҡанында шул булыр,
  Илдə түрə кем булhа, законы ла шул булыр.
* Ояhында сысҡан да батыр.
* Өйгə етhə, эт уҙыр.
* Өрөп килгəн түрəнəн ҡурҡма,
  Көлөп килгəн түрəнəн ҡурҡ.
* Өрə белмəй өргəн эт ауылға бүре килтерер.
* Ризыҡ ситкə яҙhа яҙhын,
  Тупраҡ ситкə яҙмаhын.
* Рух үлмəhə, ил үлмəҫ.
* Рəхəт булhа ла торған ер, hағындыра тыуған ил.
* Сит ерҙең гөлөнəн үҙ ереңдең дегəнəге артыҡ.
* Сит ерҙə мал да ерҫəй.
* Сит ерҙə солтан булғансы, үҙ илеңдə олтан бул.
* Сит илдең ҡарсығаhын үҙ иленең ҡарғаhы талар.
* Сит ил ситлəтə,
  Үҙ илеңə ни етə?

* Сит өйҙөң түшәгендә йоҡлағансы,
Үҙ өйөңдөң иҙәнендә йоҡла.

* Ситкә китеп эшлә, өйөңә ҡайтып аша.

* Ситкә китһәң дә ситәнгә элеп кит.

* Ситте маҡта, илеңдә тор.

* Ситтең ситәне ҡороһон.

* Ситтә йөрөгән тарығыр,
Тыуған илен һағыныр.

* Ситтән килгән эттең ҡойроғо бот араһында булыр.

* Сүлдең данын каруансы сығарыр.

* Сүлдә йөрөгән ҡуңыр ҡаҙ күл ҡәҙерен белмәҫ,
Күлдә йөрөгән ҡара өйрәк сүл ҡәҙерен белмәҫ,
Тауҙа йәйләп, ташта үҫкән, ил ҡәҙерен белмәҫ.

* Сүтәшкәне* бей итһәң, илеңде дауға ҡалдырыр.

* Сысҡандың да үҙ ояһы бар.

* Тай тулап, өйөрөнән сыҡмаҫ.

* Тараҡан – ярығында, балыҡ – арығында.

* Тау билһеҙ булмаҫ, әҙәм илһеҙ булмаҫ.

* Тау бүреле булһа, ил ороло була[42].

* Тау ҡыяһыҙ булмай,
Бөркөт ояһыҙ булмай.

* Тау ташһыҙ булмаҫ,
Ил башһыҙ булмаҫ.

* Тауға ҡарап таш атма.

* Тауға тау ҡушылмаҫ, илгә ил ҡушылыр.

* Тауына күрә төлкөһө.

* Ташлама илеңде: ҡан баҫыр юлыңды.

* Ташта тамыр юҡ, түрәлә бауыр юҡ.

* Таянма биләңә, таян илеңә.

* Тинтәк илде еңмәҫ.

* Тинтәк түрә булмаҫ.

* Тирәктең сайҡалыуы елдән,
Түрәләрҙең көн күреүе илдән.

* Төлкө ҡой(о)роғо менән,
Түрә бойороғо менән.

* Тыуған ер – яҡын,
Тыуған ил – алтын.

* Туйған ерҙән тыуған ер яҡшы.

* Туйынған да – ер,
Һыйынған да – ер.

* Тун яғаһыҙ булмаҫ,
Ил ағаһыҙ булмаҫ.

* Түр кемдеке булһа, мендәр шуныҡы,
Ер кемдеке булһа, түрә шуныҡы.

* Түргә ултыртһаң, түмәр ҙә маһая.

* Түрә аяғы тайғаҡ, түбә башы һайғаҡ.

* Түрә барҙа түргә уҙма.

* Түрә-бейҙә туған юҡ,
Туған бейҙә иман юҡ.

* Түрә бойороғона,
Төлкө ҡой(о)роғона,
Ярлы беләгенә,
Егет йөрәгенә ышаныр.

* Түрә булһаң, түҙем бул,
Телгә татлы йөҙөм бул.

* Түрә күп булһа, дау күп булыр.

*Вариант:* Түрә икәү – дау дүртәү.

* Түрә ҡуштанды һөймәҫ – унһыҙ көн күрмәҫ.

* Түрә ни әйтһә, шул дөрөҫ.

* Түрә түрен бирмәҫ.

* Түрә түрәне яҡлар.

* Түрә «тәнҡит», «тәнҡит» тиһә лә, үҙен тәнҡит иткәнде яратмаҫ.

* Түрә үтә күрә.

* Түрә һимерһә, ҡырғын килә.

* Түрәгә бармаҡ һелкмә.

* Түрәгә тел тейҙермә, телһеҙ ҡалырһың.

* Түрәгә ышанма, һыуға таянма.

* Түрәнең атын, һунарсының этен ҡаҡма.

* Түрәнең түрен күрмәҫһең,
Йыландың аяғын күрмәҫһең.

* Түрәнсң урыны түрҙә, байҙар менән бергә.

* Түрәнең һүҙе һүҙ, ни әйтһә, шул төҙ.

* Тымыҡ өйҙә тын тарығыр.

* Тыуған ерҙең туҙаны ла ҡәҙерле.

* Тыуған ерҙең әреме лә хуш еҫле.

* Тыуған ерҙәй ер булмаҫ,
  Тыуған илдәй ил булмаҫ.

* Тыуған ерем – тыуған тупрағым.

* Тыуған илдең ҡәҙерен ситтә йөрөһәң белерһең.

* Тыуған илдең эте лә яҡын.

* Тыуған илдән туйған юҡ.

* Туған тупраҡ һыуытмай.

* Тәгәрмәс әйләнгәндә, күсәренә көс төшөр.

* Тәрән йылға балыҡҡа бай,
  Һай йылғалар таллыҡҡа бай.

* Ул ҡарғаһа – бер бәлә,
  Ил ҡарғаһа – мең бәлә.

* Ут төтөнһөҙ, ил етемһеҙ булмаҫ.

* Үҙ илем – алтын бишек,
  Кеше иле – үтә тишек.

* Үҙ илең – алтын,
  Кеше иле – тотҡон.

* Үҙ илендә кем дә бей.

* Үҙ илеңдә ҡарлуғас булһаң да,
  Кеше илендә ҡарға булырһың.

* Үҙ илеңдә һалма аша,
  Кеше илендә әлбә аша[43].

  *Вариант:* Сит илдә алма аша,
  Үҙ илеңдә һалма аша.

* Үҙ илеңдә үҙең ҙур.

* Үҙ йортонда алйот та хужа.

* Үҙ йортон яманлаған кеше йортонда әрләнер.

* Үҙ ояһында эт тә юлбарыҫ.

* Үҙ өйөм – үлән түшәгем.

* Үҙ сүплегендә әтәс тә батыр.

* Үҙ түрем үҙемә иркен.

* Үҙ түремдә үҙем түрә.

* Үҙ халҡын танымаған илгә баш булмаҫ,
Баш булһа ла оҙаҡҡа булмаҫ.

* Үҙен ҙур тотҡан түрәнең һуңғы көнө хур булыр.

* Үҙәккә үткән ел яман,
Илен һатҡан ир яман.

*Вариант:* Үҙәккә үткән ел яман,
Иленән биҙгән ир яман.

* Үҙәндә йөҙгән балыҡтың үҙәге талмаҫ.

* Үкереп үгеҙ булмаҫһың,
Екереп түрә булмаҫһың.

* Үлем тураһында уйлама, илең тураһында уйла.

* Фәлән ерҙә алтын бар, барһаң –
Баҡыр табылмаҫ[44].

*Вариант:* Фәлән ерҙә ҡаҙан бар, барһаң –
Баҡырас та юҡ.

* Халыҡ аҡылы – ҡойон, ҡаршы тороуы ҡыйын.

* Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар.

* Халыҡ бар ерҙә батыр бар.

* Халыҡ дуҫлығы – күңел хушлығы.

* Халыҡ – илендә, балыҡ – күлендә.

* Халыҡ йорто – Тыуған ил.

* Халыҡ күп ерҙә аҡыл күп.

* Халыҡ көсө таш яра.

* Халыҡ ҡайғыһын хан сигер,
Хан ҡайғыһын кем сигер?

* Халыҡ ҡан түгер, хан дан күрер.

* Халыҡ менән хаҡлыҡҡа ҡарышма!

* Халҡың өсөн йәшә, халҡың өсөн үл.

* Халыҡ теләһә хан дөйәһен һуйҙырыр.

* Халыҡ һөйгәнде хаҡ* һөйгән.
* Халыҡ һүҙен ташлама,
Кеше хаҡын ашама.
* Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә.
* Халыҡ әйтһә, хата әйтмәҫ.
* Халыҡҡа таянған таймаҫ.
* Халыҡҡа хыянат – Ватанға хыянат.
* «Халҡым» тигән ир алтын.
* Халыҡты хан да еңмәҫ.
* Хан күп булһа – яу күп,
Бей күп булһа – дау күп.
* Хан күп булһа – ҡан күп,
Бей күп булһа – яу күп,
Түрә күп булһа – дау күп.
* Хан ҡашында гәйебең булһа, ҡара ерҙән ҡайыҡ тарттырыр.
* Хан урлай, халыҡ юллай.
* Хан ятҡан – ҡан ятҡан.
* Ханға ышанма, Иҙелгә таянма.
* Ханға яраған таҙға ярамаҫ.
* Хан ярлығы* ике булмаҫ.
* Хан ярлығы ҡарыуһыҙ.
* Хандан – ҡаҙыҡ, бейҙән – туҡмаҡ.
* Ханды Хоҙай ораһы булһа, үҙ халҡына хасланыр,
Байҙы Хоҙай ораһы булһа, байлығына маһайыр.
* Хандың алдынан, аттың артынан уҙма.
* Хандың эше халыҡҡа төшөр.
* Хужа юҡта эт хужа.
* Хәйерһеҙ ҡатын ир бөлдөрөр,
Хәйерһеҙ түрә ил бөлдөрөр.
* Һарттың* кейгәнен ал,
Башҡорттоң менгәнен ал.
* Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың,
Күрә-күрә күсәм* булырһың.
* Һүҙ тейһә – ағаға, уҡ тейһә – боғаға*.
* Һыйыр кемдеке булһа – быҙау уныҡы,

Бей кемдеке булһа – ил уныҡы.

* Һыйырҙың һөтө – телендә,
Ирҙең бәхете – илендә.

* Һыу башынан болғаныр.

* Һыу – һыйған ярында,
Ир – тыуған яғында.

* Һыуҙың башы – болаҡтан*.

*Вариант:* Ағым инештән башлана.

* Һыуы менән ер ҡәҙерле,
Иле менән ир ҡәҙерле.

* Һыуына күрә балығы,
Ауылына күрә халығы.

* Һыуһыҙ ергә өй ҡорма,
Утһыҙ* ергә ил ҡорма.

* Һәйбәт түрә алдан күрә.

* Һәр ерҙең үҙ емеше.

* Һәр кем үҙ өйөндә батша.

* Һәр кемгә үҙ иле ғәзиз.

* Һәр күлдә аҡҡош булмаҫ.

* Һәр сәскәнең үҙ еҫе,
Һәр халыҡтың үҙ төҫө.

* Ырыулы ил – оялы ҡаҙ.

* Ырыулының уғы юғалмаҫ.

* Ырыуына күрә йолаһы,
Биреүенә күрә доғаһы.

* Эйелгән илгә яраған.

* Эйәһенә күрә бейәһе,
Донъяһына күрә түрәһе.

* Эт артында ҡой(о)роҡ,
Түрә артында бойороҡ.

* Эт ашаған еренә ҡайта.

* Эт өргән ерҙә ауыл бар,
Ут күренгән ерҙә фатир бар.

* Эт – туйған ерендә,
Бисә – һыйған ерендә,
Ир – тыуған ерендә.

* Эт туйған ерен эҙләй,
Ир тыуған ерен эҙләй.

* Эт тә үҙ йортон белә.

* Эт шешәгендә* ҡартайыр.

* Этте илсе итеп ебәрһәң, иленә яу килтерер.

* Этте түрә итһәң, эт ҡәҙере күтәрелә.

* Эттең туйған ере бар, тыуған ере юҡ.

* Эттең тамағы ҡайҙа булһа, башы шунда.

* Этһеҙ көтөүгә бүре хужа.

* Эш күрһәткән ирҙе ил онотмаç.

* Әтәс үҙ сүплегендә үҙе мырҙа.

* Юғарыға баçҡыстан атлап ҡына менәләр.

* Юлдан сыҡһаң да илдән сыҡма.

* Ябаға тайҙы хурлама: яҙға сыҡһа, ат булыр,
Йәш егетте хурлама: уҡыһа, илгә баш булыр.

* Яҡшы ағай ил көтһә, йорт кәрәген үтенер,
Яман ағай ил көтһә, илгә дошман килтерер;
Яҡшы ағай йорт көтһә, йортка шатлыҡ килтерер,
Яман ағай йорт көтһә, йәм-байлығын бөтөрөр,
Яҡшы азамат йорт көтһә, йорто имен ҡотолор.

* Яҡшы бала иленә баш булыр,
Яман бала иленә хас булыр.

* Яҡшы егет ил ғәйебен асмаç.

* Яҡшы түрә әҙәмгә юл асыр,
Яман түрә әҙәмдең юлын быуыр.

* Ялан ерҙән ел иçер,
Елкән төбөн ҡом киçер.

* Яман атты ял баçыр,
Яман илде яу баçыр.

* Яман илдең яҡшыһы булғансы, яҡшы илдең яманы бул.

* Яман түрә йән алыр.

* Яман әҙәм ил буяр.

* Ямғыр булһа, ер туя,
Иген булһа, ил туя.

* Яңы салғы ҡаты саба.

* Яңы һепертке ҡаты һеперер.

* Ярна* һораған ир уңмаҫ,
Ҡаҙна һораған ил уңмаҫ.

* Ятҡан ерең көшөл өҫтө булһа ла, кеше өҫтөндә булмаһын.

* Ят һарыҡ ситтән ятыр.

* * *

* Булмаҫ йортҡа бөкрө билле ул тыуған.

* Быҙау һайын – бухгалтер,
Һыйыр һайын – секретарь.

* Ерле боланды тирле ҡолан ҡыуалаған[45].

*Вариант:* Йортло йыланды йортһоҙ йылан ҡыуалай.

* Инһәң – ил, сыҡһаң – яу.

* Китә белмәҫ килмешәк.

* Кәнсәһе* булғас, түрәһе лә була.

* Ҡапҡа аҫтынан кергән, түргә менеп өргән.

* Ҡой(о)роҡ башҡа бойороҡ бирмәҫ.

* Мең кешегә – бер башсы,
Ун кешегә – бер ашсы.

* Тартай – талда, бүҙәнә – еләктә.

* Түрә саҡта түрҙә, түрәлектән төшһә, күрмә.

* Хандың этенә лә «әссәләмәғәләйкүм!»

* Һәр мусимға* бер фирғәүен.

## 2. Социаль хәл, синфи мөнәсәбәттәр

* Айыуҙы айыу ашамаҫ, бүрене бүре ашамаҫ.

* Айыу балаһын алға һалһаң да иш булмаҫ.

* Айыу-бүре берекмәҫ.

* Аҡса – байҙыҡы,
Янсыҡ – тайҙыҡы.

* Аҡса таш аҫтында,
Таш аждаһа башы аҫтында.

* Аҡсалының ҡулы уйнай,
Аҡсаһыҙҙың күҙе уйнай.

* Алтын тотҡан алтынды таныр,
Күрмәй күргән ерҙе лә алтын, тир.

* Артыҡ байлыҡ – башҡа бәлә.

* Артыҡ байлыҡ әҙәмде аҙҙырыр.

* Арыҡлыҡтан ат үлмәç,
Ярлылыҡтан ир үлмәç.

* Арыçлан аста төлкө туҡ.

* Ас айыу уйнамаç.

* Ас күңеле икмәктә, туҡ күңеле хикмәттә.

* Астың хәлен ас белер.

* Астың хәлен туҡ белмәç.

* Ас һөлөк әсе тешләр.

* Астың иманы юҡ.

* Астың уйы икмәктә,
Яланғастың – бишмәттә.

* Ат аҙғыны тайға эйәрер,
Ир аҙғыны байға эйәрер.

*Вариант:* Аҙғын ат тайға эйәрер,
Әрһеҙ кеше байға эйәрер.

* Ат аҙғыны тайға эйәрер,
Ярлы малы байға эйәрер.

* Ат аҙғыны тай булһа,
Ир аҙғыны бай була.

* Ат – байҙа.

* Ат күрмәгән ат күрһә, саба-саба үлтерер,
Тун күрмәгән тун күрһә, ҡаға-ҡаға туҙҙырыр.

* Атлыға тай менһә лә килешә.

* Ауыҙы-мороно ҡыйыш булһын, бай балаһы һөйләһен.

* Ауырыу хәлен һау белмәç,
Ярлы хәлен бай белмәç.

* Ашамаһаң да май яҡшы,
Яманлаһаң да бай яҡшы[46].

* Ашаған үлмәç, ярлы бөлмәç.

* Аяғына тартһа – башына юҡ,

Башына тартһа – аяғына юҡ –
Йүнһеҙ ирҙең көнө шул.

* Бай бай өсөн тырыша, ярлы ярлыға булыша.

* Бай байға ҡарар, һыу сайға* ҡарар.

* Бай байҙы оҙатыр «ҡоламаһын» тип,
Ярлыны оҙатыр «урламаһын» тип.

* Бай байлығын итә:
Ай һайын ҡатын ала,
Ауыл һайын йорт һала.

* Бай байлығын һөйләр,
Ярлы ҡайғыһын һөйләр.

* Бай байыһа, хан булыр.

* Бай балаһы байға оҡшар,
Бей балаһы бейгә оҡшар.

* Бай балаһы байға оҡшар,
Бәйләнмәгән тайға оҡшар.

* Бай балаһы ун бишкә еткәс баш,
Ярлы балаһы утыҙға еткәс тә йәш.

* Бай бар ерҙә «малым бар» тимә,
Ғазраил бар ерҙә «йәнем бар» тимә.

* Бай барын бирмәҫ, юҡ ҡарап тормаҫ.

* Бай барҙа ыҙан һыҙма,
Түрә барҙа түргә уҙма.

* Бай бер күҙһеҙ, ярлы ике күҙһеҙ[47].

* Бай бисәһе – бей бисәһе.

* Бай бирмәҫ, ярлы ҡарап тормаҫ.

* Бай бирәсәген мал менән,
Ярлы бирәсәген тир менән түләр.

* Бай булам тиһәң, ауыл һайын өй һалдыр.

* Бай булһаң балпан* бул,
Ярлы булһаң ҡалтаң* бул.

* Бай кешегә ҡәбереҥ яҡын булмаһын.

* Бай йомошон йомошла, үҙ йомошоңдо онотма.

* Бай күңелен май баҫыр.

* Бай ҡарғышы ярлыға төшмәҫ.

* Бай малын һөйләр, ярлы зарын һөйләр.

* Бай менән бай – бер туған.

* Бай менән ҡуйҙың ҡойроҡ төбө һимеҙ –
Бай ғәйебен дә май ҡаплай.

* Бай рәхмәтен алғансы, ярлының йәне сығыр.

* Бай табышын һөйләгәндә, ярлы төшөн һөйләгән.

* Бай тапһа – ҡунаҡҡа,
Ярлы тапһа – тамаҡҡа.

* Бай төшөмө менән маҡтаныр,
Ярлы төшө менән маҡтаныр.

* Бай туғандан болот яҡын.

* Бай туғанын танымай.

* Бай һылана ла һыйпана, ярлы ямана ла ҡыуана.

* Бай «ханға етһәм» тиер,
Хан «Хоҙайға етһәм» тиер.

* Бай ярлыға мохтаж,
Ярлы аҡсаға мохтаж.

* Бай – ярлының аҙығы,
Ярлы – байҙың ҡаҙығы.

* Байға бай килһә, ялсы ауыҙына май тейә.

* Байға барма, ярлыға булыш.

* Байға барымта* юҡ,
Ярлыға ҡарымта* юҡ.

* Байға бирәсәгең, ярлынан аласағың булмаһын.

* Байға бурысыңды бир, ҡылысыңды күрһәт.

* Байға бәлә юҡ, ярлыға ярҙам юҡ.

* Байға инанма, һыуға таянма.

* Байға көндә байрам, көндә туй,
Ярлыға көндә хәсрәт, көндә уй.

* Байға мал ҡиммәт,
Ярлыға йән ҡиммәт.

* Байға ут кәрәк булһа, ярлының ҡулын һоҫҡо итер.

* Байға хеҙмәт итһәң, Алланан ҡаза күрерһең.

* Байға эшләп, бай булмаҫһың.

* Байға ялланма, юҡҡа алданма.
* Байға ялынам тип, ярлының йөҙ һумлыҡ хаҡы сыҡҡан.
* Байға ялынғансы ике ҡулыңа ялын.
* Байға яраған бай булған.
* Байға ярлы дуҫ булмаҫ.
* Байҙан аҡмаһа ла тама.
* Байҙан батрак артмай.
* Байҙан йоҡмай, балдан йоға.
* Байҙар баштан һыйпамай.
* Байҙарҙың ҡоймаһы бейек булыр,
Эстәре көйөк булыр.
* Байҙы бай яҡлар, ярлыны ярлы яҡлар.
* Байҙы мал баҫыр, ярлыны бала баҫыр.
* Байҙы яманларһың, байға барырһың.
* Байҙы ярлы күтәрер.
* Байҙың аласағы, ярлының бирәсәге күп булыр.
* Байҙың ашағаны – бал да май.
* Байҙың башын бөгөү ҡыйын.
* Байҙың бер юҡлығы, астың бер туҡлығы бар.
* Байҙың биргәне – әҙәмдең имгәге.
* Байҙың бите туңғансы, ярлының ите туңған.
* Байҙың – ете тун,
Ярлының – ите тун.
* Байҙың ишеге байға асыҡ.
* Байҙың ишеге туң тимер: уны иретергә көс кәрәк.
* Байҙың ишегенән дә керә, тишегенән дә керә[48].
* Байҙың көнө ярлы менән.
* Байҙың күңеле малда.
* Байҙың күрке мал менән.
* Байҙың ҡатыны үлһә – түшәге яңырыр,
Ярлының ҡатыны үлһә – башы ҡаңғырыр.
* Байҙың ҡоло булғансы, ярлының улы бул.
* Байҙың ҡулы уйнағанда, ярлының күҙе уйнаған.

* Байҙың ҡыҙы урынлы.

* Байҙың ҡыҙы – яҙғы тай,
Ярлы ҡыҙы – йомарлаған май[49].

* Байҙың малы бар,
Бай булһа ла, өйө тар.

* Байҙың малы иркә,
Ярлының улы иркә.

* Байҙың малы – ярлының ҡаны.

* Байҙың менән һарығы араһында ярлының етем бәрәсен бүре алған.

* Байҙың татлы ашы – фәҡирҙең ҡанлы йәше.

* Байҙың тине илап тора,
Ярлының тине бейеп тора.

* Байҙың туйы булһа, ярлының туны туҙыр.

* Байҙың түр башынан ярлының ишек төбө артыҡ.

* Байҙың – түрендә,
Ярлының – гүрендә.

* Бай түшәге – дегәнәк,
Ярлыныҡы – мамыҡ[50].

* Байҙың улы һыңар күҙле, хеҙмәтсеһе тома һуҡыр[51].

*Вариант:* Малайҙың ике күҙе юҡ, улдың бер күҙе юҡ.

* Байҙың һыйын бай күрер,
Ярлының хәлен ярлы белер.

* Байҙың эше фарман менән,
Ярлының эше дарман менән.

*Вариант:* Барҙыҡы барман менән,
Юҡтыҡы дарман менән.

* Байҙың – эше, ярлының – тамағы.

* Байҙың этәсе лә күкәй һала.

* Байҙың «юҡмын» тигәненә,
Ярлының «туҡмын» тигәненә ышанма.

* Байҙың ярлынан башҡа көнө юҡ.

* Баймын тип маҡтанма – ярлылыҡ бар.

* Байлыҡ аҙҙыра, ярлылыҡ туҙҙыра.

* Байлыҡ айырыр, фәҡирлек ҡушыр.

* Байлыҡ – бер айлыҡ.

* Байлыҡ – бер айлыҡ,
  Фәҡирлек – ғүмерлек.
* Байлыҡ – боҙға яҙған.
* Байлыҡ ерҙә ятмай.
* Байлыҡ кешенең күңелен ташҡа, күҙен аҡҡа әйләндерә.
* Байлыҡ көнөңә инанма,
  Ҡатындар һүҙенә алданма,
  Йүгерек атҡа таянма.
* Байлыҡ – күгәрсен (оса ла китә).
* Байлыҡ морат түгел, ярлылыҡ оят түгел.
* Байлыҡтың мәшәҡәте үҙе менән артыр.
* Байлыҡтың тамыры Бохарала түгел.
* Байлығыңа маһайма: байлыҡ – бер айлыҡ.
* Байрам көндө мулла байыр, ярлы ас ҡалыр.
* Баҡа, йылан – бер күлдә,
  Икеһе лә бер телдә.

  *Вариант:* Баҡа менән йыландың теле бер.
* Бар барын һөйләр, юҡ юғын һөйләр.
* Бар өҫтөнә бар – май өҫтөнә бал.
* Барҙың барлығы тейә,
  Юҡтың тарлығы тейә.
* Барҙың бары ла бар,
  Юҡтың өйө лә тар.
* Барлы ярлы булмай.
* Барлыҡ пар иткән, юҡлыҡ тар иткән.
* Бар яраштыра, юҡ талаштыра.
* Барын биргән – байға һан.
* Барма бейгә – үҙе килер өйгә,
  Барма ханға – үҙе килер малға.
* Бармаҡ менән бармаҡ тиң түгел,
  Әҙәм менән әҙәм тиң түгел.
* Баҫҡысҡа берәр аҙымлап меңәләр.
* Баталы ҡол арымаҫ, батаһыҙ ҡол йәлсемәҫ.
* Батыр уртаҡ, бей уртаҡ –
  Береһе илгә дан сәсә,
  Икенсеһе ҡан сәсә.

* Бей башына ҡол етер.

* Бей булмаған бей булһа,
Менмәгән тауҙың башын ҡалдырмаҫ.

* Бей икәү булһа, дау дүртәү.

* Бейгә бирем яҡшы.

* Бер йыл тартай һимерһә,
Бер йыл бүҙәнә һимерә.

* Бер көн көл булмайынса,
Бер көн килеп гөл булып булмай.

* Бер юлдан йөрөгән кешеләр берен-бере ашамай.

* Берәү аҡса таба, берәү муҡса тегә.

* Берәү ашағанға берәү туҡ булмаҫ.

* Берәү һыйыр һауа, берәү мөгөҙөн тота.

* Берәү туңып һикерә, берәү туйып һикерә.

* Берәү үлмәй – берәү көн күрмәй.

* Берәүгә алтын табаҡтан нан* бирә,
Берәү нан хәсрәтенән йән бирә.

* Берәүҙең ер күтәрмәҫ малы бар,
Берәүҙең ат күтәрмәҫ даны бар.

* Берәүҙәр түрә, берәүҙәр түрә янында көн күрә.

* Берәүҙәргә көндә байрам, көндә туй;
Берәүҙәргә көндә һуғыш, көндә уй.

* Бикәләр түр өсөн талашыр.

* Биргән бейгә яраған, ауыҙы-башы ҡанаған.

* Биргән бейгә яраған,
Бирмәгән кемгә яраған?

* Бирәм тигән бей булмаҫ.

* Бирәйем тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына,
Бирмәйем тигән ҡолона – тартып алыр ҡулынан.

*Вариант:* Бирәйем тигән улына –
Сығарып ҡуйыр юлына.

* Боло* булһа, ҡоло табыла.

* Болот елгә ҡаршы йөрөмәй.

* Бохарҙа малы барҙың күңеле туҡ.

* Бөлгән илгә бөкөрө билле бей килә.

* Бурҙы йөккә,
Мулланы мәктәпкә,
Кулакты колхозға яҡын ебәрмә.

* Бүре ас булһа ла елкәһен көҙөрәйтер.

* Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай.

*Вариант:* Бүре балаһын бүреккә һалһаң да берекмәҫ.

* Бүре бәйләүгә күнмәҫ, әйҙәүгә килмәҫ.

* Бүре күләгәһендә ҡош туйыр.

* Бүре ҡартайһа ла, бер ҡуйлыҡ кеүәте ҡала.

* Бүре ҡуйға иш булмаҫ,
Ярлы байға дуҫ булмаҫ.

* Бүре менән дуҫ булһаң, этең янында булһын.

* Бүрегә аҙыҡ бирһәң, тешен һындырып бир.

* Быҕау, алтын булһа ла – быҕау.

*Вариант:* Ситлек алтын булһа ла, ситлек булыр.

* Бысаҡ ҡынын киҫмәҫ.

* Ғәйрәт – атлыла,
Аҡыл – ашлыла,
Һүҙ – маллыла.

* Дуңғыҙҙан бер ҡыл, байҙан бер һөйәк (артмаҫ).

* Дәрүиш ашауынан, бай йәшәүенән (билгеле).

* Еккән атың тай булһа ла, торған ерең бай булһын.

* Елгә ҡаршы барһаң, елдән етеҙ бул.

* Ерен һатҡан – гүрен һатҡан[52].

* Ерен һатҡан – йырлап тамаҡ туйҙырған.

* Ерең һатһаң, ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың.

* Ерен һатып эскән – ҡол көнөнә төшкән.

* Залимдың үҙенән залим эте булыр.

* Заты башҡа менән болан аулама.

* Иҙелеп йәшәгәнсе, үҙеңә үҙең баш булып йәшә.

* Ике йыртыҡ бер килһә, абруйыңдың киткәне.

* Икмәге юҡ сәйҙән биҙ,
Хәйере юҡ байҙан биҙ.

* Илдә байрам булғанда, байҙа – майҙан, ярлыла – айран.

* Ир ярлы булһа яурак* булыр,
Атябыҡ булһа тайлаҡ булыр.

* Ирек барҙа ирлек бар.

* Иҫке байҙың бөлгәне – яңы байҙың көлгәне.

* Иҫке байҙан йорт ҡалмаҫ,
Яңы байҙан сүп ҡалмаҫ.

* Иҫәр уй менән байыр,
Ярлы төш менән байыр.

* Йотсолоҡ йомарт ирҙең дә ҡулын бәйләй.

* Йыйын йондоҙ йыйылһа ла – яҡтылығы айҙай юҡ;
Ылғый* ярлы йыйылһа ла – яңғыҙ өйлө байҙай юҡ.

* Йылан йыландың ҡойроғона баҫмаҫ.

* Йыландың аяғын, байҙың ашын күрмәҫһең.

* Йыландың башына һуҡһаң, ҡойроғо уйнай.

* Йыландың башынан бигерәк ҡойроғо уйнай.

* Йыландың үҙе үлһә лә, ҡойроғо үлмәҫ.

* Йылы һөйәк һындырмай,
Бай ҡолдо тындырмай.

* Йылыға йылан эйәләшә.

* Йәмһеҙ булһа ла – бай ҡыҙы матур,
Ярлы ҡыҙы матур булһа ла – йәмһеҙ.

* Кем бойорһа – шул солтан,
Кем йүгерһә – шул ҡуштан.

* Кем ҡулында иллелек, уның һүҙе иң элек.

* Кем талай – шул байый.

* Кемдең малы – шуның даны.

* Кемдең эшен эшләһәң,
Шуның ашын ашарһың.

* Кеше атына менгән тиҙ төшәр.

* Кеше елкәһе ауыртмай.

* Кеше ишеген асҡансы, гүр ишеген ас.

* Кешегә сәсең менән ер һеперһәң дә ярамаҫһың[53].

* Кешене бәхет айыра.

* Кешене йә туҡлыҡ ҡуша, йә юҡлыҡ ҡуша.

* Килешһә – бейҙән,
Килешмәһә – ҡолдан.

* Көнлөксөгә көн оҙон,
Ҡарауылсыға төн оҙон.

* Көнлөксөгә көнөң төшмәһен.

* Көслө алдында эйелмә,
Ҡыйынлыҡ алдында бөгөлмә.

* Көслө менән көрәшмә,
Маллы менән даулашма.

* Көслө Хоҙай менән алышыр.

* Көслөгә түрә юҡ.

*Вариант:* Көслөгә Тәңре юҡ.

* Көслөләргә көн тыуған,
Көсһөҙҙәргә төн тыуған.

* Көслөнөкө – замана.

* Күк үлән үҫкән урынға үҫә[54].

* Күккә төкөрһәң, битеңә төшөр.

* Күктән кейеҙ яуһа ла, ҡолға олтораҡ теймәҫ.

* Күл күлгә ҡойор.

* Күршелә бай булһа, яҙығы ярлыға тейә.

* Ҡаҙ ҡаҙ менән, өйрәк өйрәк менән осор.

* Ҡалаҡ тотһа, хан ҡыҙының ҡулы ҡабара.

*Варианттары:* Хан ҡыҙының ҡулы ҡумыҙ тотҡанға ҡабарған.
Хан ҡыҙының ҡулы энә тотҡанға ҡабарған.

* Ҡан ҡәрҙәште мал ҡәрҙәше айырған.

* Ҡар башына ҡар етер,
Бей башына ҡол етер.

* Ҡар башына ҡар етер,
Хан башына хан етер.

* Ҡар башын ҡар ашай,
Ярлы башын бай ашай.

* Ҡара халыҡ – ҡара һарыҡ.

Айырым булһа, көнө арыҡ.

* Ҡарға ҡарға менән осор.
* Ҡарға күҙен ҡарға соҡомаҫ.
* Ҡарға ҡарғаны маҡтай.
* Ҡазый менән ҡарыулашма,
  Хәлле менән даулашма.
* Ҡарт ҡәҙерен йәш белмәй,
  Ауырыу ҡәҙерен һау белмәй,
  Фәҡир ҡәҙерен бай белмәй.
* Ҡартлыҡ менән фәҡирлек – ике дошман.
* Ҡатын менән ҡатын талашһа,
  Йәшлеге менән ҡартлығын әйтер;
  Бай менән ярлы талашһа,
  Барлығы менән юҡлығын әйтер.
* Ҡойошҡаны көмөштөр – ҡолдоң аты ҡол булыр,
  Ҡойошҡаны йүкәлер – бейҙең аты бей булыр.
* Ҡой(о)роҡ башты уҙмай.
* Ҡол һағышын бей белмәҫ.
* Ҡол һағышын бей белмәҫ,
  Бей һағышын хан белмәҫ,
  Ярлы көнөн бай белмәҫ,
  Яуҙың серен яу белмәҫ.
* Ҡолдоң рәхәте тамаҡ туғында.
* Ҡояш нурын тиҙәк бысрата алмаҫ,
  Колхоз юлын кулак бысрата алмаҫ.
* Ҡуштан ҡатын иргә яраған,
  Ҡуштан егет түрәгә яраған.
* Ҡуштанға ышанма, ҡушҡанға ышан.
* Ҡәҙерен белмәгән байлыҡтан, ҡәҙерен белгән ярлылыҡ яҡшы.
* Мал ҡәҙерен белмәҫ байға ҡаза бирер язаһын,
  Ҡаза бирер язаһын да, ауырыу алыр маҙаһын.
* Мал малға еткәнсе, ғазраил йәнгә етер.
* Маллы кеше тупланда, малһыҙ кеше алпанда.
* Малһыҙ кеше һанһыҙ.

  *Вариант:* Малһыҙ егет – һанһыҙ егет.
* Малы барҙың хәле бар.

* Малы барҙың һаны бар.

* Малы күптең даны бар.

* Малың бөтһә, ҡәҙерең бөтә.

* Матур сәсә* тайҙыҡы, матур бисә байҙыҡы.

* Матурлыҡ морат түгел, фәҡирлеҡ оят түгел.

* Моңло моңон мөңрәгәндә, моңһоҙҙоң башы ауыртҡан.

* Мулланың тамағын туйҙыра алмаҫһың,

  Байҙың эшен бөтөрә алмаҫһың.

* Мәктәп китапһыҙ булмай,
  Колхоз уставһыҙ булмай.

* Өлкәр ҡалҡһа, ҡолон һөткә, ҡол йоҡоға туя.

* Өлөшлө ҡул килешле.

* Сапма ташҡа: балтаң туйрылыр.

* Себен тулап тәҙрә вата алмаҫ.

* Ситкә ышанған илһеҙ,
  Дошманға ышанған ҡулһыҙ,
  Байға ышанған аш-һыуһыҙ,
  Ҡолға ышанған атһыҙ ҡалған.

* Ситлеккә ябылғас, йырткыс та йыуашлана.

* Суртандың үҙе үлһә лә, теше үлмәй.

* Сәпсек сәпсек менән оса.

* Тайға тай эйәрер, байға – бай.

* Тауға ҡарап тау булма.

* Тауҙан таш артмаҫ,
  Байҙан аш артмаҫ.

* Тауыҡ булғансы, әтәс бул[55].

* Тауыктың һимергән һайын арты бөрөшә[56].

* Тейгәнгә – тейен башы,
  Теймәгәнгә – төймә башы.

* Теләнергә һалынған оялмаҫ.

* Теләнсегә – бер тамсы.

* Теләнсегә якты йөҙ күрһәтһәң, ямаулыҡ һорай.

* Теләнсене хәйерсе талай.

* Теләнсене эт тә яратмай.

* Теләнсенең байлығы – таяғы ла тамағы.

* Теләнсенең итәгенә бойҙай һалһаң, ел осора.

* Теләнсенең ҡапсығы тулмаҫ.

* Теләнсенең ҡапсығы тулһа ла, күҙе туймай.

* Тибешмәгән ишәктең үлеме себендән булыр.

* Тирәк сайҡалһа – елдән,
  Бейҙең бей булыуы – илдән.

* Тубылғынан өй булмаҫ,
  Ҡолдан тыуған бей булмаҫ.

  *Вариант:* Тубылғынан өй булмаҫ,
  Туҡалдан тыуған бей булмаҫ.

* Туҡ бүрене тауға табан ҡыҫтама.

* Туҡлыҡ ураштыра, аслыҡ талаштыра.

* Туны яманды эт ҡаба.

  *Вариант:* Итәге яманды эт ҡабыр.

* Түшенә айыл батҡанын эйәһе белмәҫ, ат белер.

* Үгеҙ мөгөҙөнән үгеҙ үлмәҫ.

* Үҙеңдән тыумай ул булмаҫ,
  Һатып алмай ҡол булмаҫ.

* Үлгән кеше йәндән яҙған,
  Бөлгән кеше малдан яҙған.

* Үлгән һарыҡ бүренән ҡурҡмаҫ.

* Үлмәһәң – бай булырһың,
  Иренмәһәң – оҫта булырһың.

* Файҙаһы юҡ байҙан киң күңелле ярлы артыҡ.

* Фәҡирлек, аслыҡ ялҡаулыҡтан килә.

* Фәҡирлек ғәйеп түгел, ялҡаулыҡ ғәйеп.

* Фәҡирлек инәһе – наҙанлыҡ.

* Фәҡирлек үҙ эйәһен ташҡа сәләм бирҙерер.

* Фәҡирлек һуғыштырһа, байлыҡ килештерер.

* Хан йорто – ханым йорто,
  Бей йорто – бикә йорто.

* Хан килә, хан килә – хан артынан ҡан килә.

* Хан ҡаршында ғәйебең булһа,
  Ҡара ерҙән ҡайыҡ тарттырыр.
* Хан ҡыҙы – ханыш*,
  Бармаҡтары – ҡамыш.
* Хан юлында ҡан ята.
* Ханға бүрегеңде бир – ҡылысыңды күрһәт.
* Хужаның ҡарыны туҡ, колонда эше юҡ.
* Хужаһы ҡайһы яҡҡа мыйығын борһа,
  Эте шул яҡҡа ҡойроғон борор.
* Хужаһы кемде ҡабул итһә, эте шуға ҡойроҡ болғар.
* Хужаһына күрә ялсыһы.
* Хужаһы ҡулын болғаһа, эте ҡойроғон болғар.
* Хәйерсе байыһа, хәйер бирмәҫ.
* Хәйерсе байыһа, юлға һыймаҫ.
* Хәйерсе хан булһа, ямаулы күлдәк кейер.
* Хәйерсегә он бирһәң, ҡапсыҡ һорар.
* Хәйерсегә сәләм бирһәң, санаңа ултырыр.
* Хәйерсегә урын бирһәң, түргә уҙыр.
* Хәйерсенән һаулыҡ һорашһаң, хәйер һорар.
* Хәйерсегә яҡшы өндәшһәң, ямаулыҡ һорар,
  Ямаулыҡ бирһәң, ҡунырға һорар.

  *Вариант:* Ярлыға яҡшы өндәшһәң, ямаулыҡ һорай.
* Хәйерсегә ялсы кәрәкмәй.
* Хәйерселек – хәйерһеҙлек.
* Хәйерсене бала баҫыр.
* Хәйерсене хәйерсе күрә алмай.
* Хәйерсенең аҡсаһын ел осора.
* Хәйерсенең – тамағы ла ҡапсығы.
* Хәйерсенең тамағы туйғас, бей булған.
* Хәйерһеҙ булһа, хандан биҙ.
* Хәйләһеҙ бей булмаҫ.
* Һаран байҙан йомарт ярлы яҡшы.
* Һөйәк күп булһа, эт талашмай.

* Һыу соҡорға йыйылыр.

* Шыр яланғаслыҡ мунсала ғына яҡшы.

* Эйелгән ағасҡа үрмәләү еңел.

* Эйелгән башты ҡылыс сапмай.

* Эйәләштереү – илсенән,
Ялыҡтырыу – ялсынан.

* Эт аяғына эт баҫмаҫ.

* Эт балаһы бүрегә иш булмаҫ.

* Эт еңгәнен талар.

* Эт хужаһына таянып өрөр.

* Эт эйәһен белер.

* Эт этте ашамаҫ, түрә түрәне ашар.

* Эт этте тешләмәй.

* Эте торор, көсөгө өрөр.

* Этенә типһәң, эйәһенә тейә.

* Этте күп ашатһаң – эйәһен талай,
Бүрене күпме аҫыраһаң да урманға ҡарай.

* Этте түрә итһәң, бүре булыр.

* Эттән һөйәк артмаҫ.

* Әсе һүҙгә түҙгән бей булыр,
Эҫе көнгә түҙгән бай булыр.

* Юҡ ҡәҙерен бар белмәҫ,
Ярлы ҡәҙерен бай белмәҫ.

* Юҡлыҡ өйрәтә, байлыҡ боҙа.

* Юҡтан бар булған – Тәңре менән тиң булған;
Барҙан юҡ булған – үлем менән тиң булған.

* Юҡтың бары ла бар,
Барҙың өйө лә тар.

* Яйын белгән майын имә.

* Яҡшы аттың башын нуқта киҫер.

* Ялсыға ялланма, юҡҡа алданма.

* Ялсының ялы ҡәберҙә.

* Яман юлдаш яуға алдырыр,
Яман бей дауға ҡалдырыр.

* Яңғыҙ тирәк өй булмаç,
Бирәм тигән бей булмаç.

* Ярлы бай булырға тырышыр,
Ауырыу һау булырға тырышыр.

* Ярлы башы менән уйлай,
Бай кеçәһе менән уйлай.

* Ярлы беләгенә, егет йөрәгенә ышаныр.

* Ярлы булһаң – күршең һөймәç,
Сирле булһаң – ирең һөймәç.

* Ярлы булһаң – туғаның яратмай,
Сирле булһаң – ҡатының яратмай.

* Ярлы булыр кешегә ҡазалы мал тап булыр.

* Ярлы булыу ярай ул – ятып эсәр аш булһа.

* Ярлы еүеш күлдәген өçтөндә киптерер.

* Ярлы ил эҙләй, бай файҙа күҙләй.

* Ярлы кейсме бер булыр,
Бер булһа ла мул булыр.

* Ярлы кешенең аҡсаһын яман тауар бөтөрөр.

* Ярлы кешенең балаһы күп булыр.

* Ярлы кеше зарлы булыр.

*Вариант:* Ярлы кеше зарлы булыр,
Өй түбәһе ҡарлы булыр.

Ярлылыҡ – зарлылыҡ.

* Ярлы кеше – ил эсендә ғәрле кеше.

* Ярлы кеше – сирле кеше,
Сирле кеше – ярты кеше.

* Ярлы кеше яманыр, яманыр ҙа ҡыуаныр.

* Ярлы көнөң – ялыныс.

* Ярлы ҡулына аҡса керһә, төн сыҡҡансы этәс булып ҡысҡыра.

* Ярлы малы малға еткәнсе, ғазраил йәнгә етә.

* Ярлы малы арҙан осор.

* Ярлы менән барлы бер ергә һыйышмай.
* Ярлы менән ҡоҙа булғансы, бей менән барымтала бул.
* Ярлы тапҡанда, бай өләшкәндә.
* Ярлы тапҡанда, бай һағынғанда.
* Ярлы уйға бай булыр.
* Ярлы үлгәндә мулла ауырыу булыр.
* Ярлы ярлыға яла яҡмаҫ.
* Ярлыға унда ла яр, һулда ла яр.
* Ярлыла – бала,
  Байҙа – тана.
* Ярлылыҡ оят булмаһа ла, бәхет түгел.
* Ярлылыҡ яман – йәндәй дуҫты ят итә.
* Ярлылығын йәшергән байымаҫ.
* Ярлынан һорама, байға һыйынма.
* Ярлыны хәйерсе талай.
* Ярлының аҡсаһын бай бөтөрөр.
* Ярлының аты булһа – бесәне булмай,
  Бесәне булһа – аты булмай.
* Ярлының ауыҙы ашҡа тейһә, мороно ҡанай.
* Ярлының ашын бисмилла ҡорота, ти.
* Ярлының байлығы – бала.
* Ярлының байрамы – яңы күлдәк кейгәндә.
* Ярлының байыуы ожмахта.
* Ярлының баҫыуын баҡра баҫыр.
* Ярлының берҙән-бер аты, ул да бейә.
* Ярлының йәне тыныс.
* Ярлының итәгенә ҡурмас һалһаң, түгелер.
* Ярлының күңеле тулы, кеҫәһе буш.
* Ярлының мәйете лә арзан.
* Ярлының тауығы ла ҡаҙ булып күренер.
* Ярлының улы – байҙың ҡоло.
* Ярлының улы булғансы, байҙың ҡоло бул.
* Ярлының ябыуы – болот.
* Ярлының яңғыҙ бәрәсен бүре ашар.

* Ярлының ярлылығы бөткәс тә,
Ярлылыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер,
Байҙың байлығы бөткәс тә,
Байлыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер.

* Ярлының яҫтығы – ер, юрғаны – болот.

* * *

* Аҡса баҡыр, һанарға таҡыр.

* Аптыраш менән йөҙәш икәүһе кергән өйҙәш.

* Ас теләнсене туҡ теләнсе ҡыҫтаған.

* Ас эт ҡойроғон туҡ эт кимергән.

* Асҡа туҡ булып ята.

* Асты хәйерсе талаған.

* Ат тапҡанды һыйыр ашай.

* Ашау – байҙан, үлем – Хоҙайҙан.

* Аяҡҡа тартһаң – башҡа юҡ,
Башҡа тартһаң – аяҡҡа юҡ.

* Бай булһаң – үҙ туған, ярлы булһаң – тыума ят.

* Бай ишеген күп астым – тап йөҙөмдөң ҡараһын,
Бай утынын күп киҫтем – тап ҡулымдың яраһын.

* Бай килене булғансы, ярлы ҡыҙы булһамсы.

* Бай ҡашына барып ҡун – байымаһаң, миңә кил,
Юҡ ҡашына барып ҡун – юғалмаһаң, миңә кил.

* Бай тапһа – ҡотло булһын!
Ярлы тапһа - ҡайҙан алдың?

* Бай тигән даны бар,
Ҡатҡан-ҡотҡан туны бар.

* Байҙар күк ат егә тип, мин дә ектем күк бейә.

* Байҙыҡы бара торһон,
Ярлыныҡы тора торһон.

* Байҙың малын биргән,
Юҡтың көнөн биргән.

* Байҙың туны – төлкө,
Ярлы кейһә – көлкө.

* Байлыҡ – бөгөн миндә, иртәгә һиндә.

* Байлыҡҡа сама юҡ,
Егергә сана юҡ.

* Баш киҫеү булһа ла, тел киҫеү түгел.

* Баш көн килде байым – алып китте бисәмде,
Буш көн килде байым – килтереп ҡуйҙы бисәмде.

*Вариант:* Шаршамбы менән кесаҙна – алып китте бисәмде,
Дүшәмбе менән шишәмбе килтереп бирҙе бисәмде.

* Бейә байҙыҡы булһа ла, кешнәүе минеке.

* Бер байҙың йорто өсөн икс сысҡан талашҡан.

* Бер кеше һабан артынан йөрөй,

Ете кеше ҡалаҡ тотоп йөрөй.

* Бер ҡулы балда, бер ҡулы майҙа.

* Бер эшсегә ун башсы.

* Берәүҙең берҙән-бер тауығы торна булып ҡысҡырған.

* Бөлгән баяр эсеп үлгән.

* Донъяһының яйы юҡ, ҡоймағының майы юҡ.

* Көң* сәсендә көмөш бар, ул да булһа бикәгә.

* Көтөүсенең ялсыһы үлгән.

* Күңел бай, кеҫә һай.

* Күрмәй күргән – күн итеген башына кейгән.

* Кәбеҫтә арҡаһында һуған да һыуға туйған.

* Ҡоҙғондоҡо ағас башында, ҡарғаныҡы уртаҡ.

* Ҡыш ас, йәй яланғас.

* Ҡулы ҡайҙа – ауыҙы шунда[57].

* Ҡулым ҡара, йөҙөм аҡ[58].

* Ҡырҡ йортҡа бер әнә.

* Өйө бейек тә өйрәһе шыйыҡ.

* Теләнсе оятын кеҫәһенә һалған.
Ул да йыртығынан төшөп ҡалған.

* Туҡһан ямау, ҡырҡ терәү,
Тыпыр тояҡ, ҡыптыр тун.

* Үҙем ярлы, буйым ғәрле.

* Үҙем ярлы булһам да йөҙөм яҡты.

* Үҙең ярлы булһаң да, аҡсаң күп булһын инс.

* Үлгән дә үлгән, бөлгән дә бөлгән.
* Хәйерсегә ел ҡаршы.
* Хәйерсене теләнсе ҡыҫтаған.
* Хәйерсенскен ел осорған.
* Хәл хәйер, ярлы байыр.
* Эте лә баш, бете лә баш.
* Эте талай, бете атлай.
* Юҡ булһаң – бирә алмай,
Бар булһаң – күрә алмай.
* Юҡтан бар булған, барҙан юҡ булған.
* Яҙ – игенсе, ҡыш – теләнсе.
* Яҡшы булһа – байҙан,
Яман булһа – ҡолдан.
* Ярлы ат менһә – кем аты,
Тун кейһә – кем кейеме?
* Ятыу-тороу байҙарса, өҫтә кейем йоҡараҡ.

### 3. Дин, дин әһелдәре тураһындағы мәкәлдәр[59]

* Айыуға аҡыл өйрәткән – таяҡ,
Муллаға намаҙ өйрәткән – тамаҡ.
* Алла бирмәгәнде мулла бирмәҫ.
* Аллаға тапшырған атһыҙ ҡалған.

*Вариант:* Аллаға тапшырған ашһыҙ ҡалған,
Кәсебснән буш ҡалған.

* Аллаға – шөкөр, муллаға – фытыр.
* Аллаға ышан, үҙең ҡымшан.
* Аллаға ышанған ас ҡалған,
Муллаға ышанған буш ҡалған.

*Вариант:* Аллаға ышанып, ас ҡалған,
Муллаға ышанып, тунһыҙ ҡалған.

* Аллаға ышанма, үҙеңә ышан.
* Алланан көткән өй һалыуҙан буш ҡалған,
Ҡулындағын бирсп, ас ҡалған.
* Алланан көткән ут йотҡан,
Эшләп тапҡан тун теккән.

* Алланан ҡурҡмағандан ҡурҡ.

* Аллаһы муллаға, муллаһы Аллаға һылтар.

* Атына күрә дуғаһы,
Саҙаҡаһына күрә доғаһы.

* Атыңды Аллаға тапшырһаң да, дилбегәһен үҙең тот.

* Алйот һөйләүҙән, мулла һораүҙан туймаç.

* Ашы юҡ ураҙа тотҡан, эше юҡ намаҙ уҡыған.

* Ашың күп булһа, бисмилла кәрәкмәй.

* Байҙың күңеле малда, мулланыҡы майҙа.

* Байлыҡ – дингә терәк,
Дин – байлыҡҡа терәк.

* Балыҡ тәрәнде, мулла биргәнде ярата.

*Вариант:* Балыҡ тәрәнде, суфый биргәнде ярата.

* Буп* – бумала,
Мулла – сүмәлә.

* Буп суҡына, мулла уҡына.

* Бурҙы йөккә ебәрмә,
Мулланы йортка ебәрмә.

* Бутҡа эсендә ҡалъя күрһә, әлхәм уҡыр муллалар.

* Бәйғәмбәрҙең сөннәте өс.

* Бәләнән ишан да ҡаса.

* Дингә ышанған малһыҙ ҡалыр.

* Дине юҡтың көнө юҡ.

* Динленең өмөтө гүрҙә,
Динсенең (мулланың) өмөтө түрҙә.

* Доға ҡабатлауҙан иман иçкермәй.

* Донъя эшен әхирәткә ҡалдырма.

* Икмәкһеҙҙең иманы юҡ.

* Ил мосолман – итәк киң.

* Иманһыҙ ҡурҡаҡ булыр.

* Ир үтәлмәç йылға юҡ,
Теләнмәгән мулла юҡ.

* Иртә намаҙ, кис тә намаҙ – каккан казығың калмаç.

* Йыландың тәпәйен күрмәçһең,
Мулланың әпәйен күрмәçһең.

* Йәне көйгән Тәңреһен карғаған.

* Кеçәң бай булһа, муллаға кермә.

* Көслө Хоҙай менән алышыр,
Көсһөҙ эшен әхирәткә тапшырыр.

* Көтмә Алланан, көт балтанан.

* Күңел бирен укылмаған намаҙ күккә ашмаç.

* Кабул булмаç доғаға амин тотма.

* Карак карғана, мулла зарлана.

* Карак менән муллаға бары ла хәләл.

* Карак урлап, мулла юллап, түрә алдап ашай.

* Карак – әҙәм көлкөһө,
Мулла – ауыл төлкөһө.

* Карақты йүтәл, мулланы тамак харап итә.

* Каскан да «Алла» тиер,
Кыуған да «Алла» тиер.

* Мин тигәнгә Алла бар,
Туң тимергә балта бар.

* Мулла аҙһа, мәхәлләгә ни һан?

* Мулла аласағын онотмаç.

* Мулла алыуын белер, биреүен белмәç.

* Мулла белгәнен укый,
Тауык күргәнен сукый.

* Мулла «бир» тигәнде ишетмәй, «мә» тигәнде ишетә.

* Мулла кунған – мул кергән.

* Мулла менән дуç булһаң, саҙакаң кеçәңдә булһын.

* Мулла менән түрә ил өçтөндә көн күрә.

* Мулла мулланы һөймәç.

* Мулла үлеме тамактан,
Эскесе үлеме кабактан.

* Муллаға – маҙар,
Сауҙагәргә – баҙар.

* Муллаға тел тейҙерһәң – телең киҫелер,
  Түрәгә тел тейҙерһәң – ҡулың киҫелер.

* Муллала – бирем, ярлыла керем булмаҫ.

* Мулланан аҡыл һораһаң, аҡтыҡ атыңды һорар.

* Мулланан – доға,
  Мужиктан – дуға.

* Мулланың нәфсеһе бер батман.

* Мулланың әйткәнен тыңла, ҡылғанын ҡылма.

* Наҙан мулланың сәлләһе ҙур булыр.

* Насар арба юл боҙор,
  Насар ҡуштан ил боҙор,
  Насар мулла дин боҙор.

* Суфый күп ерҙә шайтан күп.

* Суфый һуған һөймәҫ, күрһә, ҡабығын да ҡуймаҫ.

* Тинтәк мулла – тилергән үгеҙ.

* Түрә барҙа «малым бар» тимә,
  Мулла барҙа «ауырыуым бар» тимә.

* Түрә приказ менән, мулла указ менән.

* Тәңре эше фарман менән,
  Бәндәнеке – дарман менән.

* Урманға барһаң балтаңды,
  Муллаға барһаң ҡалтаңды онотма.

* Ут утындан, күҙ ҡарауҙан, мулла береһенән дә туймаҫ.

* Үләнле ерҙә мал һимерер,
  Үлемле ерҙә мулла һимерер.

* Юрғанан юрға тыуа, мулланан мулла тыуа.

* Халыҡ наҙан булһа, муллаға төшөм.

* Хоҙайҙың биргәненән бирмәгәне күп.

* Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң.

* Хөрмәтенә күрә доғаһы.

* Шәриғәт сей тире кеүек: күпме тартһаң да һуҙыла.

* Шәриғәттә оят юҡ.

* Ырымбурҙа арба күп,
Ҡарғалыла* мулла күп.

* Этҡә һөйәк, муллаға ит бир.

* Этһеҙ ауылда мулла таяҡһыҙ йөрөр.

* Ямғыр менән ер күгәрә,
Доға менән ил күгәрә.

* Ярлы белəгенə, мулла телəгенə ышаныр.

* * *

* Алланан йәйәү ҡасҡан – муллаға килеп ҡапҡан.

* Аңҡау* ауылға арамъя* мулла.

*Вариант:* Алама ауылға aураҡ* мулла.
Аңра халыҡҡа аңҡау мулла.

* Башы салмалы, аҡылы самалы.

* Динем өсөн түгел, көнөм өсөн.

* Кем үлһә лә үлһен, мәзингә фидия* булһын.

* Мулла ла Алла түгел, беҙ ҙә хайуан түгел.

* Таш мәсеткә ағас мәзин.

* Тыштан сапан, эстән шайтан.

* Уҡымай мулла булған,
Суҡымай ҡарға булған.

### 4. Һуғыш-тыныслыҡ, дау-ғауға

* Айыуҙан ҡасҡан – бүрегә тарыған,
Дошмандан ҡасҡан – үлемгә тарыған.

* Айыуҙан ҡурҡҡан урманға бармаç.

* Алтын-көмөш күп ерҙә фетнә сыға.

* Алтын серемәç, яу арымаç.

* Алтын таш ҡаш булмаç,
Алабута аш булмаç,
Дошман яуҙа иш булмаç.

* Алыçтағы ауҙы күргәнсе, яҡындағы яуҙы күр.

* Аңғармаған таш баш ярыр.

* Арыҫландың уйынан төлкөнөң муйыны өҙөлә.

* Ас бүре арыҫланға ташланыр.

* Ас французға ала ҡарға ла аш[60].

* Ас эт кеше талар.

* Асыуыңа атлан, дошман өҫтөнә ташлан.

* Ат кешнәшеп, һалдат һөйләшеп дуҫлашыр.

* Ат ҡәҙерен сапҡан белер,
Мылтыҡ ҡәҙерен атҡан белер.

* Атаһы айырымды ау ҡушыр,
Өйөрө айырымды яу ҡушыр.

* Атҡан ерҙә уҡ ҡалыр.

* Атһаң – тейҙерә ат,
Атмаһаң – ҡулың тарт.

* Ауыл эте ала булыр – бүре килһә, берегер.

* Аяҙ көндөң йәшененән ҡурҡ.

* Баҙнатлы тыныслыҡ яратыр.

* Байҙың ыҙғышы, батшаның һуғышы бөтмәҫ.

* Байлыҡ өсөн һуғышма, ирек өсөн һуғыш.

* Барымтаға* – барымта,
Ҡарымтаға – ҡарымта*.

* Барымтаға – ярымта.

* Барымтанан ҡурҡҡан мал йыймаҫ.

* Батшалыҡ – яу менән, яу – мал менән.

* Бау* булыр, бау булыр,
Бау булған ерҙә дау булыр,
Дау булған ерҙә табыш сығыр,
Табыш сыҡҡан ерҙә үлөш сығыр.

* Башыңа дау килһә, белегең китер.

* Бер бөртөк шырпы бөтә ауылды үртәргә етә.

* Бер ҡоралды мең ҡоралһыҙҙы еңгән.

* Бер ҡурҡҡан эт өс көн өрөр.

* Бер һөйәк ике эткә етмәй.

* Бер һуҡ, берәгәй һуҡ.

* Болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоуы еңел[61].

* Буранлы көн бүрегә иркенлек.

* Бүре йөнөн алыштырыр, бүрелеген алыштырмаҫ.

* Бүре ҡанға туймаҫ.

* Бүре менән дау ҡорһаң, этте яныңа ал.

* Бүрегә ҡунаҡҡа барһаң, этеңде ҡалдырма.

* Бүрене ҡыҫырыҡлап килтерһәң, өҫкә ташланыр.

* Бүренең көсө тешендә.

* Бүренән бүрек ташлап ҡотолоп булмай.

* Бүренән ҡурҡҡан көтөү көтмәҫ,
  Сысҡандан ҡурҡҡан иген икмәҫ.

* Бүренән ҡурҡҡан урманға бармаҫ.

* Бүренән ҡурҡҡан һарыҡ аҫырамаҫ.

* Бүрек бәреп бүрене ҡурҡытма.

* Вайымһыҙ баш – яуға ярҙамсы.

* Ғауға ҡупһа, ҡараҡҡа файҙа.

* Ғәйепһеҙ дуҫ эҙләгән дуҫһыҙ ҡалған,
  Дауһыҙ ил эҙләгән ерһеҙ ҡалған.

* Ғәскәр башы ғәҙел булһа – дошман аяҡ аҫтында.

* Дау арымаҫ, алтын серемәҫ.

* Дау булмай яу булмаҫ.

* Дау дауыл менән бер.

* Дау – дауыл, дауыл даръя аҡтара.

* Дау – ирҙеке, яу – илдеке.

* Дау ҡубыр, дау артынан яу ҡубыр.

* Дауға барғансы яуға бар.

* Даулаған ҡоро ҡалмаҫ.

* Дауыллы көндө эт ҡоторор.

* Дауылһыҙ көндө дау барын онотма,
  Вайымһыҙ көндө яу барын онотма.



1.0144.05

* Дошман менән дуҫ булһаң, балтаң билеңдә булһын.

* Дошманға үлем сәсһәң – еңеү урырһың,
Ҡурҡаҡлыҡ күрһәтһәң – хур булырһың!

* Дошманға үс – һуғышсыға көс.

* Дошмандан илең һаҡла,
Ярамһаҡтан серең һаҡла.

* Дошмандан ҡурҡып, тупһаңды ташлама.

* Дошманды өңөндә дөмбәҫлә.

* Дошманды ырҙын артында көтмәйҙәр.

* Дошмандың аҙы ла күп.

* Дуҫ ҡәҙерен һуғышта белерһең.

* Дуҫты айырған – дау,
Ҡорҙашты айырған – яу.

* Дуҫын ҡкламаған яуға ҡалыр.

* Ел сәсһәң, дауыл урырһың.

* Еңгән – еңелгәндең елкәһенә менгән.

* Еңеүсегә лә хөкөм бар.

* Ер тауһыҙ булмаҫ, ил яуһыҙ булмаҫ.

* Ил теләр аманлыҡ,
Дошман теләр яманлыҡ.

* Ил һаҡлаған – ирәйеп йәшәгән,
Ил баҫҡан – Иҙелгә таянған.

* Ил һаҡлау – ҙурлыҡ,
Ил баҫыу – хурлыҡ.

* Ил һуғышһыҙ,
Һуғыш батырһыҙ,
Батыр яраһыҙ булмаҫ.

* Илде яу баҫһа, йортоңдо ҡар баҫыр.

* Илбаҫар менән юлбаҫар бер туған.

* Иң элек йөрәгеңә ышан,
Унан ҡоралыңа ышан.

* Ир арымаһа, дау арымаҫ.

* Ир башына яу килһә, ирлеге китер башынан;
Бей башына яу килһә, бейлеге китер башынан.

* Ир ҡартайһа ла, дау ҡартаймаҫ.
* Ир маҡтана, ҡорал еңә.
* Йоҡлаған йыланды уятма.
* Йығылған көрәшкә туймаҫ,
  Яман дауға туймаҫ.
* Йығылғанға – йөҙроҡ.
* Йығылғанды йылан сағыр.
* Йылан менән дуҫ булһаң, ағыуланырһың.
* Йылан өскә өҙөлһә лә кеҫәрткелек хәле ҡала.
* Йылан теле менән кеҫәртке теле бер.
* Йылан үлтерһәң, балаһын ҡалдырма.
* Йыланға юлдаш булһаң, ҡулың сағыр.
* Йыланды аждаһаға әйләндергәнсе үлтереп ҡал.
* Йыланды кем үлтерһә, шуға һауап.
* Йыланды үлтерергә дошманыңа ҡуш.
* Йыландың аяғына тейһәң, ҡараһы ҡотҡармаҫ.
* Йыландың ағыуы башында.
* Йыландың балаһы ла йылан.
* Йыландың башын өҙмәһәң, ҡойроғон киҫеүҙән файҙа юҡ.
* Йыландың ҡараһы ла бер, тарғылы* ла бер, ағы ла бер.
* Йыландың ҡойроғона баҫма, башына баҫ.
* Йыртҡыс тырнағынан билгеле.
* Йыртҡысына күрә ҡапҡаны.
* Йәнен аямаған яуҙа еңер,
  Малын аямаған дауҙа еңер.
* Йәшерен яуҙы юҡҡа һанама.
* Кавалерист батыр булһын,
  Аты таҙа, матур булһын[62].
* Командирҙың приказы – атаң наказы[63].
* Көлә килгән дау булмаҫ,
  Күренә килгән яу булмаҫ.

* Көрәш ҡорбанһыҙ булмаҫ.
* Көс көс менән еңелә.
* Көсһөҙ ҡалып иҙелгәнсе, көсәнеп иҙ дошманды.
* Күл болғаныр – бер тонор,
Ил болғаныр – бер тыныр.
* Күл ҡортһоҙ,
Донъя телһеҙ,
Ил болаһыҙ булмаҫ.
* Ҡабыҡ һуғып ҡарға ҡурҡыта алмаҫһың.
* Ҡайһы яҡ ғәскәр еңһә, шуның законы хаҡ.
* Ҡайта ҡупҡан дау яман,
Ҡайта сапҡан яу яман.
* Ҡанға ҡан менән яуап.
* Ҡарға ҡарҡылдаһа – үҙ башына.
* Ҡарғанан ҡарауыл ҡуйһаң, өҫтөңә яу килтерер.
* Ҡарт атын маҡтаған яуҙа ҡалыр.
* Ҡартайған эт юҡҡа өрмәй[64].
* Ҡатайҙы дауға яратты,
Бөрйәнде яуға яратты[65].
* Ҡаты ҡышҡа һыу кәрәк,
Буръяҡ һыуға тоноу кәрәк.
* Ҡауҙан ут яныр,
Дауҙан йорт яныр.
* Ҡоҙғон ҡысҡырһа – үҙ башына.
* Ҡорал кемдеке – заман шуныҡы.
* Ҡорал менән уйнағансы, атаңдың башы менән уйна.
* Ҡорал – эйәһенә лә дошман.
* Ҡорал эшләр – ир маҡтаныр,
Ҡылыс киҫер – ҡул маҡтаныр.
* Ҡорос утта сыныға,
Егет яуҙа сыныға.
* Ҡоторған бүре утҡа керер.
* Ҡоторған эт айға һикерә.

* Ҡоторған эт эйәһен тешләр.

*Вариант:* Ирекҡән эт эйәһен тешләй.

* Ҡоторған эттең ҡойроғон ҡолағына еткәнсе өҙәләр.

* Ҡояш тапһыҙ,
Ир ғәйепһеҙ,
Ил дауһыҙ булмаҫ.

* Ҡуш ҡылыс ҡынға һыймай.

* Ҡыйыш атһаң да тура тейҙер.

* Ҡылыс күтәргән ҡылыстан үлер.

* Ҡылыс ҡында килешә.

* Ҡылыс ҡынын киҫмәҫ.

* Ҡылысың үтмәһә, түңгәккә сап.

* Ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ тыҡма[66].

* Мейес башында үлеүҙән һуғышта үлеү артыҡ.

* Мылтыҡтың тейсүе шарт түгел, шартлауы шарт.

* Оҙаҡ ауырыу йән ала,
Оҙаҡ яу мал ала.

* Осҡондан ялҡын ҡабыныр.

*Вариант:* Осҡондан ут сыға.

* Өйрәнгән ер яуға яҡшы.

*Вариант:* Өйрәнгән ер яу ҡайтара.

* Өйрәнгән яу һуғышырға яҡшы.

* Өйрәнгәндә ауыр булһа ла, һуғышҡанда еңел булыр.

* Өлөш* бар ерҙә үлеш бар.

* Өргән эт тешләмәҫ, өрмәгәндән һаҡлан.

* Рәттән ҡалғансы үләттән ҡал.

* Себенгә суҡмар күтәрмә.

* Себендең үлер ваҡыты етһә, мороно үткерләнер.

* Ситтәге ҡоралға ышанғансы,
Яныңдағы ҡоралға ышан.

* Сиңерткәнән ҡурҡҡан – иген икмәгән.

* Сүпте күрмәһәң, күҙеңә керер.

* Сысҡанға – бесәй ҙә ҙур дошман.

* Сыскандың әжәле етһә, бесәйҙең койроғон тешләр.

* Тау билгеһе таш булыр,
Бай билгеһе аш булыр,
Аҙған илдең билгеһе –
Бер-береһенә хас булыр.

* Таш менән атканға аш менән ат.

* Тирә яғың яу булһа, өйөң эсе һау булмаҫ.

* Торнанан курккан тары икмәҫ.

* Туй бөткәс һүҙ, яу бөткәс батыр күбәйер.

* Туп бер атыр, берәгәйле атыр.

* Турғай которһа, бөркөткә уктала.

* Тыныслыктың төбө – уңышлык.

* Тәкәләр һөҙөшкәндә, кәзәләр ял итә.

* Ук аткан ергә төшә.

* Ук етмәгән ергә туп етер.

* Уксы тейҙерә алмағанға, ук ғәйепле түгел.

* Уғың бушка атма, күңелең юкка һатма.

* Уғын аткас, йәйәһен йәшермә.

* Ут көйҙөрә төшкән ерен,
Яу көйҙөрә тоткан ерен.

* Утты вакытында һүндер.

* Утты коро кул менән һүндереп булмай.

* Уттың, сирҙең эҙен калдырма.

* Үҙ башына елкенгән һуғыш теләр.

* Үҙең һәләк бул – иптәшеңде коткар.

* Үлек бүре йомшар.

* Үлем илауһыҙ,
Туй үпкәһеҙ,
Ер ташһыҙ,
Ил яуһыҙ булмаҫ.

* Үлем уртак – яу кәрәк.

* Үлемһеҙ һуғыш булмай.

* Үлһәң дә, дошманға сереңде әйтмә.

* Үткер ҡылыс ҡынын киҫер.
* Фашист килһә, башҡа эшеңде ҡуй –
  Ҡурғаш ал да, пуля ҡой[67].
* Һалдат беҙ менән ҡырыныр,
  Төтөн менән йыуыныр[68].
* Һарыҡ тиреһе менән бүрене ҡурҡытма.
* Һөңгөлө яуға тимер ҡалҡаның әҙер булһын.
* Һуғыш батырлыҡты ярата.
* Һуғыш күптән сыҡмай, юҡтан сыға.
* Һуғыш ҡанһыҙ булмай.
* Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай.
* Һуғышҡа суҡмарһыҙ бармайҙар.
* Һуғышҡаҡҡа һуйыл табыла.
* Һуғышҡанға – бер үлем,
  Әрәсәгә – ике үлем.
* Һуғышта алтындан тимер ҡиммәт.
* Һуғышта хан да үлә.
* Һуңғы ҡылысты ергә сап.
* Һуңғы уғыңды бушҡа атма.
* Һыу менән уйнама – батырһың,
  Ут менән уйнама – яныраһың.
* Һыу ташҡанда балыҡ тәкәббер була.
* Һыу тулҡынланмай тормаҫ.
* Эт этлеген итә: бүрегә һыртын ҡабарта.
* Эт еңгәнен талай.
* Эт күп булһа, бүрене еңә.
* Эт ҡоторһа – үҙ башына.
* Эт менән бесәй дуҫ булмаҫ.
* Эт олоһа, бүре килер.
* Эт ояһында көслө.
* Эт өйөрө берекмәҫ.
* Эт тешенә – эт теше.
* Эт тешенән эт үлмәҫ.

* Эт үҙ башына олор.
* Эт үлгәнгә бүре иламаҫ.
* Эт яман, бүре яман,
  Эт бүрегә әйләнһә – бүренән яман.
* Этте таларға эткә ҡуш.
* Этте үлтерһәң – түләүе бер көсөк.
* Этте эйәһе алдында туҡма.
* Эттең аҙғыны йортта ҡоторор.
* Эттең өргәненән ҡурҡма, өрмәгәненән ҡурҡ.
* Эттәр талаша – уҙғынсыға юл тыныс.
* Әжәлле ҡарға ҡарсыға менән уйнар.
* Әйтешкәндән дау ҡубыр,
  Алышҡандан яу сығыр.
* Юлда ятҡан йыландың ғүмере ҡыҫҡа.
* Ябалаҡ аҫырап ҡош сөйгән – ауға сығып ҡотаймаҫ,
  Ат аяғын ҡыҙғанған – яуҙан ҡасып ҡотолмаҫ.
* Ялыҡмаған яу еңә.
* Яман атты ял баҫыр,
  Яман илде яу баҫыр.
* Яман дан менән торғансы, яуҙа ҡан менән үлгәнең артыҡ.
* Янғынды сығарыу анһат, һүндереү ҡыйын.
* Яңғыҙ батыр яуға юҡ,
  Яңғыҙ егет дауға юҡ.
* Яңғыҙлыҡ яуға ярамай.
* Ятып ҡалғансы, атып ҡал.
* Яу дауыл аҡтара,
  Дауыл дарья аҡтара.
* Яу килгәндә илдең уртаһында бул.
* Яу килә тип аҙыҡты бөтөрмә,
  Ил күсә тип утыңды һүндермә.
* Яу килә тип йортоңдо ташлама.
* Яу сапҡан яу ҡылысынан үлер.
* Яу серен яу белмәҫ.

* Яу юҡ тимә – яр аҫтында,
Бүре юҡ тимә – бүрек аҫтында.

* Яу юҡ тимә – яулыҡ аҫтында.

* Яу яғанан алғанда, эт итәктән алыр.

* Яу яраһыҙ булмаҫ.

* Яу яуҙан ҡурҡа, дау сәсәндән ҡурҡа.

* Яу, яуҙың төбө – дау.

* Яуға барам тип маҡтанма,
Яуҙан ҡайтыуың менән маҡтан.

* Яуға барған – өлөш алған,
Яуҙан ҡасҡан – башын һалған.

* Яуға барһаң, ҡоралыңды йәшермә.

* Яуға йәнеңде бирһәң дә, сереңде бирмә.

* Яуға ҡалһаң – хәнйәрең,
Дауға ҡалһаң – сәсәнең.

* Яуға һыйынма – һының ҡатыр.

* Яуға ялынма – йәнеңде алыр.

* Яуҙа ят та яҡын.

* Яуҙан ҡоро ҡайтҡансы, яралы ҡайт.

* Яуҙы янғыҙ ҡайтармай.

* Яума булһа, Нөгөш* ташыр,
Ғауға булһа, Сәнкем* ҡасыр.

* Яуыз кеше яуҙан ҡасыр.

* * *

* Башта ташланған юлбарыҫ арыҫланды еңә, имеш.

* Береңә бысаҡ бирһәләр, икенсеңә балта бирәләр.

* Илбаҫар – көнө-төнө ҡасар.

* Һуғышҡа барған суҡмарын онотҡан.

* Яуға барған йәнен онотҡан.

*Вариант:* Һыуҙан тунын аямаған,
Яуҙан йәнен аямаған.

# III. КӨНКҮРЕШ, ЙОЛАЛАР, ҒАИЛӘ, ТУҒАНЛЫҠ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ

## 1. Өйләнеү, туй-төшөм, дәрт, мөхәббәт

* Аҙғынға эйәрһәң, аҙырһың, тоғро юлдан яҙырһың.

* Айҙың да йондоҙо бар.

* Аҡҡош күрһәң, атып ал,
Былбыл күрһәң, һатып ал[69].

* Аҡса алһаң, һанап ал,
Ҡатын алһаң, һынап ал.

* Аҡыллы өйләнгәнсе, тиленең улы булған.

* Алама булһа ла ир яҡшы,
Һуҡыр булһа ла ҡыҙ яҡшы.

* Алған алыр, ҡалған ҡалыр.

* Алданма ҡыҙыл алмаға.

* Алма бешер, өҙөлөп төшөр[70].

* Алма үҙең һөйгәнде – алданырһың,
Ал һине һөйгәнде – ҡыуанырһың.

* Алма-сыбар ат булмаҫ,
Ир-егет таҡ булмаҫ.

* Алмағаста алма бешә, дегәнәктә – дегәнәк.

* Алмаҡтың һалмағы бар[71].

* Алманың алына ҡорт төшөр.

*Вариант:* Алманың аҫылын ҡорт ашай.

* Алмас ерҙә ҡалмаҫ.

* Алыҫта булһа – яҡындыр,
Яҡында булһа – ялҡындыр[72].

* Алыҫтан ат алма,
Яҡындан ҡыҙ алма.

* Ана туй, бына туй – ике атыңдың береһен һуй.

* Арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай[73].

* Арғы яҡта туй бара тип, бирге оста бейемә.

* Асҡыс йоҙағы менән, борсаҡ ҡуҙағы менән.

* Асыҡ ишеккә һәр кем керә[74].

* Аҫылынһаң, ағастың аҫылына аҫылын.

* Ат аҙғыны тайға эйәрә,
Ир аҙғыны ҡыҙға эйәрә.

* Ат айғырланһа үҙ башына була.

* Ат алһаң, арба кәрәк,
Ҡатын алһаң, бары ла кәрәк.

* Ат алһаң – ауылың менән,
Ҡыҙ алһаң, ырыуың менән кәңәшләш.

*Вариант:* Ат алһаң, өйөң менән кәңәшләш,
Ҡатын алһаң, ауылың менән кәңәшләш.

* Ат алһаң, баш менән түш ал,
Ҡыҙ алһаң, ҡабаҡ менән ҡаш ал.

* Ат алһаң, яҡындан ал,
Ҡатын алһаң, алыҫтан ал.

* Ат матуры – арҡанда,
Ҡыҙ матуры – тарханда*.

* Ат менән ҡыҙҙы ауылдан алма.

* Ат урлаған бур булыр,
Ҡыҙ урлаған хур булыр[75].

* Ат эҙләгән яуға юлығыр,
Ҡыҙ эҙләгән туйға юлығыр.

* Аттың аҫылына атлан.

* Атын алма, затын ал.

* Атына күрә тәртәһе.

* Атына ҡарама, затына ҡара.

* Ата маҡтағанды алма, ауыл маҡтағанды ҡуйма.

* Атаһыҙҙы кейәү итмә,
Инәһеҙҙе килен итмә.

* Атаһын күр ҙә – улына ҡыҙ бир.

* Атаһын күр ҙә – улын ҡос,
Әсәһен күр ҙә – ҡыҙын ҡос.

* Ауыҙы ҡыйыҡ булһа ла, байҙың ҡыҙы ир һайлар.

* Аусы ау аулай, яусы ҡыҙ яулай.

* Ауылдан ҡыҙ алма ла, мал алма.

* Ауыртҡан ерҙән ҡул китмәҫ,
Уңған ҡыҙҙан күҙ китмәҫ.

* Аш – атлыныҡы,
Туй – тунлыныҡы.

* Аш табылыу – бер бәхет,
Иш табылыу – бер бәхет.

* Аш һайлама – ҡоҫторор,
Ҡыҙ һайлама – аҫҡырыр.

* Ашыҡҡан ҡыҙ кейәүгә барһа ла мантымаҫ.

* Ашыҡҡан ҡыҙ ирһеҙ ҡалыр.

* Аяғы булһа, тояғы табылыр.

* Аяҡлы ҡаза күрәһе егет аяғы һыҙлау ҡатын алыр.

* Бай кешегә барһаң,
Бер ҡулың балда булыр,
Бер ҡулың майҙа булыр.

* Бай кешенең ҡыҙын алһаң, атаһы менән маҡтаныр,
Ярлы кешенең ҡыҙын алһаң, өҫтәл аҫтын аҡтарыр.

* Байҙар туйы яҙ була.

* Байлығына ҡыҙма, аҡыллылығына ҡыҙ.

* Балға себен йыйылыр.

* Балтаңа ҡарап ағас һайла.

*Вариант:* Ағасына күрә балтаһы.

* Бар иткәнде пар иткән.

* Барғанында бар булһа, барғас, айран эсерһең[76].

* Бармағына күрә балдағы.

* Барһаң, табып бар, егетте танып бар.

* Башы булһа, башҡа була.

* Бейегеһе килмәгәнгә туй килешмәй.

* Бейә кешнәмәй – айғыр тешләмәй.

*Вариант:* Бейә уҡранмаһа*, айғыр таланмай.

* Бейә ҡайҙан юртһа, ҡолон да шунда[77].

* Белемле ҡатын башыңа ҡарай,
Белемһеҙ ҡатын йәшеңә ҡарай.

* Белемле ҡыҙ – бирнәле ҡыҙ.

* Белеп һөйһәң – яр,
Белмәй һөйһәң – ҡар.

* Белмәгән сибәрҙе алғансы, белгән йәмһеҙҙе ал.

* Бер бар, берәгәйле бар.

* Бер ир ҡатын алһа, алтмыш ҡатын илар.

* Бер ирҙең ҡатыны үлһә, алтмыш ҡатын ҡыуана,
Бер ҡатындың ире үлһә, алтмыш ҡатын ҡайғыра.

* Бер күктә ике ай булмай,
Бер күңелдә ике мөхәббәт булмай.

* Бер ҡатындың ире үлһә, ҡырҡ ҡатынға көндәш була, ти.

* Бер ҡыҙ кейәүгә сыҡһа, ҡырҡ ҡыҙ төш күрә.

* Бер менһәң дә юрға мен.

* Бер ташлаған сәкмәнде яңынан киймәйҙәр.

* Бер һыныҡ икмәк бур итә,
Бер үбешеү хур итә.

* Бер яҡшыға – бер яман.

* Берәү бар – үҙе яратыр,
Берәү бар – үҙен яратҡанды яратыр.

* Биле бәйлегә биле бәйле табылыр.

* Бирмәҫ ҡыҙҙың мәһәре ҙур булыр.

* Битең менән ер һепер, сәсең менән иҙән йыу[78].

* Буйҙаҡтың аҡылы ике күҙ.

* Буйҙаҡтың елкәһен бет ашар.

* Буйҙаҡтың төштә күрһә – күңеле хуш,
Уянып китһә – ҡуйыны буш.

* Буйына ҡарама, уйына ҡара.

* Буйың етмәгәнгә үрелмә.

* Бүре туйы ҡан менән.
* Ваҡытһыҙ асылған гөл тиҙ һулыр.
* Гөлөнә ҡарама, төбөнә ҡара[79].
* Гөлөң сәскә атмаһа, ҡояшҡа үпкәләмә, үҙеңә үпкәлә[80].
* Гәүһәр ерҙә ятмаҫ.

*Вариант:* Аҡыҡ төймә ерҙә ятмаҫ.
Күҙәүле мунсаҡ ерҙә ятмаҫ.

* Гәүһәрҙе мыҫҡаллап үлсәйҙәр[81].
* Ғазапһыҙ ғишыҡ юҡ.
* Ғишыҡ булған күҙһеҙ[82].
* Ғишыҡ кешене диуана итер.
* Ғишыҡ ҡыҙһа – уттан да ҡыҙыу, һаҫыһа – һаҫыҡтан да һаҫыҡ.
* Ғишыҡ тотоу – ут йотоу.
* Ғишығы юҡтың йәне тыныс.
* Ғәйепһеҙ йәр эҙләгән йәрһеҙ ҡалыр.
* Далаһына күрә – ҡуйы,
  Заманына күрә – туйы.
* Дегәнәк араһында үҫкән сәскәнән һаҡлан.
* Димсе диңгеҙ кистерер.
* Димсе диңгеҙ кистерер, илтеп ярҙан осорор.
* Донъя күрке йәр менән.
* – Донъяла кем гүзәл?
  – Кемде һөйһәң, шул гүзәл.
* Дәртле кешенең аяҡ баҫыуы башҡа.
* Дәрт – эстә, дарман – тышта.
* Дәртле күҙҙе йоҡо алмаҫ.
* Дәртлене дәртһеҙ ҡартайтыр.
* Дәртһеҙ егет йәр тапмаҫ.
* Дәртһеҙ егет – мунса ташы.
* Дәртһеҙ кеше – күҫәк,
  Йәрһеҙ кеше – ишәк.
* Егермелә етлекмәгән иллеһендә өйләнмәҫ.
* Егет арыу булһа, асылын һорама.

* Егет булһа, батыр булһын,
Ҡыҙ булһа, матур булһын.

* Егет егәр, ҡыҙ сибәр булһын.

* Егет йәрһеҙ булмаҫ.

* Егет күңеле йүләрҙә, ҡыҙ күңеле көләрҙә.

* Егет ҡыйыу, ҡыҙ һылыу булған яҡшы.

* Егет ҡыҙ алғас, тәүфиҡ таба.

* Егет һөйһә – ала,
Ҡыҙ һөйһә – ҡала.

* Егетлегеңде белгең килһә, ҡыҙға яусы ебәр.

* Егеттең тешенә ҡарама, эшенә ҡара.

* Екмәһәң дә ат яҡшы,
Һөймәһәң дә йәр яҡшы.

* Ел иҫмәй, ҡура һелкенмәй,
Бер үпмәй, йөрәк елкенмәй.

* Елһеҙ тирәк елкенмәҫ,
Йүнһеҙ йөрәк елкенмәҫ.

* Еләк еләккә ҡарап бешә[83].

* Еметенә* ҡарама, егетенә ҡара.

* Емеште аша[84], ботағын һындырма.

* Емеш аҫылын бүре ейер.

* Емеш ашағың килһә, сәскәһен өҙмә[85].

* Ер дауы менән ҡыҙ дауы бөтмәй.

* Ер һыуға туймай, ут утынға туймай.

* Еренә күрә еләге.

* Ете атаға еткәс, ҡыҙ бауыры алышыр[86].

* Етен башын ел киҫә,
Егет бәғерен ҡыҙ киҫә.

* Еткән ҡыҙҙы мыйығың менән ҡурҡыта алмаҫһың.

* Еткән ҡыҙ кейәүҙән ҡурҡмаҫ.

* Иҙәне ер, ишеге ел булһа ла, егете ир булһын.

* Ике ат бер ҡаҙыҡҡа бәйләнмәҫ[87].

* Ике егет аулаһаң, берһеҙ ҡалырһың.

* Ике йәштең күңеле бар,
Ебәктең төйөнө бар.

* Ике күңел бер булһа, сүплек башы гөл булыр.

* Ике күңел – бер һағыш.

* Ике ҡарбуз бер ҡултыҡҡа һыймай.

* Ике ҡәрендәште ҡауыштырһаң, сауап ҙур була.

* Ике матур бергә килһә, береһе ғүмерһеҙ була, имеш.

* Ике мөхәббәт бер күңелгә һыймай.

* Ике рәт уй ит, бер рәт туй ит.

* Ике һыңар – бер пар.

*Вариант:* Ике ярты бер бөтөн.

* Ике яҡшы өйләнһә – уңыш булыр,
Бер яҡшы, бер яман өйләнешһә – дөрөҫ булыр,
Ике яман өйләнешһә – көн-төн һуғыш булыр.

* Икегә ышанған – берһеҙ,
Уйнашҡа ышанған – ирһеҙ.

* Икмәк тәмле тоҙ менән,
Йоҡо рәхәт ҡыҙ менән.

* Икмәк юғы ямандыр – ҡаты-ҡото кимертә,
Ҡатын юғы ямандыр – ҡарт әбейҙе һөйҙөртә.

* Ил бөтмәһә, ир бөтмәҫ.

* Ил маҡтаған егеткә ҡыҙ бармай.

* Илдә матур күп булыр,
Йән һөйгәне бер булыр.

* Инә ҡаҙ ҡаңҡылдамаһа, ата ҡаҙ бармай.

* Инәһе ниндәй – ҡыҙы шундай.

* Инәһен күреп ҡыҙын ал,
Иңен күреп бүҙен ал.

* Ипһеҙ ҡыҙ үҙенә ир тапмаҫ.

* Ир-егет мал даулаһа, матур ҡыҙ йәр һайлай.

* Ир икмәге ирекле, ҡыҙҙар һөйә егетте.

* Ир йолаһы өскә саҡлы[88].

* Ир кеше йөрөһә, мутлығы асылыр,
Ҡатын йөрөһә, ғәйебе асылыр.

* Ир малһыҙ булмаҫ,
Егет йәрһеҙ булмаҫ.

* Ир өйләнмәй тәүфиҡ тапмай.

* Иргә бер ҡат барыу – ғәҙәт, икенсегә – оят.

* Ирҙәр туйҙа, ҡатындар курнистә* була.

* Ирҙәргә – ирлек,
  Ҡатындарға – хурлыҡ[89].

* Ире ир булһын, иҙәнс ер булһын.

  *Вариант:* Иҙәнс ер булһа ла, ире ир булһын.

* Ирс табылһа, өйө табылыр.

* Ирең булмаҫтайға иренеңде бирмә.

* Иртә өйләнгән улынан-ҡыҙынан кинәнгән.

* Иртә өйләнгән үкенмәҫ.

* Иртә уңмаған кис уңмаҫ,
  Кис уңмаған һис уңмаҫ.

* Иҫәр ҡыҙығыр матурға,
  Аҡыллы – батырға.

* Ит тапмаған үпкәгә кинәнгән,
  Ҡатын тапмаған еңгәгә кинәнгән.

* Иш ише менән, иш ҡушы менән.

* Ишеге ямандың өйөнә барма,
  Әсәһе ямандың ҡыҙын алма.

* Ишле ише менән, ҡарама ҡыуышы менән.

* Иренгәнде ир алмаҫ.

* Иш ишен табыр, ишәк ҡойроғон ҡабыр.

* Ише булмайынса, ҡушы булмай.

* Ишәк туйы илле йылда бер була.

* Йоҙағына күрә асҡысы.

* Йортҡа кергәнсе утҡа кер[90].

* Йөҙө аҡ тип алданма, эсе ҡара булмаһын.

* Йөҙө үбелгәндең ҡулы үбелмәҫ.

* Йөрәк ашъяулыҡ түгел, һәр кем алдында йәйеп булмай.

* Йүгәнде бушатһаң, ат ҡыйшанлай.

* Йүгерек атҡа таянма.

* Йүнһеҙ селләлә туңып үлгән, туйҙа асығып үлгән.

* Йыйған малың, һөйгән йәрең ятҡа китмәһен.

* Йылан ағыу тапҡан сәскәнән бал ҡорто бал табыр.

* Йылы һөйәк һындырмаҫ,
  Матур хәтер ҡалдырмаҫ.

* Йәмлелек – йән аҙығы.

* Йәмһеҙ ҡыҙҙы ҡосаҡлағансы, йәмле ҡыҙҙың янында тор.

* Йән аҙығы йәр булыр.

* Йән тартмаһа күңел һөймәҫ.

* Йән тартмаһа, ҡан тартмай.

* Йән һөйгәнең йәндән артыҡ.

* Йәне теләгән йылан ите ашаған.

* Йәнле тәндә дәрт була.

* Йәнт* иткән йәр табыр.

* Йәр бирмәк – йән бирмәк.

* Йәш ирҙең хыялы йәш,
  Ҡарт ирҙең теләге йәш.

* Йәш ҡыҙ алыу йәшәртә.

* Йәше йәш булһын, үҙенә үҙе баш булһын[91].

* Йәше – йәшенә, башы башына тиң булһын.

* Кейем эйәһен табыр[92].

* Кейәү аҙнаһы айҙан оҙон[93].

* Кейәү йомарт булһа, еңгәһе йүгерек була[94].

  *Вариант:* Кейәү биреүсән булһа, еңгә йөрөүсән булыр.

* Кем матур – ул матур,
  Кемде һөйһәң – шул матур.

* Кем менән даның сыҡһа,
  Шуның менән йәнең сыҡһын.

* Кем менән ҡара булғанһың, шуның менән аҡ бул[95].

* Кеше иренә ышанып түшәк йәймә.

* Кешәнле ат кәрәгенән ары йөрөмәҫ.

* Килбәтле ҡыҙ килен булғас күренер.

* Көйгән икмәк күңелдән китмәҫ.

* Көйһөҙ кейәү кейәүләп ятҡансы,

Көйлө кейәү кәләшен алып ҡайтҡан.

* Көндәш күргәндең ҡыҙын алма.

* Көнсөллөк – ғишыҡтың тоҙо.

* Көнсөнөң күҙе ҡарсыҡҡа төшөр.

* Көсләп асҡан күҙҙең нуры юҡ.

* Күҙ күрмәһә, күңел һөймәç.

* Күҙ меңде күрер, күңел берҙе һөйөр.

* Күҙҙән тайһа, күңелдән тайыр.

* Күҙең менән һайлама, ҡолағың менән һайла.

* Күҙәүле мунсаҡ ерҙә ятмаç[96].

*Варианттары:* Тишекле мунсаҡ ерҙә серемәй.

Тишек мунсаҡ ерҙә ҡалмаç,
Ерҙә ҡалһа ла тупраҡ баçмаç.

Тишекле төймә ерҙә ятмаç.

* Күлдең йәме ҡаҙ менән,
Туйҙың йәме ҡыҙ менән.

* Күмәкләгән туй атҡарған.

* Күңел күңелде теләр.

* Күңел һөймәһә, күҙ һөймәç.

* Күңелдә булмағанды күҙ күрмәç.

* Күңелдән китһә, күҙҙән китә.

* Күңелең кемде һөйһә, шул матур.

* Күңелең төшмәгәнгә күҙең төшмәһен.

* Күңелһеҙгә күлдәк кейҙермәйҙәр.

* Күп һайлаған һайландыҡҡа ҡалыр.

* Күп һайланһаң, ҡатынһыҙ ҡалырһың.

* Күреп алған күрекһеҙҙән, күрмәй алған күрекле күркәм.

* Күрше ҡатындың ире үлһә, ҡырҡ ҡатынға ғауға төшә.

* Кәбән аçтында сысҡан үлмәй,
Ир аçтында ҡыҙ үлмәй.

* Кәзә «тоҙ» тип, ирҙәр «ҡыҙ» тип ҡартайыр.

* Кәкуккә оя кәрәкмәй.

* Кәләш алһаң төн ҡыçҡара.

* Ҡабыҙмаһаң шырпы ла янмай.

* Ҡаҙандан ҡапҡас китһә, эттән оят китә[97].

* Ҡайҙа өлөшөң – шунда көмөшөң.

* Ҡаҡлы бауырһаҡ хаҡлы[98].

* Ҡалдыҡ аштан эт ҡасмай.

* Ҡалым малы – ҡар һыуы.

* Ҡамыш һыуҙан туймаҫ,
Ҡатындар туйҙан туймаҫ.

* Ҡамышты үҙ күлеңдән ал.

* Ҡарама ҡабығы ҡаҡ булмай,
Хаҡ бәндәһе таҡ булмай.

* Ҡар башына ҡар етер,
Ҡыҙ башына ҡыҙ етер.

* Ҡара болотто ҡара урман тарта[99].

* Ҡарға күҙе сүптә[100].

* Ҡарт булһа ла ирең булһын,
Ҡыйыҡ булһа ла өйөң булһын.

* Ҡарт булһа ла, ҡыҙлата ал.

* Ҡарт ҡыҙ ир һайламаҫ,
Үлгән кеше ер һайламаҫ.

* Ҡарт сәпсек кәбәккә алданмаҫ.

* Ҡатын алмаҡ бик кәрәк,
Көн дә батман ит кәрәк.

* Ҡатын алмаҡ – ҡыҙ алмаҡ.

* Ҡатын алһаң – күреп ал,
Ат алһаң – менеп ал.

* Ҡатын алһаң, утын ал,
Бер яғырлыҡ артыҡ ал.

* Ҡатын алһаң, утын ал[101],
Тәү мәлендә ҡотон ал.

* Ҡатын алһаң, һайлап ал,
Аяҡ-ҡулын бәйләп ал.

* Ҡатын артынан мал килә,
Ҡыҙ артынан дан килә.

* Ҡоҙа булғансы, ныҡ һораш,
Ҡоҙа булғас, ныҡ һыйлаш.

* Ҡомға һипкән беленмәҫ,
Ҡыҙға биргән – күренмәҫ.

* Ҡорбоң* бөтһә, туйға барма.

* Ҡоро ҡулға ҡош ҡунмаҫ.

* Ҡош аяғынан, ҡыҙ иреденән әләгер.

* Ҡош моронһоҙ булмаҫ,
Ҡыҙ урынһыҙ булмаҫ.

* Ҡош та һайланмайынса ҡыуаҡҡа ҡунмай.

* Ҡошона күрә тоҙағы.

* Ҡошто ем менән алдайҙар[102].

* Ҡоштоң да ояһы була.

* Ҡуйынындағы йәрен алғансы, эсендәге йәнен ал.

* Ҡупың* яман булһа ла, эсендә ашы булһын,
Ҡыҙың яман булһа ла, башында аҡылы булһын.

* Ҡыҙ аҡсаһы – йөҙ аҡсаһы.

* Ҡыҙ аҡсаһы – тоҙ аҡсаһы[103].

* Ҡыҙ аҡылы һуң төшөр,
Һуң төшһә лә, мул төшөр.

* Ҡыҙ ауыҙында ҡыҙыл тел[104].

* Ҡыҙ баланы ҡыҙыл эт ҡойроғона бәйләһәң дә китер[105].

* Ҡыҙ байлығы – күркәм холоҡ,
Ир байлығы – тәүәккәл.

* Ҡыҙ бала төшкән ерендә таш булып батһын.

* Ҡыҙ баланы, еткәс, тапшырған яҡшы.

* Ҡыҙ баланың дәрте күкрәктә,
Ир баланың дәрте йөрәктә.

* Ҡыҙ – бер төнлөк,
Ҡатын – ғүмерлек.

* Ҡыҙ биргән боҫоп ятыр,
Килен алған – губернатор.

* Ҡыҙ биргән ергә ебәктән дә йомшаҡ бул,
Килен алған ергә дегәнәктән дә ҡаты бул.

* Ҡыҙ димләүе – бер алтын.

* Ҡыҙ егеткә ҡушыла – ебәк булып ишелә.

* Ҡыҙ кемгә бармаҫ ине,
  Егет кемде алмаҫ ине,
  Ҡалым малы булмаһа.

* Ҡыҙ күҙләгәндә төн ҡараңғы булһын.

* Ҡыҙ күңелендә – балалы бишек,
  Ир күңелендә – эйәрле ат.

* Ҡыҙ күрмәй – бил сиселмәй,
  Һыу күрмәй – итек сиселмәй.

* Ҡыҙ оҙатҡан яланғас ҡалыр,
  Килен алған түренә урын һалыр.

* Ҡыҙ тип ҡыҙыҡма, бер көн ҡатын булыр.

* Ҡыҙ тип ҡыҙыҡма, ҡәйнә ҡыҙҙан ярала.

* Ҡыҙ тыйнаҡ булһа, егет йыйнаҡ була.

* Ҡыҙ үпкәсел булһа, ҡалым малы күп була.

* Ҡыҙ һайлаһаң, күҙеңдән бигерәк ҡолағыңа ышан.

* Ҡыҙ яҡшы ергә төшһә – ялпая,
  Яман ергә төшһә – ҡартая.

* Ҡыҙ яҡшыһы ҡылығынан билгеле.

* Ҡыҙҙар «алдайым» тип алданыр.

* Ҡыҙҙар исеме ҡылдан нескә.

* Ҡыҙҙар күңеле – ҡырҡ ҡарта.

* Ҡыҙҙы биреүеңә ҡыуанма, тороуына ҡыуан.

* Ҡыҙҙы бәхетле иткән – ир.

* Ҡыҙҙың бәкере* кемгә тейһә, фекере шунда булыр.

* Ҡыҙҙың йәне ҡырҡ, ҡырҡ беренсеһе – сыбыҡ.

* Ҡыҙҙың кемлеге кемәйенән* билгеле.

* Ҡыҙҙың күҙе ҡыҙылда.

* Ҡыҙҙың ҡыҙыуы – ҡуҙҙың ҡыҙыуы.

* Ҡыҙлы йортҡа ҡырҡ ат бәйләнер.

* Ҡыҙлы өйгә ҡоҙа килер.

* Ҡыҙлы өйгә – ҡырҡ ҡунаҡ.

* Ҡыҙы бар кешегә ҡырҡ яусы килер.

* Ҡыҙым ҡылығы менән һөйҙөрөр.

* Ҡыҙың булһа – ирҙә булһын,
Ирҙә булмаһа – гүрҙә булһын.

* Ҡыҙыңа тиң кейәү килһә, ҡалым алма, тиген* бир.

* Ҡыҙыу янған тиҙ һүнер.

* Ҡымыҙҙы кем яратмай,
Ҡыҙҙы кем һоратмай?

* Ҡырҡта булһа ла ҡыҙ булһын.

* Ҡысыған ерҙән ҡул китмәй,
Һөйгән йәрҙән күҙ китмәй.

* Ҡәҙерең де белмәгән ергә туйға барма.

* Маҡтаулы ҡыҙ туйҙа эште боҙа.

* Мал алһаң – барлынан (ал),
Ҡыҙ алһаң – ярлынан (ал).

* Матур ҙа булһын, батыр ҙа булһын.

* Матур ҙа күп, сибәр ҙә күп – йән һөйгәне бер булыр.

* Матур – күҙ өсөн,
Аҡыллы – күңел өсөн.

* Матур ҡыҙҙа хәйлә күп.

* Матур матур күренмәҫ, һөйгән матур күренер.

* Матур сәскә сәнскеле була.

* Матур сәскәгә ҡырау тиҙ тейә.

* Матур тип яратма, батыр тип ярат.

* Матур хәтер ҡалдырмаҫ.

* Матурҙы күрге килә,
Яҡшыны алғы килә.

* Матурлыҡ туйҙа кәрәк,
Мөхәббәт көндә кәрәк.

* Матурлыҡ туйҙа кәрәк,
Уңғанлыҡ көндә кәрәк.

* Мейес бер ҡыҙһа, сей утын да яна.

* Менгән атың аҡбуҙ булһын,
Һөйгән йәрең йәш ҡыҙ булһын.

* Менмәһәң дә ат яҡшы,
Ҡосмаһаң да ҡыҙ яҡшы.

* Мөхәббәт йәш һорамай.

* Мөхәббәт матурлыҡ теләмәҫ.
* Мөхәббәт менән хирес* бер-береһенә бик ҡырыҫ.
* Мөхәббәт таш ярҙырта.
* Мөхәббәт тешкә ҡарамай, эшкә ҡарай.
* Мөхәббәт уты майһыҙ ҙа яна.
* Мөхәббәт уты тамуҡ утынан ете өлөш артыҡ булыр, ти.
* Мөхәббәткә үлем юҡ.
* Мөхәббәтте юғалтыу еңел, ҡайтарыу ауыр.
* Мөхәббәттең күҙе һуҡыр.
* Мөхәббәтһеҙ сатыр ҡороп булмай.
* Никахтар күктә ярала.
* Ныҡ һөйә тип, һөйөнмә,
  Уртаса һөйә тип, көйөнмә.
* Оялған – туйҙан буш ҡалыр.
* Оялсан егет йәр тапмаҫ.
* Оялсан ҡыҙ һөйкөмлө булыр.
* Оятһыҙ егет – йүгәнһеҙ ат.
* Өйөнә күрә иләге,
  Ҡапҡасына күрә силәге.
* Өйләнеү – көйләнеү.
* Өйләнмәгән уйһыҙ булыр,
  Донъяһы көйһөҙ булыр.
* Өйләнмәгәндең өйө булмаҫ,
  Өйө булмағандың иле булмаҫ.
* Өйләнмәгәндең тамыры ҡорор.
* Өйләнмәй ҡартайғандан аҡыл һорама.
* Өйләнә белмәһәң, имгәккә төшөрһөң.
* Өйһөҙ ҡыҙ – туйһыҙ.
* Сағылған таш ут сәсер[106].
* Саҡырылмаған туйға барғансы, ҡаҙылмаған гүргә кер.
* Салышҡа – ҡайыш.
* Сибәр берҙе, аҡыллы меңде эйәртә.
* Сибәр ҡулынан һыу эсһәң дә файҙа.

* Сибәрҙе кем дә һөйәр.
* Силәгенә ҡарап һыуын эс.
* Сөйөнә күрә туҡмағы,
Туйына күрә таҡмағы.
* Сәскә яҙ менән, мөхәббәт наҙ менән.
* Сәскәле гөл ҡәҙерле була.
* Сәскәнс ваҡытында өҙ.
* Сәскәһенә алданып, сәнскеһенә ҡаҙалма.
* Табағына ҡарап, ашын эс,
Әсәһенә ҡарап, ҡыҙын ҡос.
* Тай алһаң, бейәһенә ҡара.
* Тауҙың күрке – таш,
Ҡыҙҙың күрке – ҡаш.
* Таушалған ҡыҙҙа төҫ булмаҫ.
* Таш төшкән ерендә ятыр.
* Тибешеп ятһа ла, тиңең булһын.
*Вариант:* Тиңең менән тибешһәң дә килешә.
* Тиҙ бешкән емеш тиҙ серей[107].
* Тиҙ һөйгән тиҙ айырылыр.
* Тиҙ янған тиҙ һүнер.
* Тиле ҡыҙ туй иткән, үҙе түргә менеп ултырған.
* Тиң тиңде тарта,
Бизмән герҙе тарта.
* Тиң тиңе менән, итәк еңе менән.
* Тиңһеҙ менән тиң булма.
* Тиңһеҙҙе тиңгә тартма:
Тиңһеҙҙе тиңдә тартһаң, арты һилгә тарта.
* Толдоң хәлен тол белер.
* Торомтай тигән осҡор ҡош, турғай ташлап, тартайҙы алмаҫ.
* Төҫө барҙан төңөлмә.
* Төтөнө күптең ҡыҙыуы юҡ.
* Туҙан кейем туҙҙырмай,
Ғишыҡ ғүмер уҙҙырмай.
* Туй бөткәс, һүҙ күбәйер.

* Туй – йыйын, һый ҙа уйын.

* Туй күрке ҡунаҡ менән.

* Туй ҡыҙығы өс көнгә.

* Туй туйымлыҡ өсөн түгел, күңел өсөн.

* Туй уңайы менән тун бөтәйә.

*Вариант:* Туй һылтауы менән тун тегеләә.

* Туй үпкәһеҙ булмаҫ.

* Туйға барһаң, борон бар:
Борон барһаң, урын бар.

* Туйға барһаң, туйып бар,
Асыуыңды ҡуйып бар.

* Туйға барһаң, туйып бар,
Ебәк әйбер кейеп бар.

* Туйға барһаң, туйып бар,
Һимеҙ ҡаҙың һуйып бар.

* Туйға барһаң, туйып бар,
Икмәгеңде тығып бар.

*Вариант:* Туйға барһаң, туйып бар,
Ҡуйыныңа күмәс ҡуйып бар.

* Туйға барһаң, туйып бар,
Ҡаҙаныңды йыуып бар.

* Туйға барһаң, туйып бар,
Улың-ҡыҙың ҡуйып бар.

* Туйға туғыҙ ҡабат бармайҙар.

* Туйға туҡмаҡ эйәрә.

*Вариант:* Туйҙа туҡмаҡ аунаған.

* Туйҙан ҡоро ҡалғансы, яуҙан яралы ҡал.

* Туйҙың булғанынан «була» тигәне ҡыҙыҡ.

* Туйҙың күрке – уйын да көлкө.

* Туймағанға туғыҙ туй.

*Вариант:* Туймағанға көндә туй.

* Туйы йыраҡ төҙәлер.

* Турғайҙың тоҙағына ыласын төшмәҫ.

* Түрә ҡыҙы – түркенсәк*,
Байҙың ҡыҙы – барымсаҡ.

* Тәнен һатҡан кәрен һатыр.
* Уйнап үбешкән, ысынлап илаған.
* Уйнаш иткән уңмаҫ.
* Уйнаш кергән йорт ҡорой.
* Уйнаш кергән өйгә ҡот ҡунмаҫ.
* Уйнашҡа ышанған ирһеҙ ҡалған.
* Уйнашсы ҡатын күҙенән,
Инсафлы ҡатын һүҙенән билгеле.
* Уйнашсыға өгөт,
Өгөт етмәһә – ҡапҡаһына дегет.
* Уйнаштан уймаҡ сыға.
* Уйнаштың башы – уйын, ахыры – ҡыйын.
* Ултырған ҡыҙ урынын табыр,
Ашыҡҡан ҡыҙ ирһеҙ ҡалыр.
* Ултырған ҡыҙ урынлы, урын-ере ҡороулы.
* Урау булһа ла юл яҡшы,
Һуҡыр булһа ла ҡыҙ яҡшы.
* Урланған ҡыҙ ҡатын булмаҫ,
Гөл ботағы утын булмаҫ.
* Урланған ҡыҙ – хурланған ҡыҙ.
* Урман ауыҙы тар булыр,
Ҡыҙҙар ауыҙы бал булыр.
* Урманда ағас күп булыр,
Башын киҫкән бер булыр.
* Усағы ниндәй – ялҡыны шундай.
* Уҫаҡ ағасында алма үҫмәй.
* Ут ғәйрәтен һыу баҫыр.
* Ут усаҡта яҡшы, ҡыҙ ҡосаҡта яҡшы.
* Ут менән һыу ҡауышмаҫ.
* Утын булмаһа, ут һүнә.
* Үбешкән дә көлөшкән –
Һуңынан башына уй төшкән.
* Үгеҙҙең аҙғыны быҙау араһында.
* Үҙе уңған егеттең ата-инәһен һорама.

*Вариант:* Үҙе булған егеттең төп нәҫелен һорама.

* Үҙеңдеке – үҙәктә,
  Кешенеке – кештәктә.
* Үҙеңдән түбән ерҙән ҡыҙ ал, юғарыға ҡыҙ бирмә.
* Үлем илауһыҙ булмаç,
  Туй үпкәһеҙ булмаç.
* Үпкән-ҡосҡан – елгә осҡан.
* Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа.
* Хикмәт атында түгел, затында.
* Хисапһыҙҙан тоҙ алма,
  Иçәүәндән ҡыҙ алма.
* Һабантуй – атлыныҡы,
  Табын-туй – тунлыныҡы.
* Һайланған – һаҙға, ҡапланған баҙға.
* Һайланған һаҙға, осраған таҙға.
* Һалам ялҡыны тиҙ һүнер.
* Һалмаңды һалма һалҡын һыуға – төшөп китер төбөнә,
  Ҡыҙыңды бирмә яҡын ауылға – илап килер үҙеңә.
* Һанамай алма, һайламай барма.
* Һапһыҙ балта һыуға батыр.
* Һөйгән йәр – һөйәгең елеге.
* Һөйгән йәрҙең өнө өнәмәле.
* Һөйгән – һигеҙ, йән теләгән – бер.
* Һөйгән һөйгәненә бара, һөйгән һөйгәнен ала.
* Һөйгән һөйгәненә барыр,
  Һөйкөмһөҙ кемгә барыр?
* Һөйгәнеңдең һыйы ла балдан татлы.
* Һөймәгән йәр йәр түгел,
  Ташлаһаң да йәл түгел.
* Һөймәгәнгә һөйкәлмә.
* Һөймәгәнгә һөйкәлмә: ҡулы менән төрткөләр,
  Көймәгәнгә көйөнмә: теле менән сәнскеләр.
* Һөймәгәндән үптергәнсе, һөйгән иренең тешләһен.
* Һөймәçтеке һыймаç.
* Һөйөр кеше һөйгәненән билдәле.
* Һөйөү бар ерҙә көйөү бар.

* һөйһөн* ашаған һөйөшмәç.
* Һыйы мулдың туйы мул.
* Һыйыр алһаң, тояғына ҡара,
Ҡатын алһаң, ырыуына ҡара.
* Һылыу күңел аҙҙырыр,
Алтын юлдан яҙҙырыр.
* Һылыу һылыу түгел, һөйгән һылыу.
* Һыу һыйған ярында, егет һөйгән янында.
* Һыуыҡ ҡолаҡтан алыр, һылыу йөрәктән алыр.
* Һәр йоҙаҡтың үҙ асҡысы.
* Һәр кем эше менән яралған.
* Һәр кемдең үҙ тиңе.
* Һәр кемдә үҙ ҡайғыһы,
Ҡарт ҡыҙҙа ир ҡайғыһы.
* Һәр ҡыҙылға ҡыҙыҡма.
* Һәр һауытҡа бер ҡапҡас бар.
* Шаҙра булһа ла, аңғыра булмаһын.
* Эҙләгән ҡорт бал таба.
* Эҙләгән балағас* тапҡан.
* Эҙләмә матурҙы, эҙлә күңелгә ятырҙы.
* Эйәләштереү – илсенән,
Ялыҡтырыу – яусынан.
* Эйәрләнгән ат эйәһен көтөр.
* Эйәһеҙ атты ил алыр.
* Эйәһеҙ ҡалған быҙауҙы бүре ашар.
* Эйәһеҙ ҡуйҙы бүре ашай.
* Эт күҙе төтөн белмәç[108].
* Эт өрөп ҡартая,
Егет йөрөп ҡартая,
Ҡыҙ көлөп ҡартая.
* Этҡә һөйәк табыла[109].
* Эттең күҙе тиҙәккә төшөр.
* Эттән ҡалғанды арыçлан еймәç.
* Әжәл менән никах ҡаш араһында.

* Юрғаһына күрә дуғаһы.

* Ябыулы ҡаҙан ябыуы менән.

* Яҙ ҡышынан билгеле, ҡыҙ – ҡәрендәшенән.

* Яҡшы ат йүгәнһеҙ йөрөмәҫ.

* Яҡшы ат бығауһыҙ йөрөмәҫ,
  Алама атҡа тышау ҙа теймәҫ.

* Яҡшы атҡа дан сығыр.

* Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй,
  Уңған ҡыҙға яусы кәрәкмәй.

* Яҡшы атты урлайҙар, яҡшы ҡыҙҙы ҙурлайҙар.

* Яҡшы аттың тешен ҡарама.

* Яҡшы аттың хужаһы күп була.

* Яҡшы килен яҙ килер[110], яман килен көҙ килер.

* Яҡшы ҡатын өҫтөнән ир йөрөмәй,
  Яҡшы ир өҫтөнән ҡатын йөрөмәй.

* Яҡшы ҡыҙ иртә торһа, толом үрер,
  Насар ҡыҙ торор-тормаҫ телем телер.

* Яҡшыға төшкән – ярпайған,
  Яманға төшкән – ҡартайған.

* Яҡшыны эҙләп ал, насары үҙе лә килер.

* Яҡынға ҡыҙ бирһәң – тоҡ-тоҡ хәбәр килер,
  Ҡырға ҡыҙ бирһәң – тоҡ-тоҡ күстәнәс килер.

* Яҡындан ҡатын алһаң, ҡолағың ҡаты булһын.

* Яман ағасҡа аҫылынғансы, яҡшы ағас үҙеңде баҫһын.

* Яман атҡа менгәнсе, йәйәү йөрө талғансы,
  Яман ҡатын алғансы, буйҙаҡ йөрө ҡанғансы.

* Яман ҡыҙҙан яу китер.

* Яманаты сыҡҡан егеттең өйөн күрмә.

* Ямғырҙа ат һайлама,
  Байрамда ҡыҙ һайлама.

* Яңы тун кейергә яҡшы,
  Яңы йәр һөйөргә яҡшы.

* «Ярап торор»ға өй һалма,
  «Ярап торор»ға бисә алма.

* Яраткан күңелдә ялған булмай.

* Яратмаған – ярҙан ҡолаған.
* Яусы булмаһаң, дим һөйләмә.
* Яусы менән аусы ялғанһыҙ булмаҫ.
* Яусыға үлем юҡ.

* * *

* Алыусыға – барыусы.
* Асыҡ ҡапҡанан кем кермәҫ[111]?
* Ашҡаҙар менән Ағиҙел
  Йөрәктауҙа табышҡан;
  Яҡшы егет, яҡшы ҡыҙ
  Шулай килеп табышҡан,
  Яр иткәнде пар иткән,
  Айырылмаҫҡа ҡауышҡан[112].
* Бал бирәйем үҙеңә,
  Балҡып сыҡһын йөҙөңә!
* Башым да күҙем, аяғым да үҙем[113].
* Беҙ өйләнгәс, төн ҡыҫҡарҙы.
* Бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта.
* Бер матурға – бер йәмһеҙ,
  Бер йәмһеҙгә – бер матур,
  Бер йәмһеҙгә – бер йәмһеҙ,
  Бер матурға – бер матур[114]!
* Бикә биҙәнгәнсе, туй үткән.

  *Вариант:* Таҙ таранғанса, туй таралған.
* Бүҙәнәнең өйө юҡ, ҡайҙа барһа – бытбылдыҡ.
* Былай саҡта ауыҙ япмаҫ,
  Туй тигәндә йыр тапмаҫ.
* Ғашиҡ булған Ғәбделхай.
* Егет елле лә, еләне ҡыҫҡараҡ[115].
* Егет инем – солтан инем,
  Ҡыҙ йәрәштем – хан булдым,
  Ҡатын алдым – хур булдым.
* Егет фырт, аты хөрт.
* Иҙел күреп, һыуһыҙ үлгән[116].
* Ике йәшкә мөхәббәт бирһен!

* Икәү булып ятығыҙ,
Өсәү булып тороғоҙ[117]!

* Ир – илле, береһенән-береһе елле.

*Вариант:* Илдә – илле, береһенән береһе елле.

* Инәһенән тыуған, бите-ҡулы йыуған[118].

* Итәгемме, еңемме, ошо минең тиңемме?

* Иҫке йөрәк, яңы дәрт.

* Ишек бауы – бер алтын,
Беҙҙең апай – мең алтын[119].

* Йәше киткән ҡырыҡҡа,
Арты киткән шырыҡҡа.

* «Кейәүгә лә барып ҡайтаһы бар», – тигән, имеш бер ҡыҙ.

* Кемдәр малын кем йыймай,
Кемдәр йәрен кем һөймәй!

* Килен килбәтле булһын,
Һүҙе шәрбәтле булһын![120]

* Көндөҙ йөрөһәң, кеше күрә,
Төндә йөрөһәң, эт өрә.

* Көнөн күрһен, көлөндә аунаһын, барған еренән ҡайтмаһын![121]

* Күк төймәкәй кемдәлер, күңелкәйем шундалыр.

* Ҡаҙна иҫәбенә туй, ҡаҙ етмәһә, күркә һуй.

* Ҡарға ояһына торна ояланғын.

* Ҡарт ҡуйынында ҡалас бар – ҡаласынан ҡан татыр,
Йәш ҡуйынында ҡамсы бар – ҡамсыһынан бал татыр.
Ҡаласынан биҙәрмен, ҡамсыһына түҙәрмен.[122]

* Ҡыҙ китте, ҡот китте.

* Ҡыҙ китте – ҡый китте.

* Ҡыҙы миңә яраһа, әсәһен бүре алһын.

* Ҡырҡ мирҙан ҡалған.

* Матур ҙа – кеҫәһе таҡыр.

* Матурлығы хәжәт түгел, бәхете-тәүфиғы булһын.[123]

* Минән азат, Хоҙайҙан ҡанат.[124]

* Ни ҡыланһа, шул килешә өйләнмәгән егеткә.

* Орсоҡ хәтле буйы бар,
Еткән ҡыҙҙай уйы бар.

* Өйләнгәндә йырлай, өйләнгәс, илай.

* Өйө ситән булһа ла, егете бөтән.

* Силәгең сайпылмаһын – ҡотаймаҫһың.[125]

* Сәсе сәскә бәйләнгән.

* Сәскәнән сәскәгә ҡуна.

* Теле – бал, күңелен ҡарап ал.

* Төшкән ерең таш булһын.[126]

* Торошона килгән йөрөшө,
Өлөшөнә төшкән көмөшө.

* Туй ашы туйымлыҡ түгел, күңеллек кенә.

* Туй һылтауы менән тайлы булдым.

* Туйға тип йыр һаҡлаған,
Туйға килһә, йыр тапмаған.

* Туйҙа һай ҙа һай, туй үткәс, вай ҙа вай.

* Туйҙары ҡотло булһын,
Нигеҙҙәре ныҡлы булһын!

* Туйың туйға ялғанһын!

* Уңһа ла үҙе, туңһа ла үҙе.

* Утыным янғансы, төтөнөм төтәр.[127]

* Үҙҙәрс табышҡан, үҙҙәре барышҡан.[128]

* Үҙе тапҡан, үҙе баҡҡан.

* Үҙе тапҡан – үҙе япҡан.

* Үҙе йығылған иламаҫ.

* Һайлай-һайлай арыным, бер соҡорға абындым.

* Һиндә лә бер аҡлы ҡуй, миндә лә бер аҡлы ҡуй;
Ҡуйҙы ҡуйға ҡушайыҡ, һеҙҙең яҡҡа ашайыҡ.[129]

* Һөймәҫсмде һөйәмен һөйгәнемдең хаҡы өсөн.

* Эшләгәнең атаң менән әсәң өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн.

* Яҡшы ятҡа китмәһен.

## 2. Ғаилә тормошо, нәҫел-нәсәп

* Ағай-эне – ағай-эненең күҙгөһө.
* Ағай-эне бер үлелә[130], бер терелә кәрәк.
* Ағай алғанда, еңгә йыйғанда яҡшы.

*Вариант:* Ағай – алғансы, еңгәй – йыйғансы.

* Ағайҙыҡы алғансы, еңгәнеке елгәнсе.[131]
* Ағай-эне аҙһа, ала булыр.[132]
* Ағай-эне ҡәҙерен ялалы булғас белерһең.
* Ағай-энегә ҡарап мал үҫер,
  Ҡарағайға ҡарап тал үҫер.
* Ағай-эненән айыу-бүре ҡурҡҡан.
* Ағай-эненең аты уҙғансы,
  Ауылдашыңдың тайы уҙһын.[133]
* Ағай-энең барҙа, «дошманым юҡ» тимә,
  Апай-һеңлең барҙа, «көндәшем юҡ» тимә.
* Ағай-энең бар ерҙә «дошманым юҡ» тимә,
  Апһының бар ерҙә «көндәшем юҡ» тимә.
* Ағай-эненең ҡыҙығы – алыш-биреш,
  Ҡоҙалыҡтың ҡыҙығы – барып килеш.
* Ағай-эне менән эш татлы.
* Ағай-эне талашыр,
  Атҡа менһә ярашыр.

*Вариант:* Ырыу-туған талашыр,
Дошман килһә, ярашыр.

* Ағай-эне талашһа,ятҡа йәм.
* Ағай-эненең тартышы – туй бүләге йыртышы.
* Ағай-эне татыу булһа, ат күп булыр,
  Апһын-әзе* татыу булһа, аш күп булыр.

*Вариант:* Ағай-эне татыу булһа, менергә ат етә,
Килендәштәр татыу булһа, ашарға аш етә.

* Ағай-эне яуға кәрәк, мал дауға кәрәк.
* Ағайым өйө – аҡ йәйләү, энем өйө – өң төбө.
* Ағайым кемде алһа – еңгәм шул,
  Апайым кемгә барһа – еҙнәм шул.
* Ағаһы барҙың һағы бар,

Балаһы барҙың ялы бар.

* Ағаһы энеһенә асыу тотһа ла, үлем теләмәҫ.

* Ағаһын күреп эне үҫер,
Апаһын күреп һеңле үҫер.

* Ағас айыры үҫһә лә, тамыры бер.

* Ағас башы – ҡаҙыҡ,
Балдыҙ алыу – яҙыҡ.

* Ағас емеше менән матур.[134]

* Ағас бейек булһа ла, тамыры ерҙә.

* Ағас сыбыҡ саҡта бөгөлә.

* Ағас тамыры ер үтә керә,
Әҙәм тамыры ил үтә керә.

* Ағас та үҙ нәҫелен үҙ тирәһенә йыя.

* Ағас урмандан йыраҡ үҫһә лә, шунда табан һығыла.[135]

* Ағастың башын киҫһәң, төбө ҡалыр.[136]

* Ағастың йәшен бөк.[137]

* Ағасты кем ултыртһа емеш шуныҡы.

* Ағасты ҡапыл эймә: һыныр.

* Ағасты тотҡан ерҙән һындырып булмай.

* Ағасһыҙ йортҡа ҡош ҡунмаҫ,
Балаһыҙ йортҡа ҡот булмаҫ.

* Ағасына күрә алмаһы,
Анаһына[138] күрә балаһы.

* Ағасына күрә емеше.

* Аҙғын ҡатын йөрөр-йөрөр ҙә, өйөнә еткәс, йүгерер.

* Аҙ ҙа етә, күп тә бөтә, бергә торғанға ни етә?

* Ай айламай ат маҡтама,
Йыл йылламай килен маҡтама.

* Ай менән ҡояш берәр генә була[139].

* Ай тормай ат маҡтама,
Йыл тормай кейәү маҡтама.

* Айһыҙ атың маҡтама,
Йылһыҙ ҡатын маҡтама.

* Айың-көнөң уртаҡ булһын, ирең уртаҡ булмаһын.

* Айғыр өйөрөн ташламаҫ[140].

* Айғырың ала булһа, колоноң кола булыр[141].

* Айырылыу – канатың кайырылыу.

* Айыу балаһын «аппағым» тип,
Терпе балаһын «йомшағым» тип һөйөр.

* Айыу балаһын итәккә һалһаң да илекмәç,
Бүре балаһын бүреккә һалһаң да берекмәç.

* Акһак булһа ла үҙ атың[142].

* Акыллы ир катынын яманламаç.

* Акыллы катын – хазина.

* Акыллы ул – алтын кул.

* Алама кәйнәгә сәсең менән ер һеперһәң дә ярамаçһың.

* Алашарҙан* балаң нисәү, тип һорамайҙар.

* Алға киткән кешенең эте үлән ашар,
Кирегә киткән кешенең килене урлап ашар.

* Алғы тәгәрмәс кайҙан тәгәрәһә,
Арткы тәгәрмәс шунан тәгәрәр.

*Кыçкарак әйтелеше:* Тәгәрмәстең алды кайҙан, арты шунан.

* Алйот юлдаш булмаç, ят моңдаш булмаç.

* Алма ағасынан алыç төшмәç.

* Алты ағай-эненән айыу-бүре куркыр.

* Алтмыштағы атаңдың алдап-йолдап көнөн күр.[143]

* Алты көн ас булһаң да, ата ғәҙәтен куйма.

* Алтын ирең атыңа тейһә, алтынын ал да утка як.

* Алтындың эт муйынында кәҙере юк[144].

* Алып* инәнән, арғымак бейәнән тыуыр.

* Алыç булһа кешнәшер, якын булһа тешләшер.

* Алыç ергә коҙа булһаң, артыу-артыу аш килер,
Якын ергә коҙа булһаң, артыу-артыу һүҙ килер.

* Алыçтағы кояш йылы була[145].

* Ана күңеле балала, бала күңеле далала.

* Ана һөтө менән инмәгән, тана һөтө менән инмәй.

* Аптыраған бала атаһының һакалы менән уйнар.

* Аптыраған катын абышкаһын «атай» тигән.

* Апһын ағарып алдыма сыҡмаһын,
Ҡарайып артымда ҡалмаһын.

* Апһынды апһын күрә алмай.

* Аралар тыныс булһа, ғаилә ҡорос була.

* Арба булғансы, ат бул[146].

* Арба ватылһа – ат, быҙау үлһә, ҡатын ғәйепле.

* Арбаны йөрөткән дегет,
Ҡатынды йөрөткән егет.

*Вариант:* Арбаны дегет тота,
Ҡатынды егет тота.

Арба яҡшы йөрөһә – дегеттән,
Ҡатын яҡшы йөрөһә – егеттән.

* Арбаның алды ҡайҙа аунаһа, арты шунан аунай.

* Арғымаҡ бейәнән тыуыр[147].

* Арғымаҡтан ат тыуыр,
Ҡандаланан бет тыуыр.

* Арғымаҡты яманлап, толпарҙы ҡайҙан табырһың,
Ағай-энеңде яманлап, яҡынды ҡайҙан табырһың?

* Арғымаҡтың билгеһе – ҡаҙылыҡ йыймаç, ял йыйыр,
Яман егет билгеһе – ҡатын алмаç, мал йыйыр.

* Арҙаҡлының балаһы ун биштә лә баш булыр,
Арҙаҡһыҙҙың балаһы утыҙҙа ла йәш булыр.

* Арҡандағы ат ҡаҙығына уралыр[148].

* Арт йортто туйҙырған ҡатын ирҙе алға сығармай.

* Артҡы айылың нығ булһа, атың тулап ни ҡылыр,
Алған ҡатының яҡшы булһа, йортоң тулап ни ҡылыр?

* Арыçлан балаһы арыçлан булыр.

*Вариант:* Арыçландан арыçлан тыуыр.

* Аçмаған ҡаҙанды йөҙө ҡара ҡатын көткән.

* Аçтыңдағы атыңа ышанма,
Ҡуйыныңдағы ҡатыныңа ышанма.

* Аçыл ҡоштоң балаһы алдына ҡуймай аш сиймәç.

* Аçылһыҙ атҡа менһә, атаһын танымаç.

* Аçыраған башмаҡ үҙеңде тибер.

* Ат айында, ир йылында һыналыр.

* Ат барҙа бейә сапмаһын,
Ир барҙа ҡатын алға сыҡмаһын.

* Ат булыр ҡолондоң түше яҫы килер,
Әҙәм булыр баланың маңлайы яҫы килер.

* Ат иренле, ир моронло килһен.

* Ат кешнәшеп ҡолонон табыр.

* Ат менән ҡатындың башын ҡаты тот.

* Ат тартмаһа, арба бармаҫ[149].

* Ат тоҙға килә, кейәү ҡыҙға килә.

* Ат урынына ишәк бәйләмә.

* Ат яманы тай менән уйнар,
Әҙәм яманы бала менән уйнар.

* Ат яманы тай менән уйнар,
Ҡатын яманы бай менән уйнар.

* Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.

* Аттан төшөп, ишәккә менмәйҙәр.

* Аттар һыу эскәндә, тайҙар боҙ ялай.

* Атты ауыҙлыҡ өйрәтә.

* Атты өйрәтә белмәһәң, сығынсы булыр[150].

* Атты һыйпап өйрәтәләр.

* Аттың шәбе – кешелә, ҡатын шәбе күршелә.

* Аттың юрғаһын, бисәнең уңғанын ал.

* Аты икәүҙең аяғы тынмаҫ,
Ҡатыны икәүҙең ҡолағы тынмаҫ.

*Ҡыҫҡарак әйтелеше:* Ике ҡатын алғандың ҡолағы тынмаҫ.

* Атым бар тип атланма,
Ҡатыным бар тип маҡтанма[151].

* Атына күрә арбаһы, атаһына ҡарап балаһы.

* Атына күрә санаһы, заманына күрә балаһы.

* Атың ашамһаҡ булһа – уңдың,
Ҡатының ашамһаҡ булһа – бөлдөң.

* Атың барға ҡыуанма, атаң барға ҡыуан.

* Атың барҙа ер таны,

Атайың барҙа ил таны.

* Атың булһа, теҙгенен ҡыҫҡа тот.

* Атың насар булһа ла, ҡатының яҡшы булһын.

* Атың насар булһа, һатып ҡотолорһоң,
Этең насар булһа, атып ҡотолорһоң,
Ҡатының насар булһа, нисек ҡотолорһоң?

* Ата алмаған атаһына үпкәләр.

* Ата – алтын һаҙаҡ,
Инә – алтын ҡанат.

* Ата – ата ҡаҙ,
Инә – инә ҡаҙ.

* Ата байлығы улға йоҡмаҫ,
Әсә байлығы ҡыҙға йоҡмаҫ.

* Ата балаһы хата булмай.

* Ата балаһы хур булмаҫ.

* Ата булмай атайың ҡәҙерен белмәҫһең,
Әсә булмай әсәйең ҡәҙерен белмәҫһең.

* Ата ғәйрәтле булһа, бала ғибрәтле була.

* Ата ул менән, инә ҡыҙ менән тормай.

* Ата улды белмәй, инә ҡыҙҙы белмәй[152].

* Ата үлеп, бала ҡалһа – моратына еткәне,
Бала үлеп, ата ҡалһа – бөкөрәйеп үлеп киткәне.

* Ата үлеү – арҡа һыныу,
Инә үлеү – бәғер итең һулыу.

* Ата хаҡы – Тәңре хаҡы.

* Ата һүҙен тотмаған,
Әсә һүҙе йоҡмаған –
Яуға сабыр ир булмаҫ.

* Ата һөнәре балаға мираҫ.

* Ата юлы балаға таҡыр.

* Атаға оҡшап ул тыумаҫ,
Әсәгә оҡшап ҡыҙ тыумаҫ.

* Атаға ул булмаһаң,
Ҡайныға ҡол булырһың.

* Ата-инә – алтын һөйәк.

* Ата-инәң барҙа хөрмәт ит, үлгәс, зыярат ит.

* Ата-инә берҙәм булһа, балалары күндәм була.

* Ата-инәһенә изгелек күрһәтмәгән үҙе лә изгелек күрмәҫ.

* Ата-инәһен һөймәгән ҡыҙ яман,
Ҡәрҙәш-ҡәүемен һөймәгән ул яман.

* Ата-инә йәше менән,
Улы-ҡыҙы эше менән.

* Ата-инә ҡәҙерен балалы булғас белерһең,
Ағай-эне ҡәҙерен ялалы булғас белерһең.

* Ата-инәгә икеләгә лә бала,
Иллеләгә лә бала.

* Ата-инәгә ҡәҙер күрһәткән бала-сағанан ҡәҙер күрер.

* Ата-инәнең ҡайғыһы – улда-ҡыҙҙа,
Улдың-ҡыҙҙың ҡайғыһы – тауҙа-ташта.

* Ата-инәңә ни ҡылһаң, алдыңа шул килер.

* Ата-инәнең үлгәне – баланан хурлыҡ күргәне.

* Ата-инәһен яманлаған ят дошманға тап булыр.

* Ата-әсәнән ҡасҡан – яманлыҡ менән күҙен асҡан.

* Атай – еҙнә, инәй – ҡаҙна.

* Атай – кешән менән тышау,
Инәй – йөрәк менән үҙәк.

* Атай малы – ҡатай малы[153].

* Атайың үлһә лә, дуҫын ташлама.

* Атай-инә алғышы утҡа-һыуға батырмаҫ.

* Аталы бала – арҡалы,
Инәле бала – иркәле.

* Аталы баланың ҡулы уйнағанда,
Атаһыҙ баланың күҙе уйнай.

* Ата ҡарғышын күк күтәрмәҫ,
Әсә һағышын ер күтәрмәҫ.

* Атанан алтау тыуһаң да, башыңа бер яңғыҙлыҡ топор

* Атанан алтау тыуһаң да, бәләң яңғыҙ башыңа.

* Атанан бала йәш ҡалһа, көн итеүен көндә уйлар.

* Атанан бала тыуһа ине,
Атаһы юлын ҡыуһа ине.

*Вариант:* Атанан бала тыуыр, атаһының юлын ҡыуыр.

* Атанан күргән уҡ юныр,
Инәнән күргән тун бесер.

*Вариант:* Инәнән күргән нағыш тегер.

* Атанан тыумай ул булмаç,
Әсәнән тыумай ҡыҙ булмаç.

* Атанан яҡшы тыуһа – ятып ашар,
Атанан яман тыуһа – һатып ашар.

* Атанан яҡшы ул тыуһа, ҡар өçтөндә ут' яғыр,
Атанан яман ул тыуһа, ат өçтөндә эт ҡабыр.

* Атаны күреп ул үçер,
Инәне күреп ҡыҙ үçер.

* Атайың алтмышҡа етһә, ҡол итмә, үҙең дә ҡол булырһың.

* Атаң алтмышҡа етһә, ялсы кәрәкмәç,
Анаң алтмышҡа етһә, ашнаҡсы* кәрәкмәç[154].

* Атаң барҙа ир таны,
Нәçелең барҙа ил таны.

* Атаң менән маҡтанма,
Атың* менән маҡтан.

* Атаң усағын һүндермә.

* Атаң утынсы булһа, ҡулыңда балтаң булһын[155].

* Атаһы башҡаның бабаһы башҡа,
Бабаһы башҡаның доғаһы башҡа.

* Атаһы башҡаның батаһы башҡа.

* Атаһы берҙең хаҡы бер.

* Атаһы болан атмағандың балаһы ҡолан атмаç.

*Вариант:* Атаһы болан танымағандың балаһы ҡолан танымаç.

* Атаһы йүнһеҙ булһа, йолаһы тунһыҙ булыр.

* Атаһы торор – улы һөйләр,
Әсәһе торор – ҡыҙы һөйләр.

* Атаһы ҡорҙаштың балаһы ҡорҙаш.

* Атаһы ни эшләй, балаһы шуны эшләй.

* Атаһы тороп, улы һөйләгәндән биҙ,
Инәһе тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ.

* Атаһы һуҡҡан ҡыҙ бала бәхетһеҙ була, ти.

* Атаһы һуҡҡан ул уңыр,
Инәһе һуҡҡан ул уңмаҫ.

* Атаһы юҡ ул – ҡуштан,
Инәһе юҡ – инмәй тыштан.

* Атаһы юҡтың яҡ-яғы юҡ.

* Атаһыҙ бала алты кешегә хаслыҡ итер.

* Атаһыҙ бала етем түгел, әсәһеҙ бала – етем.

* Атаһыҙ етем – туйҙа етем,
Әсәһеҙ етем – көн дә етем.

* Атаһыҙ етем – ярты етем,
Әсәһеҙ етем – гел етем.

* Атаһыҙ ул аҫырама,
Инәһеҙ ҡыҙ аҫырама.

* Атаһыҙҙы ул итмә, инәһеҙҙе ҡыҙ итмә.

* Атаһыҙға ат бирмә, инәһеҙгә ҡыҙ бирмә.

* Атаһын үлтергәнде уғлан онотмаҫ,
Ҡойроғон киҫкәнде йылан онотмаҫ.

* Атаһына оҡшаған ҡыҙ бәхетле була.

* Атлағыһы килмәгән ат тәртәгә тибер[156].

* Ауыҙындағы тешен күр ҙә,
Ҡулынан килеп эшен күр[157].

* Ауыл тулы туғаның булғансы,
Ауыл һайын берәр булһын.

* Ауыр йөктө ат тартыр.

* Ауыр эшкә ир сыҙам.

* Ауырыу – аштан,
Дау – ҡәрендәштән.

* Аш хурлама – ҡоҫторор,
Ир хурлама – боҫторор.

* Ашап эскәндә дуҫ яҡшы,
Ҡанлы көндә ҡәрендәш яҡшы.

* Аштың йәме тоҙ менән,
Өйҙөң йәме ҡыҙ менән.

* Ашлыҡ уңһа – ерҙән,
Ҡатын уңһа – ирҙән.

* Аяулы күҙгә сүп керә.

* Бажа менән бажа татыу,
Кәзә менән кәзә татыу.

* Бажаның барлығы – кәзәнең маллығы.

* Бай булмаһаң да,
Бай төшөрлөк өйөң булһын.

* Бай булһаң – илең һөйөр,
Һау булһаң – ирең һөйөр.

* Бай менән ҡоҙа булһаң, наҙланып, маҙаңды алыр,
Ярлы менән ҡоҙа булһаң, теләнеп, маҙаңды алыр.

* Бай туған башта, ярлы туған аҫта.

* Байҙың килене булғансы, ярлының ҡыҙы бул.

* Байғоштан байғош тыуыр.

* Баҡмаһаң – бала китер,
Ҡарамаһаң – ҡатын китер.

* Бал татлы, балдан бала татлы.

* Бал һаҫымаҫ, ҡыҙ ҡартаймаҫ.

* Бал менән ауыҙланғандың, теле татлы булыр,
Май менән ауыҙланғандың теле йомшаҡ булыр[158].

* Балһыҙ гөлгә ҡорт ҡунмаҫ,
Балаһыҙ өйгә ҡот ҡунмаҫ.

* Бала – ата-инәгә алтын бағана.

* Бала балаһы балдан татлы.

* Бала – бала булһа, бала,
Бала булмаһа – бәлә.

* Бала баҡмаҡ – йән сыҡмаҡ.

* Бала бар ерҙә батша юҡ.

* Бала – бауыр ите,
Ир – йөрәк ите.

* Бала башында бер ҡайғы,
Ата башында мең ҡайғы.

* Бала бер утҡа төшөрөр,
Бер һыуға төшөрөр.

* Бала – бәғер.

* Бала бәләкәй сағында беләккә ауыр,
Үҫкәс, йөрәккә ауыр.

*Вариант:* Бала бәләкәйҙә – беләккә көс,
Ҙурайғас – йөрәккә көс.

* Бала заманына оҡшап тыуа.
* Бала зарын инә белер,
  Ир зарын ил белер.
* Бала итәктә ваҡытта бәлә түгел, итәктән төшкәс, бәлә.
* Бала илай-илай үҫә.

  *Вариант:* Бала йығыла-йығыла дәүегер*.
* Бала йөрәк ярып сығыр.
* Бала көйөгө – йөрәктә,
  Ир көйөгө – итәктә.
* Бала көлкөгә туймаҫ.
* Бала күңеле – аҡ ҡағыҙ.
* Бала күргәнен эшләр.
* Бала күрмәгән – балдан ауыҙ итмәгән.
* Бала күрмәгән өй – ҡош һайрауын ишетмәгән моңһоу урман.
* Бала ҡарама ҡыуышынан төшмәй (әсәнән тыуа).
* Бала менән бала булма.
* Бала өсөн әсәнең йөрәге, атаның беләге һыҙлар.
* Бала-сағаға ҡалған көнөң – ҡараңғы төнөң.
* Бала-саға тәрбиәһе утҡа-һыуға төшөрөр.
* Бала саҡ – баллы саҡ.
* Бала саҡта һөйҙөрә, үҫә-килә көйҙөрә.
* Бала саҡтан кергән ғәҙәт ғүмергә ҡалыр.
* Бала табыу – бер ҡыйын,
  Бала бағыу – мең ҡыйын.
* Бала – тал сыбыҡ.
* Бала уңған ҡатындың бер ҡулын бәйләй,
  Уңмаған ҡатындың ике ҡулын бәйләй.
* Бала – уңһа ғына бала, уңмаһа – бәлә.
* Бала үҫтерһәң, буйын ғына үҫтермә, аҡылын да үҫтер.
* Бала шатлығы – ана шатлығы.
* Бала яйына торһаң, бала булырһың.
* Бала яратмаған кешенең балаһы күп булыр.
* Балаға ике ат бер тин.

* Балалы йортта бур ятмаҫ.

* Балалы кеше – бай кеше.

* Балалы ҡаҙға ем теймәҫ.

*Вариант:* Балалы ҡарға емгә туймаҫ.

* Балалы ҡатын – буҡлы эсәк.

* Балалы өй – баҙар,
Балаһыҙ өй – тулы зар.

* Балалы өй – баҙар,
Балаһыҙ өй – маҙар*.

* Балалы өйҙә сер ятмаҫ.

* Балалы өйрәк күлдән китмәҫ.

* Балалының балаһы илай, балаһыҙ үҙе илай.

* Балам бар тип һөйөнмә, һау тип һөйөн.

* Баланан бәхетең булһа, ҡарт көнөңдә йәш итер,
Баланан бәхетең булмаһа, иртә йәштән ҡарт итер.

* Баланы баштан, талды йәштән бөк.

* Баланы бишектә өйрәт.

* Баланы бишектә, ҡатынды йәшлектә өйрәт.

* Баланы иркәләү типкеләүҙән яман.

* Баланы йәштән өйрәт.

* Баланы ҡыйнағансы, бағананы ҡыйна.

* Баланы табыу һөнәр түгел, бағыу һөнәр.

* Баланы туҡмап йыуатма, көйләп йыуат.

* Баланы үбеү – рәхәт,
Ҡатынды үбеү – шәһүәт*.

* Баланы яй бөкһәң – күндерерһең,
Ҡапыл бөкһәң – һындырырһың.

* Баланың аҙары булһа ла биҙәре булмай.

* Баланың башына һуҡма: аңғыра булыр.

* Баланың бармағы ауыртыр, инәнең йөрәге ауыртыр.

* Баланың буйын көтмә, аҡылын көт.

* Баланың ғәйебе – ата-инәнеке.

* Баланың тинтәк булыуы өйөнән,
Егеттең тинтәк булыуы бейенән.

* Баланың тыуғанына ҡыуанма, торғанына ҡыуан.
* Баланың хәсрәте үҙе менән бергә үҫә.
* Баланың һүҙе батмандай (ауыр).
* Балаң булһа инеураҡта, булмаһа ине ҡунаҡта.
* Балаң булһа – күп булһын,
Күп булмаһа – юҡ булһын.
* Балаң булһа – шуҡ булһын,
Шуҡ булмаһа – юҡ булһын.
* Балаң йомошҡа китһә, артынан үҙең бар.
* Балаң үлде – алтын бағанаң ауҙы.
* Балаң үлһә, балда ла тәм булмаҫ.
* Балаң үлһә, бер төнгө йоҡоң осор,
Ҡатының үлһә, бер өйөрлө йылҡың сығыр[159].
* Балаң яман булһа – әжәлең өйөңдә.
* Баланды боҙғоң килһә, маҡта.
* Баландың уйнағанына, ҡаҙандың ҡайнағанына ҡыуан.
* Балаһы атҡа менеп сапһа, атаһы ботон ҡыҫыр.
* Балаһыҙ баш – ярылған таш.
* Балаһыҙ бер илар, балалы мең илар.
* Балаһыҙ ғүмер – һүнгән күмер.
* Балаһыҙ кеше кеше һөйләр,
Балалы кеше балаһын һөйләр.
* Балаһыҙ кеше һаран була.
* Балаһыҙ ҡатын – емешһеҙ ағас.
* Балаһыҙ өйҙөң йәме юҡ.
* Балаһыҙҙың малы хәрәм,
Иманһыҙҙың йәне хәрәм.
* Балдыҙ – көмөшкә ҡойған алтын йондоҙ.
* Балдыҙы сибәр кеше ҡатынына үлем теләй.
* Балығына күрә ҡармағы.
* Бар ваҡытта ят яҡшы, юҡ ваҡытта үҙ яҡшы.
* Бар яраштыра, юҡ талаштыра.
* Бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта.
* Барыр ере булмаған бажаһы өйөнә барыр.

* Барыр ерең бар булһа, барғас айран эсерһең,
Барыр ерең тар булһа, сыҡҡас телең тешләрһең.

* Бауыр ауыртмаһа ла, бөйөр тарта.

* Баш ҡәрҙәш булһа ла, мал ҡәрҙәш түгел.

* Баш та ҡалыр, түш тә ҡалыр,
Баш булмаһаң – башыңа ҡара бәлә ҡалыр[160].

* Башҡаның башы ауыртмай.

* Башһыҙ өйҙә ата тороп ул һөйләр,
Инә тороп, ҡыҙ һөйләр.

* Башыңа бәлә төшкәндә туғаныңды танырһың.

* Бей итмә, бей төшә торған өй ит.

* Бейә ҡолонон типһә лә, биртә типмәç.

* Бейәнән ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.

* Бейәһенә атланһаң, тайы үҙе эйәреп ҡайтыр.

* Бер ата туғыҙ улды аçырар,
Туғыҙ ул бер атаны аçырамаç.

* Бер бармағыңды тешләһәң, бишеһе бөгөлөр.

* Бер бала – бер шатлыҡ,
Ике бала – ике шатлыҡ.

* Бер бейәнең ике имсәге – берееһс кипһә, һөтө юҡ.

* Бер дөйәнең ике үркәсе – береһе кипһә, көсө юҡ[161].

* Бер болғанмай, һыу ҙа тонмай.

* Бер килен алһаң, билеңде бер ерҙән,
Ике килен алһаң, ике ерҙән,
Өс килен алһаң, өс ерҙән быуырһың[162].

* Бер килен – йот,
Бер килен – ҡот.

* Бер киçкән икмәк берекмәç.

* Бер ҡатынға ҡәнәғәт ғүмер буйы хуш ҡалған,
Башҡаларҙы эҙләгән ҡатынынан буш ҡалған.

* Бер ҡатындың ире үлһә, ҡырҡ ҡатынға ҡайғы төшә.

* Бер төкөргән төкөрөгөңдө кире йотма.

* Бер яҡшы ҡыҙ ете улға тора.

* Бер яҡшы – бер яман.

* Беренсе ир – алланан,
Икенсеһе – бәндәнән,

Өсөнсөһө – шайтандан.

* Береһе ир булғансы, икенсеһе ер була[163].

* Берҙәм өйҙә бәрәкәт бар,
Ғауғалы өйҙә һәләкәт бар.

* Берең баш булһа, берең түш булһын.

* Берәү йәненә юлдаш, берәү малына юлдаш.

* Берәү улдан күрә, берәү – ҡыҙҙан[164].

* Биҙәү* ҡатын бикә булыр.

*Вариант:* Биҙәү ҡатын биҫтә* булыр.

* Бизмән менән гер бергә,
Ҡатын менән ир бергә.

* Бирнә биргән – бикә килен.

* Бисәң матур – бай тирмәһендә ятыр.

* Бисәң матур булһа, байың үсле була.

* Биш бармағың биш төрлө.

* Бишек балаһы – бей балаһы.

* Бишек – киң донъяға ишек.

* Бишектәге бишкә төрләнә.

*Вариант:* Биләүҙәге бала бишкә төрләнә.

* Брат браттың көтөү көткәненә рад.

*Вариант:* Брат браттың тирмән тартҡанына не рад[165].

* Бойҙай яҡшыһы – ерҙән,
Ҡатын яҡшыһы – ирҙән.

* Боландың үҙ мөгөҙө үҙенә ауыр түгел.

* Болло* кеше бол табыр, уллы кеше ял табыр.

* Бохар даны менән буҙ үтер,
Ата даны менән ҡыҙ үтер.

* Бөлдөргән дә ҡатын, көлдөргән дә ҡатын.

* Бөлөр йорттоң буйҙағы баш булыр.

* Бөтөн серенде ирецә һөйләп бөтөрмә.

* Буйҙаҡ егет бай булмаҫ.

* Буйҙаҡ утыҙға хәтле үҙе өйләнмәһә,
Утыҙҙан һуң ҡурҡып өйләнмәҫ.

* Буйы сыбыртҡы һабы оҙонлоғо булһа, ир баланан ен ҡурҡа.

* Булмаç йортҡа бөкрө билле ул тыуыр.
* Булмаç йортҡа – бөкрө ҡарсыҡ.
* Булмаç иргә – бөкрө ҡатын.
* Булмаç ҡатындан бөкрө билле ул тыуыр.
* Булыр ат ҡолон сағынан билгеле.
* Булыр ат тайҙан билгеле,
  Булыр һыйыр быҙауҙан билгеле.
* Булыр ат ҡолон сағынан билгеле,
  Булыр бала бала саҡтан билгеле.
* Булыр бала биләүҙән (билгеле).

  *Вариант:* Булырҙайың баштан уҡ.
* Булыр баланың быуыны иртә нығый.

  *Вариант:* Булырҙың быуынынан билгеле.
* Булыр баланың ҡылығы яҡшы булыр.
* Булыр-булмаç туғандан булған дуç яҡшы.
* Булыр-булмаç баланың барынан юғы артыҡ.
* Булыр ҡолон бәйҙә уйнар.
* Бутҡа булһа, майлы булһын,
  Уланың булһа, шайлы* булһын.
* Бүре балаһын аç(ы)рап, эт булмаç.
* Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай.
* Бүре балаһын бүреккә һалһаң да иш булмай,
  Кеше балаһын ҡултыҡҡа ҡыçһаң да ҡол булмай.
* Бүре балаһын тоторға өйрәтһә,
  Һарыҡ бәрәсен ҡасырға өйрәтер.
* Бүрәнәнең йыуан башы кем елкәһендә булһа, шуға ауыр.
* Быҙауы үлгән һыйырҙа һөт булмаç.
* Быçраҡ ҡатын йылына етмеш йөк ҡыл ашатыр.
* Бәхетленең балаһы ун бишендә баш булыр,
  Бәхетһеҙҙең балаһы утыҙҙа ла йәш булыр.
* Гөл сәскәһенән билгеле.
* Ғаилә ғәрипһеҙ булмай[166].
* Дегәнәк тамырынан гөл үçмәй.
* Донъя булғас, ҡашығаяҡ шылтырамай тормай.

* Донъя гел ал да гөл булып тормай.

* Донъяла ата-инәнән башҡа бар нәмә лә табыла.

* Донъяла етемлек әсеһе әсе.

* – Донъяла ни әсе?
  – Етемлек әсеһе әсе[167].

* Донъялыҡта ике үлем: береһе – айырылышыу, береһе – үлем.

* Донъяның төҙөклөгө лә, боҙоҡлоғо ла ҡатындарҙан.

* Дуңғыҙҙан дуңғыҙ тыуыр, ҡондоҙ тыумаҫ.

* Дуҫ – иш менән,
  Ҡәрҙәш – ырыу менән.

* Дуҫлығыңды ҡайҙан беләйем – көлгән көндө килмәнең,
  Туғанлығыңды ҡайҙан беләйем – бөлгән көндө белмәнең.

* Дуҫтың иҫкеһе яҡшы, ҡоҙаның яңыһы яҡшы.

* Дуҫым кем? – Ирем.
  Дошманың кем? – Ирем.

* Дәртле килен ҡәйнәһен яратыр.

* Дәүләт-байлыҡ дуҫ-иш арҡаһында,
  Яҡшы исем ҡатын арҡаһында.

* Дәүләт ишектән, бала бишектән керә.

* Ебәк иләй белмәгән йөн тетә,
  Килен көтә белмәгән өй көтә.

* Ебенә күрә йөйө, йөйөнә күрә көйө (яйы).

* Егеп сыҡҡан атың яҡшы булһын,
  Ултырып сыҡҡан ҡатының яҡшы булһын.

* Егет – йорттоң терәге,
  Ҡыҙҙар – йорттоң биҙәге.

* Егет – ил күрке,
  Ҡыҙ – өй күрке.

* Елдән тыуған* баланың үҙ бишеге булмай.

* Елкә аш булмаҫ, ейән иш булмаҫ.

* Емешле ағасҡа балта сапмайҙар.

* Еңгә – еҙ энә.

* Еңгә ҡатын ейәндеке[168].

* Еңгә ҡатында етмеш төрлө хәйлә була.

* Еңгәнең ярты яғы – ҡәйнештеке[169].

* Еңгәнән ете йылға тиклем өмөт[170].

* Ер ағасһыҙ булмаҫ, әҙәм нағасһыҙ* булмаҫ.

* Ерек утын яҡма, еңгә ҡатын алма:
Ерек утындың ҡыҙыуы юҡ,
Еңгә ҡатындың йылыуы юҡ[171].

* Еренә күрә еләге, ҡыҙына күрә кейәүе.

* Еренә күрә ҡоланы,
Һыуына күрә йыланы,
Ҡыҙына күрә кейәүе,
Өйөнә күрә иләге.

* Еренән айырылған ете йыл илар,
Йәренән айырылған ғүмер буйы илар.

* Ете атаһын белмәгән – мөртәт.

* Ете атаһын белмәгән – етемлектең билгеһе.

* Ете ауылда ете ҡәрҙәшең булһын.

* Ете бажаны бер бүре ашаған.

* Ете ул өйләндергән – бай булған,
Ете ҡыҙ биргән – бөлгән.

* Етеҙ бала етегә еткәнсе тешәй.

* Етем бала байрамы – яңы күлдәк кейгәндә.

* Етем бала – ете ауыҙ[172].

* Етем бала тип кәмһетмә: бәхете булһа, ир булыр.

* Етем бала ырыҫы ерҙән, ерҙән булмаһа – илдән.

* Етем балаға балауыҙ ҙа аш.

* Етем балаға йөҙөм еләге лә аш.

* Етем баланың күңеле китек.

* Етем быҙау аҫраһаң, ауыҙ-мороноң май булыр,
Етем бала аҫраһаң, ауыҙ-мороноң ҡан булыр.

* Етем бәрәс һөткә туймаҫ, етем бала ашҡа туймаҫ.

* Етем бәхете – ерҙән.

* Етем илаһа – ер-һыу илар.

*Вариант:* Етем илаһа – ер-күк илар.

* Етем йәше ерҙә ятмаҫ.

* Етем күңеле – бер киҫәк.

* Етем ҡайҙа – һүҙ шунда,

Тишек ҡайҙа – ел шунда.

* Етем ҡалған елдән быуаҙыр[173].

* Етем ҡорһағы ете ҡат.

*Вариант:* Етем ҡорһағы ете ҡат –
Нимә тапһаң, шуны ҡап.

Етем ҡорһағы ете ҡат,
Һигеҙенсеһе – быҙау аласығы.

* Етем ҡыҙға – еҙ төймә.

* Етем тыуған бала үҙ кендеген үҙе ҡырҡыр.

* Етем хаҡы ебәрмәҫ.

* Етемгә яҡшы йөҙ күрһәт.

* Етемде етеп һуҡ, етә алмаһаң, ташлап һуҡ[174].

* Етемдең атаһы ете[175].

* Етемдең әсәһе ҡырҡ.

* Етемдең ауыҙы ашҡа тейһә, башы ташҡа тейә.

*Вариант:* Етемдең ауыҙы ашҡа тейһә, мороно ҡанай.

* Етемдең ҡорһағы – ете, игеҙҙеке – һигеҙ.

* Етемдең үҙе туйһа ла күҙе туймай.

* Еткән ҡыҙ – киткән ҡыҙ.

* Зат затына тарта.

* Заттың алаһы ла була, ҡолаһы ла була.

* Иген ҡамылынан билгеле.

* Иген уңмаһа – бер йыллыҡ,
Ҡатын уңмаһа – ғүмерлек.

* Иҙел даны менән боҙ китә,
Ата даны менән ҡыҙ китә.

* Иҙел менән боҙға таянма,
Ат менән ҡатынға ышанма.

* Иҙелдең төбө булһа ла, ирҙең төбө юҡ.

* Иҙәнең ер булһа ла, ирең ир булһын.

* Ике бай ҡоҙа булһа, араларында юрға йөрөр.

* Ике баланы бергә иҫәплә,
Бер баланы юҡҡа иҫәплә.

* Ике бармаҡ араһына ит үрмәй,
Туған туғанһыҙ көн күрмәй.

* Ике йән бер булһа, ике сер бер була.

* Ике килен бешергән аш йә гел тоҙ булыр,
Йә гел тоҙһоҙ булыр.

* Ике ҡатын алғандың дауы өйөндә,
Өс ҡатын алғандың яуы өйөндә.

* Ике төймә берептә, ике тирәк бер төптә[176].

* Ике туған араһына ят кермәҫ.

* Ике туған талашыр, атҡа менһә – яраһыр.

* Ике туған татыу булһа, илдәгеһен индерер,
Ике туған аҙар булһа, аралағын алдырыр.

* Ике туған һуғышһа, өсөнсөгә ҡыҫылма.

* Ике тугандан айыу ҙа ҡурҡа.

* Ике һыйыр һауғандың айраны бар,
Ике ҡатын алғандың вайраны бар.

* Ике ямандан бер яҡшы тыуһа – тиңе булмаҫ,
Ике яҡшынан бер яман тыуһа – име булмаҫ.

* Ике ярты – бер бөтөн[177].

*Вариант:* Ике һыңар – бер пар.
Ике һыңар – бер кейем.

* Икенең бере: йә ир, йә ҡатын баш булһын.

* Икенең бере ҡала, берәүҙең кеме ҡала?

* Икмәк тәме тоҙ менән,
Өйҙөң йәме ҡыҙ менән.

* Икмәк уңмаһа – бөтә,
Ҡатын уңмаһа – ғүмер буйы китә.

* Илаҡ баланы илап тымыҙып булмай.

* Илағыһы килгән бала атаһының һаҡалы менән уйнар.

*Вариант:* Ирекҡән бала атаһының һаҡалы менән уйнар.

* Илар бала әсәһенең имсәген тешләр.

* Илашыуға үҙ яҡшы, һыйлашыуға сит яҡшы.

* Ил ҡыҙырған һынсы була,
Туҡалдың бары тыңсы була.

* Илдә йөрөгән иләктең төбө тиҙ төшә[178].

* Илен белмәгән – белекһеҙ,
Нәҫелен белмәгән – намыҫһыҙ.

* Имгән быҙау имгәкһеҙ була.

* Имә белмәгән ҡолон ике бейәнең һөтөн бөтөргән.

* Инә йөрәге бала тип өҙөлөр.

* Инә ҡаҙ йомортҡа баҫҡанда, ата ҡаҙ янында бейер.

* Инә ҡарғышы төшөр ине, инә һөтө ебәрмәй.

* Инә ҡорт ғәйрәтле булһа, умарта ҡеүәтле була[179].

* Инә ҡулы – им.

* Инә – өйҙөң өрлөгө.

* Инә һөтө менән кермәгән бейә һөтө менән кермәҫ.

*Вариант:* Ана һөтө менән кермәгән тана һөтө менән кермәҫ.

* Инәнең һөтө – бал, баланың теле – бел.

* Инә һуҡҡан ер тамуҡта янмаҫ.

* Инәң үлһә – йылғаң ҡороно,
Атаң үлһә – таянған тауың ауҙы.

* Инәһе типкән ҡолондоң тәне ауыртмаҫ.

* Инәһеҙ ҡорт бал йыймаҫ,
Бал йыйһа ла мул йыймаҫ.

* Инәһеҙ ҡорт көсһөҙ булыр.

* Иптәшкә ярамаған ирҙән эт яҡшы.

* Ир аҡыллы булһа, ҡатын күндәм була.

* Ир аҡыллыһы өс йылғыһын алдан уйлар,
Ҡатын аҡыллыһы өс көнлөгөн алдан уйлар.

* Ир-аҙамат билгеһе – тышта мырҙа, өйҙә ҡол.

* Ир аҙаматһыҙ йәшәй алмаҫ,
Ҡыҙ ҡанатһыҙ оса алмаҫ.

* Ир – ат, ҡатын – арба.

* Ир-ат өйҙә ултырһа ла, күңеле тышта,
Ҡатын-ҡыҙ тышта йөрөһә лә, күңеле өйҙә.

* Ир аты менән, ҡатын ире менән маҡтаныр.

* Ир бала – алтын, алтын табаҡтан аш ашар.

* Ир бала – ата-инәгә таяу,
Ҡыҙ бала – өйгә яҡҡан буяу*.

* Ир балаға ат кәрәк, ҡыҙ балаға – ҡанат.

* Ир бала инәһенә, ҡыҙ бала атаһына оҡшаһа, бәхетле була, ти.

* Ир бала – йортҡа терәк,
Ҡыҙ бала – йорт эсендә биҙәк.

* Ир бала тап, иркенләп ят.

* Ир баҡҡанды ил баҡҡан,
Ир ҡаҡҡанды мир ҡаҡҡан.

*Вариант:* Ат ҡаҡҡанды тай ҡаҡҡан,
Ир ҡаҡҡанды мир ҡаҡҡан.

* Ир батырлығына таянһа,
Ҡатын матурлығына таяныр.

* Ир – баш, ҡатын – муйын.

* Ир – баш, ҡатын – түш.

* Ир – беләк, ҡатын – терәк.

* Ир биреү – йән биреү.

* Ир битен асҡансы, гүр битен ас[180].

* Ир булған кеше этеп йыҡһын, тартып торғоҙһон.

* Ир ғазабы – гүр ғазабы.

* Ир ғәйрәтле булһа, ҡатын ғибрәтле була.

* Ир даны менән мал үтә,
Ата даны менән ҡыҙ үтә.

* Ир ҙә ир булып, ҡатындан тыуған.

* Ир – игеҙ, имгәк – яңғыҙ.

* Ир имгәк түгел.

* Ир икмәге ирекле,
Ашай белһәң, кимекле.

* Ир инәһе һүҙенә ҡарап йөрөһә, килен ким булыр,
Ир килен һүҙенә ҡарап йөрөһә, инәһе ҡол булыр.

* Ир ирлеген итер, итәк-еңен йыртыр.

* Ир иткән дә – ҡатын, ер иткән дә – ҡатын.

* Ир – келәт, ҡатын – йоҙаҡ.

* Ир кеше өйҙә ятмаҫ.

* Ир кешегә бер йылмайып ҡараһаң,
Ҡар өҫтөнән ялан аяҡ йүгерер, ти.

* Ир килтерә белһен, ҡатын еткерә белһен.

* Ир көнләшмәгән – ишәк,
Ҡатын көнләшмәгән – ҡарһаҡ*.

* Ир күп өйҙә утын булмаç,
Ҡатын күп өйҙә һыу булмаç.

* Ир күрке – ҡатын, ҡатын күрке – ир.

* Ир ҡайғыһы итәктә, бала ҡайғыһы йөрәктә.

* Ир ҡанаты ат булыр, ҡатын ҡанаты ир булыр.

* Ир ҡулынан ҡош туймаç[181].

* Ир ҡуштаны илгә яраған,
Ҡатын ҡуштаны иргә яраған.

*Вариант:* Ир ҡуштаны түргә яҡын,
Ҡатын ҡуштаны иргә яҡын.

* Ир ҡыҙғанмаған – ирһәк*,
Ҡатын ҡыҙғанмаған – ҡарһаҡ.

* Ир ҡәҙерен эш төшкәндә белерһең.

* Ир менән ҡатын араһына ингәнсе,
Ике ат араһына ин.

*Вариант:* Ир менән ҡатын араһына ингәнсе,
Ҡылыс менән ҡылыс араһына кер.

Ир менән ҡатын араһына кергәнсе, утҡа кер.

* Ир менән ҡатын талашыр, түшәгендә ярашыр.

* Ир менән ҡатын – бер йән, бер тән.

*Вариант:* Ир менән ҡатын – игеҙәк йән.

* Ир менән ҡатын – икеһе лә бер ҡамырҙан әүәләнгән.

* Ир менән ҡатын икеһе бер сыбыҡтан ҡыуылған.

* Ир менән ҡатынды бер һүҙ яраштыра, бер һүҙ талаштыра.

* Ир менән ҡатындың тупрағы бер.

* Ир муйынында ҡыл арҡан серемәç.

* Ир өйҙөң бер сатын тотор,
Ҡатын өйҙөң өс сатын тотор.

* Ир өйҙән сыҡһа – бәрәкәт,
Ҡатын-ҡыҙ өйҙә торһа – бәрәкәт.

* Ир таба, ҡатын тота.

* Ир – табыусы, ҡатын – өләшеүсе.

* Ир – татлы сир.

* Ир тауышлы ҡатында әҙәп булмаç,
Ҡатын тауышлы ирҙә ғәйрәт булмаç.

* Ир – тора белһәң ир, тора белмәһәң – сир.

* Ир уңған булһа, ҡатын йылдам була.

* Ир үлде – итәк йыртылды.

* Ир хаҡы – тәңре хаҡы.

* Ир хурлағанды ил хурлар,
Ир маҡтағанды ил маҡтар.

* Ир хәстәрле булһа, ҡатын таçтарлы була.

* Ир һуғыштан ҡайтыр, һуғыш хәлен ҡатынынан ишетер.

* Ир әйләнеп ҡулға төшөр,
Ҡош әйләнеп турға* төшөр.

* Иргә – ҡатын, мейескә – утын (кәрәк).

* Иргә – ҡатын, ҡатынға – утын.

* Иргә таянма, илгә таян.

* Иргә ышанма, Иҙелгә таянма.

* Ирҙе ҙур иткән дә ҡатын, хур иткән дә ҡатын.

* Ирҙе ир иткән – ҡатын,
Ҡатынды ҡатын иткән – ир.

* Ирҙе ир иткән ҡатын,
Ҡатынды ҡатын иткән утын.

*Вариант:* Ирҙең атын ҡатын сығарыр,
Ҡатындың атын утын сығарыр.

* Ирҙе иртә ҡартайтҡан – насар ҡатын,
Ҡатынды иртә ҡартайтҡан – сей утын.

* Ирҙе көлдөргән дә ҡатын, бөлдөргән дә ҡатын.

* Ирҙе әҙәм иткән дә ҡатын, әрәм иткән дә ҡатын.

* Ирҙең атын аты сығарыр,
Ҡатындың атын ояты сығарыр.

* Ирҙең атын йә аты сығарыр, йә ҡатыны сығарыр.

* Ирҙең ирен инә тыуҙыра.

* Ирҙең нәçеһе – бер,
Ҡатындың нәçеһе – туғыҙ.

* Ирҙең уңмағаны – икмәкһеҙ,
Ҡатындың уңмағаны – күлдәкһеҙ.

* Ирҙең яманы уғрылыҡ ҡылыр,
  Ҡатын яманы уйнаш ҡылыр.

* Ирҙән иргә йөрөгәнсе, гүрҙән гүргә йөрө.

* Ирҙән ишәк көнләшмәй,
  Ҡатындан түшәк көнләшмәй.

* Ирҙән ҡайтҡан яуҙан ҡаты.

* Ирҙән оялғандың балаһы булмаҫ.

* Ирҙ(л)әр, бисәһе йүнһеҙ булһа, сирләр.

* Ирҙәр – имән тамыры,
  Ҡатындар – бойҙай ҡамыры.

* Ирҙәр ҡатындарға мохтаж,
  Ҡатындар ирҙәргә мохтаж.

* Ирҙәр мал таба, ҡатындар ҡапсыҡ тегә.

* Ирҙәр һөйөр һауҙы, ҡатындар һөйөр байҙы.

* Ирҙәр эш бешерә, ҡатындар аш бешерә.

* Ирҙәүкә булһа – ҡатының яу,
  Ҡатынша* булһа – ирең яу.

* Ире барҙың – көнө бар.

* Ире яманДың иңенән, ҡатыны яманДың сңенән билгеле[182].

* Ирем киҫәге – итем киҫәге[183].

* Ирен һөйгән ҡатындың өйөнә нур яуыр.

* Ирен яманлаған ҡатындан биҙ,
  Ҡатынын яманлаған ирҙән биҙ.

* Ирене ҡыбырҙаһа ла ир булһын.

* Иренә хеҙмәт иткән – иленә хеҙмәт иткән.

* Ирең булмаһа булмаһын, инәң булһын.

* Иреңдән айырылғансы, күкрәгеңдәге йәнеңдән айырыл.

* Иркә бала байрамы – яңы күлдәк кейгәндә,
  Етем бала байрамы – ауыҙы ашҡа тейгәндә.

* Иркә бала ир булмаҫ.

* Иркә бала итәкте буяй.

* Иркә ҡатын ирҙең һаҡалына тотонор.

* Иркәлек боҙор.

* Иркәнең күҙе кипмәҫ, юрғаның тире кипмәҫ.

* Ирле бисә – сирле бисә,
Ирһеҙ бисә – бауһыҙ уймаҡ.

* Ирле ғүмер – иркә ғүмер.

* Ирле ҡатын – иркә ҡатын.

* Ирле иренә таяна, ирһеҙ биленә таяна.

* Ирле кеше Иҙел кискән,
Ирһеҙ кеше утҡа төшкән.

*Вариант:* Ирле Иҙел кискәндә ирһеҙ ултырып ҡала.

* Ирле ҡатын ирһеҙ ҡатындың хәлен' белмәҫ.

* Ирле ҡатын – терәкле,
Малды ҡатын – йөрәкле.

* Ирмен тигән ир эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр,
Ҡатынмын тигән ҡатын эсендә бишекле бала ятыр.

* Ирмен тигән ир булыр,
Ир яманы сир булыр.

* Ирһеҙ ҡатын һәр иргә яҡын.

* Ирһеҙ ҡатын – йүгәнһеҙ ат.

* Ирһеҙ ҡатынға, йүгәнһеҙ атҡа ышанма.

* Ирһеҙ ҡатындар ҙа үлмәй, донъя рәхәте күрмәй.

* Ирһеҙ бисәне бисура алдаған.

* Иртә көлгән бала кисен илай.

* Иҫке күлдәк тәнгә яҡын,
Үҙ ҡатының йәнгә яҡын.

* Иҫәпле ҡатын ит еймәҫ.

* Иҫәбенә күрә хисабы,
Килеһенә күрә кил(е)һабы.

* Иҫәр атына асыуланһа, ҡатынын ҡыйнар.

* Ит аҫылы ҡарталыр, зат затына тарталыр.

* Ит менән тырнаҡ араһына кермә[184].

* Итәктә саҡта һөйҙөрә,
Итәктән төшкәс көйҙөрә.

* Ишек алдынан дау килгәнсе,
Өй артынан яу килһен.

* Ишек биге менән, ҡаҙан ҡапҡасы менән.

* Ишәк ауырығанын, ир ҡартайғанын белмәҫ.

* Ишәгенә күрә тышауы.
* Йомортҡа тауыҡты өйрәтмәй.
* Йортто тотҡан – ир, өйҙө тотҡан – ҡатын.
* Йүгән кем ҡулында булһа, ат шуға буйһона.
* Йүкә шына имән яра.
* Йүнһеҙ бала ата йортон хурлар.
* Йүнһеҙ кейәү йорт тотмаҫ.
* Йүнһеҙҙән йүнһеҙ тыуыр.
* Йыллығын уйламаған ирҙән биҙ,
  Айлығын уйламаған ҡатындан биҙ.
* Йыраҡ ҡәрҙәштән яҡын күрше яҡшы.
* Йыраҡ тип ханға тел тейҙермә – ҡулы етер,
  Насар тип ирҙе әрләмә – ҡарыуы етер.
* Йыраҡтағы ҡояш эҫе була.
* Йыраҡтағы туғандан яҡындағы ят артыҡ.
* Йыуаш ата – бала бәхете.
* Йыуаш ҡәйнәнән «ыш» тигән һүҙ сыға.
* Йәйләүгә туғай яҡшы, кәңәшкә ағай яҡшы.
* Йән ҡәрендәште мал ҡәрендәш айырған.
* Йән тартмаһа, ҡан тарта.
* Йәнең уртаҡ булһа ла, йәрең уртаҡ булмаһын.
* Йәреңдең ҡәҙерен айырылғас белерһең.
* Йәш ағасҡа һөйәлеп, ҡыу ағас ҡырҡ йыл ғүмер иткән.
* Кейәү аты менән көл түкмә.
* Кейәү ашы – ҡоймаҡ.
* Кейәү ашы – ҡара-ҡаршы.
* Кейәү кергәнсе ҡыҙың һаҡла,
  Кейәү кергәс, өйөң һаҡла.
* Кейәү килде – хан килде.
* Кейәү – ҡамсат бүрек[185].
* Кейәү өйө – ҡәберҙән тар.
* Кейәү ул булмаҫ, килен ҡыҙ булмаҫ.
* Кейәү холҡо – көҙгө көн.

* Кейәү һыйы – хан һыйы.

* Кейәүгә торһа ла – ҡамау*, ултырһа ла – ҡамау.

* Кейәү түре – улдың тупһаһы.

* Кейәү көйһөҙ булһа, тешең һыҙлағандан яман булыр.

* Кейәү ҡыуһа – ишек тот,
Улың ҡыуһа – бишек тот[186].

*Вариант:* Кейәүең ҡыуалаһа – ишек бауы тот,
Улың ҡыуалаһа – түргә менеп ултыр.

Кейәүең орошһа – ишек ҡа́ра,
Улың ҡыуһа – түргә таба.

Кейәүең тауышы сыҡһа – ишек бауын тот,
Улың тауышы сыҡһа – түргә сыҡ.

Улың менән ирешһәң,
Түрендә ултырып иреш,
Кейәүең менән ирешһәң,
Ишек тотҡаһын тотоп иреш.

* Кем менән баш ҡушһаң,
Шуның менән ғүмер итерһең.

* Кем тапҡан, шул баҡһын.

* Кесе ҡатын – кеше ҡатыны.

* Кеҫәгә кергән – бисәнеке.

* Кеше балаһы – кешән дә тышау,
Үҙ балаң – үҙәк тә бауыр.

* Кеше балаһы кешәнләһәң дә тормаҫ,
Үҙ балаң үҙәгенә типһәң дә китмәҫ.

* Кеше бәхете кешегә им булмай, кеше ире ир булмай.

* Кеше эте талағансы, үҙ көсөгөң талаһын.

* Кешегә атыңды бир, ҡатыныңды бирмә.

* Кешене белгең килһә, ҡылығына ҡара,
Баланы белгең килһә, уйынына ҡара.

* Кешнәгән айғырҙың өйөрөн күр,
Маҡтанған ирҙең өйөн күр.

* Килен алғансы – үҙ улың,
Килен алғас – кеше улы.

* Килен алһаң үҙеңдән юғарынан ал,
Ҡыҙ бирһәң, үҙеңдән түбәнгә бир.

* Килен булһаң – ҡәйнәгә ярамаҫһың,
Ҡәйнә булһаң – киленгә ярамаҫһың.

* Килен кеше ким кеше, алабай менән тиң кеше.

* Килен кеше – ким кеше, көнләксегә* тиң кеше,
Ҡәйнә кеше – уллы кеше, губернаторға тиң кеше.

* Килен кеше – сит бауыр.

* Килен – килендәшкә көндәш.

* Килен – киленсәк, ҡыҙ – ҡырҡынсаҡ[187].

* Килен килер, килен менән киле һабындай теле килер.

* Килен көнө – эт көнө.

* Килен ҡаҡка төшмәҫ[188].

* Килен ҡәйнә тупрағынан.

* Килен ҡәйнә тупһаһынан, кейәү ҡайны тупһаһынан яралыр.

*Вариант:* Килен ҡәйнә усағынан ярала.

* Килен ҡәйнә тупрағынан яралыр.

* Килен ҡәйнә эҙснән китер.

* Килен ҡәйнәгә оҡшар.

* Килен малы – нағыш, башы – һағыш.

* Килен саҡтың рәхәте – ҡыҙ саҡтың михнәте.

* Килен таянып төшкән мал килендеке була[189].

* Килен төшкәндә ҡаҡка төшмәҫ.

* Килен төшһә, төклө аяғы менән* төшһөн.

* Килен үпкәләп – таш алыр,
Кейәү үпкәләп – аш алыр.

* Киленгә ҡарағансы курегә ҡара.

* Киленде йылһыҙ маҡтама.

* Килендең аяғынан, ҡуйсының таяғынан.

* Килендәш – көндәш.

* Килененң сибек булһа – бирҙе Хоҙай,
Килененң убыр булһа – орҙо Хоҙай.

* Кире китерҙең килене уғрылыҡ итер.

* Китек һалма – килендеке.

* Китер ҡыҙҙың эше күп.

* Киткән килен килбәтле.

* Киткән ҡыҙ ипле була.
* Киткән ҡыҙ – киҫкән икмәк.
* Күҙгә төн кейәүгә ҡыҫҡа.
* Көйгән икмәк – килендеке.
* Көйһөҙ кейәүҙең көйө табылмаҫ.
* Көйһөҙ кейәүгә ай ҙа ярамай, көн дә ярамай.
* Көлгә күмелһәң дә, бергә көнөң күр.
* Көлгәндә бите соҡорланған бала ата-инәһенә һөйкөмлө булыр.
* Көлдөргән дә бала, бөлдөргән дә бала.
* Көндәшле өйҙә көн дә көйөнөс.
* Көндәшлегә төн оҙон, көнлөксөгә көн оҙон.
* Көндәштең көлө лә көндәш[190].
* Көндәшленең төнө лә уртаҡ.
* Көнөң бер булһа ла, юрға менеп үт.
* Көтөүсе бисәһе кис биҙәнер.
* Көткәнгә көн оҙон,
Көндәшлегә төн оҙон.
* Көтә белһәң – бала,
Көтә белмәһәң – бәлә.
* Күлдең йәме ҡама менән,
Өйҙөң йәме бала менән.
* Күп әрләмә – әрһеҙ итерһең,
Бикләмә – уғыры итерһең.
* Күршем менән ыҙғышһам, өйгә керермен,
Өйөм менән ыҙғышһам, ҡайҙа керермен?
* Кәҙә мал түгел, бажа туған түгел.
* Кәҙә менән кәҙә дуҫ, бажа менән бажа дуҫ.
* Кәкүктең балаһы күрше ояһында.
* Кәмәһенә күрә ишкәге,
Гөбөһөнә күрә бешкәге.
* Ҡаҙанға теймә – ҡараһы йоғор,
Балаға теймә – бәләһе йоғор.
* Ҡаҙанына күрә усағы, биленә күрә ҡушағы*.
* Ҡаҙа килһә, килендән күрерҙәр.

* Ҡайғыһы булмаған ҡәйнәһе өсөн ҡайғырған.

* Ҡайнаға ҡайҡайып тормаҫ,
Килен кирелеп тормаҫ.

* Ҡайнаға – ҡарт ир,
Янаға* – ярты ир.

* Ҡайта сапҡан буҙ яман,
Ҡайтып килгән ҡыҙ яман.

* Ҡайта сапҡан яу яман,
Ҡайта сыҡҡан һыу яман,
Ҡайта килгән ҡыҙ яман.

* Ҡайын йәме – туҙ менән,
Өйҙөң йәме – ҡыҙ менән.

* Ҡамсыға ат сыҙамаҫ, тамсыға таш сыҙамаҫ[191].

* Ҡамыш һыуҙан туймаҫ, ҡатындар ирҙән туймаҫ.

* Ҡандаланан бет тыуа, беттән эт тыуа.

* Ҡанлы көндә ҡәрендәш яҡшы,
Ашап-эскәндә дуҫ яҡшы.

* Ҡаныҡҡан ҡатын ҡырлыҡты* ярма итә.

* Ҡапҡа төшһә – ҡатындыҡы.

* Ҡапҡан һайын ҡалъя булмаҫ, бисәң сама белмәһә.

* Ҡарағайҙа ҡысҡырһа, ҡарсыға өнө билгеле,
Ҡара көндө ҡысҡырһа, ҡәрендәш өнө билгеле.

* Ҡарға ла балаһына «аппағым» тиер,
Терпе лә балаһына «йомшағым» тиер.

* Ҡарға ҡарҡылдап, уйнашсы ҡатын илап ышандырыр.

* Ҡарға үҫтермә – күҙеңде соҡор.

* Ҡарғанан ҡарсыға тыумаҫ,
Ҡарсыға ҡарға булмаҫ.

* Ҡарғанан ҡарға тыуа.

* Ҡарғанан һандуғас тыумаҫ.

* Ҡабыҡ арба күп шығырҙай,
Ҡарт ҡәйнә күп мығырҙай.

* Ҡарт бар өйҙә ҡот бар,
Ҡарсыҡ бар ерҙә орсоҡ бар.

* Ҡарт кейәү ҡушаға булмаҫ.

* Ҡарты барҙың ырыҫы бар.

* Ҡарсыҡ менән мондаш булма,
Ҡатын менән серҙәш булма.

* Ҡарында ятҡан баланың хан булаһын кем белер?
Биләүҙә ятҡан баланың бей булаһын кем белер?

* Ҡаты тунды туным тимә,
Кеше улын улым тимә.

* Ҡатымшанан* ҡатын артыҡ.

* Ҡатын алһаң, белеп ал,
Алдын-артын ҡарап ал.

* Ҡатын алһаң – утын ал,
Утын алһаң – ҡороһон ал.

* Ҡатын аңлы булһа – ҡаҙна,
Аңһыҙ булһа – ҡаза.

* Ҡатын ауырыһа, йорттоң ҡото китә.

* Ҡатын булһаң, даим бул[192].

* Ҡатын беләге ир һыйлар,
Ир беләге ил һыйлар.

* Ҡатын ғәйрәтле булһа, ир ғибрәтле була.

* Ҡатын ир тупрағынан,
Ир мал тупрағынан яратылған.

* Ҡатын, кеше ҡыҙы булһа ла, туғандан яҡын.

* Ҡатын кеше ҡамыр менән ҡартая, бала менән һарғая.

* Ҡатын күп булһа, сүместе эт ялар.

* Ҡатын ҡанаты – ир,
Ир ҡанаты – ер.

* Ҡатын ҡарар иргә,
Ир ҡарар ергә.

* Ҡатын-ҡыҙ күп булған йортта һыу булмаç.

* Ҡатын-ҡыҙҙың ҡартаһы ҡырҡ[193].

* Ҡатын-ҡыҙ ҡырҡҡа етһә, ҡотора, ти.

* Ҡатын-ҡыҙҙың эше тауыҡ сүпләп бөткөһөҙ.

* Ҡатын ҡәрендәше ҡаҙан янында,
Ир ҡәрендәше ишек төбөндә.

* Ҡатын менән ир – икеһе бер.

* Ҡатын өйҙә, ир тышта булыр.

* Ҡатын өçтөнә ҡатын – ут өçтөнә утын.

* Ҡатын сырағы ҡырҡ, бер янмаһа, бер яныр[194].

* Ҡатын теләһә,
Ишәктән ир яһар,
Ирҙән ишәк яһар.

* Ҡатын тота белмәгән көң* иткән,
Ебәк тота белмәгән йөн иткән.

* Ҡатын үлеү – балта һабы һыныу.

* Ҡатын үлһә – юлдан табыла,
Бала үлһә – билдән табыла.

* Ҡатын һынағың килһә – өйҙәш ин,
Ир һынағың килһә – юлға сыҡ.

* Ҡатын яҡшы булһа – ҡатын,
Яман булһа – зәҡҡум*.

* Ҡатын яман булһа – ҡунаҡ китер,
Улың яман булһа – дәүләт китер.

* Ҡатындарҙың теле уҙһа,
Ирҙәрҙең ҡулы уҙа.

* Ҡатынды йөҙөк ҡашы иткән дә, мунса ташы иткән дә ир.

* Ҡатынды яҡшы күрһәткән – алдындағы балаһы,
Һыйырҙы яҡшы күрһәткән – артындағы танаһы.

* Ҡатындың ире үлһә, башы ҡаңғырыр,
Ирҙең ҡатыны үлһә, түшәге яңырыр.

* Ҡатындың теле оҙон, ирҙең ҡулы оҙон.

* Ҡатындың һараны, ирҙең йомарты яҡшы.

* Ҡатындың юлы – ишек менән мейес араһы.

* Ҡатынмын тигән ҡатында ат башындай алтын ята.

* Ҡатынмын тигән ҡатындың эсендә бишекле-биштәрле бала ятыр.

* Ҡатынһыҙ ир – йүгәнһеҙ ат.

* Ҡатыны аңҡау* булһа, ире ялҡау булыр.

* Ҡатыны йүнһеҙҙең ире күҙһеҙ.

* Ҡатыны сибәрҙең дуҫы күп булыр.

* Ҡатыны үлгән – ҡыҙлы йортҡа ҡарап илаған.

*Вариант:* Ҡатыны үлгән ҡыҙлы ауылға ҡарап илай.

* Ҡатыны эшлекһеҙҙең ҡулынан энә китмәҫ.

* Ҡатыны юҡ өй – етем.

* Ҡатыны юҡтың яҡыны юҡ.

* Ҡатыны яҡшы кешегә бәхет кәрәкмәй,
Ҡатыны яман кешегә ләхет кәрәкмәй.

* Ҡатыны яман ир аҙыр.

* Ҡатынынан айырылғандың ҡанаты ҡайырылған.

* Ҡатынынан оялған кешенең балаһы булмай.

* Ҡатының – ғүмерлек юлдашың.

* Ҡатының йыбытҡы булһа, энә-ебеңде үҙең тоторһоң.

* Ҡатының тинтәк булһа, ҡамсың йыуан булһын.

* Ҡатының үлһә – өйөң китер,
Башыңдан көйөң китер.

* Ҡатының һәпрә* булһа,
Өҫтөң шәпрә булыр.

* Ҡатының яҡшы булһа, арғымаҡ менерһең,
Ҡатының яман булһа, һарғайып киберһең.

* Ҡатының яҡшы булһа, ожмах кәрәкмәй.

* Ҡатының яман булһа – ғазраилең шул.

* Ҡатыныңа хужа бул.

* Ҡатыныңа яһалдырыҡ һал,
Атыңа һағалдырыҡ һал.

* Ҡатыныңды башта уҡ йүгәнлә.

* Ҡатыныңды бик маҡтаһаң, никахың боҙоҡ булыр[195].

* Ҡатыныңды ҡапыл бөкмә, ауырлығың арҡаңа йөкмә.

* Ҡатыныңды хөрмәтлә, теҙгенен ҡулға көрмәклә.

* Ҡашығаяҡ шылтыраған һайын ҡатын айырмайҙар.

* Ҡоҙа менән ҡоҙаса уйнаһа, һыйыр уңа[196].

* Ҡоҙаға ҡуян һурпаһы,
Ҡоҙаһының ҡоҙаһына – һурпаһының һурпаһы.

* Ҡоҙаның ҡоҙаһы – ҡонан ҡуйҙың һурпаһы.

*Вариант:* Ҡоҙаның ҡоҙаһы – ҡуян һурпаһының һурпаһы.

* Ҡоҙа-ҡоҙағый аш ашар, арала йөрөгән ни ашар?

* Ҡоҙағый килде – ҡот килде.

* Ҡоҙаса – күңел аса.

* Ҡоҙасаң биргәнде ҡуйыныңа ал,

Ҡоҙасаң әйткәнде күңеленә һал.

* Ҡойроғоң баш булһа, башың таш була.

* Ҡолаҡтан танау яҡын,
Туғандан ҡатын яҡын.

* Ҡолан башына эш төшһә, ҡолонона ҡарамаҫ.

* Ҡолоҡ* бейәнең ҡолоно елгә ҡаршы түҙмәй.

* Ҡолондоң яҡшыһы атҡа эйәрер,
Яманы тайға эйәрер.

* Ҡолонло бейәнән ҡойо һыуы ла артмай.

* Ҡомһоҙ ер булмаҫ, ғәйепһеҙ ир булмаҫ.

* Ҡороған ағастан алма көтмә.

* Ҡорсаңғы бейәнән дә юрға тыуыр.

* Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа, балаһы шунда һарыр.

* Ҡот килгән өйҙән йот китә.

* Ҡошона күрә ояһы.

* Ҡоштоң ҡошо бала өсөн ҡапҡанға эләгә.

* Ҡояш янында – йылылыҡ,
Инә янында – изгелек.

* Ҡуйҙың тояғынан, килендең аяғынан һына.

* Ҡулыңда бар – ҡоҙағый,
Ҡулыңда юҡ – ҡомағый.

* Ҡумыҙҙағы ҡыл моңло,
Етем үҫкән ҡыҙ моңло.

* Ҡурҡаҡ килен ҡуй башынан да ҡурҡҡан.

* Ҡуш ҡаҙыҡ кәртәне тота.

* Ҡуш ҡаҙыҡһыҙ кәртә булмай.

* Ҡуштан иргә яраһа ла, илгә ярамай.

* Ҡуштан ҡатын иренә яраған.

* Ҡуштан ҡатын ире сыҡһа – кейенер,
Ире ҡайтһа – көйөнөр.

* Ҡуштан ҡатын матур була.

* Ҡуштанға ышанма:
Теленең осо һөт була,
Теленең төбө ҡорт була.

* Ҡыҙ артынан эйәргәнсе, ҡыҙыл эт артынан эйәр[197].

* Ҡыҙ бала – ҡаңғыла яткан уҡ.

* Ҡыҙ бала – ҡунаҡ ҡына.

* Ҡыҙ бала миһырбанлы булыр.

* Ҡыҙ бала – өй зиннәте.

* Ҡыҙ бала – үҙе баҙыҡ,
  Ир бала – алтын ҡаҙыҡ.

* Ҡыҙ баланың аты – эйәрле, башы – бәйле.

* Ҡыҙ баланың нәфәкәте* дихаяттар* ҡулында.

* Ҡыҙ баланың сибәр булыуы яҡшы.

* Ҡыҙ булһа, ҡыҙ булһын, йондоҙға тиң булһын.

* Ҡыҙ дәғүәһенә кергәнсе, ҡыҙыл эт дәғүәһенә кер.

* Ҡыҙ кеше – күрше тауығы.

* Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә,
  Ул уллы булмаҫ, ата ҡәҙерен белмәһә.

* Ҡыҙ ҡыҙыл алтындан ҡиммәт.

* Ҡыҙ ҡылығы менән, ир эше менән һөйҙөрөр.

* Ҡыҙ ҡылығы менән һөйкөмлө,
  Ул әҙәбе менән һөйкөмлө.

* Ҡыҙ ҡыйпаңнауын ҡуймаҫ.

* Ҡыҙ өлөшө – нағыш,
  Килен өлөшө – һағыш.

* Ҡыҙ сағында ҡыҙыл ут,
  Ҡатын булғас, ҡәҙере юҡ.

* Ҡыҙ саҡ – солтан саҡ,
  Килен саҡ – олтан саҡ.

* Ҡыҙ сәнскәге – беҙ сәнскәге[198].

* Ҡыҙ тапһаң – ҡыҫылып ят,
  Ул тапһаң – иркенләп ят.

* Ҡыҙ үҫһә – өйгә ҡытлыҡ[199],
  Ул үҫһә – өйгә ҡотлоҡ.

* Ҡыҙ һаҡлағансы, тоҙ һаҡла.

* Ҡыҙ әсәһе – ут әсәһе.

* Ҡыҙға ҡырҡ өйҙән тыйыу[200].

* Ҡыҙҙар – ҡыҙыл суҡ.

* Ҡыҙҙар – ҡыйғыр тамаҡ.

*Вариант:* Ҡыҙҙың тамағы ҡылдай.

* Ҡыҙҙар ҡыл өҫтөндә,
Ҡылдан төшкәс, тел өҫтөндә.

* Ҡыҙҙарға ҡанат, малайҙарға аяҡ бирһен[201].

* Ҡыҙҙы өйрәтеү – изге эш,
Улды өйрәтеү – иң ҙур эш.

* Ҡыҙҙы әсәһе һаҡлаһын, улды – атаһы.

* Ҡыҙҙың күңеле ҡыл кеүек, көйләмәһәң – тиҙ китер.

* Ҡыҙҙың ҡылығы ҡырҡ булыр.

* Ҡыҙлы йорт – ҡыҙыҡлы йорт.

* Ҡыҙлы йорт – нурлы йорт.

* Ҡыҙлы йорт – фәрештәле йорт.

* Ҡыҙлы кеше – наҙлы кеше[202],
Уллы кеше – юллы кеше.

*Вариант:* ...Уллы кеше – синны* кеше.

* Ҡыҙлы кешенең ҡапҡаһына ҡырҡ ат бәйләнер.

* Ҡыҙлы өйҙөң эте ятмай[203].

* Ҡыҙлы өйҙә ҡәҙер бар.

* Ҡыҙлы ҡыҙҙан көлмәһен.

* Ҡыҙлы өйгә ҡырҡ өйҙән рәхмәт яуыр[204].

* Ҡыҙы барҙың наҙы бар.

* Ҡыҙы барҙың улы бар.

* Ҡыҙы булған тиҙ ҡартайыр[205].

* Ҡыҙым ҡыҙлы булмай белмәҫ,
Улым уллы булмай белмәҫ[206].

*Вариант:* Ҡыҙ ҡәҙерен ҡыҙлы булғас белерһең,
Ул ҡәҙерен уллы булғас белерһең.

* Ҡыҙың буйға етһә, ҡыҙы яҡшы менән күрше бул.

* Ҡыҙыңдың төҫөн маҡтама, эшен маҡта.

* Ҡыҙыл төлкө – ер күрке,
Матур егет – ил күрке,
Матур ҡыҙҙар – өй күрке.

* Ҡыйыҡ булһа ла – өй булһын,
Ҡарт булһа ла ир булһын.

* Ҡымыҙға бешкәк, ҡыҙға – тыйнаҡ.
* Ҡырҡ өйҙә ҡоҙа булһа, ҡырғын килмәҫ.
* Ҡырҡ улың булғансы, ҡыптыр ирең булһын[207].
* Ҡыҫыр ҡатындан ҡыткылдаған тауыҡ артыҡ.
* Ҡәҙерен белмәҫ ҡәрендәштән ҡәҙер белгән ят яҡшы.

*Вариант:* Ҡәҙер белмәҫ ҡәрендәштән ҡәҙер белгән эт артыҡ.
* Ҡәҙерһеҙ бала күп йәшәр.
* Ҡәйнеш – ярты ир, ир юғында бөтөн ир.
* Ҡәйнәһе битен аҫһа, килене... [билен] аса.
* Ҡәйнәһенә күрә килене.
* Ҡәйнәһенән оялған килен бала тапмаҫ.
* Ҡәрҙәшһеҙгә кеүәт юҡ, уланһыҙға дәүләт юҡ.
* Ҡәрендәшең үлһә лә, ҡәҙерләүсең үлмәһен.
* Ҡәрендәштең байы яҡшы,
  Ҡатындың һауы яҡшы.
* Майыңды ҡыштан сығарма,
  Ҡатыныңды бәҫтән сығарма.
* Маҡталған килен туйҙа хур була.
* Мал – бауыр ите,
  Бала – йөрәк ите.
* Мал булһа, балаларға мал ҡала,
  Булмаһа – бурыс ҡала.
* Мал менән бала – донъя зиннәте.
* Мал менән бала – үҫкән һайын мәшәҡәт тә бәлә.
* Мал тапмаҫ ир булмаҫ, бала тапмаҫ ҡатын булмаҫ.
* Малайы атҡа менһә, инәһе артын ҡыҫа.
* Маллы бай түгел, уллы бай.
* Матур ҡатын – ир күрке.
* Мир бөтмәһә, ир бөтмәҫ.
* Мөгөҙөн һындырғанды бolaн онотмаҫ,
  Атаһын хурлағанды уғлан онотмаҫ.
* Мығырҙыҡ иргә – шығырҙыҡ ҡатын.
* Мәңге һүнмәҫ ут булмаҫ[208].
* Мәмәйле уғлан һөймәгә яҡшы.

* Нағасы менән көрәшкән ейән йығылыр.
* Нағасы ямандың ейәне яман.
* Нағышлы ҡыҙ – һағышлы ҡыҙ (кейәү йортона китәһе).
* Ни етте ҡатын-ҡыҙҙы ҡатындың янына эйәләштермә.
* – Нәмәргә* нимәһен бирә?
  – Үтен ашап, һөйәген бирә.
* Ни һалһаң ашыңа, шул сығыр ҡашығыңа.
* Нужа бесән ашата, дошман бисәң ташлата.
* Нужа күргең килһә, юлға сығып ҡун.
* Ныҡлы ғаилә – ил терәге.
* Нәҫел – нәҫелгә, тилсә – тамырға.
* Нәҫеле ниндәй – балаһы шундай.
* Нәҫелен белмәгән нәсәпһеҙ булыр.
* Нәҫелленең һүҙе өҫкә сығыр.
* Оҙон тамырлы ағас оҙаҡ йәшәй.
* Оло ағa – икенсе ата.
* Оло килен ҡатаһы кесе киленгә ярамай.[209]
* Орлоғона күрә емеше.
* Орошҡаҡ булһа – улың яу,
  Ҡарышҡаҡ булһа – ҡыҙың яу.

  *Вариант:* ...ҡарышҡаҡ булһа киленең яу.
* Ояты юҡ ул яман, ҡылығы юҡ ҡыҙ яман.
* Ояһында ни – осҡанында шул.

  *Вариант:* Ояһында ни күрһә, осҡанда шуны ҡабатлай.
  Ҡаҙандан һалған сығыр.
* Өй ҡорған уңыр, өйһөҙ кеше туңыр.
* Өй үҙемдеке – һүҙ үҙемдеке.
* Өй эсендә бер дошманың булыуҙан,
  Тышта мең дошманың булыу артыҡ.
* Өй эсендә ҡабағыңдан ҡар яуҙырма*, асыуыңа юл ҡуйып,
  Йылы өйөңдө туҙҙырма, юҡ талашҡа юл ҡуйып.
* Өй эсендә һауыт-һаба шалтырамай тормаҫ.
* Өй эсенән яу сыҡһа, тороп ҡасҡан ҡотолмаҫ.
* Өйгә һыймаған илгә һыймаҫ.

* Өйҙө юҡ иткән – ҡатын.
* Өйҙөң йәме бала менән,
  Күлдең йәме ҡама менән.
* Өйҙөң йәме – ҡатын-ҡыҙ.
* Өйҙә ике ҡатын булһа, иҙән һеперелмәç.
* Өйҙәге һарыу – күңелгә ҡатыу.
* Өйҙәш аç(ы)раһаң – һүҙ сығыр,
  Тауыҡ аç(ы)раһаң – сүп сығыр.
* Өйҙәш булғансы, көндәш бул.
* Өйҙәш көндәштән яман.
* Өйҙәш өс көн торһа, өй минеке, тиер.
* Өйҙәш менән торғансы, көндәш менән тор.
* Өйҙәш тә бер, көндәш тә бер: ҡысҡырыш та талаш.
* Өйлө көлөр, өйһөҙ бөлөр.
* Өйө барҙың өйөрөнән билгеле.
* Өйө барҙың көйө бар.

  *Вариант:* Өйөң яман булһа, көйөң яман.
* Өйө булғас, сөйө лә булыр.
* Өйө юҡтың түшәге юҡ.
* Өйөндә ни булмаһа, бала шуны һорай.
* Өйөңдә тыныслыҡ булмаһа, урам тыныслығынан ни файҙа?
* Өйһөҙ ир – ирһеҙ ҡатын.
* Өйөрө башҡаны нуҡта ҡуша[210].
* Өйөрөм тимәç ат булмаç.
* Өйрәк бәпкәһе тауыҡ аçтында сыҡһа ла, һыуға тартыр.
* Өйрәк йомортҡаһын тауыҡ баçыр,
  Бәпкәһе һыуға ҡасыр.
* Өйрәк китһә – ҡаҙ ҡалыр,
  Ҡатын китһә – ҡыҙ ҡалыр.
* Өйәңке ботағында алма үçмәй.
* Өкөнөң балаһы ла өкө.
* Өлтөрәк ир олтораҡ булыр.
* Өс бажаны бүре ашамай.

* Өс нәмә кешене ҡартайтыр:
  Йөрөмһөҙ ат, үтмәҫ бысаҡ, яман ҡатын.

* Өс таған таймаҫ[211].

* Пар ҡанат талмай.

* Сабый менән сабый булма.

* Серләшергә үҙ яҡшы,
  Һөйләшергә ят яҡшы.

* Сирле булһаң – ирең һөймәҫ,
  Ярлы булһаң – туғаның һөймәҫ.

* Сит кешенең һөйөүе – үҙ инәңдең йоҙроҡ төйөүе.

* Ситтә ҡыйналған өйөнә ҡайтыр,
  Өйөндә ҡыйналған ҡайҙа ҡайтыр?

* Сусҡаның балаһы атаһынан күреп, мырҡылдарға өйрәнә.

* Сүлмәккә ни һалһаң, сүмескә шул сыға.

* Сыбыҡ саҡта бөгөлмәгән, таяҡ булғас бөгөлмәҫ.

* Сыбыҡты сей сағында бөгәләр.

* Сығынсы ат тәртә һындыра,
  Уңмаған ҡатын ҡашығаяҡ һындыра.

* Сәскәле гөл ҡәҙерле була[212].

* Сәскәһе ҡойолғас, емеше булыр[213].

* Сәскәһен ятраһаң, сәнскеһенә түҙ.

* Табаһына күрә табағасы.

* Таба белһәң, баға бел.

* Табыуынан бағыуы ҡыйын.

* Таҙа ҡатын тараҡан тотмаҫ.

* Тай ат булғансы, эйәһе эт була.

* Тай тулап, ат булмаҫ.

* Тай менән уйнаған ҡолондоң биле тайыр.

* Тай типһә, аттан яман[214].

* Тайына атланһаң, бейәһе билемләр.

* Тамғаң ай булһын, нәҫелең бай булһын.

* Тамыр тамырға тарта, нәҫел нәҫелгә тарта.

* Тамыры йыраҡ ағастың ғүмере оҙаҡ[215].

* Тамыры ныҡ ағасты ел дә ҡуптара алмаҫ.

* Татлынан татлы – бала татлы.

* Татыу булһа ҡатының, ары торһон алтының.

* Татыу йорт – ожмах түре.

* Татыу өйгә уйнаш кермәй.

* Тау артынан һыу сыҡһа, ул да тартыр диңгеҙгә,
  Ямандан яҡшы тыуһа, ул да тартыр нигеҙгә.

* Тау ташы менән, ағас тамыры менән ныҡлы.

* Тауға ҡарап тау булма, ағай-энеңә яу булма.

* Тауҙа тыуған ҡоландың ике күҙе ташта булыр,
  Аслыҡта тыуған баланың ике күҙе ашта булыр.

* Тауыҡ керһә – сүп сығыр,
  Килен керһә – һүҙ сығыр.

* Тауыҡ ояһы хәтле булһа ла, үҙ өйөң булһын.

* Тауышлы йорттан тау артына ҡас.

* Таш төшкән ерендә мүкләнһен[216].

* Теләп алған бала йүнһеҙ була[217].

* Теләнсе ишекте теләр,
  Улан бишекте теләр.

* Телһеҙҙең телен әсәһе белер.

* Тешле-ауыҙлы бала илаһа, яҡшыға булмай.

* Тешле-ауыҙлы убыр – өйөндәге убыр.

* Тикмә кеше үҙ булмаҫ,
  Ят яуыҡ* булмаҫ.

* Тимерсе бысаҡҡа, ҡатындар ҡосаҡҡа туймаҫ.

* Тирә-яғың яу булһа ла, өйөң эсе һау булһын.

* Тишек ҡайҙа – ел шунда,
  Етем ҡайҙа – һүҙ шунда.

* Толпарҙың үҙ тояғы үҙенә еңел.

* Торлаҡһыҙ үҫкән ҡолан миҙгелһеҙ юшап, миҙгелһеҙ утлар[218].

* Тормоштоң ҡәҙерен белеп торһаң, ҡәҙер күрерһең.

* Торонһоҙ* кеше – тамырһыҙ ағас.

* Төлкө үҙ ҡойроғон хурламаç.

* Төпсөк бала иркә була.

* Төп йорт – төпсөктөкө.

* Төç бирмәгән атты аçрама.

* Төçө барҙан төңөлмә, уңмаһа ла хур булмаç.

* Туған туғандың маллыһын ярата.

* Туған тыуымасаһына ярамаç.

* Туғандарың – ҡулың менән аяғың,
Дуçтарың – таяныр таяғың.

* Туғандарҙың татыулығы байлыҡтан артыҡ.

* Туғанды йән тартмаһа ла ҡан тарта.

* Туғандыҡы – тубалда[219].

* Туғанлыҡтың төбө бер.

* Туғаныңдан биҙмә – нәçелең ҡорор.

* Туғаныңа һүҙ үтә.

* Туҡал ҡатын төлкө булыр,
Уны алған көлкө булыр.

* Тулҡын тулап, ярҙан сыҡмаç.

* Тупһаһы алтын булһа ла, етем – етем булыр.

* Тура телен тыя алмаған туғанына һыя алмаған.

* Түңәрәк күлдә балыҡ күп[220].

* Түшкә айылдың батҡанын эйәһе белмәç, ат белер,
Ир-егеттең ҡәҙерен ағай-эне белмәç, ят белер.

* Тыйнаҡһыҙ йортта йән тынмаç.

* Тыйнаҡһыҙ өйҙә йәм тормаç.

* Тыйнаҡһыҙ үçкән ҡыҙҙа бәрәкәт юҡ.

* Тыуған йән үçә.

* Тыуҙырған әсә түгел, үçтергән – әсә.

* Тыуыуына һөйөнмә, тороуына һөйөн.

*Вариант:* Тыуыуын әйтмә, тороуын әйт.

* Тыштағы буранға сыҙап була,
Өйҙәге буранға сыҙап булмай.

* Тыя барһаң – тыйнаҡлы булыр,
Һөйә барһаң – һөйөкһөҙ булыр.

* Тән айырылһа ла, йән айырылмаҫ.

* Тартә кыҫка тип, аттың башын киҫмәйҙәр.

* Тәүге балаға һуңынан тыуған туғыҙ баланың күҙере әләгә.

* Тәүге ир – ир йолаһы,
Икенсеһе – йөҙ караһы.

* Тәүге катын – мал аҫрарға,
Һуңғы катын – йән аҫрарға.

* Тәүгеһенән калма, һуңғыһына барма.

* Ук тейһә – болаға,
Һүҙ тейһә – ағаға.

* Улан бар ерҙә ур ятмаҫ.

* Ул бар ерҙә уңыш бар,
Кыҙ бар ерҙә кулыш* бар.

* Ул әсәһе – губернатор,
Кыҙ әсәһе өндәшмәй ятыр.

*Вариант:* Ул үҫтергән – губернатор,
Кыҙ үҫтергән боҫоп ятыр.

* Ул тапкан – уңған катын,
Кыҙ тапкан – наҙлы катын.

* Ул тыуғанға көн тыуған.

* Ул тыуҙы – илгә тыу* тыуҙы[221].

* Ул тыуһа – тыу бәйлә,
Кыҙ тыуһа – бау бәйлә.

* Ул – һөйөнөс, кыҙ – кыуаныс.

* Уллы ла илар, улһыҙ ҙа илар.

* Уллы кеше – урта бай,
Кыҙлы кеше – кыҙыл бай.

* Уллы ла курка, кыҙлы ла курка.

* Улһыҙҙың мәшәкәте бер булыр,
Уллының мәшәкәте ун булыр.

* Улы атка менеп сапһа, әсәһе ботон кыҫыр.

* Улыңа башынан һыйпап кәңәш бир,
Килененә йыл һөйләп күстәнәс бир.

* Улы бар улдан көлмәһен,
Кыҙы бар кыҙҙан көлмәһен.

* Улы барҙың – ҡулы бар,
Ҡыҙы барҙың – наҙы бар.

* Улы барҙың урыны бар,
Ҡыҙы барҙың ҡәҙере бар.

* Улы барҙың уйы бар.

* Улы юҡтың ҡулы юҡ.

* Улы урманға барһа, атаһы урамға һыймай[222].

* Улына ҡараған – урамға ҡараған,
Киленгә ҡараған кирегә ҡараған.

* Улың асыуланһа – түргә мен дә сәй эс,
Кейәүең асыуланһа – ишек тотҡаһын тот.

* Улың булһа, олоҡло* менән күрше бул,
Ҡыҙың булһа, ҡылыҡлы менән күрше бул.

*Вариант:* Улың етһә, ҡыҙы яҡшы менән ауылдаш бул,
Ҡыҙың етһә, улы яҡшы менән ауылдаш бул.

* Улың булһа, ул булһын –
Буйы-һыны мул булһын.

* Улың булһа – ут булһын,
Ут булмаһа – юҡ булһын.

* Улың кемде һөйһә, киленең шул булыр,
Ҡыҙың кемде һөйһә, кейәүең шул булыр.

* Улың менән маҡтанма,
Улыңдың эше менән маҡтан.

* Улың тинтәк булһа, киленең килтәк булыр.

* Ун алтыла ҡыҙ – солтан,
Ун етелә – сулпан,
Егермелә – гөлбостан,
Егерме берҙә – суртан.

* Унда уҡ юнмаған – утыҙҙа ҡылыс та ҡоймай.

* Уңған бисә – аҡ бәхет,
Уңмаған бисә – ҡаҡ бәхет.

* Уңған килен һалмаһынан билгеле.

* Уңған ҡатын – ир күрке,
Матур ҡатын – ил күрке.

* Уңған ҡатын ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатыр.

* Уңған өйҙөң балаһы бер-береһенә «батыр» ти(е)р,
Уңмаған өйҙөң балаһы бер-береһенә «кафыр» ти(е)р.

* Унмаған ат тәртә һындыра,
Унмаған ҡатын ирен туҙҙыра.

*Вариант:* Унмаған ат тәртә һындыра,
Унмаған ҡатын йорт-ер туҙҙыра.

* Унмаған ҡатын һүҙ йөрөтөргә унған булыр.

* Унмаған ҡатындың балаһы тыңлауһыҙ булыр.

* Унмағанды ҡыума (айырылыш).

* Унмағандың уты янмаҫ.

* Ураҙлының* балаһы ун бишендә башмын, ти(е)р.

* Ураҡ урмаҡ – уйнамаҡ,
Бала баҡмаҡ – йән сыҡмаҡ.

* Урманда атың үлмәһен,
Ҡартайғанда ҡартың үлмәһен.

* Урта тиле атын маҡтар,
Үтә тиле ҡатынын маҡтар.

* Уҫал ҡатынға тарыма, тарыһаң арыма.

* Ут усаҡта яҡшы, ҡатын ҡосаҡта яҡшы.

* Үгәй бала үпкәсел.

* Үгәй инә бауыр мал – ярҙан ятып ҡул болғай.

* Үгәй инә илгәҙәк – үлеп ятһаң, һыу һалмаҫ.

* Үгәй инәнең яҡшыһы – тамуҡ утының саҡҡыһы.

* Үгәй – үргә һикертә.

* Үгәй әсә ураҙа тоттора, ашатып та ҡоҫтора.

* Үгәй әсә үрҙә ҡайнай, үрҙә ҡайнамаһа, гүрҙә ҡайнай.

* Үгәй әсәйҙең яҡшыһы – үҙ әсәйеңдең яртыһы.

* Үгәйҙең үҙе көйһөн, үҙе көймәһә, үте көйһөн.

* Үҙ ағаһын ағаламаған, кеше ағаһын һағалаған.

* Үҙ балаң – үҙәктә,
Кеше балаһы – кештәктә.

* Үҙ балаң – үҙәк менән бауыр,
Кеше балаһы – кешән менән тышау.

* Үҙ ғәйебеңдең ниҙә икәнен, балаң үҫкәс белерһең.

* Үҙ күлдәгең үҙеңә яҡын.

* Үҙ ҡолонон бейә типмәҫ,
Бейә типһә лә, биртә типмәҫ.

* Үҙ өйөм – үлән түшәгем.

* Үҙ өйөмдә үҙ көйөм.

* Үҙ өлөшөң – үҙ көмөшөң.

* Үҙ туғаның сит түгел, бер ҡаҡһа, биш тарта.

* Үҙ һөйәгең үҙеңә ауыр түгел.

* Үҙ әсәң – бауырһаҡ,
Үгәй әсәң – һарымһаҡ.

* Үҙе барҙың күҙе бар.

* Үҙе яман туғанын яманлар.

* Үҙем үлһәм – ярты ҡайғы,
Ҡатыным үлһә – оло ҡайғы.

* Үҙен маҡтаған – бер ахмаҡ,
Ҡатынын маҡтаған – мең ахмаҡ.

* Үҙенең башын ҙур тотҡан,
Аға-эне башын хур тотҡан –
Туған тапмай яуҙа үлер.

* Үҙең ата булмайса, ата ҡәҙерен белмәҫһең.

* Үҙең ҡарға булһаң, балаң һандуғас булмаҫ.

* Үҙеңде күргән үлһә үлһен, атаңды күргән үлмәһен.

* Үҙеңдеке – үҙ, һуҡыр булһа ла күҙ.

* Үҙеңдеке үҫә лә етә, балаңдыҡы елеккә үтә[223].

* Үҙеңдән тыумаған бала булмаҫ.

* Үкһеҙ бала үҙ киндегеен үҙе киҫә, имеш.

* Үкһеҙгә өгөт биреүсе күп, урын биреүсе юҡ.

* Үҫкән себеш тауыҡ артынан йөрөмәй.

* Үҫәрҙең алдын иркен ҡуй.

* Үтеп киткән ямғырҙы ямылсы алып ҡыуырмы,
Аҫыл ирҙең балаһы аҫылһыҙ булып тыуырмы?

* Үткән эшкә үкенмә, ятҡа ялынма.

* Үткер бысаҡ, һимеҙ ит табын ҡәҙерен килтерер,
Яман ҡатын, ялҡау ат әжәлдән элек үлтерер.

* Халҡы яман хан аҙыр, ҡатыны яман ир аҙыр.

* Халҡы ямандың бейе аҙыр, ҡатыны ямандың өйө аҙыр.

* Халҡын алдаған бей уңмаç, ҡатыны ғәмһеҙ өй уңмаç.
* Холоҡло ҡатын – донъяның йәменә дарыу.
* Холоҡһоҙ ҡатын – ғәрәсәтле көн.
* Хужаһыҙ йортта бәрәкәт юҡ.
* Хәҙерге киленгә ҡәйнә килен.
* Хәҙерге килендең китер ере киң.
* Хәйерһеҙ бала хәйерсе була.
* Хәйерһеҙ ул ата нигеҙен таратыр.
* Хәләл һөт ейгән холоҡло булыр.
* Хәстәрле ҡыҙ таçтарлы.
* Һауаға ҡарап өйөң яҡ,
  Әсәһенә ҡарап, ҡыҙын баҡ.
* Һинеке, минеке – күңел тарлығы,
  Ары ят, бире ят – түшәк тарлығы.
* Һөймәç кеше һыймаç.
* Һөймәç улың йорт тотор,
  Һөймәç килenең һөйәген тотор.
* Һөйөклө бала көйөклө була.
* Һөйәркә – белгәнсе, ҡатын – үлгәнсе.
* Һөйәркәне маҡта, ҡатын менән тор.
* Һөмһөҙ һыйыр үҙ көтөүен танымаç.
* Һөнәрле булып ул үçһен,
  Ҡылыҡлы булып ҡыҙ үçһен.
* Һөт менән кергән – йән менән сыҡҡан.
* Һөтөн имеп туймаған имсәген тешләгән.
* Һуңғы ҡатын – һум алтын.
* Һыйыр тулаһа, аттан яман.
* Һыйыр тулап – ат булмаç,
  Ҡатын тулап – баш булмаç.
* Һыйыр тоҙ ялағанда, быҙауы боҙ ялай.
* Һыйыр ышҡынһа, ситән ауҙарыр[224].
* Һыйырға ҡамыт кейҙермәйҙәр.
* Һыйырҙы ҡыйнап, ат булмаç.
* Һылыу килен туйҙа оялтыр.

* Һыртҡы бисә* – һыртҡы ямау.

* Һыуҙың ҡәҙере шишмә ҡороғас беленер.

* Һәр башҡа – бер үлем,
Яман ҡатын алғанға – ике үлем.

* Һәр кем – ата балаһы.

* Һәр кемдеке үҙенә, айҙай күренер күҙенә.

* Һәр кемдең үҙ аламаһы үҙенә (яҡын).

* Һәр кемдең үҙ эте үҙенә яҡын.

* Һәр кемдең үҙенеке үҙенә ғәзиз.

*Вариант:* Һәр кемдең үҙ балаһы үҙенә аяулы.

* Һәр ҡош үҙ ояһын маҡтай.

* Һәр нәмә үҙ енесенә тарта.

* Һәр һаҡаллы олатайың булмаҫ.

* Шапшаҡ ҡатындың ашын эсмә, һүҙен ишетмә.

* Шәмдең йәме шәмдәл менән.

* Шым ултырған ҡәйенһеңле талашҡан ҡәйнәнән яман.

* Ыҙғыш бар өйҙә тормош булмаҫ,
Талаш бар өйҙә аш булмаҫ.

* Ыҙғышһыҙ өй юҡ, ғазапһыҙ гүр юҡ.

* Ыласын ҡошҡа һауа ҡәҙерле,
Сапҡан атҡа дала ҡәҙерле,
Ата-инәгә бала ҡәҙерле.

* Ынйының эт муйынында ҡәҙере юҡ[225].

* Ырыу-туған ыҙғышы – туй бүләге йыртышы.

* Ырыуы юҡ ир булмаҫ,
Өлгөһө юҡ тун булмаҫ.

* Эйәр арҡаһы уғланға ҡалыр.

* Эне өйө – айыу өңө[226].

* Энеһе яҡшы булһа – ағаһының бәхете,
Балаһы яҡшы булһа – атаһының бәхете.

* Энәһеҙ йөй булмаҫ, инәһеҙ йүн булмаҫ.

* Эт атаһын танымаҫ.

* Эт балаһы – эт.

* Эт менән ҡоҙа булһаң,

Нәжес* менән туй ҡылырһың.

* Эт тә эт балаһын тешләмәҫ.
* Эт ырыуын танымаҫ.
* Этенән күреп, көсөгө өрөр.
* Этҡә эт йәмле, ҡошҡа ҡош йәмле.
* Эттеке – этҡә, ҡоштоҡо ҡошҡа.
* Эт аҙғыны йортта ҡоторор.
* Эттең бажаһы күп, ҡоҙаһы юҡ.
* Эттең балаһы инәһенең эсендә үк өрә.
* Эттең инәһе – бер, атаһы – ҡырҡ.
* Эттән эт тыуа, ҡоштан ҡош тыуа.
* Эш ҡәҙерен ана белер,
  Һөт ҡәҙерен тана белер.
* Эшкә ашмаған ир – башыңа сир.
* Әҙ ҙә етә, күп тә бөтә – бергә булыуға ни етә.
* Әкрен иргә ҡатын баш.
* Әсә хаҡы – Тәңре хаҡы.
* Әсә янында бала стем булмай.
* Әсәй – тыуҙырыусы,
  Атай – туйҙырыусы.
* Әсәйең үгәй булһа, үҙ атайың да ят була.
* Әсәһе ғәҙәтһеҙ – улы әҙәпһеҙ.
* Әсәһе тирәккә менһә, ҡыҙы ботаҡҡа менә.
* Әсәһе аҙғын булһа, ҡыҙы йөрөшлө була.
* Әсәһеҙҙе «килен» тимә,
  Атаһыҙҙы «кейәү» тимә.
* Әсәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос,
  Атаһына ҡарап улын ҡос.
* Юҡ менән ҡоҙа булғансы,
  Бар менән барымталы бул.
* Юлға сыҡһаң – атың үлмәһен,
  Өйгә ҡайтһаң – ҡатының үлмәһен.
* Юлдашың яман булһа, йыраҡ йөрөп төн ҡатма,

Ҡатының яман булһа, кеше алдында һүҙ ҡатма.

* Юрғаның тире кипмәç,
Иркәнең йәше кипмәç.

* Ябаға тай – яман тай, яҙға сыҡһа, ат булыр.

* Ябалаҡ ояһынан ябалаҡ осор,
Бөркөт ояһынан бөркөт күтәрелер.

* Яманлығы һиҙелһә, яҡын кеше ят булыр.

* Ябағаны яуға менмә «ялы бар» тип,
Яман менән ҡоҙа булма «малы бар» тип.

* Ябағаны яуға менмә, яманға ҡыҙың бирмә.

* Ябыулы ҡаҙан – ябыуы менән.

* Яҙғы боҙҙо ҡар ашай, ҡыҙҙың башын ҡыҙ ашай.

* Яҡшы аға энеһенең хәтерен ҡалдырмаç.

* Яҡшы ат, яҡшы ҡатын ирҙең данын сығарыр.

* Яҡшы атаның балаһы – яҡшы тундың яғаһы.

* Яҡшы атҡа дилбегә ҡағыу етә (балаңды иплəп өйрәт).

* Яҡшы бала иленә баш булыр,
Яман бала иленә хас булыр.

* Яҡшы бала үҙен-үҙе ҡыуандырыр.

* Яҡшы бала яман атаның ишектәге башын түргә һалыр,
Яман бала яҡшы атаның түрҙәге башын ишеккә һалыр.

* Яҡшы балаға ата малы кәрәкмәй,
Яман балаға мал ҡалдырыу кәрәкмәй.

* Яҡшы бисәнең һалмаһы ла әлбә булып күренә.

* Яҡшы ир атын маҡтар,
Яман ир ҡатынын маҡтар.

* Яҡшы ир – ил күрке,
Яҡшы ҡатын – ир күрке.

* Яҡшы ир менән ҡатын хур булмай.

* Яҡшы килен – килен,
Яман килен – үлем.

* Яҡшы килен күрешеп һөйләшер,
Яман килен ирешеп һөйләшер.

* Яҡшы килен серҙәшеңдәй булыр,
Яҡшы улың ҡорҙашыңдай булыр.

* Яҡшы ҡатын йорондан*, элкеп, ҡуйтыр* сығарыр.

* Яҡшы ҡарсыҡ – өй ҡаҙнаһы.

* Яҡшы ҡатын арыш онон кәбәк итер,
Яман ҡатын бойҙай онон харап итер.

* Яҡшы ҡатын – донъя тотҡаһы.

* Яҡшы ҡатын – йән аҙығы,
Яман ҡатын – баш ҡаҙығы.

* Яҡшы ҡатын йән кеүек,
Яман ҡатын ен кеүек.

* Яҡшы ҡатын йәшәртер,
Яман ҡатын ҡартайтыр.

* Яҡшы ҡатын – өй йәме.

* Яҡшы ҡатын – ырыҫ,
Уҫал ҡатын – ҡырыҫ.

* Яҡшы ҡатын – өй дәүләте,
Яҡшы кейем – туй дәүләте.

* Яҡшы ҡатын юҡтан ҡорап туйҙырыр,
Яман ҡатын яңғыҙ атың һуйҙырыр.

* Яҡшы ҡатын яман ирҙе ир итер,
Яман ир яҡшы ҡатынды ер итер.

* Яҡшы ҡатын яман ирҙе моратына еткерер.

* Яҡшы ҡатын – ярты ырыҫ.

* Яҡшы ҡатындың ире кейеменән билгеле.

* Яҡшы мал аяҡланып тыуа[227].

* Яҡшынан яҡшы ни яҡшы?
Тыуған менән тиң яҡшы,
Алтын-көмөш сыҡҡан ерҙән,
Атаның өйө иң яҡшы.

* Яҡшынан яҡшы тыуа, ямандан яман тыуа.

* Яҡшынан яҡшы тыуыуы – ғәҙәт,
Яҡшынан яман тыуыуы – ғәжәп.

* Яҡшынан яман тыуһа – име табылмаҫ,
Ямандан яҡшы тыуһа – тиңе табылмаҫ.

* Яҡынға ялған әйтмә, ситкә сереңде әйтмә.

* Яланға ебәргән атыңа ышанма,
Йортоңда ҡалған ҡатыныңа ышанма.

* Ялған ҡатын бала тапмаған.

* Ялҡау ҡәйнәгә – һәпрә килен.

* Ялмап-ялмап йотҡанда яттар яҡшы,
Яманлыҡ көн килгәндә, үҙеңдеке яҡшы.

* Яман атаһын һүктерер.

* Яман ат башҡа һуҡтырыр,
Яман бала ата-әсәһен һүктерер.

* Яман ат тай менән уйнар,
Яман ҡатын бай менән уйнар.

* Яман ат тәртә һындыра,
Яман ҡатын өйөн туҙҙыра.

* Яман ат эйәһен ҡартайтыр,
Яман ҡатын ирен ҡартайтыр.

* Яман ат, яман ҡатын – ирҙе шулар ҡартайтыр,
Яман бала, яман ҡорал – ирҙе шулар һарғайтыр.

* Яман аттың ялын һаҡлағансы,
Яҡшы ирҙең ғәрен һаҡла.

* Яман бала өйгә һыймаҫ,
Өйҙән сыҡһа, илгә һыймаҫ.

* Яман баланың барынан юғы.

* Яман булһа ла нәҫелең ҡалһын,
Үҙ урынында утың ҡалһын.

*Вариант:* Яман булһа ла өрөмөң* ҡалһын.

* Яман булһа ла үҙ улың үҙ малыңа эйә булыр.

* Яман егет туй боҙор, яман ҡатын өй боҙор.

* Яман ир үҙе һайлап алған ҡатынды үҙе яманлар.

* Яман ирҙе яҡшы ҡатын кеше итер.

* Яман ҡатын алһағыҙ, йыйынға инер ул тыумаҫ.

* Яман ҡатын ир ҡурыр.

* Яман ҡатын ирен ҡартайтыр,
Яман уғыл атаһын ҡартайтыр.

* Яман ҡатын ирен кеше алдында хур итер.

* Яман ҡатын иренә йөк.

* Яман ҡатын иренә яусы.

* Яман ҡатын түркенсәк*.

* Яман ҡатын түшәгенән билгеле.

* Яман ҡатын үҙе лә көн күрмәç,
Иренә лә көн күрһәтмәç.

* Яман ҡатын – шайтан ҡамсыһы.

* Яман ҡатын яман эт менән бер.

* Яман ҡатын яңғыҙ атың һуйҙырыр.

* Яман ҡатындан буйҙағым яҡшы,
Яман ирҙән яйҙағым* яҡшы.

* Яман ҡатындан дейеү бәрейе лә ҡасҡан.

* Яман ҡатындың бысағы үтмәç, теле – үткер.

* Яман ҡатындың ҡосағы – яҡшы ҡатындың бысағы.

* Яман ҡатындың теле әсе, ябаға тайҙың тире әсе.

* Яман ҡәйнә йомортҡанан йөй табыр.

* Яман туған бар булһаң – күрә алмай,
Юҡ булһаң – бирә алмай.

* Ямғыр яуһа – ер ырыçы,
Яҡшы бала тыуһа – ил ырыçы.

* Яңғыҙ бала атайға баш.

* Яңғыҙ бала яуҙан яман.

* Яңғыҙ башың – ҡайғыһыҙ ашың.

* Яңғыҙ булыр егеткә биҙәү ҡатын тап булыр.

* Яңғыҙ ҡатын – ярғанат.

* Ярлы булыр егет бейәһен атҡа һатыр,
Яңғыҙ булыр егет ағай-энеһен ятҡа һатыр.

* Ярлы булыр егеткә ҡазалы мал тап булыр,
Яңғыҙ булыр егеткә ҡыçыр ҡатын тап булыр.

* Ярлы туғанын байҙар һөймәç.

* Ят кешегә сер сисмә,
Ят ҡулынан һыу эсмә.

* Ят ярлыҡамаç, үҙеңдеке үлтермәç.

*Вариант:* Ят ярлыҡамаç, үҙеңдеке ситкә типмәç.

* Яулы көндә ят яҡшы,
Ҡанлы көндә ҡәрендәш яҡшы.

* Яуыз бала атаһының ауыҙын ябыр.

*   *   *

* Ай байыһа – йондоҙ бар,
Ҡатын үлһә – балдыҙ бар.

* Айым тура баҡҡанда, йондоҙҙарға йоҙроҡ.

* Алған һалғанды белмәй (бала илай).

* Алғы итәгендә бала баҫһын,
Арт итәгендә мал баҫһын[228].

* Атайым йорто һаламдыр – һарай булып күренә,
Ҡайным йорто ҡабыҡтыр – тамуҡ булып күренә.

* Ата-инәле бул, ата [алтын] – ҡанатлы бул[229].

* Атайым үлгәндә бер туйҙым,
Әсәйем үлгәндә бер туйҙым[230].

* Атанан йәш ҡалдым, аҡылдан буш ҡалдым.

* Атанан ул тыуһа ине,
Ата юлын ҡыуһа ине,
Биленә һаҙаҡ быуһа ине,
Битенә килер ояты
Үҙе белеп йыуһа ине.

*Вариант:* Атанан тыуһын ул,
Ата юлын ҡыуһын ул.
Ата юлын ҡыумаһа –
Тыуғанынан тыумағаны.

* Атаң яҡшы, инәң яҡшы,
Һин кемгә оҡшап шаҡшы?

* Атына асыуланған – ҡатынын ҡыйнаған.

* Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы.

* Бала таба белдең, үҫтерә лә бел.

* Балалы ҡатындың балағы сыҡҡан.

* «Бала»һы – бала, «саға»һы бар.

* «Бала»һы – бала,
«Саға»һы нәҫтә икән? – тип әйтте, ти, элек берәү.

* Балта ағасты киҫмәҫ ине, ағас һабы булмаһа.

* Барыр ерем юҡ, батыр күлем юҡ.

* Баш та юҡ, түш тә юҡ.

* Баштан ҡолаҡ уҙған.

* Бер бейә әйткән ти: «Ун ике ҡолон тыуҙырҙым – һаман ҡамыт муйынымда».

* Бер яҡшыға бер яман,
Береһе туҡмаҡ, береһе сөй –
Береһен ал да, береһен ҡуй!

* Булаһы булған, буяуы һеңгән[231].

* Бүлле бул, бүҙәнә кеүек түлле бул!

* Был да балам балаһы – балдан татлы анаһы;
Был да балам балаһы – ҡара йылан анаһы.

* Бәхетен-тәүфиғен бирһен[232]!

* Елдән тыуған Айтуған[233].

* Еңем яман булһа ла, яғым яҡшы[234].

* Етмәҫтең еңен тотҡансы,
Еҙнәм еңен тотһамсы.

* Икеһе бер туған,
Береһе уйнаштан тыуған.

* Ике һыңар – бер кейем.

* Илама, балам, имсәк бирермен.

* Имсәк биргән – ары ят,
Иренен биргән – бирс ят[235].

* Ирем илгә сыҡһа – мирҙыҡы,
Ҡайтып керһә – минеке.

* Ире өмә әйткән, ҡатыны баланға киткән.

* Ире сыйыр ишектән, ҡатыны сыйыр тишектән.

* Ирем китте ҡалаға, мин киттем далаға.

* Ирем – ҡара ерем[236].

* Ирем үлде, иргә барҙым – башыма имгәк алдым,
Ҡатыным үлде, ҡатын алдым – башыма ҡайғы алдым.

* Ирем һүҙе аш кеүек, балам һүҙе таш кеүек.

* Иш ише менән, Ишмөхәмәт ҡушы менән.

* Ишәк ишен тапҡан.

* Йыраҡта булһа – кешнәшер,
Яҡында булһа – тешләшер.

* Йәш ҡатынға йәнен бирер,
Ҡарт ҡатынға йүнен бирер[237].

* Йәш ҡайынға терәлеп, ҡарт ҡайын ҡырҡ йыл йәшәгән.

* Кейеҙ өйөм – буҙ өйөм,
Керһәм-сыҡһам – үҙ өйөм.

* «Кейәү-кейәү» тиә, елкәм ергә тейә.

* Кеше була бесән менән,
Һин булаһың бисәң менән.

* Килен алама, ҡәйнә насар.

* Килен алдым – һөйөндөм,
Һалмаһына төйөлдөм.

* Килен белгәне – бер нағыш.

* Килен, бешерә белмәй белен.

* Килен булып кем үҫкән?

* Килен туны туҙҙы – килен ғүмере уҙҙы[238].

* Килен юҡта бер алъяпҡыс ине, килен килгәс, икәүҙе бәйләнем.

* Киленем әйбәттән түгел, мейесем әйбәттән[239].

* Киленемә барҙым – кирелдем дә һуҙылдым,
Ҡыҙыма барҙым – ҡыҫылдым да ҡымтылдым.

* Киткән ерендән килгән ерең яҡшы булһын!

* Көҙгө ҡатыҡ – көмөш ҡашыҡ, кейәүем менән ҡыҙыма,
Яҙғы ҡатыҡ – ярыҡ ҡашыҡ, киленем менән улыма.

* «Көсөгөм, көсөгөм» тигән һайын көсөгөм күкеш күрһәтә.

* Күҙгә күренде, ҡулға теймәне[240].

* Күрмәһә – ят, күрешмәһә – оят.

* Кәзәнең маллығы, ҡоҙа менән бажаның затлығы.

* Ҡаҙанына күрә усағы.

* Ҡайғы юҡта ҡайғы булды ҡәйнәмдең ҡара ҡайғыһы.

*Вариант:* Ҡайғы юҡта ҡайғы булды ҡайнағамдың үлеүе.

* Ҡайғым юҡта ҡайғым иттем ҡайным ҡарттың үлемен.

* Ҡайҙа үҫкән – шунда үҫкән, бүтәкәле күлдә үҫкән,
Тауҙа йәйелеп ташта үҫкән, ағай-эненән башҡа үҫкән[241].

* Ҡаның-һүлең эсеңдә, алһыу төҫөң битеңдә,
Бауырың бала баҫмаған, үҙең йомортҡа һалмаған[242].

* Ҡапҡа ауыҙына ҡоҙа килһә, ҡабам менән орсоғом,
Кейәүем менән ҡыҙым килһә, ҡаҙан менән турһығым.

* Ҡапҡа төбөндә ҡара һыйыр ята ине, тигән бер кейәү.
* Ҡапсыҡ ауыҙы яңы сиселгән[243].
* Ҡара тауыҡ та аҡ күкәй һала.
* Ҡара һыйырҙан аҡ быҙау тыуған.
* Ҡатыным үлде – ҡамсы һабым һынды.
* Ҡатын – ямау түгел, һүтеп ташлап булмай.
* Ҡоҙа ашына ҡоҙағый йомарт.
* Ҡоҙағый, өйгә ҡайт та буҙа ҡой!
* Ҡоштар ҙа ҡушы менән.
* Ҡыҙ сағында – ҡыҙыл ут, ҡатын булғас, ҡәҙере юҡ.
* Ҡыҙыл телемде тыйманым – ҡыҙым өйөнә һыйманым.
* Ҡыҙым балаһы – ҡырғауыл балаһы,
  Улым балаһы – үҙәгем балаһы.
* Ҡыҙым өйҙә, ҡылығы илдә.
* Ҡыҙым – ҡыҙ кеше,
  Килер йөҙ кеше,
  Алыр бер кеше[244].
* Ҡәйнә ҡулына килдем – ҡайғы түренә мендем.
* Ҡәйнәмә баш һалдым – башыма таш алдым.
* Ҡәйнәмә килдем – михнәт күрҙем,
  Ҡәйнә булдым – михнәт бирҙем.
* Ҡырҡ бала тапҡан, керер урын тапмаған.
* Малай ҙа йәл, үҙем дә йәл.
* Матурлыҡ менән түгел, бәхете алдан килһен!
* Мейескә ут керҙе – өйгә ҡот керҙе.
* Олоһо күрмәй, бәләкәйе белмәй.
* Орһа ла, анам ҡулы орһон.
* Оя төбө (төпсөк).
* Өй артынан яу килһә, ҡотолормон,
  Өй эсенән яу сыҡһа, ни ҡылырмын?
* Өйрәне өйҙә һыуыт[245].
* Өлкән киленем – кәңәшсем,
  Кесе киленем – көндәшсем.
* Сибәр килен, сей белен.

* Силәгенә күрә ҡапҡасы.

* Сөйөнә күрә туҡмағы,
Силәгенә күрә ҡапҡасы –
Тәгәрәтһәң дә түгелмәҫ.

* Ситтең ситәне ҡороһон.

* Сыбыҡ осо туған.

* Тауҙа булыр тарғыл таш, тарыҡһаң сыға күҙҙән йәш;
Тар ҡултыҡтан уҡ тейһә, тартып алыр ҡәрендәш,
Ҡәрендәшең юҡ булһа, далала ҡалыр яңғыҙ баш.

* Туған-тыумаса, ҡоҙа-ҡоҙаса.

* Тугандан тыуған – тыума ят.

* «Туйҙым» тигән кейәү туғыҙ мөсәй кимергән.

* Туйым уҙған, туным туҙған.

* Тыштағы буран буранмы ни, өйҙәге буран – буран.

* Тыйһаң, тырт итә, ҡыҫһаң, ҡырп итә (бала).

* Улдарым – алтын ашыҡтарым.

* Улым бер булһа, киленем биш булыр.

* Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла.

* «Ураҡ урғанда бала булһын ине,
Ҡунаҡта бала булмаһын ине», – тигән ти бер килен.

* Ут ала барған ерендә ул тапҡансы ултырған[246].

* Ут асыуын – табанан, ир асыуын – баланан.

* Үгеҙ үлгән – уртаға айырылған[247].

* Үҙ бүркем үҙ күҙемә төшә.

* Үҙ ғүмеремдә ирем бер үпте,
Уны күреп, ҡәйнәм һуҡранып бөттө.

* Үҙ елкәмде белмәйем, ҡәйнәмдеке ҡап-ҡара.

* Үҙ ҡыҙыма – үҙәк,
Үгәй ҡыҙға – сүбәк.

* Үҙемдең киленем яман,
Ҡыҙымдың ҡәйнәһе яман.

* Үҙеңдеке үҙеңә яу.

* Үкһеҙҙең ҡорһағына һуҡҡандар –
Ул: «Ай, арҡам!» – тип ҡысҡырған.

* Үлгән ағайға юғалған тай.

* Үҫер, тиреһен текмәгәндер.

* Хәҙерге бала институт бөтөрөп тыуа.
* Һабан тотҡан ерәү, ҡашыҡ тотҡан етәү.
* Һабанына күрә бешкәге.
* Һуғып, тимерҙе генә йомшарталар.
* Һыйыр тулап, кәртә емергән.
* Һәйбәт ҡәйнәнән дә ҡандала еҫе сыға.
* Һәр бүренең балаһы алты булыр, биш булыр,
  Араһында ғәйрәтлеһе бер булыр,
  Шул ғәйрәтленән айырылһа,
  Һәр ҡайһыһы һәр көндә
  Һәр бер эткә ем булыр.
* Эйәһенә күрә бейәһе.
* Эшләгәнең – өйөңә,
  Өйрәнгәнең – үҙеңә.

  *Вариант:* Эшләгәнең минең өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙеңә.
* Эше бөтмәҫ, ашы бешмәҫ.
* Әбей – килен, үҙем ул.
* Әсәм яҡын булһа ла, арба артынан баралар,
  Бисәм ситтән булһа ла, янға ултырып баралар.
* Әсәһе ҡыҙы ҡайғыһында,
  Ҡыҙы үҙ ҡайғыһында.

  *Вариант:* Әсәһендә – ҡыҙ ҡайғыһы,
  Ҡыҙында – үҙ ҡайғыһы.
* Яҡшынан яман тыуған.
* Яңы ҡоҙа барҙа иҫке ҡоҙа ишек төбөндә ултырған.
* Яңы ҡоҙа килгәс, иҫке ҡоҙа ятып илаған.
* Ярҙамлашырға атай юҡ,
  Ҡанат йәйергә инәй юҡ.
* Яуыз ҡатындан шайтан ҡасҡан.

### 3. Ир-егет, ҡатын-ҡыҙ

* Ағай булыр егеттең итәк-еңе киң булыр.
* Ағым һыуҙы ат кисер,
  Ауыр көндө ир кисер.

* Аҡ ҡатындың эсе боҙ, ҡараҡайҙың эсе ҡуҙ.

* Аҡылһыҙ егет – ауыҙлыҡһыҙ ат,
Йүнһеҙ егет – йүгәнһеҙ ат.

* Алты ҡабып ир туйһын,
Алтмыш ҡабып ат туйһын.

* Алтын башлы ҡатындан баҡыр башлы ир артыҡ[248].

*Вариант:* Алтын башлы ҡатынды баҡыр башлы ир уҙыр.

* Ат ат эҙенән йөрөр[249].

* Ат баҫҡан еренән ҡайтмаҫ.

* Ат арыҡлыҡта, егет ғәриплектә һыналыр.

* Ат ҡартайыр – майҙан ҡартаймаҫ,
Егет ҡартайыр – заман ҡартаймаҫ.

* Ат өйөрөн һағынһа, артҡы аяғын ҡағыныр,
Ир өйөрөн һағынһа, эйәр-теҙген тағыныр.

* Ат типкеһен ат күтәрер.

* Ат тоҙ тип ҡартайыр,
Егет ҡыҙ тип ҡартайыр.

* Ат әйләнеп өйөрөн табыр,
Ир әйләнеп төйәген табыр.

* Ат яҡшыһы арҡанда, ир яҡшыһы – тарханда.

* Атты ҡамсы үлтерер, ирҙе намыҫы үлтерер.

* Атың барҙа юл таны, аҡылың барҙа ир таны.

* Ауылсы ҡатын – ҡабарсы*.

* Ауылсы ҡатын өйөнә еткәс йүгерер.

* Бер ҡатын алдында икенсе ҡатынды маҡтама.

* Бер ҡатын биҙәнеү менән,
Бер ҡатын төҙәнеү менән.

* Бер ҡатында ҡырҡ ир хәйләһе булыр.

* Бер ҡатында ун тауыҡтың көсө бар.

* Бер ҡатындың хәйләһе ҡырҡ дөйәгә йөк булыр.

* Бөтөшө яман ҡамышты һыу эсендә үрт алыр,
Йөрөшө яман егетте ил эсендә яу алыр.

* Бөркөттө осоуынан, егетте эшенән таныйҙар.

* Булмаҫ ир буйраҡ һыуҙа балыҡ тота.

* Бүре аҙығы менән ир аҙығы юлда.

* Бүрекленең һүҙе бер.

* Егет бул – дегет булма.

* Егет булған егет еңенән йылан сығарыр.

* Егет булһаң, ебегән булма.

* Егет булһа – ебеп тормаҫ,
Ебеп торһа – егет булмаҫ.

* Егет булһаң, егет бул – һыуҙа йөрөгән һөлөк бул.

* Егет булһа, егәрле булһын.

* Егет булһа мут булһын,
Ике күҙе ут булһын.

*Вариант:* Егет булһа мут булһын,
Мут булмаһа, юҡ булһын.

* Егет – егеттең көҙгөһө.

* Егет һүҙен йыҡмаҫ.

* Егет еле менән йөрөр.

* Егет йөрәгенә ышаныр.

* Егет кеше – бер кеше,
Арыҫланға тиң кеше.

* Егет кеше – мут кеше.

* Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә əҙ.

* Егет кешегә етмеш һөнәр күп түгел,
Күп булһа ла йөк түгел.

* Егет күрке – ат-яраҡ.

* Егет ҡартаймай, донъя ҡартайта.

* Егет менән ат башы күрә.

* Егет саҡ – егәрле саҡ,
Арыҫлан тотоп егерлек саҡ.

* Егет һүҙе бер булыр.

* Егет үҙ һүҙенә үҙе хужа.

* Егет үлһә – аты ҡалыр,
Үгеҙ үлһә – ите ҡалыр.

* Егет һүҙенән, арыҫлан эҙенән ҡайтмаҫ.

* Егеттең бер йорто – ҡыҙ тирмәһе, бер йорто – яу эсе.
* Егеттең егетлеге ат егеүенән билдәле.
* Егеттең егетлеге майҙанда беленер.
* Егеттең ике һөйләгәне – бер үлгәне.
* Егеттең төҫөн әйтмә, эшен әйт.
* Егеттең үҙе үлһә лә, һүҙе үлмәҫ.
* Егеттең һүҙе – тимерҙең үҙе.
* Ике ҡатын бергә килһә – баҙар була,
  Өсәү бергә килһә – йәрминкә.
* Ил намыҫы ярлы итмәҫ, ир намыҫы ярлы итер.
* Иләктә һыу тормаҫ,
  Ҡатын-ҡыҙ ауыҙында һүҙ тормаҫ.
* Ир аҡылы бер килә.
* Ир алдамай, ип* алдай.
* Ир арыҫланы, ата балаһы, ҡайҙа барһа ла сер бирмәҫ.
* Ир аҫылы – һиммәтле,
  Ҡыҙ аҫылы – ҡиммәтле.
* Ир барына йомарт.
* Ир булған ир – егерме биштә баш булыр,
  Ир була алмаған ир – иллелә лә йәш булыр.
* Ир булған ир – ирлекле.
* Ир булһаң, ер бул, ер барыһын да күтәрә.
* Ир булһаң, илгә таян.
* Ир булһын, ипле булһын.
* Ир бәхете иректә.
* Ир ғүмере – бер көн.
* Ир-егет башына эш төшкәндә һыналыр.
* Ир-егет майҙан тотор.
* Ир-егет ни күрмәй, ир күңеле ни белмәй.
* Ир-егет өйҙә тыуыр, яуҙа үлер.
* Ир-егет өйҙән сыҡһа, өйөрөнә ҡушылыр.
* Ир-егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә.
* Ир-егет үлемдән ҡурҡмаҫ.

* Ир-егеттең оялыуы – имән ағастың бөгөлөүе.
* Ир-егеттең үлгәне – имән ағастың һынғаны.

*Вариант:* Имән ағастың эйелгәне – һынғаны,
Ир-егеттең оялғаны – үлгәне.

* Ир-егеттең эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр.
* Ир-егеттең юлдашы – тәүәккәллек.
* Ир йөрәгенә таяныр.
* Ир игеҙе имгәктә.
* Ир ирек өсөн үлер.
* Ир ирекле башын ҡол итмәҫ.
* Ир ирлеген итер, еренә етер.
* Ир ирлеген итер, моратына етер.
* Ир ике һөйләмәҫ.
* Ир ике һөйләһә, үҙ башына.
* Ир кеше – иллелә лә егет.
* Ир кеше – иллелә ил арыҫланы.
* Ир кешенең бер һүҙе –
Ҡатын кешенең йөҙ һүҙе.
* Ир кисмәҫлек йылға юҡ.
* Ир күңеле – иркенлек.
* Ир ҡанаты ат була.
* Ир ҡәҙерен ир белер.
* Ир менән ир араһы – ер менән күк араһы.
* Ир моронло булыр, ат иренле булыр.
* Ир муйынында ҡыл-еп серемәҫ.
* Ир мәлһеҙ булмаҫ, егет йәрһеҙ булмаҫ.
* Ир тауышлы ҡатында оят булмаҫ,
Ҡатын тауышлы ирҙә ҡеүәт булмаҫ.
* Ир тауышлы ҡатындан, ҡатын тауышлы ирҙән биҙ.
* Ир уңғаны – таң сулпаны.
* Ир үлһен дә дан ҡалһын.
* Ир хазинаһы – иҫке һүҙ,
Унын сырағы – ике күҙ.

* Ир һынамаҡ – бер бурыс.
* Ир шашҡанда билдәле, ат сапҡанда билдәле.
* Ир ысынлаһа – бүре ҡан ҡоса.
* Ир ярлы булһа, яураҡ* булыр,
Ат ябыҡ булһа, тайҙаҡ булыр.

*Вариант:* Ир арыҡ булһа, яураҡ булыр,
Ат арыҡ булһа, тулаҡ булыр.

* Ирҙе ир үлтермәҫ, намыҫ үлтерер.
* Ирҙе намыҫ ярлы иткән.
* Ирҙең көсө беләктә лә, йөрәктә.
* Ирҙең һүҙе үлгәнсе, үҙе үлһен.
* Ирҙең эше – тәүәккәл.
* Ирҙә ҡыйыулыҡ булһа, эштә ҡыйынлыҡ булмай.
* Ирҙәргә эш булһын,
Ҡатын-ҡыҙға һүҙ булһын.
* Ир-егет бер көрәштә ике йығылмаҫ.
* Ирлек беләктә түгел, йөрәктә.
* Ирлек төбө – берлек.
* Ирекле баштан ир үлмәҫ.
* Йәш егетте хурлама, хеҙмәт итһә, бай булыр.
* Күлде ҡамыш матурлай,
Ирҙе намыҫ матурлай.
* Ҡатын булһаң да, ҡарарлы бул.
* Ҡатын-ҡыҙҙың сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа.
* Ҡатын-ҡыҙҙың хәйләһенә шайтан да түҙә алмаҫ.
* Ҡатын-ҡыҙҙың аҡылы ел өргәнсе ете төрлөгә әйләнә, ти.

*Вариант:* Ҡатын уйы ел өргәнсе ете үҙгәрә.

* Ҡатындар менән бәхәсләшкәнсе, силәк менән һыу ташы.
* Ҡатындар теле – утлы киҫәү.
* Ҡатындар һүҙе менән йөрөһәң,
Әжәлең етмәй үлерһең.
* Ҡатындар һүҙенә алданма, йүгерек атҡа таянма.
* Ҡатындарҙың күңелендә ни – телендә шул.

* Ҡул телдән айырылмаç,
Һөйәк иттән айырылмаç,
Һүҙ эштән айырылмаç,
Ир һүҙенән айырылмаç.

* Ҡыҙҙар бүрәнә ярығынан да күлә, ти.

*Вариант:* Ҡыҙҙар урамда ятҡан ат тиҙәгенән дә көлә, ти.

* Ҡәмәрҙең һиммәте – ҡашында,
Ирҙең һиммәте – башында.

* Намыçһыҙ ир – аяҡлы сир.

* Ни күрһә лә, ир башы менән ат башы күрә.

* Осорорға ел көслө, еңелергә ир көслө.

* Сүбәк баш ир булғанынсы,
Сепрәк баш ҡатын булғаның яҡшы.

* Тырнаҡ үçтергән ҡатындан йыраҡ ҡас.

* Уғры менән юлдаш булма,
Ҡатын-ҡыҙ менән серҙәш булма.

* Уçал ҡатындан аждаһа ҡурҡҡан.

* Утҡа барған ҡатындың утыҙ ауыҙ һүҙе бар.

*Вариант:* Һыуға барған ҡатындың алтмыш ауыҙ һүҙе бар.

* Үгеҙ мөгөҙлө һыйырҙың һөтө булмаç,
Һыйыр мөгөҙлө үгеҙҙең көсө булмаç.

* Һимеҙлекте ҡуй күтәрер,
Ауырлыҡты ир күтәрер.

* Һүҙенән ҡайтҡан – ир түгел.

* Әтәс ҡойроғо менән,
Ир мыйығы менән,
Ҡатын-ҡыҙ сәсе менән матур.

* Яман айғыр – өйөрсәк.

* Яман егет – яман эт.

* Яман егетте ил эсендә яу алыр.

* Яман ирҙән яҡшы ҡатын артыҡ.

* Ямғыр менән ер йәшәр,
Фатиха менән ир йәшәр.

* Яңғыҙ ҡатын – яңғыҙ ҡайын.

* * *

* Егет ярлы – намыҫ бай.

## 4. Күрше-күлән, дуҫ-иш, дошман

* Ағас ағасҡа таяна, әҙәм әҙәмгә таяна.

* Аҙығың булһа, арымаҫһың,
Дуҫың булһа, бәләгә тарымаҫһың.

* Айырылмаҫтай дуҫыңа ҡайырылмаҫтай һүҙ әйтмә.

* Айырылыр дуҫ аяулы малыңды һорар.

* Айырылыр дуҫ эйәрҙең арт ҡашын һорай.

* Айыу балаһын алға һалһаң да иш булмаҫ.

* Аҡ эт, ҡара эт – икеһе лә эт.

* Аҡсаң булһа – аш күп, ашың булһа – дуҫ күп.

* Аҡсаң күп булғансы, дуҫың күп булһын.

* Аҡылһыҙ кеше дошманы менән дуҫ булыр,
Дуҫы менән дошман булыр.

* Алабута аш булмаҫ,
Ара бутаған иш булмаҫ.

* Алама булһа ла ауылдашың яҡын.

* Алдаҡсы дуҫың булғансы, ысын дошманың булһын.

* Алдыңда ышаныс булһын, артыңда таяныс булһын.

* Алйот дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ.

* Алйот юлдаш булмаҫ, ишәк моңдаш булмаҫ.

* Алла ташламаһа, бүре ашамаҫ.

* Алтау ала булһа – аулағаны китер,
Икәү иптәш булһа – аңдығаны китер.

* Алыҫтағы дошмандан аңдып йөрөгән дуҫ яман.

* Асыҡ дошман йәшерен дошмандан хәйерле.

* Ас менән дуҫ булма.

* Аҫтыртын эт өрмәй тешләр.

* Ата-бабаң дошманын үҙеңә дуҫ итмә.

* Ат тышауһыҙ булмаҫ,
Ир дошманһыҙ булмаҫ.

* Атҡа эйәрһәң – ат булырһың,
  Тайға эйәрһәң – тай булырһың.
* Атаң барҙа дуҫ эҙлә, атың барҙа юл эҙлә.
* Атайың үлһә лә, атайыңдың дуҫын ташлама.
* Атаһы башҡа менән ҡуян аулама.
* Атаһы дуҫтың балаһы дуҫ.
* Ауыҙың тулы ҡан булһа ла,
  Дошман алдында түкмә.
* Аш ашҡа – дуҫ башҡа.
* Ашағанда дуҫ күп,
  Башҡа бәлә төшһә, берсһе юҡ.
* Ашың булһа, дуҫың күп.
* Баҡыр башлы йылан күҙе ҡояш батҡас асыла.
* Бала – бауыр, дуҫ – тамыр.
* Бараманың* бар булһын, барһаң, айран эсерһең.
* Белекһеҙ дуҫыңдан белекле дошманың артыҡ.
* Белеш килһә, белен бешә.
* Белешеңә күрә йөрөшөң.
* Бер күргән – белеш,
  Ике күргән – таныш,
  Күп күргән – дуҫ.
* Бер һынаған дошманды ҡайта-ҡайта һынама.
* Бер һынағанды мең һынамайҙар.
* Биҙгәнгә биренмә.
* Биртенгәнгә биртенмә.
* Бисура менән бәрей дуҫ.
* Боҙолошҡан дуҫ дошмандан яман.
* Бүре арығын белдермәҫ, эткә һыртын ҡабартыр.
* Бүре балаһын бүрек эсенә һалһаң да ятмаҫ.
* Бүре ҡуйға дуҫ булмаҫ.
* Бүре менән дуҫ булһаң, этең янында булһын.
* Вафаһыҙ дуҫ баш ашай.
* Ғәйепһеҙ дуҫ эҙләгән дуҫһыҙ ҡалыр.
* Ғәйепһеҙ аш эҙләмә – ас ҡалырһың,
  Ғәйепһеҙ дуҫ эҙләмә – яңғыҙ ҡалырһың.

* Дошман берҙе биш итер.

* Дошман иш булмаҫ,
Эсәк-бауыр ит булмаҫ.

* Дошман кереп ашыңды ашар,
Сығып башыңды ашар.

* Дошман ни тимәҫ, төшкә ни кермәҫ?

* Дошманға ашыңды бирһәң, башыңа менер.

* Дошманға тошоҡма,
Тошоҡһаң – бошоҡма.

* Дошмандан ҡурҡып, тупһаңды ташлама.

* Дошмандан илең һаҡла,
Дуҫыңдан серең һаҡла.

* Дошмандың аты уҙғансы,
Дуҫыңдың эте уҙһын.

* Дошмандың көлгәне – сереңде белгәне.

* Дошмандың көлгәненә ышанма.

* Дошмандың күҙе дүрт.

* Дошмандың күңелендә булһаң да, күҙенә салынма.

* Дошмандың һүҙенә ҡарама, үҙенә ҡара.

* Дошмандың үҙ ташы менән үҙ башына ат.

* Дошманым алыҫ тип ҡысҡырып һөйләмә:
Ҡолағына һалыр ҙа, күңеленә алыр.

* Дошманың белергә тейеш түгелде дуҫыңа һөйләмә.

* Дошманың күп булһа, үҙеңә үпкәлә.

* Дошманыңа тура әйтһәң, дуҫыңа өлгө булыр.

* Дошманыңа үлем теләгәнсе, серек ағасҡа һөйлә (телә).

* Дошманыңа әйтергә ярамағанды дуҫыңа ла әйтмә:
Иртәгә дошман булыуы бар.

* Дошмандан бер һаҡлан,
Яман дуҫтан мең һаҡлан.

* Дошманыңды танырға өйрән, дуҫ кейемендә булмаһын.

* Дошманыңды һөйөндөрмә, дуҫыңды көйөндөрмә.

* Дөйә арғымаҡҡа иш булмаҫ.

* Дуңғыҙ түше менән, эт ише менән.

* Дуҫ башҡа, дошман аяҡҡа ҡарар.

* Дуҫ биргәндең тешенә ҡарама.
* Дуҫ битлеген кейгән дошман хәтәр.
* Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма.
* Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер,
Яу килгәндә, йән бирер.
* Дуҫ дуҫҡа етер, дуҫ башҡа етер.
* Дуҫ дуҫҡа ялынһа, дуҫтың күңеле алына.
* Дуҫ – дуҫтың күҙгөһө.
* Дуҫ – игеҙ, дошман – һигеҙ.
* Дуҫ илатып өйрәтер,
Дошман көлдөрөп көйрәтер.
* Дуҫ итеп серең һөйләмә, таңда дошман булмаһын,
Дошман тип хәтерен ҡалдырма, таңда дуҫың булмаһын.
* Дуҫ итеп сер әйтмә, дуҫыңдың да дуҫы бар.
* Дуҫ-иштәрең ҡарға булһа,
Суҡығаның емтек булыр.
* Дуҫ килгән көн – байрам көн.
* Дуҫ көлгәндә беленмәй, бөлгәндә беленә.
* Дуҫ күҙе ғәйепте күрмәй.
* Дуҫ күҙеңә ҡарап әйтер,
Дошман артыңда ғәйбәт һатыр.
* Дуҫ күп булһа ла – аҙ,
Дошман бер булһа ла – күп.
* Дуҫ менән аша, эс, алыш-биреш яһама.
* Дуҫ менән дуҫ булғанға шатлан,
Дошман менән дуҫ булыуҙан һаҡлан.
* Дуҫ үпкәләһә, дошман кинәнер.
* Дуҫ һөйөнһөн, дошман көйөнһөн.
* Дуҫ хаҡы өсөн йән фиҙа.
* Дуҫ әйтһә – ҡалма,
Дошман әйтһә – барма.
* Дуҫтан дошман күп.
* Дуҫтан дошманды айыра бел.
* Дуҫтан дошман күп булыр.
* Дуҫтан ҡалышыу – дуҫтан ҡалыу.

* Дуҫтар хәтерен ҡалдырһаң,
Дошман хәтерен табырһың.

* Дуҫты тапҡансы эҙлә, тапһаң – һаҡла.

* Дуҫтың дуҫлығы ҡара көндә беленер.

* Дуҫтың дуҫлығы яуҙа беленә.

* Дуҫһыҙ кеше – ҡанатһыҙ ҡош.

* Дуҫы күпте яу алмай.

* Дуҫымдың кем икәнен белдем, атымды урлатҡас.

* Дуҫың булһа, үҙеңдән артыҡ булһын.

* Дуҫың бысағы менән мөгөҙ киҫ,
Дошманың бысағы менән кейеҙ киҫ.

* Дуҫың да, дошманың да ир булһын.

* Дуҫың дуҫ булһын,
Иҫәбең дөрөҫ булһын.

* Дуҫың күбәйһә белеп ҡуй:
Аранан береһе дошмандыр.

* Дуҫың күп булһа, дошманың үҙе үлер.

* Дуҫың менән айырылышаһың килһә, көтәсәккә мал бир.

* Дуҫың ниндәй – ҡәҙерең шундай.

* Дуҫың һуҡмағына үлән үҫтермә.

* Дуҫың яман булһа, айбалтаң янында булһын.

* Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ.

* Дуҫыңа ат бирмә, ат бирһәң, «яй йөрө» тимә.

* Дуҫыңды дуҫ итә бел,
Эшеңде эш итә бел.

* Дуҫыңды ҡара: хәтере ҡалмаһын,
Дошманыңды ҡара: сереңде алмаһын.

* Дуҫыңды һынарға теләһәң, көтөргә бир.

* Дуҫыңдың кем икәнен юлға сыҡҡас белерһең.

* Егетте дуҫынан таны.

* Ике аяҡлыла бажа татыу,
Дүрт аяҡлыла кәзә татыу.

* Ике даулының береһе яҡшы,
Бер даулының бүрке яҡшы.

* Ике дуҫтың – береһе ҡол.

* Ике йөҙлө дуҫтан дошман яҡшы.
* Ике кеше талашһа, өсөнсөнөң эше юҡ.
* Ике ҡарға һуғышһа, ябалаҡҡа йөн булыр.
* Ике ҡош талашһа, уҡсыға йөн.
* Ике сәнкем* – бер мөстәҡим*.
* Ике шоңҡар талашһа, бер ҡарғаға ем булыр.
* Ике яҡшы дуҫ булһа, ике аранан ҡыл үҫмәҫ.
* Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.
* Илеңдә ни барҙы күршеңдән һора.
* Иплегә иптәш күп.
* Иптәшең һуҡыр булһа, күҙең ҡыҫ.
* Ир-егетте юлдашына ҡарап беләләр.
* Иҫке дуҫ килгәнгә яңы дуҫтың күҙенән йәш сыға.
* Иҫәпле дуҫ айырылмаҫ.
* Иҫәр дуҫтан аҡыллы дошман яҡшы.
* Итәк киҫеп ең булмаҫ,
  Иҫке дошман дуҫ булмаҫ.
* Итәк киҫеп ең булмаҫ,
  Иҫәпләшкән дуҫ булмаҫ.
* Ишленең мең ғәйебе йыуылыр,
  Яңғыҙҙың бер хатаһы мең булыр.
* Ишәй ишен, ҡушай ҡушын таба.
* Ишәк ише менән, дуңғыҙ түше менән.
* Йоҡлаған йыландың ҡойроғона баҫма.
* Йорт һатып алма, күрше һатып ал.
* Йорт һалһаң, күршеңде һайлап ал.
* Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.
* Йылан йоҡлар, дошман йоҡламаҫ.
* Йыланды кем үлтерһә, шуңа сауап.
* Йыландың ағына ла нәләт*,
  Ҡараһына ла нәләт.
* Йыландың ағыуы башында.
* Йыландың башын киҫһәң, ҡойроғо һелкенер.

* Йыландың йылтырағына ышанма.
* Йыландың ҡараһы ла йылан, ағы ла йылан.

*Вариант:* Йыландың яҡшыһы, яманы булмай
(Ағы ла йылан, ҡараһы ла йылан).
* Йыландың ағына тейһәң, ҡараһы ҡотҡармаҫ[250].
* Йыландың тешен һындырһаң да, ағыуы ҡала.
* Йыландың тышы шыма булһа ла, эсе ағыу.

*Вариант:* Йыландың тышы йомшаҡ булһа ла, эсе зәһәр.
* Йыландың үҙе үлһә лә, теше үлмәй.
* Йән ҡыйнаған дуҫ түгел.
* Кейемдең яңыһын маҡта,
Дуҫтың иҫкеһен маҡта.
* Келәте бикле күршеһе менән тыныс.
* Кем арбаһына ултырһаң,
Шуның йырын йырларһың.
* Кем яҡының – шул дошманың.
* Кеҫәң тәрән булһа, дуҫтар табыла.
* Кеше менән дошман булһаң, үҙ нәпсеңә ҡара.
* Кешенең кем икәнен белгең килһә,
Төҫөнә ҡарама, дуҫына ҡара.
* Көн итмәк – күршенән.
* Көнөң боҙған – дуҫ түгел,
Йөрәк боҙған – аш түгел.
* Көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ.
* Көсөм күп тип башыңа дошман йыйма:
Күмәк ҡырмыҫҡа атты үлтерер.
* Күңел берлеге булған ерҙә кейем төрлөлөгө күренмәй.
* Күңелгә ятмағанды дуҫ итмә.
* Күп һөйләгән дуҫынан айырылыр.
* Күпте яманлаған дуҫһыҙ ҡалыр.
* Күренеп килгән шайтандан күренмәй килгән шайтан яман.
* Күрше арала булыш ҡасмаҫ,
Булышҡанда һулыш ҡасмаҫ.
* Күрше күршегә ҡарар.
* Күрше күршеһенән күреп көнләшә.

* Күрше тауығы күркә кеүек.

* Күрше хаҡы – тәңре хаҡы.

* Күрше хәлен ҡырҙан һора.

* Күрше эте күршегә өрмәй.

* Күршегә күрше кермәй тормай.

* Күршегә онға кермәһәң дә, көлгә керерһең.

* Күршеләргә туй килһә, һин дә ҡапҡаң асып ҡуй.

* Күршеләш байың булһын,
Аҡһаҡ тайың булһын.

* Күршенеке күрекле күренә.

*Вариант:* Күрше малы күрекле.

* Күршенең тауығы ҡаҙҙай, ҡатыны ҡыҙҙай.

* Күршенән күрмәк – күсермәк.

* Күршең ансайын* булһа, тыныслыҡ күрмәçһең.

* Күршең бай булһа ла, егәреңә тай булһын.

* Күршең бай булһа ла, ҡапҡаң бикле булһын.

* Күршең бай булһын:
Бирмәһә лә һорарға кермәй.

* Күршең менән татыу тор.

* Күршең һуҡыр булһа, күҙеңде ҡыç.

* Күршең яҡшы булһа, йәнең тыныс.

* Күршеңде ҡарғама, үҙ башыңа төшәр.

* Күршеңдең кем икәнен белгең килһә, кисен һөт һора[251].

* Күршеңдә эт булһа булһын, күршең үҙе эт булмаһын.

* Күршеһенә йәбер иткән –
Көн-күрешен кәметкән.

* Ҡаҙ ҡаҙ менән, таҙ таҙ менән.

* Таҙ тауыҡ таҙ ҡураҙ* менән.

* Ҡойроғона баçһаң, йылан да ыçылдай.

* Ҡолағын ятҡырған аттан һаҡлан.

* Ҡорҙашыңа – түр башың.

* Ҡош ҡанат менән,
Кеше дуçлыҡ менән көслө.

* Ҡышҡы көндөң йылыныуына ышанма,
Дошмандың көлөүенә ышанма.

* Мал күтәрер үлемдә, дуҫ күтәрер күңелдә.

* Малың барҙа бары ла дуҫ,
Малың бөтһә, ҡайҙа дуҫ?

* Наҙан дуҫтан зирәк дошман артыҡ.

* Наҙан менән дуҫ булма.

* Өйҙәш – көндәш.

* Өйөңдөң өй икәнен ҡыш төшкән һуң белерһең,
Дуҫыңдың дуҫ икәнен эш төшкән һуң белерһең.

* Өйөңдәге хәбәрҙе күршеңдән һора.

* Өргән эт тешләмәҫ,
Әрләгән дуҫ кәмһетмәҫ,
Көлһә лә дошман йәлкетмәҫ.

* Сер дуҫы күп булыр,
Серҙе тотҡан бер булыр.

* Ситтең аты уҙғансы, күршеңдең тайы уҙһын.

*Вариант:* Ҡырғының* аты уҙғансы,
Күршенең тайы уҙһын.

* Сәләм бирмәгән бер оятлы,
Яуап бирмәгән мең оятлы.

* Табағыңда ашың булһа,
Дуҫ-ишең күп була.

* Тайға эйәрмә, атҡа эйәр.

* Талаш бер кемгә лә майлы аш түгел.

* Талаш эткә килешә.

* Танышҡанға тел бирмәҫ,
Йөрөшкәнгә юл бирмәҫ.

* Танышлыҡ таш тишә.

* Танышың күп булһа, табышың күп булыр.

* Тапҡан малға иш күп, малың барҙа дуҫ күп.

* Тапҡан – табыш, таныған алғыш*.

* Тар ерҙә танышҡан киң ерҙә күрешер.

* Татыу булһаң, бер ҡуй бөтә ҡәбиләңде туйҙырыр.

* Татыулыҡҡа тау ҙа ҡыҙыҡҡан.

* Таш табаҡтан аш ейгән мәңге серҙә иш булмаҫ.
* Теле татлының дуҫы күп.
* Тиң-тош килмәй, күңел иремәй.
* Тиң-тошоңа ҡул һелтәмә, кәрәк булыр бер көндө.
* Тоҙ менән боҙ дуҫ булмай.
* Торна менән дуҫ булһаң, башыңдан ҡайғы китмәҫ.
* Тотҡан ағасыңдың тамыры ныҡ булһын.
* Туй ашы менән дуҫ табылмаҫ.
* Тун йылыһы – иңдән төшкәнсә,
  Дуҫ йылыһы – гүргә киткәнсә.
* Тун тиреһе ише менән.
* Тундың яңыһы, дуҫтың иҫкеһе яҡшы.
* Уйнашҡа ышанған – улһыҙ,
  Дошманға ышанған – ҡулһыҙ.
* Үҙ кешең менән даулашма, ят кешене яҡлашма.
* Үҙең һынамаған кеше менән дуҫ булма.
* Үҙеңдекен бирмә, күршеңдекенә теймә.
* Үҙеңдең кем икәнеңде белгең килһә, күршеңдән һора.
* Һыуға таянма, дуҫҡа инанма.
* Шешә дуҫы шештән яман.
* Ысын дуҫ булһаң,
  Алдында маҡтама,
  Артында маҡта.
* Эт арыҡлығын күрһәтмәҫ, елкәһен көмөрәйтер.
* Эт йыйыны төшкә етмәҫ.
* Эт менән дуҫ булһаң, нәжес* менән туй итерһең.
* Этең эт булһа булһын, дуҫың (күршең) эт булмаһын.
* Эткә типһәң, суҫҡа мырҡылдай.
* Эттең ағы ни ҙә ҡараһы ни!
* Эттең дуҫы күп булыр,
  Йәненә файҙаһы юҡ булыр.
* Эттәр талаша ла, бүре күреү менән яраша.
* Эшең яй сағында дошманың да дуҫ була.
* Эшкинмәгән иптәштән эт артыҡ.

* Әүәл күрше һайла, шунан йорт һал.
* Юрғалыға юлдаш булма.
* Яҡшы дуҫ яфаға һалмаҫ.
* Яҡшы иптәш – яҡшы йоҙаҡ.
* Яҡшы кешенең дуҫы күп.
* Яҡшы күргән дуҫыңа яҡшы күргән малың бир:
  Күрә-күрә һөйөнһөн,
  Яман күргән дуҫыңа яман күргән иҫкең бир:
  Кейә-кейә көйөнһөн.
* Яҡшы күргән дуҫыңдың йомошон килгәс тә һора,
  Яман күргән дуҫыңдың йомошон киткәндә һора.
* Яҡын дуҫ йыраҡ ҡәрендәштән яҡын.
* Ялған дуҫ ялағай булыр.
* Яман дуҫтан эт яҡшы.
* Яман дуҫың булғансы, яҡшы дошманың булһын.
* Яман туғандан яҡшы күрше яҡшы.
* Яңы ҡолаҡсын булды тип, иҫкеһен утҡа ырғытма.

* * *

* Ағай-эне, ауыл-күрше.
* Алапай менән Шалапай.

  *Вариант:* Ишәй менән Ҡушай.
  Ағылыйға – Тағылый.
* Ауылда дуҫың танымай,
  Яланда атың танымай.
* Дошман алтмыш булһа, дуҫтар етмеш.
* Дуҫмын тип, күп йөрөнөң көлгән саҡта,
  Күренмәнең бөлгән саҡта.
* Ике таҙ бер тараҡ өсөн талашҡан.
* Ҡуйындағы ҡара йылан.
* Үҙемә теймәгән йылан йөҙ йыл йәшәһен.

## 5. Донья көтөү, мал табыу, барлыҡ-юҡлыҡ

* Ағас ҡырҡһаң оҙон ҡырҡ: ҡырҡа-ҡырҡа ҡыҫҡарыр,
  Тимер ҡырҡһаң ҡыҫҡа ҡырҡ: һуға-һуға оҙонайыр.

* Ағасһыҙ урман юҡ, нужаһыҙ донъя юҡ.

* Ағыр һыуҙың ҡәҙере юҡ.

* Аҙ аҙҙырыр, күп яҙҙырыр.

* Аҙ ҙа етә, күп тә бөтә.

* Аҙҙан күп була, күптән юҡ була.

* Аҙҙы күпкә ҡушҡандың арманы* юҡ.

* Аҙҙың ҡәҙерен белмәгән күптең ҡәҙерен белмәҫ.

* Айың-көнөң уртаҡ булһын, малың 'уртаҡ булмаһын.

* Айыуҙың үҙен тапҡас, эҙен эҙләмә.

* Аҡҡан һыуҙың ҡәҙере юҡ.

* Алам тигән ауыҙ яман,
Күрәм тигән күҙ яман.

* Алға барырҙың эте үлән ашар.

* Алдыңдағын эҙлә, ҡулыңдағын юғалтма.

* Алтын керһә, фәрештә юлдан сығыр.

* Артҡан малда бәрәкәт бар.

* Артыҡ дәүләт күҙ сығара.

*Вариант:* Артыҡ дәүләт башты ауырттырмаҫ.

* Аста ашаған амулыңды*, туҡҡа кергәс, онотма.

* Ата балаһына мал табыла.

* Ат ялһыҙ, егет малһыҙ булмаҫ.

* Атҡа менһәң, ат яҡшы,
Ергә төшһәң, ер яҡшы.

* Аттың күрке ял менән,
Егеттең күрке мал менән.

* Атай байлығы ергә һеңер.

* Атай байлығы улға йоҡмаҫ.

* Атай малы мал булмаҫ.

* Атай тапҡан малдың ҡәҙере юҡ.

* Атайың үлһә – маллы үлһен,
Ҡортоң үлһә – баллы үлһен.

* Атайыңда булғансы, алҡыныңда булһын.

* Байлыҡ башы – бер ҡаҙыҡ.

* Байлыҡ – бер айлыҡ,
Ҡәнәғәтлек – ҙур байлыҡ.

* Байлыҡ этлек менән табыла.

* Бал тамсынан йыйылыр.

* Бал тапмаған ҡорт булмаç,
Мал тапмаған егет булмаç.

* Бал тотҡан бармаҡ ялай,
Май тотҡан ҡалаҡ ялай.

* Бала тапмаç ҡатын булмаç – томарын әйт,
Мал тапмаç егет булмаç – тоторон әйт.

* Балыҡ лайлы ер эҙләй, әҙәм яйлы ер эҙләй.

* Бар – баҡыр, юҡ – алтын[252].

* Бар барын әйтер, юҡ юғын әйтер.

* Бар – барынса, юҡ – хәленсә.

* Бар ерҙән аҡмаһа ла тама.

* Бар өçтөнә бар һыя.

* Бар өçтөнә бар яҡшы, май өçтөнә май яҡшы.

* Бар сағында малдың ҡәҙерен бел.

* «Бар» тигән һүҙ – бал кеүек,
«Юҡ» тигән һүҙ – ут кеүек.

* Бар әйберҙең ҡәҙере юҡ.

* Барға бәлә һиҙелмәй.

* Барға һөйөнмә, юҡҡа көйөнмә.

* Барҙан бал тамыр.

* Барҙың бары ла бар, юҡтың өйө лә тар.

* Барҙың биргәнен алырһың,
Юҡтың ниен алырһың?

* Барҙың ҡәҙере юҡта беленер.

* Барлыҡ бар иткән, юҡлык тар иткән.

* Барлыҡҡа тарлыҡ юҡ.

* Бармаған ерҙә баҡыр бар, барһаң – тимер табылмаç.

*Вариант:* Бармаған ерҙә баҡыр бар,
Күрмәгән ерҙә көмөш бар.

* Барына ҡәнәғәт ит,

Юғына сабыр ит.

* Баш бөтмәһә, мал бөтмәç.

* Баш булһа – мал, аш булһа, ҡаҙан табылыр.

* Баш ике булмаһа, мал ике булмаç.

* Баш иçән булһа, мал табылыр.

* Башы уңмаçтың малы уңмаç.

* Бер бейә бейә булмаç,
Ике бейә донъя булмаç.

* Үҙ малын аҙһынған,
Кеше малын күпһенгән
Үҙ малына эйә булмаç.

* Бер ҙә юҡтан бар яҡшы.

* Береһен үлтермәйенсә, береһен тергеҙеп булмай.

* Бикле һандыҡта гәүһәр ятыр.

* Бирһәң, билең нығымаç.

* Боламыҡҡа май кәрәк,
Һәр нәмәгә яй кәрәк.

* Буштан килгән байлыҡ – бер айлыҡ.

* Бохарҙа малы барҙың күңеле көр.

*Вариант:* Бохарҙа малы барҙың ҡарыны туҡ.

* Бөгөнгө кәрәгеңде иртәнге кәрәгеңдән алда әҙерлә.

* Бөлгән йорттан бүлтерек алма.

* Булған әйбер тамағына һорамай.

* Бушлай килгән мал бушлай китә.

* Бушлай килгән мал булмаç.

* Был донъяның юҡлығы –
Бары ла аҡса юҡлығы.

* Бәрәшән ҡулда бәрәкәт юҡ.

* Бәрәшән тотоноп бәрәкәтте ҡасырма.

* Бәхет алға барғанда, мал арты менән дә керә.

* Ғәйрәтең барҙа мал тап.

* Ғәйрәтле ерҙә мал торор.

* Диңгеҙ төбөндәге ынйынан тау башындағы таш артыҡ.

* Донъя баçһа, тоҙ ҙа татлыға әйләнә.

* Донъя бөтөр, мәшәҡәт бөтмәç.

* Донъя йорто – мәшәҡәт йорто.

* Донъя йыйып ни эшләрһең,
Бер көн ташлап китерһең.

* Донъя көткәс, тоҙ ҙа кәрәк.

* Донъя көтөү – йылға кисеү түгел.

* Донъя ҡораманан йыйыла.

* Донъя малы – донъяла ҡалыр.

* Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны.

* Донъя нужаға ҡоролған.

* Донъя һыйыр ектерә.

* Дуғаңа ҡарап ҡыңғырау таҡ.

* Дәүләт килер булһа, ғашиҡ булған ҡыҙ кеүек,
Китер булһа, ҡулға тотҡан боҙ кеүек.

* Егет күрке мал менән.

* Егет маллы булһын, ат яллы булһын.

* Егет малы ер аçтында.

* Елдән килгән елгә китер.

* Еңел табылған елгә китә.

* Ерҙән тапһаң да һанап ал.

* Ике кәмә ҡойроғон тотҡан һыуға батыр.

* Илдән биҙҙергән дә мал,
Йыһан гиҙҙергән дә мал.

* Инәүле* мал юғалмай.

* Иңе килһә – буйы килмәй,
Буйы килһә – иңе килмәй.

* Ир күрке – мал,
Үҙәк күрке – тал.

* Ир табышы менән мырҙа.

* Ирҙең малы – илдең малы.

* Иртәнге кәрәгеңде бөгөн әҙерлә.

* Итәк ҡырҡһаң ең була.

* Итәгең менән йыйғанды еңең менән туҙҙырма.

* Иҫке йорттоң ҡәҙерен яңыһында белерһең.
* Иҫке өйҙө һүткәнсе, яңыһын һал.
* Иҫәпте иҫәп боҙор.
* Иҫәпһеҙ донъя юҡ.
* Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл.
* Ишек алдынан аҡҡан һыуҙың ҡәҙере юҡ.
* Иш янына ҡуш һыя.
* Йомарт ҡулға мал керер.
* Йөрөгән аяҡ мал табыр,
  Ятҡан аяҡ ял табыр.
* Йүгергән алыр, икеләнгән икенән берһеҙ ҡалыр.
* Йүгәнде тиҫкәре элмә: алғансы атың ҡасыр.
* Йүне барҙың көнө бар.
* Йыраҡ һал – яҡындан алырһың.
* Йыртыҡты ямаһаң да беленә, ҡаплаһаң да күренә.
* Йән биргәнгә йүн биргән.
* Кейеҙ йәйгән бер босмағына үҙе ултырыр.
* Кемдең ҡулында – шуның ауыҙында.
* Кергән малда бәрәкәт бар.
* Керемеңә күрә сығымы.
* Кеше малы мал түгел,
  Атай малы йәл түгел.
* Кеше малы кешәндәһәң дә тормаҫ,
  Үле малы үләндәһәң дә тормаҫ.
* Кеше ни эҙләһә, шуны табыр.
* Кеше малына ҡул һуҙған үҙ малынан изгелек күрмәҫ.
* Кеше малына нәпсеңде һуҙма.
* Кеше тапҡан аҡ ҡаластан үҙең тапҡан ҡара икмәк тәмлерәк.
* Кешегә кешенең малы, үҙенең аҡылы күп күренер.
* Кешенеке менән йорт һалма.
* Кешенеке менән кештәкле булма.
* Кешенекен тартып алған үҙенекен юғалтыр.
* Килгән дәүләт – киткән михнәт.

* Килер ерең киң булһын.
* Килеүенә күрә китеүе.
* Киткән менән килгән бер булмаç.
* Көнөн биргәнгә йүнен бирер.
* Күктән төшкәнде ел ала.
* Күп йыйнап зая иткәнсе, аҙ йыйнап мая ҡуй.
* Күптең һанын биргәнсе, аҙҙың бәрәкәтен бирһен.
* Күптә бәрәкәт, әҙҙә ни файҙа?
* Күсеп киткән – иçке йортонан ҡотолған.
* Кәрәк таштың ауырлығы юҡ.
* Ҡаҙанға һалмағанды ҡашыҡ менән эҙләмә.
* Кәрәк тирәкте йыҡтыра.
* Ҡаҙандың хәлен сүместән һора.
* Ҡайтҡан малда хәйер бар.
* Ҡайтҡан малда бәрәкәт бар, тапҡан малда рәхәт бар.
* Ҡалаҡлап йыйғанды табаҡлап түкмә.

*Вариант:* Ҡул менән йыйғанды итәк менән түкмәйҙәр.
* Ҡаты ерҙә ҡаҡ торор.
* Ҡаралты һалыуҙан элек түбәһен әҙерлә.
* Ҡарун кеүек мал йыйғансы, яҡшы исемең ҡалһын.
* Ҡарун малы – ҡар һыуы.
* Ҡоро ерҙә һыу тормаç.
* Ҡуймаған ерҙән эҙләмә.
* Ҡуйындағы – ҡулда, ҡуныстағы – юлда.
* Ҡул араға ҡул керһә – йорт эсенә ҡот керә,
  Ҡул аранан ҡул сыҡһа – йорт эсенә ҡорт керә.
* Ҡулдан киткән ҡулға кермәй.
* Ҡулында барҙың ауыҙында бар.
* Ҡулыңда барҙа ҡәҙерен бел.
* Ҡулыңдағын елгә сәскәнсә, ергә сәс.
* Ҡурай тартһаң, көй булыр
  Бүрәнә тартһаң, өй булыр.
* Ҡуя барһаң – ҡуй ҡала,
  Тарта барһаң – тай ҡала.

* Куянды ыскындырмайым тиһәң, этеңде ыскындыр.
* Кыҙғанғандың малын кыҙыл эт ашай.
* Мал бөртөкләп йыйыла.
* Мал бөттө тип уфтанма:
  Мал киммәт түгел, баш киммәт.
* Мал кешене байытмай, тота белеү байыта.
* Мал казаһы эткә якшы.
* Мал кәҙерен бай белер.
* Мал малды таба.
* Мал өсөн үҙ йәнен аямаған, кеше йәнен аямаҫ.
* Мал табылыр – иҫәп кәрәк.
* Мал табылыр – тота белеү кәрәк.
* Мал эҙләгән мал табыр.
* Малды таба белмәгән тота ла белмәҫ.
* Малды тапкан бакһын,
  Утынды тапкан якһын.
* Малды хәбеш* тә таба, тота белеү кәрәк.
* Малдың яйын баккан белер,
  Утындың яйын яккан белер.
* Малды тиле лә таба, тота белеүгә акыл кәрәк.
* Малды тота бел, ашты йота бел!
* Малһыҙ егет – һанһыҙ егет.

  *Вариант:* Егет кәҙере мал менән.
* Малын алма, хужаһын ал.
* Малың барҙа шөкөр ит,
  Малың юкта фекер ит.
* Малың булһа хәрәм,
  Үҙең булырһың әрәм.
* Мая башы – бер күкәй.
* Михнәтһеҙ тапкан мал иҫәпһеҙ китер.
* Ни юк булһа, шул танһык.
* Нужа күрмәгән кеше мал кәҙерен белмәҫ.
* Нужа күрмәй ир булмай.
* Нужа калас ашата.

* Нужа юкты таптыра, барҙы һаттыра.
* Өй артында кыуағың булһа, һандуғас кунағың булыр.
* Оло өйгә ни кәрәк, кесе өйгә лә шул кәрәк.
* Өйҙө һалғанда нигеҙҙән башла, һүткәндә түбәнән.
* Өйҙөң йәме мейес менән.
* Өйөнә килтермәгән иленә килтермәç.
* Өйһәң күп, таратһаң – етмәй.
* Өйә-өйә өй була.
* Өмөтһөҙҙөң итәгенә ярма һалһаң, абына-һөрөнә түгер.
* Сапкан алыр, яткан калыр.
* Сығар мал торна булып кыскырыр.
* Сығаһы малға эйәһе баш.

  *Вариант:* Сығаһы малға эйәһе яу (сәбәпсе).
* Таба белеү – бер һөнәр,
  Тота белеү – ун һөнәр.
* Табылмаған мал тары бөртөгөнән дә күп.
* Табылғандың киммәте юк.
* Табылмаған мал – тау саклы.
* Таллы күлдә һыу булмаç,
  Ярты акылда мал тормаç.
* Тапкан егет түгел, тоткан – егет.
* Тапһаң – тота бел,
  Капһаң – йота бел.
* Тауға карап тау булып булмай.
* Тауҙан килгән ташка китер.
* Тауҙан таш артмай.
* Тауҙың башын болот киçер,
  Ирҙең башын юк киçер.
* Таш сүлмәккә бәрелһә лә, ауырлык төшә сүлмәккә,
  Сүлмәк ташка бәрелһә лә, ауырлык төшә сүлмәккә.
* Тимер юл һалынды тип, арбаң ватма.
* Томорко өйҙә тын тарыға.
* Тора белмәгән гүрнисәне* кара келәт яһаған.
* Тормош тора белһәң – тормош,
  Тора белмәһәң – кормош.

* Тота белһәң, аҙ ҙа бәрәкәтле була.
* Тота белһәң – мал.
* Төлкө тотам тип, ҡуяндан ҡоро ҡалма.
* Төшлөк ғүмерең булһа, кислек мал йый.
* Төшөмдөң күктән төшкәнен көтөп ятмайҙар.
* Малды табанлап табалар.
* Түгелгән тулы булмаҫ.
* Түгелгән тупрағы менән тулмаҫ,
  Түгелмәйенсә лә булмаҫ.
* Түгелгәнде ялап ҡал.
* Тыйнаҡһыҙ өйҙә йәм тормаҫ.
* Тыуа байыҡма, тора байыҡ.
* Уңмаған юлды ҡыума.
* Урманға утын апармайҙар.
* Уртаҡ аттан тай артыҡ.
* Уртаҡ малды эт еймәҫ.
* Уртаҡ тауыҡтан яңғыҙ йомортҡа артыҡ.
* Уртаҡ һыйырҙан быҙау яҡшы.
* Уртаҡ әйбер эткә ҡала.
* Уттың көсөн ҡаҙан белер.
* Утынды алғандан яҡтыр,
  Малды тапҡандан баҡтыр.
* Үҙ күҙең үлек тергеҙгән.
* Үҙ ҡулың – донъя тотҡаһы.
* Үҙ малыңа дошман булһаң, кәфил* бул.
* Үҙе юҡтың күҙе юҡ.
* Үҙ өлөшөңдө ташлап, кеше өлөшөнә үрелмә.
* Үҙең тапмаған малдың ҡәҙере юҡ.
* Үҙең тырышып тапмаһаң, атай малы бер айлыҡ.
* Үлгән һыйыр һөтлө була.
* Үле мал үрсемәҫ.
* Файҙаһыҙ болот даръяға ауыр.
* Фал биргән малға ышанма.

* Хәйерһеҙ малдан хәйерһеҙ зыян артыҡ.

* Хәлле – хәленсә,
Юҡ – дарманынса.

* Хәләл кәсептең яманы юҡ.

* Хәләл мал кире ҡайта.

* Хәрәм малды эт ейер.

* Хәрәм малдың хәйере юҡ.

* Хәрәм төбө – әрәм.

* Хәрәмдән йыйылған мал әрәмгә китер.

* Һабы килһә – йәбе килмәй,
Йәбе килһә – һабы килмәй.

* Һаҡлап тотһаң – ун көнлөк,
Һаҡламаһаң – бер көнлөк.

* Һаҡлының һағы ятыр,
Һаҡһыҙҙың башы ятыр.

* Һанаулы мал юғалмаҫ.

* Һаран ирҙә мал торор.

* Һарауһыҙ һаҡлағанды ҡуймаҫ,
Ҡарға ҡаҡлағанды ҡуймаҫ.

* Һарауһыҙға һалам бирһәң,
Һорай-һорай һороға ҡалдырыр.

* Һауалағы торнанан ҡулыңдағы сәпсек артыҡ.

*Вариант:* Һауалағы торнаға алданып,
Ҡулыңдағы турғайҙы ебәрмә.

* Һауанан балыҡ эҙләмәйҙәр.

* Һыйыр биреп ат алма,
Келәт алып өй һалма.

* Һыуһыҙ ерҙә балыҡ тормаҫ,
Иҫәпһеҙ өйҙә байлыҡ тормаҫ.

*Вариант:* Һыуһыҙ ерҙә балыҡ тормаҫ,
Йүнһеҙ ирҙә байлыҡ тормаҫ.

* Һәр кемдең бармағы үҙенә табан кәкре.

* Һәр көндөң үҙ мәшәҡәте.

* Ышанма байлыҡҡа, төшөрһөң тарлыҡҡа.

* Эҙләгән ҡорт бал табыр,
Эшләгән кеше мал табыр.

* Эҙләгән табыр, һораған алыр.
* Эҙләгән эҙ табыр.
* Эҙләмәйенсә энә лә табылмай.
* Эйәһеҙ малға эйә күп.
* Эйәһеҙ малды ил алыр,
Ил алмаһа, ер алыр.
* Эт янында һөйәк ятмаҫ.
* Эшләп тапҡандың тоҙлоғо әсе булыр.
* Эшләп тапмаған малдың ҡәҙере юҡ.
* Әйберҙең ҡулда барҙа ҡәҙере юҡ.
* Юғалған бысаҡтың һабы алтын.
* Юғалтып табылған мал – улъя*.
* Юҡ тип көйөнмә, бар тип һөйөнмә:
Барҙан – юҡ булыр, юҡтан – бар булыр.
* Юҡҡа алданып, барҙан буш ҡалма.
* Юҡлыҡтың көнө ҡаты, барлыҡтың йөҙө яҡты.
* Юҡты кәрәк таптырыр, яңғыҙ атты һаттырыр.
*Вариант:* Юҡты кәрәк таптыра.
* Юҡты юҡ итһәң, бар булыр.
* Юҡтың күңеле юрға теләр.
* Юрғанына ҡарап аяғыңды һуҙ,
Арбаңа ҡарап йөк һал,
Атыңа ҡарап юлға сыҡ.
* Яҙған мал кире ҡайта.
* Яҙған мал төшөңдә һындырып инер.
* Яҡшы ат* малдан артыҡ.
* Яҡшы балаға атай малы кәрәкмәй,
Яман балаға мал ҡалдырыу кәрәкмәй.
* Яҡшы мал эйәһен табыр.
* Яҡшы хужа юҡты бар итер,
Яман хужа барҙы юҡ итер.
* Яҡшы әйбер күп булмай.
* Ярлы йәшәү оят түгел, бысраҡ йәшәү оят.
* Ятҡан аяҡ ял табыр,
Йөрөгән аяҡ мал табыр.

* * *

* Аҙбары бар, аты юҡ.

* Айыу ҡыуып – ҡуян тотҡан.

* Асыҡ та тишек, тәҙрә лә ишек.

* Ата малы мал түгел,
Хөкүмәттеке йәл түгел.

* Ат бар – арба юҡ,
Ҡаҙан ҡайнай – ярма юҡ.

* Аты булһа, ҡамыты булмай.

* Аты юҡ, кәртә төҙәткән.

* Атын алдырғас, ҡапҡаһын бикләгән.

*Вариант:* Атын урлатҡас, һарайын нығытҡан.

* Атын юғалтҡан, йүгәнен эҙләй.

* Байлыҡҡа сама юҡ, егергә сана юҡ.

* Баҡса эйәһенә түтәл юҡ.

* Бары – бергә,
Юғы – уртаҡ.

* Бары менән байрам.

*Вариант:* Бары менән бәрәкәт.
Бары менән туҡ.
Бары менән мәғзур*, юғына Хоҙай әҙер.

* Барын-юғын белмәйҙер, май теләйҙер тамағым.

* Бары – яҡшы, юғы – яман,
Алла дигел (диген?) бәдуан*.

* Башымды байға һалһам да, кәрәгемде табырмын.

* Берен тапһаң, бере юҡ.

* Берәүгә мал ҡайғыһы, берәүгә баш ҡайғыһы.

* Бото бер тин.

* Дәрттә бар, фарманда юҡ,
Дарманда булһа, карманда юҡ.

* Ике йортҡа – бер киҫәү[253].

* Ике һигеҙ – бер тигеҙ.

* Итәктән тартһаң еңгә, еңдән тартһаң итәккә етмәй.

* Йомһа – йоҙроғонда,
Асһа – усында.

* Йорт башы ҡашыҡтан башлана.
* Йә мал, йә йән (тип йөрөй).
* Кейеҙ өйөм – буҙ өйөм,
  Керһәм, сыҡһам – үҙ өйөм.
* Көлөндә аунаһын, көнөн күрһен.
* Күктән эҙләгәнде ерҙән бирҙе.

  *Вариант:* Күктән көткән – ерҙән тапҡан.
* Кәрәк саҡта алтынға ҡарағанда балсыҡ артығыраҡ.
* Ҡаҡҡан ҡаҙығы ла юҡ.
* Ҡуй өҫтөнә турғай оялай[254].
* Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған.
* Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡиммәт.
* Ҡышҡа керһә эт тә: «Йәйгә сыҡһам һөйәктән һарай һалыр инем», – тип әйтер, ти.
* Малыңа бәрәкәт, йәнеңә һаулыҡ!
* Мейессенә ут керҙе, өйгә ҡот керҙе.
* Миндә булһын,
  Миндә булмаһа ла, илдә булһын.
* Өй һалыуҙың ни ҡыйынлығы бар, мүкләйһе лә сутлайһы*.
* Өйһәң күп, өләшһәң әҙ.
* Сүп булһын да, күп булһын.
* Тапҡанын эт ашар, арҡаһын бет ашар.
* Тауҙар – илем, урман – өйөм[255].
* Таяҡ барҙа ҡуян осрамай, ҡуян осрағанда таяҡ булмай.
* Төлкөһөнән бигерәк көлкөһө ҡыҙыҡ[256].
* Туҡһан ямау, ҡырҡ терәү.
* Улай тартһаң – арба ватыла,
  Былай тартһаң – ат үлә.
* Ун икенең бере юҡ.
* Үгеҙ эйәһенә ҡарта юҡ.
* Үҙебеҙ тапҡан мал түгел,
  Атайҙыҡы йәл түгел.
* Үҙем тартҡан ҡартам, тешләйем дә тартам.
* Һыйыр мөгөҙөнә элерлек мал юҡ.

* Ырыҡтыҡы – шырыҡҡа.
* Ыҙғышлы өйгә ут төшөр.
* Эсе менән тышы булһа,
Тун тегер инем,
Энә менән еп кенә юҡ.
* Эт ашағансы бет ашаһын.
* Әҙәмдең күҙе туймай.
* Юҡтың башы ауыртмай[257].

*Вариант:* Юҡтың башын ауырттырма.
* Юҡтың яуабы юҡ.
* Ярмаһын күршеһенән, тоҙон кешенән.

## 6. Алыш-биреш, бүләк. Аҡса, баҙар

* Айран һорап килһәң, туҫтағыңды йәшермә.
* Аҡ аҡса ҡара көн өсөн.
* Аҡса аҡсаны ярата.
* Аҡса аҡыл таптыра.
* Аҡса – баҡса емеше түгел.
* Аҡса барҙа бары ла дуҫ.
* Аҡса бөткәнгә ҡайғырма, эш бөткәнгә ҡайғыр.
* Аҡса бөткәс аҡыл керә.
* Аҡса бөтә донъяны гиҙә.
* Аҡса – донъя иманы.
* Аҡса иҫәпте, аҡыл үлсәүҙе ярата.
* Аҡса кемдеке – мал шуныҡы.
* Аҡса кешене кешегә ят итә.
* Аҡса ҡалала ҡала.
* Аҡса сыҡмай аҡса кермәй.
* Аҡса тапҡансы аҡыл тап.
* Аҡса таш киҫтерә.
* Аҡса һанағанды ярата.
* Аҡса – һанаулы, аҡсалы – танаулы.

* Акса эсте тишмәй.
* Акса янына акса һыя.
* Аксаға һат, аксаға һатылма.
* Аксалының кулы уйнай,
  Аксаһыҙҙың күҙе уйнай.
* Аксалының эше күп.
* Аксаны акса таба.
* Аксаны ахмак та ярата.
* Аксаны бирәү ҙә һыуға атмай.
* Аксаның йоҙағы – һаран,
  Ашлыктың йоҙағы – һалам.
* Аксаның күҙе юк.
* Аксаң бөттө – кәҙерең бөттө.
* Аксаң булмаһа ла, выжданың булһын.
* Аксаһыҙ баҙарға барғансы, кәфенһеҙ гүргә кер.
* Акыллы акса йыя, акылһыҙ таш йыя.
* Ала белһәң, бирә бел.
* Ала карҙа ла аласағың булһын[258].

  *Вариант:* Ала карғала аласағың булһын,
  Бирәсәгең булмаһын.
* Аласак менән бирәсәк бөтмәй.
* Аласағың булһын, бирәсәгең булмаһын.
* Алаһы тауар – мең алтын.
* Алған алғанда кала.
* Алған – алғандыкы, ат – менгәндеке.
* Алған кулдан биргән кул өҫтөн.
* Алған менән биргән бер түгел,
  Сыккан менән кергән бер түгел.
* Алғанға алты ла аҙ, биргәнгә биш тә күп.
* Алғандың бирәһе бар.
* Алғансы бирерәңде уйла.
* Алғаныңа карап шөкөр ит,
  Алырыңа карап фекер ит.
* Алма һигеҙҙе, ал һимеҙҙе.

* Алмаҡ күрке – бирмәк.

* Алмаҡ – туй һалмаҡ[259].

* Алмаҡтың да бирмәге бар,
Уйындың да ирмәге бар.

* Алтыға алып, бишкә һатмайҙар.

* Алтыға алып бишкә һат, атың* булһын һатыусы.

* Алтын алма, аҡыл ал,
Алтын – аҡыл була алмаç.

* Алтын алма, алғыш* ал.

* Алтын-көмөш күп ерҙә фетнә сыға.

* Алтын күҙҙе тондора.

* Алтын комһоҙҙоң күңелен ташҡа, күҙен аҡҡа әйләндерә.

* Алтын өсөн баш китә.

* Алтынға иçе киткән –
Аҡылынан ситкә киткән.

* Алтынға эйәргән юғалған,
Аҡылға эйәргән юл алған.

* Алырмын тигән алдан ингән.

* Алырын белгәс, биререн дә бел.

* Алыу өйрәтмәй, һатыу өйрәтә.

* Алыуҙан биреү яҡшы.

* Алыуҙан элек һатыуыңды уйла.

* Алыуҙың биреүе бар.

* Алыш-биреш – мыçҡал менән.

* Арзан тауар ярлы кешенең малын бөтөрә.

* Арзанлы иттең тоҙлоғо татымай.

*Варианттары:* Арзанлының һурпаһы татымай.
Осһоҙ алған тәмле ашамаç.

* Ас торһаң да бурысың булмаһын.

* Аçылын һорамай аш бирмә,
Атаһын һорамай мал бирмә.

* Ат алғансы, һарайың әҙерлә.

* Ат алһаң, арба кәрәк.

* Ат алһаң, ауылыңдан алма.

* Ат алһаң, ауылына тартыр.
* Ат алһаң, һынап ал; аҡса тапһаң, һанап ал.
* Ат алыу – ҡатын алыу түгел
(Уңмаһаң, ташлап булмай).
* Ат һатһаң ауылың менән,
Ауылың менән булмаһа,
Бүрегең менән кәңәш ит.
* Ат эйәһенә килгәс, аҡһамаһын.
* Ат яҡшыһы санала беленә,
Ир яҡшыһы баҙарҙа беленә.
* Атты ҡамытҡа үлсәп алмайҙар,
Ҡамытты атҡа үлсәп алалар.
* Атты йүгәненән башҡа һатмайҙар.
* Ауырыуын йәшергән үлер,
Бурысын йәшергән бөлөр.
* Ауырыуың булһа булһын,
Бурысың булмаһын.
* Ахмаҡ бирер, аҡыллы алыр.
* Баҙар – аҡсалыға баҙар, аҡсаһыҙға – маҙар.
* Баҙар аҡсаны ярата.
* Баҙар ҡиммәт булһа, һатыусынан оят ҡаса,
Баҙар арзан булһа, алыусынан оят ҡаса.
* Баҙарға барып, бағынды* һына.
* Баҙары яҡын байымаҫ.
* Баҙарҙың башы ауырымаҫ.
* Байыған ярлынан бурыс алма.
* Балыҡ бирһәң, бәйләп бир,
Башын-күҙен сәйнәп бир.
* Бар булһаң, биргәнеңде әйтмә,
Ир булһаң, еңелгәнеңде әйтмә.
* Барын биргән оялмаҫ.
* Батшаһыҙ тороп була, аҡсаһыҙ тороп булмай.
* Башлай белһәң, бөтөрә бел,
Ала белһәң, килтерә бел.
* Белдекле ир биргән малын кире алмаҫ.
* Бер биргәнде кире ҡайтарып алмайҙар.

* Бер бирмәһәң – мең биргәнең юғалыр.

* Бер тин – бер аҡса,
Ике тин – күп аҡса.

* Бер тин сыҡҡансы, ике тин керһен.

* Биргән бейгә яраған,
Бирмәгән нигә яраған?

* Биргән – ҡулда,
Алған – юлда.

* Биргән менән мал бөтмәй.

* Биргәндең бите яҡты.

* Биргәндең битенә ҡарама.

* Биргәндең битенә төкөрмә.

* Биреп насар булғансы, бирмәйенсә насар бул.

* Бирер бүләгең булмаһа, һыйпамаға телең булһын.

* Бирмәҫтең һылтауы күп.

* Бирмәһәң – бер яман,
Бирһәң – ун яман.

* Бирһәң, билең ныҡымаҫ.

* Бирәсәгеңде биреп ҡотол.

* Бирәсәгеңде биреп ҡотол,
Ауырыу булһаң, үлеп ҡотол.

* Бирәсәгең бирмәй, гүргә инеп булмай.

* Бирәһе бар онотор, алаһы бар онотмаҫ.

* Биш сыҡмай алты кермәй.

* Бурыс алып, дуҫлығың онотма,
Бурыс биреп дошманың күбәйтмә.

* Бурыс алыу – буйһоноу.

* Бурыс ашағансы борос аша.

* Бурыс биреү анһат, алыу ҡыйын.

* Бурыс юлы – байлыҡ,
Ауырыу юлы – һаулыҡ.

* Бурыслының теле ҡыҫҡа.

* Бурысты үтәү – үҙе бурыс.

* Бурысһыҙ үлмәҫ,
Бурыслы тыныслыҡ күрмәҫ.

* Бурысһыҙ ярлы бурыслы байҙан байыраҡ.
* Бурысһыҙ ярлылыҡ – үҙе байлыҡ.
* Бушлай килгән бушҡа китер.
* Бүләк биргән бүләк көтә.
* Бүләк ҙур булмаҫ.
* Бүләге ҡиммәт түгел, биргәне ҡиммәт.
* Бүләккә ҡаршы бүләк шарт.
* Бүләкте алырға яратһаң, бирергә лә ярат.
* Бүләкте кире бирмәйҙәр.
* Бүләктең бәләкәйе булмай.
* Бәлә башы – бер аҡса.
* Дөйә лә бүләк, төймә лә бүләк.
* Дуҫ биргәндең тешен ҡарама.

*Тулы әйтелеше:* Дуҫың биргән аттың тешен ҡарама.

* Зыян күргән ерендән файҙа көтмә.
* Ике биргән бер көтә, бер бирмәгән ни көтә?
* Ике иҫәп – бер хисап.
* Ил өҫтөндә илле алтын.
* Илтеп бирһәң, көтөп алырһың.
* Итек кейһәң – ҡунысы ҡала,
  Һатыу итһәң – бурысы ҡала.
* Итек ҡунысһыҙ булмаҫ,
  Донъя бурысһыҙ булмаҫ.
* Иҫәп, иҫәп белмәгән – ишәк.
* Иҫәпле булһын алғаны,
  Хәйерле булһын ҡалғаны.
* Иҫәбе юҡтың бары ла теүәл.

*Вариант:* Иҫәпһеҙҙең малы (ҡуйы) теүәл.

* Иҫәбенә күрә хисабы.
* Йоҡо һимертә, аҡса тилертә.
* Йүкә алһаң да, ҡайыш бир.
* Йүкә өҙһәң, ҡайыш түләрһең.
* Йыраҡ һал – яҡындан алырһың.

* Йән ҡыйналмай йомош бөтмәй.
* Кергән – файҙа, сыҡҡан зыян.
* Кеҫәгә оят килһә лә, йөҙгә оят килмәһен.
* Кеҫәһе барҙың ҡәҙере бар.
* Кешенең яҡшыһы алыш-бирештән билдәле.
* Кешенән алыуҙан биреү яҡшыраҡ.
* Көлгәндән алма, бөлгәндән һорама.
* Көнбағыш һабағы менән һатылмай.
* Күп һоралмаһа, аҙ бирелмәҫ.
* Кәзә биргән ҡуй алыр,
  Һис бирмәгән ни алыр?
* Кәрәкмәгән нәмәне алһаң, кәрәгеңдә һатырһың.
* Кәсеп итмәй табыш булмай.
* Ҡаҙ өсөн тауыҡ йәл түгел.
* Ҡайтҡан малда бәрәкәт бар.
* Ҡайһы ҡулың менән бирһәң,
  Шуныһы менән алырһың.
* Ҡайыш биреп йүкә алмайҙар.
* Ҡиммәт барҙа һиммәт бар.
* Ҡиммәт – хикмәт, осһоҙҙоң һурпаһы татымай.
* Ҡолонло бейәнән ҡойо һыуы артмаҫ,
  Йүнһеҙгә аҡса бирһәң, әйләнеп ҡайтмаҫ.
* Ҡомған хаҡын сүлмәк сығарыр.
* Ҡоро ҡулға ҡош ҡунмай.
* Ҡулың менән тартһаң, аяғың менән йыйырһың.
* Мал алһаң, һатыулашып ал.
* Мал малдан үҫә, аҡса тиндән үҫә.
* Малды һатыу еңел, табыуы ауыр.
* Малдың кәҙерен бурыс һорағанда белерһең.
* Маяң* булһа зая булмайһың.
* «Мә» тигәндә алмаһаң, «бир» тигәндә табалмаҫһың.
* Ни кәрәк – шул ҡиммәт.
* Өйҙәге иҫәпте баҙарҙағы хаҡ боҙа.

* Өйҙәге уй баҙарға ярамаҫ.
* Өйрәк бирмәк, ҡаҙ алмаҡ.
* Өҫтәү алған эт менән өҫтәү биргән ат менән.
* Саҡыралар тип, танауың һуҙма,
  Бирәләр тип, ҡулың һуҙма.
* Сауҙәгәргә эйәргән алтыға алып, бишкә ебәргән.
* Ситтәге һыйыр – бер аҡса,
  Килә-килә – мең аҡса.
* Таныш булһа, уңышы менән булһын.
* Табышһыҙ егеттән ҡолонлаған бейә артыҡ.
* Тамсы йыйылып, күл яһай,
  Тин йыйылып, һум яһай.
* Тана һыйыр сыҡмай, оло һыйыр инмәй.
* Тиленең аҡсаһы торна булып ҡысҡырыр.
* Тимерселә балта булмай,
  Һатыусыла аҡса булмай.
* Тоторға аҡса булһа, алырға мал табылыр.
* Төймәләй ҙә йомош, дөйәләй ҙә йомош.
* Түгелгәндән ялап ҡал.
* Тышлығын биргәс, эслеген дә бир.
* Тәңкә тиндән үҫер,
  Йылҡы ҡолондан үҫер.
* Уң ҡулың биргәнде һул ҡулың белмәһен.
* Утын бирһәң һыуын да бир.
* Үҙ кеҫәһе буш кеше, кеше кеҫәһендәген һанаусан.
* Үҙе туймағандан һарҡыт һорама.
* Үҙең тапмаған аҡсаның ҡәҙере юҡ.
* Үҙең ярлы булһаң да, аҡсаң күп булһын.
* Үтенмә, үкенескә ҡалырһың.
* Үтес араһына һыу кермәҫ.
* Файҙа менән зарар – бер туған.
* Хаҡлы нәмә – затлы нәмә.
* Хеҙмәт хеҙмәт менән, йомош йомош менән.
* Хәйерһеҙ файҙанан хәйерле зыян артыҡ.

* Һайлап биргән, һайлап алыр.
* Һанамай алма, һанамай бирмә.
* Һарауысты* һанап бир, биҙәктәрен ҡарап бир.

*Вариант:* Һарауысты һанап бир,
Түңәрәген ҡарап бир.

* Һаттың – юғалттың,
Алдың – таптың.
* Һатыусы һығып ала:
Икене бергә һала,
Берҙе юҡҡа һала.
* Һорап биргәнсе, һуғып бир.
* Һорау – бер яман, бирмәү – ике яман.
* Һөйләшмәй һатыу – күкрәккә ҡатыу.
* Һөт һораһаң, сеүәтәңде,
Ат һораһаң, йүгәнеңде йәшермә.
* Һыйыр алһаң, һауып ал,
Һөтөн-майын ҡабып ал.
* Һыйыр кемдеке булһа, быҙау ҙа уныҡы.
* Һынамаған кешенән бурысҡа алма.
* Һыуға таянма, алтынға алданма.
* Һәнәге ҡиммәт түгел, һаплағас ҡиммәтләнә.
* Энә лә – йомош,
Төймә лә – йомош.
* Эт күңеле – бер һөйәк.
* Эткә йомош ҡушһаң, һөйәк һөйрәп килтерер.
* Эсәге биргән ҡуй алыр, һис бирмәгән ни алыр?
* Әҙәм булһаң, аҡсаға ялынма, түрәгә табынма.

*Вариант:* Әҙәм булайым тиһәң, аҡсаға йән атма.

* Әжәл менән бурыстан ҡотола алмаҫһың.
* Юҡ аҡсаға янсыҡ текмә.
* Юлдан тапһаң да һанап ал.
* Яҡшы аттың тешен ҡарама.
* Яҡшы кешене йомошоң төшкәндә белерһең.
* Яҡшы малды алыусы күп.

* Яҡшы тауар үҙен-үҙе маҡтай.

* Ялҡауҙың атын алма, йөрөмһөҙ булыр.

* Ямандан бурыс алма, йорт алдында яғандан алыр.

* Ямандан бурысҡа алма:
  Йә һабантуйҙа, йә мәжлестә һорар.

  *Вариант:* Яманға бирәһең булмаһын:
  Йә туйҙа һорар, йә йыйында.
  Ямандан бурысҡа алһаң,
  Тар ерҙә һорап, йәнеңде ҡыйыр.

* Ямандың атын алғансы, яҡшының тайын ал.

* Ямғыр менән ер йәшәрә,
  Аҡса менән ир йәшәрә.

* Яңы байығандан бурысҡа алма.

* Ярлы кешенең аҡсаһын алама тауар бөтөрөр.

* * *

* Аҡса баҡыр – һанарға таҡыр.

* Аҡса батшаны еңгән.

* Аҡса күп – аҡылы юҡ.

* Аҡсалы хәйерсе.

* Алабута аш икән,
  Баҡыр аҡса таш икән.

* Алғанда – бисмилла,
  Биргәндә – әстәғәфирулла!

* Алғанда бер үҙем дә алған инем,
  Һатҡанда атам менән дә һата алманым.

* Алты тин аҡсаһы юҡ – баҙарҙа ат һатыулашҡан.

* Алты тин файҙа итәм тип, алтмыш тин аҡсаһын сығарған.

* Алты тинлек ҡуян, алтмыш тинлек зыян.

* Аты юҡ арба һатыулашҡан.

* Алыш-биреш артҡа тибеш.

* Аяҡ урынына – тояҡ.

* Баҙар бай, кеҫә һай.

* Баҫыуға бармай, баҙарҙан ҡалмай.

* Баш урынына – ҡолаҡ,
Аяҡ урынына – тояҡ.

* Бер ҡулы менән бирә, икенсеһе менән ала.

* Бер файҙа – файҙа,
Ике файҙа ҡайҙа?

* Берәүгә үгеҙ ҡиммәт,
Берәүгә мөгөҙ ҡиммәт.

* Биргәнгә бирәйеш,
Бирмәгәнгә серәйеш.

* Бирҙем берәй, килдем һорай.

* «Бир»ҙең атаһы үлгән.

* Биреп ебәр ҡулдан, эҙләп йөрө юлдан.

* Бирә-бирә – бирән булырһың.

* Буштың атаһы үлгән.

* Даръяға ямғыр яуғандан,
Далаға ни файҙа?

* Дөйәләй биреп, төймәләй алдым.

* Ике һылтау – бер йомош.

* Илдекенән ике иле артыҡ.

* Итсегә – ит ҡайғыһы,
Кәзәгә йән ҡайғыһы.

* Иҫәпле булһын алғаны,
Хәйерле булһын ҡалғаны.

* Кәзәгә кеҫәм етмәй, һыйыр һатыулашам.

* Ҡулдан үтте – эш бөттө.

* Ҡулың менән бир – аяғың менән йөрө.

* Минән хәйер, һинән фатиха.

* «Мә һиңә» лә, «бир миңә».

* Утҡа кергән – кис ҡунған[260].

* Үгеҙ булмағайы сурт* булһын,
Балаларға һөт булһын[261].

* Үҙенекен бирмәҫ, кешенекен алмаҫ.

* Хазина таптым – сүпкә аттым,
Алтын таптым – бушҡа һаттым.

* Хаҡ ярым хаҡ, бот ярым борсаҡ.

* Хаҡын баҙар әйтер.
* Хисапһыҙҙың малы теүәл.
* Һанамаған, бары ла бар.
* Һатам – аҡсаһына батам.
* Һатып алған – һарымһаҡ.
* Һыйыр һауған үгеҙ аҫрағандан һөт һорай.

*Вариант:* Һыйыр һауған кәзә һауғанға һөткә барған.

* Эйәһе һүҙһеҙ – аҡсаһы күҙһеҙ.
* Юрған да китте – тауыш та бөттө.

## 7. Аш һыу, һый-хөрмәт, ҡунаҡлашыу, байрамдар

* Абайламай ашаһаң, ауыҙың бешер.
* Ағы* барҙың туғы бар.

*Вариант:* Ағы барҙың һағы бар.

* Аҙ аша – йыш аша.
* Аҙ ашаған май ашар,
  Күп ашаған лай ашар.
* Аҙ ашаһаң, тағы ашарһың,
  Күп ашаһаң ни ашарһың?

*Вариант:* Аҙ ашаған күп ашар,
Күп ашаған ни ашар?

* Аҙ булһын, тәмле булһын.
* Аҙ ҡап – ҡаҙ ҡап.
* Аҙҙың аҙығы бергә.
* Аҙғын тапһа, айырым ашар.
* Аҙыҡлы ҡунаҡ ҡупрайыр.
* Аҡ ашаған арымаҫ.
* Аҡ һөттөң апаһы – һауынсының һапаһы*.
* Аҡшам ваҡыты – ашам ваҡыты.
* Алабута аш булмаҫ,
  Алтын-көмөш таш булмаҫ.
* Алдыма килде тип тығынма: ҡоҫоуың бар.
* Алдыңа ҡуйған ашты хурлама.

* Алты йәштәгенекен ашама.

* Алты ҡабып ат туйһын,
Ете ҡабып ир туйһын.

* Алты ҡатын ашҡа килһә, аштың быуы күренмәй.

* Араҡы аш булмаç, бауырға таш булыр.

* Араҡы һүҙҙе оҙайта, ғүмерҙе ҡыçҡарта.

* Араҡы эскән әжәле етмәй үлер.

* Араҡы яратҡан – аҡылын таратҡан.

* Арыш икмәге ашаһаң, быуының ныҡ булыр.

* Ас айыу уйнамаç.

* Ас атаһын тыңламаç.

* Ас кеше ашап туймаç.

*Вариант:* Ас кешегә аш йәм,
Туҡ кешегә бүрек йәм.

* Ас кешенең асыуы яман.

* Ас ҡорһаҡ аш талымламаç.

* Ас ҡорһаҡҡа – ҡаты сәй.

* Ас өйҙә ҡатыҡ ойомаç[262].

* Ас сағыңда ни ашағаныңды туҡ сағыңда онотма.

* Ас туймам тип, туҡ асыҡмам тип уйлар.

* Ас һуғышыр, туҡ килешер.

* Асҡа бер ҡашыҡ аш алтындан ҡиммәт.

* Асҡа бар аш та тәмле.

* Асҡа кәңәш биргәнсе, күмәс бир.

*Вариант:* Асҡа хикмәт өйрәткәнсе, икмәк бир.

* Асҡа шайтан да сыҙамаған.

* Аслыҡ бүрене урмандан сығара.

* Аслыҡ ғазабын күрмәгән – икмәк ҡәҙерен белмәгән.

* Аслыҡ ҡапсыҡ астырыр,
Иманыңды һаттырыр.

* Аста күргән ҡойҡаңды*, туҡта күргәс, онотма![263]

* Астан ҡаҙан аçтырма, туңдан утын яҡтырма.

* Астан ҡаҙан аҫтырма, туҡтан туҡмас баҫтырма.

* Астың күҙе ашта.

* Астың күңеле икмәктә,
Туҡ күңеле хикмәттә.

* Астың үҙе туйһа ла күҙе туймай.

* Астың хоҙаһы – бер телем икмәк.

* Асыҡ ауыҙ астан үлмәҫ.

* Асыҡһаң да сама менән аша.

* Аҫыл ҡоштоң балаһы алдына ҡуймай аш ешмәй.

* Ат ҡәҙерен атлы белмәҫ,
Аш ҡәҙерен ашлы белмәҫ.

* Ат ҡәҙерен белмәгәнгә йәйәүлек бирер яҙаһын,
Аш ҡәҙерен белмәгәнгә аслыҡ бирер яҙаһын[264].

* Ат – әҙәмдең ҡанаты,
Аш – кешенең ҡеүәте.

* Аш кәҙерен эт белмәҫ.

* Атһыҙ өй булһа ла,
Ашһыҙ өй булмаҫ.

* Аты-туны бар кешелә алпамыштың көсө бар,
Тамағы туҡ кешенең тәңрелә ни эше бар?

* Ауыҙ ашай, күҙ ояла[265].

* Ауыҙы ашҡа тейһә, алйот ҡоторор.

* Ауыҙы бар асҡа үлмәҫ.

* Аш ашаған арымаҫ,
Арыһа ла ауырымаҫ.

* Аш ашаған һайын артмаҫ.

* Аш – ашҡа, урыны – башҡа.

* Аш үткәндә аш аша, кейем килешкәндә кейем кей.

* Аш бар ерҙә бәрәкәт бар.

* Аш ҡалһа – дәүләт,
Эш ҡалһа – имгәк.

* Аш ҡәҙере ете сәғәт,
Ашыкҡанда ярты сәғәт.

* Аш ҡәҙерен ас белер, тун ҡәҙерен яланғас белер.

* Аш ҡәҙерен белмәһәң, аслыҡ бирер яҙаңды.

* Аш ҡәҙерен белмәгән өй хужаһын оялтыр.

* Аш табағы аша атланма.

* Аш табылыу – бер бәхет,
Ашарға иш табылыу – бер бәхет.

* Аш ташты иретер.

* Аш теләгән аш табыр,
Эш теләгән эш табыр.

* Аш һалҡыны һыуытмаҫ,
Һыу һалҡыны һыуытыр.

* Аш эйәһе менән татлы.

* Аш эйәһе аш ашай,
Кемгә яҙған шул ашай.

* Ашаған белмәҫ, тураған белер.

* Ашаған кеше янында аш үтә.

* Ашаған менән мал бөтмәҫ,
Бәлә килһә, мал төшмәҫ.

* Ашаған тамаҡҡа ни бармаҫ (самалабыраҡ аша).

* Ашаған һайын артмаҫ, килер ере булмаһа.

* Ашағандың биле ныҡ.

* Ашағаның-эскәнең урынында ҡалһын[266].

* Аш тәме белмәгәнгә аш оҡшамай.

* Ашамаған арғымаҡ ҡайыраҡҡа моң булыр.

* Ашар ашыңдан йәшәр йәшең күп булһын.

* Ашар өсөн йәшәмә, йәшәр өсөн аша.

* Ашатмаҫтың ашы бешмәҫ.

* Ашҡа барһаң – ашап бар,
Туйға барһаң – туйып бар.

* Ашҡа килһәң, элек кил,
Үҙ кәҙереңде белеп кил.

* Ашҡынған ашһыҙ ҡалыр.

* Аштан оло булма.

* Ашты һеңгәс, маҡта.

* Аштың бәрәкәте ҡунаҡ менән.

* Аштың тәме тоҙ менән.

* Аштың тәме хужанан.
* Аштың тәмен ҡашыҡ белмәҫ.
* Ашы ашҡа, урыны башҡа,
  Урыны башҡаның көнө башҡа.
* Ашы булһа ҡаҙаны табылыр.
* Ашы тиҙҙең эше тиҙ.
* Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы.
* Ашың күп булһа, бисмилла кәрәкмәй.
* Ашың күп булһа, дуҫың күп булыр.
* Ашыңды ашаған башыңды ашар.
* Ашыңды биргәс, ҡашыңды бир[267].
* Байрам ашы – ҡара ҡаршы.
* Байрам етһә таптырыр,
  Ат урынына саптырыр.
* Бал балсыҡ ашата,
  Балан ҡамыр ашата.
* Бал ҡапҡан – ауыҙ япҡан,
  Асыҡҡан – ауыҙ асҡан.
* «Бал, бал» тип әйтеү менән ауыҙ тәмләнмәй.
* «Бал» тиһәң – бер кәмей,
  Бармаҡ тейһә – ике кәмей.
* Бал тотҡан бармаҡ ялар,
  Һөт тотҡан ҡаймаҡ ялар.
* Бал бармаҡ тешләтер.
* Бал тәмле тип бармағыңды тешләмә.
* Бал тәмле лә ҡорт саға.
* Бал – хәләл, араҡы – хәрәм.
* Балдың тәмен айыу белә.
* Балын яратһаң, бәләһен дә ярат.
* Балың булмаһа ла, баллы телең булһын.
* Балалы ҡунаҡ – бәләле ҡунаҡ.
* Балан бал менән тәмле,
  Бал баланһыҙ ҙа тәмле.
* Балыҡты тотҡан уңмаҫ,
  Ашаған туймаҫ.

* Бар барын ашар,
Оятһыҙ ғәрен ашар.

* Бар янында бар яҡшы,
Сәй янында бал яҡшы.

* Барында батырып аша.

* Бауыр – ашарға ауыр.

* Баш ашаған баш була,
Ҡойроҡ ашаған ҡойроҡҡа ҡала, имеш.

* Баш биргәнгә аш бирер.

* Баш булһа – мал,
Аш булһа – ҡаҙан табылыр.

* Баш һөйәге – башлауға, туларһығы* – ташлауға.

* Башты баш иткән – аш.

* Бер ашап туйған кешегә бал да бер, боламыҡ та бер.

* Бер көн тәғәм итһәң, ҡырҡ көн сәләм бир.

* Бер ҡунаҡ – шатлыҡ,
Ике ҡунаҡ – артыҡ,
Өс ҡунаҡ – йөк.

* Бер аяҡ ҡымыҙҙың ике аяҡ еле бар.

* Бер тинлек эсеп, өс тинлек иҫермә.

* Бергә аш ейгән – бергә баш эйгән.

* Берәүҙең өйрәген ашаһаң, ҡаҙыңдың ботонан тотоп тор.

* Берәүҙә түш ите ашаһаң, үҙең оса ите әҙерлә.

* Бешеүе килһә, төшөүе килер.

* Бирмәҫтең ашы бешмәҫ,
Ҡаҙаны уттан төшмәҫ.

* Бирәнгә биргәнең етмәҫ.

* Бойорған аш теште һындырып инер.

* Боламыҡ аш түгел.

* Борай бутҡаһы ҡаҙ өмәһендә тәмле.

* Борос әсе булһа ла аштың тәменә дарыу.

* Боҫло ашты бора баҫма[268].

* Бутҡа бешерһәң, майың етерлек булһын.

* Бутҡа майҙан туймай.

* Буткаң майлы булһа, эшең яйлы булыр.
* Бүре аҙығы буранда[269].
* Бүрегә ҡунаҡҡа барһаң, этеңде ҡалдырма.
* Бәлеш булһа, белеш табыла.
* Бәндәне ризыҡ йөрөтә.
* Бәрәкәтле аштың аҙлығына ҡарама.
* Бәрәңге – ярты икмәк.
* Бәхетлененең ҡунағы бергә.
* Ваҡытһыҙ ҡунаҡ – ҡәҙерһеҙ ҡунаҡ.
* Ғүмер бөтмәһә, ризыҡ бөтмәҫ.
* Ғәрле ғәрләнгәнсе, ғәрһеҙ ашап туйыр.
* Донъя көткәс, семтем тоҙ ҙа кәрәк.
* Донъя яйы менән,
  Ҡоймаҡ майы менән.

  *Вариант:* Донъяның яйы китһә,
  Ҡоймаҡтың майы китә.

* Донъяла таш ҡаты,
  Ташты иреткән аш татлы.
* Дөйә һуйған йыйындан
  Тәкә һуйған туй артыҡ;
  Тауыш тыуған туйындан
  Тыныс торған өй артыҡ.
* Доғалы өйҙә доға бар.
* Көйөк ашаған көйөклө булыр.
* Ерең ниндәй – икмәгең шундай.
* Ибен тапҡан ике ашар.
* Ике башҡа кәбәк тә аш.
* Ике дошманды бер табынға йыйма.
* Икмәк валсығын иҙәнгә, ергә төшөрмә: гонаһ булыр.
* Икмәк ҡәҙерен белмәгән –
  Мәңге рәхәт күрмәгән.
* Икмәк сәйнәмәйенсә йотолмай.
* Икмәк-тоҙҙан баш тартма.
* Икмәк һалыу – тол ҡатын туйы[270].

* Икмәкте бер ҡап, ҡатыҡты биш ҡап[271].

* Икмәкте ҡатыҡҡа манған ас булмай.

* Икмәкте башыңдан юғары күтәрмә.

* Икмәкте хурлама, ҙурла.

* Икмәктән оло аш юҡ.

* Илай-илай яҙ була,
Көлә-көлә көҙ була[272].

* Илем-ялдым ике ашар,
Тыңшыҡ бер ашар.

* Ил ҡеүәте – икмәктә.

* Ип-яй булһа, ит-май була.

* Ир-ат булһа, йорт-ерен маҡта,
Ҡатын-ҡыҙ булһа, аш-һыуын маҡта.

* Иргә бирһәң ашыңды – ирҙәр һыйлар башыңды,
Эткә бирһәң ашыңды – эттәр һөйрәр башыңды.

* Иртә килһәң – ит бешә,
Һуңға ҡалһаң – бит бешә.

* Иртәнге ашты ташлама, кискеһен башлама.

* Ит ашат, ит ашатһаң – биш ашат.

* Ит бөтөр ҙә, бит ҡалыр.

* Ит еҫләнһә тоҙ төҙәтер,
Тоҙ еҫләнһә ни төҙәтер?

* Ит күрмәгәнгә үпкә танһыҡ.

* Ит тураұы – табыштыр,
Ара-тирә ҡабыштыр.

* Ит һөйәкһеҙ булмай,
Ашлыҡ кәбәкһеҙ булмай[273].

* Ите – иткә, майы – елеккә.

* Ите – иткә, һурпаһы – биткә.

* Итен күр ҙә, һурпаһынан төңөл[274].

* Итте күп ашаһаң, һөйәге ҡаҙалыр.

* Иттең тәмлеһе – ҡарта,
Ашаған һайын арта[275].

* Иттән кәбән өймәйҙәр.

* Ишеге ямандың түбәһендә ултырма.

* Ишәк ат булмаç, бауыр ит булмаç.
* Йүгерек ярышта, һимеҙ табаҡта беленә.
* Йоткан йотамаç.
* Йылына күрә йылан һурпаһы.
* «Йылындым» тип, кейемең ташлаған – берләтә иçәр, «Туйҙым» тип, икмәген ташлаған – икеләтә иçәр.
* Йыртанас кеше йырсы булған,
Ашамсаҡ кеше ашнаҡсы булған.
* Йәйгә сыҡкан йән үлмәç.
* Йәйен айранһыҙ булма,
Ҡышын юрғанһыҙ булма.
* Йәйендең башын ашама, ҡойроғон аша.
* Йәйәүле ҡунаҡ тыныс йоҡлар.
* Йәш оло түгел, аш оло.
* Кемдең ҡулында – шунын ауыҙында.
* Кем икмәкле – шул хикмәтле.
* Йәш сағында арпа-көрпә булһа ла,
Ҡартайғас бал да май булһын.
* Кеше ҡапҡаһын асып керһәң, ябып та сыға бел.
* Кеше өйрәһе үҙеңдең буткаңдан тәмле күренә.
* Кеше ризығын кеше ашамаç.
* Кеше ризығына нәфсеңде һуҙма, үҙ ризығың үҙеңдән.
* Кешегә барып, ҡаҙы ашағансы, өйөңә ҡайтып, һыу эс.
* Кешегә барып әлбә ашауҙан үҙ өйөңдә һалма ашау артыҡ.
* Кешелә *ашаған аш* тупһанан сыҡкансы.

*Вариант:* Кешелә ашаған тупһала ҡала.
* Кешене эш бөтөрмәй, эске бөтөрә.
* «Кил», тимәк, бар, «ҡайт», тимәк, юҡ.
* Килгәнгә көйөнмә, киткәнгә һөйөнмә.
* Килгәнсе ҡунаҡ ояла,
Ҡунаҡ килгәс, хужа ояла.
* Килер ҡунаҡтың ҡарыны киң.
* Күп эскән – шешенеп үлгән.

* Көҙ килгән ҡунаҡҡа – ат ҡаҙыһы,
  Яҙ килгән ҡунаҡҡа – ҡарта ярыһы.
* Көҙ бай булма, яҙ бай бул.
* Көҙгө ҡатыҡ – көмөш ҡатыҡ,
  Яҙғы ҡатыҡ – ярыҡ ҡашыҡ.
* Көҙгө ҡунаҡ туйымлы,
  Яҙғы ҡунаҡ һорамһаҡ.
* Көҙ яҙ булыр, аҙыҡ аҙ булыр.
* Көн дә байрам артты аса.
* Көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта,
  Айлыҡ аҙыҡ арҡала.
* Көтөп алған ҡунаҡ ҡәҙерле була.
* Күҙ матурҙы, тамаҡ тәмлене ярата.
* Күҙ өсөн яҙ яҡшы,
  Ауыҙ өсөн көҙ яҡшы.
* Күңел алмаҡ – бер ҡапмаҡ.
* Күңел етһә, аш етә.
* Күңел ҡалмаҡ – бер ҡалъя,
  Күңел ҡайтмаҡ – бер ҡалъя.
* Күңеле тарҙың ҡаҙаны тар.
* Күп ашаһаң, бал да әсе була.
* Күп ашап күбенгәнсе, аҙ ашап буйыңа һеңдер.
* Күп ашаһаң борсаҡты –
  Тишеп сығыр ҡорһаҡты.
* Күп аштың тәме юҡ.
* Күрмәй күргән күбенеп үлер.
* Күстәнәс күп булмаҫ.
* Күстәнәсле ҡунаҡ күп һөйләр.
* Кәзәнең ите елгә, һөтө имгә.
* Кәнфит тамаҡ туйҙырмаҫ.
* Ҡаҙ булһа, һимеҙ булһын.
* Ҡаҙанда бешмәгән табаҡҡа төшмәҫ.
* Ҡаҙыға туйһаң, ҡарта кәрәкмәй.
* Ҡайғыһыҙ ҡара һыуға һимергән.

*Вариант:* Ҡайғыһыҙға ҡара һыу ҙа аш.

* Ҡайҙа ҡоймаҡ – шунда ҡунаҡ.

* Ҡайҙа бәлеш – шунда белеш.

* Ҡайнамаған һөт – алтын,
Ҡайнаған – көмөш,
Ойоған – баҡыр.

* Ҡайын йәме туҙ менән,
Икмәк тәме тоҙ менән.

* Ҡаҡлы сәксәк хаҡлы[276].

* Ҡаҡма кеше ҡапҡаһын – үҙ ҡапҡаңды ҡағырҙар.

* Ҡалдырып ашаһаң – ҡуй ҡалыр,
Тартынып ашаһаң – тай ҡалыр.

* Ҡамыр бешереү – ҡоҙа төшөрөү.

* Ҡамыр йәш бала менән бер, өшөп бара.

* Ҡапҡан белмәй, тапҡан белә.

* Ҡапҡан һайын ҡалъя булмаҫ, бисәң сама белмәһә.

* Ҡапмаһаң да май яҡшы.

* Ҡара икмәккә туйған ас түгел.

* Ҡартайырға ашыҡһаң – ҡарт ит аша.

* Ҡарыны ас ҡаҙанға ҡарар.

* Ҡарыны туҡҡа бәлә күренмәҫ.

* Ҡарыны яман ашағанын һөйләр.

* Ҡомағай* ҡылтамаҡҡа* ҡалыр.

* Ҡомағай түр башында,
Күҙе ҡаҙан аҫтында.

* Ҡомағайға ҡара боламыҡ та аш.

* Ҡоро сәй – ҡорһаҡ ҡамсыһы.

* Ҡоро һыуҙан һурпа булмаҫ.

* Ҡотло ҡунаҡ өйгә килһә – ҡуйың игеҙ бәрәнләр.

*Вариант:* Ҡотло ҡунаҡ төнәһә – ҡуйың игеҙ табыр,
Ҡотһоҙ ҡунаҡ төнәһә – ҡуйыңды бүре ашар.

* Ҡулында барҙың ауыҙында бар.

* Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар.

* Ҡунаҡ аты – ҡулда.

* Ҡунаҡ барҙа этеңде лә орошма.
* Ҡунаҡ башына ҡуй һуйһаң,
  Ҡураңда ҡуйың ҡалмаҫ.
* Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул.
* Ҡунаҡ килһсн, ҡаза килмәһен.
* Ҡунаҡ килһә, ит бешә, ит бешмәһә, бит бешә.
* Ҡунаҡ килһә, ҡапҡаң ас, өйөңә инһә, ҡаҙан аҫ.
* Ҡунаҡ килһә – мәшәҡәт, үҙең барһаң – (э)рәхәт.
* Ҡунаҡ килһә таптыра, өй түбәһен яҡтыра.
* Ҡунаҡ килһә таптырыр, ат урынына саптырыр.
* Ҡунаҡ килһә, һый килә.
* Ҡунаҡ, китәм тип, һыйлата,
  Хужа, китмә тип, һыната.
* Ҡунаҡ күп өйҙә бәрәкәт юҡ.
* Ҡунаҡ ҡайҙа – ҡот шунда,
  Ҡаҙан ҡайҙа – ут шунда.
* Ҡунаҡ ҡунаҡтан оло.
* Ҡунаҡ ҡунаҡты һөймәҫ,
  Ҡунаҡ эйәһе береһен дә һөймәҫ.
* Ҡунаҡ ҡәҙере өс көн, дүртенсеһе – үҙ башына.
* Ҡунаҡ ҡәҙерле булһа, ҡаҙан тиҙ ҡайнай.
* Ҡунаҡ өҫтөнә ҡунаҡ, сөй өҫтөнә туҡмаҡ.
* Ҡунаҡ саҡырам тип бурысҡа кермә, аҙағынан асыға күрмә.
* Ҡунаҡ та килер, ҡоймаҡ та бөтөр.
* Ҡунаҡ төшһә, йортҡа йәм.
* Ҡунаҡ тәүҙә өйҙө йәмләй,
  Унан ашты тәмләй.
* Ҡунаҡ үҙ ризығы менән килер.
* Ҡунаҡ – хужаның ишәге.
* Ҡунаҡ һорамай таптыра,
  Ҡаҡ һикегә яҡтыра.
* Ҡунаҡ һорап ашамай, һайлап ашай.
* Ҡунағы күп өйҙә бәрәкәт бар.
* Ҡунағына ҡарап икмәген тура.

* Ҡунаҡҡа барһаң, ҡаҙаныңды йыуып кит.
* Ҡунаҡсыл кешенең табыны буш булмай.
* Ҡунаҡта ашаған өйгә етмәç.
* Ҡунаҡтың аты ла ҡунаҡ.
* Ҡунаҡтың килеүе үҙенән, китеүе хужанан.
* Ҡунаҡтың көнө өс,
  Унан һуң йорт эйәһенә көс.
* Ҡунаҡтың сорһоҙо* килә белмәç,
  Килһә, китә белмәç.
* Ҡунғансы ҡунаҡ ояла,
  Ҡунғас, хужаһы ояла.
* Ҡупың ямаҡ булһа ла,
  Эсеңдә ашы булһын.
* Ҡыҙғансыҡтың ашы ҡарыныңды ауырттырыр.
* Ҡымыҙ барҙа ҡыҙыҡ бар.
* Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр,
  Бер ярлының атын тауҙан тауға саптырыр.
* Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр,
  Ҡуйың муйынын саптырыр.
* Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр,
  Юҡ малды (ҡаҙыңды) таптырыр.
* Ҡырҡ асыған бал – дауа.
* Ҡыш ҡорһағы – киң алап.
* Ҡыш – ҡыçыл,
  Яҙ – яҙыл,
  Йәй – йәйел,
  Көҙөн үҙең белерһең.
* Ҡыш ҡыçыл – яҙ яҙылырһың.
* Ҡәҙер белмәгәнгә ҡойо һыуы ла әрәм.
* Ҡәҙерле ҡунаҡ һағындырып килә.
* Май ашағандың йөрәге талмай.
* Май бешмәк – йән сыҡмаҡ.
* Май тамаҡҡа ултырмай.
* Май уҡлау йоттора.
* Майлаһаң, иçке сабата ла үтә.

* Майы барҙың яйы бар.
* Маҡтансыҡ «ашаным» тиер,
  Аҡыллы «тешләнем» тиер.
* Мал ҡыйы менән,
  Ҡунаҡ һыйы менән.
* Малды тота бел, ашты йота бел.
* Наҙлы ҡунаҡ ҡәҙерле була.
* Насип аҙыҡ кешене һөйрәй.
* Мәжлес йәме ҡунаҡ менән,
  Табын йәме ҡоймаҡ менән.
* Мәжлес күрке йыр менән.
* Оло ҡаҙанда ҡайнаған аш тәмле була.
* Осҡан ҡош, йүгергән кейек – һәр береһе «ризыҡ» ти.
* Оялмаған бойормағанды ашар.
* Оялсан ҡунаҡ ас ҡалыр.
* Өй күрке – аш,
  Әҙәм күрке – баш.
* Өйҙөң көйө самауыр янында.
* Өйөндә ашы юҡтың күңелендә хушы юҡ.
* Өйөң буш булһа ла, күңелең буш булмаһын,
  Өйөң тар булһа ла, күңелең киң булһын.
* Өйөң һалҡын булһа ла,
  Күңелең йылы булһын.
* Өйөңдә өйрә эсә алмаһаң,
  Кешегә барып бутҡа ашай алмаҫһың.
* Өләшә белгәнгә – өс өлөш,
  Белмәгәнгә бирәү ҙә юҡ.
* Өс көнлөк ғүмерең булһа,
  Аҙналыҡ аҙығың булһын.
* Өс көн ҡунаҡ бул,
  Өс көндән һуң йыраҡ бул.

  *Вариант:* Ҡунаҡтың ҡәҙере – өс көн,
  Өс көндән һуң өйөңә ысҡын.
* Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит.
* Саҡырғанда бармаһаң, саҡырылыуға зар булырһың.
* Саҡырылмаған ҡунаҡ – юнмаған таяҡ.

* Саҡырылмаған ҡунаҡ урынан яман.

* Саҡырғандың аты оло – ас ҡайтһаң да һөйләмә.

* Семтемләп йыйһаң, услап ашарһың.

* Сәй көлдөрөр, кеҫәне бөлдөрөр.

* Сәй янында һүҙ сыға.

* Сәйҙе сәйнәйһе юҡ.

* Сәйҙе һал услап, эсерһең тыныслап.

* Сәйҙең юлы ун һигеҙ[277].

* Сәйе булһа, шәкәре табылыр.

* Сәйһеҙ тороп була, икмәкһеҙ тороп булмай.

* Сәйнәмәй ашаған сәсәп үлер.

* Табын көйө менән, һабан сөйө менән.

* Табынды тәмле аштан бигерәк тәмле һүҙ биҙәй.

* Талымлыға аш килешмәҫ.

* Тамаҡ, бахыр, тары төйҙөрөр.

* Тамаҡ – тамуҡҡа төшөрөр.

* Тамаҡ туҡ – ҡайғы юҡ.

* Тамаҡҡа яҙған ризыҡ теш һындырып инә.

* Тамағы туҡтың күңеле көр.

* Тамағы туҡтың хәсрәте юҡ.

* Тамағың ас булһа ла, ҡолағың тыныс булһын.

*Вариант:* Ас тамағым – тыныс ҡолағым.

* Тамаҡһау үлеме – тамаҡтан,
Урыныҡы – таяҡтан.

*Вариант:* Тамаҡһау үлеме табаҡтан,
Эскесе үлеме ҡабаҡтан.
Тамаҡһау тамаҡтан үлә.

* Таммаһа ла май яҡшы.

* Танһыҡҡа – тары бутҡаһы.

*Вариант:* Тары бутҡаһы танһыҡҡа ла килеште,
Таҡыя ташлап кереште[278].

* Танһыҡҡа тауыҡ ите лә ярай.

* Тар ҡаҙанға аш һалма,
Ҡайнай-ҡайнай түгелер.

* Тар табында сәй эскәнсе, киң табында һыу эс.

* Тартып ашаһаң – тай ҡала,
Ҡуя ашаһаң – ҡуй ҡала.

* Күп ашаһаң – ни ашайһың?
Аҙ ашаһаң – тағы ашайһың.

* Татлынан татлы – яҡшы һүҙ,
Затлынан затлы – яҡты йөҙ.

* Татлы тип, телең тешләмә.

* Татыу аш татлы булыр.

* Татыу табында аш тәмле.

* Тау билгеһе таш булыр,
Бай билгеһе аш булыр.

* Тау хәтле сөгөлдөрҙән бер ҡабым шәкәр яҡшы.

* Таш, ташты ирепкән – аш.

* Төнгө ҡунаҡ – төнлөк ябыуы.

* Төртөп ашатҡансы, төртөп осор.

* Түңәрәк өйҙөң түре юҡ.

* Түшәге бар түшәнер,
Икмәге бар көйшәнер.

* Тере кеше ас булмаç.

* Тере иткәнде ҡоро итмәй.

* Теше сыҡҡан балаға сәйнәп биргән аш булмаç.

* Тешле һөйәк кимерер,
Тешһеҙ ашарға тилмерер.

* Тишек тамаҡ тик тормай.

* Тоҙло аш ике туйҙырыр.

* Төкөрмә ашыңа: ут сығыр ҡашыңа.

* Төшлөк ғүмерең булһа, кислек ашарға әҙерлә.

* Туйған яманлығын ҡуйған.

* Туйғанға тауыҡ ите лә тупраҡ тәм(е)әйтер.

* Туйғансы аша, тирләгәнсе эшлә.

* Туйыр алынан туя бел,
Ҡашығыңды ҡуя бел.

* Туҡ кеше – мут кеше.

* Туҡ ҡунаҡ һыйламаға яҡшы.

* Түшәге бар түшәнер,
  Икмәге бар көйшәнер.

* Тыуған илгә туғыҙ кил.

* Тыяры юҡ туйға киткән.

* Тәғәм тоҙ менән,
  Тоҙ үлсәү менән.

* Тәкә ите им булыр,
  Кәзә ите ем булыр.

* Тәмле нәмә күп булмай.

* Тәмлегә талым кәрәкмәй.

* Тәпән булһа, ҡунаҡтың күңеле үҫер.

* Тәүҙә һөйләш, унан һыйлаш.

* Убыр тамағы – ыштан балағы.

* Убырҙың үҙе туйһа ла, күҙе туймаҫ.

* Урлап ашаған йоҡмаҫ.

* Үҙ икмәгең кеше ҡаласынан тәмлерәк.

* Үҙ икмәгең – үҙле икмәк,
  Кеше икмәге – күҙле икмәк.

* Үҙең бешермәгән ашҡа бешереүсенән алда ҡашыҡ тыҡма.

* Үҙеңдә айран булмаһа, кешенән ҡымыҙ эҙләмә.

* Үлә ашағансы, бүлә аша.

* Үткер бысаҡ, һимеҙ ит, табын ҡәҙерен килтерер.

* Үтмәҫ бысаҡ тотҡансы,
  Тешләп аша туйғансы.

* Хөрмәт иткән хөрмәт күрер.

* Хужа күңелһеҙ булһа, ҡунаҡ өйгә һыймаҫ.

* Хужа ҡунағын яратмаһа, бесәйен әрләй.

* Хужаһы хаҡына этен дә һыйлайҙар[279].

  *Вариант:* Эйәһен һыйлаһаң, этенә һөйәк һал.
  Эткә хөрмәт хужаһы хаҡына.

* Хәләл ризыҡ күкрәк көсө менән табыла.

* Хәлле хәленсә, хәлдә барынса.

* Һағыҙ яңаҡ талдыра, сәтләүек эш ҡалдыра.

* Һағынып барғандың хаҡы ошо,
Саҡырып барғандың аты ошо.

* Һаҡлап тотһаң – мең көнлөк,
Һаҡламаһаң – бер көнлөк.

* Һаҡлының һағы ятыр,
Һаҡһыҙҙың башы ятыр.

* Һалыулы* ауыҙ һаҡлағанды ейә.

* Һаран байға төшкәнсе, йомарт ярлыға төш.

* Һарандың ашы бешмәҫ.

* Һарығын һуйырға йәлләгән ит ашамаҫ.

* Һары май – күпкә тарымай.

* Һары май – эт эсенә ярамай.

* Һаумай һөт булмаҫ,
Яҙмай май булмаҫ.

* Һаумал ҡымыҙ булмаҫ,
Айран ҡатыҡ булмаҫ.

* Һикәлтәһеҙ юл булмаҫ,
Ҡапҡан һайын бал булмаҫ.

* Һигеҙ ҡапма, һимеҙ ҡап.

* Һимеҙ табаҡта беленә.

* Һирәк иләк көндә кәрәк,
Ваҡ иләк байрамда кәрәк.

* Һөйгән ергә һирәк кил,
Һирәк килгән һөйөклө.

* Һөйәк этте ҡол иткән.

* Һөйәк янындағы ит тәмле була.

* Һөмһөҙ ҡунаҡ ҡуна ҡалыр,
Хужаларға нужа һалыр.

* Һөмһөҙ һаҡлағаныңды ҡуймаҫ,
Ҡарға ҡаҡлағаныңды ҡуймаҫ.

* Һөт менән ҡатыҡ – йөрәккә ятыҡ.

* Һөт тотҡан ҡаймаҡ ялар.

* Һөттә – һаулыҡ,
Майҙа – бәрәкәт,
Иттә – ҡеүәт.

* Һуған һуҡмай илата.

* Һурпа теймәҫ ерҙән кашка өмөт итмә.

* Һурпа эскәндең карыны йыуан,
Ит ашағандың бауыры йыуан.

* Һурнаһына еткән    уртаһына еткән.

* Һыйға карны һый.

* Һыйлағанда һыу булһа ла эс.

* Һыйларға һыйың булмаһа ла,
Һыйларға телең булһын.

* Һыйлаһаң, һый күрерһең.

* Һыйлы ҡунаҡ һыйында,
Һыйы бөткәс, өйөндә.

* Һыйһыҙ ерҙә ҡунаҡ тормаҫ.

* Һыйы булһа, көйө табыла.

* Һыймаҫ ҡунаҡ балаһын эйәртеп килер.

* Һыйыр һыйпағанды белмәҫ,
Яман һыйлағанды белмәҫ.

* Һыйырға тоҙло һыу күрһәтмә.

* Һыу бирмәҫкә һөт бир.

* Һүҙе татлының ашы татлы.

* Һыу яҙып, май төшмәҫ.

* Һыуҙан систа* (пак) булмаҫһың.

* Һыуһағанға һыу бир.

* Һәр кем үҙ тамағын ҡайғырта.

* Һәр ҡунаҡтың үҙ көйө.

* Һәр табандың үҙ йыры.

* Шалкан эс күптерә,
Талкан бил бөктөрә.

* Шешә төбө шеш булыр.

* Шәкәр ашап теш сыҡмаҫ.

* Шәкәрҙе күп ашаһаң, тешең һыҙлар.

* Эйәһе насар тип, ашын хурлама.

* Элек килгән – урын өсөн,
Һуңға ҡалған – күрер өсөн.

* Эткә әлбә һый түгел.

* Эсеүе ямандың ҡоҫоуы яман.
* Эске эсәк шештерер.
* Эсеү аҡса таптыра,
  Ғәзиз башты олаҡтыра.
* Эсһәң, буйыңа һеңдер.
* Этенә типһәң, эйәһенә тейә.
* Этле ҡунаҡ йортҡа һыймаҫ,
  Балалы ҡунаҡ өйгә һыймаҫ.
* Эшләп тапҡан аш тәмле.
* Әҙәмдән оло ат, икмәктән оло аш юҡ.
* Әҙәпле ҡунаҡ китер ваҡытын үҙе белер.
* Әҙәплелек билгеһе – эйелеп сәләм биргәне,
  Яҡын итеү билгеһе – кисектермәй килгәне.
* Әрһеҙгә әрем дә әсе түгел.
* Әрһеҙ ҡунаҡ кәйефте ҡырыр.
* Әрһеҙ ҡунаҡҡа һый әрәм.
* Яман яҡынын һыйламаҫ.
* Ямандың ашы ағыу булыр.
* Ямандың түрендә булғансы,

  Яҡшының гүрендә бул.
* Ярыҡ ҡурай уйнамаҫ.
* Ябыҡ булһа ла, йылҡы елеге (булһын).
* Ябыҡ итте һигеҙ ҡапҡансы,
  Һимеҙ итте бер ҡап.
* Яҙ бар, ҡыш бар,
  Ашың күп булһа, ни эш бар?
* Яҙ көнө оҙондоң ҡыҫҡарған сағы,
  Ҡыҫҡаның бөткән сағы[280].
* Яҙ үлмәгән – көҙ үлмәҫ.
* Яҙмаған ризыҡ ауыҙҙан кире сығыр.
* Яҡшы хужаның ашы татлы,
  Ҡаты хужаның ашы шаҡшы.
* Яланда бешкән аш тәмле.
* Ялҡау кеше эш тапмаҫ,
  Эскән кеше мал тапмаҫ.

* Ямандан ярты ҡашыҡ аш ҡалыр.
* Ярышып ашама – ярылырһың.
* Ятыр ҡорһаҡ янтаймаҫ.

* * *

* Аҙ булһа ла, күптәй күр.
* Аҙ ашым, ҡайғыһыҙ башым.
* Алла биргән – туйымлыҡ,
  Бәндә биргән – күңеллек.
* Араҡы арыҫланды йығып һалған.
* Арпа-бойҙай аш булды,
  Алтын-көмөш таш булды[281].

  *Вариант:* Арпа-корпә аш булды,
  Һаҫыҡ талаҡ баш (таш?) булды.
* Асыҡ сырай – таҡта сәй.
* Аш күрҙем – аҡайҙым.
* Аш күрмәгән ата балаһы.
* Аш табылмай, аш табылһа, иш табылмай.
* Ашағаным аш түгел,
  Эскәнем һыу түгел[282].
* «Ашамайым» тигән килен ашаған алтмыш белен.
* Ашап, алаша булмаҫһың.
* Ашап туймағанды ялап туймаҫһың.
* Ашымды йотоп ултырыр,
  Ашъяулығымды йыртып ултырыр.
* Ашын-тоҙон эсеп ултыр,
  Аҡыллы һүҙен ишетеп ултыр.
* Ашың ҡайтһын ашыңа,
  Бәрәкәт яуһын башыңа.
* Баҡса емеше түгел, аҡса емеше.
* Бар сағында – бал да май,
  Юҡ сағында ҡаты ла маты.
* Бар сағында – бүреләй,
  Юҡ сағында – шүреләй.
* Бары менән байрам.
* Барын-юғын белмәйҙер, бал теләйҙер тамағым.

* Бата аяғы – байға[283].

* Бер йотҡансы, ике йотҡан,
  Өсөнсөһөндә – башын элмәккә тыҡҡан.

* Бер кискә – кер мейескә.

* Бер ҡашыҡ ашым, ғауғаһыҙ башым.

* Берәүҙә аш ҡайғыһы,
  Берәүҙә баш ҡайғыһы.

* Бешкәнсе түҙгән, төшкәнсе үлгән.

* Бирер кешем килгәндә, биш ҡайнайҙыр ҡаҙаным,
  Бирмәҫ кешем килгәндә, ҡайнамайҙыр ҡаҙаным.

* Бирмәҫтеке бешмәҫ.

* Бәләкәй генә бер мискә,
  Етер әле бер кискә.

* Иҙел һыуы – илле батман.

* Икмәк-тоҙ – яҡты йөҙ.

* Иртән дә өйрә, кис тә өйрә –
  Был ҡорһаҡтар ни күрә?

* Иҫке ауыҙ, яңы аш,
  Ауырыу булһа, минән ҡас![284]

* Иҫке ҡорһаҡ, яңы аш,
  Зәңнә* сире, минән ҡас![285]

  *Вариант:* Иҫке ҡорһаҡ, яңы аш,
  Иҙел кис, зәңнә ҡас!

* Ит ашаһаң тешкә керә,
  Ашамаһаң, төшкә керә.

* Ит, ит янына кит.

* Итле өйҙә ике кис,
  Өйрәлелә бер кис.

  *Вариант:* Өйрәлелә бер кис,
  Буҡҡалыла ике кис.

* Итен күреп һөйөндөм,
  Һурпаһынан төңөлдөм.

* Йылына бер балтырған ашамаған кешенең эсе ҡортлар, имеш.

* Йылына бер ыумас ашамаған кешенең елеге ҡорор, имеш.

* Йәйәүленең ризығын һыбайлы ашаған.

* Кеше ашағанды йотоп торма.

* Кешегә барһа – ал да гөл,
Үҙенә килһәң – ел-дауыл.

* Килһә – ҡунаҡ,
Китһә – йыраҡ.

* Күркә елгә һимерә.

* Көҙгә етһәм – йөҙгә етәм[286].

* Ҡаҙ ашаған һин дә шул,
Күреп ҡалған мин дә шул.

* Ҡаҙҙы тарта-йолҡаһы,
Артынан борай (бойҙай) бутҡаһы[287].

* Ҡарға килде – ҡаҙан асты,
Һайыҫҡан килде – һалма һалды,
Беснәк килде – бешерҙе,
Бүҙәнә килде – бүлеп бирҙе,
Турғай килде – төшөрҙө.[288]

* Ҡапҡа төбөнә ҡунаҡ килһә, «һабам менән турһығым».

* Ҡатһаң, ҡатыҡ аша.[289]

* Ҡашығы менән ҡатыра,
Һабы менән төрттөрә.

* Ҡоҙа ашы мул булһа, ҡоҙағый йомартлана.

* Ҡорот күрһәң, ҡоро ауыҙҙан һыу килә.

* Мыйыҡ майланды – ауыҙға теймәне.[290]

* Ҡыҙҙарға – ҡанат,
Малайҙарға – аяҡ,
Хужаға – баш,
Ҡатынға – түш,
Ҡунаҡҡа – ҡойроҡ майы.[291]

* Оло байрам, кесе туй.

* Өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ.

* Өйөм тар, күңелем киң.

* Өйөндә өйрә эсә алмаған,
Кешегә барып бутҡа ашаған.

* Өйрәһенең ҡатығы юҡ, хужаһы ҡорт теләгән.

* Өйһәң күп, өләшһәң аҙ.

* Өләшсегә – өс өйрәк,
Белмәгәнгә – бүҙәнә,
Алты һарҡа[292] бер тартай.

* Өләшә белгәнгә – өс өлөш,
Өләшә белмәгәнгә бер ҙә юҡ.

* Селләлә берәү өшөп үлгән,
Байрам көндө берәү асығып үлгән.

* Сентябрҙә һин дә бер, мин дә бер,
Мартта һин дә артта, мин дә артта.[293]

* Сумар – үлмәçкә бер тумар*.

* Суфый һуған ашамаç,
Ҡабығын да ташламаç.

* Сыҡмай сыҡтым ҡунаҡҡа,
Осраным ҡараҡҡа.

* Тамаҡ өсөн баш киткән.

* Тамаҡ туҡ, өç бөтөн.

* Тамағым – ҡунағым (һыйлы).

* Төнлөгөнән ел өрмәй, ишегенән кеше инмәй.

* Туйғандан ары туҡмаҡтай ҙа бармай.

* Туймаҡ тамаҡ, үлмәç йән.

* Тәмлелеген тәмле лә,
Ҡайҙа төкөрәйем икән?

* Тәңре ашын шайтан ҡыҙғанған.

* Убыр китте – урыны ҡалды,
Ябынырға туны ҡалды.

* Уҙ түрҙән, ултыр ерҙән.

* Үҙем ҡунаҡ – һүҙем бүләк.

* Үҙе ҡунаҡ саҡырған, үҙе баланға киткән.

*Вариант:* Үҙе ҡунаҡ саҡырған, үҙе утырмаға киткән.

* Үҙегеҙ тапҡан ҡарта, ашағыҙ тарта-тарта.

* Үпкәләп ултырғанға үпкә тороп ҡалған.

* Һатып алған ауырыу, теләп эскән дарыу.

* Һоло ашамаç арғымаҡ япраҡҡа моң булған.

* Һиңә һары турта, миңә майлы бутҡа.

* Һыйлаған – самаға ла һыймаған.

* Һыра – ауыҙҙы йыра.

* Шөкөр тигән көн бар,
Бер һалмалыҡ он бар.

* Эс һурпаһын, ҡойма туртаһын.
* Эстем шарап – булдым харап.
* Эт ашы – ҡара боламыҡ.
* Эт эсенә һары май килешмәй.
* Әллә бешмәгән, әллә төшмәгән.
* Яҙ булған, ите аҙ булған.
* Яҡшы аш ҡалғансы, яман ҡорһаҡ ярылған.

## 8. Кейем-һалым, биҙәнеү-төҙәнеү

* Ағас башы япраҡ, ҡырау төшһә һарғайыр,
  Кеше күрке – сепрәк, баҫып кейһәң, таушалыр.
* Ағас күрке – япраҡ,
  Әҙәм күрке – сепрәк.
* Ағас япрағы менән матур.
* Аҡ кейем кер тотмай.[294]
* Аҡбуҙ атҡа еҙ ҡамсы.
* Алтын йүгән яман атты яҡшыртмаҫ.
* Ас кергән, яланғас керә алмаған.[295]
* Ат аяған аҭ менер,
  Тун аяған тун кейер.
* Ат ҡәҙерен белмәгән теҙгенен тотоп ултырыр,
  Тун ҡәҙерен белмәгән яғаһын тотоп ултырыр.
* Ат менмәгән ат менһә, саба-саба үлтерер;
  Тун киймәгән тун кейһә, ҡаға-ҡаға туҙҙырыр.
* Ат яҡшыһы – ала тояҡ,
  Тун яҡшыһы – төлкө тояҡ.
* Атҡа баҡма, тунға баҡ,
  Эсендәге йәнгә баҡ.
* Атһыҙға ат ектермә,
  Тунһыҙға тун тектермә.
* Ашаған бөтә, кейгән тора.
* Аяғы ҙур һыйғанын кейер,
  Аяғы бәләкәй һөйгәнен кейер.
* Баш һау булһа, бүрек табылыр.

* Берәүҙең яңыһынан үҙеңдең иҫкең яҡшы.
* Бесеүсе тегеүсенән,
  Тегеүсе бесеүсенән күрер.
* Биҙәнә белһәң – биҙәк,
  Биҙәнә белмәһәң – биҙгәк.
* Бик биҙәнгән биҙҙергән.
* Битеңде биҙәмә, аҡылыңды биҙә.
* Бишмәт кейгән биште белһә,
  Тун кейгән туғыҙҙы белер.
* Буҫтауы туҙһа, ситен ҡушан*.
* Буянған биттең буяуы матур,
  Буяуһыҙҙың үҙе матур.
* Буянған ҡыҙҙан оялған ҡыҙ матур.
* Бүрекһеҙ баш – күрекһеҙ баш.
* Заманың нисек булһа, бүркеңде шулай кей.

  *Вариант:* Заманына ҡарап бүрек кейәләр.
* Иҫке кейемдең йылыһы юҡ.
* Иҫке тун эт өрһә лә йыртыла.
* Иҫкегә тейһәң, иҫең китер.
* Иҫкене иплән кей.
* Иҫкене күпме ямаһаң да – иҫке.
* Иҫәр ҡыҙылға ҡыҙығыр.
* Ит алһаң – бурысы ҡалыр,
  Итек алһаң – ҡунысы ҡалыр.
* Итеге тишектең сабатаһы тишек.
* Итектең башы туҙһа – ҡунысы ҡалыр,
  Сабатаның башы туҙһа – сүбе ҡалыр.
* Ишәккә алтын эйәр һалһаң да һаман ишәк.
* Йөйө күптең көйө күп.
* Йылы һөйәк һындырмаҫ.
* Йылы һөйәк һындырмай,
  Һалҡын йәнде тындырмай.
* Йыртыҡ кейем ямаулыҡ өсөн яҡшы.
* Йәй елбәгәй йөрөргә еләп яҡшы.

* Йәйен аҡтан кейен,
Ҡышын ҡаранан кейен.

* Кейем киҫһәң киң киҫ: киҫә-киҫә тарайыр.

* Кейемде кейеү менән түгел, һалыу менән.

* Кейемде кешеһенә ҡарап тегәләр.

* Кейеме яманды эт талар.

* Кейемен күр ҙә, хәлен күр.

* Кейемең йыртыҡ булһа, елгә үпкәләмә.

* Кейенгәнгә – кейем,
Ашағанға – аш.

* Кеймәгәнде кейеп булыр, кейгәнең өҫтөңдән төшмәһен.

* Керҙең йыуған һайын кере сыға.

* Кеше аты тирсән,
Кеше кейеме керсән.

* Кеше кейеме кискә ҡәҙәр.

* Килбәт – кейемдә.

* Киң кейем туҙмаҫ.

*Вариант:* Киң киҫкән тун туҙмай.

* Күреклегә* күмер ҡабы ла килешә.

* Күтәреп бәйләһәң, атаң туны ла таман була.

* Ҡамсат бүрек – түр күрке,
Түңәрәк һаҡал – ир күрке.

* Ҡара икмәккә туйған ас булмай,
Киндер күлдәккә туйған яланғас булмай.

* Ҡара кейем ҡасырмаҫ,
Аҡ кейем батырмаҫ.

* Ҡарыныңа яҙғанды ейерһең,
Тәнеңә яҙғанды кейерһең.

* Ҡояш ҡарағанда йөрөп ҡал,
Атаң ҡарағанда кейенеп ҡал.

* Ҡупшы өшөмәҫ, ҡалтырар.

* Ҡыҙҙар кейенгәнсе ҡыҫыр һыйыр быҙаулар.

* Ҡыҙҙар кейенһә, гөлгә оҡшай,
Ҡатындар кейенһә, ҡыҙға оҡшай.

* Ҡыҙҙар ҡыҙыл ярата.

* Ҡырҡ ҡат күлдәк кейгәнсе,
Бер ҡат тун кей.

*Вариант:* Ҡыш көнө ете елән кейгәнсе,
Бер ҡат тун кей.

* Ҡырма бүрек – баш күрке,
Көмөш йөҙөк – ҡул күрке.

* Ҡыш үтте тип тун һатма, йәнә ҡыш бар.

* Матур кешегә бар нәмә лә килешә.

* Өҫкә кейгән күренә, тамаҡҡа киткән күренмәй.

* Селләлә сәкмәнеңде ҡалдырма.

* Селләлә тун кейгән ҡатып үлгән.

* Сусҡаны алтын менән дағалаһаң да ат булмаҫ.

* Таныған ерҙә буйға хөрмәт,
Танымаған ерҙә тунға хөрмәт.

*Вариант:* Таныған ерҙә буй һыйлы,
Танымаған ерҙә тун һыйлы.

* Тапҡан кейер ике ыштан,
Тапмағандың бото – ыштан.

* Тояҡ тыптырлар, тун ҡыптырлар.

* Туғыҙ йөнө булһа ла тун яҡшы.

*Вариант:* Туғыҙ ямауыл булһа ла, тун булһын.

* Туҙған булһа ла йыуған булһын.

* Туҙған тун ел тотмаҫ.

* Тун йылыһын эйәһе белер.

* Тун ҡәҙерен белмәгән ҡыҙыл яланғас ултырыр.

* Тун ҡәҙерен белмәгән утҡа яҡын ултырыр.

* Тундың яңыһы яҡшы.

* Тунлыҡ тире – ише менән.

* Туңған тунды маҡтай.

* Туным яҡшы тип, түргә уҙма.

* Үткәндә аша, килешкәндә кей.

*Тулыраҡ әйтелеше:* Аш үткәндә аш аша,
Кейем килешкәндә, кейем кей.

* Үтә буянғандан күңел болғанған.

* Үлсәүһеҙ тун киҫмәйҙәр.
* Фирүҙә ташы – йөҙөк ташы.
* Хайуан тире менән, әҙәм кейеме менән.
* Һаҡла туның, килер көнөң.
* Һарыҡтың туны – һары алтын.
* Һыйырға ябыу килешмәй.
* Һыуыҡ менән эт кейемһеҙгә үс булыр.
* Һыуыҡ төлкө тунлы кешегә сәләм бирә,
  Йыртыҡ тунлы кешенең ҡуйынына инә.
* Эт муйынына алтын байса* таҡһаң да тиҙәк ейеүен ҡуймаҫ.
* Ябынса ҡәҙере ямғырҙа беленер.
* Яҙ көнө аҙыҡ ал, ҡыш көнө кейем ал.
* Яҡшы кейемде кейеүең – бер ғүмер.
* Яҡшы ҡатын – өй күрке,
  Яҡшы кейем – туй күрке.
* Яҡшы һыйҙы кешегә ҡуй,
  Яҡшы кейемде үҙең кей.
* Ямауҙың үҙе түгел, эҙе йәмһеҙ күренә.
* Ямаулы кейгән ярлы булмаҫ.
* Ямауы табылмаҫ кейемде киймә.
* Ямаһаң, яңы була.
* Яңы туным бар тип, иҫкеһен утҡа яҡма.[296]

  *Вариант:* Яңы кейем булды тип, иҫкеһен ташлама.
* Яңыны иҫке күтәрер.
* Яңыһыҙ иҫке иҫке булмаҫ,
  Ямауһыҙ яҡшы булмаҫ.
* Ятҡан кейем үҙ алдына туҙыр.

* * *

* Бер тиренән тун да тек, мул да тек –
  Бер бейәләйлек артып та ҡалһын.
* Ғүмер уҙа, күлдәк туҙа.
* Иҫке елән иҫтә юҡ.

* Итегем – ҡулалдыға,
Ситегем – һыйға.

* Күлдәгең көйрәк булһын,
Ғүмерең оҙаҡ булһын.[297]

* Күлдәгең ситән башына, үҙең кейәү ҡуйынына![298]

* Ҡара, ҡара булһа ла – бара.

* Ҡашың ҡаралығы еткән, һөрмә тартҡанһың тағы.

* Ҡыш күҙе ҡараңғы (ни кейһәң дә ярай).

* Өҫтө ҡомас*, тамағы ас.

* Тамаҡ – көр,
Өҫ – нур.

* Тышы булды – эслеге кәрәк.

* Эсе менән тышы булһа, тун тегер инем – энә менән еп юҡ.

* Яҙ кейгәнен ҡыш кейгән.

* Яңы теккән күлдәгем, һине ҡайҙа әләйем?

## 9. Юл-сәфәр, ил-донъя күреү

* Айлы төн аҙашмаҫҡа яҡшы.

* Алты йәшәр илдән килһә,
Алтмыш йәшәр ҡаршы сығыр.

*Вариант:* Алты йәшәр юлдан ҡайтһа,
Алтмыш йәшәр күрешә килер.

* Алыҫ менән яуыҡты (яҡынды) юртҡан белер.

* Алыҫ юл атты һынай, ауыр юл ирҙе һынай.

* Арбалыға юлдаш булма, юрғалыға юлдаш бул.

* Арбаңа ҡарап йөк һал, атыңа ҡарап юлға сыҡ.

* Арыҡ атҡа ҡурйын да ауыр.

* Ас ҡалмаған аш ҡәҙерен белмәҫ,
Йәйәү йөрөмәгән ат ҡәҙерен белмәҫ.

* Ат арымаһа, аҙыҡтан.

* Ат арымаһа, сана арымай.

* Ат аяғын ҡыҙғанған ылауҙан ҡотолмаҫ.

* Ат доға менән йөрөмәй, дуға менән йөрөй.

* Ат – егеттең юлдашы.
* Ат йөрөп юл ала.
* Ат йөрөтмәй, юл йөрөтә.
* Ат ҡолағы һаҡ булыр.
* Ат тартмай – һоло тарта.
* Ат эйәһенә ингәнсе аҡһамаһын.
* Ат яҡшы булһа, юл ҡыҫҡа була.
* Ат яҡшы түгел, ем яҡшы,
Ем өҫтөнә дим яҡшы.
* Атҡа ышанып, арбала йоҡлама,
Аҙаштырһа, үпкәһе үҙеңә.
* Атҡа эйәр йөк булмаҫ.
* Атлы йәйәүлегә юлдаш түгел.
* Атлы йәйәүлегә юл бирмәҫ.
* Атлыға йәйәүле юл бирер.
* Атлының аяғы ла арымай, туны ла туҙмай.
* Атың арыҡ булһа, көн күп.
* Атыңа ҡарап юлға сыҡ.
* Атың арыһа, үҙеңә үпкәлә.
* Атың барҙа елеп ҡал,
Яҡшыларҙы күреп ҡал!
* Атың барҙа юл таны,
Атаң барҙа ил таны.

*Вариант:* Атың барҙа юл таны,
Ашың барҙа ил таны.
* Атың һимеҙ булһа, юлың ҡыҫҡа булыр.
* Аты һимеҙ – юлы тигеҙ.
* Ашыҡһаң, урау юлдан кит.
* Аяғың тартмаған ергә барма.
* Ашты һеңгәс маҡта,
Юлдашты белгәс маҡта.
* Барған юлың арба юлы булһа,
Сығыр юлың сысҡан юлы булыр.
* Белгән – юлда,
Белмәгән – түрҙә.

* Белмәгән ерҙең соҡоро күп.
* Бер көнлөк юлға сыҡһаң, бер аҙналыҡ аҙыҡ ал.
* Бер табышһыҙ ҡайтһаң да,
Донъя күреүең – үҙе бер табыш.
* Бер юл бар – алыҫ, алыҫта булһа – яҡын;
Бер юл бар – яҡын, яҡында булһа – алыҫ.
* Бер юлға сыҡҡас, кеше һаман алға китә.
* Бергә-бергә юл ҡыҫҡа була.
* Булыр-булмаҫ кешенән юл һорама.
* Бурай-бурай ҡар яуһа, бурап атты үлтерер.
* Бүре юлдашына ҡасыд* ҡылмаҫ.
* Дөйә юлында йөк ҡалмаҫ.
* Дуға керһә, доға кәрә.
* Елгән ел күргән, йөрөгән ил күргән.
* Игендең яйын иккән белер,
Арбаның яйын еккән белер.
* Иҙел кисер булһаң, ике көнлөк аҙыҡ ал.
* Иҙел кисһәң, иҫ кәрә.
* Икмәк юлда йөк түгел.
* Ил күреүе – илле һум,
Нужнаһы бушҡа ҡала.
* Илгә сыҡҡан – иллене ҡунған.

*Вариант:* Илгә барған ике ҡунған.

* Илдә йөрөгән ил таныр,
Ҡырҙа йөрөгән ер таныр.
* Ир аҙығы менән ат аҙығы юлда.
* Ир аҙығы юлында, бүре аҙығы морононда.
* Ир «бармам» тигән еренә биш барыр.
* Ир юлда һыналыр,
Ат арбала һыналыр.
* Иртә сыҡҡан юл алыр.
* Иртә юл уңыр.
* Иҫән саҡта йөрөп ҡал,
Был донъяны күреп ҡал.

* Ишектән сыҡһаң, илле төрлө,
Ҡапҡанан сыҡһаң, ҡырҡ төрлө уй төшә.

* Йортта әкренләп әҙерләнһәң,
Юлда әкренләп йөрөрһөң.

* Йорттағы уй юлға ярамай.

* Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә.

*Вариант:* Юл аяғы йүрмәгә.

* Йөрөгән аяҡҡа йүрмә, йүрмә булмаһа, ярма.

* Йөрөгән йөрәкле булыр.

* Йөрөгән таш шымарыр,
Тик ятҡан таш мүкләнер.

* Йөрөгән юлда таш та шымара.

* Йөрөгәндең юлы үтә,
Ултырғандың көйө үтә.

* Йөрөй белмәгән аттың арҡаһын тишер,
Саба белмәгән ҡолағын киҫер.

* Йөрөмһөҙ ат йән ҡыйнар.

* Йүгәнең көмөшө менән маҡтанма,
Атыңдың йөрөшө менән маҡтан.

* Йүнһеҙгә юлһыҙ юлдаш.

* Йыраҡ ерҙән ҡайтҡан мал ҡәҙерле булыр.

* Йыраҡ юл яҡындан башлана.

* Йәйәү йөрөмәйенсә, ат ҡәҙерен белмәҫһең.

* Йәйәү йөрөү бүрегә генә килешә.

* Йәйәүлегә янсыҡ та ауыр.

* Йәйәүленең аты арымай.

* Йәйәүленең хәлен көтөүсенән һора.

* Кемдең кем икәнен ете көнлөк юлға сыҡҡас белерһең.

* Кешене юл боҙмай,
Яман юлдаш боҙа.

* Киткән кешегә юл яҡшы,
Ҡалған кешегә өй яҡшы.

* Киткәнгә юл бирһен,
Ҡалғанға йүн бирһен.

* Кисә йөрөгән бөгөн һөйөнөр.

* Көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта, айлыҡ аҙыҡ арҡала.

* Көн һыуығы – ҡолаҡҡа көс,
Юл боҙоғо – тояҡҡа көс.

* Көткән көтөп ала алмаҫ,
Ҡалған ҡыуып етә алмаҫ.

* Күп йәшәгән күрмәгәнде күп йөрөгән күрер.

* Күп һөйләгән иҙер,
Күп һөйләгән гиҙер.

* Күп юртҡандың башы юлда ҡалыр.

* Кәкре булһа ла юл булһын.

* Кәмәгә ултырғандың йәне ус төбөндә,
Атҡа менгәндең йәне йөрәк түрендә.

* Ҡайтыр юл ҡыҫҡа тойолор.

* Ҡайтыр юлға сыҡҡас ат та йылдамлана.

* Ҡарт атын маҡтаған кеше ҡара йәйәүгә ҡалған.

* Ҡурҡаҡты юлдаш итмә.

* Ҡылығын белмәгән аттың ауыҙлығын һалдырма.

* Ҡыш санаға рәхәт,
Йәй арбаға рәхәт.

* Мең саҡрымлыҡ юл бер аҙымдан башлана.

* Өйҙә ятып ни белерһең,
Илгә сыҡһаң, ғибрәт күрерһең.

* Сабан ат менән сәфәр сыҡма.

* Сирле булып атҡа ултырып йөрөгәнсе,
Таҙа булып йәйәү йөрөгәнең артыҡ.

* Табан юлы тар булыр.

* Тайғаҡ ерҙә – таяҡ.

* Тапҡан ҡыуаныр, таныған алыр.

* Таяҡта тай көсө бар.

* Туңған тунын маҡтай,
Аҙашҡан юлын маҡтай.

* Тура юлдан белгән юл яҡшы.

* Тәгәрәгән ташҡа үлән үҫмәҫ.

* Уҙған кешене тотоп булмай,
Ҡалған кешене көтөп булмай.

* Уңға киткән уңыр,
Һулға киткән туңыр.

* Уңмаған юл китапһыҙ ҙа уҡыта.

* Ураu булһа ла юл яҡшы.

* Урманлы юл – бер ҡат тун.

* Ут күренгәнгә барма, эт өргәнгә бар.

* Үҙ башыңды дауға бирһәң дә,
Юлдашыңды яуға бирмә.

* Үҙеңдән юлдашың батыр булһын.

* Һөйләшеп барһаң, юл ырамлы була.

* Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың,
Йөрөй-йөрөй күсәм булырһың.

* Һуҡыр сыҫҡан юлға сыҡһа, боҙ яуыр.

* Һуңғы аттың йөгө ауыр.

*Вариант:* Һуңғы дөйәнең йөгө ауыр.

* Һыбай егет юл һорашмаç.

* Һыбайлыға юл күп.

* Һыу ҡыуған – бәләгә,
Юл ҡыуған – ҡазаға.

* Этте эйәртһәң, таяғың ҡулыңда булһын.

* Юл аҙығы – йыуаса.

* Юл белгән каруанға ҡушылмаç.

* Юл белмәһәң, белгәндән һора.

* Юл боҙоғо аяҡҡа көс.

* Юл ғазабы – гүр ғазабы.

* Юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы.

* Юл менән йөрөһәң, юртып йөрө;
Юртып йөрөһәң, юл ырар.

* Юл һорарға тел кәрәк,
Аҙашҡанға күҙ кәрәк.

* Юл һорашып табылыр.

* Юл юлдашһыҙ булмай.

* Юл яҡшыһы – яҡты күҙ.

* Юламсыға* юл оҙон,
Конлөксөгә көн оҙон.
* Юлаусының йомошо йүрмә ашағас онотола.
* Юлаусының юлтырағы* һиңә лә тейер, миңә лә тейер.
* Юлаусының юлтырағы тейә.
* Юлаусының юлтырағы – артынан шылтырағы.
* Юлға сыҡҡан юлда ҡалмаҫ.
* Юлға сыҡҡан юлынан ҡайтмаҫ,
Атылған уҡ таштан ҡайтмаҫ.
* Юлға сыҡһаң, иртә сыҡ.
* Юлға сыҡһаң, йылы кейемеңде ҡалдырма.
* Юлға сыҡһаң, таяғың булһын.
* Юлға сыҡһаң, юл аҙығың мул булһын.
* Юлға сыҡһаң, юлың йәшер.
* Юлға сыҡһаң, юлдашың үҙеңдән артыҡ булһын.
* Юлға сыҡһаң, яныһ сыҡ,
Юлдашыңды таныһ сыҡ.
* Юлға юлдаш алып сыҡ.
* Юлда йөрөгән май имер,
Өйҙә ултырған ҡан имер.
* Юлда юлыҡҡан юлдаш булмаҫ.
* Юлда яңғыҙ булһаң, юл оҙон,
Өйҙә яңғыҙ булһаң, көн оҙон.
* Юлдан барған аҙашмаҫ.
* Юлдан кире боролһаң, өлөшөң юғалыр.
* Юлдан ҡал, юлдаштан ҡалма.
* Юлдан сыҡма, аҙашырһың.
* Юлды йөрөгән еңер.
* Юлдың башы – ат тояғында.
* Юлдың төҙөгө, һыуҙың өҙөгө юҡ.
* Юлдың яйын юртҡан белер.
* Юлы уңыр егеттең еңгәһе алдан сығыр.
* Юлы уңдың эше уң.
* Юлы уңыр егеттең юлдашы сығыр алдынан.

* Юлын белгән арымаҫ.

* Юлын белмәгән – юлда илап ултырған.

* Юлынан киткән боролмаҫ.

* Юлдаш тапмаған юлынан яҙыр.

* Юлдашлының юлы киң.

* Юлдашы яманды яу алыр.

* Юлдашын ташлаған юлда ҡалыр.

* Юлдашың үҙеңдән яҡшы булһын.

* Юлсы хәлен юлсы белер.

* Юлсы юлында, таяғы ҡулында.

* Юлсының юлда, аусының ауҙа булыуы яҡшы.

* Юрға менгән юлдашынан айырылыр.

* Юрғалы менән юлдаш булһаң, юлда ҡалырһың.

* Юртаҡ атҡа юл ҡыҫҡа.

* Яҙын аҙыҡһыҙ, көҙөн кейемһеҙ юлға сыҡма.

* Яҡшы юлдың оҙоно яҡшы,
  Яман юлдың ҡыҫҡаһы яҡшы.

* Яман һыбай аттың арҡаһын боҙор.

* Яман юлдаштан яман таяҡ яҡшы.

* Яман юлдаш яуға алдырыр.

* Ямандың йөгөнә кермә,
  Юлың төшһә, өйөнә кермә.

* Яңғыҙ-ярым юлға сыҡма.

* Яңғыҙға юл оҙаҡ.

* Ятһаң, ятып тораһың, барһаң, бара тораһың.

* * *

* Ай йөрө – аман йөрө.

* Аҡ юл – оҙон ғүмер.

* Аты – һигеҙ, юлы – тигеҙ.

* Аяғым – ат,
  Ҡулым – ҡамсы,
  Менерем дә сабырым.

* Барыр ереӊ таба юлы булһа,
  Ҡайтыр ереӊ сыҫкан юлындай.

* Еӊел барып ауыр ҡайт,
  Иҫән барып һау ҡайт.

* Етерем тип ашыҡма,
  Тәртә араһы ни әйтер?

* Изге юлдар бирһен!

* Һаҡал эҙләп киткән, мыйыҡһыҙ ҡайтҡан.

* Юл буйында Йүкәли.[299]



# IV. ШӘХСИ СИФАТТАР. ӘХЛАҠ-ӘҘӘП ҠАҒИҘӘЛӘРЕ. АРАЛАШЫУ. ТЕЛ ҺӘМ ҺҮҘ, АҢ-БЕЛЕМ

## 1. Кеше, уның ҡиәфәте, холҡо, ғәҙәте; абруй, намыҫ, дан, дәрәжә

* Абруй – ирҙең ҡеүәте.

* Абынмаҫ ерҙә абынма, абруйың төшөр.

* Ағас аламаһы – ботаҡлы,
Әҙәм аламаһы – ҡорһаҡлы.

* Ағас ботаҡһыҙ булмаҫ,
Дан уртаҡһыҙ булмаҫ.

* Ағас емешенән, әҙәм ҡыланышынан билгеле.

* Ағастың йомшағын ҡорт баҫыр.

* Аҙаматҡа ҡул бирһәң, абруйың артыр.

* Аҙға ҡәнәғәт итмәгән күбен күрмәҫ.

* Аҙҙың ҡәҙерен белмәгән күптең ҡәҙерен белмәҫ.

* Аҙнаған айғырҙы өйөрҙә һына.

* Айға ҡарап, ай булма.

* Айыу – ҡашҡа булмаҫ,
Яман яҡшы булмаҫ.

* Ай уртаҡ, көн уртаҡ,
Яҡшы кешенең эше уртаҡ.

* Айыуға аҡыл өйрәткән – таяҡ,
Йүнһеҙгә аҡыл өйрәткән – һабаҡ.

* Ажғырған айғырҙың өйөрөн күр.
* Аҡайған күҙҙә аҡыл әҙ.
* Аҡ кеше – саҡ кеше,
  Ҡара кеше – ныҡ кеше.
* Аҡ күңелдең аты арымаҫ, туны туҙмаҫ.
* Аҡ матур – саҡ матур,
  Ҡара матур – бик матур.
* Аҡ сәс – аҡыл сәсе.
* Аҡҡа ҡара тиҙ тейә.
* Аҡһаҡ ат күп йөрөр.
* Аҡһаҡ соҡорға баҫа.
* Аҡһаҡ ултырмаҫ,
  Һаҡау тик тормаҫ.
* Аҡһаҡты сатанларға өйрәтмәйҙәр.
* Аҡһаҡ йөрөп туҡтамаҫ,
  Һуҡыр күреп туҡтамаҫ.
* Аҡыл эҙләгән аҡыл табыр,
  Мал эҙләгән мал табыр,
  Нәпсеһенә эйәргән малынан да,
  Аҡылынан да яҙыр.
* Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән,
  Байлыҡтың ҡәҙере йомартлыҡ менән.
* Аҡыллы тип әйтәләр – кеше әйтмәй белгәнгә,
  Йомарт тип әйтәләр – кеше һорамай биргәнгә.
* Аҡылһыҙ башҡа дан ҡунмаҫ,
  Ҡунһа ла оҙаҡ тормаҫ.
* Ала ҡарға алдан ҡысҡырыр.
* Ала ҡуңыҙ тиреһе ейгә күнмәҫ.
* Алама ағас ботаҡҡа үҫер.
* Алама кешегә дәрәжә килешмәй.
* Алама ат ҡойроҡҡа үҫер.
* Алан-йолан йә атыңды алыр,
  Йә ҡатыныңды алыр.
* Алда буласаҡ туй өсөн алдан бейей башлама.
* Алдашһаң – абруйың бөтөр,
  Тиргәшһәң – ҡәҙерең китер.
* Алла шайтанынан бәндә шайтаны яман.

* Алманың аҫылын ҡорт ашай.

* Алтмыш көн ат булғансы,
Алты көн айғыр бул.

* Алтылағы – алтмышта.

* Алтын ҙур булмаҫ, аҫыл һөйәк хур булмаҫ.

* Алтын ҙур булмаҫ, ҙур булһа ла ерҙә ятмаҫ.

* Алтын ерҙә ятһа ла серемәҫ.

* Алтын-көмөш ҙур булмаҫ.

* Алтын-көмөш ерҙә ятмаҫ.

* Алтын ҡәҙерен көмөшсө белер.

* Алтын сүплектә лә ялтырай.

* Алтын серемәҫ, тимер туҙмаҫ.

* Алтын янында тимер ҙә ялтырай.

* Алтынға тут төшмәй.

* Алтынды батҡаҡҡа ташлаһаң да бысранмаҫ.

* Алтынды тут алмаҫ, һыуҙы ут алмаҫ.

* Алтындың заты, яҡшының аты* юғалмай.

* Артҡа ҡалһаң – тапалырһың,
Алға сыҡһаң – туҡмалырһың.

* Артҡа ҡарап ғибрәт ал,
Алға ҡарап шөһрәт ал.

* Артта ҡалған ишек яба.

* Артыҡ ашҡынған ашһыҙ ҡалыр.

* Артыҡ ашҡынған ашһыҙ ҡалыр,
Башын йәшергән башһыҙ ҡалыр.

* Арыҡ ат һимерһә, янына ҡурйын* бәйләтмәҫ.

* Арыҡ кәзә тартышҡаҡ,
Яман әҙәм орошҡаҡ.

* Арыҫландың аҙғаны айға һикерер.

* Арыҫландың айға менмәһә лә, һикереүе дан.

* Арыҫландың – ялы,
Ирҙең – һаҡал-мыйығы.

* Астың иманы юҡ.

* Аҫтыртын аҫтан киҫә, өҫтөн ялғай.

* Аҫтыртын кеше аҫтан ҡырҡа.

* Аҫтыртын эт өрмәй тешләй.

* Аҫтыртындан һаҡлан.

* Аҫыл ҡош аяғынан эләгер.

* Аҫылташ ҙур булмаҫ.

* Аҫыл һөйәк ҙур булмаҫ,
Ҡайҙа барһа ла хур булмаҫ.

* Аҫылһыҙ атҡа менһә, атаһын танымаҫ.

* Атаң менән маҡтанма,
Атың* менән маҡтан.

* Атаһының аты бар,
Инәһенең туны бар –
Иҫәүәнгә ни ҡайғы?

* Ат айғырланһа, башына була.

* Ат етмәҫ ергә дан етер.

* Ат үлер – тояғы ҡалыр,
Әҙәм (егет) үлер – даны ҡалыр.

* Ат йүгерек түгел – күңел йүгерек.

* Атҡа менгән ил гиҙәр,
Яҡшы кеше ил биҙәр.

* Атты ҡамыты йүгертә,
Ирҙе намыҫы йүгертә.

* Аттың бары толпар булмаҫ,
Ҡоштоң бары шоңҡар булмаҫ.

* Атың арыһа – абруйың китер,
Ҡарының аҫһа – ҡәҙерең китер.

* Атлағыһы килмәгән ат тәртәгә тибә.

* Ауыр ҡуҙғалһа, дауыл ҡуҙғалыр.

* Ауырыу китер, ғәҙәт китмәҫ.

* Ауыҙы йомшаҡ ҡолон биш бейәне имә.

* Ауыҙында теше бөткәндең ҡулында көсө бөткән.

* Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә.

* Ашарға тешең бөтһә, эшләргә көсөң бөтөр.

* Ашыҡҡан ашһыҙ ҡалыр.

* Ашыҡҡан ашҡа төшөр.

* Ашыҡҡан күҙгә аҡ төшә.
* Ашыҡҡан юл алмаҫ.
* Ашыҡҡандан аҡыл һорама.
* Ашыҡҡандың ауыҙы бешер.
* Аяҡ һалмай түргә уҙма.
* Аяғың бысраҡ булһа, баҫҡан һайын тап ҡала.
* Аяуһыҙ кешегә аяғың атлама.
* Байлыҡтың ҡәҙере – йомартлыҡ менән.
* Баҡырҙы ялтыратыу менән алтын булмаҫ.

  *Вариант:* Баҡырҙы күпме йышһаң да алтын булмаҫ.
* Бала этәс кәперәйсп бөркөт була алмай.
* Бал ҡортоноң телен балсы белер.
* Балыҡтың башы һаҫыр,
  Ямандың аяғы һаҫыр.
* Баҫалҡы булһаң, баҫырҙар,
  Уҫал булһаң, аҫырҙар.
  Урта уҫал булһаң, ил ағаһы яһарҙар.
* Баҫалҡыны баҫмалатҡан күп булыр.
* Баҫҡысҡа менеүе ҡыйын, төшөүе бик анһат.
* Батҡаҡ баҡаға килешә.
* Баш баҡсала үҫмәй.
* Башаҡ тулған һайын башын түбән эйер.
* Бейей белмәгән айыуға урам тар.
* Бейей белмәгәнгә иҙән тар.
* Бейей белмәгәнгә көй килешмәй.

  *Вариант:* Бейей белмәгәнгә туй килешмәй.
* Бейек тауҙың томаны ла бейек.
* Бейектән дә бейек бар.
* Бер йүнһеҙ һарыҡ бөтөн көтөүҙе боҙор.
* Бер ҡатлылыҡ бурлыҡтан яман.
* Бер һыйырҙың ҡойроғо мең һыйырҙы бысратыр.
* Бер әҙәм бар – әҙәмдән яҡшы,
  Бер әҙәм бар – хайуандан шаҡшы.

* Берҙе бүлеп бир,
Яртыны ярып бир!

* Бирәү бар – ингә бар, үрмәккә юҡ,
Бирәү бар – алмаҡҡа бар, бирмәккә юҡ,
Бирәү бар – күрмәккә бар, үрнәккә юҡ.

* Бирәүҙең күңеле – диңгеҙ,
Бирәүҙең күңеле – дуңғыҙ.

* Биҙ бөйөр булмаç, күҙ төйөр булмаç.

* Бите сибәр сибәр түгел,
Холҡо сибәр бик сибәр.

* Битһеҙ бүркен баçмаç.

* Боҙоҡ һауанан боҙоҡ кеше яман.

* Боҙоҡҡа боҙолоу кәрәкмәй.

* Бойҙай ҡылсыҡһыҙ булмаç.

* Боландың башы, филдең теше ҡиммәт.

* Боралҡынан бирәү килһә, боронғоға урын юҡ.

* Ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барма.

* Бөкөрө билде ләхет төҙәйтер.

* Бөркөт бүҙәнә түгел.

* Буй менән һыу буйламайҙар.

* Буйға оҙон бойомға ашмай.

* Буйына күрә күләгәһе.

* Булғанында булып үт,
Буҙ юрғалай елеп үт.

* Булмаçтыҡы тыумаç.

* Булмаçты һөткә һалып ҡайнатһаң да булмаç.

* Буш арбаның дыңғыры ҙур.

* Буш көлтәне һуҡмайҙар.

* Буш тоҡ тура ултырмаç.

* Бүҙәнәнең үҙенә күрә бизмәне.

* Бүре бәйләүгә күнмәç,
Дуңғыҙ әйҙәүгә күнмәç.

* Бытый тик тормай,
Артына һуҡһаң да ултырмай.

* Бәләкәй кеше – ҡуйын иркәһе,
Оҙон кеше – ырҙын кәртәһе.
* Бәләкәй тәгәрмәс алдан тәгәрәй.
* Вайымһыҙ һыу эсеп тә һимерә.
* Вайымһыҙға ямғыр яуҙы ни, боҙ яуҙы ни.
* Выжданлыға выжданһыҙ иптәш түгел.
* Гөл ҡәҙерен былбыл белер.
* Гөл тикәнһеҙ* булмаҫ.
* Гәүһәр ерҙә ятмаҫ.
* Гәүһәр төндә лә күренә.
* Ғәҙәтһеҙ кеше – әҙәпһеҙ кеше.
* Ғәҙәтте һәләт еңә.
* Ғәйрәт – ир менән атта,
Матурлыҡ – күҙ менән ҡашта.
* Ғәме барҙың йәме бар.
* Ғәмһеҙ кеше – йәнһеҙ кеше.
* Дан башҡа, яҡшы исем башҡа.
* Дан килер ҙә китер,
Яҡшы исем атанан балаға етер.
* Дан килә, күтәрә белмәһәң – китә лә белә.
* Дан өсөн йән һатма.
* Даны оло, ҡобараһы ҡоро.
* Даныңды йәштән һаҡла.
* Даныңды юйғансы, башыңды юй.
* Дарға менһәң дә, дан менән мен.
* Диңгеҙҙең дә төбө бар,
Сабырҙың да сиге бар.
* Диңгеҙҙән бер тамсы, дуңғыҙҙан бер ҡыл (артмай).
* Дөйә тулап күккә менмәҫ.
* Дуңғыҙ ҡондоҙ булмаҫ.
* Дуңғыҙҙы табынға ултыртһаң, аяғын өҫтәлгә һалыр.
* Дәртһеҙгә дан юҡ.
* Дәртһеҙҙең моңо юҡ.

* Ӡурлыҡ буй менән түгел, уй менән.
* Еӡӡе ялтыратыу менән алтын булмаҫ.
* Ел ҡайһы яҡҡа иҫһә, ҡамыш шул яҡҡа боролор.
* Емешле ағас ӡур булмай.
* Емешле ағас түбән эйелә.
* Емтектән ҡоӡғон ерәнмәҫ.
* Ен һуҡҡандың ауыӡы ҡыйыш.
* Ерек тәртә тиӡ һыныр.
* Есеме барӡың исеме бар.
* Есеме булһа, исеме булыр.
* Етеӡлек башҡа, ҡеүәт башҡа.
* Етеһендә ни булһа,
  Етмешендә шул булыр.
* Зәр* ҡәӡерен зәрҡәр* белер.
* Иӡел кисмәйенсә аяғыңды киптермә.
* Иӡел күренмәйенсә итек сисмә.
* Изге кеше Иӡел кисә.
* Изгелек турылыҡта, күркәмлек холоҡта.
* Изгенең күңеле көӡгө.
* Ике ауырыу бергә килһә – әжәлеңдең еткәне,
  Ике йыртыҡ бергә килһә – абруйыңдың киткәне.
* Ике ултырғыска ултырған тиӡ төшөр.
* Имә белгән быӡау ике һыйырӡы имгән,
  Имә белмәгән берӡән дә ҡоро ҡалған.
* Инсафлының теле саф.
* Инсафы булмағандың иманы булмаҫ.
* Ирсәйгәнгә ирсәй, башың күккә тейгәнсә,
  Иңкәйгәнгә иңкәй, башың ергә тейгәнсә.
* Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта.
* Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап булһын,
  Ырыуыңа тап килмәһә, ораныңа тап булһын.
* Исемеңде ташҡа яӡма, ил йөрәгенә яӡ.
* Исемһеӡ булғансы малһыӡ бул.
* Иҫең барӡа итәгеңде яп.

* Итегең тайыш булһа ла, йөрәгең тайыш булмаһын.

* Ит – ҡунаҡ: килә лә китә.[300]

* Ишәк түшәк ҡәҙерен белмәҫ.

* Ишәк һимерһә, эйәһен тибер.

* Ишәк юрғалап бәйге алмаҫ.

* Ишәккә менгәндең аяғы тынмаҫ.

* Ишәккә үҙ тауышы яғымлы.

* Ишәкте түшәккә һалһаң, тәгәрәп төшөр.

* Йомарт булһаң, үҙ кеҫәңдән бир.

* «Йомарт булығыҙ», тип һөйләһә лә,
  «Йомарттың» икмәген күрмәҫһең.

* Йомарт ирҙең итәге киң.

* Йомарт кешелә мал тормаҫ.

* Йомарт кешенең күңеле – даръя.

* Йомарт малын үҙе ашар,
  Һаран малын эт ашар.

* Йоморҡа ғына йөйһөҙ була.[301]

* Йомартлыҡҡа бизмән юҡ.

* Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫыр,
  Йыуаш кешене һүҙ баҫыр.

* Йопарҙы* йәшерһәң дә еҫенән беленер.

* Йотсолоҡ йомарт ирҙең ҡулын тота.

* Йөҙҙө күргәс йөҙ ояла.

* Йөҙҙән бераү сәсән, меңдән бераү күсәм*.

* Йөҙҙән йүгерек, меңдән толпар сығыр.

* Йөҙөк ҡашы ҙур булмай.

* Йөҙө йәмһеҙ көҙгөнө яманлар.

* Йөҙө ниндәй – үҙе шундай.

* Йөҙөң йәмһеҙ булһа, көҙгө ғәйепле түгел.

* Йөҙөң ниндәй булһа, көҙгөң шулай күрһәтер.

* Йөҙһәң, юғарыға йөҙ.

* Йөрөгән таш шымарыр,
  Ятҡан таш мүкләнер.

*Вариант:* Йөрөгән аҡса шымарыр,
Ятҡан аҡса тутығыр.

* Йөрәгең боҙло булһа ла, йөҙөң көҙгө булһын.

* Йүгергән етмәҫ, аҡһаҡ етер.

* Йүгергән эт туҡлығын белдермәҫ,
Йомарт юҡлығын белдермәҫ.

* Йүгеректән йүгерек – күңел йүгерек.

* Йүгәнде тиҫкәре элмә, урынһыҙ түңкәрелмә.

* Йүкәне майлаһаң да ҡайыш булмаҫ.

* Йүнһеҙ маҡтаныр, йүнле һаҡланыр.

* Йүнһеҙлек – көнһөҙлөк.

* Йыйнаҡ бул,
Йыйнаҡлы булһаң, тыйнаҡлы булырһың.

* Йылан үҙ кәкреһен үҙе белмәҫ.

* Йыуан йыуанды күрә алмай.

* Йыуаш аттың тибеүе ҡаты булыр.

* Йыуаш ишәккә һәр кем менер.

* Йыуаш мал өндәүгә яҡшы.

*Вариант:* Йыуаш ат йүнләүгә яҡшы.

* Йыуаш эткә таяҡһыҙ яҡын барма.

* Йыуаштан йыуан сыға.

* Йәмс барҙың йәне бар.

* Йән сыҡмайынса, ғәҙәт сыҡмаҫ.

* Йәне барҙың тыны бар.

* Йәне таҙаның аңы таҙа.[302]

* Кеше арбаһына ултырма,
Ултырһаң – үкенмә.

* Кеше бәхетенә көнләшкән үҙ бәхетен дә юғалтыр.

* Кеше гел бер килеш тормай.

* Кеше күңеле – ҡараңғы төн.

*Вариант:* Кеше күңеле – ҡара урман.

* Кеше күңеле таш түгел.

* Кеше менән кеше араһы – ер менән күк араһы.

* Кеше өйрәһе үҙенден буткандан тәмле күренә.
* Кеше тауығы ҡаҙ кеүек.
* Кеше үҙ ҡәҙерен үҙе арттырыр.
* Кеше холҡон күҙәт, үҙендекен төҙәт.
* Кешегә көнөн төшмәһен,
  Һаранға юлын төшмәһен.
* Кешене аңлауы – бер ҡыйын,
  Үҙенде аңлауы – мең ҡыйын.
* Кешене хур иткән үҙе ҙур булмаç.
* Кешенеке менән кешелекле булма.

  *Вариант:* Кешенеке менән йомарт булма.
* Кешенеке менән кештәкле булма.
* Кешенең байлығы бергә артҡанда,
  Ҡомһоҙлоғо бишкә арта.
* Кешенең күрке йөҙ булыр,
  Йөҙҙөң күрке күҙ булыр.
* Кешенең хөрмәте үҙ ҡулында.
* Кешенән күреп һикергән – йығылып башы тишелгән.
* Килбәте ниндәй – күләгәһе шундай.
* Кире кешенең аҡылы – кермәле лә сыҡмалы.
* Көйһөҙ әҙәмгә ай ҙа ярамай, көн дә ярамай.
* Көл аçтында ут торор.
* Көлә белгән бөлмәç.
* Көн тыуғас, айҙың төçө ҡасыр.[303]
* Көнләшкән ҡоро ҡалыр.
* Көнсө көнө – көйөнөс.
* Көнсөл кеше көн күрмәç.
* Көрләккә түҙмәһәң,
  Хурлыҡҡа түҙерһең.
* Көткән – моратына еткән.
* Көткәнгә – көтөү.
* Күҙ берҙе күрһә, күңел меңде күрә.
* Күҙ – даръя, күңел – быяла,
  Һаҡламаһаң, төшә лә ыуала.

* Күҙ – даръя, күңел – мәрйә.
* Күҙ ерҙә, күңел күктә.
* Күҙ күҙгә – тамаша.
* Күҙ – күҙгә яу.
* Күҙ – күңелдең көҙгөһө.
* Күҙ – күңелдең шишмәһе.
* Күҙ күрер, күңел теләр.
* Күҙ күреүҙән туймаҫ.
* Күҙ ҡайҙа – күңел шунда.
* Күҙ ҡартайыр, күңел ҡартаймаҫ.
* Күҙ ҡурҡаҡ, күңел батыр.
* Күҙгә күҙ төшөр,
  Күңелгә миһырбанлыҡ төшөр.
* Күҙҙең күргәне бер, күрмәгәне мең.
* Күҙе уҫалдан ҡырға ҡас.
* Күҙе һуҡырҙан күңеле һуҡыр яман.
* Күҙе һуҡырҙан ҡурҡма,
  Күңеле һуҡырҙан ҡурҡ.
* Күҙе һүнгәндең өмөтө һүнгән.
* Күҙһеҙҙең күҙе һуҡыр,
  Белекһеҙҙең күңеле һуҡыр.
* Күк тимер булат булмаҫ.
* Күккә атылған да ергә төшә.
* Күкрәгән болоттоң яуымы аҙ.
* Күкәй һалмаҫ тауыҡ көн элгәре ҡытаҡлар.
* Күңел – бала, күргәнен теләй.
* Күңел дарыуы – күңел.
* Күңел – диңгеҙ.
* Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе – ботаҡ тишеге.
* Күңел уйға туймаҫ,
  Үре ҡуйға туймаҫ,
  Күҙ ҡарауға туймаҫ.
* Күңел фарман теләмәй.
* Күңел – әүлиә.

* Күңелдәге серҙе күҙ белдерер.
* Күңеле киңдең донъяһы киң.
* Күңеле киңдең – урыны киң.
* Күңеле киңдең эше мең.
* Күңеле сафтың – эше саф.
* Күңеле пактың йөҙө аҡ.
* Күңеле тар – һөйөнмәҫ,
Күңеле таш көйөнмәҫ.
* Күңеле тарҙың көнө тар.
* Күңеле тарҙың өйө тар.
* Күңеле һуҡырҙың күҙе һуҡыр.
* Күңелең аҡ – йөҙөң шат.
* Күңелсәк күңеле менән көн күрә.
* Күңелсәктең күлдәге юҡ.
* Күңелһеҙ биҙәнер, йөрәкһеҙ киҙәнер.
* Күңелһеҙҙән көлкө сыҡмаҫ.
* Күп йөрөгән йыландың аяғы күренер.[304]
* Күпкә ҡыҙыҡма, аҙҙан ҡалырһың.
* Күпме бейек булһа ла,
Сигенмәһән – тауға менерһең,
Күпме ауыр булһа ла,
Сигенмәһәң – эште еңерһең.
* Күпме тәрән булһа ла, һыуҙың да төбө бар,
Күпме бейек булһа ла, тауҙың да түбәһе бар.
* Күпте өмөт иткән аҙҙан тороп ҡалған.
* Күргән күҙҙең яҙығы юҡ.
* Күрекленең башы бүрекле.
* Күрер күҙҙең ҡиммәте һуҡыр янында билгеле булыр.
* Күрер күҙ генә күрмәй, күңел күҙе лә кәрәк.
* Күрмәгән күҙҙән ботаҡ тишеге яҡшы.
* Күтәрелгәнгә күк тә түбән.
* Кәбән аҫтында ултырған сысҡан:
«Минең күләгәм ҙур», – тип әйтә, ти.
* Кәбән күрмәгән кәбән ишеге эҙләгән.

* Кәзәнең мөгөҙө ҡысыһа,
Көтөүсенең таяғына ышҡына.

* Кәкере бармаҡ эскә йомола.

* Кәкере ҡайынға ҡар йоҡмаҫ.

* Кәкере менән бөкөрө бер туған.

* Кәкере утын да тура яна.

* Кәкерене бөкөрө күрә алмай.

* Кәкеренең күләгәһе лә кәкере.

* Кәпәренеү күркәгә килешә.

* Кәрше ағаҫҡа* – ҡаты шына.

*Вариант:* Ҡаршы ағасҡа – ҡаты сөй.

* Ҡабыҡ ҡалын булһа ла, хаҡы бер тин.

* Ҡаҙ ҡаҡылдауын ҡуймаҫ,
Өйрәк баҡылдауын ҡуймаҫ.

* Ҡаҙан ҡараһы китер, күңел ҡараһы китмәҫ.

* Ҡаҙандан ҡара нәмә юҡ – ҡарыныңды туйҙыра,
Ҡарҙан да аҡ нәмә юҡ – аяҡ ҡулды туңдыра.

* Ҡаҙандың ҡоромо, ямандың ҡылығы йоғор.

* Ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмаҫ.

* Ҡайҙа ҡутыр булһа, ҡара себен шунда ҡуна.

* Ҡайын туҙына маһайыр,
Имән үҙенә маһайыр.

* Ҡаҡлаған ит бурһымай,
Ҡаҡса кеше ҡартаймай.

* Ҡанат сыҡмай осоп булмай.

* Ҡанға һеңгәнде йыуып та,
Юныш та бөтөрөп булмай.

* Ҡара кейеҙ ағармай.

* Ҡара кеше ҡыҙғансы, һары кеше яна башлай.

* Ҡара кешенең тире сыҡҡансы,
Һары кешенең йәне сыҡҡан.

* Ҡара ҡарға ҡанатын һабынлап йыуһаң да ағармаҫ.

* Ҡара тимер ҡайрау менән ҡорос булмаҫ.

* Ҡара һарыҡ тиреһен күпме йыуһаң да ағармаҫ.

* Ҡарайған бит тиҙ ағармай.
* Ҡараңғыла ҡалтырағансы, яҡтыла ялтыра.
* Ҡарға бөркөткә әйләнмәҫ.
* Ҡарға күҙе тиҙәккә төшөр.
* Ҡарға ҡаҡлағаныңды* ҡуймаҫ.
* Ҡарға ҡарғаны белер.
* Ҡарға маҡтанып шоңҡар булмаҫ,
Ишәк маҡтанып толпар булмаҫ.
* Ҡарғанан ҡарсыға тыумаҫ,
Ҡарсыға ҡарға булмаҫ.
* Ҡарғаның ике күҙе емтектә.
* Ҡарғаның үҙ тауышы үҙенә хуш.

*Вариант:* Ҡарғаның «ҡарҡ» тигәне үҙенә йәм.

* Ҡарлуғас һандуғасҡа эйәрә алмаҫ.
* Ҡарун малы – ҡар һыуы.
* Ҡаршы кеше уйын боҙор, тиҫкәре кеше йыйын боҙор.
* Ҡарышҡандың ҡарыны ас.
* Ҡарышып үҫкән ҡараманы турайта алмаҫһың.
* Ҡаты ағасты йомшаҡ ҡорт ашар.
* Ҡаты ергә ҡаҙыҡ кермәҫ.
* Ҡаты яуым тиҙ туҡтар.
* Ҡатын-ҡыҙ күрке – сәс тә ҡаш,
Ирҙәр күрке – мыйыҡ та һаҡал.
* Ҡаш алдырыу – яҙыҡ.
* Ҡиммәт таштың ауырлығы юҡ.
* Ҡоҙғон үләкһәнән ҡурҡмаҫ.
* Ҡойроҡ булғансы, баш бул.
* Ҡойроҡло йондоҙ көндә тыумай.
* Ҡомағай* ҡорһағы өсөн бәләгә төшөр.
* Ҡомһоҙ ҡомғанға тығылыр.
* Ҡомһоҙ тыу бейә ашаһа ла туймаҫ.
* Ҡомһоҙ туя ашаһа ла, «туйманым» тиер.
* Ҡомһоҙҙоң үҙе туйһа ла күҙе туймаҫ.

* Ҡомһоҙлоҡ – ҡанһыҙлыҡ.
* Ҡоро ботаҡ тиҙ һыныр.
* Ҡоро намыҫ бит йырта.
* Ҡороткан да күҙ, терелткән дә күҙ.
* Ҡорсаңғы ат эйәр һалдырмаҫ.
* Ҡорсаңғы атты себен дә талай.
* Ҡорсаңғы тай ҙа ҡашҡа булыр.
* Ҡоторған эт үҙ ҡойроғон үҙе сәйнәй.
* Ҡоторғандан ҡотолғаның хәйерле.
* Ҡоштоң кесеһе булғансы, эттең көсөгө бул.
* Ҡуҡшын* таҙҙа сәс үҫмәҫ.
* Ҡулы керһеҙҙең күңеле көр.
* Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр.
* Ҡупшы ҡатһа ла – ҡалтырамаҫ.
* Ҡупшы өшөмәҫ – ҡалтырар.
* Ҡурай өсөн тын кәрәк,
  Егет өсөн һын кәрәк.
* Ҡутырҙы сутыр күрә алмай.
* Ҡуштан бер алдыңа төшөр, биш артыңа төшөр.
* Ҡуштан ҡушҡанды көтмәҫ.
* Ҡуштан эт бүре киткәс өрә.
* Ҡуштан эшләп ярамаһа, кешнәп ярай.
* Ҡуштан – эшем эйәһе.
* Ҡуштанға ышанма, ҡушҡанға ышан.
* Ҡуянды ҡамыш үлтерә,
  Ирҙе намыҫ үлтерә.
* Ҡуяндың итен күр ҙә –
  Һурпаһынан (ҡалъяһынан) төңөл.
* Ҡыҙыл алманың эсе ҡорт.
* Ҡыҙыу кеше тиҙ ҡартайыр.
* Ҡымыҙға бешкәк кәрәк,
  Ишәккә күҫәк кәрәк.
* Ҡыйыш ағастың ботағы төҙ булмаҫ.

* Ҡыңғырауҙың эсе буш.

* Ҡырҡ йыл ямғыр яуһа ла, шыма ташҡа һыу үтмәҫ.

* Ҡырҡ йыл тауыҡ булғандан ҡырҡ көн әтәс булғаның яҡшы.

* Ҡырмыҫҡаның баҫҡаны тәңрегә аян*.

* Ҡырыҫланған эт ҡыңғыр йүгерер.

* Ҡыҫҡа еп көрмәүгә килмәҫ.

* Ҡыҫҡа мылтыҡтың шартлауы яман.

* Ҡыҫыр тауыҡ күп ҡытаҡлай.

* Ҡыҫыр һарыҡ күп баҡырыр.

* Ҡәҙерләгәндең ҡәҙерен бел.

* Ҡәнәғәтленең күңеле киң, тарлыҡта ла тарыҡмай.

* Май сүлмәге тышынан билгеле.

* Май сүлмәге майҙа аунай,
Көл сүлмәге көлдә аунай.

* Май таш менән баҫылһа ла өҫкә сыға.

* Маҡтансыҡ иренен ялар,
Алдаҡсы артына ҡарар.

* Маҡтансыҡ кешенән рәт сыҡмаҫ.

* Маҡтансыҡ мыйығын тырпайтыр,
Алдаҡсы ауыҙын ҡыйшайтыр.

* Маҡтансыҡҡа көн дә байрам, көн дә туй.

* Маҡтансыҡтың арты асыҡ,
Эшләмәһә – ҡоро ҡаҫыҡ.

* Маҡтансыҡтың бар аҡылы маҡтаныуға китер.

* Маҡтансыҡтың мороно күктә.

* Маҡтансыҡтың мороно күктә булһа ла, аяғы ерҙә.

* Маҡтансыҡтың өйөн күр.

* Маҡтаныу – хур итә, тыйнаҡлыҡҡа ни етә?

* Маҡтаһа – яҡшылығың теймәгән кеше маҡтаһын,
Яманлаһа – зыян теймәгән кеше яманлаһын.

* Мал малға оҡшай, әҙәм әҙәмгә оҡшай.

* Маңлайы киңдән төңөлмә,
Яурыны киңгә үрелмә.

* Матур кеше бәхетһеҙ була.

* Матур сәскә тиҙ ҡойола.
* Матур сәскәне ҡырау тиҙ ала.
* Матурлыҡ – байлыҡ.
* Матурлыҡ йөҙҙә түгел, һүҙҙә.
* Матурлыҡ китер, холоҡ ҡалыр.
* Матурлыҡ – күҙ өсөн,
  Холоҡ -- күңел өсөн.
* Матурлыҡ менән һыу буйламайҙар.
* Матурлыҡ морат түгел,
  Йәмһеҙлек оят түгел.
* Матурлыҡ – өс көнлөк,
  Яҡшылыҡ – ғүмерлек.
* Матурлыҡты табаҡҡа һалып, табынға сығармайҙар.

  *Вариант:* Матурлыҡты табаҡҡа һалып йөрөтмәйҙәр.
* Маһайған – башын утҡа һалған.
* Мейес һалғас та аҡлана,
  Намыҫ йәшләй һаҡлана.
* Менгән тауың бейек булһа, атҡан ташың алыҫ төшөр.
* Мең араһынан толпар сығыр,
  Йөҙ араһынан шоңҡар сығыр.
* Мең көн күләгә булып йөрөгәнсе,
  Бер көн кеше булыуың яҡшы.
* Меҫкен ишәккә һәр кем менә.
* Мин-минлеккә таянған бейек тауҙан йығылған.
* Мин-минлек башҡа етер.
* Мин-мин тигәнгә тәүбә бар,
  Һум тимергә балға* бар.
* Мин-мин тигәндең ҡулынан эш килмәҫ.
* Миһырбанлыҡ – йөрәктән,
  Миһырбанһыҙлыҡ – беләктән.
* Мөһөрлө кешелә миһырбан юҡ.
* Мәккәгә барыу менән ишәк хажи була алмай.
* Мәсхәрәнән үлем яҡшы.
* Мәйеле яман кешене ат өҫтөндә эт талар.

* Наҙлы наҙланғансы наҙһыҙ ашап туйған.
* Намыҫ аҡсанан ҡиммәт.
* Намыҫ белгән – көн күргән.
* Намыҫ – йәштән, оят баштан.
* Намыҫлы булһаң, намыҫһыҙ менән буталма.
* Намыҫлы кеше – ырыҫлы кеше.
* Намыҫлы ир хур булмаҫ.
* Намыҫты һатып та булмай, алып та булмай.
* Намыҫһыҙ – оялмаҫ,
Оятһыҙ – намыҫланмаҫ.
* Намыҫһыҙҙың ауыҙы алаптай, йөҙө ҡаптай.
* Намыҫың пак булмаһа, тышың аҡ булыуҙан файҙа юҡ.
* Намыҫың бысранһа, һабын менән йыуа алмаҫһың.
* Намыҫыңды йәштән һаҡла.
* Насар булыуға бисмилла кәрәкмәй.
* Насар кешегә таянғансы, һыуға таян.
* Наян* һүҙен бирмәҫ.
* Нигә өйрәнһәң, шуны ҡыуырһың.
* Нәкәҫ* асылынан ҡасыр.
* Нәпсе менән шайтан бер атанан.
* Нәпсе – шайтан, аҡыл – иман.
* Нәпсене нигә өйрәтһәң, шуны ҡыуыр.
* Нәпсене һимертһәң, үҙеңә бәлә өҫтәр.
* Нәпсенең атын һимертмә, менгәндә үҙеңде йығыр.
* Нәпсенең сиге юҡ.
* Нәпсеңде ҡыуа бирһәң – нәпсең туймаҫ булыр,
Нәпсеңде тыя бирһәң – нәпсең йыуаш булыр.
* Нәпсеңде тыймаһаң, бәлә алырһың.
* Нәпсеһенә эйәргән – шайтанға эйәрер.
* Нәпсеңә хужа бул.
* Оҙон тирәктең күләгәһе төбөнә төшмәҫ.
* Оло ат менән уйнаған тайҙың аяғы аҡһар.
* Ололоғоң артҡан һайын кеселегең артһын.

* Оронсоҡ атта ял юҡ.

* Осһоҙ ҡаҙыҡ ергә кермәҫ.

* Осонғандың ҡулынан ҡуян ысҡынған.

* Оялған туйҙан буш ҡалыр.

* Оялғандың ризығы тар.

* Оялмаған кеше өсөн оятлының йөҙө ҡыҙарыр.

* Оят барҙа хая бар.

* Оят баш ярыр.

* Оят башҡа файҙа итмәй.

* Оят – оятлы кешегә.

* Оятһыҙҙың күтәне ҡырҡ ҡолас.

* Ояты барҙың намыҫы бар.

* – Өндәшмәҫтә ниҙәр бар?
– Урты тулы уттар бар.

*Варианттары:* – Шымыҡайҙа ниҙәр бар?
– Ике уртында таштар бар.

– Шымда ни була?
– Урты тулы ҡом була.

* Өргән эт тешләмәй, аҫтыртын эттән һаҡлан.

* Өсаяҡтың өс аяғы ла уттан китмәҫ[305].

* Рәхимһеҙ кешенән рәхимле эт яҡшы.

* Сабатаңды түргә элмә.

* Сабыр иткән – моратына еткән.

* Сабыр төбө – саф алтын.

*Вариант:* Һабырлыҡ – һары алтын.

* Сабырлы – солтан,
Сабырһыҙ – шайтан.

* Сабырлы сыҙар,
Сабырһыҙ илар.

* Сабырлыҡ – алтын ҡалға,
Ҡыҙыулыҡ – башҡа бәлә.

* Сабырлыҡ – сәләмәт,
Сабырһыҙлыҡ – һәләкәт.

* Сабырлыҡтың сиге бар.

* Сабырһыҙға дәүләт ҡунмай.
* Сабыры юҡтың ҡәҙере юҡ.
* Сабышҡы сабыр, даны хужаһына ҡалыр.
* Саф булһаң,
Һыу кеүек бул,
Һыу һәр нәжесте* күтәрә.
* Саян асырғаланһа, үҙен-үҙе сағыр.
* Сей йүкәне ебетһәң, ҡайыштан ныҡ була.
* Сей тирене иләһәң, олтан булыр,
Үҙ нәпсеһен тыйған кеше солтан булыр.
* Сибәрҙән – улья*,
Сәсәндән – сауға*.
* Сибәрлектең сиге юҡ.
* Серек таҡта шына тотмаҫ.
* Серәкәй серелдәп еңер.
* Суртан тәрәндә солтан.
* Сүлмәктең тышы таш булһа ла, эсе ҡыуыштыр.
* Сәғәтең менән маҡтанма,
Ғәҙәтең менән маҡтан.
* Сәмле кеше – мәлле кеше.
* Сәсән ҡайҙа – һүҙ шунда,
Һылыу ҡайҙа – күҙ шунда.
* Сығымсы ат үрҙә туҡтай.
* Сығымсы ат тәртә һындыра.
* Сығымсы ат тәртә һындырыр,
Холоҡһоҙ кеше өйөн туҙҙырыр.
* Сығымсы ат юлда туҙа, уңмаған кеше эште боҙа.
* Сығымсы атҡа сыбыртҡы кәрәк.
* Сыҙа-сыҙа тигәс, һарыҡ та сыҙай.
* Сыҡмаған ямғырға септә бөркәнмәйҙәр.
* Сырайы юҡтың ырайы* юҡ.
* Сәркәш* этәс һимермәҫ.
* Сәүек* эт – ҡартайғанса көсөк.[306]
* Таҙҙың таҙы бөтһә лә, табы бөтмәҫ.

* Таҙҙың таҙ икәне, бүркен һалғас беленер.
* Таҡымлы* кеше аттан ҡоламаҫ.
* «Танауым йәмһеҙ» тип ҡырҡып ташлап булмай,
  «Тауҙы текә» тип аҡтарып ташлап булмай.
* Тау башындағы тәкәгә тау аҫтындағы арыҫлан сәләм бирер.
* Тау күрке – таш,
  Әҙәм күрке – баш.
* Тауға менеүе ҡыйын булһа ла, төшөүе анһат.
* Тауҙың күрке таш булыр, баштың күрке сәс булыр.
* Тауыҡ булыуға ҡарағанда – этәс булыу яҡшы.
* Тауыҡ ҡанат ҡаҡһа ла, оса алмаҫ.
* Тауыҡта ла һауа бар.
* Тауыҡтың аҙғаны этәс булып ҡысҡырыр.
* Ташҡа ҡаҙаҡ кермәй.
* Таштан йүкә һуйылмай.[307]
* *Вариант:* Таштан йүкә һыҙырмайҙар.
* Тернәкле әҙәм түрәне ҡол итер.
* Тешләнмә, тешең бөтөр.
* Тиҙ менгән тиҙ төшөр.
* Тиҙ янған тиҙ һүнер.
* Тоҙҙай әсе булма,
  Балдай татлы булма.
* Толпарҙан тояҡ ҡалыр,
  Шоңҡарҙан ҡыяҡ ҡалыр.
* Толпарҙың үҙ тояғы үҙенә еңел.
* Тормошто белеү – ғилем,
  Үҙеңде белеү – һөнәр.
* Торомтайҙан йылғыр ҡош булмаҫ,
  Турғай ташлап, ҡаҙ алмаҫ.[308]
* Төлкө артынан йөрөп, көлкөгә ҡалма.
* Төлкө ете бүрене етәкләй (хәйләһе менән).
* Төлкө мең хәйлә белер, тиреһен ҡотҡармаҫ.
* Төлкө тиреһе менән ҡәҙерле.
* Төлкө тиреһенән тун тегәләр.

* Төлкө хәйләкәр булһа ла, кешенән ҡотолмай.

* Төлкөгә баш булғансы, арыҫланға ҡойроҡ бул.

* Төлкөнөң башынан ҡойроғо оҙон.

* Төлкөнөң хәйләһе үҙе менән.

* Төҫө барҙан төңөлмә,
  Төҫө боҙоҡтан – төңөл.

* Төҫө боҙоҡтоң эсе боҙоҡ.

* Туғыҙында ни булһа, туҡһанында ла шул.

* Туйған – нәпсеһен ҡуйған.

* Туҡран тәүбәһе таңға тиклем.

* Түбән осҡан юғары ҡуныр.

* Түҙгән – тимер өҙгән.

* Түҙгән – түш ейер.

* Түҙгән – түл йыйған.

* Түҙемле төплө эшләр.

* Түҙемле түҙгәк булыр.

* Түҙемһеҙ кешегә ни етмәй?
  – Аҡыл етмәй.

* Түҙемһеҙ уңмаҫ, түҙемле уңыр.

* Тымыҙыҡ күлдә ҡорт уйнай.

* Тымыҙыҡ һыуҙың төбө ҡорт.

* Тымыҡ күлдә табан ятыр.

* Тымыҡ күлгә шайтан оялай.

* Тыңлауһыҙға һүҙ әйтһәң,
  Тыңлай-тыңлай артынан йүгерерһең.

* Тыумаған балаға бишек әлмәйҙәр.

* Тыумаған баланың кендеген ҡырҡма.

* Тыумаған тай, алтын эйәр – атланып билен һындырма.

* Тыумаған тайҙы дағаламайҙар.

* Тыумаған тайға нуҡта үрмә.

* Тыумаған тура алашаның бил һөйәген һындырма.

* Тәкә мөгөҙө тауға етмәҫ,
* Дөйә ҡойроғо ергә етмәҫ.
* Тәкәнең мөгөҙө Тәңрегә (күккә) етмәҫ.
* Тәкә һөҙөп тау йыҡмаҫ.
* Тәкәбберҙең танауына таяҡ буйламай.
* Тәкәбберҙән Тәңре биҙгән.
* Тәҡәтлегә тау баш эйгән.
* Тәмһеҙҙе балға һалһаң да, тәмле булмаҫ,
  Йәмһеҙҙе, йәмгә манһаң да, йәмле булмаҫ.
* Тәне матур матур түгел, йәне матур – матур.
* Тәртип барҙа тәүфиҡ бар.
* Уғың бушҡа атма, күңелең юҡка һатма.
* Уҙамтан ат тәртә һындырыр.
* Уйлаған – бер отҡан,
  Тәүәккәлләгән – ике отҡан.
* Умырзаяның ғүмере бер көн.[309]
* Уңмаған уйын боҙор.
* Уңыш башы – түҙемдә.
* Урман айыуы яланға сыҡмаҫ,
  Алабута эҙләп, урманға дөйә инмәҫ.
* Урман ҡыуаҡһыҙ булмай.
* Урынлы йомартлыҡ – ҙурлыҡ,
  Урынһыҙ һаранлыҡ – хурлыҡ.
* Усал кеше аҫтан киҫә, өҫтән ямай.
* Усал кеше – яман була, уртаса усал яҡшы була,
  Йыуаш кеше – шаҡшы була.
* Усал менән табышма,
  Табышһаң, алышма.
* Усал усаллыҡ итер – усаллығы башына етер.
* Усал эт тешенән яҙыр,
  Хәйләкәр төлкө ҡойроғон өҙҙөрөр.
* Усалдан усал тыуа, тора-тора донъя тула.
* Усалдың түбә сәсе үрә торор.
* Усаллыҡ еңмәҫ, туралыҡ еңер.

* Ут утындан туймаҫ,
Күҙ ҡарауҙан туймаҫ.

* Үгеҙ үкергәндә, муҫкә мөскөлдәй.

* Үгеҙгә үҫкән мөгөҙ ишәккә сыҡһа,
Йыҡмаған затты ҡалдырмаҫ ине.

* Үгеҙҙең үҙ мөгөҙө үҙенә ауыр түгел.

* Үҙ башын ҙур тотҡан, кеше башын хур иткән.

* Үҙ кендегең аша үҙең һикерә алмаҫһың.

* Үҙ ҡулың үҙеңә тарта.

* Үҙ ҡәҙерен белгән – солтан,
Белмәгән – олтан.

* Үҙ ҡәҙерен белгән, кешене лә ҡәҙер итер.

* Үҙ ҡәҙереңде үҙең бел.

* Үҙ самаңды үҙең бел.

* Үҙ урынын белмәгән урынһыҙ ҡалыр.

* Үҙ-үҙеңде маҡтама,
Кеше һине маҡтаһын.

* Үҙен белгән кешене лә белер.

* Үҙен-үҙе белмәгән үгеҙҙән иҫәр баш булыр.

* Үҙен-үҙе белмәгән – танауын күккә күтәргән.

* Үҙен-үҙе тыймаған – кеше араһына һыймаған.

* Үҙен юғары һанаған – түбән кеше,
Үҙен түбән һанаған – аҡыллы кеше.

* Үҙең үлһәң дә, исемең үлмәһен.

* Үҙең ярлы булһаң да, намыҫың бай булһын.

* Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.

* Үҙеңде үҙең маҡтама, һинән аҡыллылар бар.

* Үҙеңдән ҙурға юл бир.

* Үлгән һыйыр һөтлө була.

* Үпкәсенең өйөнә бар.

* Үткер бәке тиҙ кителә.

* Фарты* юҡтың даны юҡ.

* Халыҡ барҙа холоҡ бар,
Халыҡтың яман телсно кермә.

* Холҡо насар кешене,
Аҡылы булһа ла, иҫәр тиерҙәр.
* Холоҡлоноң күңеле хуш.
* Холоҡһоҙ үҙ хол(о)ҡон белмәҫ,
Кеше әйткәнгә түҙмәҫ.
* Хөрлөккә сыҙамаған – хурлыҡҡа тарыған.
* Хур иткән дә ғәҙәт, ҙур иткән дә ғәҙәт.
* Хурлыҡтан үлем артыҡ.
* Хәйлә – алты, аҡыл – ете.
* Хәйләкәргә ышанма:
Йомшаҡ һөйләп, ҡатыға ултыртыр.
* Хәйләкәрҙә тараҡан аяғы.
* Хәйләһеҙ батыр тиҙ үлер.
* Хәлеңдән килмәһә, намыҫ ҡойроғон ҡыҫа.
* Хәтер – тишек иләк.
* Хәтерһеҙҙең хәтерен кәзә ашаған.
* Һағыҙаҡ күп ерҙә себен өсөн урын юҡ.
* Һаҙлы күлдә ҡорт уйнай.
* Һайыҫҡан һайрау менән һандуғас булмаҫ.
* Һаҡал – ырыҫҡал түгел.
* Һаҡаллы кеше ҡыл яратмай.
* Һаҡалһыҙ кеше – ырыҫҡалһыҙ кеше.
* Һалпы, йөрөп, төҙәлә.
* Һандуғас булһаң, һайрай ҙа бел.
* Һандуғас йырын йырлайым тип, үҙ йырыңды онотма.
* Һандуғас үҙ ҡәҙерен үҙе белер.
* Һандуғас һайрап еңер,
Ҡарға ҡарҡылдап еңер.
* Һандуғас юҡ йылды ҡарға дан тотор.
* Һаран аҡсанан туймаҫ.
* Һаран бай хәйерсенән ярлыраҡ.
* Һаран кешенең ишегенән эт баҡмаҫ,
Төндөгөнән ел ҡаҡмаҫ.

* Һаран кешенең үҙенә лә юҡ,
Кешегә лә юҡ.
* Һаран ҡатын ҡунаҡ алында балаһын ҡыйнар.
* Һаран малы тәләфкә.
* Һаран өс һалыр, өс һалғанда ла кәм һалыр.
* Һаран һайрап ышандырыр.
* Һаран усын асҡанда тешен ҡыҫыр.
* Һаранға мал биреүҙән йән биреү еңел.
* Һаранға – һармаҡ,
Балыҡҡа – ҡармаҡ.
* Һаранға тарыма, тарыһаң, арыма.

*Вариант:* Һаранға тошоҡма*, тошоҡһаң, бошоҡма.

* Һаранға һарылма.
* Һаранға һарылма, балыҡҡа ҡарылма.
* Һарандан мал алһаң – зыян итерһең,
Ат алһаң – ташлап китерһең.
* Һарандан һарҡыт та артмай.
* Һарандың ашын эт ашай.
* Һарандың бутҡаһы шыйыҡ булыр.
* Һарандың ҡарыны туйыр.
* Һарандың малы – башына ҡаза.

*Вариант:* Һарандың малы – башына ҡан.

* Һарауһыҙ һаҡлағанды ҡуймаҫ,
Ҡарға ҡаҡлағанды ҡуймаҫ.
* Һауалағы ҡошто атмаҫ элек һатмайҙар.
* Һауаны – йондоҙ,
Ирҙе – һаҡал,
Ҡатын-ҡыҙҙы сәс матурлай.
* Һере* кеше һыр бирмәҫ.
* Һигеҙ йәштәге холоҡ һикһән йәшкә кәҙәр.
* Һимеҙ ат артыҡ туйһа, лапшыҡ* булыр.
* Һимеҙ тауыҡтың арты бөрөшә.
* Һимеҙлек ҡуйға килешер.

*Вариант:* Һимеҙлекте ҡуй күтәрә.

* Һиммәтле кеше – ҡиммәтле кеше.

* Һөйкөмһөҙҙөң күрке юҡ,
Талымһыҙҙың таты юҡ.

* Һөймәҫ кеше һыймаҫ, ауыҙы ҡош тотһа ла,
Күҙе юҡ күрмәҫ, таяғы юл тапһа ла.

* Һөйәк булһа, ит ҡуныр.

*Вариант:* Һөйәге булһа, ите булыр.

* Һөт менән кергән һөйәк менән китер.

*Варианттары:* Һөт менән ингән менәҙ* һөйәк менән бергә китер.
Һөт менән кергән йән менән сыҡҡан.

* Һөттән аҡ, һыуҙан пак бул.

* Һуҡыр таяғын, аҡһаҡ аяғын, һаран аҡсаһын һөйләй.

* Һуҡыр тотһа – ныҡ тотор,
Сулаҡ һуҡһа – ныҡ һуғыр.

* Һулаҡайға һурпа юҡ.

* Һыйыр һыйпағанды белмәҫ.[310]

* Һыйырға тоҙло һыу күрһәтмә.

* Һылыу ҡайҙа – күҙ шунда.

* Һылыулыҡ менән һыу буйлап булмай.

* Һыу күргәндең тәһәрәте бар.

* Һыу түбәнгә ағыр, әҙәм – үргә.

* Һыуға етмәй сисенмә: тиле икән тип, көлөрҙәр.

* Һыуҙа көмөш иремәҫ.

* Һәләтһеҙҙең ҡоласы бер ҡарыш.

* Һәр бер шаҡшы үҙенә-үҙе әйтә: «Мин яҡшы».

* Һәр кем үҙенә үҙе әллә кем.

* Һәр кемдең бер йомшаҡ яғы була.

* Һәр кемдең зауығы үҙенә күрә.

* Һәр кемдең үҙ аршыны бар.

* Һәр кемдең үҙ ҡылығы.

* Һәр кешелә бер ғәҙәт.

* Һәр ялтыраған алтын түгел.

* Шайтан таяғы сүплек башында.

* Шайтан таяғын ҡырау һуҡмай.

* Шар-мар кеше һүҙ күтәрә,
Аҫтыртын бот күтәрә.

* Шаталаҡ шаулар, аҫтыртын көлөр.

* Шаталаҡтың теле уйнар,
Ҡыбырсыҡтың* арты уйнар.

* Шаян кеше – яҡшы кеше,
Йыуаш кеше – шаҡшы кеше.

* Шым аҡҡан һыуҙан,
Өрмәй торған эттән һаҡлан.

* Шыраулы ағас ҡулға керә.

* Шәп яуған ямғыр ергә һеңмәй.

* Ыласындың ҡоласы киң.

* Ынйы бөртөгө ҙур булмай.

* Ырғығанда икеләнмә – ҡоларһың.

* Эләксен эт йөрөп бүре алмаҫ.

* Эт аҙғыны буранда ҡоторор,
Ир аҙғыны урамда ҡоторор.

* Эт бесәнде үҙе лә ашамай,
Атҡа ла ашатмай.

* Эт күҙе төтөн белмәҫ.

* Эт ҡайышы өҙөлмәй.[311]

* Эт тиҙәге дарҡар* булһа, донъяға сығыр.

* Эт үҙ ҡойроғон күтәрмәһә, уны кем күтәрер?

* Эт һарҡытын арыҫлан еймәҫ.

* Эттең ҡойроғо үҙенә төҫ.

* Эттең тамағы ҡайҙа туйһа, башы шунда.

* Эттән һөйәк артмаҫ.

* Эшлекһеҙ кеше маҡтансыҡ булыр.

* Эшең аҡ булһа, йөҙөң пак булыр.

* Эште эшлә юғарыға ҡарап,
Сабыр ит түбәнгә ҡарап.

* Әҙәм башы таш түгел (ауырлыҡтың да сиге бар).

* Әҙәм көрлөктән үлмәй, хурлыҡтан үлә.

* Әҙәм күҙе ағас ҡоротор.

* Әҙәм менән әҙәм араһы – ер менән күк араһы.

* Әҙәм тарпаны – маймыл,
Ат тарпаны – болан.

* Әҙәмде әҙәм иткән – әҙәп.

* Әҙәм фәрештә булмаҫ.

* Әҙәп барҙа иман бар,
Әҙәп юҡта иман юҡ.

* Әҙәп барҙа оят бар.

* Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң – әҙәм булырһың,
Яманға ғәҙәтләнһәң – әрәм булырһың.

* Әҙәпле кеше – солтан,
Әҙәпһеҙҙең бите – олтан.

* Әҙәпһеҙгә иман юҡ.

* Әҙәпһеҙгә ҡәберең яҡын булмаһын.

* Әҙәпһеҙҙән әҙәп өйрән.

* Әҙәп һалған мал үҫмәҫ,
Таҙ кешенең сәсе үҫмәҫ.

* Әрһеҙ әҙәм һимерер.

* Әрһеҙлек – үҙең өсөн,
Баҫалҡылыҡ – кеше өсөн.

* Әсе һуған үҙ ҡабығын үҙе яндыра.

* Әсәнән ҡыйшыҡ тыуған ҡашыҡҡа һалһаң да тураймаҫ.

* Әсә һөтө менән инмәгәнгә кәзә һөтө менән инмәҫ.

* Әтәс ҡойроғо менән,
Ир мыйығы менән,
Ҡатын-ҡыҙ сәсе менән матур.

* Юғары осҡан түбән ҡуныр.

* Юғарыға менгәс, түбән ҡарама.

* Юғарынан йығылған ҡаты төшөр.

* Юрғаның юлы күп.

* Юханың кендеге булмаҫ.

* Юханың теленә алданма.

* Ябалаҡҡа көндән төн яҡты.

* Ябалаҡты һыйпау менән шоңҡар булмаç.

* Ябалаҡтың йөнө күп, арыçландың ялы күп.

* Яғымлының шаҙраһы күренмәй,
 Һөйкөмлөнөң һипкеле күренмәй.

* Яҡшы ат алыçтан алдыра.

* Яҡшы атта ла бер холоҡ була.

* Яҡшы аттың йөрөшө тигеҙ,
 Яҡшы кешенең холҡо тигеҙ.

* Яҡшы ғәҙәт әҙәм итер,
 Яман ғәҙәт әрәм итер.

* Яҡшы эш ҡайҙа булһа – яҡшы исем шунда.

* Ялағай табан ялар.

* Ялағай яҡкан ерҙән тырнар.

* Ялағайҙы яллайһы юҡ.

* Ялған даның таралғансы, яман атың таралһын.

* Яман атҡа ял бөтһә, янына турһыҡ бәйләтмәç.

* Яман һыйыр ярҙа быҙаулай.

* Яманатҡа ҡалғансы, яман ярҙан ос.

* Яман кеше дәрәжә күтәрмәç.

* Яман кеше – көнсөл.

* Яман кеше ҡор боҙа.

* Яман күҙҙән һаҡлан.

* Яман ҡаҙан ашыға ҡайнар.

* Яман эт көндөҙ өрә.

* Яман әҙәм ялағай булыр.

* Яманланған эҙләнер,
 Маҡталған теҙләнер.

* Ярһыу ат тиҙ арыр.

* Ярыҡ кәмә ярҙа ятыр.

* Яһил яныл үткәрә.

* Яһилға яҡын булма.

* Яшыҡта* май тормаç.

* * *

* Аҙнаһына биш йома.

* Ажаған* ашлыҡ бешерә.

* Ай менән көндәй, һәр кемгә берҙәй.

* «Айт» тигәнгә «тайт» иткән.

* Алланың кеме юҡ, һөҙәйем, тиһә – мөгөҙө юҡ.

* Алып маҡтарлыҡ түгел,
Һалып таптарлыҡ түгел.

* Арба ватылһа – утын,
Үгеҙ үлһә – ит.

* Арғы яҡта – алабай,
Бирге яҡта – ялағай.

* Арпа араһында бер бөртөк бойҙай.

* Арыҫландың айға менәм тип, биле биртенгән.

* Арыҫлан менәм тип, аяғын һындырған [берәү].

* Ат, кешегә ярайым тип, муйынына ҡамыт кейгән.

* Ат саба тип, эт саба,
Эт саба тип, бет саба.

* Атҡа менгәс, атаһын танымаған.

* Атлы кеше төшөп ҡарар, атһыҙ кеше ятып ҡарар.

* Аты бер булһа ла, заты башҡа.

* Аты оло, ҡабырғаһы ҡоро.

* Атмаған ҡуян, аҫмаған ҡаҙан.

* Ауыҙыңдан кереп, танауыңдан сығыр.

* Аяғы салғы һабындай,
Ауыҙы күмер ҡабындай.

* Бай ултырғанда бүрек һалған,
Ярлы уҙғанда көлөп ҡалған.

* Байҙың малын һаран ҡыҙғанған.

* Барабан ҡаҡһалар, барабан артынан,
Ҡумыҙ тартһалар, ҡумыҙ артынан.

* Бар булһа, бирә алмай,
Юҡ булһа, күрә алмай.

* Батҡаҡтан бысраҡ ерәнә.

*Вариант:* Бысраҡтан әшәке ерәнә.

* Бер күҙе көлә, бер күҙе илай.

* Бер күҙенә аҡ һалған, икенсеһе саҡ ҡалған.

* Бер күҙе мәғриптә*, бер күҙе мәшриҡта*.

* Бер күлде һаҫытып, икенсе күлгә төшкән.

* Бер ҡараһаң – терпе,
Икенсе ҡараһаң – төлкө.

* Бер ҡулында аш,
Бер ҡулында таш.

* Бесәй ҡанатлы булһа, илдә турғай ҡорор ине.

* Битенә ҡаймаҡ яҡһаң – эт яламаҫ.

* Биш ҡойроҡло кәмә.

* Бүренеке ерҙә, ҡоҙғондоҡо ағас башында.

* Бүренеке – уртаҡ,
Торнаныҡы – ағас башында.

* Бөтә донъяны һыу алһа, өйрәккә ни ҡайғы?

* Герәҙҙән* кенәз булған.

* Дарыһы ҡоро, һүҙе туры.

* Дөйәләй буйың булғансы,
Төймәләй аҡылың булһасы.

* Дәүләте диңгеҙ булған, үҙе Сыңғыҙ булған.[312]

* Ел теймәҫ ерәнсә,
Бил бирмәҫ көрәнсә.

* Елкәлә күҙ юҡ.

* Ике донъя, бер мөрйә.

* Ике ятып бер төшөмә керә.

* Иләмәгән, текмәгән, иллә елле туным бар.

* Иләнмәгән, һуғылмаған,
Шаҡай*, һиңә бер ынйы.

* Исеме күктә, аяғы ерҙә.

* Исеме оло, арты ҡоро.

* Исеме – бер, есеме – икенсе.

* Инәһе үлмәй сирмеш* суҡынмай.

* Иҫәпкә бар, һанға юҡ.

* Ишектән ҡыуһаң, тишектән инер,
  Тишектән ҡыуһаң, мөрйәнҙән инер.

* Йөҙө айҙай,
  Теле майҙай,
  Күҙе тоҙҙай,
  Күңеле боҙҙай.

* Йыл да ҡолан, йыл да тай.

* Йылан артынан сабам тип, тәлмәрйен ботон һындырған.

* Йыландың теле айыры.[313]

* Йыуашлыҡты беләләр, тоталар ҙа үбәләр.

* Кеше көшөлөн осора, үҙенекен ел алмай.

* Күҙ тигәнең – биҙ.

* Күҙ тигәнең – ботаҡ тишеге.

* Күҙ тигәнең – диңгеҙ.

* Күҙе ҡашыҡтай – күреүе балсыҡтай.

* Күҙе ялтырай, үҙе ҡалтырай.

* Күрмәгәнен күргән, күн итеген кейгән.

* Кәйләм үтмәһә, хәйләм үтер.

* Кәзә ҡойроҡ күтәрә тип,
  Һарыҡ та ҡойроғон күтәргән.

* Ҡабыҡ ҙур ҙа, хаҡы бер тин.

* Ҡаҙан ҡаҙанға «ҡара» тигән,
  Табаның көлөүҙән һыны ҡатҡан.

* Ҡаҙға эйәрәм тип, ҡарғаның бото һынған.

* Ҡарға ояһына торна оялаған.

* Ҡарға, һайыҫҡан йөрөүен йөрөйөм тип,
  Үҙ йөрөүен онотҡан, имеш.

* Ҡоҙғон ҡарғаны «ҡара» тип хурлаған.

* Ҡолойҙан ҡурҡып, Әҙһәм суҡынған.[314]

* Ҡоро таяҡҡа ҡалған.

* Ҡояш булһа, кеше өҫтөнә сыҡмаҫ ине.

* Ҡурғашты көмөш тигәндәр, ирегән дә төшкән, ти.

* Ҡуян алмаҫ, көнө ҡалмаҫ.

* Ҡыҙғанғаның – ҡыҙыл эткә.

* Ҡылды ҡырҡҡа яра.

* Ҡырҡ кеше бер яҡта,
Ҡырын кеше бер яҡта.

* Ҡыпыштаң ҡоро ҡалған.

* Маймыл, кеше ни эшләһә, шуны эшләй.

* Мин күрмәгән аҙ булыр,
Бохарҙағы таҙ булыр.

* Мортона* асыуы килеп йөрөгәндә, һаҡал сыҡҡан.

* Мулла янында мулла, юрға янында юрға.

* Мүкләк* һыйыр һөҙөшкән,
Аҡһаҡ бейә тибешкән.

* Мәсеткә йөрөй, сиркәүҙә шәм яға.

* Мыҡый – ауыҙы менән бутҡа туҡый.

* Ни аллаға, ни муллаға.

* Ни ите, ни һөтө.

* Ни кешегә, ни күршегә.

* Ни он һыуы, ни тоҙ һыуы.

* Орлоғо Бохарҙа* түгел.

* Өйөндә – этәс, урамда – себеш.

* Өлкән өйҙә көлгәнгә,
Кесе өйҙә ыржайған.

* Өҫтө күкәй ҡабығы, аҫты торна тоҙағы.

* Оятын олтораҡ иткән.

* Себен теймәҫ сер итер.

* Себен тейһә – сер итер,
Туҡмаҡ тейһә – туп итер.

* Сибәр –
Күрһәң, ғәйрәтең сигәр.

* Сиған арбаһынан төшөп ҡалған (Ҡара кешегә ҡарата).

* Сирләмәгән сир тапҡан: кире сире йәбешкән.

* Сүлмәк ҡаҙандан көлгән.

* Суйын сүлмәккә: «Йөҙөң ҡара», – тигән.

* Сырайым яман булһа ла, ырайым яҡшы.

* Танауын сөйгә элгән.

* Тауыҡ күкәй һалғанға әтәсте тулғаҡ тота.

* Тауыҡ ҡытаҡлай тип, әтәс тә ҡытаҡлаған.

* Тауыҡ тауға менгәс, әтәс булып ҡысҡырған, ти.

* Таяуға – терәү, йыртыҡҡа – ямау.

* Тел осо татлы,
Төбө – ҡортло.

* Тере булыр – һанда юҡ,
Үле булыр – гүрҙә юҡ.

* Типһә – тимер өҙөрлөк,
Баҫһа – баҡыр бөгөрлөк.

* Тишеккә – тығын,
Йыртыҡҡа – ямау (ҡормау).

*Вариант:* Тишеккә ямау булып йөрөй.

* Торна оятын оятлап, ябалаҡ урманға ҡасҡан.

* Төкөшә торған тәкәгә Хоҙай мөгөҙ бирмәгән.

* Төндөгөнән ел өрмәй, ишегенән кеше кермәй.

* Төп атаһы – Майҡы бей.[315]

* Туҙынма, туҙыңа ут ҡабыр.

* Тутыйғош булам тип, һайыҫҡан үҙ тауышын онотҡан.

*Вариант:* Тутыйғошто әләкләгән һайыҫҡан үҙ атлауын онотҡан.

* Тыумаған балаға туҙ бишек.

* Тыштан йыуаш, эстән шайтанға юлдаш.

* Тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай.

* Тышы гөл кеүек, эсе көл кеүек.

* Тышы – мамыҡ, эсе – ҡабыҡ.

* Тышы – ут, эсе – мут.

* Тәкәнең тауға менмәһә, тояғы ҡысый, ти.

* Тәртәһе ҡыҫҡа ҡайыра.

* Тәлмәрйен, үгеҙ булам тип, эсен ярған.

* Тәүҙә үҫкән ҡолаҡтан һуңынан үҫкән мөгөҙ үтә.

* Унын бесәйе лә ҡуян тота.

* Уң да юҡ, һул да юҡ,
Үҙе тотҡан юл да юҡ.

* Үгеҙ үлһә, ит булыр,
Тана үлһә, бит туңыр.

* Үҙ күмәсенә көл тарта.

* Үҙ өйөндә – һыу сүлмәге,
Кеше өйөндә – май сүлмәге.

* Үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле.

* Үҙе бер ҡарыш – һаҡалы мең ҡарыш.

* Үҙе белмәҫ, кеше уңайына килмәҫ.

* Үҙе туймаҫтың күҙе туймаҫ.

* Үҙе ут сәсә, үҙе һыу һибә.

* Үҙем ишәк була тороп, атты еткерә буламмы!

* Үҙем түрҙә, исемем илдә.

* Үҙем түрҙә, һүҙем үрҙә.

* Үҙемдеке тигәндә, үгеҙҙәй ҡара көсөм бар,
Кешенеке тигәндә, булыр-булмаҫ эшем бар.

* Үҙемә тейһә, үҙәгемә тейә.

* Үҙең һарыҡ булғас, һуйғанда тыпырсынма.

* Һабын ҡара булһа ла, аҡ йыуа.

* Һабын ҡыуығы тиҙ шартлай.

* Һайыҫҡан, турғайҙы үсекләп, үҙ йөрөшөн онотҡан.

* Һайыҫҡанды буяу менән тауис булмаҫ.

* Һаҡалына сал кергәнсе, күкрәгенә аҡыл кермәгән.

* Һаҡау һаҡауҙы үсекләй.

* Һандуғас һайрай тип, ҡарға ҡысҡырған.

* Һандуғас һайрағанда, турғай тик тора.

* Һарыһына ҡатҡан.

* Һауалағы торна торҡолдағанда, ерҙәге ҡаҙ ҡаҡылдай.

* Һеркәһе һыу күтәрмәй.

* Һипкелле – һөйкөмлө.

* Һөҙә торған һыйырға Хоҙай мөгөҙ бирмәгән.

* Һөрөлмәгән ер өҫтөндә тыумаған ҡуян балаһы.

* Һыйыр быҙаулағансы көткән, ыуыҙ бешкәнсе көтмәгән.

* Һәнәктән көрәк булған.

* Шаҙра, шаҙра йөрәк яндыра.

* Шаҙра шаҡмаҡ, утын туҡмаҡ,
Бәргелә лә – мейескә яҡ.[316]

* Эсе ыумас ыуа, тышы йәймә йәйә.

* Эт – баш, һыйыр – аяҡ.

* Эт тиһәң – йөнө юҡ, әҙәм тиһәң – йүне юҡ.

*Вариант:* Эт тиһәң – ҡойроғо юҡ,
Һыйыр тиһәң – мөгөҙө юҡ.

* Әҙәм тиһәң – һыны юҡ,
Күркә тиһәң – йөнө юҡ.

* Эт әрһеҙе – Алабай.

* Әлеге лә баяғы, шул болғатҡыс таяғы.

* Әтәлге, шоңҡар булам тип, типкеһенән яҙған.

* Әтәс булып етмәгән, ситәнгә менеп «кикерик», ти.

* Әтәс үлгән, күҙе сүплектә ҡалған.

* Ябалаҡ оятынан ҡарсыға ояла.

* Янындағын күрмәгән, диңгеҙ ярындағын күргән.

## 2. Батырлыҡ, ҡурҡаҡлыҡ, хаинлыҡ

* Ағастың тамырына балта сабып, япрағы менән дуҫ булма[317].

* Айыу атырҙың аяғынан, бүре атырҙың бүрегенән билгеле.

* Айыу беләгенә ышаныр, егет йөрәгенә ышаныр.

* Айыу – өңөндә, ҡурҡаҡ өйөндә көслө.

* Айыу үлеме – тауҙа, батыр үлеме – яуҙа.

* Алғыр кеше алымынан билдәле.

* Алтмыш көн ат булғансы, алты көн айғыр бул.

* Алыптың ауыҙ һөтө ат өҫтөндә йөрөп кибер.

* Арғымаҡ алын бирмәҫ[318].

* Арғымаҡ ат юл башлар,
Аҡыллы егет ил башлар,

Батыр егет яу башлар,
Сәсән егет дау башлар.

* Арғымаҡ һыйпау һөймәç,
Алаша маҡтау һөймәç.

* Арыçлан аста төлкө туҡ, тәүәккәл ирҙә ҡайғы юҡ.

* Арыçлан ау тапмай ҡайтмаç.

* Арыçлан тырнағынан билгеле.

* Арыçлан, хәлдән тайһа ла, бер һарыҡлыҡ көсө бар.

* Аçыл кеше «алтын» тип үлмәç,
«Халҡым» тип үлер.

* Аçыл шоңҡар ҡаҙ алһа, ҡанатын ҡанға тигеҙмәç.

* Ат аçылы – юртаҡ,
Өрәгәс эт ҡурҡаҡ.

* Ат булһа, майҙан табыла,
Ат булмаһа, майҙан ябыла.

* Ат дағаһыҙ булмаç,
Батыр яраһыҙ булмаç.

* Ат даны егет ҡулында,
Егет даны үҙ ҡулында.

* Ат кәбәндән ҡурҡмаç.

* Ат менән ишәк ярышмаç.

* Ат тешенән билдәле,
Егет түшенән билдәле.

* Ат үлер – эт көлөр.

* Ат үлеме – эткә туй.

* Ат үлер, дағаһы ҡалыр,
Батыр үлер, даны ҡалыр.

* Ат үлер, майҙан ҡалыр,
Егет үлер, дан ҡалыр.

* Ат үлһә, майҙан ҡалыр.[319]

* Ат үлһә, эйәре ҡалыр.

* Ат сапҡанда беленер.

* Ат юлда һынала, егет яуҙа һынала.

* Ат яҡшыһы – тауҙа,
Ир яҡшыһы яуҙа беленер.

*Вариант:* Ат тауҙа, егет яуҙа һынала.

* Аттың матурлығы башында,
Егеттең матурлығы түшендә.

* Аттың – өркәге,
Егеттең ҡурҡағы яман.

* Аттың яҡшыһы алға сыға,
Егеттең яҡшыһы данға сыға.

* Атланған батыр аттан төшмәҫ.

* Бай маҡтанһа – бер йортлоҡ,
Батыр маҡтанһа – бер уҡлыҡ.

* Байлыҡ – бер айлыҡ,
Батырлыҡ – мәңгелек.

* Байлыҡ күрке мал менән,
Батыр күрке дан менән.

* Байтал, сабып, бәйге алмаҫ.

* Баҫһаң, баҡыр өҙөрлөк,
Типһәң, тимер өҙөрлөк бул.

* Батыр алдында арыҫлан да ҡуян.

* Батыр ауғанда ер һелкенер.

* Батыр ашы ерҙә.

* Батыр батҡаҡтан ҡурҡмаҫ.

* Батыр батыр менән алышыр.

* Батыр бер үлер, ҡурҡаҡ мең үлер.

* Батыр булһаң, көрәш.

* Батыр ғүмере ике.

* Батыр даны – көрәштә.

* Батыр даны юйылмаҫ.

* Батыр дошман ҡыуҙым, тиер,
Ҡурҡаҡ ниңә тыуҙым, тиер.

* Батыр егет – яу күрке,
Сәсән егет – дау күрке.

* Батыр – илдең ҡаҙығы.

* Батыр «илем» тип, утҡа ингәндә,
Ҡурҡаҡ «билем» тип, мейескә инер.

* Батыр кеше баҡыр өҙөр.

* Батыр – көсө менән,
Егет – эше менән.

* Батыр күрке дан менән.

* Батыр кәрәк яу килгәндә,
Түрә кәрәк дау килгәндә.

* Батыр ҡаны йөрәккә тама.

* Батыр маҡтанһа – яуға сапҡанын әйтер,
Наян маҡтанһа – алдап алғанын әйтер.

* Батыр өлөшө ерҙә булыр.

* Батыр тапһа – уртаҡ бүлер,
Ҡурҡаҡ тапһа – ашап үлер.

* Батыр төшөндә яу күрә,
Балыҡсы төшөндә ау күрә.

* Батыр тыуһа – ил бәхете,
Ямғыр яуһа – ер бәхете.

* Батыр уртаҡ – ил уртаҡ,
Тыуған-үҫкән ил уртаҡ.

* Батыр уртаҡ, даны – берәүҙеке.

* Батыр ут булыр,
Ҡурҡаҡ юҡ булыр.

* Батыр үҙ халҡын яҡлар.

* Батыр үҙе үлһә лә, даны үлмәй.

* Батыр үлемдән ҡурҡмаҫ.

* Батыр үлеме – бисәнән.

*Вариант:* Батыр үлеме – мәрйәнән.

* Батыр һүҙе бер булыр,
Эсе тулы сер булыр.

* Батыр яраһы яуҙа ямалыр.

* Батыр яраһыҙ булмай.

* Батыр яуҙа һыналыр.

* Батыр яуҙа беленер,
Сәсән дауҙа беленер.

* Батыр яуҙа һыналыр, ялҡау – ятыуҙа.

* Батыр яуһыҙ булмаҫ.

* Батырға баҡтансы* кәрәкмәй.

* Батырға ла батыр бар.

* Батырға – матур,
Матурға – батыр.

* Батырға үлем юҡ.

* Батырҙың да йәне бар.

* Батырҙан үлем дә ҡурҡа.

* Батырҙы ил онотмаç.

* Батырҙы көрәш өйрәтә.

* Батырҙы яу тыуҙыра.

* Батырҙы яуҙа, сәсәнде дауҙа һына.

* Батырҙың көсө көрәштә беленер.

* Батырҙың ризығы ерҙә.

* Батырҙың үҙе үлһә лә, даны үлмәй.

* Батырҙың ярты һөнәре – тәүәккәллек.

* Батырлыҡ – телдә түгел.

* Батырлыҡ – ярты бәхет.

* Батырлыҡ яуҙа беленер,
Мәргәнлек ауҙа беленер.

* Батырлыҡта – матурлыҡ.

* Батырлығыңды майҙанда һынат.

* Батырмын тип кем әйтмәй? –
Яу килгәндә, йүне юҡ;
Сәсәнмен тип кем әйтмәй? –
Дау килгәндә, өнө юҡ.

* Беләкле берҙе йығыр,
Йөрәкле меңде йығыр.

* Беләгеңә таянма, йөрәгеңә таян.

* Бер егеттең ҡыйыулығы мең егеткә дан килтерер.

* Бер ҡурҡҡан эт ҡырҡ көн өргән.

* Берәүҙең үҙе батыр,
Берәүҙең һүҙе батыр.

* Бирәм тигән бей булмаç,
Ҡурҡаҡ әҙәм ир булмаç.

* Бөркөттөң[320] ояһы бейек ташта булыр.

* Бүре алыр егетте бүрегенән танырмын,[321]
Ҡуян алыр егетте ҡуйынынан танырмын.

* Бүре ала торған ат бөйөрөнән таныла,
Бүре һуға торған егет беләгенән беленә.

* Бәйге алмаған йүгеректән биле йыуан биш артыҡ.

* Дәүләт күрке мал менән,
Егет күрке дан менән.

* Ебәк билғау – бил күрке,
Батыр егет – ил күрке.

* Егет булһа, батыр булһын.

* Егет булһа, ир булһын,
Ир булмаһа, ер булһын.

* Егет булһаң тауҙай бул,
Яуға ҡорған ауҙай бул.

* Егет күрке дан менән,
Айғыр күрке ял менән.

* Егетлек бүрек кейеүҙә түгел, батырлыҡта.

* Егетлек ерҙә ҡалмаç (ятмаç).

* Еңгән кеше «еңдем» тимәç, «көрәштем» тиер.

* Иҙел кисмәй, ил булмаç,
Ҡурҡаҡ егет ир булмаç.

* Ир батыры эштә беленер.

* Ил – һуғышһыҙ,
Һуғыш – батырһыҙ,
Батыр яраһыҙ булмаç.

* Ил этһеҙ булмаç.

* Ир-егет бер көрәштә ике йығылмаç.

* Ирмен тигән ир-егеттең ике юлдашы бар:
Береһе – батырлыҡ, икенсеһе – тәүәккәллек.

* Ишәк, юрғалап, бәйге алмаç.

* Йөрәгендә барҙың беләгендә бар.

* Йөрәкһеҙҙән йыраҡ ҡас.

* Йүгерек ат туҡлығын белмәй.

* Йүгерек атҡа дала ҡәҙерле.

* Йүгерек ярышта беленер.

* Йығылған батыр көрәштән туймаç,
Йәнен аяған яуҙа еңмәç.

* Йәнен аямаған батыр булыр.

* Кис ҡурҡҡан көндөҙ сыра яндырыр.

* Көрәшә белмәгән йығылыр.

* Көрәшә белмәһәң дә, йығыла бел.

* Йығыла белһәң, тора бел.

* Көрәшә белмәһәң көрмәкләшмә.

* Көсөң барында көрәшеп ҡал,
Егәрең барҙа ярышып ҡал!

* Күп атҡан менән кеше мәргән булмаҫ.

* Ҡабыҡ һуғып, бүре ҡурҡытмайҙар.

* Ҡапҡаһына күрә тирәге,
Кешеһенә күрә йөрәге.

* Ҡарсыға ҡарғанан ҡурҡмаҫ.

* Ҡарсыға осоуынан таныулы.

* Ҡасып киткән ил булмаҫ,
Ҡурҡҡан егет ир булмаҫ.

* Ҡорҙан* ҡоро ҡалғансы,
Яу ҡайтарып, ярлы ҡал.

* Ҡорос – ҡайнауҙа, батыр майҙанда сыныға.

* Ҡош – һауала,
Ат – тауҙа,
Егет яуҙа һынала.

* Ҡошта – шоңҡар,
Йылҡыла – толпар (аҫыл).

* Ҡоштоң бары шоңҡар булмаҫ.

* Ҡурҡаҡ ир – аяҡлы сир.

* Ҡурҡаҡ ирҙән ҡатын артыҡ,
Ҡыптыр тундан ҡуйтыр* артыҡ.

* Ҡурҡаҡ кешенең йоҙроғо кеҫәһендә була.

* Ҡурҡаҡ күҙе дүрт була,
Ыштан төбө шырҡ була.

* Ҡурҡаҡ ҡурҡһа – сөскөрөр,
Дошманына көс бирер.

* Ҡурҡаҡ менән юлдаш булма,
Көйһөҙ менән моңдаш булма.

* Ҡурҡаҡ үҙ күләгәһенән ҡурҡҡан,
  Күсәк алып һуҡҡан.

* Ҡурҡаҡ элек йоҙроҡлар.

*Вариант:* Ҡурҡаҡ алдан һуғыр.

* Ҡурҡаҡ эт ҡапҡа аҫтынан өрөр,
  Ҡурҡаҡ тәүҙә балағын бөрөр.

* Ҡурҡаҡ юғалтҡанды батыр табыр.

* Ҡурҡаҡтан ер ерәнгән.

* Ҡурҡаҡты күп ҡыуһаң, батырға әйләнә;
  Батырҙы күп һүкһәң, бахырға әйләнә.

* Ҡурҡаҡты юлдаш итмә,
  Булмаҫты ҡуйындаш итмә.

* Ҡурҡаҡтың күңеле юртаҡ.

* Ҡурҡаҡтың теле оҙон.[322]

* Ҡурҡҡанға күләгәһе лә ҡараҡ.

* Ҡурҡҡанға көсөк тә өрә.

* Ҡурҡҡанға ҡуш күренә,
  Тора-бара биш күренә.

*Вариант:* Ҡурҡҡанға ҡуш, ҡойороғо менән биш.

* Ҡурҡҡанды эт абалай.

* Ҡурҡҡанды әжәл ҡыуыр.

* Ҡурҡып ғүмер һөргәнсе, ҡапланып үлгәнең артыҡ.

* Ҡурҡыуын еңгән – батыр.

* Ҡуян үҙ ҡойроғонан үҙе ҡурҡҡан.[323]

*Вариант:* Ҡуян үҙ күләгәһенән үҙе ҡурҡыр.

* Ҡыйыуҙы ҡурҡыу алмаҫ,
  Ҡурҡаҡтан өркәк ҡалмаҫ.

* Ҡыйыуҙың бәхете алдан йөрөй.

* Ҡыйыулыҡ ҡыйынлыҡтан ҡотҡара.

* Ҡыйыулыҡ – ярты ғилемлек.

* Ҡыйыулыҡ – ярты ырыҫ.

* Ҡыйыуһыҙ кеше аҫҡа үлер.

* Ҡылыслы ҡурҡаҡты һуйыллы батыр һуғып ала.

* Ҡырҡ ҡарғаға бер таш етә.

* Ҡыяғы бөтөн шоңҡар юҡ.

* Майҙанда йыҡҡан батырҙан яуҙа йыҡҡан батыр оло.

* Матур ҡатын – ир күрке,
  Батыр егет – ил күрке.

* Матурлыҡтан элек батырлыҡ кәрәк.

* Мәргән кәкере атһа ла тура тейҙерер.

* Мәргән мәрәкәлә беленер.

* Мәргән – уғы һайын берҙе бәргән.

* Мәрәйлектә* – мәргәнлек ирке,
  Егетлектә – ил күрке,
  Мәргәнлектә – егетлек күрке.

* Оло менән кесенс өләшкән белер,
  Көслө менән көсһөҙҙө көрәшкән белер.

* Матур менән йәмһеҙҙе һөйөшкән белер.

* Толпар тояғы ҡыҙһа, ҡанатланып осор.

* Толпарға тиң ат булмаç,
  Ил һаҡлаған – ят булмаç.

* Толпарҙан тояҡ ҡалыр.[324]

* Толпарҙың утлауы бер булһа ла, атлауы башҡа.

* Тояғы бөтөн толпар юҡ.

* Тоғролоҡ бәләнән ҡотҡара, хыянат бәләгә индерә.

* Тәүәкәлләгән – таш йотҡан.

* Тәүәккәлһеҙ батыр юҡ.

* Үрмәксе ауына арыçлан эләкмәç.

* Халыҡ бар ерҙә батыр бар.

* Хәйләһеҙ батыр алданыр.

* Хәйләһеҙ батыр тиҙ үлер.

* Һыу ағыр ҙа – таш ҡалыр,
  Ир үлер ҙә дан ҡалыр.

* Һәр кемдең күңелендә бер арыçлан ятыр.

* Шоңҡар юҡта ябалаҡ майҙан тотор.

* Шоңҡарҙан ҡош ҡурҡа,
  Турғайҙан ҡорт ҡурҡа.

* Эт батырға өрөр, ҡурҡаҡты тешләр.

* Эт эскән һыуҙан арыҫлан эсмәҫ.

* Өжәле еткән ҡарға бөркөт менән уйнар.

* Юрғаның ҡәҙерс еккәндә беленер.

* Яҡшы ат бәйгелә үлер.

* Яҡшы юртаҡ күпкә уртаҡ.

* Яман дан менән үлгәнсе,
Яуҙа ҡан менән үлгәнең артыҡ.

* Яңғыҙ батыр яу түгел.

* Яңғыҙ ҡарға ҡар яуҙырмаҫ,
Яңғыҙ батыр яу ҡайтармаҫ.

* Яу юҡта батыр күп,
Дау юҡта аҡыл күп.

* Яуҙан һуң батыр күбәйер.

*Вариант:* Яу ҡайтһа, батыр күп.

* Яулыҡ ябынғандың бары ла ҡатын түгел,
Бүрек кейгәндең бары ла батыр түгел.

* * *

* Айыуҙан ҡурҡҡан – урманға бармаған.

*Вариант:* Бүрс бар, тип, урманға бармаған.

* Аулаҡта – батыр, яуҙа – бахыр.

* Батырҙың улы ла батыр.

* Бахыр алдында батыр,
Батыр алдында үҙе бахыр.

* Баш юғалһа, бүрек ҡалыр.

* Йығылғанға – йоҙроҡ.

* Ҡото ботона еткән.

* Ҡуяндың тиреһе, эт өргән һайын, йыртыла.

* Үҙе ҡурҡа, үҙе йолҡа.

* Һарыҡ янында – алып,
Алып янында – һарыҡ.

### 3. Аралашыу: изгелек, яуызлыҡ; үс, асыу тотоу

* Аҙҙан ғына күңел табыла,
Юҡтан ғына күңел ҡырыла.

* Айғыр менән уйнаған тайҙың арҡаһы яралы булыр.

* Айыу урманды һаҡлай,
Урман айыуҙы һаҡлай.

* Айыуҙы еңгән – ярты ир,
Асыуҙы еңгән – бөтөн ир.

* Айыуҙы үҙ майы менән майлайҙар.

* Аҡтамыр атҡа булған үсен һабандан алыр.

* Аҡылың булһа, асыу һаҡлама.

* Алмасты алмас менән киҫәләр.

* Арба артынан таҡҡас,
Дегет лагуны ла ханға барған.[325]

* Арба майһыҙ йөрөмәҫ,
Күңел яйһыҙ иремәҫ.

* Арбаң ватылғас, юл күрһәтеүсе күп була.

* Арынһыҙ малға эйә күп.

* Арыҫланға атланһаң, ҡамсың ҡылыс булһын.

* Ас кешенән туҡ яман.

* Аслыҡта дуҫ танымаҫ,
Ҡырҙа ат танымаҫ,
Яуҙа ят танымаҫ.

* Асыҡҡандан ҡаныҡҡан яман.

* Асыу – ағыу, йотһаң – дарыу.

*Вариант:* Асыу – ағыу, йотһаң – бал.

* Асыу – аҡыл дошманы.

* Асыу алдан йөрөр,
Аҡыл арттан йөрөр.

* Асыуыңды артҡа ҡуй,
Аҡылыңды алға ҡуй.

*Вариант:* Асыуын алға ҡуйған – аҡылын артҡа ҡуйған.

* Асыу башы – йүләрлек,
Арты – үкенес үләрлек.

* Асыу – бысаҡ, аҡыл – һап.

* Асыу – дошман,
Аҡыл – дуҫ,
Асыуыңа аҡыл ҡуш.

* Асыу йотоу – ут йотоу.

* Асыу йыйма, аҡыл йый.

* Асыу килһә – аҡыл китер,
Аҡылың булһа – асыуың бөтөр.

* Асыу һаҡлама, намыҫ һаҡла.

* Асыуың килһә, ҡулың тый,
Әйтмәҫ ерҙә телең тый.

* Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит.

* Аҫҡа төкөрһәң – һаҡалыңа тейер,
Өҫкә төкөрһәң – мыйығыңа тейер.

* Аҫҡы ботаҡтар өҫкөләрен күтәрсешә.

* Ат айҙа һыналыр,
Әҙәм йылда һыналыр.

* Ат асыуын арбанан алмайҙар.

* Ат баҫҡанды тай ҙа баҫыр.

* Ат баҫҡанды тай ҙа баҫыр,
Үгеҙ һөҙгәнде кәзә лә һөҙөр.

* Ат типкеһен ат күтәрер.

* Ат тояғы аҫтында ҡырмыҫҡа үлмәҫ.

* Ат тояғын ат баҫа.

* Атҡа эйәрһәң, ат булырһың,
Тайға эйәрһәң, тай булырһың.

*Вариант:* Ат аҙғыны тайға эйәрер.

* Атына көсө етмәгән тәртәһен ҡыйнар.

*Вариант:* Атҡа егәрс етмәгән тәртәне туҡмаған.

* Ауыҙың тулы ҡара ҡан булһа ла, кеше алдында төкөрмә.

* Ашаған табағыңа төкөрмә.

* Аш ҡорһаҡ артынан йөрөмәҫ.

* Ашҡа – аш, ташҡа – таш.

* Аш менән атҡанға
Таш менән атмайҙар.

* [Кешегә] баҙ ҡаҙһаң, тәрән ҡаҙма,
Үҙең сығырлыҡ булһын.

* Баҙ ҡаҙһаң, икене ҡаҙ (береһе үҙеңә булыр).

* Баҡырҙан көмөш сыҡмаҫ,
Баҡырынып өлөш сыҡмаҫ.

* Балта бәләкәй булһа ла, оло тирәкте ауҙара.
* Балтаға имән дә башын эйгән.
* Балыҡсы балыҡсыны алыҫтан күрә.
* Бар йылға ла бер яҡҡа аҡмай.
* Батҡан тайғандан көлөр.

*Вариант:* Тишек йыртыҡтан көлгән.

* Баш терәр ер – балдан татлы.
* Баш эйгәндән баш ауыртмай.

*Вариант:* Эйелгән башты ҡылыс киҫмәҫ (алмаҫ).

* Баш эйгәнсе, ҡул бир.
* Башта – үҙеңде, унан кешене тикшер.
* Бер ашаған икмәкте ҡабат ашап булмай.
* Бер күҙгә төртһәң, икенсе күҙҙән йәш сығыр.
* Бер кәрәкмәгән бер кәрәк була.
* Бер ҡарын майҙы бер ҡомалаҡ серетә.
* Бер ҡыҫала бөтә күлде болғар.

*Вариант:* Бер бысраҡ һыйыр бөтөн көтөүҙе буяр.

* Бер туналған төлкөнө ҡабат тунамайҙар.
* Бер һынағанды биш һынаһаң, шайтан көлә.
* Бирәү – бирәүгә терәү.
* Бирәү бирәүгә кәрәк,
  Ҡыйышҡа терәү кәрәк.
* Бирәү сүл булһа, бирәү күл булһын.
* Бирәүҙең себешен үлтерһәң, тауыҡ түләрһең.
* Беткә үс итеп, тунды утҡа яҡмайҙар.
* Бирек* бил биртенмәҫ.
* Биртенгәнгә биртенмә.
* Бөркөт себен ауламай.
* Буйым оҙон, тип, һыуға буй һалма,
  Телем оҙон, тип, телеңдән яҙма.
* Булырҙайҙан тайшанма, булмаҫтайға таянма.
* Бүләге үткәндең һүҙе үтер.
* Бүре бар ерҙә ҡуянға көн юҡ.

* Бысраҡ һыуға таш ташлама: үҙеңә сәсрәр.

* Бәйле арыҫланға ҡуян да ташлана.

* Бәләкәй таш баш ярыр.

* Донъяныҡы донъяла ҡалһын.

* Елкә соҡорон күрмәгәндән кеше үлмәй.[326]

*Вариант:* Елкәм соҡорон күрмәйем,
Күрмәһәм дә үлмәйем.

* Зәһәр зәһәрҙе киҫә.

* Ике ас бере-беренә хас.

* Ике кешенең бере өҫтөн,
Бер кешенең бүркс өҫтөн.

* Икмәк ҡорһаҡ артынан йөрөмәй.

* Иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр.

* Имә белгән ҡолон ике бейәнең һөтөн бөтөргән.

* Ише килмәһә, төҫө килмәй.

* Ишеге ямандың түренә уҙма.

* Ишек асыҡ булһа ла, рөхсәтһеҙ инмә.

* Ишек төбөндә урын ҡуйһалар, түргә уҙма.

* Ишле – ишенә,
Ҡушлы – ҡушына.

* Йөҙәүҙең* йөҙөн йыртма.

* Йүнһеҙгә йүнле өндәшеп, йүнле һүҙ көтмә.

* Йығылған һөрөнгәндән көлөр,
Төртөп ебәргән икеһенән дә көлөр.

* Йылғаның үренә барма, ағышына бар.

* Йылы ергә йылан да эйәләшә.

* Йыртыҡ йылымға балыҡ эләкмәй.

* Йыртыҡ һүтектән көлһә,

Тишек икеһенән дә көлә.

* Камилды камил белер.

* Кем арбаһына ултырһаң,
Шуның йырын йырларһың.

* Кемде хур күрһәң, шуға зар булырһың.

* Кемдең йырын йырлаһаң,
Шуның көйөн көйләрһең.

* Кеçәүҙең башына баçһаң, һабы башыңа төшөр.

* Кеше алдында кеше өгөтләгәнсе, битен дегетлә.

* Кеше артынан барма, һыуға төшөрһөң.

* Кеше атына менгән тиҙ төшөр.

* Кеше атына менгәшмә,
Менгәшһәң – өндәшмә.

* Кеше атына ултырма, ултырһаң үкенмә.

*Вариант:* Кеше ауыҙын бейәләй менән ҡаплап булмай.

* Кеше ауыҙынан үҙ ауыҙың яҡын.

* Кеше булмаç кешенең,
Үтмәһә лә теше,
Кешелә булыр эше.

* Кеше башын кеше ашай.

* Кеше булған кешенең кеше менән эше бар,
Кеше булмаған кешенең кешелә ни эше бар?

* Кеше йырын йырлайым тип, үҙ йырыңды онотма.

* Кеше икмәге менән оҙаҡ йәшәмәçһең,
Кеше аҡылы менән алыç баралмаçһың.

* Кеше аҡылын тыңла, үҙеңдекен тот.

* Кеше кеше арҡаһында кеше була.

* Кеше – кешегә иш,
Хайуан – хайуанға иш.

* Кеше кешеһеҙ йәшәмәй.

*Вариант:* Кеше көнөнә ҡалма.

* Кеше күңелен күрһәң, үҙ күңелең буш ҡалыр.

* Кеше күңелен күрмәйенсә,
Үҙ күңелеңде күрмәçтәр.

* Кеше ҡапҡаһын ҡаҡһаң таяҡ менән,
Үҙ ҡапҡаңды ҡағырһың аяҡ менән.

* Кеше ҡолағын борғанда, үҙеңдеке ауыртмай.

* Кеше ҡояшына һонолма, кеше усағына йылынма.

* Кеше менән булғансы, этең менән бул.

* Кеше мине кеше тиһә –
Кешелә минең эшем бар,

Кеше мине кеше тимәһә –
Кешелә минең ни эшем бар?

* Кеше өйөнөң түрендә булғансы,
Үҙ өйөңдөң гүрендә бул.

* Кеше өсөн кеше үлмәй.

* Кеше тәгәрмәсенә таяҡ тыҡма.

* Кеше эте менән ҡуян тотма,
Кеше ҡулы менән ут тотма.

* Кеше эше кешегә хайран.

* Кеше эше – ярты эш,
Үҙ эшең – бөтөн эш.

* Кеше ябыуы аҫтына кермә.

* Кеше яҡҡан утҡа ҡыҙынма.

*Вариант:* Кеше яҡҡан мейескә терәлмә.

* Кешегә ай менән ҡояш та ярамай.

* Кешегә биргән өгөттө башта үҙең тотоп күрһәт.

* Кешегә көнөң төшмәһен.

* Кешегә ҡалған көнөң – ҡараңғы төнөң.

* Кешегә ҡарап кейем киҫмә.

* Кешегә түбәнселек ит, үҙең түбәнһенмә.

* Кешегә үпкәләмә, яҙмышыңа үпкәлә.

* Кешегә шәфҡәт ит,
Уҙаманға хөрмәт ит.

* Кешегә ышанма, кеҫәңгә төшөрһөң.

* Кешегә ялынғансы ике ҡулыңа ялын.

* Кешегә ярарға йә ашың яҡшы булһын,
Йә эшең яҡшы булһын.

* Кешегә ярҙам ит, юлда ятҡан ташты алып ташлап булһа ла.

* Кешелә эшең булмаһын, үҙ эшеңде үҙең бел.

* Кешеләрҙе күрмәгән – үҙ ҡәҙерен белмәгән.

* Кешене бер алдаһаң, икенсе ышанмаҫ.

* Кешене ҡәҙер итһәң, ҡәҙер күрерһең.

* Кешене ҡәҙерләмәгән – үҙен дә ҡәҙерләмәгән.

* Кешене мең тапҡыр һынамайҙар.
* Кешене тикшермә, үҙеңде бел.
* Кешене яманлаған үҙе яманға ҡалыр.
* Кешенең аҡылын белмәйенсә, маҡтама.
* Кешенең дарыуы – кеше.
* Кешенең ҡулынан эшен алһаң,
Ауыҙынан ашын алырһың.
* Кеше хәле кешегә,
Иртә инеп, кис сығыр,
Моңһоҙ булһа тыңлаусы.
* Кешенең эсе ҡараңғы, үтә күренмәй.
* Кешенең яманатын һатҡансы, үҙеңдең яҡшатың тап.
* Кешенең яманатын һатҡан үҙенең яҡшатын тапмаҫ.
* Кешенән көлмә, ауыҙың ҡыйшайыр.
* Кешенән көлмә, үҙең көлкөгә ҡалырһың.
* Кешенән көлмәк – үҙеңә килмәк.

*Вариант:* Кешенән көлә барыр,
Артынан һөрә барыр.

* Кешеһенә ҡарап кейемен киҫ.
* Кире инер ишегеңде ҡаты япма.
* Күҙәмәй осҡан ҡош ҡуныр урын тапмаған.
* Ҡоҙоҡҡа төкөрмә, һыуһағанда һыуы кәрәк булыр.
* Көлгән – бөлгән.
* Көлгән-көлгән – бөлгән, үлгән.
* Көлгәндән һорама, илағандан һора.
* Көлкө көлә килер, артынан һөрә етер.
* Көлә инеп, көңрәнә* сыҡҡандан һаҡлан.
* Көслө атаһын йығыр.
* Көслөмөн, тип, атыңа ҡул күтәрмә.
* Көслө ат егер, көсһөҙ эт егер.
* Көслө көслөгә үсле.
* Көслөнөкө замана.
* Көслө ҡурҡыныс түгел, үсле ҡурҡыныс.

* Көслө Хоҙай менән алышыр,
Көсһөҙ эшен әхирәткә тапшырыр.

* Көслөк барҙа үслек бар.

* Көслөнөң беләге көслө.

* Көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ.

* Көслөнән ҡурҡма, үсленән өркмә.

* Көслөнән үсле яман.

* Көсө еткәнгә көсөк тә йәбешкән.

* Көсөм бар тип, көскөрмә.

* Көсөнә ышанған еңелгән.

* Көсөң булһа, эшләп күрһәт.

* Көсөңә маһайма, хур булырһың.

* Көстө ғәйрәт еңә.

* Көсәнгән еңмәй, көсө күп еңә.

* Көсһөҙ көрәк һындырыр,
Хәлһеҙ һәнәк һындырыр.

* Көсһөҙҙөң асыуы көслө.

* Күгәүен, тулап, үгеҙ мөгөҙөн һындырмаç.

* Күккә төкөрмә, күкрәгеңә төшөр.

*Вариант:* Һауаға ҡарап төкөрмә:
Төкөрөгөң төшөр битеңә.

* Күлдә йөҙгән күк өйрәк сүл ҡәҙерен белмәй.

* Күләүектә йөҙә белмәгән – диңгеҙгә төшкән.

* Күңелһеҙгә күлдәк кейҙермә.

* Күп уйнаған күп илар.

* Күп күтәргәнгә күпте өйәләр.

* Күрәҙәсе күрәҙәсегә ноҡот һалмай.

* Кәбән аçтында сысҡан үлмәй.

* Кәмһетелгән кимтек ҡалаҡ менән ашар.

* Ҡаҙан ҡоромдан ҡурҡмаç.

* Ҡаҙыҡты кергән ергә ҡағалар.

* Ҡалған хәтерҙең, ҡары китһә лә, боҙо китмәй.

* Ҡалған күңел – сыҡҡан йән.

* Ҡалын һандал сүкештән ҡурҡмаҫ.
* Ҡанды ҡан йыуа, ҡулды ҡул йыуа.
* Ҡар китһә лә, боҙ ҡала.
* Ҡара йыландан айыу ҙа айбанған.
* Ҡарт алашаны ҡамыт һуҡмай.
* Ҡарт бүре алдан көрт ярыр.
* Ҡарт төлкө ҡапҡанға баҫмаҫ.
* Ҡоймаҡ тәмле тип, табаны ялап булмай.
* Ҡоймаҡтың майы булмаһа, эштең яйы булмай.
* Ҡойоға таш ташлау еңел, алыуы ауыр.
* Ҡойоға төкөрмә, ҡайтып һыуын эсерһең.
* Ҡойроғона баҫһаң, сысҡан да сыйылдай.
* Ҡойроғонан ныҕыраҡ ҡыҫһаң, ҡуян да шырпы ҡабыҙа, ти.
* Ҡоро ботаҡ тиҙ һына.
* Ҡоро ҡармаҡҡа балыҡ ҡапмай.
* Ҡоро ҡашыҡ ауыҙ йырта.
* Ҡоро ҡулға ҡош ҡунмаҫ.
* Ҡоторған үгеҙгә юл бир.
* Ҡош емгә төшә,
  Ҡот имгә төшә.
* Ҡояшты ҡапларға бәләкәй генә болот та етә.[327]
* Ҡояш яҡшыға ла, яманға ла бер тигеҙ ҡарай.
* Ҡул ҡулға һуҡҡанда, ике арала себен үлә.
* Ҡул ҡулды йыуа.
* Ҡурың бөтһә, кеше ҡәҙерен белерһең.
* Ҡылды артыҡ нескәртһәң, өҙөлә.
* Ҡылмыш ҡырҡ йылдан һуң килмеш.
* Ҡылығын белмәгән малға яҡын барма.
* Ҡысымаған ерҙе тырнаһаң, ҡутыр сыға.
* Ҡәҙер белмәгәндең ҡәҙере юҡ.
* Ҡәҙерләгәндең ҡәҙерен бел.
* Майламаған тәгәрмәс шығырҙай.

* Майламай, ҡоймаҡ шыумай.

* Майламай, яйланмай.

* Майламаһаң, ҡайыш та өҙөлө.

* Майһыҙ ҡоймаҡ табаға йәбешә.

*Варианттары:* Майһыҙ ҡоймаҡ шыумаҫ.
Майһыҙ таба ҡупмай.

* Маҡтау кемгә килешмәй?

* Маҡтанған түгел, маҡтаған бирешмәй.

* Маҡтау шайтандың да башын әйләндерә.

* Мең кешенең хәләл көсөн бер кеше хәрәм яһар.

* Мең кешенең һүҙен ишеткәнсе, бер яҡшының йөҙөн күр.

* Мендең йөҙөн танығансы, бер кешенең исемен бел.

* Мөгөҙөн һындырғанды болан онотмаҫ,
Атаһын үлтергәнде уғлан онотмаҫ.

* Мөңөрәп килгән һыйырҙың мөгөҙөн бәреп һындырма.

* Мыҫҡыл – төбө мөшкөл.

* Ни сәсһәң, шуны урырһың,
Ни ҡылһаң, шуны күрерһең.

* Оло ат менән уйнаған тайҙың аяғы һыныр.

* Ололаһаң олоно,
Ололарҙар үҙеңде,
Ололаһаң үҙеңде,
Сығарырҙар күҙеңде.

* Саҡҡан – үлтерер, маҡтаған – еткерер.

* Саңҡайғанға саңҡай, башың күккә еткәнсе;
Иңкәйгәнгә иңкәй, башың ергә еткәнсе.

* Сапҡан атҡа ҡаршы барма.

* Себен тулап, тәҙрә ватмаҫ;
Турғай тулап, кәртә емермәҫ.

* Серәкәйҙең талауынан бигерәк безелдәүе яман.

* Сәләм бирмәгән – бер оятлы,
Яуап бирмәгән – мең оятлы.

* Таба майлаған һайын шымара.

* Тай менән уйнаған ҡолондоң биле һыныр.

* Тар баҫмала кешегә ҡаршы барма: һыуға төшөп үлерһең.

* Тар ергә таяу булма.

* Таяҡһыҙға таяҡ бул ҡара төндә,
Маяҡһыҙға маяҡ бул оло юлда.

* Тауҙай арҡаһы булғандың таштай йөрәге булыр.

* Тауҙай талабың булғансы, энәләй яуабың булһын.

*Вариант:* Тауҙай талабың булғансы,
Тырнаҡтай яуабың булһын.

* Таш менән атҡанға аш менән ат.

* Ташҡыны ҡайтһа ла, юшҡыны ҡалыр.

* Ташты ташҡа саҡһаң, уты сығыр.

* Тибешкәндә лә тиңең менән тибеш.

* Тик торған бағанаға берәү ҙә барып бәрелмәй.

* Тик торғанда ҡорт саҡмай.

* Тимерҙе тимер менән киҫәләр.

* Тимерҙе тимер күндерә.

* Тимерсегә күмерсе килер.

* Тотҡан ерҙән таяҡ һынмай.

* Төкөргән төкөрөгөңдө кире йотма.

* Төкөрмә ашыңа: ҡоһоро төшөр башыңа.

* Түбән кешегә ҡул ҡушлаған түбәндә ҡалыр.

* Туҡмағы ҙур булһа, кейеҙ ҡаҙыҡ та ергә керә.

* Тәгәрмәс әйләнгәндә, күсәренә көс төшөр.

* Тәгәрән ташҡа үлән үҫмәҫ.

* Тәкә мөгөҙө Тәңрегә теймәҫ.

* Тәкә һөҙөп тауҙы ауҙара алмай.

* Уҙамтан ат кәртә һындырыр.

* Уҙған болотто тотоп булмай,

* Ҡолаған кешене көтөп булмай.

* Ултырғанда, ҡарап ултыр.

* Уңһаң да үҙеңдән,
Туңһаң да үҙеңдән.

* Уттан – ут, үстән үс үрсей.

* Үҙ бармағың эскә йомолор.

* Үҙ битен аямаған – кеше битен ҡыҙартҡан.
* Үҙ намыҫын һаҡламаған,
  Кешенекен һаҡламаҫ.
* Үҙ утына ҡан ҡойған,
  Кеше утына май ҡоймаҫ.
* Үҙ яйыңды үҙең ҡара.
* Үҙе изгелек күрмәгән кешегә изгелек күрһәтмәҫ.
* Үҙе йығылған иламаҫ.
* Үҙенә-үҙе эйә булмаған бөтәһенә лә эйә булырға тырышыр.
* Үҙең һарыҡ булғасың, һуйғанда тыпырсынма.
* Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.
* Үҙеңде-үҙең ҡарамаһаң,
  Һине кеше ҡарамаҫ.
* Үҙеңде-үҙең уйламаһаң,
  Һине кеше уйламаҫ.
* Үҙеңде үҙең маҡтамаһаң,
  Кеше һине маҡтамаҫ.
* Үҙеңдән – асҡа, үҙеңдән яланғасҡа сер бирмә.
* Үҙеңдән астың табағын ялама.
* Үҙеңә теймәгән йылан йөҙ йәшәһен.
* Үҙеңә үҙең ҡаты бул,
  Кешеләргә йомшаҡ бул.
* Үкереп, үгеҙ булмаҫһың;
  Күкрәп, болот булмаҫһың.
* Үкһеҙгә өгөт биреүсе күп, урын биреүсе юҡ.
* Үкһеҙгә өгөт бирмә, урын бир.
* Үпкә – дошман, аҡыл – дуҫ.
* Үпкәләгәндең үпкәһен күрмә.
* Үс атаһын үлтерер.
* Үс иткән – хөкөмгә еткән.
* Үсле – көслө.
* Холҡон белмәгән аттың ауыҙлығын һалдырма.
* Хөрмәт иткән хөрмәт күрер.
* Хәлдән тайын йығылған бүре атҡа ҡурҡыныс түгел.

* Һағыҙаҡ күп ерҙә себен юҡ.
* Һаңғырауға сәләм бирһәң, «кәмә ямайым» тиер.
* Һеҙ тигәндә – мин!

*Вариант:* һеҙ тигәндә – мин иҙәндә.
* «Һинеке», «минеке» – күңел тарлығы,
«Ары ят», «бире ят» – түшәк тарлығы.
* Һөҙөшһәң, мөгөҙлө менән һөҙөш.
* Һуҡҡан үлтерер, саҡҡан етерер*.
* Һуҡмаҫ һуйыл күтәрер.
* Һыналмаған фәрештәнән һыналған шайтан артыҡ.
* Һыр биргәнсе һыртыңды бир.
* Һыртың һынһа ла, һыр бирмә.

*Вариант:* һының китһә лә, һыр бирмә.
* Һыуҙы кисә-кисә, белерһең;
Кешене тора-тора, белерһең.
* Һыу эскәндә, шишмәһен онотма.
* Һыуһыҙ йылға һанда юҡ.
* Һәр кемдең бармағы үҙенә табан кәк(е)ре.
* Һәр кемдең буйына ҡарап тун бес.
* Һәр кемдең үҙ хәле – хәл.
* Һәр ялағайҙың биле үҙенсә бөгөлә.
* Шыраулы ағас – ҡулға хас.
* Ыҙғыш төбө урын тарлыҡтан түгел, күңел тарлыҡтан.
* Ыҙғыш-талашта йән тынмаҫ,
Ашағаның аш булмаҫ.
* Ышҡылған таш шымарыр.
* Эйелгән ағасҡа ел теймәҫ.
* Эйелмәгәнгә бөгөлмә.
* Элек үҙең ярҙам ит, унан кешенән ярҙам көт.
* Энә үткән ерҙән еп тә үтә.
* Эсәр һыуға төкөрмәйҙәр.
* «Эсмәм» тигән ҡойоңдан өс әйләнеп һыу эсерһең.
* Эт асыуын беттән алмайҙар.

* Эт еңгәнен талай.
* Эт ҡарғышы бүрегә төшмәç.
* Эт ҡотороп өрөү менән айҙың яҡтылығы китмәç.
* Эт өрөр, бүре йөрөр.
* Эт тешенә – эт теше.
* Эт, һимерһә, эйәһен тешләй.
* Эт һөйәк биргән ҡапҡаһын онотмаç.
* Эт йүгереген бүре һөймәç.
* Эт яллаған кисеү кисмәç.
* Эттең ҡойроғон ҡырҡып һарыҡ булмай.
* Эттә бит юҡ.
* Эттең тешен майлы ҡоймаҡ һындыра.
* Әҙәм менән әҙәм бул.

*Вариант:* Әҙәмгә ай менән көн дә ярамай.
* Әҙәмгә ҡол булғансы, ҡойроҡ таҡ та, эт бул!
* Әҙәмдең көнө әҙәмдән.
* Әҙәм ҡимммәтен әҙәм белер.
* Әмер үтмәгән ерҙә хәмер үтә.
* Юлдашың сатан булһа, аҡһарға өйрәнерһең.
* Яҡшы кеше ярҙамсыл.
* Яманға ялынысың төшмәһен.
* Ярҙам итә алмаһаң, ҡамасаулыҡ итмә.

*Вариант:* Ҡамасау итмәүең дә – ярҙам.
* Ятҡа ялынма, әҙәмгә табынма.
* Ятҡа ялынғансы, ят та йәнеңде һәрмә.
* Ятҡан өçтөнә торған килмәһен.

* * *

* Айым тура баҡҡанда, йондоҙҙарға йоҙроҡ.
* Ана бара юлың!
* Асты теләнсе ҡыçтаған.
* Ат асыуын арбанан алған.

* Ат асыуын – тәртәнән,
Тун асыуын – бөрсәнән.
* Ат саба, тип, эт саба.
* Аты бармағас, тәртәһен ҡыйнаған.
* Батҡан тайғандан көлгән.
* Бирәү – Алла ҡоло,
Бирәү – бәндә ҡоло.
* Бүре лә туҡ булһын, мал да ҡырылмаһын.
* Бысраҡ әшәкенән ерәнә.
* Ғәли – Вәлигә, Вәли – Ғәлигә.
* Дегетсе күмерсегә: «Мине буяма», – тигән.
* Дуңғыҙға эйәргән – батҡаҡҡа аунаған.
* Ике эт талашҡанда бер теләнсе ҡыуанған.
* Ике ултырып, бер иҫемә төшә.
* Имә белһәң – имек,
Кимерә белһәң – кимек.
* Ишек: «Был ниндәй тишек?» – тип, тәҙрәнән көлгән, ти.
* Ишеккә ни яҫтыҡ, ни түшәк.
* Йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултырта.
* Йүкә ҡайышты өҙгән.
* Йылҡы йылың алдараҡ.[328]
* Йыртыҡ тишектән көлгән.
* Йәшерен таш төрән һындыра.
* Кейәүгә бирәһе ҡыҙ түгел,
Ашҡа һалаһы тоҙ түгел.
* Кеше көлкөһө кешенән көлә.
* Кеше күңелен күрәм тип, үҙ күңелең буш ҡала.
* Кешенеке – кештәктә,
Үҙеңдеке – үҙәктә.
* Ҡабағандан ҡаптырма,
Тибәгәндән типтермә.
* Ҡарға: «Ҡар-ҡар!», – тигәнгә,
Тартай: «Тар-тар!», – ти.
* Ҡатыҡ бирһәң – әсе, тиҙәр,
Ҡаймаҡ бирһәң – сөсө, тиҙәр.

* Ҡорт саҡҡанда – Әхмәҙи,
Бал ҡапҡанда – Әүхәҙи.

* Ҡояш сыҡҡас, ай кәрәкмәй.

* Ҡуян тауға үпкәләгән, тауҙың иҫендә лә юҡ.

* Майламаған арба шығырҙай.

* Өйгә кереп ашыңды ашай,
Ситкә сығып башыңды ашай.

* Өйөм ситтә, ишегем септә[329].

* Сысҡанға үлем – бесәйгә (мәсегә) көлкө.

* «Урыҫтың күңеле булһын, атай, әйҙә суҡынайыҡ», – тигән бер малай.

* Үҙ босоғон* күрмәй, кеше босмоғон ҡуймай.

* Үҙемә тейһә, үҙәгемә тейә.

* Үлгән арыҫланды ҡуян да барып типкән.

* Үпкәләһәң, үпкә ашатырҙар.

* Фәрештә булһа – ҡанатлы,
Шайтан булһа – ҡойроҡло.

* Һин миңә теймә, мин һиңә теймәйем.

* Һинән хәрәкәт,
Минән бәрәкәт.

* Эңер төшкәс, күләгә кәрәкмәй.

* Эт асыуын беттән алған.

* Эт саба, тип, бет саба.

* Эте торор, көсөгө өрөр.

* Эт күңеле – бер һөйәк.

* Эт – эткә, эт – ҡойроҡҡа.

* Әлеге лә баяғы,
Шул болғатҡыс таяғы.

## 4. Хаҡлыҡ, ғәҙеллек, яҡшылыҡ; йәбер-золом, хәйлә, яманлыҡ

* Аҙғын эт үҙ ояһына ҡарап өрөр.

* Алдаған тотолор, дөрөҫөн әйткән ҡотолор.

* Алдаҡсының теле мең ҡолас.

* Алданым, тип маҡтанма, үҙеңде лә алдарҙар.
* Алдап, алты аҙым да китмәҫһең.
* Алдаусыға ышанған күрәҙәсегә ҡол булыр.
* Алдаусының күҙенән билгеле.
* Алдашһаң да, арттырма, артың уйла, шаштырма.
* Алдашһаң, абруйың китер,
Әрләшһәң ҡәҙерең китер.
* Айыу ашҡа булмаҫ, яман яҡшы булмаҫ.
* Айыуҙы һыйпау менән, һыйыр булмаҫ.
* Алтын ерҙә ҡалмаҫ, яҡшылыҡ юлда ҡалмаҫ.

*Вариант:* Алтынға тут ҡунмаҫ, яҡшылыҡ онотолмаҫ.
* Аҫтыртын эт өрмәй тешләр.
* Ат айғырланһа, башына була.
* Ат бирһәң – үлер,
Кейем бирһәң – туҙыр,
Яҡшылыҡ – барынан да уҙыр.
* Ат үлеме – эткә туй.

*Вариант:* Ат үлһә – эткә байрам,
Ат үлгәндә эт һөйөнә.
* Ауыл эте ала булыр[330].
* Аш ташты иретә, ялған башты серетә.
* Бал ҡорто янында балға батырһың,
Тиреҫ ҡорто янында тиреҫкә батырһың.
* Балыктың башы, ямандың аяғы һаҫыр.
* Бейек түбәгә менһәң, күҙең асылыр,
Яҡшы менән һөйләшһәң, күңелең асылыр.
* Бер алдар – гел алдар.
* Бер алдаһаң, ғүмергә алдаҡсы булырһың.
* Бер бысраҡ һыйыр бөтөн көтөүҙе буяй.

*Вариант:* Бер һыйырҙың ҡойроғо йөҙ һыйырҙы бысратыр.
* Бер бысраҡ алма бөтә ТОҡТО серетә.
* Бер тамсы дегет бер мискә балды боҙа.
* Бер һынаған яманды ҡайта-ҡайта һынама.
* Бер йүнһеҙҙең хәйләһе ҡырҡ ишәккә йөк була.

* Бер ямандың кәсәфәте мең кешегә бәлә килтерер.
* Берәү бар – абынғанға аяҡ сала,
Берәү бар – йығылғанда тотоп ҡала.
* Берәүгә күтәргән таяғың үҙеңә төшөр.
* Берәүҙең быҙауы үлһен тиһәң, үҙеңдең үгеҙең үлер.
* Биттәге бысраҡты йыуһаң да, күңел бысрағын йыуып булмай.
* Бүре туйы – ете ҡуй.
* Бүре туйы ҡан менән.
* Бүрене һөйәк менән алдай алмаҫһың.
* Бүренең ауыҙы ашаһа ла ҡан, ашамаһа ла ҡан.
* Бүренең әжәле эттән булыр.
* Бүренең «яҡшылығын» ҡуй белә.
* Ғәҙел кеше үҙенә ҡаты,
Башҡаларға йомшаҡ булыр.
* Ғәҙеллек кешене матурлай.
* Ғәҙеллек менән золом бер ерҙә йәшәмәҫ.
* Ғәҙеллек – мәңгелек.
* Ғәҙелһеҙлек алға сыҡҡанда, дөрөҫлөк артҡа сигә.
* Донъя хәйләһеҙ булмаҫ,
Хәйлә файҙаһыҙ булмаҫ.
* Дөрөҫлөк алдаҡсының күҙен тишә.
* Дөрөҫлөк килеп еткәнсе,
Ялған бөтөн донъяны ялмап алыр.
* Дөрөҫлөк тиреҫлектә ятмай.
* Дөрөҫлөк үҙе генә еңә алмағас, ярҙамға ялғанды саҡырған, ти.
* Дуңғыҙ дуңғыҙ булып ҡала, ҡондоҙ була алмай.
* Дуңғыҙ күҙе йондоҙ күрмәҫ.
* Дуңғыҙға эйәргән батҡаҡта аунар.
* Дуңғыҙҙан дуңғыҙлыҡ көт.
* Дуңғыҙҙың башын табаҡҡа һалһаң, тәгәрәп төшөр.
* Ерҙең ҡылаһы (?) – ямандың йолаһы.
* Залим золом итер, золомо башына етер.

* Изге эштең иртәһе яҡшы.

* Изгелек ерҙә ҡалмаҫ.

*Вариант:* Изгелек ерҙә тәгәрәп ятмай.

* Изгелектең иртәгеһе-кисе юҡ.

* Ике яҡшының да бер яманы бар,
Ике ямандың да бер яҡшыһы бар.

* – Ирҙең ирҙән нимәһе артыҡ?
– Яҡшылыҡ иткән эше артыҡ.

* Иҫкеһеҙ яңы булмаҫ,
Яманһыҙ яҡшы булмаҫ.

* Йөҙ йыуыу менән яманлыҡ китмәй.

* Йөҙ яуызлыҡты бер дөрөҫлөк еңә.

* Йүнһеҙгә йүгән кейҙермә.

* Йығылған көрәшкә туймаҫ, яман дауға туймаҫ.

* Йылан йөҙ йәшәһә аждаһаға,
Аждаһа йөҙ йәшәһә, юхаға әйләнә, имеш[331].

* Йылан саҡҡан тышауҙан ҡурҡыр.

*Вариант:* Йылан саҡҡан киндерәнән ҡурҡыр.

* Йыланды ҡотҡарһаң, иң элек һине сағыр.

* Йыландың ағыуы телендә,
Ямандың ағыуы күңелендә.

* Йыландың башынан бигерәк ҡойроғо уйнай.

* Кеше булған кешенең кеше менән эше бар;
Кеше булмаған кешенең кешелә ни эше бар?

* Кеше булмаған кеше өсөн кеше ҡайғыһы төштән һуң.

* Кеше ҡайғыһы кешегә иртә керә, кис сыға.

* Кеше ҡолағын борғанда үҙеңдеке ауыртмай.

* Кеше менән кеше бер түгел: бар яҡшы, бар яман.

* Кешегә баҙ ҡаҙыһаң, үҙең буйы ҡаҙ.

* Кешегә ҡылған кешелә ҡалмаҫ.

* Кешегә үлем теләгәнсе, үҙеңә йөрөм телә.

* Кешегә яманлыҡ теләгәнсе, үҙеңә яҡшылыҡ телә.

* Кешегә яуызлыҡ итһәң, үҙең дә яуызлыҡ күрерһең.

* Көн яманы китер, әҙәм яманы китмәҫ.

* Күҙ йәше ебәрмәй (кешене илатма).
* Күңеле ҡараның йөҙө ҡара.
* Күп йөрөгән йыландың аяғы күренер[332].
* Күренмәҫ түңгәк ат өркөтөр.
* Кәкре ағасты киҫмәй ел иҫмәй.
* Ҡаҙанға яҡын барһаң, ҡараһы йоғор,
  Яманға яҡын барһаң, бәләһе йоғор.
* Ҡара һыуыҡ ҡарҙан яман,
  Яман кеше яуҙан яман.
* Ҡарға ҡарҡылдауын ҡуймаҫ.
* Ҡарғаны ҡарғап биҙҙерә алмаҫһың.
* Ҡойоға төкөрмә – һыуын эсерһең,
  Кешегә соҡор ҡаҙыма – үҙең төшөрһөң.
* Ҡойроғон ҡыҫҡан эттә өмөт юҡ.
* Ҡоромдан ҡором йоғор.
* Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр,
  Эшең хаҡ булһа, ғаиләң шат булыр.
* Ҡулыңдан яҡшы эш килмәһә лә, күңелеңдә ниәтең яҡшы булһын.
* Ҡуянды ҡамсы үлтерә.
* Мал насарын аҫыраһаң, ауыҙың-мороноң май булыр,
  Әҙәм насарын аҫыраһаң, ауыҙың-мороноң ҡан булыр.
* Мең яҡшылыҡты бер яуызлыҡ ҡаплай.
* Мең яманға баш булғансы, бер яҡшыға ҡуш бул.
* Насар кешегә таянғансы, һыуға таян.
* Нахаҡтан йәбешкән бәләнән һаҡлан.
* Ожмах – золом юҡ ерҙә.
* Серәкәйҙең талауынан бигерәк безелдәүе яман.
* Сусҡаны алтын даға менән дағалаһаң да ат булмаҫ.
* Сүлдең ҡамышы булмаҫ,
  Ямандың намыҫы булмаҫ.
* Сәпсек ҡоторһа ябалаҡҡа ташланыр.
* Тирмән ташы яларға өйрәнгән эт он яламай тора алмай.
* Төкөрмә ҡойоға, яңыһын ҡаҙыйһың бар.

* Таҙ хәйләһенән шайтан да ҡотолмаç.
* Тура әйткән ҡотолор, алдап әйткән тотолор.
* Тутыҡ тимерҙе ашай.
* Тәлмәрйен баҡылдап, яман кеше таҡылдап туймаç.
* Үҙ ҡылығың үҙеңә ҡайта.
* Үҙ утына ҡан ҡойған кеше утына май ҡоймаç.
* Үҙенә генә яҡшы кешене яман тиң.
* Үҙеңдең яҡҡан утыңа үҙең йылынырһың.
* Үҙең яҡшы булһаң, кеше лә яҡшы.
* Үҙеңә яҡшылыҡ теләһәң, кешегә яманлыҡ ҡылма.
* Үләкһә еçен ҡоҙғон алдан тойор.
* Файҙаһыҙ болот даръяға яуыр.
* Фетнә тараҡкан дөрөçтән ҡотҡарыусы ялған артыҡ.
* Хаҡ эште халыҡ һөйөр.
* Хаҡлыҡ ерҙә ҡалмаç.
* Хаҡлыҡ ҡартлыҡтан олораҡ.
* Хаҡлыҡ өсөн утҡа кер.
* Хаҡлык төбө – шатлыҡ.
* Хаҡлыктан хаҡлыҡ эҙләмәйҙәр.
* Хәйлә ҡороп эш иткән – михнәт күреп, йән бирер.
* Хәйләле эштә хәйер юҡ.
* Хәйләле эш хәтәр була.
* Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ.
* Хәҡикәт йән һаҡлар.
* Хәҡикәтте белмәү ғәйеп түгел, белә тороп, күрмәү – ғәйеп.
* Һөҙәм тигән һыйырҙың мөгөҙө һынған.
* Һөйәк күп булһа, эт талашмай.
* Һыуын эскән ҡойоңа төкөрмә.
* Һәр нәмәлә хәйер бар.
* Шайтан таяғына ҡырау теймәй.
* Шаян кеше – яҡшы кеше,
  Яман кеше – шаҡшы кеше.

* Шәмдең яктыһы төбөнә төшмәҫ,
Якшының ҡәҙере яҡынына белснмәҫ.
* Эт айға ҡарап өргәндән, айҙың нуры китмәҫ.
* Эт ауыҙына төшкән таш та йәнсслмәй сыҡмаҫ.
* Эт ашағанын талай.
* Эт башын эт ашай.
* Эт булмаған ерҙә төлкө йөрөр.
* Эт булһа – өрөр,
Әҙәм булһа – белер.
* Эт доғаһы ҡабул булһа, күктән һөйәк яуыр ине.
* Эт йөрөмөн бүре һөймәҫ.
* Эт, кем башынан һыйпай, шуға ҡойроҡ болғай.
* Эт ҡарғышы бүрегә йоҡмаҫ.
* Эт ҡурҡҡанды белһә, ныҕыраҡ өрөр.
* Эт менән ҡоҙа булһаң, һөйәк менән туй итерһең,
Яман менән өйҙәш булһаң, яу менән көн итерһең.
* Эт менән эт булғансы, бесәй менән ҡоҙағый бул.
* Эт менән эт булма.
* Эт өргәндән һауа боҙолмаҫ.
* Эт өрмәһә, ауыҙы ҡабара, ти.
* Эт өрөп ҡартая.
* Эт өрөп торор, бүре йөрөп торор.

*Вариант:* Эт өрөр, каруан йөрөр.
* Эт талашыр, ауыҙын-моронон ялашыр.
* Эт тешенән эт үлмәҫ.
* Эт тигәндең бите юҡ.
* Эт түләүе – бер көсөк.
* Эт – этлеген итер, итәк-еңде йыртыр.
* Эт этлеген иткән, үҙ башына еткән.
* Эт этлеген итмәһә, өнө бөтә.
* Эт этлеген итә: ит ҡаптырһаң да өрә.
* Эт этте күрә алмай.
* Эт яҡшыға ла өрә, яманға ла өрә.

* Эт яманы буранда ҡоторор.
* Эт яманы өрмәй тешләр.
* Эткә йомош ҡушһаң – һөйәк һөйрәп килтерер.
* Эткә өргән өсөн икмәк бирәләр.
* Эткә таяҡ закон.
* Эткә һөйәк менән бәрһәң, шыңшымаç.
* Эткә һөйәк табыла.
* Эткә – эт үлеме.
* Эткә ышанма – ҡойроғо кәкре.
* Этлеккә тәһәрәт кәрәкмәй.
* Этте таларға эткә ҡуш.
* Этте эйәртһәң, таяғың ҡулыңда булһын.
* Эттең ағы ни ҙә, ҡараһы ни!
* Эттең балаһы эсендә өрә.
* Эттең башын табаҡҡа һалһаң, тәгәрәп төшөр.
* Эттең йөнөн ыңғайға һыйпа.
* Эттең ҡойроғон ҡырҡһаң да эт булыр.
* Эттең ҡойроғон ҡырҡһаң, «еҙнәм» тир.
* Эттең, өрмәй торһа, башы ауырта.
* Эш тапмаған этлек уйлар.
* Эш тауға тәгәрәткән таш кеүек:
  Яҡшылыҡ ҡылһаң да, яманлыҡ ҡылһаң да – үҙеңә ҡайтыр.
* Әҙәм алаһы эсендә, хайуан алаһы тышында.
* Әҙәмдең яҡшыһы эштә беленер.
* Юҡ-бар кешенән эт яҡшы.
* Юлыңда эт ятһа, әйләнеп үт.
* Ябаға тайҙың тире асы,
  Яман кешенең теле асы.
* Ябағаны атҡа һанама,
  Яҡшыны ятҡа һанама.
* Ябағаны «ялы бар», тип, һатып алма,
  Яманды «малы бар», тип, яҡын ҡылма.
* Ябыҡ тигән яман тай, яҙға сыҡһа, ат булыр,
  Яманлығың беленһә, яҡын кешең ят булыр.

* Ябыулы ҡаҙандың тауышы яман.

* Яҡшы кеше арҡаһында яман бер туйынған.

* Яҡшы ат бығауһыҙ йөрөмәҫ,
Яман ат тышауһыҙ йөрөмәҫ.

* Яҡшы ат ябыуһыҙ йөрөмәй.

* Яҡшы атҡа ҡыңғырау тағалар.

* Яҡшы аттың башы ҡаҡ.

* Яҡшы баш һыйлатыр,
Яман баш ҡыйнатыр.

* Яҡшы булһаң, яҡын күп.

* Яҡшы егеттең аты ҡалыр,
Яман егеттең таты ҡалыр.

* Яҡшы исем малдан артыҡ.

* Яҡшы йәнеңә юлдаш, яман малыңа юлдаш.

* Яҡшы кеше ай менән көндәй: бар әҙәмгә берҙәй.

* Яҡшы кеше йөрөгән ерен маҡтап йөрөр,
Яман кеше йөрөгән ерен үртәп йөрөр.

* Яҡшы кеше маҡтанһа, ямандан ятып ҡалдым, тиер,
Яман кеше маҡтанһа, яҡынының яғаһынан алдым, тиер.

* Яҡшы кеше менән дуҫ булһаң, юлға күндерер,
Яман кеше менән дуҫ булһаң, юлдан яҙҙырыр.

* Яҡшы кеше – муйынса ҡашы,
Яман кеше – мунса ташы.

* Яҡшы кеше эш ыратыр,
Яман кеше теш ыржайтыр.

* Яҡшы кешенең яҡшылығы тейер тар ерҙә,
Яман кешенең яманлығы тейер һәр ерҙә.

* Яҡшы күҙенә салынһаң, «ҡашыма кил» тип саҡырыр,
Яман күҙенә салынһаң, «башына бир» тип баҡырыр.

* Яҡшы күргән яҡшылығын һөйләр,
Яман күргән яҡшылығын да яман итеп һөйләр.

* Яҡшы ҡағылһа – йән һөйөнә,
Яман ҡағылһа – йән көйөнә.

* Яҡшы менән бергә барһаң – малға туйырһың,
Яман менән бергә барһаң – ярҙан ҡоларһың.

* Яҡшы менән һөйләшһәң, алтын-көмөш түгелер,
Яман менән һөйләшһәң, атаң-әсәң һүгелер.

* Яҡшы менән һөйләшһәң, балға шәкәр ҡатҡандай,
Яман менән һөйләшһәң, эткә һөйәк атҡандай.

* Яҡшы менән юлдаш булһаң – ирешерһең моратҡа,
Яман менән юлдаш булһаң – ҡалырһың оятҡа.

* Яҡшы менән юлдаш булһаң – уңырһың,
Яман менән юлдаш булһаң – туңырһың.

* Яҡшы менән юлдаш булһаң – эшең бөтөр,
Яман менән юлдаш булһаң – башың бөтөр.

* Яҡшы менән ялпайырһың, яман менән ҡартайырһың.

* Яҡшы менән яман араһы – ер менән күк араһы.

* Яҡшы тыуһа, илгә ҡот,
Ямғыр булһа, ергә ҡот.

* Яҡшы һөйләгәндә кәңәш сығыр,
Яман һөйләгәндә игәш сығыр.

* Яҡшы эш үҙен-үҙе маҡтай.

* Яҡшы эш эшләйһең килһә, икеләнеп торма.

* Яҡшы эшкә тапсыҡ ҡыҫтырма.

* Яҡшы әйтмәй белер, һорамай бирер.

* Яҡшы әҙәм ил өҫтөндә һый табыр,
Яман әҙәмде дөйә өҫтөнән эт ҡабыр.

* Яҡшы әҙәм аш ашай, яман әҙәм баш ашай.

* Яҡшы юлдаш юлға күндерер,
Яман юлдаш юлдан түндерер.

* Яҡшы юлдашынан беленә.

* Яҡшы ялғандан яман дөрөҫлөк яҡшы.

* Яҡшы яңылышһа – үҙенән күрер,
Яман яңылышһа – кешенән күрер.

* Яҡшы янында яман беленә.

* Яҡшыға тарыҡма, яманға юлыҡма.

* Яҡшыға тиң юҡ, яманға иң юҡ.

* Яҡшыға үҙенән яҡшы,
Яманға үҙенән яман.

* Яҡшыға һүҙ эйәрер,
Яманға күҙ эйәрер.

* Яҡшыға эйәргән – түшәктә аунар,
Яманға эйәргән – тиҙәктә аунар.

* Яҡшыға эйәргән – уңыр,
Яманға эйәргән – туңыр.

* Яҡшыға әйтһәң, белер,
Яманға әйтһәң, көлөр.

* Яҡшыға яҡшылыҡ ҡылһаң,
Бише менән ҡайтарыр.

* Яҡшыға яҡынлашһаң, яҡшылығы йоғор,
Яманға яҡынлашһаң, яманлығы йоғор.

* Яҡшыға ялынһаң – малың ҡалыр,
Яманға ялынһаң – йәнеңде алыр.

* Яҡшыға ят булмай,
Яманда оят булмай.

* Яҡшылыҡ белмәгән кеше кешене һанламаҫ.

* Яҡшылыҡ заяға китмәҫ.

* Яҡшылыҡ ерҙә ятмаҫ.

* Яҡшылыҡ итеү яҡшылыҡ күреүҙән яҡшыраҡ.

* Яҡшылыҡ иткән – ашын ашар,
Яманлыҡ иткән – башын ашар.

* Яҡшылыҡ иткән юлда ҡалмаҫ,
Насарлыҡты ат тарта алмаҫ.

* Яҡшылыҡ иткәнгә яҡшылыҡ ит,
Яуызлыҡ иткәнгә яуызлыҡ ит.

* Яҡшылыҡ иткән – яҡшылыҡ көткән,
Яҡшылыҡ итмәгән ни көткән?

* Яҡшылыҡ итһәң – яҡшылыҡ табырһың,
Яманлыҡ итһәң – яманлыҡ табырһың.

* Яҡшылыҡ ҡылған – аш йыйған,
Яманлыҡ ҡылған – таш йыйған.

* Яҡшылыҡ ҡылып диңгеҙгә ташлаһаң да ҡайтыр.

* Яҡшылыҡ ҡылырға ҡулыңдан килмәһә, яманлыҡ ҡылма.

* Яҡшылыҡ онотола, яманлыҡ онотолмай.

* Яҡшылыҡ яу ҡайтара.

* Яҡшылыҡҡа йылан да баш эйә.

* Яҡшылыҡҡа өйрән,
Яманлыҡтан ерән.

* Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ – һәр кешенең эшелер,
Яманлыҡҡа яҡшылыҡ – ир кешенең эшелер.

* Яҡшылыҡҡа яуызлыҡ менән яуап бирмә.
* Яҡшылыҡты онотма,
Яманлыҡты күңелеңдә тотма.
* Яҡшылыҡты хайуан да белә.
* Яҡшылыҡты һатып алып булмай.
* Яҡшылыҡтың хаҡы сыға.
* Яҡшынан инабат, ямандан – касафат.
* Яҡшынан ҡасма, яманға аяҡ баҫма.
* Яҡшынан эш ҡала, ямандан үс ҡала.
* Яҡшыны күреп фекер ит,
Яманды күреп шөкөр ит.
* Яҡшыны эҙләп ал, насары үҙе килер.
* Яҡшыны яманға һатма.
* Яҡшының бер һүҙе – мең алтын.
* Яҡшының ҡәҙерен яман белмәҫ.
* Яҡшының үҙе үлһә, аты ҡалыр.
* Яҡшының үҙе үлһә лә һүҙе үлмәй.
* Яҡшының үҙе үлһә лә эше үлмәй.
* Яҡшының яманы бар.
* Яла теле йыландан яман.
* Ялған – бер көнлөк, хаҡлыҡ – мәңгелек.
* Ялған күңел ҡайтарыр.
* Ялған мең булһа ла, бер хаҡлыҡты еңә алмай.
* Ялған һөйләмә – оятлы булырһың.
* Ялған һөйләһәң – тотолорһоң,
Дөрөҫ һөйләһәң – ҡотолорһоң.
* Ялған яндырыр, яманатҡа ҡалдырыр.
* Ялғанға ялға кермә.
* Ялғанлаған ямандың үҙ башына теле яу.
* Ялғандың аяғы ҡыҫҡа.
* Ялғандың ғүмере ҡыҫҡа.
* Ялғандың дарыуы – хәҡиҡәт.
* Ялғансы күҙенән күренә.

* Ялғансы – хаҡ дошманы.
* Ялғансы эйәһен тапмаҫ.
* Ялғансынан ҡояш биҙгән.
* Ялғансыны һүҙенән белмә, күҙенән бел.
* Ялғансының дөрөҫ һүҙенә лә ышанмаҫтар.
* Ялғансының дөрөҫ һүҙе лә ялған.
* Ялғансының ҡойроғо ҡырҡ ҡолас.
* Ялғансының ҡойроғон тота алмаҫһың.
* Ялғансының һүҙен тыңлағандың ҡолағын киҫ.
* Яман айғыр өйөрөн яуға алдырыр,
  Яман егет юлдашын дауға ҡалдырыр.
* Яман арба юл боҙор,
  Яман кеше ил боҙор.
* Яман – ашҡа, яҡшы – эшкә.
* Яман егет юлдашын яуға алдырыр,
  Үҙен оятҡа ҡалдырыр.
* Яман «еңдем» тиер,
  Яҡшы «ҡуйҙым» тиер.
* Яман йөрөмдән яҡшы үлем артыҡ.
* Яман кеше туйҙа тунын һорай.
* Яман кеше йән ҡыҙғанмаҫ.
* Яман кеше яңғыҙ үлер.
* Яман кешенән йәйә буйы булһа ла ҡас.
* Яман килде – яу килде.
* Яман кәзә тартышҡаҡ, яман әҙәм орошҡаҡ.
* Яман мал янына ҡурйын* бәйләтмәҫ,
  Яман әҙәм янына кеше эйәләтмәҫ.
* Яман менән көлһәң, аҙағында иларһың.
* Яман менән яман булма.
* Яман менән юлдаш булма: яҡшы юлдан яҙҙырыр.
* Яман менән юлдаш булһаң – ярға йығылырһың,
  Яҡшы менән юлдаш булһаң – малға юлығырһың.
* Яман сайға* һыу төшһә, кисеү бирмәҫ үтергә.
* Яман тыуыр, юлды быуыр.

* Яман үҙен белмәç,
Яҡшыны күҙгә элмәç.

* Яман эт итәккә йәбешә,
Яман кеше яғаға йәбешә.

* Яман эшенән күрмәç, кешенән күрер.

* Яман эште яҡшылыҡ баçыр.

* Яман әҙәм шул булыр:
Алдыңда һине ағартыр,
Артыңда һине ҡаралтыр.

* Яман юлдаш яу булыр,
Бөтә эше дау булыр.

* Яман юлдаштан яңғыҙлыҡ яҡшы.

* Яман юлдашты ярты көн һаҡла.

* Яман яҡшы менән дуçлашмай.

* Яманға айлы төн дә бер, айһыҙ төн дә бер.

* Яманға барма, яҡшынан ҡалма.

* Яманға баш булғансы, яҡшыға юлдаш бул.

* Яманға йәнеңде бирһәң дә, ярамаçһың.

* Яманға йоғонма, йоғонһаң йығылма.

* Яманға ҡатнашһаң, үҙеңде үлтерер,
Яҡшыға ҡатнашһаң, эшеңде бөтөрөр.

* Яманға үлем юҡ, яҡшыға йөрөм юҡ.

* Яманға эйәргән – яҙыҡҡа,
Яҡшыға эйәргән – аҙыҡҡа.

* Яманға әйткән аҡыл – далаға аткан уҡ.

* Яманға юлдаш булһаң, ояҡа ҡалырһың.

* Яманға юлдаш булһаң, һәрпәгең* билеңдә булһын.

* Яманға яҡшы ҡатышмай булмай.

* Яманға яҡшылыҡ итһәң, аңламаç,
Яҡшыға яҡшылыҡ итһәң, онотмаç.

* Яманға ялынғансы, ят та яныңды ҡарма.

* Яманға ялынма: ял-ҡойроғоң өҙөлөр[333].

* Яманға ялынһаң, яңағың һыныр.

* Яманға яман иш була.

* Ямандан ҡас, яҡшыға һырыш.

* Ямандан ҡәберең йыраҡ булһын.

* Ямандан яҡшы тыуһа, тиңс табылмаç.

* Ямандан яҡшы тыуыр – әҙәм итеп танығыҙ,
  Ямандан яман тыуыр – бер аяҡ ашҡа алығыҙ.

* Ямандан яҡшылыҡ көтмә.

* Яманды бағауыл итһәң, «яу килә» тип ҡысҡырыр.

* Яманды ашҡа саҡырма, эшкә саҡыр.

* Ямандың ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаç.

* Ямандың аяғы һигеҙ – береһе теймәһә, береһе тейә.

* Ямандың биргән ашынан яҡшының әйткән һүҙе артыҡ.

* Ямандың көсө ябалаҡҡа етер.

* Ямандың күперенән үткәнсе, ярҙан ос.

* Ямандың ҡуйынында ятҡансы, яҡшының аяғында ят.

* Ямандың түрендә булғансы, яҡшының түрендә бул.

* Ямандың уйы яман.

* Ямандың уйыны яман,
  Сусҡаның муйыны яман.

* Ямандың үҙ бәләһе үҙенә етер.

* Ямандың һүҙен һөйләмә,
  Яңғыҙҙың дауын даулама.

* Ямандың юлдашы ла яман.

* Ямандың яҡшыһы булғансы, яҡшының шаҡшыһы бул.

* Ямандың яла яҡмай көнө юҡ.

* Ямандың яманлығы үҙ башына ҡайтыр.

* Яманлыҡ иткән изгелек тапмаç.

* Яманлыҡ иткәнгә лә яҡшылыҡ ит.

* Яманлыҡ ҡылдым да ҡотолдом тимә – алдыңа килер.

* Яманлыҡ эшләп, яҡшылыҡ көтмә.

* Яманлыҡ яфа килтерер.

* Яманлыҡҡа яманлыҡ – яҡшылыҡ,
  Яҡшылыҡҡа яманлыҡ – шаҡшылыҡ.

* Яманлыҡты күрмәгән – яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәгән.

* Яманлыҡтың сиге бар, яҡшылыҡтың сиге юҡ.

* Яңғыҙ тыуғанына үкенмә, яман булғанына үкен.
* Ярғанатҡа көн юҡ, яманға им юҡ.
* Яуыз боҙоп ҡыуаныр, яҡшы төҙөп ҡыуаныр.
* Яуыздың юлдашы күп, яҡшының көндәше күп.
* Яуызлыҡ ҡылһаң, язаһын үҙең күрерһең.
* Яуызлыҡҡа тәһәрәт кәрәкмәй.

* * *

* Ашаған табағына төкөргән.
* Бары ла яҡшы – беҙ яман, бары ла бойҙай – беҙ һалам.
* Ит изгелек – көт яуызлыҡ.
* Йылан булһын да – саҡмаһын,
  Эт булһын да – ҡапмаһын.
* Кеше ҡулы менән ҡар көрәй.
* Тышы ҡара, тышынан яман эсе ҡара.
* Үҙең ҡаҙыған соҡор үҙеңә.
* Эт башына эркет түгелгән.
* Эт ҡаҫтаһы эсендә[334].
* Эт этлеген итте, тун сабыуын йыртты.
* Ялғансының йорто янған – берәү ҙә ышанмаған.
* Ялғансының һыйыры үлгән – берәү ҙә ышанмаған.

## 5. Яңылышыу, гонаһ-яҙык, енәйәт, хөкөм; һаҡлыҡ, үкенеү, аптырау

* Абынған алты һөрөнгән.
* Абынғанға аяҡ салмайҙар.
* Абынғандың хәлен һөрөнгәндән һора.
* Абынмаҫ ат булмаҫ.
* Абынмаҫ аяҡ булмаҫ, ярылмаҫ таяҡ булмаҫ.
* Абыныр өсөн түңгәк табылыр.
* Аҙашҡандан юл һорамайҙар.
* «Аҙашмайым» тигән кеше ҡаш менән күҙ араһында аҙашыр.

* «Аҙашмам» тигән егетте ҡара томан аҙаштырыр.

* Аҙашһаң, алдыңа ҡара.

* Аҙбарҙа ысҡындырған бүрене урмандан эҙләмә.

* Айран эскән ҡотолған,
Күнәк ялаған тотолған.

* Аҡ ҡайындан ҡара күләгә төшә.

* Аҡҡа ҡара тамһа, бөтмәй.

* Аҡҡа төшкәнсе, ташҡа төш[335].

* Аҡҡан-тамғанды көтмә, үҙең тап,
Аҡты ҡарайтыуы еңел.

* Алға бар, артыңа ҡара.

* Алған бер яҙыҡлы,
Алдырған мең яҙыҡлы.

* Алдашҡанды артындағы белер,
Яңылышҡанды янындағы белер.

* Алдыҡтың аяғы ҡыҫҡа.

* Алдың-артың йыйып йөрө.

* Алдың-артыңды ҡарап йөрө.

* Алдыңа бер ҡара, артыңа биш ҡара.

* Алдырыр көн яҙҙырыр.

* Алты аҙым атлағансы, алтмыш тапҡыр артыңа ҡара.

* Алыҫ аҙаштыра, тәрән батыра.

* Алыҫтағы ауҙы күргәнсе, яҡындағы яуҙы күр.

* Аптыраған – ат урлаған.

* Аптыраған – бармағын тешләр.

* Аптыраған өйрәк ҡойроғо менән һыуға сумған.

* Аптыраған һөлөк ағас тешләр.

* Аптырағанда ахмаҡҡа ла «ағай» тиерһең.

* Арҡандағы ат ҡаҙығына уралыр.

* Артыҡ һаҡлыҡ – үҙе ҡурҡаҡлыҡ.

* Артыңда ни барын белмәһәң, йығылырһың.

* Асҡан – япһын, йыртҡан – ямаһын.

* Аҫыл ҡош аяғынан элләгер.

* Ата балаһында хата була.

* Ат ҙур булһа ла, юлдан юрта;
Түрә ҙур булһа ла, закон юлы тота.

* Ат һөрөнмәй, ир яңылышмай булмаç.

* Ат һөрөнмәй ер танымаç,
Ир һөрөнмәй ил танымаç.

* Ат яҡшыһы юртаҡ була,
Ир шаҡшыһы буртаҡ була.

* Атҡан уҡ кире ҡайтмаç.

* Аты юғалған атаһының кеçәһен ҡарар (һатманы микән тип).

* Ауыҙы бешкән – һалҡын һыуҙы ла өрөп эскән.

* Ауыҙың бешһә, өрөп ҡап.

* Аяҡ һөрлөгә, баш барып бәрелә.

* Аяғың ауыр булһа, атлаған һайын эҙ ҡалыр.

* Балта сапҡансы, тумыртҡа ял итә.

* Балта урлаған һабын да урлай.

* Бармаҡ тыҡҡан ҡулын да тығыр,
Ҡулын тыҡҡан аяғын да тығыр.

* Баçҡан эҙеңде белеп баç,
Алды-артыңды күреп баç.

* Батыр уртаҡ, бай уртаҡ,
Түрәһе ғәҙел бей уртаҡ.

* Башың киçелгәс, сәсең өсөн ҡайғырма.

* Баш киçергә аҡыл кәрәкмәй.

* Баш китһә, аяҡ ҡотолмаç.

* Баш юғалһа, бүрек ҡалыр.

* Башта эләкмәгән балыҡҡа һуңынан үкенмә.

* Башты балта боҙор, йылҡыны маңҡа боҙор.

* Башы ауыртҡан йылан юлға арҡыры ятҡан.

* Белмәгән ерҙең соҡоро күп.

* Бер абынған соҡорға ике абынмайҙар.

* Бер кемдең дә башы ике түгел.

* Бер ҡурҡҡан эт өс көн өргән.

* Бер ни эшләмәгән кеше генә яңылышмай.

* Бер урлағансы, йөҙ һора.

* Бер урлаһаң, ғүмергә бур булырһың,
  Бер алдаһаң, ғүмергә алдаҡсы булырһың.

* Бер үк юлдан берәүҙәр кирелеп бара,
  Берәүҙәр һөрөлөп бара.

* Биртенгәндән белек китер.

* Боҙ өҫтөндә яҙыу тормаҫ.

* Болланһаң – болоңдо,
  Юлланһаң – юлыңды,
  Уйлаһаң – уйыңды йәшер.

* Булған эшкә үкенмә, аҡылыңа зыян килер.

* Бур байымаҫ, бирән туймаҫ.

* Бур булдың – хур булдың.

* Бурға бур ышанмаҫ,
  Ирһәккә* ирһәк ышанмаҫ.

* Бурға мал бөтмәҫ,
  Майһыҙ ҡар бөтмәҫ.

* Бурҙан ҡала, уттан ҡалмай.

* Бурҙың ашы ла хәрәм,
  Эше лә хәрәм.

* Бурҙың күңеле буш.

* Бурлыҡ, бурлыҡ төбө – хурлыҡ.

* Бурлыҡ ир балала сыбыртҡынан,
  Ҡыҙ балала әнәнән башлана.

* Бүре береһен береһе ашамай.

* Бүре томанды ярата.

* Бүренән ҡурҡһаң, урманға барма.

* Бүренән ҡурҡһаң, һарыҡ аҫрама.

* Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡысҡырмайҙар.

* Бысаҡ менән уйнама.

* Быуынһыҙ ергә бысаҡ һалма.

* Бәйҙәге этең өрә башлаһа, даръяға илтеп бәйлә.

* Гонаһ ҡылһаң, тәүбә итә бел.

* Гонаһын танған – янған.

* Ғибрәт алмаған үҙе ғибрәткә ҡалыр.

* Ғәҙел менән яҡын булһаң, эшең бөтөр,
  Залим менән яҡын булһаң, башың китер.
* Ғәҙеллек үлене тергеҙгән.
* Ғәйеп онотолор, һабағы онотолмаҫ.
* Ғәйепле кеше үҙ ғәйебен үҙе белер.
* Ғәйепле үҙ күләгәһенән дә ҡурҡа.
* Ғәйепленең йоҡоһо ҡасыр.
* Ғәйебен йәшергән уңмаҫ.
* Ғәйебенә күрә язаһы.

  *Вариант:* Гонаһына күрә язаһы.
* Ғәйебеңде таныу – ярты төҙәлеү.
* Дөйә үҙ бөкрөһөн күрмәҫ.
* Дөйәне күпер аҫтына ҡасыра алмаҫһың[336].
* Дөйәне күрмәгән төймәне күрмәҫ.
* Дүрт аяҡлы мал да һөрләгә.
* Ҙур йыртыҡты бәләкәй ямау ҡапламай.
* Еңең ҡыҫҡа булһа булһын, ҡулың оҙон булмаһын.
* Еп нескә еренән өҙөлөр.
* Ер соҡорһоҙ булмаҫ.
* Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.
* Закон – көслөнөкө.
* Закондың ҡулы оҙон.
* Заман башҡа, зaң башҡа.
* Заманына күрә законы.
* Ике ҡулың ни эшләһә, ике инең шуны күтәрер.
* Илдекен урлаған ҡазаға эләгер,
  Ҡазаға эләккән язаға эләгер.
* Иңең менән эшләгәнде буйың менән күтәрерһең.
* Ир яңылышып ҡулға төшөр,
  Ҡош яңылышып турға* төшөр.
* Иртәгә үкенерлек эште бөгөн эшләмә.
* Иҫкәрмәҫ түңгәк сана ауҙарыр.
* Ишек барҙа тәҙрәнән йөрөмә.

* Йомоҡ ауыҙға себен кермәҫ.
* Йомортҡаһын урлаған тауығын да урлар.
* Йөҙө ҡараның теле ҡыҫҡа.
* Йортҡа кергәнсе, утҡа кер.
* Йөктән төшкән – юғалған.
* Йөн урлаған ҡотолор, он урлаған тотолор.
* Йығылған ағасҡа балта менән сабыусы күп була.
* Йығылған һөрөнгәндән көлөр.
* Йығылғанды түбәләмә.
* Йылан эҙләгәндең аяғына йылан уралыр.
* Йәш менән гонаһ йыуылмай.
* Кереүеңдән алда сығыуыңды уйла.
* Кеҫәгә ҡулың менән – судҡа аяғың менән.
* Кеше аяҡ аҫтында алтын ятһа ла алма.
* Кеше барҙа эшләмәҫлек эште, кеше юҡта ла эшләмә.
* Кеше ғәйебен күрһәң, үҙеңдекен уйла.
* Кеше күҙендәге сүпте күргәнсе,
  Үҙ күҙеңдәге бүрәнәне алып ҡуй.
* Кеше көрләккә сыҙамай, хурлыҡҡа сыҙай.
* Кеше ҡаны ебәрмәй.
* Кеше үҙ ғәйебен үҙе күрмәҫ.
* Кеше хаҡы кешегә йоҡмаҫ.
* Кеше хаҡы кешене ебәрмәй.
* Кешегә ҡылған яуызлыҡ үҙ юлыңда ҡаршылай.
* Кешегә ышанмаһаң, кешәнгә төшөрһөң.
* Кешенеке – күбәләй,
  Үҙеңдеке – күренмәй.
* Кешенекен алған – ҡоро таяҡҡа ҡалған.
* Кисеүен белмәй, һыуға кермә.
* Кис ҡурҡҡан көндөҙ сыра яндырыр.
* Киҫелгән баш кире йәбешмәҫ.
* Колхоздыҡын урлаған ҡазаға эләгер,
  Ҡазаға эләкмәһә, язаға эләгер.

* Көрлөккә түҙмәһәң,
Хурлыҡҡа түҙерһең.

* Көсләү юлы – золом,
Золом юлы – енәйәт.

* Күккә ҡарап абынма.

* Күккә ҡарап ерҙе уйла.

* Күл ҡортһоҙ булмай.

* Күңеле боҙоҡ башҡаларҙан ғәйеп эҙләр.

* Күперҙе сыҡҡансы айыуға «ағай», тиҙәр.

* Күргән күҙҙең яҙығы юҡ.

* Кәзә мең баҡырһа ла ишетелмәҫ,
Һарыҡ бер баҡырһа ла ишетелер.

* Кәзәне кәбеҫтә ҡарауылларға ҡушмайҙар.

* Кәкре ағасҡа ҡар йоҡмаҫ,
Бурға мал йоҡмаҫ.

* Кәкренең күләгәһе лә кәкре.

* Ҡаҙ ҡанаты ҡанун яҙыр[337].

* Ҡаҙна малы ҡоҫторор,
Ҡоҫтормаһа боҫторор.

* Ҡайтып килеп өйөрөн тапһа, аҙашҡан малды эрләмә.

*Вариант:* Ҡайтып килеп өйөрөн тапһа,
Аҙашҡан малда ғәйеп юҡ.

* Ҡалын ырыуҙа ҡараҡ бар.

* Ҡара һыйыр бәләһе ала һыйырға ябыла.

* Ҡараҡ күҙенә ҡараңғы танһыҡ

* Ҡараҡ ҡараҡты күҙенән таный.

* Ҡараҡ менән юлдаш булма,
Ғәйбәтсе менән серҙәш булма.

* Ҡараҡ урлар әйбер табалмаһа, үҙ бүркен үҙе урлай, ти.

* Ҡараҡ үҙ башына урлай.

* Ҡараҡлыҡ энә урлауҙан башлана.

* Ҡараҡтыҡы бурға хәләл.

* Ҡараҡтың ҡулы ҡыйыҡ.

* Ҡасҡан ҡараҡ бер юлдан, ҡыуыусылар мең юлдан.

* Ҡасҡанды ҡыумайҙар, ҡолағанға һуҡмайҙар.

* Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарма.

* Ҡолағыңды ҡыҙғаныпп, башыңды киҫтермә.

* Ҡорот һарҡындыһы тоҡ эсендә ятмай.

* Ҡул ҡулды белә, закон юлды белә.

* Ҡул өсөн баш яуаплы.

* Ҡулҡыға ингән ҡотолмаҫ,
Урманға ингән тотолмаҫ.

* Ҡылһаң ҡаза – килер яза.

* Ҡыңыр (ҡырын) эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер.

* Мулла ҡанатһыҙ булмаҫ,
Бәндә хатаһыҙ булмаҫ.

* Мулла уйы теләктә, бурҙың уйы келәттә.

* Мыҫҡылдың төбө мөшкөл.

* Намыҫы бар урламаҫ,
Нымыҫһыҙы туҡтамаҫ.

* Насар буҫтауға йөн йәбешә.

* Ояһында ни булһа, осҡанында шул булыр,
Илдә түрә кем булһа, законы ла шул булыр.

* Подпись иткән – под суд киткән[338].

* Ришүәт ишектән инһә, иман мөрйәнән ҡасыр.

* Серен белмәгән малдың һыртынан йөрөмә.

* Соҡорға төшкәнсе, сығырыңды уйла.

* Суд эше – ут эше.

* Себенле ергә серәкәй эйәләшер.

* Сүптән сүмәлә өйөлә.

* Сүптең өйгәне лә сүп, сөйгәне лә сүп.

* Табан аҫтындағын күргәнсе, танау аҫтындағын күр.

* Тайған йығылыр, таянған торор.

* Таймаҫ тояҡ булмаҫ.

* Тауға менгәндә төшөрөңдө бел.

* Тауҙа ҡасҡын булһаң да, кешелегеңде юғалтма.

* Таулы ерҙә бүре бар,
Илле ерҙә уғры бар.

* Таяҡ ике башлы була, йыуаны үҙеңә төшмәһен.
* Тик торған бағанаға бераү ҙә бәрелмәй.
* Тиле булһа ла түрә һүҙе хаҡ.
* Тоҫҡамай атҡан – ҡарға ҡурҡытҡан.
* Тотолмаған уғры ишандан да тоғро.
* Төймә алһаң да бурлыҡ,
  Дөйә алһаң да бурлыҡ.
* Төймә урлаған дөйәгә лә ҡулын һуҙыр.
* Төтәмәгән мөрйә булмаҫ.
* Тура барһаң – уңырһың,
  Кәкре барһаң – туңырһың.
* Тырнаҡ аҫтынан кер эҙләмә.
* Тәртә урлаһаң, сана түләрһең.
* Уғры байымаҫ, күңеле тынмаҫ.
* Уғры байымаҫ, яшыҡ һимермәҫ.
* Уғры булма, тоғро бул –
  Беҙгә шулдыр туры юл.
* Уғры кешенән тоғро ат яҡшы.
* Уғры кешенән файҙа юҡ.
* Уғры урлай, ҡулын ҡуйып ҡалдырмай.
* Уғрының үҙе туйһа ла, күҙе туймаҫ.
* Уғың бушҡа атма, күңелең бушҡа һатма.
* Уҙған болотто тотоп булмай.
* Уҙған ямғыр артынан ямсы* менән сапмайҙар.
* Уйын төбө ут булыр,
  Закон төбө суд булыр.
* Уйындан – уймаҡ,
  Табанан – ҡоймаҡ.

*Вариант:* Уйындан уҫмаҡ* сыға.

* Ултырам тип ашыҡма, тәртә араһы ни әйтер.
* Уң ҡулың киҙәнһә, һулы менән тот.
* Уң күҙең күргәнде һул күҙең күрмәһен.
* Урлаған бер ғәйепле,
  Урлатҡан ике ғәйепле.

* Урлаған мал мантымай.
* Урлаған менән урт тулмаҫ.
* Урлағандан итәк-ең оҙаймаҫ.
* Урла ла – тотол,
  Тураһын әйт тә – ҡотол.
* Урланған малда бәрәкәт юҡ.
* Урлап алма, һорап ал.
* Урлап тапҡан малдан илап тапҡан мал артыҡ.
* Урлыҡ башы – алдыҡ.
* Урлыҡ башы – хурлыҡ.
* Урманға ин, ботаҡҡа ҡаҙалма.
* Урманға кермәҫ борон сығырыңды уйла.
* Ут менән уйнама – бешерһең,
  Кешегә соҡор ҡаҙыма – үҙең төшөрһөң.
* Ут янына дары ҡуймайҙар.
* Утҡа ҡулы бешкән көлдө бейәләй менән тотҡан.
* Уттан ҡурҡҡан төтөндән һаҡланыр.
* Утын киҫкән ерҙә юнысҡы ҡала.
* Үҙ ғәйебең елкә соҡоронда була.
* Үҙ ғәйебеңде үҙең бел.
* Үҙ юлыңа таш атма.
* Үҙе йығылған иламаҫ, үҙе ҡылған үкенмәҫ.
* Үҙе йығылған үҙенә үпкәләр.
* Үҙе уғры – кешене уғры тиер.
* Үҙең сәскәнде үҙең ур.
* Үҙеңде танымай – кешене хурлама.
* Үҙеңдән олонан һабаҡ ал.
* Үкенгән артына ҡарар.
* Үкенеп, эш бөтмәҫ.
* Үкенмә, үкенескә ҡалырһың.
* Үкенеүҙән файҙа юҡ.
* Үлгән төлкөнө ике ҡат тунамайҙар.
* Үткән эш бөткән эш.

* Үткән эшкә салауат.
* Үткән эшкә үкенмә.
* Үткән эшкә үкенмә: ғүмерең зая үтер.
* Үткән эшкә үкенмә, етмәҫте ҡыума.
* Үткән эшкә үкенмә, үкенһәң дә, еткермәҫ.
* Үткән эштән төш яҡшы.
* Хөкөм эше – көтөм эше.
* Хөкөмдән ҡурҡма, хөкөм ителеүҙән ҡурҡ.
* Хәрәм ебәрмәй.
* Хәрәм мал ҡырһыҡсан*.
* Хәрәм мал харап итә.
* Хәрәм эсте тишә.
* Хәрәмдеке – әрәмгә,
Әрәмдеке – шәрәмгә.
* Хәрәмдән килгән аттан хәләлдән килгән әтәс яҡшы.
* Хан ҡыҙында ла хата була.
* Хаталаныу ғәйеп түгел,
Хатаны танымау – ғәйеп.
* Хатаның бизмәне юҡ.
* Һаҡлыҡты һайыҫҡандан өйрән.
* Һаҡлыҡтың хурлығы юҡ.
* Һарыҡтың йығылғаны ла күренмәй,
Дөйәнең һөрләккәне лә күренә.
* Һорау ғәйеп түгел, урлау ғәйеп.
* Һөткә ауыҙы бешкән һыуҙы өрөп эскән.
* Һуғыштан һуң йоҙроҡ төймәйҙәр.
* Һуҡҡан менән һүккән кире ҡайтмаҫ.
* Һуҡырға хөкөм юҡ.
* Һыуға ингәнсе, йөҙөргә өйрән.
* Һыуҙа кәмә юлы беленмәй.
* Һәләкәт эҙләһәң, бейектән эҙлә.
* Һәр кем үҙе өсөн үҙе яуаплы.
* Һәр көндөң бер хөкөмө бар.

* Һәр нәмәне үҙ аршының менән үлсәмә.

* Шаулы баҙар бурҙы йәшерер.

  *Вариант:* Шаулы баҙар ҡараҡ өсөн яҡшы.

* Шеше тулмай сиҡан һытылмай.

* Шикле шикләнер, сәкмәнен бөркәнер.

* Шымсы шымын уйлар, һынсы һынын уйлар.

* Шәм төбөнә шәүлә төшмәҫ.

* Ыстинаға ышанма – ботаҡ күҙе бар.

* Ысын ҡара китмәҫ, ялған ҡара яғылмаҫ.

* Энә урлаған дөйәне ҡалдырмаҫ.

* Эттең ҡойроғон кем киҫһә, уға шул яҡшы.

* Эшләп кешегә ярап булмаҫ, урлап тамаҡ туймаҫ.

* Әҙәм ҡаны атлатмай.

  *Вариант:* Әҙәм ҡаны менән ҡаҙ ҡаны атлатмаҫ.

* Әҙәм фәрештә булмаҫ.

* Юғалғанды юллама, юллаһаң, һуңлама.

* Юлбарыҫтың башы юлда ҡалыр.

* Юлдан сығыу ғәйеп түгел,  
  Юлға кермәү – ғәйеп.

* Яҙығына күрә язаһы.

* Яҡшы ат ҡа бер һөрлөгә.

* Ялғандың бото ҡыҫҡа.

* Ялғансының шаһиты янында булыр.

* Яман бур – янындағы бур.

* Янғындан һуң һыу күп булыр.

* Яңалмаҫ яңаҡ булмаҫ,  
  Һөрөнмәҫ тояҡ булмаҫ.

* Яңылышҡанға яза юҡ.

* Яшыҡҡа* сүп эйәрер (йәбешер).

* * *

* Аҡ эт бәләһе ҡара эткә.

* Алты атлар, артына ҡарар.

* Аптыраған атаһының ҡуйынын аҡтарған.
* Аптыраған, йөҙәгән – артын мейескә терәгән.
* Ат абынғанға ишәк ғәйепле.
* Атаҡлы бур астан үлгән.
* Атта ла бар, тәртәлә лә бар.
* Баш ярылғас, күҙ нәмәгә?
* Булған эш булған, үкенеүҙән уҙған.
* Бурҙыҡын ҡараҡ урлаған.
* Былтыр кейгән ҡыптыр тундың быйыл еҫе сыҡты.
* Елдән килгән елгә китә.
* Ете бәләгә бер яуап.
* Иҫең киткән иҫке сәкмәнгә.
* Иҫкә төшөр ҙә, эш үтер.
* Иҫенә төшкәс, Иҙел кисер.
* Йөгө менән ат юғалды, сыбыртҡыһын суд эҙләй.
* Кем яман – Сәтәү яман.
* Кеше-ҡара күрмәһен, ҡара көсөк өрмәһен.
* Кеше малына ҡул һуҙған,
  Үҙ малынан изгелек күрмәҫ.
* Китте баш, ҡалды муйын һерәйеп.
* Күҙе дүрт булған.
* Күҙе маңлайына менгән.
* Ҡаңғырған ҡатай һурпа менән ҡулын йыуған.
* Ҡараҡтың бүрке яна.
* Ҡорған ҡапҡан, үҙе килеп ҡапҡан.
* Ҡулың менән эшләгәнһең, иңең менән күтәр.
* Ҡыйыҡ ағас та төҙ яна.
* Ни саранан бисара.
* Сүлмәк ватылғас, үкенеүҙән файҙа юҡ.
* Ташҡа үлсәйем, ағасҡа тиңләйем.
* Терһәк бик яҡын да, тешләп булмай.
* Тырнаҡ буйы хата, беләк буйы яфа.

* Уҙғандың көлө туҙған.

* Унан ҡасҡан, бынан ҡасҡан,
Яман менән күҙен асҡан.

* Урларға оялмаған ҡараҡты тоторға ояла һы юҡ.

* Үҙ күҙендәге бүрәнәне күрмәгән,
Ил күҙендәге сүпте күргән.

* Һин дә түрә, мин дә түрә – был хөкөмдө кем күрә?

* Һинең айғырың кешнәгәнгә, минең бейәм ҡолон һала.

* Энә урланым – тыйманың,
Төймә урланым – ҡуйманың[339].

* Энәнән ҡурҡыр, бүрәнәне йотор.

* Юғалған ҡылыстың һабы алтын.

* Яуҙан аҙаҡ йоҙроҡ күтәргән.

## 6. Яңғыҙлыҡ, айырымлыҡ һәм берҙәмлек

* Аҙ кешене күп кеше бер яйға килтерер.

* Аҙ күпкә буйһонор.

* Айырылған ир аҙыр,
Ҡушылған ир уҙыр.

* Айырылған ҡаҙ тупланған ҡарғаға ем булыр.

* Айырылғанды айыу ашар,
Бүленгәнде бүре ашар.

* Айырылғандың ҡанаты ҡайырылған.

* Айырылма өйөрөңдән:
Айырылһаң өйөрөңдән,
Ике ҡулың китмәҫ бөйөрөңдән.

* Алтау ала булһа – ауыҙҙағы китер,
Дүртәү теүәл булһа – түбәләге килер.

* Алтмыштыҡы бөткән, алтынығы ҡалған.

* Араланған ҡуйҙы бүре алыр.

* Артелдең өйрәһе ҡуйы була.

* Ауыл эте ала булһа,
Бүре килеп баш булыр.

* Ауыл эте ала булһа ла, бүре килгәндә, берегер.

* Ашты бергә бешерһәң ҡуйы була.

* Байлыҡ байлыҡ түгел, берлек – байлыҡ.

* Байлыҡ терәк түгел, берлек – терәк.

* Барыр ере булмағандың, батыр күле лә юҡ.

* Башмаҡ тапһа – башҡа ашар,
Егет тапһа – бергә ашар.

* Бер ағас мейестә янмаç,
Ике ағас далала ла һүнмәç.

* Бер ағастан унау үçкән,
Ун ағастан урман үçкән.

* Бер ағастан урман булмай.

* Бер ағастың шаулауы илгә ямғыр яуҙырмаç.

* Бер бейеүсе менән туй булмай.

* Бер бейәлә ике имесәк, береһе ҡороһа, береһенең һөтө юҡ,
Бер дөйәлә ике үркәс, береһе булмаһа, береһенең көсө юҡ.

* Бер бүрәнә өй булмаç.

* Бер ҡарлуғас менән яҙ булмай,
Бер болот менән көҙ булмай.

* Бер ҡарлуғас яҙ килтермәй.

* Бер ҡул менән төйөн бәйләнмәй.

* Бер ҡылдан арҡан ишеп булмай.

* Бер сәскә яланды матурламай.

* Бер тарынан бутҡа булмай.

* Бер тарынан бутҡа булмаç,
Бутҡа булһа ла, йортҡа булмаç.

* Бер тау бер кейекте туйҙырмаç.

* Бер тиренән тун булмаç.

* Бер төкөрһә ни була,
Ил төкөрһә күл була.

* Бергә бешергән өйрә ҡуйы булыр.

* Бергәнеке берәгәйле.

* Берең өсөн барың тор,
Барың өсөн берең тор.

* Береккән көтөүҙе бүре алмай.

*Вариант:* Береккән көтөү бүрснән ҡурҡмай.

* Береккән һыу Иҙел булған,
Таралған һыу тамсы булған.

* Береккәндән яу өрккән.

* Береклектә – тереклек.

*Вариант:* Тереклек, тереклек төбө – береклек.

* Береклек булмай тереклек булмай.

* Берлектә – бәрәкәт,
Тарҡаулыҡта – һәләкәт.

* Берлектә – көс.

* Берәүҙән икәү яҡшы,
Икәүҙән өсәү яҡшы.

* Берәү «бер» тигәнгә, күмәк күлдәк өлгөртөр.

* Болот берекһә – күк күкрәр,
Халыҡ берекһә – ер тетрәр.

* Бүленгән бүрегә юлыҡҡан.

* Ваҡ балыҡ көтөүе менән йөрөй.

* Донъя киң тип таралма: таралған тарыны тауыҡ сүпләй.

* Епте ишләһәң, арҡан булыр.

*Вариант:* Епте ишһәң бау булыр,
Арба-санаң һау булыр.

* Ереккән йылан ите ашаған.

* Ике кеше – бер кешенең тәңреһе.

* Ике кәңәш бер була,
Илле егет йөҙ була.

* Икенең береһе үлһә, бере ҡалыр;
Яңғыҙҙың үҙе үлһә, кеме ҡалыр?
Менгән аты, кейгән кейеме яуға ҡалыр.

* Ил төкөрһә, күл булыр.

* Илдән айырылғанды яу саба.

* Ише күптең көсө күп.

* Йөҙәүҙең йөҙөн йыртма.

* Йыйын эттең араһында бер эттең ҡойроғо бот араһында.

* Көлгә күмелһәң дә бергә көн күр.

* Көтөүҙән айырылған малды бүре алыр,
Илдән айырылғанды гүр алыр.

* Күл тамсынан йыйыла.

* Күмәк ағас дауылдан ҡурҡмаç.

* Күмәк аттың араһында бер аттың аҡһағаны күренмәç.

* Күмәк көлгәндә берәүҙең илағаны беленмәç.

* Күмәк көс тау аҡтарыр,
Күмәк кеше яу ҡайтарыр.

* Күмәк күтәрһә, күлде күсерер.

* Күмәк ҡырмыçҡа йыланды ашай.

* Күмәк серәкәй филде ҡурҡытыр.

* Күмәк төкөрһә – күл итер,
Яңғыҙ төкөрһә – юҡ итер.

* Күмәк эт арыçлан үлтерә.

* Күмәкләгән тау күсерер.

* Күмәкләгән яу ҡайтарған.

* Күмәктекен эт еймәç.

* Күмәктең уғы юғалһа ла табылыр,
Яңғыҙҙың яны юғалһа ла табылмаç.

* Күмәкләгән ҡунаҡ аткарған,
Күмәкләгән яу ҡайтарған.

* Күп ауыҙ бер булһа, бер ауыҙ юҡ булыр.

* Күп йыйылһа юҡ табыла.

* Күп теләге – күк.

* Күп тигән төлкө алыр,
Күмәк тигән дау алыр.

* Күп төкөрһә, күл булыр.

* Күплек ҡайҙа – туҡлыҡ шунда.

* Күплек ҡайҙа – хаҡлыҡ шунда.

* Күпселек еңер.

* Күпселек ҡайҙа – көс шунда.

*Вариант:* Күпселектә – көслөлөк.

* Күпте яманлаған күмеүһеҙ ҡалған,
Көндө яманлаған – күңелһеҙ ҡалған.

* Күптең битенә көл түкмә.

* Күптең төбө – бәрәкәт.

* Күптән ҡуян ҡотолмай.

* Күстән ҡалғансы көстән ҡал.

* Кәңәш менән беселгән тунда кәмселек булмаç.

* Кәңәшле йыйын тарҡалмаç.

*Вариант:* Кәңәшле ил тарҡалмаç.

* Ҡанса «мин» тиһә лә,
Яңғыҙ егет бей булмаç,
Ҡанса йыуан булһа ла,
Яңғыҙ ағас өй булмаç.

*Вариант:* Ҡалын-йыуан булһа ла,
Яңғыҙ ағас өй булмаç,
Күңеле изге булһа ла,
Яңғыҙ егет бей булмаç.

* Ҡошто ҡанат осорор.

* Ҡырмыçҡа ояһына таяҡ тыҡма.

* Ҡырмыçҡа үлемдән ҡурҡмаç.

* Ҡырмыçҡалар берәһе өсөн берәһе үлер.

* Ҡырмыçҡалар ҙур түгел – күмәкләшеп тау өйә.

* Мал өйөрөлһә – яуҙыҡы,
Айырылһа – елдеке.

* Менгәшеп яу сабып булмай.

* Мең башта мең аҡыл бар.

* Оло ҡаҙанда ҡайнаған таралмаç.

* Өйө башҡа булһа ла, көнө бер булһын.

* Өйөр эсендә бер бейәнең аҡһағаны күренмәç.

* Өйөрлә һыуыр* өң ҡаҙмаç,
Өң ҡаҙһа ла, киң ҡаҙмаç.

* Тамсы тама тора,
Тама-тама биҙрә тула.

* Тауҙан да тау тыуа.

* Усарлыға* уҡ төшмәç.

* Хеҙмәт төбө – хәрәкәт,
Күптең төбө – бәрәкәт.

* Һөнәр алды – ирлек,
Ырыҫ алды – берлек.

* Һуҡыр сысҡан ҙур түгел, шулай ҙа тау аҡтара.

* Һүҙ бер булһа, ҡул бер була.

* Эт күп булһа, бүрене еңә.

* Яҡшы булһаң, яңғыҙ ҡалмаҫһың.

* Яланғас ҡалған тауҙа кейек юҡ.

* Яңғыҙ ағас өй булмаҫ,
Яңғыҙ кеше бей булмаҫ.

* Яңғыҙ ағасты ел бөгә, күмәк ағас елдә бора.

* Яңғыҙ ағасты ел һындыра.

* Яңғыҙ ағас янмаҫ.

*Вариант:* Яңғыҙ утын мейестә янмай.

* Яңғыҙ байтирәк илгә ҡот бирмәҫ.

* Яңғыҙ батыр яу еңмәҫ,
Яңғыҙ егет дау еңмәҫ.

* Яңғыҙ батыр яу ҡаҡмаҫ.

* Яңғыҙ батыр яу түгел.

* Яңғыҙ бейә һаба тултырмай.

* Яңғыҙ булһаң, бер яҡшыны ағай ит.

* Яңғыҙ булып ни ҡырҙың, колхоз булып өй ҡорҙоң.

* Яңғыҙ йөрөп юл тапҡансы, күмәк менән аҙаш.

*Вариант:* Яңғыҙ йөрөп һуҡмаҡ ярғансы,
Күп менән бергә аҙаш.

* Яңғыҙ кеше барлы булһа ла, зарлы булыр.

* Яңғыҙ кеше яу алмаҫ.

* Яңғыҙ ҡаҙыҡҡа ситән үрмәйҙәр.

* Яңғыҙ ҡайынға ҡош ҡунмаҫ.

* Яңғыҙ ҡайын дауылдан ҡурҡыр,
Яңғыҙ кеше халыҡтан ҡурҡыр.

* Яңғыҙ ҡарға емгә туймаҫ.

* Яңғыҙ ҡарға йыл килтермәҫ,
Яңғыҙ батыр яу ҡайтармаҫ.

* Яңғыҙ ҡош балаһы ҡунырға оя тапмаҫ.

* Яңғыҙ ҡарға ямғыр яуҙырмаҫ.

* Яңғыҙ тирәк йорт булмаҫ,
Үҫеп ултырһа ла урман булмаҫ.

* Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ,
Яңғыҙ егет бей булмаҫ.

* Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ,
Яңғыҙ таш ҡала булмаҫ.

* Яңғыҙ торомбаш ялынһаң да янмаҫ.

* Яңғыҙ ултырған янын юғалтыр.

* Яңғыҙ эттең өргәне, яңғыҙ кешенең йөрөгәне беленмәҫ.

* Яңғыҙ – ярлы, ғүмере – зарлы.

* Яңғыҙ ярышҡа сыҡмаҫ.

* Яңғыҙға яла күп булыр.

* Яңғыҙлыҡ йән ҡартайта.

* Яңғыҙлыҡ бер кемгә лә килешмәй.

* Яңғыҙлыҡ әжәлдән битәр.

* Яңғыҙлыҡ яуға ярамай.

* Яңғыҙлыҡ ят илдә беленер.

* Яңғыҙҙы бүре ашар.

* Яңғыҙҙың өнө сыҡмаҫ,
Йәйәүленең саңы сыҡмаҫ.

* Яңғыҙҙың йәйәһе лә юғалыр,
Ырыулының уғы ла юғалмаҫ.

*Вариант:* Яңғыҙҙың йәйәһе лә юғалыр,
Күмәктең уғы ла юғалмаҫ.

* Яңғыҙҙың ярҙамсыһы бер Алла.

* Яуҙы яңғыҙ ҡайтармай.

* * *

* Башы күренһә лә – башҡа ауыл[340].

* Бер ат арҡаһында мең ат һыу эскән.

* Бер ҡуй арҡаһында мең ҡуй һимергән.

* Береһе унға ишә, береһе һулға ишә.

* Бүҙәнәнең өйө юҡ,
Ҡайҙа барһа – бытбылдыҡ.

* Вәли үҙенсә, Ғәли үҙенсә.

* Илле иле менән булғанда,
  Иҙелбикә үҙе менән булған.

* Кәбәндән энә эҙләй.

* Ҡырҡ кеше бер яҡ,
  Ҡыңрый* кеше бер яҡ.

* Торһам – ашым, ятһам – башым.

* Унан ҡасҡан, бынан ҡасҡан,
  Яуызлыҡ менән яуыз асҡан.

* Әй, йәрәннәр*, ҡара һарыҡ ҡасан бәрәнләр?

## 7. Тел һәм һүҙ, кәңәш, хәбәр; вәғәҙә, уй-ниәт

* Абаға сәскә атмай,
  Беҙ ҡапсыҡта ятмай,
  Теш араңдан сыҡҡан һүҙ
  Кире әйләнеп ҡайтмай.

* Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән.

* Ағай булыр егеттең әйткән һүҙе им булыр,
  Булыр-булмаҫ егеттең әйткән һүҙе ел булыр.

* Ағас башын ел борор,
  Әҙәм башын һүҙ борор.

* Ағыу хәтәр, ағыуҙан ғәйбәт хәтәр.

* Аҙ һөйлә, күп тыңла.

* Аҙ һөйләгән күп эшләр.

* Аҙ һөйләһәң күп ишетерһең.

* Аҙ һүҙ менән күпте әйт.

* Аҙ һүҙҙән мәғәнә сығыр,
  Күп һүҙҙән бәлә сығыр.

* Аҙ эш күп һүҙҙән яҡшыраҡ.

* Аҙанды ҡырҡ ҡабат әйтмәйҙәр.

* Аҙаман ирҙең билдәһе – аҙ һөйләр ҙә, күп тыңлар,
  Арғымаҡ аттың билдәһе – аҙ юшар ҙа, күп уртлар.

* Айыҡтың уйында – иҫеректең теләндә.

* Аҡҡа яҙылһа, юйылмаҫ.

* Аҡ тигәнең – алғыш*,
  Ҡара тигәнең – ҡарғыш.

* Аҡыл – ҡаҙна, күңел – йоҙаҡ, тел – асҡыс.
* Аҡыллы кеше алданмаҫ та, алдатмаҫ та.
* Аҡыллы ҡош ҡанатын һаҡлай, аҡыллы кеше һүҙен һаҡлай.
* Аҡыллы һүҙен һөйләгәндә, ашар ашың онотолор.
* Аҡыллы һүҙҙән ҡурҡа, ахмаҡ таяҡтан ҡурҡа.
* Аҡыллыға әйтһәң – белә,
Тинтәккә әйтһәң – көлә.
* Аҡылһыҙҙан кәңәш һорау – үҙе аҡылһыҙлыҡ.
* Аҡылың булһа – аҡылға эйәр,
Аҡылың булмаһа – мәҡәлгә эйәр.
* Алама кешелә һүҙ тормаҫ.
* Аласағың китһә лә, әйтәсәгең китмәһен.
* Алғыш та төшә, ҡарғыш та төшә.
* Алдыңдан әйткән телең артыңдан килеп тотмаһын.
* Алйоттан һорама, үҙе әйтер.
* Алтыла белгән ана телең алтмышта ла онотолмаҫ.
* Алыҫ ерҙән хәбәрҙе каруан килтерер.
* Алыҫтағы саф булыр,
Бара-бара саҡ булыр.
* Аманатҡа итһәң хыянат,
Алырһың ғүмерлек яманат.
* Аманатҡа хыянат юҡ.
* Аманат баш һаҡлай.
* Ант боҙоусы антҡа ышанмаҫ.
* Антты бирә лә бел, үтәй ҙә бел.
* Антын боҙған – иманын боҙған.
* Аңғармай һөйләгән ауырымай үлгән.
* Аңлағанға әйт, тыңлағанға һуҡ.
* Асмағанды кем күрә, әйтмәгәнде кем белә?
* Арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай.
* Арыҫлан серен юлбарыҫ белмәҫ.
* Аҫыл таш һыу төбөндә,
Аҫыл һүҙ күңел төбөндә.

* Ат ҡәҙере белмәгән юлда илап ултырыр;
Тун ҡәҙере белмәгән ҡыҙыл яланғас ултырыр,
Һүҙ юрығы белмәгән башына бәлә килтерер.

* Ат кешнәшеп танышыр, әҙәм һөйләшеп танышыр.

* Ат ысҡынһа тотоп була, һүҙ ысҡынһа тотоп булмай.

* Атайҙар һүҙе – аҡылдың үҙе.

* Атайыңдан оло кеше менән уйнап һөйләшмә.

* Атҡан уҡ кире ҡайтмаҫ,
Әйткән һүҙ эстә ятмаҫ.

* Атмаһаң – беләктә,
Әйтмәһәң – йөрәктә ҡалыр.

* Ауыҙ бер, ҡолаҡ ике,
Тыңлар һүҙең бер,
Тыңларың – ун ике.

* Ауыҙ күрке – тел,
Телдең күрке – һүҙ.

* Ауыҙ – ҡапҡа, һүҙ – ел.

* Ауыҙ тоҡсай түгел, бәйләп ҡуйып булмай.

* Ауыҙҙағы һүҙгә һин эйә,
Ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ һиңә эйә.

* Ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ осҡан ҡош кеүек.

* Ауыҙы йомшаҡ ҡолон биш бейәне имер.

* Ауыҙың ҡыйыҡ булһа ла, һүҙең тура булһын!

* Ауыҙың менән сәскәнде ҡулың менән йыйып ала алмаҫһың.

* Ауыҙың менән тыңлама.

* Ауыҙың ни һөйләгәнде ҡолағың ишетһен.

* Ауыҙыңа хужа бул.

* Ауыл – ауыҙ,
Урман – ҡолаҡ,
Ҡыр – күҙ[341].

* Ауыртҡан ергә һуҡмайҙар.

* Ахмаҡ һүҙе көлкө булмай.

* Ахыры заман килһә,
Атаһы тороп – улы һөйләр,
Инәһе тороп – ҡыҙы һөйләр.

* Аш һалҡыны һыуытмаҫ,
Һүҙ һалҡыны һыуытыр.

* Аштың тәме тоҙ менән,
Әҙәм яҡшыһы һүҙ менән.

* Ашы тәмле бай була,
Һүҙе тәмле бей була.

* Аяҡ аҫтынан саҡҡан йыландан һаҡлан,
Аяҡ аҫтынан сыҡҡан яланан һаҡлан.

* Аяҡ йүгереге – ашҡа,
Тел йүгереге – башҡа.

* Аяғы яман түрҙе бысрата, теле яман илде бысрата.

*Вариант:* Аяғы бысраҡ – өй бысратыр,
Теле бысраҡ – кеше бысратыр.

* Баллы һүҙ баш әйләндерә.

* Бал себенде, яҡшы һүҙ әҙәмде эйәләштерә.

* Балта һорағанға көрәк тоттормайҙар[342].

*Вариант:* Һәнәккә көрәк һаплама.

* Балдың үҙе тәмле,
Ауыҙҙың һүҙе тәмле.

*Вариант:* Балдың үҙе тәмле,
Уҡымышлы кешенең һүҙе тәмле.

* Баш киҫеү булһа ла, тел киҫеү юҡ.

* Баш – һандыҡ, тел – асҡыс.

* Башҡа бәлә – телдән.

* Башыңды бир, серңде бирмә.

* Бауҙың оҙоно, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.

* Бит күрке – күҙ, тел күрке – һүҙ.

* Беҙ ҡапсыҡта ятмай.

*Вариант:* Беҙ ҡапсыҡта ятмай,
Һүҙ тоҡсайға һалынмай.

* Белгән атҡа бер ҡамсы,
Белмәгәнгә мең ҡамсы.

* Белгән белгәнен әйтер.

* Белгәнгә бер һүҙ етә.

* Белгәнгә ун ике, белмәгәнгә утыҙ ике.

* Белгәнеңде һөйләмә, ни һөйләгәнеңде бел.

* Белдекле бер әйтер,
Бер әйтһә лә берәгәйле әйтер.

* Белдеклегә бер әйтһәң дә – йөрәгенең эсендә,
Белдекһеҙгә мең әйтһәң дә – ҡолағының тышында.

* Белдеклегә бер һүҙ ҙә күп,
Белдекһеҙгә суҡмар ҙа аҙ.

* Белдеклегә бер әйтһәң дә – ҡолағының эсендә,
Белдекһеҙгә биш әйтһәң дә – ҡолағының тышында.

* Белеп һөйләмә, күреп һөйлә.

* Белмәгән, күрмәгән – мең бәләнән ҡотолған.

* Белмәгәнгә һүҙ һөйләмә,
Серһеҙгә сер һөйләмә.

* Белмәгәнде белмәү мең бәләнән ҡотҡарыр.

* «Беләм» – мең һүҙ,
«Белмәйем» – бер һүҙ.

* «Беләм» тип – тотолдом,
«Белмәйем» тип – ҡотолдом.

* «Беләмен» тип һөйләшмә: ауыҙың буртаҡ* өйрәнер.

* Бер аҡыллыға кәңәш ит,
Бер тилегә кәңәш ит.

* Бер ауыҙ һүҙҙең ике ауыҙ мәғәнәһе бар.

* Бер балыҡ башын ҡырҡ ҡабат сәйнәмә.

* Бер булһын, берәгәйле булһын[343].

* Бер ғәйбәттең ғүмере – икенсеһе сыҡҡансы.

* Бер йәҙрә берҙе үлтерер,
Бер һүҙ меңде үлтерер.

* Бер намаҙға ике аҙан әйтмәйҙәр.

* Бер мәҡәл ике мәғәнә аңлатмай.

* Бер олоноҡон, бер кесенекен тыңла.

* Бер һүҙҙе күп һөйләһәң, күк тәмәйтә.

* Бер әйт тә, бөтөр.

* Бер яҡшы эш мең яҡшы һүҙҙән артыҡ.

* Берҙе һөйләгәндә биште уйла.

* Берәү бар – һүҙҙе күңеленә йыя,
Берәү бар – һүҙҙе ҡарынына йыя.

* Берәү белмәгәнде берәү белә.

* Берәү теле менән ярай,
Берәү елкә менән ярай.

* Берәүзең ҡулы эшләй,
Икенсенең теле эшләй.

* Биш иҫәргә кәңәш иткәнсе,
Бер аҡыллыға кәңәш ит.

* Боҙ өҫтөндә яҙыу тормаҫ,
Ғәйбәтселә һүҙ тормаҫ.

* Бора һөйләгәндән һаҡлан,
Көлә килгәндән һаҡлан.

* Боронғолар һүҙе – китап.

* Боронғолар һүҙе китаптан тыш түгел.

* Боронғолар әйткән һүҙ китаптың эсендә лә түгел,
Тышында ла түгел.

* Борос әсе, әсе телле кеше унан да әсе.

* Бөгөнгө уй иртәгәгә ярамай.

* Булмаған әйберзең күп һөйләп башын ауырттырма.

* Бушты һөйләмәйенсә, ысынды белеп булмай.

* Бәләне әҙәм теленән таба,
Хайуан мөгөҙөнән таба.

* Бәреп әйткәндең ғәйебе юҡ.

* Ваҡ ямғыр туңға зыян,
Төртмәле һүҙ дуҫҡа зыян.

* Вәғәҙә – алтын.

* Вәғәҙә ҡылһаң, вафа ҡыл.

* Вәғәҙә – иман.

* Вәғәҙәһен боҙған башһыҙ ҡалған.

* Ғәзиз башҡа ни килһә лә, телдән килә.

* Ғәйбәт күмер кеүек: көйҙөрмәһә лә буяй.

* Ғәйбәт сәйнәгәнсе сүбәк сәйнә.

* Ғәйеп иткән – ғәйеп ишеткән.

* Дау баш ярһа, тура һүҙ таш ярыр.

* Диңгеҙ ел менән, халыҡ хәбәр менән сайҡала.

* Донъяла иң әсе нәмә лә тел,
Иң сөсө нәмә лә тел.

* Донъяла юҡ хәбәр юҡ.

* Донъяны ел боҙор,
Кеше араһын һүҙ боҙор.

* Донъяны һүҙ биҙәр.

* Дөрөҫ һүҙгә йән фиҙа.

* Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.

* Дөрөҫ эшкә баҙнатлы тор.

* Ҙурҙар һүҙен тыңламаған ҙур бәләгә тарыр.

* Ебегән ауыҙҙан серегән һүҙ сығыр.

* Ерҙең дә ҡолағы бар[344].

* Етәкләгән эт ауға ярамай,
Өйрәткән һүҙ дауға ярамай.

* Изге ниәт – ярты дәүләт.

* Ике уйла бер һөйлә.

* Икәү булһаң, береңә кәңәш ит,
Берәү булһаң, кәпәсеңә кәңәш ит.

* Илай-илай һөйләгән илап йылан сығарған.

* Ил ауыҙы ҡапсыҡ түгел, бәйләй алмаҫһың.

* Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай.

* Ил теле им булыр.

* Илдең ауыҙы илле батман.

* Илдең ҡолағы илле.

* Илле яулығың булһа ла, ил ауыҙын тыға алмаҫһың.

*Вариант:* Ил ауыҙын ҡапларға илле ыштан кәрәк.

* Имешкә ышанған ирһеҙ ҡалған.

* Иләк ауыҙға силәк ҡапла.

* Ип менән һөйләгәндең ирене ауыртмай.

* Ипле һөйләшкән – бәләнән ҡотолған,
Екерәйгән – етмеш бәләгә тарыған.

* Ир кеше бер әйтер,
Бер әйтһә лә, өҙә әйтер.

* Ир ҡаҙнаһы – иҫке һүҙ.

* Ирендән сыҡҡан ишектән сығыр.

* Ишеткән белгәнен һөйләр,
  Күргән күргәнен һөйләр.

* Ишеткән бер һүҙҙе һөйләмә.

* Ишеткән ҡолаҡта яҙыҡ юҡ.

* Ишеткән менән күргән бер түгел.

* Ишетмәгән илдә күп.

* Ишетмәгәнгә ике аҙан әйтмәйҙәр.

* Ишетмәһәң, ишет – эттең мороно тишек.

* Йоморо телең әйләнһә лә, яҫы телеңде таҫма ит.

* Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫыр,
  Йомшаҡ кешене һүҙ баҫыр.

* Йомшаҡ телгә ышанма.

* Йөҙ күрке – һаҡал,
  Һүҙ күрке – мәҡәл.

* Йөҙ ҡат әйткәнсе, бер ҡат эшләп күрһәт.

* Йөҙ төрлө тел белһәң дә, үҙ телеңде онотма.

* Йөрөй белмәгән юл боҙор,
  Һөйләй белмәгән һүҙ боҙор.

* Йөрәк сере йөрәктә ҡалһын.

* Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә инә,
  Йөрәктән сыҡмаған йөрәккә инмәй.

* Йүкә шына имәнде яра.

* Йүләр көн ҡарҙы иретер,
  Йылы һүҙ йәнде иретер.

* Йылы һөйләһәң, йыланды ла өңөнә индереп була.

* Йылы һүҙ йәнде иретә.

* Йылы һүҙ ташты иретер.

* Йырҙың йыртығы юҡ,
  Көйҙөң китеге юҡ,
  Һүҙҙең һүтеге юҡ.

* Йырлап йыр бөтмәҫ,
  Һөйләгән һүҙ бөтмәҫ.

* Йыртыҡ ҙурайһа, ямаулыҡ етмәй.

* Йыуома тел ташты иретә.

* Йәш ғүмер,
Әйткән һүҙ,
Атҡан уҡ – кире ҡайтмай.

* – Кем ялғансы?
– Ишеткәнен һөйләүсе.

* Кеше ауыҙына кергән буш түгел.

* Кеше берҙе биш итә.

* Кеше ғәйебен һиңә һөйләгән һинекен дә һөйләр.

* Кеше керһә – һүҙ сыға,
Тауыҡ керһә – сүп сыға.

* Кеше күрке – йөҙ,
Йөҙҙөң күрке – күҙ,
Уйҙың күрке – тел,
Телдең күрке – һүҙ.

* Кеше кәңәшен тыңла, үҙеңдекен тот.

* Кеше һөйләгәндә тыңлап тор.

* Кеше һүҙе кеше үлтерә.

* Кеше һүҙенә ҡолаҡ һал, үҙең уйлағандан тайшанма.

* Кеше һүҙе юлдан яҙҙыра.

* Кеше ышанмаҫ һүҙеңде, ысын булһа ла, һөйләмә.

* Кеше юҡ тип һөйләмә – ауыҙың яман өйрәнер,
Кеше юҡ тип урлама – ҡулың яман өйрәнер.

* Кешемен тиһәң, һүҙең менән эшең бер булһын.

* Кешене артында һөйләмә, алдында һөйлә.

* Кешене ҡарғама, ҡарғышың үҙенә төшөр.

* Кешенең ауыҙын бикләп булмай.

* Кешенең белемен һүҙенән аңларһың.

* Кешенең йөҙөн йыртма.

* Кешенең уңғаны эшенән беленә,
Кешенең кем икәнлеге һүҙенән беленә.

* Кешенең үҙенә ҡарама, һүҙенә ҡара.

* Кешенең һүҙе – аҡылының бизмәне.

* Кешенең әйткәнен тыңла, үҙеңдекен эшлә.

* Кешенең яманатын һатҡансы, үҙеңдең яҡшы исемеңде тап.

* Кешеһенә ҡарап һүҙ һөйлә.

* Килбәте килмәгәндән кәңәш һорама.

* Кисеү күрмәй аяҡ сисмә.

* Көйгән икмәк күңелдән китмәй[345].

* Көйҙөргән дә тел, һөйҙөргән дә тел,
Бөлдөргән дә тел, көлдөргән дә тел.

* Көн яманы бөтөр, тел яманы бөтмәҫ.

* Көндөң күҙе бар, төндөң ҡолағы бар.

* Күҙ етмәгән ергә һүҙ етер.

* Һүҙ кемдеке – күргәндеке,
Ҡолаҡ кемдеке – ишеткәндеке.

* Күҙ күрмәй күңел ышанмаҫ.

* Күҙе бар – күргән,
Теле бар – белгән.

* Күҙең менән күрмәгәнде ауыҙың менән һөйләмә.

* Күлдең күҙе бар,
Ҡырҙың ҡолағы бар.

* Күңел – батша, тел – вәзир.

* Күңел кере – әйтһәң бөтөр,
Күлдәк кере – йыуһаң бөтөр.

* Күңел тапмаҡ – бер һүҙ,
Күңел ҡалмаҡ – бер һүҙ.

* Күңел – һүҙҙең һандығы.

* Күңел йүгерек, тел батыр.

* Күңелдә бар телгә килер.

* Күңелдән сыҡмаған һүҙ күңелгә кермәҫ.

* Күңеле буштың теле буш.

* Күңеленә килгән бер нәмәне һөйләмә.

* Күңелһеҙ хәбәр тиҙ йөрөр.

* Күп ауыҙ бер булһа, бер ауыҙ юҡ була.

* Күп аштың тәме юҡ,
Күп һүҙҙең йәме юҡ.

* Күп бел, аҙ һөйлә.

* Күп белеп, аҙ һөйләү – егетлек һөнәре.

* Күп йөрөгән күпте ишетә.
* Күп һөйләгән кешелә өмөт юҡ.
* Күп һөйләгән күп яңылышыр.
* Күп һөйләгән тотолор,
  Аҙ һөйләгән ҡотолор.
* Күп һөйләмә: тутый булырһың.
* Күп һөйләүҙә хәйер юҡ.
* Күп һүҙҙең аҙы яҡшы,
  Аҙ һүҙҙең үҙе яҡшы.
* Күп һүҙ быҙау имеҙә, артҡа таяҡ тигеҙә.
* Күп һүҙҙең дарыуы – бер һүҙ.
* Күп һүҙ көмөш булһа, аҙ һүҙ – алтын.
* Күп һүҙ – юҡ һүҙ,
  Аҙ һүҙ – аҡ һүҙ.
* Күп һүҙ ялғанһыҙ булмай.
* Күп әйткән ир бер әйткән ҡатынға тормай.
* Күпте белгән аҙ һөйләгән.
* Күпте белһәң дә, әҙ һөйлә.
* Күпте күргән күп белер,
  Күп һөйләгән ни белер?
* Күргән күргәнен һөйләр,
  Белгән белгәнен һөйләр.
* Күргән һөйләгәндә, ишеткән тик торор.
* Күргәнде ишеткән еңгән.
* Күргәнеңде ҡуйып, ишеткәнеңә ышанма.
* «Күрҙем» тигән – күп һүҙ,
  «Күрмәнем» тигән – бер һүҙ.
* Күршем һаңғырау, тип, күп һөйләнмә: ҡолағына салыныр.
* Кәкре ҡайында ҡар ятмаç,
  Алама кешелә һүҙ ятмаç.
* Кәңәшкән үкенмәç.
* Кәңәшле тау ярыр.
* Күрә-күрә күсәм* булырһың,
  Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың.

* Ҡабатлауҙан доға иҫкермәй.

* Ҡабыҡ һуғып бесәй өркөтмә.

* Ҡаҙ ҡанаты ҡоләм булыр.

* Ҡаҙан ҡайҙа – һүҙ шунда[346].

* Ҡамсат күрһәң һатып ал,
  Мәҡәл һүҙҙе отоп ал.

* Ҡамсыға ат сыҙамаҫ,
  Тамсыға таш сыҙамаҫ.

* Ҡан ҡоҫһаң да серең де белгертмә.

* Ҡаплаулы ҡаҙан ҡаплаулы ҡалһын[347].

* Ҡарама ағас йыш булмай,
  Ҡарттар һүҙе буш булмай.

* Ҡарама үҙснә, ҡолаҡ һал һүҙенә.

* Ҡарға ҡарғанып ышандыра.

* Ҡарғыш алғыш булмаҫ.

* Ҡарғыш алма, алғыш ал.

* Ҡарғыш ҡарғыш тыуҙырыр.

* Ҡарғыш менән һағыш бергә.

* Ҡарғыш уртаҡ булыр.

* Ҡарттар һүҙен ҡар баҫмаҫ.

* Ҡарттар һүҙен тоҡҡа һал,
  Йәштәр һүҙен янсыҡҡа һал.

* Ҡары китһә лә, боҙо китмәй[348].

* Ҡаты һүҙҙән тал һына,
  Йомшаҡ һүҙҙән таш һына.

* Ҡолағың менән ишеткәнде күҙең менән күреп бел.

* Ҡолағың менән ишет, күҙең менән эш ит.

* Ҡолаҡ ишеткәнде күҙ күрер.

* Ҡолаҡҡа кергән һалҡын һүҙ, йөрәккә етһә, боҙ булыр,
  Маңлайҙан аҡҡан әсе тир, табанға төшһә, тоҙ булыр.

* Ҡомарын асҡан теләген ҡандырған.

* Ҡоро сәләм ҡолаҡҡа ятмай.

* Ҡоро тел – ҡуңалтаҡ итек.

* Ҡоро һүҙ баш ауырттырыр.

* Ҡоро һүҙгә ҡорһаҡ туймаҫ.

* Ҡорот һарҡындыһы тоҡ эсендә ятмай.

* Ҡош емгә алданыр,
  Кеше һүҙгә алданыр.

  *Вариант:* Ҡошто ем менән,
  Кешене татлы һүҙ менән эйәләштерәләр.

* Ҡош тоҙаҡҡа томшоғо менән эләгә,
  Кеше теле менән эләгә.

* Ҡул яраһы китер, тел яраһы китмәҫ.

  *Вариант:* Ҡул яраһы уңала,
  Тел яраһы йөрәктә ҡала.

* Ҡулдың – оҫтаһы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.

* Ҡулыңдан яҡшы эш килмәһә лә, күңелеңдә ниәтең яҡшы булһын.

* Ҡыҙартмайым тиһәң йөҙөңдө,
  Әнә күҙенән үткәр һәр һүҙеңде.

* Ҡыҙлы ҡыҙын һөйләгәндә, ҡыҙһыҙ наҙын һөйләр.

* Ҡыҙыл тел ҡайһы яҡҡа борһаң да китә.

* Ҡыйыш ултырһаң да тура һөйлә.

* Ҡылыс берҙе үлтергән,
  Тел меңде үлтергән.

* Ҡылыс тәнде яралай,
  Яла йәнде яралай.

* Ҡылыс яраһы төҙәлер,
  Тел яраһы төҙәлмәҫ.

* Ҡыҫҡалыҡта – оҫталыҡ.

* Ҡыҫыр тауыҡ күп ҡытаҡлай.

* Ҡәҙер кисендә теләгән теләк ҡабул булыр[349].

* Ҡәһәрле һүҙ хәтәрле.

* Лаф* менән былау бешмәҫ.

* Мең ишет, бер һөйлә.

* Мең кеше менән иш ит,
  Бер кешегә кәңәш ит.

* Мыйыҡ аҫтында һаҡал бар,
  Һүҙ аҫтында мәҡәл бар.

* Мәҡәл аҡыллы баштан сыға.

* Мәҡәл – һүҙ аҫҡысы,
Әйтем – күңел аҫҡысы.

* Мәҡәл – һүҙҙең атаһы,
Вәғәҙә – ирҙең вафаһы.

* Мәҡәл һүҙе – хикмәтле һүҙ.

* Мәҡәл һаҡалдан олораҡ.

* Мәҡәл әйткән – юл өйрәткән,
Әйтем әйткән – күңел йыуатҡан.

* Мәҡәлдә хикмәт булыр.

* Мәҡәлле һүҙ – аҡыллы һүҙ,
Мәҡәлһеҙ һүҙ – тоҙһоҙ аш.

* Намаҙға аҙан ярашыр,
Һүҙгә ҡаҙан ярашыр.

* Ни һөйләһәң, шуны ишетерһең.

*Вариант:* Ни һөйләһәң, алдыңа шул килә.

* Нисек итһәң ит, моратыңа ет.

* Нәҙерең барҙа ҡәҙерең бар.

* Оҙон ҡолаҡ алдан ишетер.

* Оҙон тел үлемгә сәбәп.

* Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.

* Оло алдында телен тыймаған,
Теле ауыҙына һыймаған.

* Оло һүҙен бүлдермә.

* Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.

* Оло һүҙен тотмаған – оролған да йығылған,
Кеше һүҙен тотмаған – кесерткәнгә йығылған.

* Оло һүҙен тыңламаған – ҡырын ятып йырлаған.

* Оло әйтһә, хаҡ әйтер.

* Оҫта барҙа ҡулың тый,
Сәсән барҙа телең тый.

* Ошаҡ – осло бысаҡ.

* Ошаҡ һөйләгәндең бысағы телендә.

* Оятһыҙҙың теле мең ҡылыс.

* «Өй минеке» тип әйтмә, өй артында кеше бар.
* Өйҙәге һүҙ өйҙә ҡалһын.

  *Варианттары:* Өй эсендәге серҙе ситкә һөйләмә.
  Өй эсендәген ҡырға һөйләмә.
* Өйөңдәге сүпте ситкә сығарма.
* Өйөңдәге хәбәрҙе күршеңдән һора.
* Өлгөлө һүҙгә үлсәү юҡ.
* Өндәшмәгән өйҙәй бәләнән ҡотолған.
* Өндәшмәү – алтын икән тип, алтын һүҙең йәшермә.
* Өндәшмәһә, иҫәр ҙә аҡыллы күренә.
* Өндәшмәһәң – уҙа, өндәшһәң – өй туҙа.
* Өнө бөткәндең көнө бөткән.
* Өрә белмәгән эт өйөнә ҡунаҡ килтерер.
* Рух имгәнмәһә, өмөт һынмай. .
* Салмаған үгеҙгә ҡаҙан аҫмайҙар.
* Сер дуҫы күп булыр,
  Серҙе тотҡан бер булыр.
* Серле кеше – сирле кеше.
* Серле үлмәҫ, сирле үлер.
* Сереҥ биктә булһын,
  Телеҥ эштә булһын.
* Сереңде дошманыңдан йәшерәйем тиһәң, дуҫыңа ла һөйләмә.
* Сүбәк сәйнәп май сыҡмаҫ.
* Сүп йыйһаң – сүмәлә,
  Сүбәк йыйһаң – көйнәлә[350].
* Сәләм әйткән өсөн сәләмәт бул.
* Сәсән алдырмаҫ, әйтмәй ҡалдырмаҫ.
* Сәсән күрке һүҙ булыр, батыр күрке ҡул башлар.
* Сәсәндең теле уртаҡ,
  Егәрлененең ҡулы уртаҡ.
* Сәсәнлектән ни файҙа, аҙағында һүҙе булмаһа?
* «Табамын» тип ашама, күп ашаһаң, ҡоҫторор;
  «Беләмен» тип һөйләмә, күп һөйләһәң, боҫторор.

*Вариант:* «Табамын» тип ашама – ул да үҙеңә бәләгә,
«Беләмен» тип һөйләмә – ул да үҙеңә бәләгә.

* Талҡышты күпме талҡыһаң да, талҡыш булыр[351].
* Тамсы тама-тама таш тишер.
* Тартай теленән таба.
* Таҫма телгә ышанма.
* Татлы тел айыу бейетә.
* Татлы тел йыланды өңөнән сығарыр.
* Татлы тел таш ярыр.
* Татлынан татлы – яҡшы һүҙ,
Затлынан затлы – яҡты йөҙ.
* Тауыҡ бар ерҙә сүп сыға,
Өйҙәш бар ерҙә һүҙ сыға.
* Тауыҡ ҡытҡылдаған һайын күкәй һалмай.
* Тауыш сығарған тура һүҙҙән татыулаштырған ялған хәйерле.
* Ташҡын ҡайтыр, ҡом ҡалыр[352].

*Вариант:* Ташҡыны ҡайтһа ла, юшҡыны ҡалыр.

* Ташты иреткән дә – һүҙ,
Башты сереткән дә – һүҙ.
* Таяҡ иттән үтә,
Һүҙ һөйәктән үтә.
* Тел биргәнгә Алла ризығын да биргән.
* Тел – күңелдең көҙгөһө.
* Тел – ҡылыс:
Тейешһеҙ ерҙә тый,
Тейешле ерҙә ҡый.
* Тел ҡылыстан үткер.
* Тел менән әйтмәй бармаҡ менән төртөп булмай.
* Тел өсөн баш яуап бирер.
* Тел таба.
* Тел төбөнән һөйләгән – үҙ артынан әйҙәгән[353].
* Тел Төркөстанға илтер.

*Вариант:* Тел Багдадҡа илтә.

* Тел яҙмышы – ил яҙмышы.

* Телдең зиннәте – тура һүҙ.
* Телдең һөйәге юҡ.
* Тел һөйәкһеҙ, уй төпһөҙ.
* Телдән тел уҙа, ҡулдан ҡул уҙа.
* Телдәр белгән – илдәр белгән[354].
* Теле барҙың юлы бар.
* Теле боҙоҡтоң, күңеле боҙоҡ.
* Теле ҡатының күңеле ҡаты.
* Теле ҡысыҡҡан һүҙ боҙор,
  Ҡулы ҡысыҡҡан эш боҙор.
* Теле оҙон булмағандың ғүмере оҙон.
* Теле татлының дуҫы күп.
* Теле ямандың көнө яман.
* Телен тыйған аҡыллы.
* Телен һаҡлаған башын һаҡлар.
* Телең bayҙа булһа, башың һау булыр.
* Телең менән төрткәнсе,
  Ҡулың менән төрт.
* Телең менән уҙма, белемең менән уҙ.
* Телең менән фекер йөрөтмә,
  Мейең менән фекер йөрөт.
* Телең оҙон булһа, ҡулың ҡыҫҡарыр.
* Телеңде теш артыңда тот, ҡолағыңды киҫмәһен.
* Телеңде тыйһаң, тыныс булырһың.
* Телеңдән килгән ҡулыңдан килһен.
* Телеңә урын тапмаһаң, тешеңә ҡыҫтыр!
* Телле кеше теле менән ҡош тота.
* Телле һүҙен ике әйтер.
* Телһеҙ кеше – ярты кеше.
* Телһеҙҙең дошманы юҡ.
* Теләгән әмәлен эҙләр,
  Теләмәгән ғәмәлен эҙләр.
* Теләгәнен һөйләгән теләгәнен ишетер.

* Теләк янына терәк кәрәк.

* Терелткән дә – тел,
  Үлтергән дә – тел.

* Тик тормаған теленән табыр.

* Тик тормаған телдә бәлә бар.

* Тишек ҡолаҡ ни ишетмәç.

* Төймәнән дөйә яһама.

* Төрлө ауыҙҙан төрлө һүҙ сығыр.

* Туҙандайҙы тубалдай итмә.

* Туҙға яҙмағанды һөйләмә.

* Туҡһан ауыҙ һүҙең булһа,
  Тубыҡтай төйөнө булһын.

* Тура бармаҡҡа май эләкмәй[355].

* Тура ҡарап ҡырын һөйләшмәйҙәр.

* Тура һөйләгән юлында булыр.

* Тура һүҙ күҙ сығара.

* Тура һүҙ таш яра,
  Ялған һүҙ баш яра.

* Тура һүҙ туғаныңа ярамаç.

*Вариант:* Тура әйткән туғанына ярамаған.

* Тура һүҙгә ант кәрәкмәй.

* Тура һүҙгә ҡарыу юҡ.

* Тура һүҙгә йән фиҙа.

* Тура һүҙҙең туҡмағы бар.

* Тура әйтеүҙең ояты юҡ.

* Тура әйткән таш яра.

* Тура әйткән туғыҙ ауылдан ҡыуылған.

* Тура юлды тел табыр.

* Туралыҡ – йөҙ аҡлығы.

* Туралыҡ мең бәләнән ҡотҡарыр.

* Туралыҡтың төбө – аçыл таш.

* Туған телем – үҙ телем,
  Ҡайҙа барһам – үҙ көнөм.

* Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.
* Түбән һүҙҙең төбө бер – ялған.
* Тәмле тел – ағыу,
  Әсе тел – дарыу.
* Тәмле тел йылан арбаған.
* Тән сырхауы – күп ашау,
  Күңел сырхауы – күп һөйләү.
* Тәү атҡан таш алыҫ китер.
* Уй – бер, эш – икенсе.
* Уйҙың төбө юҡ, һүҙҙең сиге юҡ.
* Уйламаған ерҙән төлкө сығыр,
  Иҫәпләмәй әйтһәң, көлкө сығыр.
* Уйламағандың уйы теүәл.
* Уйламай һөйләгән – ауырымай үлгән.
* Уйламайса һөйләмә: яуыз һүҙ гүргә керетә.
* Уйламайынса әйткән һүҙ – төҙәмәйенсә атҡан уҡ.
* Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә.
* Уйнап һөйләшмә, уйлап һөйләш.
* Уйнап әйткән уйындағын әйткән.
* Уйы ҡыйыҡтың уғы ҡыйыҡ.
* Уйын һүҙгә үпкә юҡ.
* Уйын һүҙҙе күтәрә бел.
* Уҡ баһаһы – атылғандан һуң
  Һүҙ баһаһы – әйтелгәндән һуң.
* Уҡ йөрәктән үтә, һүҙ һөйәктән үтә.
* Уҡ көҙрәте ян керешендә,
  Ир ғәйрәте – ил кәңәшендә.
* Уҡ тәнде, һүҙ йәнде яралай.
* Уҡ яраһы beләктә, тел яраһы йөрәктә.
* Ун бәләнең туғыҙы – телдән.
* Урам күҙһеҙ булмаҫ,
  Урман ҡолаҡһыҙ булмаҫ.
* Урам һүҙе урамда ҡалһын.

* Урман әйтмәç, тимә,
Ҡыр ишетмәç, тимә,
Күл күрмәç, тимә:
Урмандың ауыҙы бар,
Ҡырҙың ҡолағы бар,
Күлдең күҙе бар.

* Урынлы әйткән һүҙгә дөйә лә сүгә.

* Урынһыҙ һүҙ үҙеңә тейер.

* Урынына күрә мәҡәле.

* «Ут» тигәндән ауыҙ көймәй,
Утыҙ теш араһынан сыҡҡан утыҙға төрләнә.

* Утыҙ тештән сыҡҡанды услап тотоп булмай.

* Утыҙ тештән сыҡҡан һүҙ утыҙ ырыуға етер.

*Вариант:* Утыҙ теш араһынан сыҡһа,
Утыҙ ауылға фаш булыр.

* Утыны кәкре булһа ла, уты тура булһын.

* Үҙ телем – үҙ ҡылысым,
Атайҙан ҡалған ҡоросом,
Илдә-көндә тынысым.

* Үҙ һүҙеңә хужа бул.

* Үҙе ахмаҡтың һүҙе ахмаҡ.

* Үҙе рәтленең һүҙе рәтле.

* Үҙең белһәң дә кешегә кәңәш ит.

* Үҙең ишеткең килмәгән һүҙҙе кешегә һөйләмә.

* Үләләрҙе тере иткән дә һүҙ,
Терeләрҙе үле иткән дә һүҙ.

* Үткер һүҙ йәнгә хас,
Үткер бысаҡ ҡынға хас.

* Үтмәçте беләмә, булмаçты һөйләмә.

* Хайуан эҙенән, кеше һүҙенән билдәле.

* Хаҡ һүҙ әсе булыр.

* Халыҡ ауыҙына мисәт баçып булмай.

* Халыҡ теле – хаҡлыҡ теле.

* Халыҡ юҡты һөйләмәй.

* Хикмәтле һүҙ күп булмай.

* Хәбәр дүрт аяҡлы.
* Хәбәр һораһаң, баланан һора.
* Хәбәргә ышанма, күргәнгә ышан.
* Хәҙерге кеше ете ҡат ер аҫтындағы йылан көйшәгәнен белер.
* Һаҡау тик тормаҫ, ахмаҡ ултырмаҫ.
* Һанамай «һигеҙ», тимә.
* Һаҫыған ауыҙҙан бурһыған һүҙ сыға.
* Һигеҙ ҡырлы булһаң да бер һүҙле бул.
* Һораған белер.
* Һорағандың ғәйебе юҡ.
* Һөйҙөргән дә ҡыҙыл тел,
  Биҙҙергән дә ҡыҙыл тел.
* Һөйләгән – аҡыл сәсә, тыңлаған – аҡыл йыя.
* Һөйләгән кеше һөйләй бирһен, кеше гүренә кеше кермәй.
* Һөйләгәнгә түгел, һөйләткәнгә ҡара.
* Һөйләй белмәҫтең һүҙе – үтмәҫ бысаҡтың үҙе.
* Һөйләмәгән һүҙгә мин хужа,
  Һөйләгән һүҙем миңә хужа.
* Һөйләп алдырмаған көйләп алдырыр,
  Көйләп алдырмаған һөйләп алдырыр.
* Һөйләһәң – һүҙ, төртһәң – күҙ (сыға).
* Һөйләшеү – һынашыу.
* Һөйләшә белмәгән ауыҙҙан суҡмар ҡәҙәр һүҙ сыға.
* Һөйләшә белмәгән кешенән өрә белгән эт артыҡ.
* Һөйәкһеҙ тел һөйләй.
* Һөнәр алды – ҡыҙыл тел.
* Һөңгө берҙе үлтерер,
  Һүҙ меңде үлтерер.
* Һөңгө йәрәхәте китер, тел йәрәхәте китмәҫ.
* Һөрәнләгән ҡыҙыл тел һөйгән йәрҙән айырған,
  Һөйләй белгән сәсән тел яу килгәндә ҡайырған[356].
* Һуғыуҙан төртөү яман.

* Һуҡыр үҙенекен туҡыр.
* Һуҡырҙан – тура хәбәр.
* Һуҡырҙың ҡолағы оҙон.
* Һүҙ аҡмай ҡолаҡтан, һыу аҡмай улаҡтан.
* Һүҙ артынан һүҙ сыға, күп һөйләһәң, күҙ сыға.
* Һүҙ башы – мәҡәлдә.
* Һүҙ белгәндән эш белгән яҡшыраҡ.
* Һүҙ – ваҡытында әйтелһә генә һүҙ.
* Һүҙ еп кеүек: теләгән яҡҡа тегеп тә була, һүҙып та була.
* Һүҙ – көмөш, йыр – алтын.
* Һүҙ күпкә китһә, сүпкә китә.
* Һүҙ ҡыуған – бәләгә,
Юл ҡыуған – ҡаҙнаға (ҡазаға?).
* Һүҙ мәғәнәһен белмәгән һүҙҙе үҙенә килтерер.
* Һүҙ сәсһәң – ғәйбәт йыйырһың.
* Һүҙ тылҡып, бутҡа бешмәй.
* Һүҙ – һөйләй белһәң ирмәк,
Һөйләй белмәһәң – имгәк.
* Һүҙ һөйләһәң, уйлап һөйлә.
* Һүҙ һөймәгән тирмән ҡорған.
* Һүҙ һүҙгә китер, һүҙ башҡа етер.
* Һүҙ һүҙҙе таба.
* Һүҙ һүҙҙән сығыр,
Һүҙ ауыҙҙан сығыр.
* Һүҙ – һуған ҡабығы: береһен асһаң икенсеһе сыға.
* Һүҙ эйәһе менән йөрөмәй.
* Һүҙҙе ҡайтарып әйтһәң, ҡәҙере китә.
* Һүҙҙе һүҙ сығара, әйтһәң, һүҙеңдән ҡайтма.
* Һүҙҙең атаһы – аҡыл, әсәһе – тел.
* Һүҙҙең башынан элек төбөн уйла.
* Һүҙҙең ҡанаты бар.
* Һүҙҙең тураһын баланан ишет.

* Һүҙҙә тороу – ҙурлыҡ,
Һүҙҙә тормау – хурлыҡ.

* Һүҙҙән бутҡа бешмәҫ.

* Һүҙҙән һүҙ уҙа,
Телдән тел уҙа,
Ҡулдан ҡул уҙа.

* Һүҙҙән эшкә – ҡарттар саҡрымы.

* Һүҙе хаҡтың йөҙө аҡ.

* Һүҙең көмөш булһа, тик тороуың алтын.

* Һүҙең ҡыҫҡа, аҡылың оҙон булһын.

* Һүҙең ҡыҫҡа булһын,
Ҡулың оҫта булһын.

* Һүҙең үлгәнсе, үҙең үл.

* Һүҙен һөйләй белмәгән – үҙенә зыян килтергән.

* Һүҙен һөйләй белмәгән – һүҙен үҙенә килтергән,
Эҙен эҙләй белмәгән – эҙен үҙенә килтергән.

* Һүҙенә күрә яуабы, саҙаҡаһына күрә һауабы.

* Һыймаҫ ергә сөй ҡаҡма.

* Һыныңды ҡатыр, һырыңды бирмә.

*Вариант:* Һыртың һынһа ла, һырың (серең) бирмә.

* Һыу соҡорон табыр,
Хаҡлыҡ урынын табыр.

* Һыу яҙып май төшмәй.

* Һыуҙы таяҡ менән үлсәйҙәр,
Кешене тел менән үлсәйҙәр.

* Һыуыҡ ҡолаҡтан алыр,
Һыуыҡ һүҙ йөрәктән алыр.

* Һәр ишеткәнен һөйләп йөрөгән ишетмәгәнен ишетер.

* Шымсы шымын әйтер,
Һынсы сәмен әйтер.

* Шымсы шына ҡағырға оҫта булыр.

* Энә күҙенән һына,
Сәсән һүҙенән һына.

* Эс серенде атайыңа ла әйтмә.

* Эсеңдәген эстә серетмә.

* Эт олошоп табыла.
* Эт тә, яҡшы өндәшһәң, ҡойроғон болғар.
* Этеңде бауҙа тот, телеңде бәйҙә тот.
* Эттең ҡарғышына эт үлмәҫ.
* Эштең урыны беләктә,
Һүҙҙең урыны йөрәктә.
* Әҙәм теленән, хайуан мөгөҙөнән табыр.
* Әҙәмдең йөҙөнә ҡарама, һүҙенә ҡара.
* Әҙәмдең күңеле менән теле бер булһын.
* Әйтем – һүҙҙең биҙәге,
Мәҡәл – һүҙҙең еләге.
* Әйтер һүҙҙе әйт, әйтмәҫ һүҙҙән ҡайт.
* Әйтеү бер, эшләү башҡа.
* Әйтеш* төбө дау булыр.
* Әйткән – телдә, биргән – ҡулда.
* Әйткән һүҙ – атҡан уҡ.
* Әйткән һүҙ – ҡаҡҡан ҡаҙаҡ.
* Әйтмәгәнде кем белә, асмағанды кем күрә?
* Әйтмәк бар – ҡайтмаҡ юҡ.
* Әйтмәҫ ерҙә ауыҙың тый,
Ҡысытмаҫ ерҙә ҡулың тый.
* Әйтһәң – тура әйт, әйтмәһәң – тик тор.
* Әйтһәң – һүҙ сыға,
Төртһәң – күҙ сыға.
* Әсәм теле – сәсән теле.
* Юҡҡа ант итмә – ер йотор.
* Юл башы – ат тояғында,
Һүҙ башы – эт ҡолағында.
* Юл урауы белмәгән юлда илап ултырыр,
Һүҙ урауы белмәгән башына бәлә килтерер.
* Юлдың нигеҙе, малдың һимеҙе,
Ирҙең оҫтаһы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.
* Юрға менгән юлдашынан айырылыр,
Күп йәшәгән ҡорҙашынан айырылыр,
Күп һөйләгән дуҫынан айырылыр.

* Яҙырға ҡулың булһын,
Әйтергә телең булһын.

* Ябаға тайҙың бете әсе,
Яман кешенең теле әсе.

* Яҡшы атҡа дилбегә ҡағыу ҙа етә.

* Яҡшы атҡа дан сығыр,
Яҡшы кешегә һүҙ сығыр.

* Яҡшы ауыҙға аш тейер,
Яман ауыҙға таш тейер.

* Яҡшы кәңәште ҡарттан һора.

* Яҡшы ниәт кешене төҙәтә, яманы – боҙа.

* Яҡшы ниәт – эш башы.

* Яҡшы ниәт – ярты бәхет.

* Яҡшы һөйләгәндә кәңәш сығыр,
Яман һөйләгәндә игәш* сығыр.

* Яҡшы һүҙ балдан татлы.

* Яҡшы һүҙ – баллы ҡашыҡ,
Яман һүҙ – әсе ҡатыҡ.

* Яҡшы һүҙ ерҙә ятмаҫ.

* Яҡшы һүҙ ике аяҡлы булһа,
Яман һүҙ дүрт аяҡлы.

* Яҡшы һүҙ йыланды еңгән.

* Яҡшы һүҙ – йән аҙығы,
Яман һүҙ – баш ҡаҙығы.

* Яҡшы һүҙ – йәнгә дарыу,
Яман һүҙ – ағыу.

* Яҡшы һүҙ йәнгә рәхәт,
Яман һүҙ йәнгә йәрәхәт.

* Яҡшы һүҙ һау кешегә рәхәт,
Ауырыуға дауа.

* Яҡшы һүҙ һөйөндөрөр,
Яман һүҙ көйөндөрөр.

* Яҡшы һүҙ әйтте тиеп һөйләнмә, ихласлығын белмәйсә,
Яман һүҙ әйтте тип көйөнмә, көнсөлөгөн белмәйсә.

* Яҡшы һүҙгә – яҡшы яуап.

* Яҡшы һүҙ – ялау,
Яман һүҙ – талау.

*Вариант:* Яҡшы һүҙ ялай,
Яман һүҙ талай.

* Яҡшы һүҙ – ярты ырыҫ.

* Яҡшы һүҙ ятып ҡала,
Яман һүҙ ат менә лә саба.

* Яҡшы һүҙ яу ҡайтарған.

* Яҡшы әҙәм – илдең ырыҫы,
Яҡшы һүҙ – йәндең тынысы.

* Яҡшы әҙәмдә ҡон булмаҫ,
Яман әҙәмдә моң булмаҫ.

* Яҡшыла яман юҡ, мәҡәлдә ялған юҡ.

* Яҡшыға әйтһәң, һеңдерер,
Яманға әйтһәң, бөлдөрөр.

* Яҡшыны ишетәһең килһә, яман һөйләмә.

* Яҡшыны һүҙ үлтерә, яманды – таяҡ.

* Яҡшының үҙе яҡшы,
Үҙенән һүҙе яҡшы.

* Яҡынға ялған әйтмә,
Ситкә яман әйтмә.

* Яҡындағын йыраҡтан барып һора.

* Ялған оҙон аяҡлы, ғәйбәт оҙон ҡолаҡлы.

* Яман аш йөрәккә ятмаҫ,
Яман һүҙ күңелгә ятмаҫ.

* Яман күҙ ер көйҙөрә,
Яман һүҙ йән биҙҙерә.

* Яман күҙ хайуанды ҡаҙанға керетер,
Яман һүҙ әҙәмде ҡәбергә керетер.

* Яман хәбәр тиҙ тарала.

* Яман хәбәрҙең ат-әйәре тағыулы.

* Яман һүҙ ара боҙор.

* Яман һүҙ йөрәккә таш булып ултырыр.

* Яман хәбәр ятып ҡалмаҫ.

* Ямандың һүҙен һөйләмә, яңғыҙҙың дауын дауалама.

* Ямандан ҡайт, яҡшыны әйт.

* Ямғыр күп яуһа, ер күгәрә,
Ҡарғыш күп алһа, ир күгәрә.

* Ярҙы һыу баҫа, әҙәмде һүҙ баҫа.

* * *

* Ағас ауыҙ, балта тел[357].
* Ағиҙелдең аръяғында бер энәгә бер һыйыр.
* Аласағым китһә лә, әйтәсәгем китмәһен.
* Ат аяғын дағалағанда, тәлмәрйен ботон ҡыҫтырған.
* Ат биреп һөйләттем, тай биреп туҡтаттым.
* Атын тура еккән, үҙе кәкре киткән.
* Атай оло, мин ҙур.
* Атайым ай күргән, иртәгә байрам икән.
* Ауыҙ эсендә бутҡа бешерә.
* Ауыҙы әйткәнде ҡолағы ишетмәй.
* Ауыҙына йөҙөк йәшергән.

  *Вариант:* Ауыҙына һыу ҡапҡан.
* Ауыҙына теле һыймай.
* Ауыҙына шайтан төкөргән.
* Ауыҙында бейәләйе бар.
* Ауыҙындағын эт ашамаҫ.
* Ауыҙыңа бал да май.
* Ауыҙыңа бал да май, артыңа ҡолон-тай.
* Ауыҙыңдан ел алһын[358].
* Аяҙ көндө йәшен һуҡты.
* Балы телендә, ағыуы күңелендә.
* Баш ярылһа, бүрек эсендә,
  Ҡул һынһа, ең эсендә[359].
* Башын күк менән япҡан[360].
* Башын ҡарабойҙай һаламы менән япҡан.

  *Вариант:* Түбәһе һыу үткәрә.
* Белгәнен һөйләмәй, тейгәнен һөйләй.
* Билләһиҙең биле һынған[361].

* Бүрәнә үтә бүре күргән.

* Былтыр көйгән, быйыл еҫе сыҡҡан.

* Былтыр үлгән ҡарға быйыл һаҫыған.

* Былтыр үлгән ябалаҡ быйыл башын күтәргән.

* Бысҡы һорағанға йышҡы тотторған.

* Ғәйбәт булмаһын, ғибрәт булһын.

* «Дыр», «дыр»ға ҡош та ҡунмай[362].

*Вариант:* «Ҙыр»ға себен дә ҡунмай.

* Илдә илле, берсһенән – береһе елле (хәбәр).

* Иләмәгән, һуҡмаған, ҡәйнәм, һиңә бер ыштан.

*Вариант:* Иләнмәгән, һуғылмаған,
Шаҡай, һиңә бер ыштан.

* Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ.

* Иҫке ауылдан яңы хәбәр.

* Йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултырта.

* Йылы ауыҙынан сығып, йылы ҡуйынына керһен[363].

* Кантунды кәртә артында әрләнем[364].

* Кем кәзәһе ҡысҡырһа ҡысҡырһын,
һинең кәзәң тик торһон.

* Кеше туй һөйләгәндә,
Ул йыназа һөйләгән.

* Кеше һүҙе бер ҡолағымдан керер,
Бер ҡолағымдан сығыр.

* Кешелә күрһә – ғәйбәт,
Үҙе ҡылһа – һәйбәт.

* Күпме сәйнәһәң дә бер балыҡ башы.

* Кәкре атып, тура тейгән.

* Кәкрене ҡыйыҡҡа һаплама.

* Ҡалалағы ишетмәгән, далалағы ишеткән.

* Ҡарғышың ҡара башыңа!

* «Ҡоҙағый, һине күргәс иҫкә төштө, нисә бала тап-тың?» – тигән бер ҡоҙағый[365].

* Ҡолаҡҡа ятмаған, туҙға яҙмаған һүҙ.

* Ҡолаҡһыҙға ҡолаҡ һаталар.

* Ҡоро ҡомдан бау ишмә.

* Ҡыҙлы ҡыҙын ҡыҫтырғанда,
  Ҡыҙһыҙ кеҫәү ҡыҫтыра.

* Ҡыҫылмаһа – ҡыҫҡара.

  *Вариант:* Ҡыҫылмаһа – ҡыҫыр ҡала.

* Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы – ана ишек тотҡаһы.

* Өс көн торғас иҫемә төштө, иҫәнме әле, ҡоҙағый?

* Рәхмәттән тун тегеп булмай.

* Сәпкә теймәһә – йәпкә.

* Тейһә – тейенгә, теймәһә – ботаҡҡа.

  *Варианттары:* Тейһә – ҡошҡа, теймәһә – бушҡа.
  Тейһә – тирәккә, теймәһә – ботаҡҡа.
  Тейһә – тейәккә, теймәһә – ботаҡҡа.

* Тел дә яңаҡ үҙендә.

* Теле өҫтөндә бал, тел төбөндә ҡорт.

* Теле ауыҙына һыймай.

* Тел тиһәң – телеп һала,
  Эш тиһәң – ишеп һала.

* Теле татлы, бәғере ҡаты.

* Теле яҙыҡҡа туймаҫ,
  Ауыҙы аҙыҡҡа туймаҫ.

* Телеңде тәртә буйы һуҙма.

* Тешһеҙгә һәр сәтләүек төшһөҙ.

* «Тик»тең атаһы тегәнәккә батҡан[366].

* Түбәң ҡалай – ямғыр үтмәй[367].

* Түрҙә ултырған түрә бүрәнә үтә бүре күрә.

* Тыуамаған тайға – алтын эйәр.

* Уйлаһаң, уйылып китерһең (китерлек).

* Уйнап әйтәм – уйлап әйтәм.

* Уйыңда ни – телеңдә шул.

* Уйым етә лә – буйым етмәй.

* Ул да дөрөҫ һөйләй,
  Минең һүҙем дә хаҡ.

* Урыҫ улын һөйләһә, мәрйә ҡыҙын ҡыҫтыра.

* Үлмә ишәгем, яҙ еткәс үлән ашарһың.
* Хәйерле булһын Хәйернисаның никахы![368]
* Һаңғырауға төштән һуң.
* Һауалағы торна тырҡылдағанда,
Ерҙәге ҡаҙ ҡорҡолдай.
* Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнысҡыһы төшә[369].
* Һин һорама, мин әйтмәйем.
* Һин һөйләйһең берҙе, ул икенсене.
* Һүҙ уңайы килгәндә, һүтегеңде ямап ҡал.
* Һүҙ юҡта һүҙ булһын – ата ҡаҙың күкәй һаламы?
* Һүҙҙә – болан, эштә – йылан.
* Һыу күрмәйенсә сабыуын күтәргән.
* Һыуға һәнәк менән яҙылған.
* Һүҙе һүҙгә оҡшамай, ауыҙы һүҙҙән бушамай.
* Энә осо хәтле ут – тубал ҙурлығы төтөн.
* Эшкә оҫта, һүҙгә ҡыҫҡа.
* Әйттем – ҡайттым.
* «Юҡ»ка һин дә туҡ, мин дә туҡ.
* «Юҡ»тың аты юҡ.
* Яҡшы ауыҙҙан яман һүҙ.
* Яҡшы һүҙгә яман яуап.
* «Ярар» бер ваҡытта ла ярамай.
* «Ярар»ҙың аты арымай[370].
* «Ярар»ҙың башы ауыртмай.
* «Ярар»ҙың туны туҙмаҫ.

### 8. Аҡыл, аҡылһыҙлыҡ; аң-белем, наҙанлыҡ

* Ағасты емешенә, остазын шәкертенә ҡарап беләләр.
* Аҙ белмәгән күп тә белмәҫ.
* Айыу беләгенә, әҙәм белеменә ышана.
* Аҡ мамыҡтан бүҙ сығыр, аҡыллынан һүҙ сығыр.
* Аҡса-мал бер көнлөк, ғилем-һөнәр ғүмерлек.

* Аҡса тарат, белем йый.
* Аҡсаңды юғалтһаң да, аҡылыңды юғалтма.
* Аҡыл айнымаç, алтын сереməç.
* Аҡыл аҡсаны таба.
* Аҡыл – алтын.
* Аҡыл йәштә түгел, башта.
* Аҡыл йәштән сыға,
  Аçыл нәмә таштан сыға.
* Аҡыл көстө еңә.
* Аҡыл менән алтын табыла,
  Алтын менән аҡыл табылмай.
* Аҡыл теҙген,
  Ҡылыҡ – ат,
  Теҙгенсеңде белеп тарт.
* Аҡыл теше ахмаҡта ла бар.
* Аҡыл төбө – тәжрибә.
* Аҡыл һаҡалға ҡарап йөрөмәй.
* Аҡыл эйәһен табыр.
* Аҡылды аҡсаға һатып алып булмай.
* Аҡылды сәсеп үçтермәйҙәр.
* Аҡылдың ҡулы нәпсенең теҙгенен тотор.
* Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән.
* Аҡылдың ҡәҙере – әҙәп менән,
  Байлыҡтың ҡәҙере – йомартлыҡ менән,
  Ҡеүәттең ҡәҙере – баһадирлыҡ менән.
* Аҡылдың үлсәүе – һүҙҙә.
* Аҡылдың юлдашы – бәхет.
* Аҡыллы алға барыр,
  Артына ҡарар.
* Аҡыллы алдан ала,
  Алйот аҙаҡҡа ҡала.
* Аҡыллы атын маҡтар,
  Тинтәк ҡатынын маҡтар.
* Аҡыллы булған – әйтмәй белгән,
  Йомарт булған – һорамай биргән.

* Аҡыллы ир – ил ағаһы,
Аҡылһыҙ ир – ил бәләһе.

* Аҡыллы ирҙең эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр.

* Аҡыллы кешенең һүҙе алдан йөрөр.

* Аҡыллы тигәнең маҡтана башлаһа, тинтәк тип иҫәплә.

* Аҡыллы тиргәлһә лә тир сығармаҫ.

* Аҡыллы тәкә һуйғанда,
Ахмаҡ йүкә һуйыр.

* Аҡыллы уйлағансы, тиле һуғып йыҡҡан.

* Аҡыллы үҙен ғәйепләр,
Алйот иптәшен ғәйепләр.

* Аҡыллы хәтер ҡалдырмаҫ, ахмаҡ хәтер һаҡламаҫ.

* Аҡыллылар янына барһаң, аңғыраны эйәртмә.

* Аҡыллыға аҡыл бирһәң, күпте белер,
Аҡылһыҙға аҡыл бирһәң, ҡысҡырып көлөр!

* Аҡыллыға баш ҡиммәт,
Аҡылһыҙға мал ҡиммәт.

* Аҡыллыға бер һүҙ – мая,
Ахмаҡҡа мең һүҙ – зая.

* Аҡыллыға – ишара.

* Аҡыллыға һүҙ әйттем – уйланы ла белде,
Аҡылһыҙға һүҙ әйттем – тыңланы ла көлдө.

* Аҡыллыға ым да етә, ахмаҡҡа туҡмаҡ та аҙ.

* Аҡыллының аҡылы йөрәгендә,
Тиленеке – телендә.

* Аҡыллының аты ла арымай, туны ла туҙмай.

* Аҡыллының йөҙө әйтер,
Йөҙө әйтмәһә, һүҙе әйтер.

* Аҡыллының ҡәҙере ахмаҡ янында беленер.

* Аҡыллының теле күңелендә,
Аҡылһыҙҙың күңеле телендә.

* Аҡыллының уйында, тиленең телендә.

* Аҡылһыҙ аҡырып алдырыр.

* Аҡылһыҙ атҡа менһә, атаһын танымаҫ.

* Аҡыллы атын маҡтар,
Урта йүләр ҡатынын маҡтар,
Үтә йүләр үҙен маҡтар.

* Аҡылһыҙ баш аяҡ тындырмаҫ,
Аяҡһыҙ баш донъя ҡыҙырмаҫ.

* Аҡылһыҙ башҡа алтын бүрек файҙа бирмәҫ.

* Аҡылһыҙ кеше алтмышта ла йәш була,
Аҡыллы алтыла ла баш була.

* Аҡылһыҙға ике донъя, бер мөрйә.

* Аҡылһыҙҙан алты тапҡыр маҡталғансы, аҡыллынан бер тиргәл.

* Аҡылһыҙҙың аҡылын эт ашар.

* Аҡылһыҙҙың ауыҙынан да бер аҡыллы һүҙ сыға.

* Аҡылһыҙҙың һаҡалы үҫһә лә, аҡылы үҫмәҫ.

* Аҡылы юҡ кешенең аҙырайған күҙе бар.

* Аҡылы юҡтың яҡыны юҡ.

* Аҡылын алтынға алышҡан алтынын баҡырға алышыр.

* Аҡылың булһа, алданмаҫһың,
Алйот булһаң, алдыра алмаҫһың.

* Аҡылыңды ҡаш араңа маяҡ ит.

* Аҡылыңды өскә бүл: берен һөйлә, икеһе эстә торһон.

* Алабуғала ҡолаҡ юҡ, алйот кешелә оят юҡ.

* Алйот булһаң, аҡыл кәрәкмәй.

* Алйот үҙен маҡтар.

* Алйот юлдаш булмаҫ,
Ишәк моңдаш булмаҫ.

* Алйотҡа алты ҡалас – биш тин.

* Алйотҡа көн дә туй.

* Алйотҡа өгөт әйтһәң, «алдай» тиер,
Аҡыллыға әйтһәң, «балдай» тиер.

* Алйотҡа әйткән кәңәшең ағып киткән һыуға тиң.

* Алйоттан аҡыл һорама.

* Алтмышҡа еткәс, атайыңдан аҡыл һорама.

* Алтылағы аҡылың алтмышҡа тиклем.

* Алтын алма, аҡыл ал.

* Алтын дәүләт түгел, ғилем – дәүләт.
* Алтын – ерҙә, белем – китапта.
* Алтын ерҙән, ғалим илдән сыға.
* Алтын кәрәкмәй, аҡыл кәрәк,
Аҡыл булһа, алтын табылыр.
* Алтын өҫтөнә аҡыл – ике алтын.
* Алтын – ташта, аҡыл – башта.
* Алтындан аҡыл ҡиммәт.
* Алтынды эҙлә таштан,
Аҡылды эҙлә баштан.
* Алтының булғансы аҡылың булһын.
* Алтының менән маҡтанма,
Аҡылың менән маҡтан.
* Аң-белем – мәңгелек ғилем.
* Аңламаған ҡолағын киҫһәң дә аңламаҫ.
* Аңламағанды аңлатма.
* Аңлыға бер әйт,
Аңһыҙға мең әйт.
* Аңра башҡа аҡыл йоҡмаҫ.
* Аңһыҙҙы аңлатҡансы, аңлы кеше эшен бөтөрөр.
* Артҡы аҡылға кем дә бай.
* Артыҡ аҡыл баш тишер.
* Астан аҡыл һорама.
* Асыу – алдан, аҡыл – арттан.
* Асыу – дошман,
Аҡыл – дуҫ,
Асыуыңа аҡыл ҡуш.
* Асыу йотоу – тау йотоу.
* Асыуыңды ат итһәң, аҡылыңды теҙген ит.
* Ат теймәҫ ергә хат етә.
* Ат күргән – ат таныр,
Остаз күргән хат таныр.
* Ата балаһы алтмышҡа етмәй аҡыл тапмаҫ.
* Атланһаң үҙ атыңа атлан,
Кеше аты тиҙ арый[371].

* Ахмаҡ алдындағы аштан өркөп астан үлгән.
* Ахмаҡ атҡа менһә, үҙен түрә һанар.
* Ахмаҡ төйөнләгән төйөндө аҡыллы ла сисә алмаҫ.
* Ахмаҡ һөйләүҙән, һыйыр көйшәүҙән туҡтамаҫ.
* Ахмаҡтан аҡыл һорама.
* Ахмаҡтың балта һабы ла арҡылы.
* Ахмаҡтың алған эше аҡыллыны алъятыр.
* Ахмаҡтың һаҡалы үҫһә лә, аҡылы үҫмәҫ.
* Бай булмаһаң бай булма,
  Ғилем-һөнәргә һай булма.
* Байлыҡ боҙға яҙған,
  Ғилем ташҡа яҙған.
* Башаҡ туйған һайын башын түбән эйер.
* Баш һайын бер аҡыл.
* Башта аҡыл булмаһа, ике ҡулға көс төшөр.
* Башта холоҡ тап, унан – ғилем.
* Башы булғандың ашы була.
* Башың диуанаға ҡалһа, бағанаға сәләм бирерһең.
* Башың үҙеңә баш булһын.
* Башыңда белемең булмаһа, аяғыңа ауырлыҡ.

  *Вариант:* Башыңда аҡылың аҙ булһа, ике аяғыңа көс килә.
* Башың эшләмәһә, аяғыңа ауырлыҡ.
* Батша – үҙ илендә генә батша,
  Ғалим – һәр ерҙә ғалим.
* Белгән белгәнен эшләр,
  Белмәгән бармағын тешләр.
* Белгән белеменә ышаныр,
  Белмәгән беләгенә ышаныр.
* Белгән бер әйтер ҙә дөрөҫөн әйтер.
* Белгән – уңыр, белмәгән – туңыр.
* Белгән менән белмәгән бер түгел.
* Белгән мең бәләнән ҡотолор.
* Белгәнгә – белек, белмәгәнгә – селек.

* Белгәнгә бер әйт, белекһеҙгә мең әйт.
* Белгәнгә яҡты, белмәгәнгә ҡараңғы.
* Белгәндең беләге ауыртмай.
* Белеклегә бер әйтһәң дә – ҡолағының эсендә,
  Белекһеҙгә биш әйтһәң дә – ҡолағының тышында.
* Белем алыу – энә менән ҡойо ҡаҙыу.
* Белем ашарға һорамай, үҙе ашата.
* Белеме барҙың ҡәҙере бар.
* Белеме ҙурҙың телеме ҙур.
* Белемле барҙа телең тый.
* Белемле белеп йәшәй,
  Белемһеҙ белмәй йәшәй.
* Белемле бөлмәҫ, үләт килһә лә үлмәҫ.
* Белемле кеше күккә ашыр.
* Белемле кеше юғалмаҫ.
* Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көлмәҫ.
* Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ.
* Белемлегә йот юҡ, белемһеҙгә ҡот юҡ.
* Белемһеҙ белмәҫ, йүнгә күнмәҫ.
* Белемһеҙ бер эш тә сыҡмай.
* Белемһеҙ кеше – һуҡыр кеше.
* Белеү – нур, белмәү – хур.
* Белмәгән бөлөр, белгәндән көлөр.
* Белмәгән йүләр белгәндән көләр.
* Белмәгән әҙәм ыу (ағыу) эсә.
* Белмәгәнгә ботаҡ та бармаҡ.
* Белмәгәнде белгәндән өйрән.
* Белмәгәндең башы ауыртмай.
* Белмәй ҡалыуҙан, һуң булһа ла, белеү яҡшы.
* Белмәү ғәйеп түгел,
  Белергә теләмәү – ғәйеп.
* Беләге бар берҙе йығыр,
  Белеге бар меңде йығыр.

* Беләктән белек көслө.
* «Беләм» тигән белмәҫ, белекле булған белер.
* Бер аҡыл – ярты аҡыл,
Ике аҡыл – бер аҡыл.
* Бер ауһарҙы*, бер аҡыллыны тыңла.
* Бер көн асыҡҡандан ҡырҡ көн аҡыл һорама.
* Бер соҡорға ике төшкән – һуҡыр,
Бер кешенән ике алданған – тиле.
* Бер үгеҙгә бер йүкә муйынсаҡ етер[372].
* Битеңде биҙәмә, аҡылыңды биҙә.
* Бөгөнгө аҡыл иртәгәгә ярамай.
* Буй менән түгел, уй менән.
* Буй үҫтермә, аҡыл үҫтер.
* Буйың менән ер үлсәмәҫһең (аҡылың булһын).
* Буйың менән маҡтанма,
Аҡылың менән маҡтан.
* Буйың менән һыу буйлай алмаҫһың.
* Булмаҫтың башына тай типкән.
* Буранда бүре ҡоторор,
Урамда тиле ҡоторор.
* Буш башаҡтың башы эйелмәй.
* Буш тирмән елһеҙ ҙә тарта.
* Бәхетте юлдан эҙләмә, белемдән эҙлә.
* Ватыҡ сүлмәктә һыу тормаҫ.
Тинтәктә һүҙ тормаҫ.
* Ғалим алдында телеңде тый,
Оҫта алдында ҡулыңды тый.
* Ғалим белһә лә һорай, наҙан белмәй ҙә, һорамай ҙа.
* Ғалим булһаң, ғаләм һинеке.
* Ғилем – аҡылдың яртыһы.
* Ғилем күп, ғүмер ҡыҫҡа.
* Ғилем – ҡош, аҡыл – ҡанат.
* Ғилемдән күп хазина юҡ.
* Ғилеме барҙың телеме бар.

* Ғилемлек – нур, наҙанлыҡ – хур.
* Ғилемһеҙ ғалим – емешһеҙ ағас.
* Ғилемһеҙ ғәмәл юҡ.
* Ғәйеп һүҙ һөйләһәң, ғәйеп һүҙ ишетерһең.
* Ғәмәлһеҙ ғилемдә файҙа юҡ.
* Диуанаға хөкөм юҡ.
* Донъя – йоҙаҡ, асҡысы – белем.
* Дөйәләй алтының булғансы,
  Төймәләй аҡылың булһын.
* Дөйәләй буйың булғансы,
  Төймәләй уйың булһын.
* Ҙур талантҡа – ҙур талап.
* Ҙурлыҡ кәүҙә менән түгел, ғилем менән.
* Емешле ағастың башы түбән.
* Ер күрке – иген,
  Ир күрке – ғилем.

  *Вариант:* Ерҙең йәме иген менән,
  Ирҙең йәме белем менән.
* Ер ҡәҙере игендә,
  Ир ҡәҙере белемдә.
* Ике тинтәк илгә һыймаҫ.
* Илде тинтәк боҙор.
* Иләктә һыу тормаҫ,
  Тинтәктә һүҙ тормаҫ.
* Иң бай кеше – ғалим кеше.
* Иркә ҡайҙа – иҫәр шунда.
* Иртәнге аҡыл төшкә ярамай,
  Төшкө аҡыл кискә ярамай.
* Иҫәр атына асыуланһа, ҡатынын ҡыйнар.
* Иҫәр буйға үҫәр.
* Иҫәр булһа ла иҫән булһын.
* Иҫәр булырға иҫәп кәрәкмәй.
* Иҫәр генә икеләнмәй.
* Иҫәр ике быҙауға кәбәк айыра белмәҫ.

* Иҫәр иҫәп менән байыға.
* Иҫәр кәкүк иртә саҡырған.
* Иҫәр менән бал ашағансы,
  Аҡыллы менән таш ташы.
* Иҫәр менән иҫәр булма.
* Иҫәр менән тапма ла, өләшмә лә.
* Иҫәр ни әйтмәҫ?
* Иҫәр үҙе һөйләр, үҙе көләр – кешегә ҡалдырмаҫ.
* Иҫәр этен маҡтар,
  Өйгә ҡайтһа, ҡатынын маҡтар.
* Иҫәр йүкә һуйыр, аҡыллы тәкә һуйыр.
* Иҫәргә алты ҡалас биш тин.

  *Вариант:* Иҫәргә икс етмеш бер һум.
* Иҫәргә иш юҡ, ялҡауға эш юҡ.
* Иҫәрҙе сәсеп үҫтермәйҙәр.
* Иҫәрҙең алдын иркен ҡуй.
* Иҫәрлекте һатып алмайҙар.
* Йөҙ наҙан бер ғалимдың тырнағына тормаҫ.
* Йөрәккә таянма, аҡылға таян.
* Йүгереп ҡуян ҡыуалар,
  Ултырып аҡыл йыялар.
* Йүләр бармаҡ күрһәтһәң дә көлә.
* Йүләр күлдәге менән ике ҡат.
* Йүләр йүкә һуйыр, аҡыллы тәкә һуйыр.
* Йүләр йүләрҙе маҡтар.
* Йүләргә талҡан да бер, шалҡан да бер.
* Йүләрҙе сәсеп үҫтермәйҙәр.
* Йүләрҙең ише булмаҫ,
  Ялҡауҙың эше булмаҫ.
* Йүләрҙән йүләр тыуа, йүләр менән донъя тула.
* Йәш аҡыл – буш аҡыл.
* Йәш саҡта уҡыу – ташҡа яҙыу,
  Ҡартайғас уҡыу – боҙға яҙыу.

*Вариант:* Йәшлектә алған мәғлүмәт ташҡа биҙәкләнгән шикелле – үлгәнсе онотмайһың.

* Кеше аҡылын ишет,
Үҙ аҡылың менән эш ит.

* Кеше аҡылы менән бай булғансы,
Үҙ аҡылың менән ярлы бул.

* Кеше – белем менән, ер яуын менән йәшәрер.

* Кеше күрке – баш.

*Вариант:* Кеше күрке – аҡыл.

* Кеше олоғая башлағас, аҡылға ултыра.

* Кешегә бик күп аҡыл өйрәткән кешенең аҡылы үҙенә ҡалмай, ти.

* Кешенең ҡәҙере ғилем менән.

* Кис уйлаған уйҙан иртән тапҡан аҡыл артыҡ.

* Кисәге аҡыл бөгөнгә ярамай.

* Китап уҡыһаң, белемең артыр,
Уҡымаһаң, белгәнең дә онотолор.

* Көс – белемдә, белем – уҡыуҙа.

* Көс менән ала алмағанды аҡыл менән алалар.

* Күп йәшәгән белмәҫ, күп ҡыҙырған белер.

* Күп йәшәгән ни белгән,
Күпте күргән шул белгән.

* Күп торғандан һорама,
Күп йөрөгәндән һора.

* Күп уҡыһаң, күп белерһең.

* Күргәндән күрмәгәнең күп,
Белгәндән белмәгәнең күп.

* Күргәнең һигеҙ, күрмәгәнең туғыҙ.

* Кәзәнең һаҡалы оҙон да, аҡылы ҡыҫҡа[373].

* Кәүҙә биргәнсе аҡыл бир.

* Ҡабатлауҙан иман иҫкермәй.

* Ҡағыҙға төшкән юғалмай.

* Ҡаҙ ҡанаты хат яҙыр.

* Ҡараға – һабын, тилегә өгөт файҙаһыҙ.

* Ҡиссанан – хисса*.

* Ҡарты бар өйҙөң китабы бар,
  Китабы бар өйҙөң етәге бар.
* Ҡаурый тотҡан хур булмаҫ[374].
* Ҡул ҡыла алмағанды белем ҡыла.
* Ҡулында китап булғандың башында ғилем булыр.
* Ҡулың да байлыҡ, белем дә байлыҡ.
* Ҡәләм йәшәгәндә ғаләм йәшәй.
* Ҡәләм ҡылыстан үткер.
* Мал байлығы бер бөлөүҙә юҡ булыр,
  Уҡыу байлығы көндән-көнгә күп булыр,
  Бөлгөнлөгө юҡ булыр.
* Малдан ярлы ҡалһаң ҡал, аҡылдан ярлы ҡалма.
* Малһыҙлыҡ ярлылыҡ түгел, аҡылһыҙлыҡ – ярлылыҡ.
* Матур күҙ өсөн, аҡыл күңел өсөн.
* Матурлығыңа маҡтанма,
  Аҡыллылығыңа маҡтан.
* Мең алтын ташың булғансы,
  Бер аҡыллы башың булһын.
* Мең башта мең аҡыл бар.
* Наҙан дәрәжәгә ынтыла, ғалим – камиллыҡҡа.
* Наҙан кеше – яман кеше.
* Наҙан әйтер «мин еңдем»,
  Аҡыллы әйтер «юл бирҙем».
* Наҙандың ҡулы ҡыҫҡа.
* Наҙанлыҡ – ҡоллоҡ,
  Ҡоллоҡ көнө – хурлыҡ.
* Наян кеше – төлкө кеше,
  Наҙан кеше – көлкө кеше.
* Наян кеше көлдөрөр,
  Наҙан үҙен бөлдөрөр.
* Нисек өйрәнһәң, шулай китә.
* Нәпсе теҙгене аҡыл ҡулында.
* Оло аҡыл – муйынға бау,
  Бәләкәй аҡыл – аяҡҡа быға у.
* Оло ҡаҙанда ҡайнаған сей ҡалмаҫ.

* Ололоҡ кәүҙәлә түгел, аҡылда.
* Ололоҡ йәштә түгел, башта.
* Оҫта барҙа ҡулың тый,
  Остаз барҙа телең тый.
* Өйрәнгән ерҙә ҡалмаҫ.
* Өйрәнеү үҙе бер һөнәр.
* Өйрәтелгән берәүгә өйрәтелмәгән өсәүҙе бирәләр.
* Өҫтән-өҫтән белгәнсе, бөтөнләй наҙан булғаның яҡшы.
* Сибәр берҙе, аҡыллы меңде эйәртә.
* Тал сағыңда бөгөлмәһәң,
  Таяҡ сағыңда бөгөлмәҫһең.
* Тау бейек, аҡыл тауҙан да бейек.
* Тауҙың күрке таш менән,
  Әҙәм күрке баш менән.
* Тиле асыуы – яман асыу.
* Тиле ғәйеп итер,
  Аҡыллы фекер итер.
* Тиле менән йәшәгәнсе, аҡыллы менән бергә үл.
* Тиле менән тиң булма.
* Тиле менән тиңдәш тә, юлдаш та булма.
* Тиле таш йыйыр.
* Тиле «тиле» тигән һайын тегәнәк буйы һикергән.
* Тиле тилергәндә, аҡыллы аҡыл һатҡан.
* Тиле тилерһә, тирәк йырыр.
* Тиле тиңе менән, итәге-еңе менән.
* Тиле үҙен маҡтар.
* Тилегә бау ҙа бер, тау ҙа бер.
* Тилегә диңгеҙ тубыҡтан.
* Тилегә тарыма,
  Тарыһаң арыма.
* Тилегә түрә юҡ.
* Тиләләр булмаһа, аҡыллыға ни һан?
* Тиленең аҡсаһы торна булып ҡысҡыра.

* Тилене килегә һалып төйһәң дә тиле.
* Тиленең уйында ни, телендә шул.
* Тиленән тура яуап.
* Тинтәк кеше ҡатынын маҡтар.
* Тинтәк тегелмәгән итеген маҡтар.
* Тинтәк тиккә ҡысҡырыр.
* Тинтәк типһә тимер өҙөр.
* Тинтәк түрен бирмәҫ.

*Вариант:* Тиле һүҙен бирмәҫ.
* Тинтәккә көн дә туй.
* Тинтәктең аҡылы төштән һуң.
* Тинтәктең аяғы һигеҙ.
* Тинтәктең таяғы ҡырҡ, береһе теймәһә, береһе тейер.
* Тиң тиңе менән, тинтәк тиле менән.
* Тыуа килә мөгөҙ сыҡмай,
  Тора килә мөгөҙ сыға.
* Тоҙһоҙҙо күҙһеҙ ҙә тоя.
* Тән зиннәте – кейем,
  Аҡыл зиннәте – ғилем.
* Тәрән йылға тауышһыҙ аға.
* Тәрән йылға тын ағыр,
* Һай йылға шаулап ағыр.
* Тыныс һыу тәрәнерәк була.
* Уй төбөндә алтын бар, уйлай белһәң, табырһың.
* Уйлағандың уйында ҡала.
* Уҡыған артҡа ҡалмаҫ.
* Уҡыған белмәҫ, туҡыған белер.
* Уҡыған ете ҡат ер аҫтындағын күрә,
  Уҡымаған ер өҫтөндәген дә күрмәй.
* Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған ил туҙыр.
* Уҡыған кеше хур булмай.
* Уҡыған уғыл – атанан оло.
* Уҡыған – уңыр, уҡымаған – туңыр.

* Уҡыған - үлмәҫ,
Уҡымаған көн күрмәҫ.

* Уҡый белмәһәң дә хурлыҡ,
Уҡып белмәһәң дә хурлыҡ.

* Уҡымаған бер телле, уҡыған ике телле.

* Уҡымаған күҙенә уҡыған һуҡыр еңгән.

* «Уҡыным» тимә, «белдем» тиң.

* Уҡып мулла булмаҫһың,
Суҡып ҡарға булмаҫһың.

* Уҡыу – белем шишмәһе.

* Уҡыу - күңел нуры,
Уҡымай ҡалған – кеше хуры.

* Уҡыу ялыҡтырһа ла бил һындырмай.

* Уҡыуһыҙ белем юҡ,
Белемһеҙ көнөң юҡ.

* Уҡыһаң белерһең, уҡымаһаң бөлөрһөң.

* Ун ҡат уҡы, бер ҡат яҙ.

* Уҫаҡ утындың көлө әсе, тинтәктең теле әсе.

* Үҙ аҡылым үҙәктә, кеше аҡылы кештәктә.

* Үҙ аҡылың етмәһә, кешене тыңла.

* Үҙ аҡылың үҙеңә алтын.

* Үҙ аҡылың - үҙәк менән бау,
Кеше аҡылы – кешән менән тышау.

* Үҙе белгән хур булмаҫ.

* Үҙе белмәгән кеше өйрәтер.

* «Үҙем беләм» тигән үргә йөҙмәҫ.

* Үҙең белмәһәң, кешенән һора.

* Үҙеңдә булмаған аҡылды кешегә өйрәтмә.

* Үҙеңдән бер көн элек тыуғаныңдан аҡыл һора.

* Үлеге булған бер көн илай,
Тилеһе булған һәр көн илай.

* Үтмәҫ бысаҡ күп киҫер.

* Үтә иҫәр буйға үҫәр.

* Фекере көслөнөң аҡылы көслө.
* Хатҡа яҙып һүҙ бөтмәҫ.
* Хеҙмәтһеҙ ғалим – хөрмәтһеҙ ғалим.
* Хикмәт буйҙа түгел, аҡылда.
* Хәйлә – алтау, аҡыл – етәү.
* Хәлфәһеҙ шәкерт булмаҫ.
* Һаҡалға сал кермәй башҡа аҡыл кермәҫ.
* Һаҡалға ышанма, аҡылға ышан.
* Һантыйға һан юҡ.
* Һантый һыйпағанды белмәҫ.
* Һаңғырауға[375] һүҙ әрәм.
* Һуҡыр йығылһа, таяғын ҡыйнар.
* Һуҡыр тауыҡҡа бары ла бойҙай.
* Һуҡыр һуҡырҙы күрә.
* Һуҡыр юҡты уҡыр.
* Һуҡырға – атлаған һайын соҡор.
* Һуҡырға көн дә бер, төн дә бер.

*Вариант:* Һуҡырға көн дә ҡараңғы, төн дә ҡараңғы.
Һуҡырға төн ни, көн ни, аҡ ни, ҡара ни.

* Һуҡырға соҡор ғәйепле.
* Һуҡырға тошоҡма*, тошоҡһаң бошоҡма.
* Һуҡырға эйәргән күҙле ярҙан осор.
* Һуҡырҙан юл һорама.
* Һуҡырҙы ҡарауылға ҡуйһаң, өҫтөңә яу килтерер.
* Һүҙ онотола, яҙған ҡала.
* Һәләт һатып алынмай, талант талап табылмай.
* Һәр ғилемдә остаз кәрәк.
* Һәр кемдең үҙ аҡылы үҙенә.
* Шәм төбөнә шәүлә төшмәҫ.
* Шәүхәүәнигә әйләнеп бөткән[376].
* Ырҙында илле кешегә эш табыла,
Тиле кешегә эш табылмай.

* Эшләгән – ашай, уҡыған – йәшәй.

* Эшләгәндең ҡулынан,
Уҡығандың теленән билгеле булыр.

* Әҙәм белгәнен уҡыр,
Тауыҡ күргәнен суҡыр.

*Вариант:* Мулла белгәнен уҡыр,
Тауыҡ күргәнен суҡыр.

* Әҙәм уҡыу менән таба, ҡарға – суҡыу менән.

* Әлиф* йотҡан ас булмаҫ.

*Вариант:* Әлиф йотҡан хур булмаҫ.

* Әүлиә кеше ете ҡат ер аҫтындағы йылан көйшәгәнен ишетер.

* Әүлиә – әһел әйәһе.

* Юрғалы менән юлдаш булма,
Наҙан менән серҙәш булма.

* Яҙмағанды таҙ уҡыр.

* Яҙыу белгән хур булмаҫ.

* Яҡтыла яҡты күренмәҫ,
Ҡараңғыла саҡҡы ла күренер.

* Яҡшы ергә төшкән орлоҡ юғалмай.

* Яҡшы үлһә – ат ҡалыр,
Ғалим үлһә – хат ҡалыр[377].

* Яманлыҡтың төбө – наҙанлыҡ.

* Ярты аҡылға юл таҡыр.

* * *

* Аҡыл өләшкәндә урынында булмаған.

*Вариант:* Аҡыл өләшкәндә мейес аҫтында ҡалған.

* Аҡыл тигәнең таҡыр.

* Аҡыл һатма, үҙеңә ҡалмаҫ.

* Аҡыллынан аҡылһыҙ тыуған.

* Аҡылы – алтын.

* Аҡылы аяҙлы-болотло.

* Аңра бер ҙә юҡҡа ҡаңғыра.

* Аяғынан тотоп һелкһәң – бер әлиф* төшмәҫ.

* Аяҙлы-болотло аҡылы бар,
Кәзәнеке хәтлем һаҡалы бар.

* Башына тай типкән.

* Беҙ элек тыуған, хәҙергеләр белеп тыуған.

* Беҙҙең йүләрлек, уйлап торһаң – үләрлек.

* Берәүҙең мең ҡуйы бар,
Берәүҙең мең уйы бар.

* Ике арала, бер турала ҡалған[378].

* Ике быҙауға кәбәк айырып бирә алмай, үҙе ҡаҙый булам, ти.

* Иҫәрҙең Иҙел кискәс иҫенә төшкән.

* Кеше ҡайһылайтһа алай,
Ҡорманай* ауылы бер малай.

* Күҙле һуҡырҙан юл һораған.

* Күпте белһәң тиҙ ҡартайырһың.

* Күрергә матур, аҡылға таҡыр.

* Ҡоро буй бүрәнәлә лә бар (аҡылың булһын).

* Мин белгәнде кем белгән?

* Уҡымай мулла булған,
Суҡымай ҡарға булған.

* Уҡыуы ни ҙә, суҡыуы ни.

* Һай йөҙә.

* Һаҡалы бар, аҡылы юҡ.

* Һалам – аҡыл, ерек – тәртә.

* Һаламға бар, башаҡҡа юҡ[379].

* Һаҡалына сал кергәнсе, күкрәгенә аҡыл кермәгән.

* Һин белгәнде – киптереп элгән!

* Һин белмәгән аҙ булыр,
Бохарҙа бер таҙ булыр[380].

* Һин элек тыуған, мин белеп тыуған.

*Вариант:* Һин элек тыуһаң, башҡа кеше белеп тыуған.

* Һәр кемдең дә башы йоморо[381].

* Эсендә булмаһа, ярып һалып булмай.

* Әлифте таяҡ тип белмәй.

# V. ДОНЪЯ, ҒҮМЕР, ЯҘМЫШ ТУРАҺЫНДА УЙЛАНЫУҘАР

## 1. Донъя, ваҡыт, форсат, сара, сәбәп, яҙмыш һ. б.

* Ай менән ай бер түгел.
* Аҡҡан һыу кире ҡайтмай.
* Аҡмаған һыуҙы үлән баҫа.
* Аҡҡан һыу юлын табыр.
* Алды барҙың арты бар.
* Алды болот булһа, арты аяҙ.
* Алдырыр көн яҙҙырыр.
* Алла ташламаһа, бүре ашамаҫ.
* Алыҫтың яҡыны бар.
* Аҡта ҡара юҡ, ҡараға сара юҡ.
* Арыҡ атҡа йүкә йүгән.
* Асыҡ ишек барында кереп ҡал.
* Аттың табаны өлкән,
  Донъяның табыны өлкән.
* Ат аунаған ерҙә төк ҡала.
* Ат аяғында бығау бар,
  Бығау киҫер игәү бар.
* Ат ҡартайыр – майҙан ҡартаймаҫ,
  Егет ҡартайыр – заман ҡартаймаҫ.

* Аттың үте булмай,
Ҡоштоң һөтө булмай.

* Атына күрә санаһы,
Маҡсатына күрә сараһы.

* Атың арыҡ булһа – бер сап,
Утының аҙ булһа – бер яҡ.

* Атың арыһа, сабып ҡал.

* Атың барҙа елеп ҡал, йөрөй алмай торған көн килер.

* Атһыҙ сана йөрөмәй.

* Атҡан ерҙә уҡ ҡалыр,
Төшкән ерҙә суҡ ҡалыр.

* Баҫыуҙа балыҡ булмаҫ.

* Баш менән таш ярып булмай.

* Башыңдан бейек һикерә алмаҫһың.

* Бер ауыҙыңа ике ҡашыҡ тыға алмаҫһың.

* Бер йомортҡанан ике себеш сыҡмай.

* Бер көл булмай гөл булып булмай.

* Бер һарыҡтан ике тире сыҡмаҫ.

* Бер һарыҡты ике һуймайҙар.

* Береһен боҙмай, икенсеһен төҙөп булмай.

* Боламыҡҡа май кәрәк,
Һәр нәмәгә яй кәрәк.

* Болотһоҙ ямғыр булмаҫ.

* Боронғоноң бере юҡ,
Индегенең ҡото юҡ.

* Бөгөн менән көн бөтмәй.

* Бөгөнгөнөң иртәһе бар.

* Бөгөнгөнөң иртәһе бар,
Иртәгәнең ирмәге бар.

* Буйыңа ҡарап туның бес.

* Буйың етмәҫ урынға һуҙылма.

* Буласаҡҡа сара юҡ.

* Былтыр үлгән ябалаҡ быйыл башын күтәрмәҫ.

* Быуынһыҙ ергә бысаҡ һалмайҙар.

* Бәндә һағышлай,
Хоҙай бағышлай.

* Бәндә һөйләр, тәҡдир көләр.

* Ваҡыт аҡса түгел, бер юғалғас, табылмай.

* Ваҡыт – алтын, форсат – алмас,
Ваҡыт етмәй форсат булмай.

* Ваҡыт етмәй сәскә атмай.

* Ваҡыт менән аҡса табыла,
Аҡса менән ваҡыт табылмай.

* Ваҡытын юғалтҡан – малын юғалтҡан.

* Донъя баҫһа, тоҙ ҙа алтынға әйләнә.

* Донъя бер алдын, бер артын күрһәтер.

* Донъя бер гөл итеп, бер көл итеп өйрәтә.

* Донъя – даръя, ғүмер – ҡалъя.

* Донъя – ҡуласа, әйләндереп бер баҫа.

* Донъя менән диңгеҙҙең төбө юҡ.

* Донъя мулланы ла өйрәтә.

* Донъя – сәйран, кеше – каруан.

* Донъяның осона сыға алмаҫһың.

* Донъяның яйы китһә, ҡоймаҡтың майы китә.

* Заманына күрә бағанаһы.

* Заманына күрә манараһы.

* Заман башҡа – заң башҡа.

* Заман һиңә эйәрмәһә, һин заманға эйәр.

* Заман яҙмышы кеше ҡулында.

* Заманына күрә ғәмәле,
Һабанына күрә әмәле.

* Заманына күрә кешеһе.

* Заманына күрә өйө,
Өйөнә күрә көйө.

* Заманына ҡарай көлкөһө,
Тауына ҡарай төлкөһө.

* Заманың ниндәй – яҙмышың да шундай.

* Заманың нисек булһа, бүркеңде шулай кей.

* Ел ағас башынан, заман әҙәм башынан үтә.
* Ел булмаһа япраҡ һелкенмәй.
* Ер еләге ерҙә бешә.
* Ел иҫмәй тороп, ҡурай һелкенмәй.
* Ел өрмәй ҡамыш бөгөлмәй.
* Ел сыҡмай сүп өйөрөлмәй.
* Елгә шаршау ҡормайҙар.
* Елһеҙ үлән һелкенмәй.
* Елек ярып, май биреп булмай.
* Иртәне кисһеҙ маҡтама.
* Исеменә ҡарап есеме.
* Иҫке өҫкә сыҡһа, иҫте килтерер.
* Иҫке тимерҙе һаҡлаһаң, алтын булыр.
* Иҫке яңыға еткерә.
* Иҫке яңыға урын бирер.
* Иҫкеһе юҡтың яңыһы юҡ.
* Иҫкеһеҙ яңы булмаҫ,
  Яманһыҙ яҡшы булмаҫ.
* Иҫкеһеҙ яңы булмаҫ,
  Яңы килһә, иҫке тормаҫ.
* Иҫәпле көн тиҙ үтә.
* Итәк киҫеп, еҫ булмаҫ.
* Ит үҙенән-үҙе ҡортлай.
* Ихлас илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға.
* Йондоҙ бишәү тыуһа ла, яҡтылығы айҙай юҡ.
* Йүкәне майлау менән ҡайыш булмаҫ.
* Йылғаһына күрә кәмәһе.
* Йәшен йәшнәмәй – күк күкрәмәй.
* Йыл йылға оҡшамай.
* Киҫәү һабың оҙон булһа, ҡулың көймәҫ.
* Кеше һөйләр, яҙмыш көйләр.
* Киң юлға – киң арба.

* Кирбес кибенән үҫмәҫ.
* Кисеү бирмәҫ йылға юҡ.
* Көн оҙаймай төн ҡыҫҡармаҫ.
* Көн үҙгәрә көн килә,
  Ай үҙгәрә йыл килә.
* Көтәсәк – етәсәк.
* Көткәнгә көн оҙаҡ.
* Күккә терәк юҡ.
* Күңеленә күрә сум.
* Күңелгә килгән алға килер.
* Күпкә китһә, майлы бутҡа ла туйҙыра.
* Күренгәндең алыҫлығы юҡ,
  Күтәргәндең ауырлығы юҡ.
* Күрәсәк күҙ йомдора.
* Күрәсәктән ҡасып ҡотолоп булмай.
* Күрәсәгең булһа, быйма кейһәң дә, аяғың һыныр.
* Күрәсәгең булһа, күркә талап үлтерә.
* Күрәһең булһа, тигеҙ ерҙә абынырһың.
* Күрәсәгең күрмәй гүргә кереп булмай.

  *Вариант:* Бирәсәгең бирмәй, гүргә инеп булмай.
* Күсергә ниәте барға йорт яман.
* Ҡайҙа барһаң да түңәрәк ай артыңдан ҡалмаҫ.
* Ҡар ни тиклем ҡалын яуһа ла, йәйгә ҡалмаҫ.
* Ҡашыҡ ашағанда ҡәҙерле.
* Ҡашығыңа ҡарап ауыҙыңды ас.
* Ҡоро ерҙә һыу тормаҫ.
* Ҡоромаған ҡойо булмаҫ.
* Ҡунысың тар булһа, донъя киңлегендә ни файҙа?
* Ҡыҙыл йомортҡа конөндә ҡиммәт.
* Ҡыҫҡа еп бәйләргә етмәй.
* Ҡыш ҡышын кәрәк, йәй  йәйен.
* Маҡсатың булһа, юлы табылыр.

* Маңлайға яҙылған юйылмаҫ.
* Мейес янмаһа, мөрйәнән төтөн сыҡмай.
* Миҙгел етһә, боҙ ятмаҫ.
* Мәленә күрә әмәле.
* Нәпсенең уңы юҡ, донъяның төбө юҡ.
* Оҙонһоҙ ҡыҫҡа булмаҫ.
* Оло ауыҙға оло ҡашыҡ.
* Оло юлға үлән үҫмәй.
* Осҡанда ҡарлуғас уҙыр,
  Һайрағанда һандуғас уҙыр.
* Ояңа ҡарап ҡанат ҡаҡ,
  Дуғаңа ҡарап ҡыңғырау таҡ.
* Өйөң тар булһа, донъя киңлеге беленмәҫ.
* Сама самаға тарта, самаңа ҡарап эш ит.
* Сараһыҙлыҡ сара тыуҙырған.
* Сыбыртҡы юҡта сыбыҡ та ярай.
* Сәбәпһеҙ ҡош осмаҫ.
* Сәбәпһеҙ себен дә ҡанатын ҡаҡмай.
* Сәбәпһеҙ сәғәт тә һуҡмай.
* Сәбәпһеҙ япраҡ та һелкенмәй.
* Сәйнәгәндән йотҡан яҡшы.
* Сәскәнеңде урырһың,
  Яҙғаныңды күрерһең.
* Сәтләүек ашайһың килһә, тешеңде йәлләмә.
* Табағасыңа күрә ҡулың һуҙ.
* Табағасың оҙон булһа, ҡулың бешмәҫ.
* Тал-тирәктә алма бешмәй.
* Тамсыла ҡояш сағыла.
* Тауға ҡарап тау була алмаҫһың.
* Тауға ҡарап таш атма.
* Тауына күрә ҡар яуыр.
* Тауына күрә төлкөһө,
  Заманына күрә көлкөһө.

* Таштың да тарихы була.
* Тиккә һыйыр ҙа мышнамай.
* Тирмән ҡеүәте һыу менән.
* Тирмән тик торһа, ташы ярылыр.
* Тормош – башыңа ормош.
* Тормош – диңгеҙ, ғүмер – аҡҡан һыу.
* Төлкөнөң үлеме тиреһе өсөн.
* Төтөн төбө ут булыр.
* Төтөнө сыҡһа, уты була.
* Туғыҙҙы түңкәрмәй,
  Унды ултыртып булмай.
* Тыуған ай – тураған ит.
* Тышы барҙың эсе бар.
* Тәртә сана менән,
  Һәр бер эш сама менән.
* Уҙып киткән болотто тотоп ҡалып булмай.
* Уйға килгән алға килер.
* Уҡ етмәҫ ергә ҡылыс менән һелтәнмә.
* Уңы барҙың һулы бар.
* Ут ғәйрәтен һыу баҫыр.
* Ут менән һыу дуҫ булмаҫ.
* Ут менән һыуҙы бергә ҡушып булмай.
* Ут менән һыу уйнамаҫ.
* Ут сыҡҡанда һыу ҡиммәт.
* Ут төтөнһөҙ булмай.
* Ут яҡмаһаң, төтөн сыҡмай.
* Утын ағасы менән ут күҙәмә.
* Утын юҡта тиҙәк тә утын.
* Үҙенә үҙе һыу ҙа юл таба.
* Үләһе мал һаҙға керер.
* Үҫмәгән бойҙайға үтмәгән ураҡ.
* Үткән көн үҙгәрмәҫ, киткән көн әйләнмәҫ.

* Һаҙлыҡ аҫты йәйләүгә ярамай,
Ҡыҫҡа еп бәйләүгә ярамай.

* Һанаулы көн бер етә.

* Һары йомортҡа һабан туйында ғына була.

* Һуң булһа ла, уң булһын.

* Һыйырға ял үҫмәҫ.

* Һыйырҙы күпме ҡыйнаһаң да ат булмаҫ.

* Һыу ағыр ҙа таш ҡалыр.

* Һыу менән уттың ялы, ҡойроғо юҡ.

* Һыу тамсыһы таш тишә.

* Һыуға батҡан һаламға йәбешкән.

* Һыуһыҙ ерҙә ағас та ҡорой.

* Һыуһыҙ йыуған елһеҙ киптерә.

* Һыуһыҙ тирмән тартмай.

* Һәр ағастан ҡалаҡ булмаҫ.

* Һәр бер эшкә сәғәт бар,
Һәр нәмәгә сәбәп бар.

* Һәр замандың үҙ көйө.

* Һәр емештең ваҡыты бар.

* Һәр кем үҙенсә таба, үҙенсә абына.

* Һәр кемдең үҙ аршыны бар.

* Һәр кем яңыға ынтыла.

* Һәр күлдә аҡҡош булмаҫ.

* Һәр күргәнгә ҡул етмәҫ.

* Һәр ҡош осоп ыласын булмай.

* Һәр маҡсатҡа сара бар.

* Һәр нәмә ваҡыты менән ҡыҙыҡ.

* Һәр нәмә заманына күрә.

*Вариант:* Һәр нәмә ваҡытына күрә.

* Һәр нәмә үҙенә күрә.

* Һәр нәмә яйы менән,
Бутҡа тәмле майы менән.

* Һәр нәмәгә сәбәп бар,
Һәр бер эшкә сәғәт бар.
* Һәр нәмәнең үҙ батманы.
* Һәр нәмәнең сиге бар.
* Һәр нәмәнең урыны бар.
* Һәр нәмәнең яйы була,
Кәбеҫтәнең майы була.
* Һәр фасылдың үҙ емеше.
* Һәр яңыға алданма.
* Һәр яуған ҡар булмаҫ.
* Шартлауы шарт түгел, тейеүе шарт.
* Шешек, тулышҡас, һытылыр.
* Ысыҡһыҙ үлән үҫмәҫ.
* Эйәһенә ҡарап күлдәк киҫәләр.
* Энә күҙенән дөйә үтмәҫ.
* Эсе барҙың тышы бар,
Тышы барҙың эсе бар.
* Әҙәм һөйләй, яҙмыш бәйләй.
* Әҙәм унһа – үҙенән, уңмаһа, тәкдиренән күрер.
* Әтәс ҡысҡырмаһа ла таң ата.
* Әүәлгенең маҙаһын һуңғы бирер язаһын.
* Юғалған аҡса табыла,
Юғалған ваҡыт табылмай.
* Юғары ҡарап фекер ит,
Түбән ҡарап шөкөр ит.
* Юҡтан бар булмай.
* Юнышҡан ерҙә юнысҡы ҡала.
* Юраған юш килә.
* Юрғанына ҡарап аяғыңды һуҙ.
* Яҙған булыр ян башында.
* Яҙмыш юлдан яҙҙырмаҫ.
* Яҙмыштан уҙмыш юҡ.
* Яҙмышты ямап булмай.

* Яҙын бесән сапмайҙар, көҙөн кәбән өймәйҙәр.

* Ваҡыт менән яҡут табылыр,
Яҡут менән ваҡыт табылмаç,

* Яҡут табыла, ваҡыт табылмай.

* Ямғыр яуғанда силәгеңде тотоп ҡал.

* Янған ерҙән төтөн сығыр.

* Янғындан һуң һыу кәрәкмәй.

* Яңы булды тип, иҫкене хурлама.

* Яңы иләк сөйҙә булыр.

* Яңы – танһыҡ, иҫке – һаҫыҡ.

* Яңыны күреп абынма, иҫкене күреп төңөлмә.

* Яңыны яңы иткән иҫке.

* Яңыһыҙ иҫке булмаç,
Ямауһыҙ яҡшы булмаç.

* Япраҡ шыбырлағанға ел булмай.

* Япраҡ яныш, күмер төшмәç.

* Яһалған уҡты атмаһаң, дөрçөй.

* * *

* Ай үтә, йыл үтә,
Ай әйләнә көн үтә.

* Барҙан юҡ булған,
Юҡтан бар булған.

* Бер йылға ҡуян тирсһе лә сыҙаған.

* Бөгөн былай, таңда әллә нисек.

* Боронғоноң бороно һынған.

* Бөгөнгөһө – ҡулыңда,
Алдағыһы – улыңда.

* Был донъя – бесән ҡыуышы.

* Ваҡытым уҙған – туным туҙған.

* Донъя мине алданы:
Бер көн килеп «ал» тине,
Бер көн килеп «һал» тине.

* Донъяныҡы донъялыҡта ҡайта.

* Донъяның күҙе юҡ.
* Заман боҙоҡ түгел, әҙәм боҙоҡ.
* Йәрәбә һалынған, яҙмышҡа яҙылған.
* Иҫке күлдәккә яңы ямау.
* Йылына күрә йылан һурпаһы.
* Келәтенән баҫтырығы оҙон[382].
* Кешегә ни, беҙгә шул.
* Ҡайҙа барһаң да бер ҡояш.

*Вариант:* Себерҙә лә бер ҡояш,
Семберҙә* лә бер ҡояш.

* Ҡарғаға аттым, быҙауға тейҙе.
* Рәхәт донъя, киң ялан.
* Төлкө – тауҙа, эт – бауҙа.
* Һыныҡҡа – һылтау.
* Әллә яҙмыш, әллә уҙмыш.

## 2. Йәшлек, картлыҡ, сәләмәтлек, йәшәү, үлем

* Ағыу менән дарыу бер заттан.
* Ағыу яһаған ағыуҙан үлер,
Һөңгө яһаған һөңгөнән үлер.
* Аҙ ашаған да ауырыған,
Күп ашаған да ауырыған.
* Аҙ ашаһаң, күп йәшәрһең.
* Аҙыҡ мул ерҙә ауырыу булмаҫ.
* Ай үткәс – көн һана,
Көн үткәс – ай һана[383].
* Ай үтә, йыл үтә – ай әйләнә көн үтә.
* Айы еткән – айында үлә,
Көнө еткән – көнөндә үлә.
* Аҡ кәүҙәңдең ҡәҙерен ауырыу булғас белерһең.
* Алтмыш – ҡайтмыш.

*Вариант:* Алтмышҡа еткән – кире киткән.

* Алтмышҡа еткәс – рәуа* йән.

* Алтмышта ҡартлығың ҡаршы алыр.
* Алтмыштағы ир арғымаҡҡа тиң.
* Алтыла бер дәңгелдек,
Алтмышта бер дәңгелдек[384].
* Алтмыштыҡы бөтә, алтыныҡы бөтмәй.
* Алтын ерҙә ятһа ла, тут теймәй,
Әжәлһеҙгә төҙәп атһаң да, уҡ теймәй.
* Артыш ағасы им булыр.
* Артыш еҫенән шайтан ҡаса, ти[385].
* Ас – икмәккә, ауырыу табибҡа мохтаж.
* Ат тояғын тай баҫыр.
* Атҡан таң алға һөйрәй,
Ахырҙа ҡәбергә һөйрәй.
* Атһыҙ ауырыуҙың аты ҡороһон[386].
* Атын атама, аҙашып китһен[387].
* Ауыҙыңа тәмәке ҡапһаң, үпкәң серер,
Усағыңа утын яҡһаң, тәнең эрер.
* Ауырымаған ыңғырашмай.
* Ауырымаҫ тән булмаҫ.
* Ауыртҡан ер – артыҡ ер.
* Ауыртҡан ерҙән ҡул китмәй.
* Ауырыу ағас башынан йөрөмәй,
Әҙәм башынан йөрөй.
* Ауырыу эш менән керә, аш менән сыға.
* Ауырыу – аштан,
Дау – ҡәрендәштән,
Таҙ – таныштан,
Ҡутыр – ҡамыштан[388].
* Ауырыу – аш түгел.
* Ауырыу ботлап керә, мыҫҡаллап сыға.
* Ауырыу булһаң, үлеп ҡотолорһоң.
* Ауырыу дарыуҙан дарман көтөр.
* Ауырыу – йә астан, йә аштан.
* Ауырыу кеше зарын һөйләр.

* Ауырыу көсәйһә, йәнеңде алыр.
Дарыу көсәйһә, малыңды алыр.

* Ауырыу күрмәгән кеше һаулыҡтың ҡәҙерен белмәҫ.

* Ауырыу ҡыйын,
Ауырыуҙы ҡарау унан да ҡыйын.

* Ауырыу малға талау тейә.

* Ауырыу матурламай.

* Ауырыу тауыш һөймәҫ.

* Ауырыу үлмәҫ[389], һау үлер.

* Ауырыу хәлен һау белмәҫ.

* Ауырыуға себен эйәләшер,
Һаҡланмаһаң, илгә өләшер.

* Ауырыуға сыҙамаһаң, һаулыҡтың ҡәҙерен бел.

* Ауырыуҙың аҙығы үҙе менән.

* Ауырыуҙың алдын ал.

* Ауырыуҙы алдан алмаған үлер,
Дауҙы алдан алмаған бөлөр.

* Ауырыуын йәшергән үлер,
Бурысын йәшергән бөлөр.

* Ауырыһаң, имсе күбәйер.

*Вариант:* Ауырыһаң, әмәлсе күп.

* Аш – ашау менән түгел,
Аш булып үтеүе менән.

* Аяғы менән киткән ҡайта,
Башы менән киткән ҡайтмай.

* Аяғыңды йылыла, башыңды һалҡында тот.

* Аяҡтан кергән ауырыу бөтөн тәнде алыр.

* Бай булһаң, илең һөйөр,
Һау булһаң, ирең һөйөр.

* Байлыҡ башы – һаулыҡ.

*Вариант:* Байлыҡтың алды – тән һаулыҡ.

* Байлыҡ – бер айлыҡ,
Һаулыҡ – ҙур байлыҡ.

* Байлыҡты теләмәгән – һаулыҡты теләмәгән.

* Байлыҡтың алды – тән һаулыҡ.

* Башы һауҙың малы һау.
* Башыңа сырхау килһә, малыңа үләт килер.
* Башың ауыртһа, яулыҡ эсендә булһын,
  Беләгең ауыртһа, еҥ эсендә булһын.
* Бер йән үлмәй, бер йән тыумай.
* Бер төрлө торһаң, йөҙ йыл торорһоң.
* Бер сажин ер, өс аршин кәфен (етә).
* Берәүҙең әжәле уттан,
  Берәүҙең – һыуҙан.
* Берәүҙәр ҡайғынан һарғая, берәүҙәр тәмәкенән.
* Биҙ ашаһаң, биҙ сыға[390].
* Боҙ өҫтөндә яҙыу тормаҫ,
  Ҡарт кешелә аҙау тормаҫ.
* Бөркөт ҡартайһа, сысҡан аулай алмай.
* Булған саҡта булып ҡал,
  Буҙ юрғалай елеп ҡал.
* Бурыслы үлмәҫ, әжәлле үлер.
* Бүре ҡартайһа, эт көлкөһө булыр.
* Бәндәне эсәһе һыу, ейәһе ризыҡ йөрөтә.
* Ваҡыт етмәй әжәл килмәй.
* Ваҡыт үтә тора,
  Ҡартлыҡ етә тора.
* Ваҡыты етмәй яҙмыш сәғәте һуҡмай.
* Ваҡытың үтте – бәхетең китте.
* Васыят үлем килтермәй.
* Гүргә кергән кире сыҡмаҫ.
* Гүрҙә ятҡансы түрҙә ят.
* Ғилемдән яҡшы дуҫ юҡ,
  Сирҙән яман дошман юҡ.
* Ғүмер ике килмәй.
* Ғүмер ҡыҫҡа, үткәрмә бушҡа.
* Ғүмер оҙаҡ – йыл йыраҡ.
* Ғүмерҙе белеп булмай: бөгөн бар, иртәгә юҡ.
* Ғүмерҙең ҡәҙере ҡартайғас беленер.

* Ғәрип йәшәүҙән туймаҫ.
* Ғәриптең хәлен ғәрип белер.
* Донъя байлығы донъяға ҡалыр.

  *Вариант:* Донъянығы донъяла ҡалыр.
* Ер байлығы ерҙә ҡалыр.
* Донъя ике килмәй.
* Донъя иркен, һәр кемгә лә урын бар.
* Донъя – фани.
* Донъяла таш табылыр, баш табылмаҫ.
* Донъянан туйыу ҙа юҡ, ҡуйыу ҙа юҡ.
* Донъяның ҡәҙерен йөрөгәндә,
  Малдың ҡәҙерен бөлгәндә,
  Йәндең ҡәҙерен үлгәндә белерһең.
* Дуҫ күтәрер күңелде, мал күтәрер үлемде.
* Дәртһеҙгә дауа юҡ.
* Електә йылы булһын.
* Ен һуҡҡандың ауыҙы ҡыйыш[391].
* Ер аҫтынан юл юҡ (үлгән ҡайтмай).
* Ер ҡосағына ир һыйыр,
  Ҡәбер ҡосағына бер һыйыр.
* Ер соҡорһоҙ булмаҫ,
  Шеш ҡутырһыҙ булмаҫ.
* Етмеш килде – егәрлек китте.
* Етмештә ҡартлыҡ етте – аҡыл китте.
* Етмештәге лә сабый,
  Етеләге лә сабый.
* Ике ауырыу бер килһә – әжәлеңдең еткәне,
  Ике тишек бер килһә – абруйыңдың киткәне.
* Иллегә еткәс иҫәр ҙә ипкә килә.
* Иллеләге – ил ағаһы.
* Имам* өйөнән аш сыҡмаҫ,
  Үле күҙенән йәш сыҡмаҫ.
* Ир йыуаш булһа ла, тәҡдирҙән ҡотолмай.
* Ир йәше ике утыҙ,
  Ҡатын йәше – бер утыҙ.

* Иҙел аша сыҡкан бесәй имгә ярай.
* Ир ҡартая, күңел ҡартаймай.
* Ирҙең йәше ике илле – береһе шәкәр, береһе бикәр.
* Ирекленән ас торған – ирекһеҙҙән үҙенә ҡәбер ҡаҙыр.
* Иртә ятып иртә торған –
Донъяла йөҙ йыл торған.
* Ирәүән барҙа ир үлмәҫ,
Андыҙ барҙа ат үлмәҫ.
* Иҫ итмәгән сир яман,
Иҫкәрмәгән дау яман.
* Ит ашаһаң – дарыу,
Күп ашаһаң – ағыу.
* Ишәк арығанын белмәҫ,
Ир ҡартайғанын белмәҫ.
* Ишәк ҡартайған һайын аҙа.
* Йоғоусан (йоғошло) таҙҙан ҡасҡаның яҡшы.
* Йоҡо балдан татлы.
* Йоҡо – йоҡоноң маяһы.
* Йоҡо менән сир сыға.
* Йоҡо менән үлем тиң.
* Йоҡо яҫтыҡ теләмәй.
* Йома көн үлгән ожмахлы булған[392].
* Йөҙ ҡартайһа ла йөрәк ҡартаймай.
* Йөрәккә сал кермәй.
* Йүткергең килһә, тәмәке тарт.
* Йыртҡыс ҡоштоң ғүмере ҡыҫҡа.
* Йән биргәнгә йүн бирер.
* Йән – ғәзиз.
* Йән рәхәте тән менән.
* Йәне барҙың ғәме бар.
* Йәне барҙың йүне бар.
* Йәнең һау булһа, ауырыумын тимә,
Тәнең һау булһа, ярлымын тимә.
* Йәшел сирәм сир ҡыуыр.
* Йәш ваҡыт – сәскә ваҡыт.

* Йәш кешегә дәүран күп.
* Йәш көсөнә таяна, ҡарт – аҡылына.
* Йәш сағында уйна ла көл.
* Йәш сағындың ҡәҙерен бел.
* Йәш үҙенә ышаныр,
  Ҡарт тәжрибәһенә ышаныр.
* Йәш хәтер ташҡа яҙған,
  Ҡарт хәтер боҙға яҙған.
* Йәше бер ҡорҙаш түгел, заманы бер ҡорҙаш.
* Йәшкә көлмә, ҡартҡа көл[393].
* Йәшкә ҡарап йөрөмәй,
  Йөрәккә ҡарап йөрөй.
* Йәшлек бер генә килә.
* Йәшлек – иҫәрлек,
  Ҡартлыҡ – хөртлөк.
* Йәшлек йәшен йәшнәтә.
* Йәшлеккә лә ҡартлыҡ бар,
  Барлыҡҡа ла юҡлыҡ бар.
* Йәшлектең ҡәҙере ҡартайғас беленер.
* Йәшлегендә иренгән ҡартлығында эшләр.
* Йәшлегеңде әрәм үткәрмә, үкенерһең.
* Йәшлегеңдә йәшәй бел.
* Йәшлегеңдә ни сәсһәң, ҡартлығыңда шуны урырһың.
* Йәшлегеңдә тап,
  Ҡартлығыңда ҡап!
* Йәшлегеңдә тырыш булһаң,
  Ҡартлығың тыныс булыр.
* Йәштәр ғүмер көтә,
  Ҡарттар үлем көтә.
* Йәштәр типһә, тимер өҙә.
* Йәштәр үҫер, ҡарттар үлер.
* Йәштәр үҫә, ҡарттар сүгә.
* Кесегә мәрхәмәт, олоға итәғәт (ит).
* Кесегә, шәфҡәт итеп, юл бир,
  Олоға, хөрмәт итеп, ҡул бир.

* Кеше гүренә кеше кермәй.
* Кеше ғүмере – бер тотам.
* Кеше донъяға бер тапҡыр тыуа.
* Кеше сире аяҡтан, ат сире тояҡтан башлана.
* Кешене ғәм ҡартайта.
* Кешене сир еңер,
  Сирҙе аҙыҡ еңер.
* Кешенең дарыуы – кеше.
* Күҙгә һыуыҡтан һаҡлан.
* Көн биргәнгә ем биргән.
* Көн томан булһа, ауырыуың тымау булыр.
* Көнө бөткән көндә үлә.
* Көстән ҡалған кешенең күҙендә нуры булмаç.
* Көтәсәк – етәсәк, уҙған ғүмер ҡайтмай.
* Күҙең ауырыһа – ҡулың тый.
* Күңеленә күрә гүрең.
* Күп йоҡлағандың күҙе тар булыр.
* Күп йоҡо күҙҙе һарғайтыр.
* Күп йәшәгәндән күп күргән яҡшы.
* Күп йәшәһәң, күпте күрерһең.
* Күпте күргән йәшләй ҡартайыр.
* Ҡаза ике, үлем бер.
* Ҡазаланған малын ашар,
  Ауырыған йәнен ашар.
* Ҡайһы ерең ауыртһа, йәнең шул ерҙә.
* Ҡаҡшаған теш төшмәй ҡалмаç.
* Ҡара ерҙең ҡарыны киң[394].
* Ҡараңғы ҡәберҙә мәңге ятҡансы,
  Яҡты донъяла бер көн тороуың артыҡ.
* Ҡарсыҡ булғансы, балсыҡ бул.
* Ҡарт ағас бөгөлмәç,
  Ҡарт ағасты эйеү көс.
* Ҡарт алаша бураҙнаны боҙмай.

* Ҡарт алашаны ҡамыт һуҡмай.

* Ҡарт кешенең байлығы – тамағы ла таяғы.

* Ҡарт кешенең ҡаны юҡ (өшөтә).

* Ҡарт хәтер – тишек иләк.

* Ҡарт ат күндәм була.

* Ҡарт янында ҡарттарса, йәш янында йәштәрсә бул.

* Ҡарттан көлгәнсе, эттән көл.

* Ҡарттар ҡара аҡылға бай,
Йәштәр яңы аҡылға бай.

* Ҡартты ҡәҙерлә, үҙең дә ҡартайғас ҡәҙер күрерһең.

* Ҡартайған ат эшкә ярамаҫ.

* Ҡартайған эт юҡҡа өрмәй.

* Ҡартайғаныңды үҙеңдән йәшкә ҡарап бел.

* Ҡартайғас күңел йомшара.

* Ҡартайғас, ҡарсығың да ҡырын ҡарай.

* Ҡартайыу өсөн аҡса кәрәкмәй.

* Ҡартлыҡ көндә ярлылыҡ яман.

* Ҡартлыҡ ҡурҡыныс түгел, үлем ҡурҡыныс.

* Ҡартлыҡ таяҡҡа атландыра.

* Ҡартлыҡта һөнәрең бер булһын,
Берәгәйле булһын.

* Ҡартлыҡта юҡлыҡ бирмә,
Йәшлектә үлем бирмә.

* Ҡарый белгәнде бәрей белмәҫ.

* Ҡатын ғүмере – ҡырҡ йыл.

* Ҡоро һөйәктә[395] май булмаҫ.

* Ҡот ҡойҙороу менән ҡот ҡунмай.

* Ҡул һындырып, ҡул ялғанмаҫ.

* Ҡулымдың яраһы ең эсендә,
Башымдың яраһы бүрек эсендә.

* Ҡунаҡ әйтеп килмәҫ,
Үлем һорап килмәҫ.

*Вариант:* Ҡунаҡ менән әжәл һорап килмәҫ.

* Ҡурҡаҡлыҡ үлемдән ҡурғамай.

  *Вариант:* Ҡурҡыу әжәлдән ҡотҡармай.

* Ҡутыр ҡулдан йоғор.

* Ҡутыр ҡулдан йоға,
  Таҙ түбәтәйҙән йоға.

* Ҡутырҙы тырнаһаң аҙыр.

* Ҡыҙылсаға ҡыҙыл ҡор[396].

* Ҡырҡ йыл ҡырғын булһа ла, әжәл етмәй үлем юҡ.

* Ҡырҡ серекте аҫырағансы, бер таҙаны аҫыра.

* Ҡырҡҡа тиклем донъяны ҡырырмын,
  Ҡырҡтан һуң бары менән торормон.

* Ҡырҡта ат менмәгән, иллелә айғыр менмәҫ.

* Ҡәҙерле үлем ҡәҙерһеҙ тороуҙан артығыраҡ.

* Май сүлмәге майҙа ватыла[397].

* Мал ҡиммәт түгел, баш ҡиммәт.

* Мунсаға кермәһәң тир сыҡмай,
  Тир сыҡмаһа, сир сыҡмай.

* Мәйетте берәмләп сығаралар.

* Мәйеттең васыяты үҙс менән китә.

* Насарҙы күрмәҫ борон яҡшының ҡәҙере юҡ.

* Ныҡышҡан ауырыу йән ала.

* Оҙаҡ ауырыу мал алыр,
  Мал алмаһа, йән алыр.

* Оло аттың тире сыҡҡансы,
  Кесе аттың йәне сығыр.

* Оло белә булһаң, кесе лә була бел.

* Оло кешегә изгелек күрһәтмәгән,
  Олоғайғас, үҙе лә изгелек күрмәҫ.

* Оло кешене хөрмәтләһәң, хөрмәт күрерһең.

* Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.

* Ололарға хөрмәт ҡыл,
  Кеселәргә шәфҡәт ҡыл.

* Ололаһаң олоно, ололарҙар үҙеңде.

* Олоно оло, кесене кесе ит.

* Онотолған төш хәйерле булыр.
* Өйгә ингән ҡоро сыҡмаç,
Түргә ингән кире сыҡмаç.
* Өйөңдө яҡшы һаҡла: ҡапыл ҡунағың килер,
Үҙеңде яҡшы һаҡла: ҡапыл әжәлең килер.
* Паҡлыҡ һөйгән һау булыр.
* Самалы ашаған һау булыр.
* Саф һауа – тәнгә дауа.
* Серле үлмәç, сирле үлер.
* Сир аяҡ аçтында.
* Сир ҡулдан йоғор, тымау – тындан.
* Сир үҙ ҡулы менән тота.
* Сир сирҙе баçыр.
* Сирҙең береһе лә яҡшы түгел.
* Сирле битен себен тешләй.
* Сирле үлмәй, әжәле еткән үлә.
* Сирле, сирлебнең холҡо – кирле-мирле.
* Сирлегә йәйге селләлә лә һыуыҡ.
* Сирлегә үлем күрше.
* Сирләмәйенсә һаулыҡтың,
Ҡартаймайынса йәшлектең ҡәҙерен белмәçһең.
* Сыҡмаған йәндә өмөт бар.
* Сәләмәт тәндә – таҙа аҡыл.
* Тай хәлен ат белмәй,
Ауырыу хәлен ят белмәй.
* Таң йоҡоһон йоҡлаған – бәхетен йоҡлаған.
*Вариант:* Йоҡлағанға йоҡмаған.
* Таçтар тотоп торғанға таçтамал[398].
* Таяҡтың тайҙай көсө бар (ҡарт кеше өсөн).
* Тере тереклеген итер.
* Терелтһә – имсенән,
Үлтерһә – алланан (күрәләр).
* Терегең ҡәҙерен бел,
Үленең ҡәберен бел.

* Теш һыҙлауына айыу ҙа түҙмәй.
* Тир менән сир сыға.
* Төшөңә ышанма, көсөңә ышан.
* Төштө изгегә юраһаң, изгегә китер.
* Туҡһан билең бөкөрәйтер,
Ике күҙең секерәйтер.
* Тупрағың ҡайҙа яҙған булһа, үлемең шунда.
* Тыны бөткәндең көнө бөткән.
* Тыныс йәшәү теләһәң, телеңде тый,
Оҙаҡ йәшәргә теләһәң, ауыҙыңды тый[399].
* Тыуа белгән тора белә.
* Тыумаҡтан ҡалмағанды, үлмәктән ҡалмаҡ юҡ.
* Тыуым көн һорап килмәгән кеүек,
Үлем дә көн һорап килмәй.
* Тәмәкесенең эсе лә яна, кеçәһе лә яна.
* Тән ауырыһа, йән ҡурҡа.
* Тән ҡартая, йән ҡартаймай.
* Тән сырхауы – күп ашау,
Күңел сырхауы – күп һөйләү.
* Тәне ғәриптән көлгәндең йәне ғәрип.
* Тәне ҡаҡсаның йәне көр.
* Тәне һауҙың йәне һау.
* Тәнәй* аяҡҡа баçҡанда, бабай таяҡҡа ҡала.
* Тәңре көнө тарынан да күп[400].
* Утыҙға тиклем үлем артыңдан йөрөй,
Утыҙҙан һуң – алдыңда.
* Утыҙҙа ир – ил күрке.
* Утыҙҙа ир ут баçыр.
* Утыҙында уҡ атмаған ҡырығында ҡылыс сапмаç.
* Уфтанмаç кеше ҡартаймаç.
* Үҙемсе* кеше үлемдән ҡурҡыр.
* Үҙең ҡарт булһаң да күңел йәш.
* Үҙең һаҡланмаһаң, хоҙай һаҡламаç.

* Үҙәклегә үлем бар.
* Үкенмәгеҙ үлгәнгә, түҙем бирһен ҡалғанға.
* Үлгән артынан үлеп булмай.
* Үлгән йәндә оят юҡ, таптыра ла, тарттыра.
* Үлгән кешенең малына үлгән йылан башын күтәрә.
* Үлгән кешенән ҡурҡма, тереләрҙән ҡурҡ.
* Үлгән һыйыр һөтлө булыр.
* Үлгән әйләнеп ҡайтмаҫ.
* Үлгәнгә үлем, ҡалғанға түҙем.
* Үлгәнде үкһеп ҡайтарып булмай.
* Үлгәндән бары ла ҡала,
  Ҡалғандың йөрәге яна.
* Үлгәндән һуң илағансы, үлмәҫ борон сәбәп ҡыл.
* Үлгәндән һуң тәүбә юҡ.
* Үле малы үрәләһәң* дә тормаҫ.
* Үле тупраҡ һыуыта.
* Үлеккә гүр табылыр,
  Тереккә ер табылыр.
* Үлем алдынан ҡырмыҫҡаға ҡанат үҫә[401].
* Үлем «бай», «ярлы» тип тормай.
* Үлем бер булыр, уйын икс булыр.
* Үлем йоҡоһо баҫа.
* Үлем күҙ менән ҡаш араһында.
* Үлем ҡартына-йәшенә ҡарамай.
* Үлем ҡаршында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ.
* Үлем ҡаты:
  Барҙың малын сәстерер,
  Юҡтың – артын астырыр.
* Үлем үкенесһеҙ булмай.
* Үлем – һәр кешенең ҡунағы.
* Үлем яйына ҡарамай.
* Үлемгә кәртәләр юҡ.
* Үлемде көтмә, үҙе килер.

* Үлемдән ары юл юҡ.

* Үлемдән ҡасып ҡотолоу юҡ.

* Үлемдән ҡасҡан – үлемен тапҡан.

* Үлемдән ҡурҡҡан – үлгән менән бер.

* Үлемдән ҡурҡмаған – терек,
Үлемдән ҡурҡҡан – тере үлек.

* Үлемдән ҡурҡһаң, донъяла йәшәмә.

* Үлемдән оят көслө.

* Үлемдән хурлыҡ яман.

* Үлемһеҙ донъя юҡ,
Үтелгеһеҙ (әтәлгеһеҙ) йылға юҡ.

* Үлеп барған үләнгә йәбешер.

* Үлер ауырыуҙың үлгәне яҡшы,
Ҡалған күңелдең тынғаны яҡшы.

* Үлергә сәғәт бар, үлмәҫкә сәбәп бар.

* Үлеүсенең көнө етмәһә,
Үлтереүсенең ҡулы етмәҫ.

* Үлмәктән ҡалмаҡ юҡ.

* Үлмәҫ йән булмаҫ,
Кәмемәҫ һыу булмаҫ.

* Үлмәҫ йәнгә бер сәбәп.

* Үлмәҫкә – үле балыҡ.

* Үлһен тигән үлмәй.

* Үлһәң, ҡәберең киң булһын.

* «Үләм» тигәнгә үлем юҡ,
«Торам» тигәнгә йөрөм юҡ.

* «Үләм-үләм» йөҙ йәшәй.

* Үләткә үлем юҡ,
Яҡшыға йөрөм юҡ.

* Үләһе ауырыуға им табылмаҫ.

* Үләһе мал йығылыр ерен эҙләп йөрөр.

* Үләһе мал һаҙға инер.

* Үпкә ауырыуына – саф һауа.

* Үткән ғүмер – аҡҡан һыу.

* Үткән ғүмер ҡайтмаç,
Ҡалған хәтер табылмаç.

* Үткән ғүмер – иçкән ел.

* Үткән ғүмер – һүнгән күмер.

* Үткән килмәç, үлгән терелмәç.

* Фани донъя ике килмәç.

* Фәрештә менән шайтан ғына ҡартаймай.

* Хайуан үлһә, ҡарға шат,
Әҙәм үлһә, мулла шат[402].

* Халыҡ һаулығы – дәүләт байлығы[403].

* Хеҙмәт ҡанды тарата,
Һаулыҡ хеҙмәт ярата.

* Һаҡланған һаулыҡҡа туйған.

* Һаҡланғандан үлем дә һаҡлана.

* Һанаулы көн тиҙ үтер.

* Һаңғырауҙың һүҙе юҡ.

* Һары мәтрүшкә алтмыш төрлө ауырыуға,
Көрән мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуға дауа.

* Һарыны һары ҡайтарыр[404].

* Һау булайым тиһәң, туя ашама, ҡуя аша.

* Һау кешегә көндә байрам.

* Һаулығың – байлығың.

*Вариант:* Һаулыҡтан да ҙур дәүләт юҡ.

* Һауыҡмаған ауырыуҙың үлгәне яҡшы.

* Һикһәндә һикерә алмаçһың.

* Һимеҙ ҡуйҙың ғүмере ҡыçҡа.

* Һимеҙ йән – арыҡ йән.

* Һуҡырҙың күҙе – бармаҡ, юлдашы – таяҡ.

* Һуҡырҙың күҙе күрмәһә, күңеле һиҙә.

* Һауҙың ҡәҙере шишмә ҡороғас беленер.

* Һыуыҡ ҡолаҡтан алыр.

* Һәр ауырыуҙың үҙ име бар.

* Һәр дарыу, самаһынан уҙһа – ағыу.

* Һәр кемдең башы үҙенә ҡиммәт.
* Шығырҙауыҡ ағас ҡырҡ йыл ултырыр.
* Шығырҙыҡ ағас ныҡ була.
* Шығырҙауыҡлы ағас оҙаҡ сыҙар,
Шығырҙамаған тиҙ һынар.
* Ырыҫ ҡасһа ла, тыуыш ҡасмаҫ.
* Эсең ауыртһа, аҙ аша.
* Эсең ауыртһа, ауыҙың тый,
Күҙең ауыртһа, ҡулың тый.
* Эсең китһә, көс китә.
* Эт йүгерегеn төлкө һөймәҫ,
Ауырыу кеше көлкө һөймәҫ.
* Эт өрөп, егет йөрөп, ҡыҙ көлөп ҡартая.
* Эттең тынынан, бесәйҙең йөнөнән һаҡлан.
* Эшләп үлмәҫһең, сирләп үлерһең.
* Әҙәм башы таш түгел.
* Әҙәм тыуыуына ышана, үлеменә ышанмай.
* Әжәл аяҡ аҫтында.

*Вариант:* Әжәл күҙ менән ҡаш араһында.

* Әжәл килһә, аҡыл ҡасыр.
* Әжәл әйтеп килмәй.
* Әжәлгә тейгән ауырыуға дарыу килешмәй.
* Әжәлдән аҡса биреп ҡотолоп булмай.
* Әжәл еткән бер үлер,
Әжәлдән ҡурҡҡан көндә үлер.
* Әжәлең етмәй үлмәҫһең.
* Әжәлең етһә, ауырымай үлерһең.
* Әжәлең етһә, әмәлең ҡырын китер.
* Әжәлһеҙ үлем юҡ.
* Әсенән әсе ни әсе?
– Үлем әсе[405].
* Юрғаның ҡәҙерен, менгәс, белерһең,
Яҡшының ҡәҙерен, үлгәс, белерһең.
* Яҡшылыҡ ирҙе йәшәртә.

* Яҡшы кеше ҡартайһа ла, аҡылынан яҙмаҫ,
Яҡшы ат ҡартайһа ла, йөрөшөнән яҙмаҫ.

* Яман ауырыуға – яҡшы аш.

* Яман ерҙә ятһаң, яман төш күрерһең,
Яҡшы ерҙә ятһаң, яҡшы төш күрерһең.

* Яман йөрөмдән яҡшы үлем артыҡ.

*Вариант:* Ялған тормоштан хаҡ үлем яҡшы.

* Яман кеше йән ҡыҙғанмаҫ.

* Яратҡанға йән биргән.

* Ярлы булһаң, дуҫ ҡаса,
Ҡарый булһаң, ырыҫ ҡаса.

* Ярлылыҡтан ҡартлыҡ яман.

* Ярты ғүмерең йоҡлап уҙыр.

* Ятҡан ауырыу түгел, баҡҡан ауырыу.

* * *

* Аҙ ауырыу, анһат үлем (бир).

* – Алтмыш, һиңә ни ҡылдым?
– Аяғыма бау һалдың, ҡолағыма шау һалдың.
– Етмеш, һиңә ни ҡылдым?
– Уртымдағы теште алдың, башымдағы һушты алдың.
– Һикһән, һиңә ни ҡылдым?
– Маңлайҙағы күҙҙе алдың, бурбайҙағы биҙҙе алдың.
– Туҡһан, һиңә ни ҡылдым?
– Ауыҙҙағы һүҙҙе алдың, илтеп ләхеткә һалдың.

* Алтын башым һау булһа,

Алты көндән әҙәм булырмын, тигән йылан.

* Арымдан бирем яҡын[406].

* Ауыр тупрағың еңел булһын[407].

* Ауырткас ат типте ни, бейә типте ни[408].

* Ашын ашаған – йәшен йәшәгән.

* Бөгөн бар, иртәгә юҡ.

* Бөтә кеше ожмахҡа керһә, тамуҡ буш булыр.

* Ғүмер уҙа, кейем туҙа.

* Ғүмере уҙған, күне туҙған.

* Донъя бер беҙҙән генә ҡалмаған.

* Етмеш йәш, имеш,
Артҡа кит, имеш.

* Заман үҙенекен итә (ҡартайта).

* Илле итәктән алды,
Алтмыш аяҡтан алды,
Етмеш йүгән һалды,
Һикһән һикегә йыҡты.
Туҡһан туңҡайтып һалды.
Йөҙ өҙөп алды.

* Иртәгә үләһемде белһәм, бөгөн ҡәбер ҡаҙып ҡуйыр инем.

* Иҫән булһын был башым, тағы үҫер был сәсем.

* Йоҡо биреп, ҡайғы алдым.

* Йөҙ йәшә, йөҙөм аша!

* Йөҙ йәшәмәһен, теүәл йәшәһен.

* Йүкә ҡайышты өҙгән.

* Йыртылһа, ямауы өҫтөндә[409].

* Йәне йәннәттә булһын!

* Йәшем етте ҡыр(ы)ҡҡа,
Эшем китте шырыҡҡа[410].

* Йәшлеген йәшен атҡан.

* Көнөм өсөн көн тартамын.

* Күҙең менән ҡуша ҡартай[411].

* Ҡартайғанда тыртайған.

* Ҡартлыҡ етте – шатлыҡ китте.

* Ҡартлыҡ – түгел икән шатлыҡ.

*Вариант:* Ҡартлыҡ – шатлыҡ түгел, этлек.

* Ҡарттар элек тыуған, йәштәр белеп тыуған.

* Ҡасан да бер үлем.

* Ҡырҡ йәштә ҡырма бүрек кейермен,
Илле йәштә ил ағаһы икәнмен,
Алтмыш йәштә алғыр бүре заманым,
Етмеш йәштә ерән төлкө сағым,
Һикһән йәштә һикереп атҡа менәлмәм,
Туҡһан йәштә туңҡайып ятһам, торалмам.

* Ҡыу тирәк талға һөйкәлгән – ҡырҡ йыл ғүмер иткән.

* Өнөмдәге төшөмдә.

* Үгеҙ һыуҙан ерәнгән,
Ауырыу һауҙан ерәнгән.

* Үлгәнгә үлем бирһен,
Ҡалғанға түҙем бирһен.

* Үләһе ҡортҡа үлә алмаған,
Китәһе ҡыҙ китә алмаған.

* Сирләмәгән сир тапҡан, сирмеш* сире йәбешкән.

* Сиртһәң, ҡаны сығырға тора.

* Тыныс йоҡо, тәмле төш!

* Эткә эт үлеме.

* Этҡолдоң башы оло,
Моратшаның йәше оло.

* Әҙәм булды тигәс, әрәм булды.

* Әллә йүкә өҙөлә, әллә ҡайыш өҙөлә[412].

* Әмәлен тапҡан Лоҡманға әжәле мең йылға миһләт* биргән.

* Яҡты донъянан кем туйған?

* Яҡшыға йөрөм юҡ, яманға үлем юҡ.

### 3. Бәхет, шатлыҡ, ҡайғы, бәлә-ҡаза, рәхәт-михнәт, өмөт-теләк

* Ағиҙел ҡаты аҡһа ла, ҡомо ҡалыр,
Хәсрәт үҙе баҫылһа ла, моңо ҡалыр.

* Аҡ өҫтөндә аҡ яҙыу беленмәҫ,
Аҡ өҫтөнә ҡара төшһә, юйылмаҫ.

* Аҡсаңды юғалт, өмөтөңдө юғалтма.

* Алама тай батып үлер ер эҙләр.

* Алдағы көн алдырыр, алдан иҫәп булмаһа.

* Алдан һөйләнһәң, артынан көйөнөрһөң.

* Алдырыр көн яҙҙырыр.

* Аңғармаған түңгәк сана ауҙарыр[413].

* Артыҡ шатлыҡ һағыш килтерер.

* Ата балаһы ҡайғыға сыҙаһа ла, шатлыҡҡа сыҙамаҫ.

* Ат баҫҡанды ер белә[414].

* Ат башына көн килһә*,
Ауыҙлығы менән һыу эсер;
Ир башына көн килһә,
Итеге менән һыу кисер.

* Аусы ла ҡапҡанға эләгер.

* Ауырығанға йоҡо юҡ,
Күрмәгәнгә ҡайғы юҡ.

* Ауырыу аяҡтан, ҡайғы йөрәктән алыр.

* Ауырыу күҙгә сүп төшә.

* Ашағандан мал бөтмәҫ,
Ҡаза килһә, мал етмәҫ.

* Аяҙ көндөң йәшененән ҡурҡ.

* Аяҡ-ҡулың өҙөлһә лә, өмөтөң өҙөлмәһен.

* Байтирәктең ҡыҙығын ыжылдаған ел күрә,
Айҙай күлдең ҡыҙығын ҡаңғылдаған ҡаҙ күрә.

* Байыған бәхетле түгел, йомарт бәхетле.

* Балын яратһаң, ҡортон да ярат.

* Барға бәлә күренмәҫ.

* Баш киткәндә, ҡаш ҡайғыһы булмай.

* Башҡа бәлә килде тип, башты ташҡа ороп булмай.

* Башҡа килер ҡаза ирҙән аҡыл таптырмаҫ.

* Башҡа килер ҡаза малға килер.

* Башта ауырлығын күрһәң, һуңынан еңелгә килер.

* Башыңа бәлә төшһә, туғаныңды танырһың.

* Башыңа төшһә, бағанаға ла сәләм бирерһең.

* Башыңа төшһә, башмаҡ булырһың.

* Бер булмаған – гел булмаған.

* Бер бәләгә ҡалһаң, башың бәләнән сыҡмаҫ.

* Бер йыл тартай һимерә,
Бер йыл бүҙәнә һимерә.

* Бер кеше бәхете икенсегә булмай.

* Бер кеше бәхеткә менһә,
Ҡырҡ кеше тәхеткә менә.

* Бер кирегә китһә, гел кирегә китә.

* Бер көйөнһәң, бер һөйөнөрһөң.
* Бер рәхәте, бер михнәте.
* Бер хата икенсеһен тарта.
* Бер әсеһен күрмәйенсә,
  Бер сөсөһөн күрмәҫһең.
* Берҙең бәләһе меңгә тейә.
* Бесәйҙең өмөтө – сысҡан.
* Болотло көндөң бер аяҙы була.
* Бөгөнгөнөң иртәгәһе бар.
* Бөркөткә ымһынып, турғайҙан мәхрүм ҡалма.
* Буй етмәгән ергә уй етә,
  Ҡорал етмәгән ергә хыял етә.
* Буй етмәҫтәй бейектә,
  Ҡул етмәҫтәй алыҫта.
* Булмаҫтайға ышанма.
* Был донъяның рәхәте сабый саҡта.
* Бәйел аҙмай башҡа бәлә килмәй.
* Бәлә ағас башынан йөрөмәй,
  Әҙәм башынан йөрөй.
* Бәлә аяҡ аҫтынан сыға.
* Бәлә – баш өҫтөндә,
  Ҡаза – ҡаш өҫтөндә.
* Бәлә бәләгә ҡул бирә.
* Бәлә бәхеттән тиҙерәк йөрөй.
* Бәлә көткән күптән бәләле.
* Бәлә ҡыңғырау тағып килмәй.
* Бәләкәс таш баш ярыр.
* Бәлә «мин киләм» тимәҫ.
* Бәлә яңғыҙ йөрөмәй.
* Бәләне һатып ал,
  Һатып алмаһаң, атып ал.
* Бәләһе артынан ҡазаһы килер.
* Бәхет алға барғанда, мал арты менән керә, имеш.
* Бәхет алтын байлығында түгел, аҡыл байлығында.

* Бәхет балыҡ түгел – ҡармаҡ менән тотоп булмай.
* Бәхет башы – тәүфиҡ.
* Бәхет булһа, талиғ* кәрәкмәй.
* Бәхет ерҙән сыҡмаҫ, тирҙән сығыр.
* Бәхет ишле йөрөмәй,
  Бәлә яңғыҙ килмәй.
* Бәхет килерҙәй булһа, ҡаҡҡан ҡаҙығың да үҫә.
* Бәхет ҡош түгел, бер ысҡынһа, тотоп булмай.
* Бәхет ҡошо ҡунғанда беленмәй, осоп киткәс, беленә.
* Бәхет малда түгел.
* Бәхет матурлыҡҡа ҡарамай.
* Бәхет саҡырһаң да килмәй,
  Бәхетһеҙлек ҡыуһаң да китмәй.
* Бәхет теләктә түгел, беләктә лә, йөрәктә.
* Бәхет янсыҡта түгел, ҡулда.
* Бәхетең булмаһа, тапҡан алтының да баҡырға әйләнә, ти.
* Бәхетең булһа, хур булмаҫһың.
* Бәхетлененң кәмәһе ҡоронан йөрөй.
* Бәхетлененң әтәсе лә күкәй һала.
* Бәхетте сепрәккә төрөп йөрөтмәйҙәр.
* Бәхетте һатып алып булмай.
* Бәхетһеҙ кеше бойҙай сәсһә, арпа үҫер.
* Бәхетһеҙгә ваҡытһыҙ.
* Бәхетһеҙҙе ат өҫтөндә эт талар.
* Бәхетһеҙҙең зары күп.
* Бәхетһеҙлек эсеүҙән,
  Эсең-бауырың шешеүҙән.
* Бәхетһеҙлекте күрмәгән –
  Бәхеттең ни икәнен белмәгән.
* Бәхетһеҙлектең башы – ялҡаулыҡ.
* Бәхетһеҙлектән ҡурҡҡан бәхет күрмәҫ.
* Диуанаға ҡайғы ла байрам.
* Донъяның рәхәтенән михнәте күп.

* Дарья төбөндәге ынйынан тау башындағы таш артыҡ.

* Дарьяға төшкән – йыланға һарылған.

* Ҙурҙы уйлап, әҙҙән ҡоро ҡалма.

* Еңелде өмөт иткән,
Бәхете кире киткән.

* Ер һыуға туймай,
Ут утынға туймай.

* Иҙел менән боҙға таянма.

* Ике бәхеткә – бер ҡайғы.

* Ике рәхәт бергә килмәй.

* Ике һағыш – бер ҡайғы.

* Илағандың – бер ҡайғыһы,
Көлгәндең – биш ҡайғыһы.

* Имгәк аяҡ аҫтында.

* Имгәк игеҙе менән.

* Ир башына килһә килһен,
Ил башына килмәһен.

* Ир имгәккә ҡалһа ла ирлек итер.

* Ир үҙенән күрер,
Ирлекһеҙ юлдашынан күрер.

* Ирҙе михнәт еңә алмаҫ.

* Иртәгәһе тауыҡтан бөгөнгө йомортҡа артыҡ.

* Иртә уңмаған төш уңмаҫ,
Төш уңмаған кис уңмаҫ,
Кис уңмаған һис уңмаҫ.

* Иҫерек иҫендәген, зарлы йөрәгендәген һөйләр.

* Йоҡосо кеше бәхетһеҙ булыр.

* Йөрәк яна, төтөнө башҡа ҡаба.

* Йөрәге барҙың теләге бар.

* Йүнле үҙенән күрер,
Йүнһеҙ кешенән күрер.

* Йыраҡҡа бар, яҡындан сап.

* Йән бар ерҙә ҡаза бар.

* Йән әрнегәндә, йәш көслө,
Ут сыҡҡанда, һыу көслө.

* Йәне барҙың өмөтө бар.

* Йәне көйгән тәңреһен ҡарғар.

* Йәне әсегән ишәк атты уҙыр.

* Кем итәгенә ут төшһә, шуныҡы яна.

* Кеше бәхете кешегә булмай.

* Кеше гүренә кеше кермәй.

* Кеше зары кешегә йоҡмай.

* Кеше көнөн кеше белмәй.

* Кеше ҡайғыһы йыраҡта, үҙ ҡайғың йөрәктә.

* Кеше ҡайғыһы кештәктә.

* Кеше булмаған кеше өсөн
Кеше ҡайғыһы төштән һуң.

*Вариант:* Кеше ҡайғыһы кешегә иртә инә, кис сыға.

* Кеше ҡайғыһына ҡыуанма, ҡыуанысына ҡыуан.

* Кеше ҡазаһына ҡыуанма, үҙеңдеке түтәлдә.

* Кеше ҡулындағына нәфсеңде һуҙма.

* Кеше ҡулындағы һөйәк ҙур күренер.

* Кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына төшмәһә.

* Кешегә асҡан ҡайғы – ярты ҡайғы.

* Кешене һағыш бөтөрә.

* Кешене эш бөтөрмәй, ҡайғы бөтөрә.

*Вариант:* Кешене эш ҡартайтмай, ҡайғы ҡартайта.

* Кешенең кешелеген ҡыйынлыҡ килгәндә белерһең.

* Кешенең хәле кешегә иртә керә,
Кис сыға, моңһоҙ булһа тыңлаусы.

* Кешенән кеше кәм түгел
Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел.

* Килер ҡаза ҡысҡырмай килер.

* Килер ҡазаны белмәҫһең.

* Көйгән икмәк әсеһе йөрәктән китмәй.

* Көйөклө көйөк ашар.

*Вариант:* Көйөк ашаған көйөклө булыр.

* Көйә кейемде ашай,
Көйөк кешене ашай.

* Көл булмай гөл булмаçһың.

* Көлгән ауыҙ күрекле.

* Көлкө көлә килер,
Артыңдан ҡыуа килер.

* Көлкө күңел һимертә.

* Көлкөнө күп һуҙһаң, күңелһеҙгә әйләнә.

* Көлөү ғүмерҙе оҙонайта.

* Көн көнгә оҡшап тыумаç,
Көн һайын ҡояш булмаç.

* Көндә майлы бутҡа булмай.

* Көндән яҡты нәмә юҡ, ҡара болот баçмаһа.

* Көтә-көтә таш та кителә.

* Күҙ йәшенә быуа юҡ.

* Күҙ күрмәһә, көйөнөсө юҡ.

* Күктән көткән – ерҙә табылған.

* Күл ҡамышһыҙ булмай,
Күңел һағышһыҙ булмай.

* Күлдән һурпа эскән – күпте күргән.

* Күңелең киң булһа, бәхетең кәм булмаç.

* Күп көлгән күп илар.

*Вариант:* Күп уйнаған күп илар.

* Күп күргәндең көнө артыҡ.

* Күп уйын муйын һындырыр.

* Күп һөйләмә – ауыҙың ҙурайыр,
Күп көлмә – тешең ыржайыр.

* Күпте көтөп, әҙҙән буш ҡалма.

* Күпте теләгән – берҙән ҡоро ҡалған.

* Күрекле тыума, бәхетле тыу.

* Күрер күҙең күрмәç була, килер ҡаза булғанда.

* Ҡаза аҡыл таптырмай.

* Ҡайғы йөрәккә май булмаç.

* Ҡайғы күрмәгән ҡыуана белмәҫ,
Көйөнөс күрмәгән һөйөнә белмәҫ.

* Ҡайғы ҡайғы ҡатына, шатлыҡ шатлыҡ башына.

* Ҡайғы ҡайғыны баҫа.

* Ҡайғы ҡайҙа барһаң да артыңдан ҡалмай.

* Ҡайғы ҡартайта.

* Ҡайғы-шатлыҡ – бер туған.

* Ҡайғынан һуң ҡыуаныс яҡшы,
Ҡыуаныстан һуң ҡайғы яман.

* Ҡайғыны ғәйрәтле еңә.

* Ҡайғыңды ҡайғы күргәнгә һөйлә.

* Ҡайғырыуҙан ҡайғы кәмемәҫ,
Шатланыуҙан шатлыҡ кәмемәҫ.

* Ҡайғыһыҙҙан һаҡ бул, ҡайғылыға яҡ бул.

* Ҡайҙа барһаң да бәхетең булһын.

* Ҡайын һыуы бал булмаҫ,
Ҡайғы йөрәккә ял булмаҫ.

* Ҡанаты ҡайырылған ҡош осмаҫ.

* Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай.

* «Ҡар яуҙы» тип ҡыуанма: һуңынан бураны булыр.

* Ҡара көндә дуҫ булмаҫ.

* Ҡара көнөңдә ҡарға алдына уләкһә һорап барырһың.

* Ҡармаҡты һалған һайын балыҡ эләкмәҫ.

* Ҡасҡан ҡыҙҙы ҡарағы килә,
Япҡан ашты ашағы килә.

* Ҡороған ағастан алма көтмә.

* Ҡуҙҙы ҡуҙғама – ҡулың бешер, уты өҫтөңә төшөр.

* Ҡунаҡ килһен, ҡаза килмәһен.

* Ҡыйынлыҡ күрмәгән тыныслыҡты белмәҫ.

* Ҡыҫыр көйөккә көйөнмә.

* Ҡыҫыр һыйырҙан һөт көтмә.

* Маҡтансыҡ үҙен маҡтап ҡыуаныр,
Бәхетһеҙ үҙен алдап йыуаныр.

* Мал ҡаҙаһы баш ҡаҙаһы түгел.

* Мең ҡайғы бер эш бөтөрмәҫ.
* Мең ҡайғынан бер эш яҡшы.
* Михнәт барҙа рәхәт бар,
Хеҙмәт барҙа хөрмәт бар.
* Михнәт көйрәтә, аҡылға өйрәтә.
* Михнәт күрмәгән рәхәт тә күрмәҫ.
* Михнәт күрмәгән рәхәттең ҡәҙерен белмәҫ.
* Моңло кеше моңон һөйләгәндә, моңһоҙҙоң башы ауырта.
* Мәшәҡәт һаҡал ағарта, ҡайғы сәс ағарта.
* Мәңге һүнмәҫ ут булмаҫ.
* Өмөт өҙөлмәһә, ризыҡ өҙөлмәҫ.
* Өмөтлө көн күрер,
Өмөтһөҙ гүр керер.
* Өмөтлөнөң ҡояшы икәү.
* Өмөтлөнөң үҙ дәүләте үҙендә.
* Өмөтөңдө өҙмә, күңелеңде боҙма.
* Өмөтһөҙгә ризыҡ юҡ.
* Өмөтһөҙ йәшәмәҫ.
* Өмөтһөҙ кеше – өлөшһөҙ кеше.
* Өмөтһөҙ – шайтан.
* Рәхәт менән михнәт бер түгел.
* Рәхәт төбө – көйөнөс,
Михнәт төбө – һөйөнөс.
* Рәхәтен яраткас, яфаһына ла түҙ.
* Себенле ергә серәкәй оялай.
* Сыҡмаған ҡояшҡа ҡыҙынма.
* Тамсынан ҡасҡан яуымға юлығыр.
* Таңдағы тауыҡтан бөгөнгө йомортҡа артыҡ.
* Тауҙағы тайҙан яҡындағы ҡойроҡ яҡшы.
* Тауҙай талабың булғансы,
Бармаҡтай яуабың булһын.
* Тауҙай тән биргәнсе,
Бармаҡтай бәхет бир.

* Ташҡа талау теймәҫ.
* Ташҡан түгелер, шашҡан көйөнөр.
* Тауыҡ төшөнә тары керә.
* Теләй белһәң – теләк,
  Теләй белмәһәң – имгәк.
* Теләк булһа, йөрәк етә.
* Теләкле ергә боҙ яуыр.
* Теләк ҡоторта, оят тыя.
* Теләк – эштең яртыһы.
* Теләге булһа, эше табылыр.
* Тешләнмә, тешең бөтөр.
* Тормош өйрәтә, өйрәтмәһә, көйрәтә.
* Тотолмаған байлыҡ – беләк буйлығы.
* Төҙәмәйенсә атҡан уҡ бәхетһеҙҙең башына төшөр.
* Төлкө тотамын тип, ҡуяндан ҡоро ҡалма.
* Төлкө төшөнә тауыҡ керә.
* Төтөндән ҡотолам тип, утҡа төшмә.
* Тәүфиҡ – бәхет башлығы.
* Тәүфиҡҡа бәхет эйәрә.
* Уйламай баҫҡан – ҡайғыға батҡан.
* Уйламаған ерҙән йылан сыға.
* Уйын бер булыр,
  Уймаҡ ике булыр.

  *Вариант:* Уйындан уймаҡ сығыр.
* Уңмағанды ҡыума.
* Урман кейекһеҙ булмаҫ,
  Әҙәм көйөкһөҙ булмаҫ.
* Уртаҡ аттан тай артыҡ,
* Ут сыҡҡанда һыу булмай.
* Ут төшкән ерендә яныр.
* Утты кем тотһа, шул көйөр.
* Уты һүнһә лә, киҫеүе ҡала.
* Үлгән арыҫландан тере сысҡан артыҡ.

* Үлгән ҡарсығанан тере һайыҫҡан артыҡ.
* Үләһе мал ҡоҙоҡ тирәһендә урала.
* Фәлән ерҙәге фирүзә таш йөҙөккә ҡаш була алмай.
* Хәйерһеҙ дәүләттән хәйерле ҡаза артыҡ.
* Хикмәт бар ерҙә михнәт бар.
* Хыял-маҡсат тау артында,
  Бәлә-ҡаза ишек артында.
* Һағыш бер кемгә лә һары май түгел.
* Һөлөк кем аяғында, шул үҙе ала.
* Һуҡыр таяғын һөйләй,
  Аҡһаҡ аяғын һөйләй.
* Һурпа теймәҫ ерҙән ҡалъя өмөт итмә.
* Һыуға батҡан кешегә ямғыр ҡурҡыныс түгел.
* Һәр кем ауыртҡан ерен һөйләй.
* Һәр кем үҙ бәхетенә үҙе сәбәп.
* Һәр кемдең үҙ ҡайғыһы үҙенә еткән.
* Һәр тәгәрәгән таш баш ярмай.
* Һуҡырҙың теләгәне ике күҙ.
* Һәр кеше яҡын була именлектә,
  Янына кеше килмәй бөлгөнлөктә.
* Шатлыҡ килмәй ҡайғы китмәй.
* Шатлыҡ күрһәң шашма,
  Ҡаза күрһәң аҙашма.
* Шатлыҡ эсендә ҡайғы бар,
  Ҡайғы эсендә шатлыҡ бар.
* Шатлығыңды шатланышырлыҡ кешегә һөйлә,
  Ҡайғыңды ҡайғырышырлыҡ кешегә һөйлә.
* Ырыҫы барҙың ырыҫы алда.
* Ырыҫ тырыш ҡулында.
* Ырыҫ арыҫландың ауыҙында, төрөкмәндең түрендә.
* Ырыҫы булған әҙәмгә хәйерһеҙ йәйҙән ҡыш артыҡ.
* Ысҡынған балыҡ суртан була.
* Ышанған ояла ҡош юҡ.
  Ышанған тауҙа кейек юҡ.

* Эттең бәхете аяҡ аҫтында.
* Эсең тулы ут булһа ла, кеше алдында «уф» тимә.
* Эскесе рәхәт табам, тип, михнәт табыр.
* Эсәгең өҙөлһә, эсеңдән ялға[415].
* Әҙәм көрләккә түҙмәй.
* Әҙәмде өмөт йәшәтә, ғәм ҡаҡшата.
* Әсе менән сөсөнө татыған белер,
  Алыҫ менән яҡынды юртҡан белер.
* Әсе хәсрәт – сөсө ҡайғы.
* Әсене татымаған сөсөнөң тәмен белмәҫ.
* Әсеһеҙ сөсө булмаҫ.
* Әүәл яфа күрмәй, һуңынан вафа килмәй.
* Әүәлгенең маҙаһын һуңғы күрер язаһын.
* Әүәлгенең шатлығы – ахырғының михнәте.
* Әүәлгенең михнәте – ахырының шатлығы.
* Юғалған ҡуйҙың ҡойроғо ҙур булыр.
* Яза – баш осонда, ҡаза – аяҡ аҫтында.
* Ялҡаулыҡ – ярлылыҡтың асҡысы,
  Тырышлыҡ – бәхет баҫҡысы.
* Яҡшы көндө өмөт иткән яман көнгә түҙер.
* Яҡшының көйөгө – баш яулығы кипкәнсе,
  Ямандың көйөгө – башы ергә еткәнсе.
* Янаһы өйҙән тараҡан күсә.
* Янғанды ямап булмай.
* Яралы үҙ яраһын үҙе белер.
* Яфа тартмай, вафа юҡ.

* * *

* Ағасҡа ла мен, ботаҡҡа ла ҡаҙалма.
* Айыуҙан ҡастым, бүрегә юлыҡтым.
* Алы булды, гөлө лә булыр.
* Асмайым – кем күрә,
  Һөйләмәйем – кем күрә (эсем тулы ҡайғы).

* Ауыҙ – ҡолаҡта, ҡолаҡ – йыраҡта.
* Ауыртҡан башҡа тимер таяҡ.
* Ауырһынған аҙапҡа осраған.
* Башыңа төшһә, белерһең.
* Бер йыландан ҡасып, икенсе йыланға һарылған.
* Берәү илай, берәү көлә.
* Берәү ҙә күктән төшмәгән.
* Берәү ҙә мөгөҙлө булып тыумай.
* Берәүҙә аш ҡайғыһы, берәүҙә баш ҡайғыһы.
* Биҙгәктән ҡотолған, зыяндашҡа* юлыҡҡан.
* Булмай икән булмағас, ҡалала сөсө күмәс.
* Бүре лә тук булһын, мал да ҡырылмаһын.
* Бәлә өҫтөнә бәлә.
* Бәләнән баш аяҡ.
* Бәхет өләшкәндә өйҙә булмаған.

*Вариант:* Бәхет өләшкәндә йоҡлап ҡалған.

* Бәхетһеҙгә – ваҡытһыҙ.
* Кем айғыры өсөн кем ҡайғыра?
* Көнөн ҡайғы, төнөн хәсрәт.
* Көтөп тор, көлдән көмөш булмаҫмы!
* Күктән юғары аҫмаҫтар,
  Ерҙән түбән күммәҫтәр.
* Күңел ни теләмәй, аҙыҡ ебәрмәй.
* Күрмәгәнгә күрһәтмәһен, күргәнгә түҙем бирһен.
* Күрмәгәндең күрәһе килә, күргәндең ҡоҫҡоһо килә.
* Күпте күргән, күтән һурпаһын эскән.
* Кәкрегә бөк(ө)рө.
* Кәмәгә менгәндең йәне үс төбөндә.
* Ҡазаға баш эйеп: «Килер ҡаза шуның менән бөтһөн!» – тиң.
* Ҡайҙа инде беҙгә һауыя, булһа булыр ожмахы.
* Ҡылған эшең кешегә, килгән сауабы үҙеңә.

* Мин күрмәгән аҙ ҡалды,
Бохарҙа бер таҙ ҡалды.

* Мыйыҡҡа үпкәләп йөрөгәндә, һаҡал сыҡты[416].

* Нахаҡ бәлә, юҡ яла.

* Өйҙән ҡасып урамға, урамдан ҡасып буранға эләккән.

* Өйрәк биргән – ҡаҙ көткән.

* Үткән менән түгел, көткән менән.

* Сихәт итмәгән, им-том итмәгән.

* Сөй өҫтөнә туҡмаҡ.

* Сүп өҫтөнә сүмәлә.

* Таҙы бөтһә лә, ҡоржоно бөтмәй.

* Тауҙай тырышлыҡ биргәнгә тарылай бәхет бир.

* Төтөндән ҡасҡан утҡа янған.

* Тауыҡҡа күҙ һалып, һарыҡтан ҡолаҡ ҡаҡҡан.

* Туңғанда тун кәрәк.

* Тышҡа сыҡҡан күк күргән,
Өйгә кергән мейес күргән[417].

* Уңһа – үҙенән,
Уңмаһа – кешенән (күрер).

* Уттан ҡотолдом, һыуға төштөм.

* Үлеп барған үләнгә тотонған.

* Хәйерле ҡаза булһын, арт аяғы таҙа булһын.

* Ырыҫҡалын* ашаған.

* Эсең янһа – боҙ яла,
Йөрәгең янһа – тоҙ яла.

* Эттән ҡасып, бүрегә ҡапҡан.

* Әллә алайым микән Мәхүпте,
Хоҙай бирмәҫ микән бәхетте!

* Яҡты көнөм ҡара төнгә әйләнде.

* Ямғырҙан ҡасып, буранға эләккән.

* Ямғырҙан ҡасып, дарьяға төшкән.

* Яр аҫтынан яу сыҡҡан.

# VI. ТӨРЛӨ ТЕМАҒА ҠАРАҒАН МӘҠӘЛДӘР

* Ағас балтанан ҡурҡа.

* Ағас башын ел алыр,
Күпер башын һыу алыр.

* Ағас үлеме балтанан.

* Ағастан япраҡ төшмәй тормай.

* Ағиҙелдең башы – Ирәмәл.

* Ағымға ҡаршы йөҙөү ауыр.

* Ай менән көн уртаҡ,
Йыр менән көй уртаҡ.

* Айныҡ башта – айныҡ аҡыл.

* Айныҡ өгөтө иҫереккә кермәй.

* Аҡҡан һыуҙа монтар юҡ,
Ташҡын кисмәҫ толпар юҡ.

* Аҡыллы иҫерек иҫәр айныҡтан яҡшыраҡ.

* Ат күреп, аяғың аҡһамаһын.

* Байлығы булған келәткә ҡар ҡуна алмаҫ,
Колхозың туҡ булһа, нужа килә алмаҫ.

* Балыҡ ағынды, тәлмәрйен тоноҡто ярата.

* Балыҡты ҡылсығы менән йотмайҙар.

* Башы ҡайҙа – ҡойроғо шунда.

* Бейей белгән кеше бейеүенән кинәнер.

* Бер атҡа ике йүгән һалмайҙар.

* Бер бүҙәнәнең ун ике бот майы бар.
* Бер иҫеректең буш һүҙенән икенсе иҫерек мәғәнә табыр.
* Бер ҡорт инәһен тотҡан тотош күсен тотор.
* Бер мылтыҡтың ауыҙына мең кеше һыя.
* Бер уҡ ике ҡошто үлтермәҫ.
* Боландың мөгөҙө ҡиммәт.
* Болғансыҡ булһа ла һыу яҡшы.
* Болот ала, яуын һала.
* Буранда бүре ҡоторор.
* Бурысҡа эскән ике иҫергән.
* Бүҙәнәнең дә үҙенә күрә бағраһы бар.
* Бүре аҙығы буранда.
* Бүре туйған ерендә ятмай.
* Бүтәгәгә бүҙәнә оялай.
* Бүтәгәгә буҙ турғай эйәләшер.
* Ваҡ гәрәбәнән тупраҡ яҡшы.
* Диңгеҙҙең һыуы бик күп тә – эсергә ярамай.
* Донъяла хур булғың килһә, араҡы эс.
* Ел ереккә үтер.
* Елгә ут һимерер.
* Ер баҫтырығы – тау, тау баҫтырығы – таш.
* Елгә шаршау ҡормайҙар.
* Ер аҫтынан көн аҫты.
* Ер тауһыҙ булмаҫ.
* Еренә күрә йыры.
* Иҙел һыуы бал булһа ла илгә етмәй.
* Ике бармаҡ араһына ит үҫмәй.
* Ил ятмай эт тынмаҫ.
* Имән күмере еҫле була.
* Ирҙәр араҡынан иҫерә, ҡатындар һүҙҙән иҫерә.
* Иҫерек айныҡты күрә алмай.

* Иҫерек аҡсаһын эсмәй, аҡылын эсә.

* Иҫерек ирҙе ир тимә.

* Иҫерек иҫендәген һөйләр.

* Иҫерек иҫендәгеһен, айныҡ аҡылындағыһын һөйләр.

* Иҫерек кеше – мөшриҡ* кеше.

* Иҫерек малынан яҙыр, бара-бара аңынан яҙыр.

* Иҫерек менән тиле бер.

* Иҫерек һөнәрһеҙ булыр.

* Иҫерек һүҙен бирмәҫ.

* Иҫерекә өгөт ни ҙә, дегет ни.

* Иҫерекә сәләм бирмә.

* Иҫерекә һүҙ әрәм.

* Иҫеректең ауыҙынан эт ялар.

* Иҫеректең үҙе ни ҙә, һүҙе ни.

* Иҫеректән ил биҙгән.

* Иҫеректән эт тә ҡаса.

* Иҫке һүҙ иҫеректән сыға.

* Ишәктең көсө хәләл дә, ите хәрәм.

* Йоҙроҡ ҙур булһа, еңгә һыймаҫ.

* Йомарт тауыҡ йомортҡаһын иртә һала.

* Йылан еп кеүек булһа ла, көрмәүгә ярамай.

* Йыр – йөрәккә ял.

* Йыр йырламай күңел баҫылмай.

* Йыр – кешенең юлдашы.

* Йыр – күңеллегә ҡыуаныс,
Күңелһеҙгә – йыуаныс.

* Йыр-моңға бирелгәнде моң баҫыр.

* Йырҙан ир йәшәрмәһә лә, күңел йәшәрер.

* Йырҙың йыртығы юҡ, йыртылһа, ямауы өҫтөндә.

* Йырҙың йыртығы юҡ,
Көйҙөң китеге юҡ.

* Йәйҙең өйө киң.

* Кейекһеҙ ер булмаç.
* Көҙгө көн – кейәү аҡылы[418].
* Көҙгө себен әсе тешләр.
* Көлкө күңел һимертә.
* Көн оҙаймай төн ҡыçҡармаç.
* Көн үҙгәрә көн килә,
  Ай үҙгәрә йыл килә.
* Көттөрөүҙән көтөү ауыр.
* Күк арҡаһы – Тимер ҡаҙыҡ.
* Күп уйнаған күп илар.
* Күп уйын муйын һындырыр.
* Күҙҙәй тишектән күлдәй һыуыҡ инер.
* Күҙәмәй осҡан ҡош ҡуныр ағас тапмаған.
* Күл тәрән булған һайын балығы күп була.
* Күлдең данын балыҡсы сығара,
  Сүлдең данын каруансы сығара.
* Күргәндең алыçлығы юҡ,
  Күтәргәндең ауырлығы юҡ.
* Күренеп торған болоттан күренмәй торған өйөң яҡын.
* Кәмәле килһә, ҡайыҡлы ҡасыр.
* Кәмәне ҡоро ерҙә ҡырҡ кеше күтәрә.
* Ҡайындың туҙын маҡта,
  Имәндең үҙен маҡта.
* Ҡамыш һыуҙан туймаç.
* Ҡар башына ҡар етер.
* Ҡара көҙҙөң ҡары ятмаç.
* Ҡара урмандың ҡарыны киң.
* Ҡара һыуҙа ҡар ятмаç.
* Ҡара һыуыҡ ҡарҙан яман.
* Ҡарағайҙың көлө күп,
  Имәндең күмере күп.
* Ҡарама дуға талыҡмай.
* Ҡараңғының күҙе юҡ,
  Ҡармалаһаң үҙе юҡ.

* Ҡарғаны ситлеккә япмайҙар.
* Ҡиммәт таштың ауырлығы юҡ.
* Ҡоймаҡ тәмле тип, табаны ялап булмай.
* Ҡоромаған ҡойо булмаç.
* Ҡорттоң сағыуы ла файҙаға.
* Ҡош томшоғо менән туҡ.
* Ҡоштоң һөтө юҡ,
  Йылҡының үте юҡ.
* Ҡояш юҡ – көн юҡ.
* Ҡулға өйрәнгән ҡош ҡырҙа аҙашыр.
* Ҡумыҙ бейетмәй, моңо бейетә.
* Ҡурайы юҡтың өнө юҡ,
  Өнө юҡтың көнө юҡ.
* Ҡурҡҡанға ҡуш күренә.
* Ҡыш бауыры оҙон.
* Миҙгеле етһә, боҙ ятмаç.
* Моңһоҙҙоң да бер йыры була.
* Насар ерҙә ятһаң, насар төш күрерһең.
* Нефть ҡәҙерен яғыусынан бигерәк табыусы белә.
* Оса алмаған ыласындан файҙа юҡ.
* Осһоҙ итте эт ашай.
* Өйрәк һыуҙан туймаç.
* Сисенгән һыуҙан туймаç.
* Сүпте сыртан күрмәç.
* Сыраҡсыны суртан күрмәç.
* Сәтләүектең теше ҡабығын күрмәç.
* Тайға менгән атты һағыныр.
* Таң күҙе – Сулпан.
* Тартыуына ҡаршы бейсүе.
* Тау билгеһе таш булыр.
* Тау ҡаяһыҙ булмай.
* Тау менмәгән тауҙы белмәç,
  Тау янында тауҙы күрмәç.

* Тау менән тау бер түгел.
* Тау түбәһеҙ булмаҫ.
* Тауҙың күрке таш менән.
* Таулы ерҙә бүре булыр.
* Таулыҡҡа тау ҙа ҡыҙыға.
* Таш күперҙе һыу алмаҫ.
* Ташҡа талау теймәҫ.
* Тимерҙең ике башы ла ҡаҙау.
* Торна йомортҡа һалһа, ҡауҙы эсен йыртыр.
* Торна күҙе тарыла.
* Төнө юҡтың күҙе юҡ.
* Тупраҡҡа аралашмай алтын сыҡмаҫ.
* Тырнаҡһыҙ бармаҡ тыйнаҡһыҙ.
* Тәрән күл төпкә тарта.
* Уйында уҙған йыйында уҙыр.
* Урман – иҫке тун[419].
* Ус эсендә тоткан йомортҡа һытылмай.
* Уҫаҡ япрағы елһеҙ көндә лә елпелдәй.
* Ут менән һыу – телһеҙ яу.
* Ут – мут.
* Ут та бәлә, һыу ҙа бәлә,
* Ут менән һыу булмаһа, тағы ла бәлә.
* Уттың ялы ла, ҡойроғо ла юҡ.
* Үләнле ерҙе үрт баҫмаҫ.
* Үткер ҡылыс ҡынын киҫер.
* Хәйерһеҙ болот диңгеҙгә яуыр.
* Һаҙ булһа ла яҙ булһын.
* Һалғанда һал услап,
  Ултырырһың тыныслап.
* Һуңғы балтаны түңгәккә сап.
* Һыу бар ерҙә ут юҡ,
  Ут бар ерҙә һыу юҡ.

* Һыу сыҡҡан ерендә һөңгө буйы.
* Һыу һыуға ҡойор, һыу даръяға ҡойор.
* Һыу яр емерә.
* Һыуҙа ял-ҡойроҡ юҡ (батһаң тотоноп булмай).
* Һыуыҡ менән көрәшкән ҡолаҡһыҙ ҡалған,
  Бармағына ышанған ҡалаҡһыҙ ҡалған.
* Һәр миҙгелдең үҙ йыры бар.
* Һәр шиғыр яҙған шағир булмай.
* Шиғыр яҙыу ҡыйын түгел, шағир булыу ҡыйын.
* Ыҡтың* башы – ел башы.
* Эскегә һатһаң эшеңде – юғалтырһың көсөңдө.
* Эскесегә диңгеҙ тубыҡтан, күләүек муйындан.
* Эскән кеше – саҡ кеше.
* Эскән кешенең теле аҡса янсығынан да тиҙ сиселә.
* Эскәнһең икән, буйыңа һеңдер.
* Эт алған төлкөлә һый булмаç.
* Эт менән эт дуç, иçерек менән иçерек дуç.
* Эт туйған ерҙә ит ятыр.
* Эт һимеҙ ҙә – ашарға ярамай.
* Эт һимерһә, күп өрмәç.
* Эт эйәрткән – иптәшле.
* Эт эйәһен белер.
* Эттең башы кергән ергә ҡойроғо кермәй ҡалмаç.
* Әтәлгене тый, ҡарсығаны һуй.
* Әтәстең күрке – ҡойроҡ.
* Яҙ кириләһә, көҙҙән яман.
* Яҙ менән көҙгә ышанма.
* Яҙғы буран йәш улан: үҙе ҡолай, үҙе илай.
* Яҙғы көн – ярты аҡыл, көҙгө көн – күр аҡыл.
* Яҙғы ҡарҙы ямғыр йыуа.
* Ямғыр яуһа, ергә май.
* Ябалаҡтың йөнө күп.

* Яҡшы әкиәт ысынға яҡын була.
* Ярғанатҡа көн юҡ.

* * *

* Ай бирҙе, ҡояш алды.
* Ай уртаҡ, төн уртаҡ.
* Ат уҙаһын тай уҙа.
* Ат бирҙем – атлата алманым,
  Тай бирҙем – туҡтата алманым.
* Аяҡ һыйһа, баш һыйыр.
* Бөткәндең бөтәһе юҡ.
* Иҫке төймә, яңы тун.
* Каруан күсһә лә, Каруанһарай урынында.
* Киске шандаҡ ҡыҙарһа, киленем ул тапҡандай,
  Иртәнге шандаҡ ҡыҙарһа, илем яуға сапҡандай.
* Күҫәгең оҙон булһа, ҡулың көймәҫ.
* Ҡыҙ ҙа булһын, быуаҙ ҙа булһын.
* Тар ергә тана башы.
* Тейгәнгә – тейен башы, теймәгәнгә – ҡуян башы.
* Торалмаҫҡа туҙ баҫтырыҡ.
* Тығын ергә тығынсыҡ.
* Убыр китте, урыны ҡалды.
* Уң ҡулым, һул ҡулым – барыһы ла үҙ ҡулым.
* Үҙең көлһәң, миңә лә төрт.
* Файҙаһы файҙа, ҡара һыйыр ҡайҙа?
* Эт ашағансы, бүре ашаһын.
* Юрағаның юш булһын.
* Яланағас аяҡҡа – кесерткән.



## VII. ҺЫНАМЫШТАР, ЫШАНЫУҘАР

* Августа аяҙ булһа, көҙ бысраҡ килер.

* Августа ураҡ ҡыҙа, һыу һыуына.

* Ағас һуң япраҡ ярһа, йыл ауыр килер.

* Ағаста бәҫ күп булһа, бал күп була.

* Ағастарҙы бәҫ ҡаплаһа – һыуыҡҡа,
Томан төшһә – йылыға.

* Ай баҫып тыуһа, көн аяҙ була.

* Ай башында аяҙ булһа, ай буйы аяҙ була.

* Ай кәртәләнһә, айлыҡ аҙығыңды әҙерлә,
Көн кәртәләнһә, кәрәгеңде әҙерлә.

* Ай кәртәләнһә, айырың тот,
Көн кәртәләнһә, көрәгең тот.

* Ай кәртәләнһә, буран булыр.

* Ай кәртәләнһә, киленең ул табып ҡыуанғандай күр,
Көн кәртәләнһә, киленең ҡыҙ табып һөйөнгәндәй күр.

* Ай ҡолаҡланһа, айлыҡ юлға сыҡ,
Көн ҡолаҡланһа, һәнәк-көрәгеңде әҙерлә.

* Ай ҡолаҡланһа, аяғыңды нығыт,
Көн ҡолаҡланһа, ҡолаҡсыныңды нығыт.

* Ай ос менән тыуһа, көндәр яуынлы булыр.

* Ай салҡан тыуһа, көн һалҡын.

* Ай салҡан тыуһа, шул айҙа аяҙға,
Йөҙтүбән тыуһа, яуынға булыр.

* Ай салҡан тыуһа, аяҙ булыр, ҡырын тыуһа, болот булыр.

* Ай текә тыуһа, ямғырлы була.

* Ай тулы ваҡытта саф һәм яҡты торһа, һауа яҡшы булыр.

* Айҙың уртаһында ямғыр яуһа, ай бөткәнсе ямғыр булыр.

* Айыу баланы ҡыуағы, ҡамыш һәм ҡайһы бер башҡа үләндәрҙең еҫе ғәҙәттәгенән көслөрәк сыҡһа – ямғыр булыр, уларҙың еҫе һиҙелмәһә – көн аяҙыр.

* Аҡман-тоҡман алты көн, алтыһы ла ҡаты көн.

* Аҡыҡ – йөҙөк ҡашы, жәүҙә* – яҙҙың башы.

* Алтынсы апрель Хызыр Ильяс* ҡамсыһын һелтәй, имеш.

* Арыш сәскәндә әрем бик әсе булһа, арыш яҡшы булыр.

* Апрель артыҡ йылы булһа, май һалҡын, елле-ямғырлы булыр.

* Апрель етһә, яҙ етер, ереп ағып ҡар китер.

* Апрелдең алтыһында аяҙ булһа, йәй ҡоро килер,
Болотло булһа, ашлыҡ уңыр.

* Апрелдең шапырыныуы марттың дименән.

* Ашлыҡ урғанда һалам шартлап һынһа, ямғыр булыр.

* Аяҙ булһа – айға көс,
Болот булһа – көнгә көс.

* Аяҙ булһа – һыуытыр,
Болот булһа – йылытыр.

* Барыс йылды* барын сәс,
Һис булмаһа, тары сәс.

* Барыс йылы – байлыҡ,
Һыйыр йылы – туҡлыҡ,
Ҡуй йылы – ҡытлыҡ,
Ҡуян йылы – йотлоҡ.

* Бер ҡырпаҡ менән ҡыш булмаҫ.

* Беренсе ғинуарҙа көн йылы булһа, арыш уңыр,
Ел булһа, тары уңыр, томан булһа, һоло уңыр.

* Беренсе күк күкрәү көндәр йылыта башлауға булыр.

* Беренсе күк күкрәү ҡибла яғынан булһа, иген уңыр.

* Беренсе мартта ел булһа, йыл алама килер.

* Беренсе мартта көн елле булһа,
Бөтөн йәй елле булыр.

* Беренсе мартта көн ҡояшлы, елһеҙ булһа,
Яҙ, йәй яҡшы булыр, иген уңыр.

* Беренсе сентябрҙә йылы булһа, бөтөн көҙ йылы булыр, Әгәр шул көндө ел булһа, киләһе йәй ашлыҡ насар булыр.

* Боҙ ҡытыршы булын туңһа, иген уңыр.

* Боҙ ултырып ҡалған йылды ауырлыҡ булыр.

* Болондағы кипкән бесән дымланһа, ямғыр яуасаҡ.

* Болот ҡиблаға табан барһа, көн аяҙытыр.

* Болоттар бер урында өйөрөлһә, көн боҙола.

* Болот бергә өйөлөп, бик юғары күтәрелһә, йылы ямғыр булыр.

* Болот һирәк булһа, аяҙ һәм һалҡын булыр.

* Болот юлланып торһа, ямғырға.

* Бүрәнә шартлаһа, һыуыҡ булыр.

* Ваҡ ямғыр томалап яуа башлаһа, һауа оҙаҡҡа боҙолор.

* Ғинуарҙың көнө ҡыҫҡа, февралдең айы ҡыҫҡа.

* Ғаҡрәп* башында ҡар яуһа, ҡырҡ көн ҡара ятыр.

* Егерме бишенсе июлдә ҡырау булһа, ҡыш һыуыҡ килер.

* Ел елләмәй, томан асылмай.

* Етегән йондоҙ ҡараһыу булып күренһә, ямғыр булыр.

* Етенсе август иртән һалҡын булһа,
Ҡыш иртә килер, оҙон да булыр.

* Жәүзә* кермәй йәй булмай, Ҡәүес* кермәй ҡыш булмай.

* Ике ҡатлы тәҙрәләр быуланыу - һалҡынға.

* Ильин көн* ямғыр булһа, илле көн ямғыр яуыр.

* Имән башы шаулаһа, көн боҙолоуға.

* Имән сәтләүеге уңған йылды аслыҡ булыр.

* Иртә аяҙытһа – кис аяҙытмаҫ, кис аяҙытһа – һис аяҙытмаҫ.

* Иртә күк күкрәһә, йыл ямғырлы булыр.

* Иртән ҡояшты томан ҡаплаһа, аяҙ булыр.
* Иртән ҡояшты болот ҡаплаһа, аяҙ була.
* Иртәнге томан ҡалын булып та,
Ҡояш нуры менән тиҙ таралһа,
Һауа бик оҙаҡ боҙолмай торор.
* Иртәнге томан өҫкә күтәрелһә – яуынға,
Ергә төшөп һеңһә – аяҙға.
* Иртәнге ямғыр төшкә хәтле.
* Иртәнсәк болотло булып,
Ҡояш сыҡҡанда аяҙытһа,
Ул көндө ямғыр булмаҫ.
* Иртәнсәк ысыҡ күп төшһә, көн бик эҫе булыр.
* Йондоҙҙар бәләкәй генә булып күренһә, ямғыр булыр.
* Йондоҙҙар емелдәһә – һалҡынға.
* Йондоҙҙар ҡуйы күренһә, аяҙ булыр.
* Йүкә сәскәһе ҡойола башлаһа, арыш сәсергә ваҡыт.
* Йылан йылы – яуынлы.
* Йыл башында ел булһа, йыл әйләнә ел-дауыл булыр.
* Йылға боҙҙары ниндәй көндә киткән булһа,
Игенде шул көнгә тура килтереп сәс – уңыр.
* Йылғаларҙа боҙ төндә китһә, ашлыҡ булыр.
* Йылҡы йылын һаҡлыҡ менән ҡаршы ал.
* Йәй ағас япраҡтары һарғайһа, көҙ иртә килә.
* Йәй көнө бик ҡыҙҙырһа, ямғыр булыр.
* Йәй көнө һауа төтөн һымаҡ күренһә, аяҙ булыр.
* Йәй көнө ямғыр болото аҡһыл күренһә, боҙ яуыр.
* Йәй ҡышҡа ҡарап килә.
* Йәйге эҫелә рәшә булһа, игендәрҙе киптерер.
* Йәшен күп булһа, баланды ҡырау һуғыр.
* Кесаҙна боҙолған көн аҙна буйына барыр.
* Кинәт һыуыҡ башланһа, көн аяҙға китер.
* Кис аяҙ булып та, йондоҙҙар әҙ күренһә, йылы булыр.
* Кис һауа йылынып китһә, ямғыр көт.

*Вариант:* Киске һауа нык йылынһа,
Төнөн ямғыр башланыр.

* Кистән аяҙ булһа, иртән дә аяҙ килә.
* Кишер япрағы шиңһә, ямғыр яуыр.
* Көҙ йылы килһә, кыш оҙон була.
* Көҙ килеше йәйенән билдәле.
* Көҙ көнө ағас япрактары койолмаһа, халыкка ауырлык.
* Көҙ оҙон килһә, яҙ һуң килер.
* Көҙгө һыуыктан көнлөк кас.
* Көҙҙән иртә кар яумаһа, алғы йәйҙе иген уңышы насар булыр.
* Көҙ арттан караһа, аяҙ булыр.
* Көҙ аяҙ булһа, аҙык аҙ булыр.
* Көн елләһә, ямғыр булыр.
* Көн кыҙҙырһа, ямғырға була.
* Көндөҙ болотлап, кис елләһә – көн һыуытыр.
* Көнсығышынан ел сыкһа, ямғырға.
* Күк иртә күкрәһә, яҙ иртә килер.
* Кабак япрағы остан койолһа, кыш оҙон була.
* Кайын ағасында бөрө күп булһа, тары бик уңыр.
* Кайын һыуы күп акһа, йәй ямғырлы булыр.
* Кар ағаска йәбешеп торһа, көн епшетер.
* Кар иртә төшһә, яҙ иртә килер.
* Кар күп булһа, йәй иген уңыр.
* Кар кояш менән китһә, бойҙай уңыр.
* Кар тәрән булһа, иген уңыр.
* Кары калын кыштың үләне калын булыр.
* Карама ағасында сәскә булһа, карабойҙай уңыр.
* Караса* килмәй көҙ булмаç, каңтар* тыумай боҙ булмаç.
* Катлаулы болот тиҙ үтһә, аяҙ булыр, әкрен үтһә, ямғыр булыр.
* Каты яуым тиҙ туктар.
* Кибла яғынан ике-өс көн ел булһа, ямғыр ғәләмәте.

* Ҡоролоҡ йылы – ҡытлыҡ йылы.
* Ҡояш аяҙға байыһа, иртәгеһенә аяҙ булыр.
* Ҡояш байығанда күк йөҙө ҡыҙыл булһа, ел күтәрелер.
* Ҡояш байығанда төньяғынан һауа ҡыҙҙырһа, ысыҡ булыр.
* Ҡояш байығас, төньяғында болот аҡ булһа,
Бер ай буйы һауа боҙолоуы.
* Ҡояш байығанда ямғыр яуа башлаһа, тиҙ туҡтар.
* Ҡояш батҡас, һауала ҡыҙыллыҡ оҙаҡ торһа, аяҙ булыр.
* Ҡояш байыр алдынан болот тармаҡланып һуҙылып торһа, ямғыр булыр.
* Ҡояш байыған мәлде болот араһына инеп янһа,
Иртәгеһен үк көн ямғырлы булыр.
* Ҡояш байығанда аяҙ булып,
Төньяҡтан һалҡынса ел иҫеп торһа, ҡырау булыр.
* Ҡояш байығанда артынан болот ағылһа, ҡеүәтле ел булыр.
* Ҡояш бик йыраҡта күренһә, һалҡын булыр.
* Ҡояш ҡолаҡланып сыҡһа, ямғыр булыр.
* Ҡояш ҡыҙарып байыһа, елле ямғыр булыр.
* Ҡояш томан ваҡытында сыҡһа, көндөҙ бөркөү булыр.
* Ҡояш ҡыҙарып сыҡһа – ямғыр булыр,
Ҡыш көнө шулай булһа – һалҡын булыр.
* Ҡояш сыҡҡанда бағана-бағана нур сәселһә, һыуыҡ булыр.
* Ҡояш сыҡҡанда бейек күренһә, аяҙ булыр, түбән күренһә, ямғыр булыр.
* Ҡояш сыҡҡанда ғәҙәттәгенән ҙурыраҡ күренһә, ямғыр көт.
* Ҡояш сыҡҡанда һауа ҡыҙарып торһа, шул көндө ямғыр булыр.
* Ҡояш түбән байыһа, иртәгеһен ямғыр булыр.
* Ҡуҙғалаҡ күп булһа, киләһе йылдың ҡышы йылы булыр.
* Ҡыш йондоҙ баҙыҡ янһа – һыуыҡҡа, тоноҡ янһа, йылыға тарта.
* Ҡыш көнө болот юлланып торһа, йылы булыр.
* Ҡыш көнө бәҫ күп булһа, бал күп булыр.
* Ҡыш көнө тоҙ еүешләнһә, ҡар яуа.

* Ҡыш көнө шәре сыҡһа, ашлыҡ уңыр.
* Ҡыш көнөндә ҡояш әйләнәһендә түңгәләк күренһә, буран булыр,
Әгәр инде был түңгәләк ҡояшҡа бик яҡын булһа, аяҙ булыр.
* Ҡыш көнө ҡояш эргәһендә түңгәләк булһа, көн һалҡынайта.
* Ҡыш көнөндә урман елһеҙ шаулаһа, буран булыр.
* Ҡыш күк күкрәһә, бик ҡаты ел булыр.
* Ҡыш урман шаулаһа, йылы көндәр көт.
* Ҡыш һыуыҡ булһа, иген уңыр.
* Ҡышҡы көн йәйҙе әйтер, йәйге көндәр яйҙы әйтер.
* Ҡыш ҡар күп булһа, йәй ямғырлы булыр.
* Ҡыш ҡарһыҙ булһа, йәй ярлы була.
* Ҡыштың кендеге йәйгә бәйләнгән.
* Ҡыш көн – бер тотам.
* Май айы һалҡын булһа, игенгә туҡлыҡ булыр,
Себенгә юҡлыҡ булыр.
* Майҙа ямғыр күп булһа, арыш уңыр.
* Майһыҙ ҡар бөтмәҫ.
* Март башында сәпсек эсерлек һыу булһа, йыл яҡшы була.
* Март башында тамсы тамһа, йәй яҡшы килә.
* Март, марттың көнө – шарт.

*Вариант:* Мартта – шарт.
Мартта шартлата.

* Март сыҡмай – дәрт сыҡмай.
* Мартта йылы булһа, йыл һалҡын була.
* Мартта йылы булһа, яҙ һалҡын, елле була.
* Мартта көн менән төн тиңләшә.
* Мартта шарт та шорт, апрелдә апырыр ҙа шапырыр.
* Марттың берендә аяҙ булһа, яҙ буйы аяҙ була.
* Марттың егерме бишендә һыу ҡатһа, бер аҙналыҡ юлға сыҡ.
* Марттың шартын апрель сығарыр.

* Мейес көслө тартһа – һыуыҡ була,
  Насар тартһа – епшек була.
* Мейестә утын шартлап янһа, көндәр йылытырға булыр.
* Микула* етмәй йәй булмай, Микула етмәй ҡыш булмай.
* Миләш һуңлап сәскә атһа, көҙ оҙаҡҡа һуҙылыр.
* Миләүшә сәскәһе асылһа, көн аяҙыр.
* Мөрйәнән сыҡҡан төтөн ергә ятһа,
  Йәйен ямғыр булыр, ҡышын ҡар яуыр.
* Муйыл унған йыл арыш уңыр.
* Муйыл унған йылды иген уңмаç, королоҡ булыр.
* Октябрҙә күк күкрәһә, ҡыштың ҡары аҙ булыр.
* Октябрь – ҡара бейә, ноябрь – ала бейә[420].
* Октябрь – ни арба, ни сана.
* Октябрь япмаһа, декабрь япмаç[421].
* Өҙлөкһөҙ күк күкрәһә, борсаҡ яуыр.
* Өйкөм болоттар ойошмай күп йөрөһә, аяҙ булыр.
* Питрау* етте – яҙ үтте,
  Ильин үтте – йәй бөттө.
* Питрау үтте – йәй үтте.
* Питрауға саҡлы үләнден шифаһы сәскәлә,
  Питрауҙан һуң – тамырҙа.
* Покрау* етте – ҡыш етте.
* Покрауҙа ҡар күренер.
* Покрауҙан элек ҡар күренһә, йыл иртә килер.
* Салауат күпере бейек булһа, аяҙ булыр,
  Түбән булһа, һауа боҙолор.
* Салауат күпере йәшкелтем булһа, ямғыр күп булыр,
  Ҡыҙылһыу булһа, ҡаты ел булыр.
* Салауат күпере ҡалҡһа, көн аяҙыта.
* Салауат күпере юғары һуҙылһа, шул көндө аяҙ булыр,
  Әгәр түбән булһа, ямғыр булыр.
* Салауат күпере ямғырҙан оҙаҡ торһа, һауа боҙолор,
  Тиҙ бөтһә, аяҙ булыр.

  *Вариант:* Йәйғор ямғырҙан һуң тиҙ юғалһа, аяҙға китер.

* Сана юлы һуңға ҡалһа, ашлыҡ уңыр.
* Сентябрь аяҙ булһа, ҡыш һалҡын булыр.
* Сентябрҙә күк күкрәһә, миҙгел оҙаҡ килер.
* Сентябрҙә ҡар күренһә, ҡырҡ көн аяҙ булыр.
* Сентябрҙә ҡар күренһә, көҙ оҙаҡ килер.
* Спас* етте – эш китте.
* Сәскәләр хуш еҫ бөркһә, ямғыр яуыр.
* Тамсы боҙо оҙон булһа, яҙ оҙон килә..
* Тау баштарында ҡар күп булһа, еләк күп булыр.
* Томбойоҡ һыу өҫтөнән ҡәҙимгенән юғарыраҡ күтәрелһә – тиҙ арала ямғыр булыр, сәскәләре асылһа – көн аяҙыр.
* Томан күп төшһә, емеш уңыр.
* Төтөн тура сыҡһа – һыуыҡҡа тарта.
* Төндә бәҫ булһа, көндөҙ ҡар яумай.
* Төштән һуң килгән ямғыр оҙаҡ яуа.
* Төньяҡ еле ямғырҙы ҡыуа.
* Тыуған ай дуғалы булһа, дауыл була.
* Тәҙрә тирләһә, ямғыр яуыр.
* Урман шаулаһа, көн боҙола.
* Урындан-урынға күсеп күк күкрәһә, боҙ булыр.
* Усаҡтағы утын һыҙғырып янһа, көн һыуытыр.
* Февралдә ҡайын ботағында ҡар алҡа-алҡа булып аҫылынып торһа, ул йылды иген уңыр.
* Февралдә һыуыҡ: «Һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем дә, көнөм генә ҡыҫҡа», – тип әйтә, имеш, ти.

  *Вариант:* Февраль әйтә ти: «Әгәр мин ғинуар урынында булһам, һыйырҙың мөгөҙөн төшөрөр инем», – тип.
* Хутта* ике күҙең мут.
* Хәмәл* әмәлеңде ҡоротор.
* Һабан һөргәндә ярмалы балсыҡ сыҡһа, ул ерҙә ашлыҡ уңыр.
* Һауала нәжәғәй уйнаһа, иген уңыр.
* Һыртлыҡтан* ҡурҡма, ҡытлыҡтан ҡурҡ.

* Һыртлыҡ оҙон булһа, ҡытлыҡ ҡыҫҡа булыр.
* Һыртлыҡ һығыға ҡалһа, ҡытлыҡ йоҡоға ҡалыр.
* Һыуыҡ ҡолаҡтан алыр.
* Һыуыҡта боҙ өҫтөнә шыя сыҡһа – йылы көндәр көт.
* Һәүер* килмәй яҙ булмаҫ.
* Шайтан таяғының сәскәләре ян-яҡҡа таралһа – һауа торошо үҙгәрмәҫ, бергә йыйылһа – көн боҙолор.
* Шәрәле ер тунмай, шалҡан сәсһәң, унмай.
* Шәфәҡ таңға һуҙылһа, иртәгеһенә ямғыр була.
* Ыҫыҡ тиҙ китһә, ямғыр булыр.
* Ыҫыҡлы йыл бал күп булыр.
* Эт йылы буран күп була.
* Эт йылында мал үҫер, барыс йылды бары үҫер.
* Әгәр ҙә ҡайындың осонда япраҡтары һарғая башлаһа, яҙ иртә килә, түбәндәгеләре һарғая башлаһа, яҙ һуң килә.
* Әгәр яңы ай бик асыҡ ялтырап күренһә, һалҡын булыр.
* Әгәр яңы ай нәҙек кенә күренһә, ай буйы аяҙ булыр.
* Әүүәл кисе* аяҙ – бик һуң килер яҙ.
* Яҙ ерҙән быу күтәрелмәһә, иген насар ҡалҡыр.
* Яҙ иртә килһә, ашлыҡ уңыр.
* Яҙ иртә күк күкрәһә, йәй ямғырлы килер.
* Яҙ көнө йылғала һыу артмаһа, ашлыҡ уңмаҫ.
* Яҙ көнө иретмәй, оҙаҡ туңдырып торһа, йәй ҡоро булыр.
* Яҙ күк күкрәүҙән элек йәшен йәшнәһә, аслыҡ булыр.
* Яҙ ташҡын шәп булһа, иген уңа.
* Яҙғы боҙға яҫтыҡ ҡалынлығы булһа ла ышанма, көҙгө боҙға көҙгө ҡалынлығы булһа ла ышан.
* Яйыҡ башынан* ел иҫһә, йәй көнө лә ҡыш була.
* Яйыҡ башынан ел сыҡһа, яҙ килеүҙең билдәһе.
* Ялағай уйнаған йыл иген уңа.
* Ямғыр ергә тиҙ һеңһә, көндәр ямғырлы булыр.
* Ямғыр яуғанда салауат күпере ҡалҡһа, ямғыр туҡтар, Әгәр туҡтағас ҡалҡһа, ямғыр оҙаҡ була.

* Ямғыр яуғанда тамсылар күбекләнһә, ямғырлы һауа оҙаҡ булыр.
* Ямғырҙан һуң йәшен ялтыраһа, аяҙ булыр.
* Ямғырҙан һуң ҡояш ялтырай ҡыҙарһа, тағы ямғыр көт.
* Ямғырҙы «һиҙеп» йылғалағы һыу кәмей.
* Ямғырлы ваҡытта көнсығыштан ел сыҡһа, ямғыр оҙаҡҡа барыр.
* Яңы ай тыуғанда ел булһа, ай бөткәнсе ел булыр.
* Яңы тыуған айҙың дүртенсе көнөндә ниндәй һауа булһа, ай буйы шундай һауа булыр.

* * *

* Аҡҡош иртә килһә, яҙ оҙаҡ торор.
* Ала ҡарға ағас башына ҡунһа, яҙ тиҙ, еңел килер; ергә ҡунһа, оҙаҡ, ауыр килер.
* Апрель яртыһында торна ҡысҡырһа, йыл яҡшы килә.
* Ат аяғын тибенһә – ямғырға.
* Ат бышҡырһа, ямғырға.
* Ат ҡарға ятһа, йылыға тарта.
* Бал ҡорто кирс әйләнеп ҡайтһа, ямғыр яуа.
* Бал ҡорттары умартанан бик иртә осоп сыҡһа, көн аяҙ буласаҡ.
* Балыҡ һыу өҫтөндә уйнай башлаһа, ямғыр була.

*Вариант:* Балыҡ өҫтә йөҙһә – ямғырға.
* Беренсе мартҡа тиклем ҡара ҡарға күренһә, ҡар тиҙ китер.
* Бесәй башлы ябалаҡ (өкө) ҡысҡырһа, аслыҡ насар булыр.
* Бесәй битен йыуғанда ҡолаҡ артын һыйпаһа, ямғыр булыр.
* Бесәй битен бик оҙаҡ йыуһа, оҙаҡ ямғыр яуыр.
* Бесәй бүрәнә тырнаһа, көн боҙола, бөгәрләнеп ятһа, һыуыҡ була.
* Бесәй ишекте тырнаһа, ямғыр, йә буран булыр.
* Бесәй мейескә керһә, буран булыр.
* Бесәй моронон ҡаплап ятһа, көн һыуыта.

* Бесәй һыу эсһә, ямғыр булыр.
* Бесәй юғары менеп ятһа, һалҡынға.
* Бөрсә ҡоторһа, һауа боҙолор.
* Болот килгәндә әтәс ҡысҡырһа – көн аяҙайырға.
* Болотло көн бесәй салҡан ятһа – аяҙый.
* Бүҙәнә ҡысҡырһа, бойҙай уңа.
* Иген баш ҡоҫһа, кәкүк һаҡауланыр.
* Иртән беснәк һайраһа, көн боҙолор.
* Иртән бал ҡорттары умартанан сыҡмайынса шаулашһа, төш ваҡытында ямғыр булыуын көт.
* Иртән, йә көндөҙ бал ҡорттары ҙур төркөм булып, умартаға ашығып ҡайтһалар һәм унан бөтөнләй тиерлек осоп сыҡмаһалар, тиҙҙән ел күтәрелер, ямғыр яуыр.
* Иртән һауа болотло булһа ла, бал ҡорттары тырышып нектар йыйһа, тиҙҙән һауа торошо яҡшырасаҡ.
* Йылға шаулап, тәлмәрйен баҡылдай башлаһа – ямғыр була.
* Йәшен йәшнәп, болот килгәндә бал ҡорттары умартаға инеп йәшеренмәһә, ямғыр булмай, ул ситләп үтә.
* Келәт аҫтында әтәс ҡысҡырһа, ямғыр яуыр.
* Кисен бал ҡорттары осоуҙан иртә туҡтаһа, алдағы көндәрҙә яҡшы һауа һаҡланыр.
* Көҙгә табан ҡырмыҫҡа иләүҙәре ҙурайһа, ҡыш ҡаты килә.
* Көн болотло булһа, балыҡ ҡапмай.
* Күгәрсендәрҙең ныҡ гөрөлдәүе – һауа насарайыуға.
* Кәкүк тауыш бирҙе – һалҡын көндәр үтте.
* Ҡаҙ һыңар аяғын ҡанат аҫтына тыҡһа, көн һыуытыр.

*Вариант:* Ҡаҙ һыңар аяҡта торһа, һалҡынға.
* Ҡаҙ ҡанат аҫтына моронон тығып йоҡлаһа, һалҡын була.
* Ҡаҙ ҡаңҡылдаһа, йылы килә, ҡарға ҡарҡылдаһа, ҡайғы килә.
* Ҡаҙ тешен шаҡылдатһа, һалҡын булыр.
* Ҡара бойҙай сәскәһе бар ерҙә ҡорт тынмаҫ.
* Ҡара ҡарға килгәс, бер айҙан ҡар китер.

* Ҡара ҡарға ояға ултырһа, өс аҙнанан сәсеүгә сыҡ.
* Ҡара ҡарға уйнаһа, һауа боҙолор.
* Ҡарға мең ҡарҡылдаһа ла яҙ булмаç, ҡаҙ бер ҡаңҡылдаһа ла яҙ булыр.
* Ҡарға елгә ҡаршы ултырып ҡысҡырһа, ямғыр булыр.
* Ҡарға килгәс тә юлға төшһә, иген уңыр.
* Ҡарға килһә, ҡар китер.
* Ҡарға ҡар теләһә, ямғыр яуыр.
* Ҡарға ҡарҙа ҡойонһа, көн боҙола.
* Ҡарға моронон ҡанат аçтына йәшерә икән – һыуыҡ көт.
* Ҡарға тоташ йөрөһә, ашлыҡ уңыр.
* Ҡарға яуым теләй, тартай аяҙ теләй.
* Ҡарға йылы яҡтан килгәс ағас башына ҡунһа, йыл туҡлыҡлы була.
* Ҡарға түбән осһа, ямғыр булыр.
* Ҡарлуғас иртә килһә, көндәр тиҙ матурланыр.
* Ҡарлуғас көндө маҡтай, һандуғас төндө маҡтай.
* Ҡарлуғас түбән осһа, ямғыр булыр, юғары осһа, аяҙ булыр.
* Ҡарлуғас уйнаҡлап осһа, ямғыр булыр.
* Ҡоҙғон юғары осһа, аяҙ булыр.
* Ҡоро йылды ҡуян күп, яуын йылды сысҡан күп.
* Ҡош ҡабарынһа, көн боҙола.
* Ҡоштар берҙәм осоп китә башлаһа, ҡыш ҡаты килә.
* Ҡоштар яҙын иртә килһә, йәйен ҡоролоҡ була.
* Ҡояш байығас, этәс ҡысҡырһа, көн аяҙ булыр.
* Ҡырмыçҡа ҡанатланһа, ямғыр була.
* Ҡырмыçҡа иләүе йәнләнһә – көн яҡшыра.
* Ҡыçала ярға сыҡһа, көн боҙола.
* Ҡырмыçҡа иләүҙәре ҙур булһа, ҡыш һыуыҡ булыр.
* Ҡыш көнө мейес аçтында сиңерткә сырылдаһа, көн йылытыр.
* Мал ҡайһы яҡҡа арҡаһын ҡуйып ятһа, шул яҡтан ел көт.

* Өйрәк ҡойонһа – һалҡынға.
* Өйрәк ҡысҡырһа, йылы була.
* Өкө ҡысҡырһа, һалҡынға тарта.
* Себештәр бергә йыйылһа, ямғыр була.
* Серәкәй менән ләпәк күбәйһә, аяҙға тарта.
* Сиңерткәләр ныҡ сырылдашһа, көн ҡороға китер.
* Сыйырсыҡ бала сығарғанда һоло, ҡарабойҙай сәс.
* Сыйырсыҡ сыбар килһә, иген уңыр.
* Сыйырсыктан алда турғай килһә, туҡлыҡ була.
* Сысҡан күп булған йылды – туҡлыҡ, ҡуян күп йылды – аслыҡ.
* Сысҡан менән һуҡыр сысҡан ҙур запас йыйһа, ҡыш ҡаты килә.
* Сәүкәләр ҡысҡырышһа – ямғырға.
* Тартай яҙ көнө бүҙәнәнән алда ҡысҡырһа, аслыҡ булыр.
* Тауыҡ иртә төнәһә, таңға ямғыр яуа.
* Тауыҡ әтәс булып ҡысҡырһа, үҙ башына.
* Тауыҡ оя баҫырға һуң ултырып, иртә торһа, аслыҡ булыр.
* Торна бейеһә, һауа йылыныр.
* Торна иртә килһә, яҙ оҙаҡ тормаҫ, тиҙ йылытыр.
* Торна килһә, торош юҡ.
* Торна ҡысҡырһа, көн йылытыр.
* Торналар бик өҫтән һәм торҡолдашып осһа – көҙ матур булыр.
* Торналар бейектән осһалар, көн аяҙ була, тиҙәр.
* Торналар йыйылып уйнаһа – көн йылыға.
* Торналар түбән осһа, һауа боҙолор.
* Төш ваҡытында әтәс ҡысҡырһа, көн аяҙ булыр.
* Турғай түбәндән осһа, көҙ ҡыҫҡа булыр.
* Турғайҙар кәпәренеп ултырһа, ямғыр булыр.
* Тәлмәрйен ҡысҡырһа, көн йылыта.
* Тәлмәрйен һыу өҫтөнә сығып ҡысҡырһа, һауа боҙолор.

* Тәлмәрйендәр ярға сыҡһа, яуын көт.
* Умарта ҡорто шаулаһа, ямғыр булыр.
* Үрмәксе ауы күбәйһә, көҙ сыуаҡ, ҡыш һалҡын була.
* Үрмәксе ауы күп осһа, көн аяҙ, йылы булыр.
* Үрмәксе ауын тәгәрмәс кеүек итеп ҡуйһа, аяҙға тарта.
* Үрмәксе ептәре бейектән осһа, аяҙ булыр.
* Үрмәксе ауы үҫемлектәргә ятһа, йылыға тарта.
* Һандуғас менән таң тыуыр, ҡарлуғас менән көн тыуыр.
* Һарығош ҡоро ботаҡта һайраһа, йыл ҡоро килер.
* Һыйыр арт аяғын ҡалтыратһа, һалҡын булыр.
* Һыу буғаһы биш-алты тапҡыр рәттән ҡысҡырһа, иген уңыр.
* Эт аунаһа – ямғырға.
* Эт ҡарҙа аунаһа, көн аяҙ була.
* Эт ояһынан сыҡмаһа, буран сығырын көт тә тор.
* Эт һыу эсһә, ямғыр булыр.
* Эт юлға ятһа. көн йылытыр.
* Әгәр торналар берәмләп-берәмләп килһәләр, йәй яҡшы булыр,
  Әгәр көтөүе менән осоп килһәләр, йәй насар була.
* Юлда йылан осраһа, ямғыр яуа.
* Яҙ көнө тауыҡ әтәс булып ҡысҡырһа, йыл ауыр булыр.
* Ямғыр алдынан бал ҡорттары умарта тирәһендә генә оса,
  Һауа яҡшы торор булһа, алыҫҡа оса.
* Яр ҡарлуғастары түбән осһа, ямғырға тарта.
  *Вариант:* Ямғыр булаһы булһа, ҡарлуғастар бик түбән осор.

* * *

* Арҡа һыҙлаһа, ямғыр була.
* Баш ҡысыһа, ямғыр яуа.
* Быуындар һыҙлаһа, көн боҙола.
* Кеше ауырайып торһа, ямғыр була.

* Колаҡ ҡысытһа, ҡышын буран булыр, йәйен ямғыр булыр.
* Колаҡ шаулаһа, һауа боҙолор.
* Колаҡ япрағы ҡысытһа, буран булыр.
* Аҡ сәс – аҡыл сәсе.
* Аҡыллы баш ҙур була.
* Ауыҙы ҙур ашлы булыр, күҙе ҙур йәшле булыр.
* Аяҡ баш бармағы оҙон кеше ҡатынына баш, икенсе бармағы оҙон булһа, ҡатыны иренә баш булыр, ти.
* Аяғы ҙур – ғәйрәтле, ҡулы ҙур – йөрәкле.
* Аяғы йөнлө мал-тыуарҙан бәхетле булыр.
* Башы ҙур – баш булыр.
* Башы ҙур – бей булыр, ҡолағы ҙур – ҡол булыр.
* Беләге йөнлө бей булыр,
  Ҡолағы йөнлө ҡол булыр,
  Балтыры йөнлө бай булыр.
* Ҡул кипһә, ямғыр булыр.
* Ҡул ҡыштырлап торһа, ҡоролоҡ булыр.
* Теш һыҙлаһа, һауа боҙолор, йә ямғыр, йә буран булыр.
* Уң ҡолаҡ ҡысытһа – йылытыр,
  Һул ҡолаҡ ҡысытһа – һыуытыр.
* Башы йыуан бай булыр, балтыры йыуан ҡол булыр.
* Ирене йоҡа кеше усал булыр.
* Егеттәр биҙәнһә, мыйыҡ сыҡмай.
* Елкәһе соҡор – ялҡау булыр.
* Керпеге оҙонға күҙ тейә.
* Кеше ҡытыҡсан булһа, көнсөл була.
* Күҙ малды ҡаҙанға, кешене гүргә керетә.
* Күҙе осло уғры булыр.
* Күҙең ҡырыйында миңең булһа, йәшле булырһың.
* Ҡаш араһы алыҫ ҡыҙ алыҫ ергә төшөр,
  Ҡаш араһы яҡын ҡыҙ яҡын ергә төшөр.
* Ҡаш бер-береһенә яҡын булып үҫһә, кеше кәләште яҡындан ала.

* Ҡашы бергә тоташҡан кеше тыуған-үҫкән иленән йыраҡ китмәй, ҡаш араһы йыраҡ булһа, йыраҡ китә.
* Ҡулы йомшаҡ ҡыҙ үҙенән йәшкә барыр.
* Ҡулы йөнлө кеше бай була.
* Ҡулы ҡаты ир ҡарт ҡатын алыр.
* Ҡулы һыуыҡтың йөрәге ҡыҙыу.
* Майлы күҙҙә яғым булмай.
* Маңлайы киң кешенең зиһене яҡшы була.
* Маңлайы тарҙың аҡылы тар.
* Муйыны миңле – бәхетле,
  Күкрәге миңле – көйөклө,
  Күҙе миңле – йәшле,
  Ауыҙы миңле – ашлы.
* Оло ҡолаҡлы кеше ялҡау була.
* Һирәк тешле кешенең ауыҙында һүҙ тормай.

* * *

* Аҡҡош атыу килешмәй: яңғыҙлыҡҡа була.
* Алдыңдан ҡара бесәй уҙһа, юлың уңмаҫ[422].
* Ауыл арҡыры аҡҡош уҙып китһә, аслыҡ булыр.
* Буш сәңгелдәк бәүетмә – сабыйың илаҡ булыр.
* Бала яңағына таянып ултырмаһын: етем ҡалыр.
* Беренсе күк күкрәгәндә ятып тәгәрләһәң, бил һыҙлауы бөтә.
* Беренсе ужымды күргәс, өҙөп алып ашап, ужым өҫтөнә ятып аунаһаң, иген уңа.
* Бесәй юлды киҫһә, юл уңмай.
* Бутҡа бешергәндә ашаған ҡалағыңды ялама – кейәүең ашамһаҡ булыр.
* Буш өйгә ен эйәләшә.
* Бөркөттөң тырнағын йөрөтһәң, зәхмәт ҡағылмаҫ.
* Бысаҡты салҡан таштарға ярамай: өйҙән мәйет сығыр.
* Ерҙәге ташты ҡуҙғалтһаң, ел сығыр.
* Етегән йондоҙҙо өсө ҡабат һанаһаң, һауап булыр.

* Ете йыллыҡ һағыҙаҡ саҡһа, әҙәм үлтерер.

*Вариант:* Етегән тигән ете йондоҙ
Ете уратып әйтһәң һауап була.

* Иҙәнең таҙа һепер, юғиһә ирең шаҙра булыр.
* Иләк аша ҡарама – кейәүең шаҙра булыр.
* Ишек тупһаһына ултырма – үҫмәҫһең.
* Йорт тирәһендә һайыҫҡан шыҡырыҡлаһа, ҡунаҡ килер.
* Йылан мөгөҙөн (аяғын?) күргән бәхетле булыр.
* Йәй көнө туғайҙа тәлмәрйенде аша атлаһаң, юл уңмай – уны урап үтергә кәрәк.
* «Кәбәк» тиһәң – кибә, «ҡандала» тиһәң – ҡаҙала.
* Кис иҙән һепермә – фәҡирлек килер.
* Кисен аҡса һанама – ҡулыңда аҡса тормаҫ.
* Кис көнө һағыҙ сәйнәһәләр, «үлгән кешенең үпкәһен сәйнәйһең», тиҙәр.
* Киҫкән тырнаҡты теләһә ҡайҙа ташлама:
шайтан килтереп ашыңа һалыр. Тырнаҡтан кеше бирән була. Нигеҙгә һал, йә утҡа яҡ.
* Көйәнтәне аша атланһаң, бот төбөңә ҡыяраҡ сыға.
* Күк ҡабағы асылғанда ни теләһәң, шул ҡабул була, имеш.
* Кәкүк ауылға осоп килһә, аслыҡ булыр.
* Кәкүк ҡапҡаға, йә өй эргәһендәге ағасҡа ҡунып ҡысҡырһа, шул ағасҡа һөт ҡоялар.
* Кәкүк ҡыйыҡ башынан осоп үтһә, ут сыға, тиҙәр.
* Кәкүк өй башына ҡунып ҡысҡырһа, өй хужаһы үлә, тиҙәр.
* Кәкүк яҙ көнө ағас япраҡ ярғас та ҡысҡырһа, аслыҡ булыр.
* Ҡаза килер булһа, ҡаҙ ҡоймаға менә.
* Ҡайын ағасында япраҡ ҡалһа, ҡатындарға ауырлыҡ, Имәндә япраҡ күп ҡалһа, ирҙәргә ауырлыҡ булыр.
* Ҡайын ултыртҡан кеше ҡайғылы була.
* Ҡара йыландың ҡаны етмеш төрлө имгә ярай.
* Ҡараңғыла ашама – кейәүең уғры булыр.

* Ҡойроҡло йондоҙ афәт килтерә.
* Ҡулды йыуғас, һелкеп сәсрәтһәң – шайтан күбәйә.
* Ҡыр ҡаҙын һанарға ярамай, иҫәбе юғала, ти.
* Ләйсән һыуын ете йыл һаҡлаһаң, ынйыға әйләнә.
* Мендәр-түшәк өҫтөндә икмәк ашама, атаң-әсәң үлер.
* Өй башына ҡоҙғон ҡунһа, ул өйҙән мәйет сығыр.
* Өй эсендә һыҙғырырға ярамай: ҡаза килер.
* Сәсте теләһә ҡайҙа аяҡ аҫтына, тышҡа ташларға ярамай: ҡош өйөрөлдөрөп, үҙ ояһына илтеп һалыр, ти. Кешенең шунан башы әйләнеүсән була.
* Сыңрау торна бейегән ерҙә иген булмай.
* Тауыҡ, өйрәк, ҡаҙҙы көтөү ҡайтҡанда баҫырға ултыртһаң, себеш күп була.
* Торнаны атырға ярамай.
* Туҙбаш йыланды үлтерһәң, йортҡа ҡаза килә.
* Утҡа төкөрмә, ауыҙың ҡутырлар.
* Һеперткене баштан юғары күтәрһәң, кеше үҫмәй, ти.
* Һайыҫҡан ҡыйыҡ башына ҡунһа, ҡайғы килер.
* Һыҙғырһаң, ел сығыр.
* Һыйыр игеҙ быҙаулаһа, йә үҙ башына, йә хужаның башына булыр.
* Эт олоһа, бәлә килә.

*Вариант:* Эт олоһа – ҡазаға.
* Этең олоһа, яманға юра.
* Әжәле еткән бесәй өй башына менеп һейә.



# АҢЛАТМАЛАР

Мәҡәл һәм әйтемдәр, тапҡырлыҡтары, шиғри нәфислектәре менән айырылып торған жанр булараҡ, дөйөм алғанда артыҡ киң аңлатыуҙарҙы талап итмәй. Шулай ҙа айырым осраҡтарҙа ҡайһы бер мәҡәлдәрҙең кинәйә мәғәнәһен төшөндөрөү, кәрәк урында тарихи-этнографик белешмәләр биреү кәрәк, тип табылды.

Башҡа телдәрҙән ингән, иҫкергән, йә булмаһа ерле һөйләштәрҙә генә осрай торған һүҙҙәргә һәм ер-һыу атамаларына аңлатмалар «Һүҙлек» өлөшөндә бирелде.

«Башҡорт халыҡ ижады» серияһының башҡа томдарында теге йәки был әҫәрҙең кемдән, ҡайҙа, ҡасан һәм кем тарафынан яҙып алынғанлығы тураһында мәғлүмәттәр бирелгән. Был китапта иһә, жанрҙарҙың үҙенсәлегенән сығып, сығанаҡтарҙың исемлеген күрһәтеү менән генә сикләнергә тура килде.

Йыйынтыҡта ҡулланылған шартлы ҡыҫҡартыуҙар түбәндәгесә:

ҒА – Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивы.

ғәр. – ғәрәп һүҙе.

д. – дело.

иҫк. – иҫкергән һүҙ.

монг. – монгол һүҙе.

оп. – опись.

рус. – рус теленән ингән һүҙ.

төрк. – төркисә.

фарс. – фарсы һүҙе.

ф. – фонд.

фраз. – фразеологизм.

һөйл. – һөйләш (диалект) һүҙ.



# 1. ХЕҘМӘТ

[1] Эшкә ҡарата.
[2] Тешлә – аша мәғәнәһендә.
[3] Тамаҡ эшләгән ерҙә туя, тигән мәғәнәлә.
[4] Булмаҫтай кешенән эш талап итеп йөҙәтмә, тигән мәғәнәлә.
[5] Эшкә йүнләп, шартына килтереп тотон, тигән мәғәнәлә, булһа кәрәк.
[6] Эшкә ҡарата ла, һүҙгә ҡарата ла әйтелә.
[7] Иртә тор, тигән мәғәнәлә.
[8] Иртә ятып, иртә тор, тигән мәғәнәлә.
[9] Эштең яйын белеү кәрәк, тигән мәғәнәлә.
[10] 1930 йылдарҙа мәҡәл былайыраҡ әйтелгән: «Ударник тырышып эшләр, лудыр (лодырь) бармағын тешләр».
[11] Оҫта ҡуллы, уңған кешегә күптәрҙең хәжәте төшә, тигән мәғәнәлә.
[12] Был донъяла эшләп ҡал!
[13] Эш һәр кемгә көсөнән килгәнсе, тигән мәғәнәлә.
[14] Тегеүсе, сигеүсе ҡыҙ-еңгәләр һүҙе. Әйтем.
[15] Эште бер көнгә кисектергәндән әллә ни зыян юҡ, тигән мәғәнәлә.
[16] Эште йәһәтерәк эшләү хәйерле.
[17] Балалығы китмәгән, эшкә йомшаҡ кешегә ҡарата.
[18] Үткән эштең онотолоуы хаҡында.
[19] Бушҡа көсәнеү, бушҡа ғәйрәтләнеүҙән көлөп әйтелә.
[20] Әкиәттән алынған. Эште бойороҡ менән генә эшләргә яратыусыларҙан көлөп әйтелә.
[21] Эшкә ялҡау кешегә ҡарата.
[22] Ниндәйҙер сюжетҡа бәйле.
[23] Ялҡау, вайымһыҙҙар һүҙе.
[24] Ваҡытын бушҡа үткәреүсе кешегә ҡарата.
[25] Итекселәр һүҙе.
[26] Күсмә мәғәнәлә: әсә һәм балаларға ҡарата әйтелә.

[27] Ямғырлы йылда иген уңыуына бәйле. Ямғыр көндәрҙә ялан эштәрен эшләп булмауҙан әйтелеүе лә ихтимал.

[28] Мәҡәл тура мәғәнәлә лә, күсмә мәғәнәлә лә йөрөй. Күсмә мәғәнәһе ир менән ҡатын мөнәсәбәтенә ҡарата әйтелә.

[29] Һуйып торған мал үрсей, тигән мәғәнәлә.

[30] Һуғым булыу яғынан.

[31] Көҙгө байлыҡта бар кеше лә бер, тигән мәғәнәлә.

[32] Мал аҫыраған интекмәҫ, тигән мәғәнәлә. Контексы: «Инде күп көтмәҫһең инде, быҙаулар һыйырың – тамыр тартҡан тарыҡмаҫ» (ҡуйын дәфтәренән).

[33] Бер һимеҙ мал ике арыҡ малға тора, тигән мәғәнәлә.

[34] Яҙғы көнгә ҡарата.

[35] Малға ҡарата.

[36] Тышаулы малға ҡарата.

[37] Ялҡауҙар һүҙе.

[38] Ҡаҙ йолҡҡанда әйтелә торған теләк һүҙ.

[39] Ниндәйҙер сюжетҡа бәйле. Ялҡаулыҡҡа ирония.

## II. ИЖТИМАҒИ ТОРМОШ

[40] Халыҡ һәм түрәләргә ҡарата.

[41] Кешене уйламай, үҙен генә ҡайғыртыусы дәрәжәле кешеләр, түрәләргә ҡарата әйтелгән.

[42] Ил эсендә төрлө кеше була, йәғни насар, алама бәндәләр ҙә юҡ түгел, тигән мәғәнәлә.

[43] Кеше иләндә үҙеңде һынатма, тигән мәғәнәлә.

[44] Имеш-мимешкә ышаныш, тыуған иләңдән китмә, тигәнде аңлата.

[45] Килмешәккә ҡарата.

[46] «...Яманлаһаң да бай яҡшы» – йомош төшһә, байға бараһың, тигән мәғәнәлә. Сағыштырығыҙ: «Яманла ла, байға бар, байға барһаң, табырһың».

[47] Ялсы бай эшен күңел биреп эшләмәй, тигән мәғәнәлә.

[48] Байға мал-мөлкәт тейешле ерҙән дә, тейешһеҙ ерҙән дә инә, тигән мәғәнәлә.

[49] Бай ҡыҙы иркә, ярлыныҡы уңған, тигән мәғәнәлә.

[50] Ярлыға, эшләп арығас, ҡаты урыны ла мамыҡ кеүек йомшаҡ тойола, байға йомшаҡ түшәге лә дегәнәктәй сәнскеле була (көндөҙ йоҡо туйҙыра), тигән мәғәнәлә.

[51] Донъя көтөргә хужаның үҙ күҙе кәрәк, тигән мәғәнәлә.

[52] Ер һатыуға бәйле мәҡәлдәрҙең тарихи ерлеге нигеҙҙә XIX быуаттың икенсе яртыһына ҡайтып ҡала. 1869 йылдың 10 февралендә батша хөкүмәте башҡорттарға үҙҙәренең наделдарынан «артҡан» ерҙәрен «ирекле һатыуҙы» рөхсәт итеү тураһында закон сығара. Ошо закондан һуң

башҡорт общиналарын асыҡтан-асыҡ талау башлана. Килтерелгән мәҡәлдәрҙә ана шул хәл-ваҡиғаларға ҡарата халыҡтың мөнәсәбәте сағылған.

[53] Ялсылар һүҙе.

[54] Байлыҡ-дәүләт бер килгән ергә килә, тигән мәғәнәлә.

[55] Түрәлеккә өндәү.

[56] Кеше байыған һайын һаранлана бара, тигән мәғәнәлә.

[57] Эшләгән ерендә тамағы туя, тигән мәғәнәлә.

[58] Игенсе һүҙе.

[59] Был бүлектә бирелгән мәҡәлдәрҙә дин әһелдәренә, айырыуса муллаларға, ҡарата нигеҙҙә кире мөнәсәбәт белдерелә. Был күренеште Совет осорондағы сәйәсәт һөҙөмтәһе итеп кенә ҡарарға ярамай. Беҙҙенсә, уларҙа ғөмүмән муллалар хаҡында түгел, ә насар муллалар тураһында һүҙ бара.

[60] 1812 йылғы Ватан һуғышы йылдарында сыҡҡан мәҡәл.

[61] Кешеләр үҙ-ара буталышҡан арала үҙ файҙаңды күреп ҡалыуға миҫал йөҙөнән.

[62] 1941–1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тыуған мәҡәлдәр.

[63] Үрҙәге аңлатманы ҡарағыҙ.

[64] Донъя күргән кеше хәүеф-хәтәрҙе алдан һиҙеүсән була тигән мәғәнәлә.

[65] Ҡатай, бөрйән – башҡорт ырыуҙары. Ҡатайҙар – сәсән, бөрйәндәр – һуғышсан, тигән мәғәнәлә.

[66] Тыныс торған илде болғатма, тигән мәғәнәлә.

[67, 68] Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тыуған мәҡәлдәр.

## III. КӨНКҮРЕШ, ЙОЛАЛАР, ҒАИЛӘ, ТУҒАНЛЫҠ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ

[69] Һәйбәт ҡыҙҙы ҡулыңдан ысҡындырма, тигән мәғәнәлә.

[70] Күңелеңә оҡшаған ҡыҙҙы ваҡытында алып ҡалыуың хәйерле, тигән мәғәнәлә.

[71] Ҡыҙ алғанда мәһәр, ҡалым биреүе бар, тигәне.

[72] Мөхәббәт ялҡыны ҡыҙыу, тигәнде аңлата.

[73] Ҡыҙҙы димләй генә бел, тигән урында әйтелә.

[74] Тотанаҡһыҙ, намыҫһыҙ ҡатын-ҡыҙға ҡарата.

[75] Ҡыҙҙы урлап алыу борон башҡорттарҙа шаҡтай йыш осрай торған күренеш булған. Мәҡәлдә оно нәмә бик асыҡ сағыла. Шуңлыҡтан был мәҡәлдең «Ат урлаған бур булыр, ҡыҙ урлаған дуҫ булыр», тигән варианты ла бар.

[76] Хәлле кешегә ҡыҙ бирсүгә ҡарата.

[77] Ҡыҙҙы ата-әсәһенә ҡарап һайла, тигән урында.

[78] Кейәүгә киткән ҡыҙға әсә кәңәше. Нисек тә ярарға тырыш, тигән мәғәнәлә.

[79] Өйләнгәндә, иң элек ата-әсәһенә ҡара, тигән мәғәнәлә.

[80] Мәғәнәһе: буйҙаҡ йөрөү үҙеңдән.

[81] Ҡыҙ һайлауға ҡарата.

[82] Һөйгәненең кәмселектәрен күрмәй.

[83] Мөхәббәткә ҡарата.

[84, 85] Ҡыҙҙың намыҫына теймә, тигән мәғәнәлә.

[86] Башҡорттар нәҫел тамыры ете быуынға тиклем үтеп керә, тип иҫәпләгәндәр. Ете быуындан һуң – ят бауыр. Һигеҙенсе һәм унан һуңғы быуындарға ҡыҙҙы бирергә мөмкин булған.

[87] Ҡыҙҙар артынан йөрөүгә ҡарата. Ике ир бер ергә һыймаҫ, тигән мәғәнәлә. Бер ерҙә ике башлыҡ һыйышмай, тигән осраҡта ла ҡулланыла.

[88] Өйләнеүгә ҡарата.

[89] Уйнаш.

[90] Йортҡа кереү – ҡатындың әҙер йортона барып кереү.

[91] Кейәү йәки ҡыҙ һайлағанда әйтелә.

[92] Ҡыҙы булһа, егете табыла, тигән урында.

[93] Боронғо туй йолаһына бәйле мәҡәл. Элек кейәүҙәр ҡыҙ янына һәр аҙна кис килеп, кейәүләп йөрөр булғандар. Шул кейәү килер көн ҡыҙға бик оҙаҡ тойолған, күрәһең.

[94] Шулай уҡ туй йолаһына бәйле мәҡәл. Ғәҙәттә туй ваҡытында ҡыҙ ҡушыу бер еңгәгә тапшырыла. Кейәү аҡсаһын, бүләген йәлләмәһә, еңгәһе тәрбиәһен йәлләмәй, тигән мәғәнәлә.

[95] Мәғәнәһе: «Кем менән даның сыҡһа, шуның менән йәнең сыҡһын» тигән мәҡәлдең мәғәнәһенә тура килә.

[96] Тол ҡатын ирһеҙ оҙаҡ тормаҫ, тигән мәғәнәлә.

[97] Ҡыҙ намыҫына ҡарата.

[98] Туйҙа бауырһаҡ аҡсаһы һалыуҙан.

[99] Һәр кемгә үҙ эше.

[100] Йөрөмсә иргә ҡарата.

[101] Утын ал – ут көйөк үткерен, уңғанын ал, тигән мәғәнәлә.

[102] Ҡыҙҙарҙы ҡарата белеүгә.

[103] Туй йолаһына бәйле. Мәһәр аҡсаһы туй ашам-эсеменән уҙмай, тигән мәғәнәлә.

[104] Ҡыҙҙар һүҙгә оҫта була, егеттәрҙе тиҙ алдайҙар, тигән урында.

[105] Мәҡәлдә боронғо патриархаль ҡараш сағылған.

[106] Дәрт, мөхәббәткә ҡарата.

[107] Ваҡытынан элек өлгөргән ҡыҙ йәки егеткә ҡарата.

[108] Ҡатындар артынан йөрөүгә ҡарата.

[109] Ҡатындар артынан йөрөүгә ҡарата.

[110] Яҡшы килен яҙ килер – яҙғы эш ваҡытында килер, эшләшер, шуға яҡшы булыр, тигән мәғәнәлә.

[111] Ҡыҙ намыҫына ҡарата.

[112] Сәсәндәрҙән ҡалған һүҙ. Был әйтемде Ишембай районының Күнйәбулат ауылында Сынтимер Әмирхановтан (1888 йылғы) Ф.А.Нәҙершина яҙып алды (1968 йылғы фольклор экспедицияһы материалдары, ФА, ф. 3, оп. 65, д. 4).

[113] Буйҙаҡтар һүҙе.

[114] Мәҙәккә бәйле.

[115] Ҡыҙ димләгәндә әйтелә. «Еләнс ҡыҫҡараҡ – малһыҙ, фәҡирерәк» тигән мәғәнәлә.

[116] Ике мәғәнәлә ҡулланыла: 1) Ваҡытында форсат таба алмай, аптырабыраҡ ҡалған, йомшаҡ кешегә ҡарата әйтелә; 2) Күрә йөрөп тә, ҡауыша алмауға миҫал.

[117] Ҡыҙ ҡушҡанда әйтелә.

[118] Тыуа-тыуғандан уңған ҡыҙ, тигән мәғәнәлә.

[119] Туй йолаһына бәйле. Балдыҙ-ҡәйнештәр һүҙе. Ҡыҙ янына инер өсөн кейәү ҡәйнештәренә аҡса, бүләк бирергә тейешлектән.

[120] Киленде башлап күргәндә әйтелә торған теләк һүҙе.

[121] Ҡыҙ оҙатҡанда әйтелә.

[122] Борон ҡыҙҙарҙы ҡарт кейәүгә биреүҙән.

[123] Ҡыҙ балаға ҡарата.

[124] Ҡыҙҙы оҙатҡанда, ата-әсәләр әйткән.

[125] Киленде һыу башлатҡанда әйтелә.

[126] Ҡыҙ оҙатҡанда әйтелә.

[127] Мөхәббәт һәм үпкәгә ҡарата.

[128] Ата-әсәгә кәңәшһеҙ өйләнеү, йәки кейәүгә барыу мәҡәлдәрҙә хупланылмай.

[129] Боронғо кинәйәле һөйләштең асыҡ миҫалы. Ҡыҙ ҡоҙалағанда әйтелгән «Ашайыҡ» – йүнәләйек, барайыҡ мәғәнәһендә.

[130] Ағай-эне бер үлелә кәрәк – ...күмешкәндә кәрәк, тигән мәғәнәлә.

[131] Мәғәнәһе асыҡ түгел. «Елгәнсе» урынына «килгәнсе» булырға мөмкин. Ул осраҡта «Ағайым алғансы, еңгәм килгәнсе (яҡшы)» тигән мәҡәлдең бер төрө була.

[132] Ала булыр – төрлө хикмәткә инер.

[133] Мәҡәл көнсөллөктө тәнҡитләй.

[134] «Ҡатын балаһы менән матур», тигән мәғәнәлә.

[135] Туған-ырыу, нәҫел-нәсәпкә ҡарата.

[136] Нәҫел-нәсәпле кешеләрҙең ырыуы юғалып бөтмәй, тигән мәғәнәлә.

[137] Баланды йәшләй тәрбиәлә, тигәне.

[138] «Әсә» һүҙенең «ана» формаһы бында өндәр гармонияһы талаптарына буйһоноп килә.

[139] Ата менән әсә бер генә була, тигәнгә миҫал.

[140] Мәҡәлдең ике мәғәнәһе бар: 1) Батыр халҡын, ырыуын ташламаҫ; 2) Ата балаларын, ғаиләһен ташламаҫ, тигәнде аңлата.

[141] Ирең йүнһеҙ булһа, балаң яттан булыр, тигән мәғәнәлә.

[142] Алама булһа ла үҙ ирең, үҙ ҡатыныңң яҡыны, тигән урында әйтелә.

[143] Алтмыштағы атаңдың ипләп-йүнләп көсөн күр, тигән мәғәнәлә.

[144] Яҡшы бисәнең алама ир ҡулында ҡәҙере юҡ, тигән фекер ята.

[145] Туған-ырыуыңдың алыҫтараҡ булыуы хәйерле, тигән мәғәнәлә.

[146] Мәғәнәһе: донъяң, ғаиләң ауырлығын үҙең йөклә, кешегә һалынма.

[147] Бынамын тигән кешеләрҙе лә шул ябай ғына әсәләр табып, тәрбиәләп үҫтерә, тигәнде аңлата.

[148] Иргә ҡарата, ир ғаиләһенән китә алмай, тигән мәғәнәлә.

[149] «Донъя ауырлығын ир күтәрһен» тигән урында әйтелә.

[150] Атҡа ҡарата ла, балаға ҡарата ла әйтелә.

[151] Ҡарамаһаң, китеп тә барыр.

[152] Был мәҡәлдең ике мәғәнәһе бар: 1. Улды ата белмәй, ҡыҙҙы инә белмәй; 2. Ығы-зығы мәғәнәһендә. Әйтәйек, шундай контекста: «Эй, шаяра бала-саға – ата улды белмәй, инә ҡыҙҙы белмәй».

[153] Үҙең тир түгеп тапҡан мал булмағас, ҡәҙерен белмәйһең, шуға күрә ҡулда тормай. Ҡатай – башҡорт ырыуы. «Атай малы – ҡатай малы» – икенсе бер башҡорт ырыуы араһында тыуған мәҡәл булырға тейеш.

[154] Мәғәнәһе: атаң үҙе ҡол урынына эшләй.

[155] Атаң һөнәрен отоп ҡал, тигән мәғәнәлә.

[156] Яман ҡатынға ҡарата.

[157] Ҡатынға ҡарата.

[158] Йолаға бәйле мәҡәл. Шул һүҙҙәрҙе әйтеп йәш баланы башта бал-май менән ауыҙландырғандар.

[159] Яңынан ҡалым түләргә кәрәк. Элекке мәҡәл.

[160] Ғаиләлә баш була белеү тураһында.

[161] Ир менән ҡатындың тигеҙ ғүмер итеүе хәйерле тигәнгә миҫал.

[162] Хәҙерге мәҡәл.

[163] Йүнһеҙ ирҙе ир иткәнсе, ҡатын үлер сиккә етә, тигән мәғәнәлә.

[164] Һүҙ изгелек күреү тураһында бара.

[165] Туған-ырыулыҡ мөнәсәбәттәренең ҡаҡшай башлаған дәүерендә тыуған мәҡәл.

[166] Ғаиләлә бала төрлө холоҡло була тигәне.

[167] Мәҡәл дә, йомаҡ та булып йөрөй.

[168-171] Левиратҡа бәйле мәҡәлдәр. Ағай үлһә, еңгәне ятҡа бирмәү (заманында ҡалым түләгәндән) йолаһының бер сағылышы.

[172] Күп ашай, тигән мәғәнәлә. Эләккәндә ашап ҡалырға тырышыуҙан.

[173] Тол ҡатынға ҡарата ғәйбәт таратыуҙан.

[174] Үгәй әсәләр һүҙе.

[175] Кем туйҙыра, шул атай була, тигән мәғәнәлә. Бөгөн берәүҙә, иртәгә икенселә.

[176] Мәғәнәһе: ир менән ҡатындың һүҙе бер.

[177] Ирле-ҡатынлы булыуға ҡарата.

[178] Ҡыҙҙар намыҫына ҡарата.

[179] Әсә һәм балаларға ҡарата.

[180] Мәғәнәһе: Ирҙең йөҙөн йыртма.

[181] Баланы әсә туйҙырһын, тигән мәғәнәлә. Ир өйҙән сыҡһа бәрәкәт – табыш килтерер.

[182] Ҡатыны кейемһеҙ, иренең еңе йыртыҡ.

[183] Балаға ҡарата.

[184] Ир менән ҡатын, туған-ырыу араһына кермә, тигәнде аңлата.

[185] Ҡәҙерләп, яйына-көйөнә генә тороуҙан.

[186] Мәҡәлгә ҡарата бер информаторҙың репликаһы. «Бәпесен бәүетеп кенә ярамаһаң!» (Ишембай районы).

[187] Ҡәйенһеңле булһа, килен һыймай тигәнгә ишара.

[188] Туй йолаһына бәйле. «Ҡотло аяғы менән килһен» тип, аттан төшкәндә, киленде мендәргә баҫтырыуҙан алынған.

[189] Туй йолаһына бәйле. Килен төшкәндә инселәп, малға таяндырыуҙан.

[190] Йолаға бәйле. Элек бармаҡ шешһә, көндәшле йорттағы ҡолға тыҡҡандар. Ундай күл, йәнәһе, зәһәр була һәм шеште тиҙ бөтөрә.

[191] Бала тәрбиәләүгә ҡарата.

[192] Ғаиләлә, ирена ғоғро буя тигән мәғәнәлә.

[193] Ҡатын-ҡыҙ ашамһаҡ була, тигән мәғәнәлә.

[194] Ҡатын-ҡыҙҙың бәхете бер булмаһа, бер булыр, тигән мәғәнәлә.

[195] Үҙең яусы булырһың.

[196] Йолаға, ырымға бәйле. Элек ҡоҙа менән ҡоҙаса «һыйыр уңа, һыйыр уңа» тип ҡытыҡлашыр булғандар.

[197] Кейәү тупһаһында йәшәү ауыр тигәне.

[198] Өйҙә ҡәйенһеңле булһа, килен һыймай, тигән урында әйтелә.

[199] ... Өйгә ҡытлыҡ – ҡыҙ үҙе менән кейәү йортона өй эсе йыһаздары, мал-тыуар алып китеүгә ҡарата әйтелгән.

[200] Ҡыҙ намыҫы ҡәҙерле, тигән мәғәнәлә.

[201] Еткән ҡыҙың ирҙә булһын, малайың тырыш, донъя көтөрлөк булһын, тигән мәғәнәлә.

[202] Ҡыҙын теләһә кемгә бирмәҫ, тигән урында әйтелә.

[203] Яусы күп килеүгә ҡарата. Эт сит кешегә күп өрөүсән.

[204] Ҡыҙ күп тыуған йыл илдә тыныслыҡ була, тигән ышаныуға бәйле.

[205] Ҡыҙ тәрбиәләүҙең ауырлығы хаҡында.

[206] Ата-әсә ҡәҙерен.

[207] ... ҡыштыр ирең булһын тип тә әйтәләр.

[208] Ир менән ҡатын мөхәббәтенә ҡарата.

[209] Беренең ебре беренә ярамай, хәбәрҙәре берекмәй тигән мәғәнәлә. Йомаҡ та булып йөрөй. Ул осраҡта йүшкә ҡапҡастары күҙ уңында тотола.

[210] Төрлө ырыу кешеләрен никах ҡуша, тигән мәғәнәлә.

[211] Балаң өстән дә кәм булмаһын, тигәндә әйтелә.

[212] Ҡатын балаһы менән йәмле, ҡәҙерле, тигән урында әйтелә.

[213] Әсә матурлығына ҡарата.

[214] Бала холоҡһоҙлоғо хаҡында.

[215] Нәҫел-нәсәпле булыу хәйерле, тигән мәғәнәлә.

[216] Киленгә ҡарата.

[217] Саманан тыш иркәләтеү һөҙөмтәһе.

[218] Етем балаға ҡарата...

[219] Туғандағы мал юғалмай, тигән мәғәнәлә.

[220] Татыу ғаиләлә бәрәкәт бар, тигән мәғәнәлә.

[221] Илдең даны тыуҙы, тигән мәғәнәлә.

[222] Ҡыуанысынан.

[223] Олоғайғас бала ҡарауҙың ауырлығына ҡарата.

[224] Холоҡһоҙ ҡатынға ҡарата.

[225] Насар ир ҡулында яҡшы ҡатындың ҡәҙере юҡ, тигән мәғәнәлә.

[226] Мәғәнәһе бик асыҡ түгел. Ирҙән айырылып, эне йортона ҡайтҡан ҡыҙ әйткән булыуы ихтимал.

[227] Булыр бала хаҡында.

[228] Кейәүгә сыҡҡан ҡыҙға теләк һүҙе.

[229] Бала тыуғас әйтелә торған һүҙ.

[230] Фәҡирлеккә кинәйә. Кеше үлгәс, һуңғы мөмкинселегеңде файҙаланып булһа ла, хәйер-саҙаҡа, аш-һыу әҙерләп, ҡөрьән уҡытыуҙан. Ниндәйҙер сюжетҡа бәйле.

[231] Ҡатындар ҡыҙҙарға әйтәләр: «Минең инде булаһым булған – буяуым һеңгән. Ҡыҙ кеше һин ипле, һин матур бул, тигән урында.

[232] Балаға теләк. Ҡәйнәләр һүҙе.

[233] Уйнаштан тыуған балаға ҡарата.

[234] Нәҫел-ырыу менән ғорурланыу.

[235] Әсәһенән ҡатынын яҡынырак күргән улдарға ҡарата.

[236] Ирем – терәгем, һыйыныр ерем, тигән мәғәнәлә.

[237] Йүнен – бында байлығын, мөлкәтен, тигән мәғәнәлә.

[238] Килендәр һүҙе. «Донъяға үҙем хужа хәҙер» тигән урында әйтелә.

[239] Бер ҡунаҡ хужаның киленен, уның ашын маҡтай икән дә, ҡәйнәһе: «Киленем әйбәттән түгел, мейесем әйбәттән», – ти икән.

[240] Балаға ҡарата.

[241] Нәҫел-ырыуһыҙ кешегә ҡарата.

[242] Ҡыҙҙар ҡатындар менән әрепләшкәндә бисәләрҙең яуап һүҙе.

[243] Йәш киленгә, ҡатынға ҡарата.

[244] Шул һүҙҙәрҙе әйтеп, ҡыҙ баланы һөйәләр.

[245] Ыҙғыш-талаш өйҙән сыҡмаһын, тигән мәғәнәлә.

[246] Ғәҙәттә ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. Элек шырпы юҡ ваҡытта, күршенән ут-ҡуҙ алыуға бәйле.

[247] Туғанлыҡ бөткән, тигән мәғәнәлә.

[248] Иҫкергән мәҡәл.

[249] Егет егет эҙенән йөрөр, тигән мәғәнәлә.

[250] Аҡ йыландар батшаһы – уға тейергә ярамай тигән ышаныуға бәйле.

[251] Башҡортта ҡояш байығас, аҡ (һөт-ҡатыҡ) йөрөтөү тыйыла (мал ҡото китә тигән ышаныуҙан сығып). Яҡын күршең өсөн хатта ошо ышаныу ҙа иҫәпкә алынырға тейеш түгел, тигән мәғәнәлә, буғай.

[252] Әйберҙең ҡулда барҙа ҡәҙере юҡ мәғәнәһендә.

[253] Әйтем булғанда етешһеҙ донъяға ҡарата әйтелә. Йомаҡ булғанда – һыйыр теле.

254 Бик бай, мул тормошҡа ҡарата әйтелә.

255 Йортһоҙ, өйһөҙ ҡалған осраҡта әйтелә.

256 Эштең файҙаһына ҡарағанда, уның артынан йөрөү, ҡыялыу ҡыҙыҡ, тигән мәғәнәлә.

257 «Юҡ» тип яуап бирсү анһат, тигән мәғәнәлә.

258 Ала ҡар – яҙғы ер асылғандағы ҡар, йәғни «яҙғы өҙөктә аласағың булһын» тигән мәғәнәлә.

259 Алмаҡтың бирмәге бар. Бурыс түләү туй мәшәҡәтенән еңел түгел, тигән мәғәнәлә.

260 Элек, шырпы булмаған заманда, күршегә утҡа йөрөүҙән ҡалған.

261 Һыйыр тип баҙарҙан үгеҙ алып ҡайтҡан бер байғош әйткән, имеш. Хужа Насретдин исеменә лә бәйләп һөйләйҙәр.

262 Ойоғанын көтмәй, һөт көйөнсә эсеп бөтөрөүгә ҡарата.

263 Аслыҡ йылы мал тиреһен өтөп ашауҙан.

264 Сәсәндәрҙән ҡалған һүҙ.

265 Кешенекен ашауға ҡарата.

266 Ғәйепләштән булмаһын, тигән мәғәнәлә.

267 Ҡашыңды бир – йөҙөң асыҡ булһын, тигән мәғәнәлә.

268 Аш бешкән өйгә инһәң, кире сыҡма, тигән мәғәнәлә.

269 Запасһыҙ кешегә ҡарата.

270 Мәшәҡәте, ҡыйынлыҡтары күп.

271 Элекке ҡытлыҡ заманда әйтелгән мәҡәл.

272 Яҙ көнө аҙыҡ аҙайыу, көҙгө байлыҡҡа ҡарата.

273 Тура мәғәнәлә лә, ситләтелгән мәғәнәлә лә ҡулланыла. Күсмә мәғәнәһе: ғәйепһеҙ кеше булмай.

274 Күсмә мәғәнәһе: кешенең тышҡы ҡиәфәтен күр ҙә, үҙенән төңөл.

275 Ирония, булһа кәрәк.

276 Туйҙа сәксәк сығарыуға бәйле. Сәксәк сығарылғанда аҡса һалына.

277 Сәй тәндән тиҙ сығып бөтә, тигән мәғәнәлә.

278 Ниндәйҙер сюжетҡа бәйле вариант. Танһыҡ – бер килен исеме.

279 Күсмә мәғәнәлә йөрөгәндә, хужалар, түрәләр янында йөрөгән ялағайҙарға ҡарата.

280 Аҙыҡ запасының кәмеүе һәм бөтөүенә ҡарата.

281 Туҡлыҡ-муллыҡ булһа, алтын-көмөштөң хаҡы бөтә, тигән мәғәнәлә.

282 Ҡайғылы саҡта әйтелә.

283 Ҡаҙ йәки тауыҡ биргәндә әйтелә торған һүҙ.

284 Быйылғы йылдың үлән-емешен беренсе ҡат ауыҙ иткәндә әйтелә. Сирҙәрҙе ҡасырырға теләү ниәтендә әйтелгән боронғо ырым һүҙҙәре.

285 Үрҙәге аңлатманы ҡарағыҙ.

286 Көҙөн аҙыҡ мул, тигән мәғәнәлә.

287 Ҡаҙ өмәһендә, ғәҙәттә, борай йәки бойҙай буткаһы бешереү йолаһына бәйле.

288 Аша, һый эйәһен тикшермә, тигән урында әйтелә.

289 Йор һүҙ. «Өшөнөм, ҡаттым» тигәнгә шаян кәңәш.

290 Рустан ингән: «По усам текло, в рот не попало».

[291] Ҡаҙ-тауыҡ бүлгәндә әйтелә торған һүҙ.

[292] «Һарт» тип, үзбәктән килгән кешеләрҙе йөрөтәләр. Әй буйында, Курған өлкәһендә һарт ырыуҙары бар. «Алты һартҡа бер тартай» ирония, үзбәктәр ҡаты була, уларҙың алтыһына бер тартай ҙа етә, тигән мәғәнәлә.

[293] Сентябрь – көҙгө муллыҡ, март – яҙғы өҙөклөк айы.

[294] Был мәҡәл тура һәм күсмә мәғәнәлә йөрөй. Күсмә мәғәнәһе: алтынды бысраҡҡа буяп ташлаһаң да ялтырай, тигән кеүек.

[295] Кеше араһына кереүгә ҡарата.

[296] Мәҡәлдең күсмә мәғәнәһе: «Яңы дуҫ таптым тип, иҫкеһен ташлама».

[297] Яңы күлдәк кейгәндә әйтелә торған теләк һүҙе.

[298] Ҡыҙҙар яңы күлдәк кейгәндә әйтәләр.

[299] Күп йөрөгән, күп килгән кешегә ҡарата.

# IV. ШӘХСИ СИФАТТАР. ӘХЛАҠ-ӘҘӘП ҠАҒИҘӘЛӘРЕ. АРАЛАШЫУ. ТЕЛ ҺӘМ ҺҮҘ, АҢ-БЕЛЕМ

[300] «Һимеҙмен» тип зарланған кешене тынысландырыу өсөн әйтелә.

[301] Ғәйепһеҙ кеше булмаҫ, тигән мәғәнәлә.

[302] Русса нан: «В здоровом теле – здоровый дух».

[303] Көнсөллөккә ҡарата.

[304] Хәйләнс күп ҡулланһаң, сере асылыр, тигән мәғәнәлә.

[305] Кешенең хәле уның башҡарған вазифаһына ҡарап, тигән мәғәнәлә.

[306] Гел әрләшеп, абалап торған кешегә ҡарата.

[307] Һаран кеше хаҡында.

[308] Торомтай бик шәп үҫһә лә, турғайҙы ҡуйып, ҡаҙ аулай алмай, тигән мәғәнәлә. *Ҡоро йылғырлыҡ менән генә эш ҡыйратып булмай* тигән урында ҡулланыла.

[309] Матурлыҡҡа ҡарата.

[310] «Һыйпағанды һыйыр ҙа белә» тигән варианты ла бар. Конкрет осраҡта мәҡәлдең икеһе лә урынлы.

[311] Әрһеҙ кеше түҙем була, тигән мәғәнәлә.

[312] Үҙен юғары һанаған, маһайыусан кешегә кинәйә. Заманында әйтемдең тура мәғәнәлә лә ҡулланылған булыуы ихтимал (Сыңғыҙ хан һәм уның биләмәләренә бәйле).

[313] Һүҙҙе ике төрлө һөйләүсе, хәйләкәр, яуыз кешегә ҡарата әйтелә.

[314] Билдәле бер төбәктә генә ҡулланыла торған әйтем. Был әйтем Учалы районының Байрамғол совхозында яҙып алынған.

[315] Маҡтансыҡ, тәкәббер кешегә ҡарата әйтелә. Майҡы бей – Сыңғыҙ хан әмирҙәренең береһе.

[316] Шаҙра кешегә ҡарата үртәмеш һүҙе.

[317] Хаин булма, тигән мәғәнәлә.

[318] Ат, бигерәк тә арғымаҡ, толпар образдары мәҡәлдәрҙә күс, батырлыҡ символы булып тора.

[319] Батыр үлһә лә даны ҡалыр, тигән мәғәнәлә.

[320] Бөркөт, ыласын, ҡарсыға – мәҡәлдәрҙә батырлыҡ символы.

[321] Бүрегенән танырмын – бүрсе лә бүре тиреһенән булыр.

[322] Дошманға сер аса, тигән мәғәнәлә.

[323] Ҡуян – мәҡәлдәрҙә ҡурҡаҡлыҡ символы.

[324] Батырҙарҙан дан ҡалыр, тигән мәғәнәлә.

[325] Кеше арҡаһында кеше булыуға ҡарата.

[326] Хәжәте төшмәҫтәй әйбергә кешенең иҫе китмәй, тигән мәғәнәлә.

[327] Кешенең хәтерен, кәйефен ҡырыуға күп кәрәкмәй, тигән мәғәнәлә.

[328] Үсәү һүҙе.

[329] Рус эквиваленты: «Моя хата с краю, ничего не знаю».

[330] Кешенең яҡшыһы ла, яманы ла бар тигән мәғәнәлә.

[331] Яуызлыҡты башта уҡ бөтөр, тигән мәғәнәлә.

[332] Хәйләкәр, мәкерле кешегә ҡарата.

[333] Хәҙерге заманда башлыса мәҡәлдең тәүге өлөшө генә ҡулланылышта.

[334] Ҡара эсле, яуыз уйлы кеше тураһында.

[335] Ҡағыҙға эләккәнсе башты ташҡа бәреү еңелерәк, тигән мәғәнәлә.

[336] Ҙур ғәйепте йәшереү ҡыйын, тигән мәғәнәлә.

[337] Борон, тимер перолар юҡ саҡта, ҡаҙ ҡанаты менән яҙыуҙан.

[338] Аңын-тоңон белмәйенсә, теләһә ниндәй ҡағыҙға ҡул ҡуйып барма, тигән урында әйтелә.

[339] Ниндәйҙер сюжетҡа бәйле.

[340] Ике колхозды бергә ҡушыу яҡшы булманы, тигән урында.

[341] Тирә-яғыңа ҡарап һөйләш, тигән урында әйтелә.

[342] Кеше бер нәмә тураһында һүҙ алып барғанда, һөйләшеүҙе икенсегә борорға тырышҡан кешегә ҡарата әйтелә.

[343] Һүҙгә ҡарата ла, эшкә ҡарата ла әйтәләр.

[344] Һүҙеңде алдын-артын ҡарап һөйлә, тигән урында.

[345] Ауыр һүҙҙең хәтер ҡалдырыуы тураһында.

[346] Ҡаҙан янында ҡатын-ҡыҙ күп булыуҙан.

[347] Серҙе асмау хәйерле, тигән мәғәнәлә.

[348] Ауыр һүҙ, ҡыйырһытыуҙың эҙһеҙ ҡалмауына ҡарата.

[349] Ҡәҙер кисендә күк ҡабағы асыла икән, тигән ышаныуға бәйле.

[350] Юҡ һүҙҙе ҡабартып һөйләгәндә, яуап урынына әйтелә.

[351] Нисә һөйләһәң дә, шул бер һүҙ булыр, тигән мәғәнәлә.

[352] Ҡаты һүҙ күңелдән китмәй тигән урында.

[353] Әҙәби сығанаҡтан.

[354] Әҙәби сығанаҡтан.

[355] Артыҡ тура булыу файҙаһыҙ, тигән мәғәнәлә.

[356] «...һөйләй белгән сәсән тел яу килгәндә ҡайырған» борон сәсәндәрҙең ил ағалары булып, төрлө дау-яуҙарҙа ҡатнашыуынан.

[357] Тупаҫ телле кешегә ҡарата әйтелә.

[358] Берәр алама хәбәр әйткәндә ҡулланыла.

359 Ҡаты серле булыуға ҡарата.

360 Ике, йә бер нисә кеше һөйләшкәндә, уларҙың телен аңлай торған икенсе милләт кешеһенә ҡарата.

361 «Билләһи» тип, ант итеүгә яуап һүҙе.

362 Билдәһеҙ һөйләгән осраҡта («шулайҙыр»...) яуап рәүешендә әйтелә.

363 Ҡарғыш һүҙгә яуап рәүешендә әйтелә.

364 Кешене үҙе юҡта әрләү, урынһыҙ ғәйрәтләнеүҙән көләп әйтелә.

365 Ниндәйҙер сюжетка бәйле.

366 «Тик» тигән һүҙгә яуап итеп әйтелә.

367 Телде аңламаған кешегә ҡарата.

368 Бына һиңә кәрәк булһа, тигән мәғәнәлә.

369 Хәбәр ишетеүгә ҡарата. Йомаҡ та булып йөрөй (хат, хәбәр).

370 Ҡайһы ваҡытта «ярар» тип ҡотолоу ҙа хәйерле, тигән мәғәнәлә.

371 Тура мәғәнәлә лә, күсмә мәғәнәлә лә йөрөй. Күсмә мәғәнә булғанда: үҙ аҡылың менән эш ит.

372 Наҙан кешене үҙеңә буйһондороу ауыр түгел, тигән урында.

373 Аҡыл йәшкә ҡарап булмай, тигән урында.

374 Ҡауырый тотоу – ҡаҙ ҡанаты менән яҙыу.

375 «Һаңғырау», «Һуҡыр» мәҡәлдәрҙә күпселек осраҡта наҙанлыҡ төшөнсәһен белдерә.

376 Ушы киткән кешегә ҡарата (Дәүләкән районының Мерәҫ ауылында яҙып алынды).

377 ...ғалим үлһә, хат ҡалыр – бында: яҙыу ҡалыр мәғәнәһендә.

378 Буталсыҡ заманда тыуып, етерлек ғилем ала алмаған кешегә ҡарата.

379 Буйға үҫкән, аҡылға таҡырыраҡ тигән мәғәнәлә.

380 Көләп әйтелә.

381 Бирәү ҙә аҡылһыҙ түгел, тигән мәғәнәлә.

## V. ДОНЪЯ, ҒҮМЕР, ЯҘМЫШ ТУРАҺЫНДА УЙЛАНЫУҘАР

382 Самаһыҙ эшкә, самаһыҙ ҡыланған кешегә ҡарата. Йомаҡ булып йөрөгәндә – һайыҫҡан.

383 Ғүмер үтә тора, ҡәҙерен бел мәғәнәһендә.

384 Ҡартайғас, бала аҡылы керә, тигән мәғәнәлә.

385 Боронғо ырымға бәйле.

386, 387 Шулай уҡ ырымға бәйле мәҡәл. Билдәле булыуынса, борон башҡортта төрлө дәһшәтле сирҙәрҙе «ҡурҡытыу» ниәтендә ул ауырыуҙарҙың исемдәрен атап әйтеү тыйыла торған булған (табу күренеше). Дим буйы башҡорттары араһында, мәҫәлән, был хәл әле лә осрай. Унда, әйтәйек, тапма йәки быума сире менән ауырыған кешегә «быумаһы тотҡан» тимәйҙәр, «өйәнәге тотҡан», тиҙәр. Ә инде һалҡын

тейсү, тымау сирҙәрен «атһыҙ (исемһеҙ) ауырыу» тип йөрөтәләр. «Атын атама, аҙашып китһен», «Атһыҙ ауырыуҙың аты ҡороһон» кеүек мәҡәлдәрҙең тамыры ана шул табу күренешенә барып тоташа.

388 Ҡутыр ҡамыштан – ҡул киҫелеп, ҡутырлауҙан әйтелгән, булһа кәрәк.

389 Ауырыу үлмәҫ. Ауырыу кеше үҙен һаҡлаусан була, тигән фекерҙән сығып әйтелгән.

390 Күрәһең, ошо ышаныуҙан сығып, башҡорттар иттең биҙен ашамайҙар.

391 Ышаныуҙарға бәйле.

392 Дини мәҡәл.

393 Ҡарт кешенән көлгәндең ғүмере оҙон була, йәғни үҙе лә ҡартайыр, тигән ышаныуҙан.

394 Үлгәс, барыбыҙға ла урын табылыр, тигән мәғәнәлә.

395 Ҡоро һөйәк – ҡарт һөйәк.

396 Йолаға бәйле. Элек ҡыҙылса менән ауырығанда, баланы күҙе зәғифләнмәһен өсөн ҡыҙыл шаршау менән ҡороп ҡуйғандар.

397 Кешенең кәсебе ниндәй булһа, үлеме лә шундай, тигән мәғәнәлә.

398 Йолаға бәйле. Мәйетте йыуғанда берәү таҫтар тотоп тора. Шуға хәйер итеп таҫтамал бирәләр.

399 Ауыҙыңды тый – күп ашама, тигән мәғәнәлә.

400 Ғүмер үтеүенә вайымһыҙлыҡ.

401 Үлер алдынан кеше лә еңеләйә тигәне.

402 Элекке мәҡәл. Мулла шат: хәйер күп килә.

403 Совет осоро мәҡәле.

404 Һары – һары ауырыуы. «Һарыны һары ҡайтарыр» тигән ышаныуҙан сығып, элек һары ауырыуы менән ауырыған кешене һары еҙ самауырға ҡаратып ултыртыр булғандар.

405 Мәҡәл дә, йомаҡ та булып йөрөй.

406 «Үлем яҡын» тигән мәғәнәлә.

407 Мәйетте күмгәс, «ауыр тупрағың еңел булһын!» – тип, ҡәбер өҫтөнә бер ус тупраҡ һалалар. Мәрхүмде иҫкә алғанда, «Ауыр тупрағы еңел булһын», – тиҙәр.

408 Күсмә мәғәнәһе кеше рәнйетеүгә бәйле.

409 Яраға ҡарата.

410 Холоҡ боҙолоуға ҡарата.

411 Энә һаплап биреүсе кешегә теләк һүҙе.

412 «Әллә ҡайһыбыҙ алдан үлә, әллә һин, әллә мин?» Ғәҙәттә ҡарт менән ҡарсыҡ әйтә. Йүкәһе – ҡарсыҡ, ҡайышы – ҡарт төшөнсәһендә йөрөй.

413 Иҫләнмәгән, юҡ ҡына бер әйберҙән бәлә килеп сыға, тигән мәғәнәлә.

414 Ауырлыҡты күтәргән кеше белә, тигән урында.

415 Кешегә сер бирмә, тигән мәғәнәлә.

416 Бәләкәй генә бәләгә аптырап йөрөгәндә, ҙуры килеп сыҡты тигән мәғәнәлә.

417 Донъя күрмәгән кеше тураһында.

## VI. ТӨРЛӨ ТЕМАҒА ҠАРАҒАН МӘҠӘЛДӘР

[418] Күҙгө һауаның тиҙ алмашыуынан әйтелгән.
[419] Урманда йылы, тигән мәғәнәлә.

## VII. ЮРАУҘАР, ҺЫНАМЫШТАР

[420] Октябрҙә ҡара ер. Ноябрҙә унда-бында ҡар ятып, аралаш арба йә сана егеүҙән алып әйтелгән.

[421] Октябрҙә ҡар ятмаһа, ғинуарһыҙ ҡар ятмаҫ, тигәнде аңлата.

[422] Был ырымда һәм бынан һуң килгән ҡалған текстарҙа халыҡ аңындағы боронғо ҡара ышаныу күренештәре сағыла. Ул хаҡта тулыраҡ мәғлүмәттәр инеш мәҡәләлә бирелде.

Йәрән (дөрөҫө: яран) (фарс.) – халыҡ араһында етәксе, башлыҡ булған кешенең эшендә, көрәшендә иң яҡын ярҙамсыһы.

# ҺҮҘЛЕК

Ағиҙел – Башҡортостандағы иң ҙур йылға, Кама йылғаһының һул ҡушылдығы.
Ажаған (һөйл.) – ялағай.
Аҡ – бында һөт-катыҡ, ҡымыҙ мәғәнәһендә.
Алашар – енси биҙҙәре алынған ир.
Алғыш – 1. Яҡшы теләк; 2. Дуҫ.
Ал(ы)п – бик ҙур кәүҙәле, көслө батыр.
Амул – был һүҙҙең мәғәнәһе хәҙергә асыҡлап булманы. Текскә ҡарағанда, затһыҙ аҙыҡ. Мәҡәлдең йөкмәткеһе ерҙе ваҡытында сәсеүгә әҙерләп, игенде ваҡытында йыйып алыуға бәйле, ахыры.
Ансайын (һөйл.) – бик уҫал, сая.
Аңҡау – бында илке-һалҡы, асыҡ ауыҙ, йүнһеҙ кеше (ҡатын) мәғәнәһендә.
Арамъя (фарс.) – көс түкмәй, еңел, арлы-бирле генә эшләүсән.
Арман – кәмселек, ғәйеп.
Арынһыҙ – йыуаш, күндәм.
Ат – мәҡәлдәрҙә ике мәғәнәлә ҡулланыла: 1. Йорт хайуаны. 2. Исем (яҡшы ат – яҡшы исем, яман ат – яман исем, дан).
Аттың атағы ҙур – исеме ҙур.
Ауан – хәйләһеҙ. Бында күп һөйләгән ебегәнерәк кеше мәғәнәһендә булһа кәрәк.
Ауранҡ (һөйл.) – аңра.
Ауһар – аңра, алйот.
Ашҡаҙар – Башҡортостандағы йылға, Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.
Ашнаҡсы – аш бешереүсе, аҫырау ҡатын.
Аян (ғәр.) – билдәле, сер түгел.
Бағыңды (иҫк.) – бәхетеңде.
Баймаҡ – Башҡортостандағы район, район үҙәге.
Байса (иҫк.) – боронғо Сыңғыҙ дәүләтендә ҙур дәрәжә билдәһе итеп бирелгән тамға.
Баҡтансы – ҡараусы.
Балағас – солоҡ.
Балға – тимер киҫә торған ҡорос ҡасау.
Балпан (һөйл.) – олпат.
Бараман (иҫк.) – таныш, барып йөрөй торған кеше.
Барымта – мал талау, йә ҡыуып алып кителгән малды кире ҡайтарыу маҡсатында үткәрелгән сапҡын, яу.
Барын – ырыу атамаһы, Табын ҡәбиләһенең бер тармағы.
Барыс йылы – хайуандар исеме менән аталып йөрөтөлгән ун ике йыллыҡ йыл иҫәбе – мөсәлдең өсөнсө айы. Мөсәлдә йылдар тәртибе: сысҡан йылы, һыйыр йылы, барыс йылы, ҡуян йылы, аждаһа йылы, йылҡы йылы, ҡуй йылы, маймыл йылы, тауыҡ йылы, эт йылы, дуңғыҙ йылы.
Бау – бында нәҫел мәғәнәһендә.
Биҙәү – бала таба алмаған ҡатын.
Бикәр (фарс.) – файҙаһыҙ, буш, мәғәнәһеҙ.
Беләү – ҡайрап үткерләү.
Бил бәйлә – бында: бил быуып, эшкә тотон тигәне.
Бирек – ныҡлы, ныҡ.
Биҫтә – бында ыҫпай, ҡупшы мәғәнәһендә булһа кәрәк.
Боға – бында: ауыл башлығы.
Бол (фарс.) – аҡса.
Болаҡ – бәләкәй йылға.
Босоҡ – килешмәгән эш, ҡылыҡ.
Бостан (фарс.) – баҡса.
Бохар – Урта Азиялағы Бохара ҡалаһы.
Буп (рус.) – поп.
Буртаҡ (һөйл.) – яман.
Буяу – бында биҙәк мәғәнәһендә.
Буҙ (ғәр.) – ҙре итеп һуғылған аҡ мамыҡ туҡыма.
Бәдуан (Бәдеүәм?) – мәҙрәсәләрҙә дәреслек булып йөрөгән дини китап.

Бәкер (ғәр.) – ҡыҙлыҡ, боҙолмаған ҡыҙ.
Гүрнисә (рус.) – горница.
Ғаҡрәп (ғәр.) – ҡояш календары буйынса (уның беренсе көнө 21 мартҡа тура килеп, ай исемдәре ун ике йондоҙлоҡ исеме менән аталған), 22 октябрь – 21 ноябрь.
Даим (ғәр.) – даими.
Дарҡар (фарс.) – ҡулланылышта булған, кәрәккә яраған.
Дихаят (ғәр.) – ете ят.
Дим – Башҡортостандағы йылға, Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.
Дәүегер (диал.) – ҙурайыр.
Елдән тыуған (фраз.) – уйнаштан тыуған.
Емет – аҙыҡ, ашамлыҡ.
Етереү (һөйл.) – юҡҡа сығарыу, юҡ итеү, бөтөрөү.
Етәк – бында күсмә мәғәнәлә: йүнәлеш биргән эшмәкәрлек, етәкселек.
Жәүзә (ғәр.) – ҡояш календары буйынса, 22 май менән 21 июнь араһы.
Заң (ғәр.) – закон.
Зәҡҡум (ғәр.) – бында: үтә ныҡ әсе, зәһәр ағыу.
Зәмһәрир (ғәр.) – әсе, сатлама һыуыҡ.
Зәңнә (рус.) – цинга.
Зәһәр – 1. Ағыу. 2. Нәфрәт, асыу. 3. Үҙәккә үтерлек әсе һыуыҡ. 4. Әсе, ауыр һүҙ. 5. Көслө, ҡеүәтле. 6. Бик, бик нығ, үтә. Зәһәр һыуы – араҡы.
Зыяндаш (һөйл.) – Быума сире һәм уның ваҡыт-ваҡыт ҡабатланған өйәнәге.
Зәр (фарс.) – алтын.
Зәрҡәр, зәргәр (фарс.) – алтынсы.
Игәш – әрләш, талаш.
Иҙел – Ағиҙел атамаһының ҡыҫҡартылған варианты. Волга йылғаһына ҡарата ла ҡулланыла.
Ильин көн – боронғо рус календарынан килеп ингән, иҫке стиль менән 20 июнь.
Иләмән – ил башлығы.
Имам (ғәр.) – мәсеттә намаҙ уҡытҡан мулла.
Инәүле (мал) – ин һалынған мал.
Ип – был осраҡта тормош талабы.
Иркәк – арлан, ата хайуан.
Ирһәк – ир яратыусан.
Ирәмәл – Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы тау һырты.
Ирән – батыр, көслө ир. (Ирекле?)
Ирәндек – Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы тау.
Йопар – ҡайһы бер йәнлектәрҙең биҙендә була торған хуш еҫле май.
Йорон – иләгән тире ярпыһы, тире ҡырҡындыһы.
Йөҙәү – бында: аслыҡтан, юҡлыҡтан хәлһеҙләнгән; йонсоу.
Йөрәктау – Стәрлетамаҡ ҡалаһынан алыҫ түгел, Ағиҙелдең уң яҡ ярында.
Йыраҡа – йырғанаҡ.
Йәнт (һөйл.) – тырышлыҡ, хәстәрлек.
Йәрән (дөрөҫө: яран) (фарс.) – халыҡ араһында етәксе, башлыҡ булған кешенең эшендә, көрәшендә иң яҡын ярҙамсыһы.
Кемәйе (һөйл.) – иптәш ҡыҙы.
Киҫәү (һөйл.) – тәртешкә.
Көн килһә – эш төшһә, ҡара көн килһә тигәне.
Көнләксе – хеҙмәтсе, ялсы.
Көң (боронғо төрк.) – ҡол.
Көңрәнеү – ризаһыҙлыҡ менән һөйләнеү, мығырҙау.
Күлдәгең көйрәк булһын – тиҙ туҙһын тигән мәғәнәлә.
Күрекле – күркәм.
Күс – йәйгелеккә күсеп килеп йәшәгән урын; йәйләү.
Күсәм – юл башлаусы, каруан башлығы.
Курнис (рус.) – күрнәсә, өйҙөң түр яғы, горница.
Кәнсә (рус.) – канцелярия.
Кәркеш – сабата бауы.
Кәфил (ғәр., иҫк.) – үҙ өҫтөнә, үҙ яуаплылығына ниҙер алған кеше.

Кәрше – уралып, борош булып үҫкән (ағас).
Ҡабаҡҡа ҡар яуҙырыу (фраз.) – асыуланыу, йөҙгә һөрөм сығарыу, йөҙ үҙгәртеү.
Ҡабарсы (һөйл.) – хәбәрсе.
Ҡабырсыҡ (һөйл.) – түҙемһеҙ, ҡабырсыҡ кеше.
Ҡаҡлаған – ҡаҡларға эленгән ит.
Ҡалбыр – өтәләнеп, ерсно еткермәй эшләүсән кеше.
Ҡалтаң (һөйл.) – тилбер, теремек, тырыш.
Ҡамау – бында: урын тар, ҡыҫынҡы.
Ҡаңтар – көҙгө ҡырпаҡ ҡар миҙгеле.
Ҡанъяға – төрлө нәмә бәйләү өсөн эйәрҙең ҡапталына тағылған армытлы ҡайыш бау.
Ҡараса – көҙгө ҡара һыуыҡ миҙгеле.
Ҡарғалы – Ырымбур эргәһендәге ауыл.
Ҡарһаҡ (ҡарсаҡ) – ялан төлкөһө.
Ҡарымта – ҡан ҡойоуға ҡан ҡойоп, үс алыу йолаһы.
Ҡатымша (ҡатынша) – ҡатын-ҡыҙ холоҡло, ваҡсыл ир кеше.
Ҡасыд (ғәр.) – бында: хаслыҡ, яуызлыҡ.
Ҡауҙыр (диал.) – ҡыҙыу, түҙемһеҙ.
Ҡолоҡ (диал.) – байтал.
Ҡойҡа – өтөлгән тире.
Ҡомағай – үтә ҡомһоҙ; күп ашаусы кеше.
Ҡомас (ғәр.) – асыҡ ҡыҙыл төҫтәге йоҡа тауар.
Ҡон – үс.
Ҡор – ырыу, ил. Бында ил мәғәнәһендә.
Ҡорбо (һөйл.) – ҡорҙаш.
Ҡорманай – Башҡортостандың Ауырғазы районындағы ауыл.
Ҡотан – бында: ситәндән түңәрәкләп үргән ҡуй-һарыҡ аҙбары.
Ҡуйтыр – тышланмаған тун, тире тун.
Ҡуҡшын – ҡутыры ҡойолған ялтыр (баш).
Ҡулайымлау – эш алдынан хәрәкәттәренде үлсәп, уйлап сығыу.

Ҡулыш – ҡул эше. «Ҡулыш» формаһы «уңыш» һүҙенә рифма рәүешендә бирелгән.
Ҡуңы (һөйл.) – соҡоп эшләнгән ағас һауыт, туҫтаҡ.
Ҡураҙ (фарс.) – әтәс.
Ҡурйын – эйәр ҡанъяғаһына артыу өсөн күндән йәки йөн балаҫтан матур итеп биҙәп яһалған ике яҡлы моҡсай; артмаҡ.
Ҡушаға – 1. Яҡын ҡорҙаш; иптәш, дуҫ, уҙаҡ. 2. Үҙенә тиң булған ғаилә иптәше (иргә – ҡатын, ҡатынға – ир).
Ҡушаҡ (рус.) – билғау.
Ҡушаныу – билгә быуыу.
Ҡыңрый – ҡырын.
Ҡыбырсыҡ – түҙемһеҙ.
Ҡылтамаҡ – аш үтмәү ауырыуы.
Ҡырғы – 1. Ҡырғыс. 2. Сит, ят кеше. Мәҡәләлә ике мәғәнәһе лә осрай.
Ҡырлыҡ – орлоҡло ҡый үләне.
Ҡырҡынсаҡ – ҡырҡып, киҫеп тороусы (һүҙе, ҡылығы менән).
Ҡырһыҡсан – ҡарғыштан үлеүсән.
Ҡәүем (ғәр.) – ырыу. нәҫел, халыҡ, милләт.
Ҡәүес (ғәр.) – 22 ноябрь менән 21 декабрь араһы.
Лапшыҡ – һимеҙ тәнле, яй хәрәкәтле.
Лаф (фарс.) – маҡтансыҡ, буш һүҙ.
Маҙар (ғәр.) – зыярат, ҡәберлек.
Мая – бында: һалып ҡуйған аҡса.
Менәҙ – холоҡ.
Микула – боронғо урыҫ календарынан килеп ингән. Никола көнө иҫке стиль менән 9 май, 6 декабрь.
Миһләт (ғәр.) – бер нәмәне кисектерергә биргән рөхсәт.
Моҙ (боҙ) – был янғыраш фольклор әҫәрҙәрендә осраштырғылай. Мәҡәләлә өндәр гармонияһы талабынан сығып ҡулланылған.
Морт (фарс., иҫк.) – мыйыҡ.
Мөстәҡим (ғәр.) – 1. Төҙ, тигеҙ. 2. Күсмә мәғәнәһе – тоғро.

Мөшриҡ (ғәр.) – ислам динен тотмаған, күп Аллаға ышанған кеше; мәжүси. Бында «иманһыҙ» тигән мәғәнәлә булһа кәрәк.
Мусим (ғәр.) – васыят итеүсе.
Мүкләк – туҡал.
Мәғзур (ғәр.) – ғәфү ителгән; ғәфү ителергә лайыҡ.
Мәрәйлек – ҡулдан атыу ҡоралының ҡарауыл аша сәпкә тура-лап тоҫҡай торған киртекле ҡулланмаһы.
Мәғрип (ғәр.) – көнбайыш.
Мәшриҡ (ғәр.) – көнсығыш.
Нағас, нағасы – 1. Әсәһенең төп йортона барып үҫкән бала (атаһының үҙ йортондағы туғандары өсөн). 2. Әсә яҡ туғандары (бала өсөн). Бында нағасһыҙ – нәҫелһеҙ мәғәнәһендә.
Нан (фарс.) – икмәк.
Нар (ғәр.) – бында: бер үркәсле дөйә.
Наян – тел менән шымарта белеүсе, телгә оҫта.
Нөгөш – Башҡортостандың көньяғындағы йылға.
Нәжес (ғәр.) – бысраҡ, әшәке.
Нәкәҫ (фарс.) – ҡәбәхәт, әшәке (кеше).
Нәләт – ләғнәт.
Нәмәргә (фарс.) – 1. Ейән йәки ейәнсәрҙең балалары; бүлә, бүләсәр. 2. Дүртенсе быуын балалар (бер-береһенә ҡарата).
Нәҫ (һөйл.) – ялҡаулыҡ.
Нәфәҡәт (ғәр.) – 1. Ярҙамға мохтаж кешеләргә бирелә торған аҡса. 2. Ризыҡ. Мәҡәлдә һүҙҙең ошо мәғәнәһе ҡулланылған.
Олоҡло – ололоҡло.
Онғол – ике тау араһындағы соҡор.
Өлөш – бында яу-дауҙан һуң табыш бүлешкәндә тейә торған өлөш хаҡында һүҙ бара.
Өрөм – нәҫел.
Өршәк – Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышындағы йылға. Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.
Питрау (рус.) – Петров день, июнь аҙағы, иҫке стиль менән 29 июнь.
Покрау (рус.) – Покров көнө, иҫке стиль менән – 1 октябрь.
Рәуа (фарс.) – үҙ ыңғайына, үҙ ағышына барған.
Сай – ике тау араһы, тәрән соҡор, уй.
Сауға – бүләк.
Сембер – Симбирск, хәҙерге Ульяновск ҡалаһы.
Синны (рус.) – чинлы.
Сирмеш – марий.
Систа (рус.) – чисто (таҙа).
Сорһоҙ – тыйнаҡһыҙ, тәрбиәһеҙ.
Спас – урыҫ календарынан ингән, иҫкесә август башы.
Сурт (рус.) – черт.
Сутлау – бура бүрәнәһен эс яҡтан тигеҙләп сабыу.
Сүтәшкә (рус. сутяжник) – даусыл, дәғүәсел.
Сыраҡсы – сыраҡҡа төшөп балыҡ тотҡан кеше.
Сәйран (ғәр.) – 1. Кешенең күңел асып, тамаша ҡылып йөрөүе. 2. Күңелле, рәхәт. 3. Көнкүрсү, йәшәү.
Сәнкем – Ҡыпсаҡ ырыуының бер тармағы.
Сәркәш (фарс.) – талашыусан.
Сәүек – 1. Ҙур булып үҫмәй торған бәләкәй тоҡомло эт. 2. Гел әрләшеп, абалап торған кешегә ҡарата әйтелә.
Сәсә – аттын бәкәлендәге йөн.
Тағанай – Урал түбәләренең береһе.
Таҡым – ыштан балағының бот төбөнә индерелгән ҡыйығы.
Талиғ (ғәр.) – 1. Йондоҙ. 2. Бәхетле яҙмыш.
Таңлау – эҙләү.
Тарғыл – юлаҡ-юлаҡ һыҙатлы.
Тарҡылыу (иҫк.) – тамшаныу.
Тарпан – көнсығыш Европаның көньяҡ далаларында йәшәгән, XIX быуаттың урталарында ҡырып бөтөрөлгән сысҡан һыртлы, күлһыу буҙ төҫлө ҡырағай ат.
Тархан (монг.) – ырыуҙаштары араһында өҫтөнлөк менән файҙа-

ланып, яһаҡ түләүҙән ҡотҡарылған юғары ҡатлам кешеһе һәм шул кешенең нәҫелдән нәҫелгә күсә торған дәрәжә исеме.

Тарыу – бында сәсеү, игеү мәғәнәһендә.

Татыр – һыу йәки тупраҡтағы тоҙ. (Аҡ татыр – тупраҡтағы тоҙло ер.)

Тернәкле – тырыш.

Тиген – бушҡа.

Тиген бир – буш бир.

Тикән – сәнскс.

Торон – ейән.

Тошоҡма – осрама.

Төклө аяғы менән – ҡотло аяғы менән.

Труддень (рус. трудодень) – көнлөк эш хаҡы.

Туҡал – йәш ҡатын.

Туларһыҡ – малдың артҡы аяғының терһәге менән бәкәле араһындағы өлөшө.

Тумар – һаҙлыҡта сурайып ултырған өҫтө үләнле суҡаҡ; түңгәк. Мәҡәлдә аңлашылып етмәй. Бәлки, һүҙ уйнатыу?

Тур – ҡош, йәнлек тота торған ау.

Түркенсәк – ата йортона ҡайтыусан.

Түрәһе ғәҙел – бында: хөкөмө ғәҙел тигән мәғәнәлә.

Тынҡшаҡ – бында өндәшмәҫ, ҡыйыуһыҙ кеше.

Тыу – байраҡ.

Тыума – зинанан, никахһыҙ бәйләнештән тыуған.

Тәлдермәс ҡатын – еңел холоҡло ҡатын.

Тәнәй – сабый бала, бәпес.

Уҡра йәки уҡра себене – малдың арҡа тиреһе аҫтына йомортҡа һала торған себен;

Уҡраныу – өндәшкән, саҡырған кеүек, тауыш биреү (йылҡы малына ҡарата). Бында уҡраныу себенләү мәғәнәһендә. Себенле бейәгә яҡынлаған айғырҙың себендән таланыуы хаҡында, булһа кәрәк.

Улъя (иҫк.) – 1. Ҡулға кергән мал, төшкән файҙа; табыш. 2. Яу ҡырында ҡулға төшөргән мал; ғәнимәт.

Ураҙлы – бәхетле, ырыҫлы.

Усарлы – иғтибарлы.

Уҫмаҡ – йоҙроҡ һуғышы, һыуыҡ ҡорал һуғышы.

Ут-йәм – бында аш бешкән ҡаҙан аҫтындағы ут тураһында.

Утһыҙ – бында үләнһеҙ мәғәнәһендә.

Үҙемсе (һөйл.) – үҙен генә ҡайғыртыусы.

Үрәләү – кешәнләү, бәйләп ҡуйыу.

Фарт (һөйл.) – бәхет, уңыш.

Фидия (ғәр.) – үлгән кешенең малынан муллаға бирелә торған хәйер.

Хаҡ – бында: хаҡ тәғәлә.

Хана (фарс.) – бында: йорт.

Ханыш – хан бисәһе.

Хирес (ғәр.) – нәпсе, көслө теләк.

Хисса – хис, күңел күтәренкелеге (?).

Хут (ғәр.) – ҡояш календары буйынса 22 февраль менән 21 март араһы.

Хыҙыр Ильяс – көнсығыш халыҡтары фольклорында киң билдәле образ. Боронғо ышаныуҙар буйынса, үҫемлек, уңыш Аллаһы дәрәжәһендә күҙаллаған изге зат. Ҡулында тылсымлы йәшел таяғы, йә ҡамсыһы булған аҡһаҡал ҡиәфәтендә Хыҙыр Ильяс кешеләргә күберәген яланда осрай була.

Хәбеш (хәбиҫ) (ғәр.) – бысраҡ, әшәке, насар.

Хәмәл (ғәр.) – 22 март менән 21 апрель араһы.

Һалынҡы – булдыҡһыҙ, дәртһеҙ.

Һалыулы (ауыҙы һалыулы) – кешенең ашап-эскән ваҡытына тура килеп йөрөгән кеше.

Һапа – əҙәп-тәртип.

Һарауыс – сиген эшләнгән баш кейеме. Ҡашмау аҫтынан маңлайға кейелә.

Һарт – үзбәк.

һауҡы (һөйл.) – теләк, зауыҡ.
һере – түҙемле, сыҙамлы.
һөйһөн – туй мәһәренән тыш ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә һыйлау өсөн кейәү килтергән мал. Шул малды һуйып әҙерләнгән ашты йолаға ярашлы кейәү менән ҡыҙ ашамаған.
һыртҡы – артҡы, һыртҡы бисә – һөйәркә.
һыртлыҡ – ҡыштың һуңғы бурандарының (Аҡман-Тоҡман, Бишҡунаҡ...) дөйөм исеме.
һыуыр – тейен һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, өн ҡаҙып йәшәй, ҡыш йоҡлай торған кимереүсе йәнлек.
һәпрә – әрпеш, йүнһеҙ.
һәрпәк – билгә тағып йөрөй торған ҡынлы балта.
һәүер (сәүер) – 22 апрель менән 21 май араһы.
Шайлау (һөйл.) – бик шәп, яҡшы.
Шаҡай (һөйл.) – иҫәр. Бында берәй кешенең ҡыҫҡартылған исеме булыуы мөмкин.
Шауҡал – эре һөйәкле, ҡаҡса.
Шешәк (һөйл.) – эйәләшкән, эҫенгән урын, ер.
Шәһүәт (ғәр.) – енси теләк, дәрт.
Ыҡ – Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы йылға.
Ылғый – йыйын, тик.
Ымыҫ (иҫк.) – ымһын.
Ырай – кәйеф (?).
Ырыҫҡал – бәхет.
Эйәр арҡаһы – бында ата мираҫы, ата юлы мәғәнәһендә.
Әзе-әже – апай.
Әйтеш – фольклорҙың үҙенсәлекле бер жанры. Борон сәсәндәр әйтеш ярҙамында тапҡырлыҡта ярышып булғандар. Ғәҙәттә әйтештәр ҡобайыр стилендә булып, уларҙың эсенә мәҡәл-әйтемдәр, хатта йомаҡтар ҙа ингән. Ҡарағыҙ: Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне // Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. 3-сө китап. – Өфө, 1982. 131–137-се б.
Әйтеш традицияларын хәҙерге заманда тергеҙеү ынтылыштары ла бар.
Әлиф (ғәр.) – ғәрәп алфавитындағы тәүге хәрефтең атамаһы.
Әтәмбәй – һарыҡ, кәзәнең көҙ тыуған бәрәсе; көҙләүес, бүлтерек; ситтән күсеп килеп ултырған кеше; килмешәк. Бында: тәүге мәғәнәһе.
Әүүәл кисе – иҫкесә 1 февраль.
Юламсы (диал.) – юлсы.
Юлтыраҡ – мәшәҡәт, ҡамасау.
Ябынса – яурынға һалып ҡына кейә торған, башлыҡлы, еңһеҙ йоҡа кейем.
Яйҙаҡ – эйәр һалынмаған, эйәрһеҙ.
Яйыҡ башынан – бында: төньяҡтан.
Яйыҡ – Урал йылғаһы.
Яҡшы ат – бында: яҡшы исем.
Яла – кемгәлер яғылған ялған ғәйеп.
Ямсы – ям атын йөрөткән кеше (ямщик).
Янаға (һөйл.) – ҡәйнеш.
Ярҡа – ярғаҡ утын ағасы; ярҡалай – бик ныҡлы, эре кәүҙәле.
Ярлыҡ – бында яҙма бойороҡ мәғәнәһендә.
Ярна – кире ҡайтарылмай торған ярҙам.
Яптыҡ (иҫк.) – әҙерлек хәстәре.
Ярпайыу – йөҙ асылыу, матурланыу.
Яураҡ – йонсоу, хәлһеҙ.
Яуыҡ (иҫк.) – яҡын.
Яшыҡ – арыҡ, бик ябыҡ.

# СЫҒАНАҠТАР

I. Баҫылып сыҡҡан йыйынтыҡтар.

1. Башҡорт халыҡ ижады: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Фәнүзә Нәҙершина. – Өфө, 1980[1].

2. Куватов М. Г. Башкирские пословицы //Известия Оренбургского отдела Императорского русского географического общества. 1895. Вып. 6. С. 31–48. Шартлы рус транскрипцияһы аша башҡорт телендә һәм русса тәржемәлә бирелгән мәҡәл өлгөләре.

3. Катаринский В. В. Башкирско-русский словарь. – Оренбург, 1893.

4. Боронғоларҙың һүҙҙәре / Төҙөүсеһе Ғ. Вилданов, Х. Ғәбитов. – Мәскәү, 1924.

5. Халыҡ әҙәбиәтенән мәҡәлдәр һәм йомаҡтар / Йыйыусыһы С. Мирас, системалаштырыусыһы Т. Баишев. – Өфө, 1930.

6. Башҡорт мәҡәлдәре / Төҙөүсеһе Ғ. Амантай. – Өфө, 1936.

7. Кирәй Мәргән. Һуғыш фольклоры. – Өфө, 1944.

8. Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том / Төҙөүсеһе, кереш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсеһе Ә. И. Харисов. – Өфө, 1954.

9. Башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том: Совет осоро / Төҙөүсеһе, редакторы, баш һүҙ һәм аңлатмалар авторы Кирәй Мәргән. – Өфө, 1955.

10. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре / Төҙөүсеһе һәм редакторы Кирәй Мәргән. – Өфө, 1960.

11. Алтын ҡумта / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә авторы Фәнүзә Нәҙершина. – Өфө, 1985.

12. Нәҙершина Ф. А. Рухи хазиналар / Асылыкүл, Дим, Өршәк буйы башҡорттарының фольклоры/. – Өфө, 1992.

13. Башҡорт теленең һүҙлеге. I, II томдар. – Мәскәү: Русский язык, 1993.

14. Башҡортса-русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге / Төҙөүсеһе Илһам Ғарипов. Яуаплы редактор һәм инеш һүҙ авторы Фәнүзә Нәҙершина. – Өфө, 1994.

---

[1] Әле уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән том ошо китап нигеҙендә төҙөлдө. Унда 1980 йылға тиклем сығарылған йыйынтыҡтарҙағы (2-се һандан 10-сы һанға тиклем) һәм ҡулъяҙма сығанаҡтарҙағы (1-се һандан 27-се һанға тиклем) мәҡәлдәр индерелгәйне. Өҫтәлгән материаллар исемлеге I бүлектә 11–14-се, II бүлектә 28–32-се һандар аша күрһәтелде.

# ҠУЛЪЯҘМА СЫҒАНАҠТАРҘЫҢ ПАСПОРТТАРЫ

(Улар Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана)

1. Ф. 3, оп. 12, д. 208, лл. 76, 170. Материалдарҙы архивҡа 1947 йыл яҙыусы Ғабдулла Әхмәтшин тапшырған.

2. Ф. 3, оп. 12, д. 213, лл. 72–102. М. Бабичева яҙмалары (Дәүләкән районы).

3. Ф. 3, оп. 12. д. 255, лл. 1–5. Ҡәнзәфәров яҙмалары (Саҡмағош районы).

4. Ф. 3, оп. 12. д. 272, лл. 28, 31. Ғиндулла Усманов яҙмалары (ғәрәп шрифты).

5. Ф. 3, оп. 12, д. 288, лл. 187–203. Ризуан Алушев тарафынан йыйылған материалдар.

6. Ф. 3, оп. 12, д. 235, лл. 73–81. Ғ. Хисматуллин материалдары (Мәсетле районы).

7. Ф. 3, оп. 12, д. 261, лл. 47–65. Вәли Ҡоломбәтов ҡулъяҙмалары (ғәрәп шрифты).

8. Ф. 3, оп. 12, д. 237, лл. 4–26. Рәми Ғарипов яҙмалары.

9. Ф. 3, оп. 26, д. 10, л. 77. Б. А. Әлмәтов яҙмалары (Силәбе өлкәһе).

10. Ф. 3, оп. 47, д. 32. Мәҡәл һәм әйтемдәр йыйыу буйынса 1959 йыл «Башҡортостан пионеры» гәзите иғлан иткән конкурс материалдары. Барлығы 63 хат. Мәҡәлдәрҙең дөйөм һаны – 3300, ләкин күбеһе ҡабатлана.

11. Ф. 3, оп. 47, д. 37. Ваһиба Минибаева яҙмалары (Стәрлетамаҡ ҡалаһы). Ғәрәп шрифты.

12. Ф. 3, оп. 20, д. 36. М. А. Ҡулаевтың «Башҡорт мәҡәлдәре» исемле ҡулъяҙма дәфтәре, 1946 йыл төҙөлгән.

13. Ф. 3, оп. 21, д. 32, лл. 340–341. 1959 йылда Курган өлкәһенә ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары, I т. Экспедицияның ғилми етәксеһе – Ә. Н. Киреев (Кирәй Мәргән). Мәҡәлдәр Кирәй Мәргән менән Салауат Ғалин тарафынан яҙып алынған.

14. Ф. 3, оп. 21, д. 2, лл. 417–422. Шул уҡ Курган экспедицияһы материалдары. II т. Н. Д. Шоңҡаров яҙмалары.

15. Ф. 3, оп. 23, д. 7, лл. 82–83. 1960 йылда Башҡортостандың Бөрйән, Белорет райондарында Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған материалдар.

16. Ф. 3, оп. 21, д. 3, лл. 334–341. 1960 йылда Ырымбур өлкәһенә ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары, I т. Экспедицияның ғилми етәксеһе – Ә. Н. Киреев. Фәнүзә Нәҙершина яҙмалары.

17. Ф. 3, оп. 21, д. 9, лл. 241–242. 1962 йылда Силәбе өлкәһенә ойошторолған тел һәм фольклор экспедицияһы материалдары. II т. Экспедицияның ғилми етәксеһе – Н. Х. Ишбулатов. Н. Д. Шоңҡаров һәм Ф. А. Нәҙершина яҙып алған материалдар.

18. Ф. 3, оп. 32, д. 2, лл. 287–288, (Н. Д. Шоңҡаров), 289–299 (Ф. А. Нәҙершина яҙмалары). 1963 йылда Свердловск һәм Пермь өлкәләрендә үткәрелгән фольклор экспедицияһы материалдары. II т. Экспедиция етәксеһе – Ә. Н. Кирәев.

19. Ф. 3, оп. 32, д. 3, лл. 377. Нигмәт Шоңҡаров яҙмалары.

20. Ф. 3, оп. 32, д. 35, лл. 59–62. Нигмәт Шоңҡаров яҙып алған мәҡәлдәр.

21. Ф. 3, оп. 65, д. 2, л. 230 (Өнүр Вахитов), 231–250 (Мохтәр Сәғитов), 250–258 (Салауат Галин), 256–260 (Нигмәт Шоңҡаров яҙмалары). 1967 йылда Башҡортостандың Ейәнсура, Йылайыр, Хәйбулла райондарында уҙғарылған фольклор экспедицияһы материалдары. Экспедиция етәксеһе – С. Ә. Галин.

22. Ф. 3, оп. 65, д. 4, лл. 305–398 (Ф. А. Нәҙершина); 398–399 (Р. В. Нафиҡова); 400 (Н. Д. Шоңҡаров); 480–481 (Ә. Х. Вахитов яҙмалары). 1968 йылда Башҡортостандың Ишембай районына ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары. II т. Экспедиция етәксеһе – Н. Т. Зарипов.

23. Ф. 3, оп. 65, д. 5, лл. 107–111 (Ф. А. Нәҙершина); 121 (С. Ә. Галин). 1970 йылда Курган өлкәһенең Әлмән районына ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары. Экспедиция етәксеһе – С. Ә. Галин.

24. Ф. 3, оп. 70, д. 1. Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған мәҡәлдәр. 1970 йылда Башҡортостандың Белорет районына ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары. Экспедицияның етәксеһе – Л. Н. Атанова.

25. Ф. 3, оп. 65, д. 9, лл. 245–265 (Ә. Х. Вахитов); 206 (Р. С. Сөләймәнов); 207 (М. М. Сәғитов); 268–279 (Ф. А. Нәҙершина яҙып алған). 1972 йылда Өршәк йылғаһы бассейнындағы башҡорт ауылдарына ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары (Ауырғазы, Миәкә, Әлшәй, Дәүләкән райондары). Экспедиция етәксеһе – М. М. Сәғитов.

26. Ф. 3, оп. 70, д. 3, л. 47. 1976 йылда Н. Д. Шоңҡаровтың Башҡортостандың Дүртөйлө районында йыйған фольклор материалдары.

27. Ф. 3, оп. 73, д. 25, лл. 183–209 (Фәнүзә Нәҙершина яҙып алған). 1977 йылда Башҡортостандың Салауат районына ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары. Экспедиция етәксеһе – Ф. А. Нәҙершина.

28. Ф. 3, оп. 92, д. 1. (Фәнүзә Нәҙершина яҙып алған). 1984 йылда Баймаҡ районында Фәнүзә Нәҙершина менән Розалия Солтангәрәева яҙып алған материалдар.

29. 1986 йылда Башҡортостандың Әбйәлил районында Фәнүзә Нәҙершина яҙып алған материалдар (шәхси архивта).

30. Ф. 3, оп. 92, д. 7. (Фәнүзә Нәҙершина яҙып алған). 1988 йылда Башҡортостандың Бөрө, Мишкә, Ҡариҙел райондарына ойошторолған археографик һәм фольклор экспедицияһы материалдары. Ғилми етәкселәре – Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов менән Фәнүзә Нәҙершина.

31. Учалы районының Илтабан ауылынан Кәлимова (Калимуллина-Ямалиева) Ғәлимә Ғелметдин ҡыҙы яҙып алып, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор һәм сәнғәт бүлегенә тапшырылған материалдар[2].

32. Октябрьск ҡалаһынан журналист Хәлил Маннан тарафынан яҙып алынып, фольклорсы Әхмәт Сөләймәновҡа тапшырылған мәҡәлдәр.

Яҙыусылар әҫәрҙәрендә, гәзит-журнал биттәрендә осраған оригиналь халыҡ мәҡәлдәре, төрлө әйтем, табҡыр һүҙҙәр уҙған быуаттың 60-сы йылдарынан башлап, хәҙерге ваҡытҡаса шулай уҡ төҙөүсенең ҡәләм осона алына барҙы һәм дөйөм фондты байытыуҙа билдәле роль уйнаны.

---

[2] Был һан һәм 32-се һан аҫтында бирелгән сығанаҡтарҙағы материалдар араһында беҙҙең йыйынтыҡтарҙа осрамаған афористик ижад өлгөләре бик һирәк булып сыҡты. Шуға күрә томға уларҙан алып индерелгән мәҡәл һәм әйтемдәрҙең һаны сағыштырмаса аҙ (224 берәмек).

# ҺЫҒЫМТА

Тәрән мәғәнәле, тапҡыр һәм бик йыйнаҡ итеп төҙөлгән мәҡәл һәм әйтемдәр халҡыбыҙҙың изге һүҙе, ҡиммәтле аманаты булып, быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Уларҙа башҡорт халҡының тормош тәжрибәһе, тарихы, донъяға ҡарашы сағылған.

Дөйөмләштереп алғанда, тематикалары буйынса мәҡәл һәм әйтемдәр түбәндәге төркөмдәргә бүленә: I. Хеҙмәт. II. Ижтимағи тормош. III. Көнкүреш, йолалар, ғаилә, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. IV. Шәхси сифаттар, әхлаҡ-әҙәп нормалары. Аралашыу, тел һәм һүҙ. Аң-белем. V. Донъя, ғүмер, яҙмыш тураһында уйланыуҙар. VI. Төрлө темаға ҡараған мәҡәлдәр. VII. Юрауҙар, һынамыштар.

Кинәйәлелек мәҡәл һәм әйтемдәрҙең нигеҙ ташы. Тура мәғәнәһендә ҡулланылған мәҡәлдәр бик аҙ, уларҙың күпселеге күсмә мәғәнәлә генә йөрөй. Мәҡәлдәргә образлылыҡ, кинәйәлелек биреүҙә метафора, метонимия, синекдоха, йәнләндереү, сағыштырыу һ.б. һүрәтләү алымдарының, ритм, рифмаларҙың роле ҙур. Ритм бер осраҡта строфаларҙағы юлдарҙы билдәле тәртиптә быуындарға бүлгеләү һәм шул быуын араларында тыныш яһау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, икенсе осраҡта быуын-ара асыҡлыҡтары (тыныш) менән бергә асыҡ ижектәрҙең тәртипле рәүештә ҡабатланып килеү нәтижәһендә төҙөлә. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килеүе (ассонанс һәм аллитерациялар) мәҡәл һәм әйтемдәрҙең нәфис яңғырашлылығына булышлыҡ итә.

Мәҡәлдәрҙең шиғри формаһы, образдары ата-бабаларҙың (халыҡтың) быуаттар буйына һуҙылған ижад эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә тыуған, үҫкән һәм камиллыҡ алған. Милли мәҙәниәткә һәм дөйөм кешелек мәҙәниәтенә хас булған рухи ҡиммәттәрҙе туплауҙары менән мәҡәл һәм әйтемдәрҙең танып-белеү әһәмиәте ифрат ҙур.

# РЕЗЮМЕ

В афористических жанрах башкирского фольклора – пословицах и поговорках – с присущей им лаконичностью и экспрессией выражены острый ум, природная наблюдательность народа, его проницательность, глубокая мудрость. В них заключены художественно обобщенный социально-исторический опыт народа, его мировоззрение, социально-этические идеалы.

Башкирские пословицы, как и пословицы других народов, возникли в весьма отдаленные времена. В них запечатлены отзвуки жизненного, трудового опыта и истории народа с древнейших времен по настоящий период.

Тематически пословичный материал расположен в книге по следующим разделам: I. Труд, трудовая деятельность. II. Общественная, социально-экономическая жизнь. III. Быт, семья и обычаи. IV. Морально-этические нормы. Язык и слово. Знания. V. Философские воззрения (жизнь, смерть, судьба и пр.). Каждый раздел имеет подразделы. Особым разделом выделены приметы и поверья.

На стиле пословиц сказалась назидательно-дидактическая природа жанра. Пословица широко использует тип обобщенно-личных конструкций с повелительными формами глагола и глаголом в форме второго лица будущего времени с модальным значением возможности и невозможности действия.

Основной способ создания пословичного образа – иносказание, использование выражений в конкретном переносном смысле. Даже образность пословиц с прямым смыслом нередко создается использованием различных тропов: метафор, метонимий, олицетворений, сравнений и т.д.

Ритмический строй башкирских пословиц основан на принципе членения пословичной строки на ритмические звенья путем последовательного соблюдения словораздела через определенное количество слогов и закономерного чередования в строке безударных открытых слогов. Встречаются пословицы и поговорки, ритм которых основан исключительно на паузах.

Рифма, аллитерации как бы поэтически завершают пословицу, придавая ей гармоничность, музыкальность.

Художественное совершенство пословиц и поговорок – результат длительного поэтического устремления коллективного гения народа, плод многовековой творческой практики многих и многих поколений.

Башкирские пословицы, заключая в себе глубокие мысли о жизни, перерастают в своем познавательном значении национальные рамки и приобретают общечеловеческую ценность, ибо в устнопоэтическом творчестве каждого народа, каким бы своеобразием и самобытностью оно ни отличалось, отражаются общие закономерности развития художественной культуры, фольклора в целом.

# SUMMARY

Bashkir proverbs, like those in other cultures, came into existence in the far distant past and reflect in condensed form the nation's life and labour experience at different historical stages from ancient times till the present day.

The proverbial material given in this book is thematically divided into several sections: I. Labour Activities. II. Public and Socio-Economic Life. III. Everyday Life, Family and Customs. IV. Moral and Ethical Standards. Language and Word. Knowledge. V. Philosophical Views (Life, Death, Fate, etc.). Each section is subdivided into subsections. Weather signs and popular beliefs are included into a special section.

The style of proverbs is much affected by the didactic nature of the genre. They widely employ generalized-personal constructions using the Imperative Mood and second-person verb forms of the Future Tense with modal meanings of possibility/impossibility of an action.

The main tool of creating a proverbial image is allegory or use of expressions in a figurative way. Even the proverbs having a literal meaning often employ various tropes, such as metaphors, metonymies, personifications, similes and others.

A rhythmic pattern of Bashkir proverbs is based on splitting up a proverbial utterance into rhythmic groups by means of placement of word boundaries with a definite periodicity and regular alternation of unstressed open syllables in the line. There are such proverbs and sayings whose rhythm is exclusively based on pausation.

Rhymes and alliterations poetically consolidate proverbs and add music and harmony to them.

The artistic perfection of proverbs and sayings is the result of poetic aspirations of the nation's collective genius, the fruit of centuries-long creative efforts of many generations.

Bashkir proverbs and sayings accumulate deep musings on life. Thus, they exceed the national limits in their cognitive significance and assume great importance common to all mankind, since the oral poetic tradition of every nation, no matter how peculiar original it may be, reflect very general regularities in the development of spiritual culture.

# ÖZET

Başkurt atasözleri başka halkların atasözleri gibi eski zamanlarda çalışma esnasında meydana gelmişlerdir. Onlar hayat ve iş tecrübesi, pek eski zamanlardan şimdiye kadar süreyi içine alan halk tarihi timsalidir.

Bu kitapta atasözleri konularına göre 'Çalışma, iş', 'Sosyal ve ekonomik hayat', 'Hayat tarzı, aile ve âdetler', 'Ahlâk kaideleri. Dil ve söz. Bilim', 'Halkın felsefe görüşleri (hayat, ölüm, talih v.s.)' gibi bölümlere bölünmüştür. Her bölüm daha küçük parçalara bölünmüştür. Alamet ve inaçlar ayrı bir bölümde yer almıştır.

Atasözleri iki öğeden oluşurlar. İki öğelik atasözü bileşik cümle olduğu takdirde bile mevcut olmaktadır. Bileşik cümleler kaide olarak bağlaçsızdır. Kısalığı arzu etme bazı cümle öğelerinin, hâl eklerinin düşmesini gerektirir.

Janrın öğretici tabiatı atasözlerinin tarzında tesirini gösterir. Atasözlerinde emir şeklindeki fiilli ve işi yapabilme veya yapamama anlamını kazanan gelecek zaman ikinci şahıs şeklindeki fiilli, umumileştirilen şahsi cümle teşkili çok kullanılır.

Atasözündeki tip genelde mecaz ve sözleri belli bir anlamda kullanma yoluyla oluşturulur. Tam anlamlı tipler bile sıkça istiare, mecazi mürsel, teşhis ve intak, teşbih gibi farkli mecazlar yardımıyla oluşturulur.

Başkurt atasözlerinin ritimli yapısı atasözü satırını, belli bir miktarlı hecelerden sonra kelime bölmeyi yerine getirme ve bir satırda vurgusuz açık hecelerin kurallara uygun bir şekilde sıralanması yoluyla ritmik parçalara ayırma prensibine istinat eder. Ritmi sırf duraklamaya istinat eden atasözlerine de raslanır.

Kafiye ve aliterasyonlar atasözünü şairane bir şekilde tamamlarlar ve ona ahenk, ezgililik katarlar.

Atasözlerinin sanat meziyetleri halkın devamlı şiir hevesleri sonucu, birçok nesillerin asırlardan beri devam eden sanat tecrübesi neticesidir.

Hayat hakkinda derin fikirleri içine alan, öğretici anlam taşıyan başkort atasözleri milli sınırları geçerler ve bütün insanlığa has önem kazanırlar, çünkü, özgün ve orijinal olmasına rağmen her halkın sözlü şiir sanatında sanat kültürü gelişmesinin genel kanunları yansır.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Инеш мәкәлә. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре тураһында............. 5
Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр........................................................................ 31

I. ХЕҘМӘТ........................................................................................... 31

1. Хеҙмәт, һөнәр, уңғанлыҡ, ялҡаулыҡ................................................ 31
2. Һунарсылыҡ, малсылыҡ, игенселек һ. б. хеҙмәт төрҙәре.................... 67

II. ИЖТИМАҒИ ТОРМОШ..................................................................... 83

1. Ер-һыу, йорт-ил, халыҡ. Ил башлыҡтары, түрәләр............................ 83
2. Социаль хәл, синфи мөнәсәбәттәр.....................................................103
3. Дин, дин әһелдәре тураһындағы мәҡәлдәр.........................................123
4. Һуғыш, тыныслыҡ, дау, ғауға...........................................................127

III. КӨНКҮРЕШ, ЙОЛАЛАР, ҒАИЛӘ, ТУҒАНЛЫҠ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ.........138

1. Өйләнеү, туй-төшөм. Дәрт, мөхәббәт.................................................138
2. Ғаилә тормошо, нәҫел-нәсәп.............................................................162
3. Ир-егет, ҡатын-ҡыҙ...........................................................................221
4. Күрше-күлән, дуҫ-иш, дошман...........................................................228
5. Донъя көтөү, мал табыу, барлыҡ-юҡлыҡ............................................238
6. Алыш-биреш, бүләк. Аҡса, баҙар......................................................252
7. Аш-һыу, һый-хөрмәт, ҡунаҡлашыу, байрамдар...................................263
8. Кейем-һалым, биҙәнеү-төҙәнеү..........................................................287
9. Юл-сәфәр, ил-донъя күреү.................................................................292

IV. ШӘХСИ СИФАТТАР, ӘХЛАҠ-ӘҘӘП ҠАҒИҘӘЛӘРЕ. АРАЛАШЫУ. ТЕЛ ҺӘМ ҺҮҘ. АҢ-БЕЛЕМ...........................................................................301

1. Кеше, уның ҡиәфәте, холҡо, ғәҙәте; абруй, намыҫ, дан, дәрәжә.............301
2. Батырлыҡ, ҡурҡаҡлыҡ, хаинлыҡ.......................................................338
3. Аралашыу: Изгелек, яуызлыҡ; үс, асыу тотоу....................................347
4. Хаҡлыҡ, ғәҙеллек, яҡшылыҡ; йәбер-золом, хәйлә, яманлыҡ.....................363
5. Яңылышыу, гонаһ-яҙыҡ, енәйәт, хөкөм; һаҡлыҡ, үкенеү, аптырау............378
6. Яңғыҙлыҡ, айырымлыҡ һәм берҙәмлек...............................................391
7. Тел һәм һүҙ, кәңәш, хәбәр; вәғәҙә, уй-ниәт.........................................398
8. Аҡыл, аҡылһыҙлыҡ; аң-белем, наҙанлыҡ.............................................427

V. ДОНЪЯ, ҒҮМЕР, ЯҘМЫШ ТУРАҺЫНДА УЙЛАНЫУҘАР.........................445

1. Донъя, ваҡыт, форсат, сара, сәбәп, яҙмыш һ.б.....................................445
2. Йәшлек, ҡартлыҡ, сәләмәтлек, йәшәү, үлем........................................455
3. Бәхет, шатлыҡ, ҡайғы, бәлә-ҡаза, рәхәт-михнәт, өмөт-теләк......................473

VI. ТӨРЛӨ ТЕМАҒА ҠАРАҒАН МӘҠӘЛДӘР.............................................487

VII. ҺЫНАМЫШТАР, ЫШАНЫУҘАР.......................................................495

Аңлатмалар.......................................................................................514
Һүҙлек.............................................................................................529
Сығанаҡтар.......................................................................................535
Һығымта (башҡорт, урыҫ, инглиз, төрөк телдәрендә)................................538

*«Башкорт халык ижады» йыйынтығы
Рәсәй Фәндәр академияһы
Өфө ғилми үҙәге «Почет билдәһе» орденлы
Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында
әҙерләнде һәм институттың
ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды*

*Литературно-художественное издание*

**БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО**

**Том 10**

**Пословицы и поговорки**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдирә *Фәниҙә Исхакова*
Мөхәррире *Эльвира Нигмәтуллина*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Әлфиә Илекәева, Римма Йәғәфәрова*

Нәшр. лиц. № 04380; 26.03.01. Йыйырға бирелде 12.12.05. Баҫырға кул куйылды 31.01.06. Ҡағыҙ форматы 60×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. Таймс гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 34,0+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 34,25. Иҫәп-баҫма таб. 21,50+0,45 форз. Тиражы 3000 дана. Заказ № 1.0144.05.

Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.